БАШКОРТ ДРАМАТУРГИЯҺЫ АНТОЛОГИЯҺЫ

Беренсе китап

АНТОЛОГИЯ БАШКИРСКОЙ ДРАМАТУРГИИ

Книга первая

БАШКИРСКОЕ КНИЖНОЕ ИЗДАТЕЛЬСТВО
УФА — 1984

БАШКОРТ ДРАМАТУРГИЯҺЫ АНТОЛОГИЯҺЫ

Беренсе китап

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1984

84 Баш
Б 29

Редколлегия: Ағиш Ғирфанов, Миҙхәт Ғәйнуллин, Мостай Кәрим, Әсғәт Мирзаһитов, Ғилемдар Рамазанов

Профессор
Миҙхәт Ғәйнуллин редакцияһында

Б $\frac{4702110000-309}{М\ 121(03)-84}$ 78—84

84 Баш

© Башкортостан китап нәшриәте, 1984 й.

Башҡорт драматургияһының үҫеш баҫҡыстарын билдәләгән әҫәрҙәр Бөтә Союз әҙәбиәте һәм театр сәнғәте өлкәһендә киң танылды. Драма жанры үҫешенә тос өлөш индергән, уның тарихи этаптарын характерлаған һәм формалашыуына ярҙам иткән күренекле әҫәрҙәрҙең антологик бер төпләмәлә сығарылмауы әлегә тиклем уҡыусыларға был әҙәби процесты тулы күләш барлауҙы ҡыйынлаштыра ине. Бына ошо өҙөклөктө тултырыу маҡсатында антологияға был жанрҙың башланғыс осоронан боронғо көндәргәсә яҙылған һәм уның тәүге аҙымдарын, нығыныуын һәм хәҙерге торошон, һәр этаптағы идея-тематик, художестволы-эстетик әһәмиәтен билдәләүсе, заман рухына ауаздаш әҫәрҙәрҙе баҫып сығарыу хуп күрелде. Был принцип дәүер һулышын тойорға, әҫәрҙең идея-тематик һәм проблематик яҡтан актуаллеген аңларға ярҙам итеүе менән бер рәттән, төрлө осор драматургтарының художестволы-индивидуаль стилен күҙаллау мөмкинлеген дә бирә.

Антология ике китаптан тора, уның тәүгеһен Башҡортостандың халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр» повесы буйынса яҙылған Ғ. Әмири һәм В. Ғәлимовтарҙың инсценировкаһы менән асып ебәреү маҡсатҡа ярашлы тип табылды. Шулай уҡ ошо 1-се китапҡа башҡорт милли культураһы үҫешенә зур өлөш индергән, әҫәрҙәре нигеҙҙә Башҡортостан тормошонан алып яҙылған, Башҡортостанда йәшәп, шунда уҡ ерләнгән Мирхәйҙәр Фәйзиҙең «Ғәлиәбаныу» драмаһын да антологияға алыуҙы уның яҡты иҫтәлеген хөрмәтләү булыр тип уйлайбыҙ.

Ике китаптан торған был антология Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһында раҫланды.

БАШҠОРТ ДРАМАТУРГИЯҺЫНЫҢ ҮҫЕШ БАҪҠЫСТАРЫ

Совет кешеләрен коммунистик рухта тәрбиәләү өлкәһендә драматургия менән театрҙың роле ғәйәт ҙур. Шуға ла Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте Октябрь революцияһының тәүге көндәренән үк драматургия менән театр сәнғәте тураһында айырыуса хәстәрлек күрҙе, уларҙың социалистик ысынбарлыҡтағы урыны, үҫеше һәм киләсәге хаҡында ҡайтырттылар. «Коммунизм өсөн көрәш идеяларын системалы һәм массовый рәүештә пропагандалауҙа, — тиелә партияның XII съезд ҡарарҙарында, — театрҙы файҙаланыу мәсьәләләрен практик формала ҡуйырға кәрәк. Шул маҡсатта, үҙәк ҡалаларҙа һәм урындарҙа тейешле көстәрҙе йәлеп итеп, революцион репертуар булдырыуҙы көсәйтергә, бының өсөн беренсе нәүбәттә эшселәр синыфы көрәшенең героик моменттарын һайларға кәрәк» *.

Башҡорт драматургияһы менән театры, ысын мәғәнәһендә Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының емеше булып, граждандар һуғышы йылдарында майҙанға килде. Әммә был уларҙың буш урында барлыҡҡа килеүен аңлатмай.

XX быуат баштарындағы революцион күтәрелеш дәүерендә үк Башҡортостанда милли театр сәнғәтенең тәүге үҫентеләре күренә башлай. Алдынғы рус культураһының күп милләтле Башҡортостан халыҡтары араһына, уларҙың көнкүрешенә үтеп инеүе милли культураға һәм сәнғәткә нигеҙ һалыуҙы бермә-бер тиҙләтте.

Был ваҡыт әҙәбиәт майҙанына байтаҡ мәғрифәтсе һәм демократ башҡорт яҙыусылары килде, күп һандағы үҙешмәкәр һәм ярым профессиональ труппалар ойошоп, улар милли театр сәнғәте үҫешендә, массалар араһында алдынғы идеялар таратыуҙа һәм дөйөм культура күтәрелешендә ҙур роль уйнаны. Ләкин башҡорт драматургияһы был торкомдәрҙең репертуарын милли әҫәрҙәр менән тәьмин итә алманы әле, — милли драматургияға мохтажлыҡ көслө булды һәм был хәл яҡынғы үҡ оҙаҡ дауам итте.

* О партийной и советской печати. Сборник документов. М., Политиздат, 1954, с. 275.

Революцияға тиклем баҫылып сыҡҡан, йәки ҡулъяҙма көйө ҡалып, айырым тәатр труппалары тарафынан ҡуйылып йөрөгән пьесалар — А. Таһировтың «Бисура» (1907), «Янғура» (1912), Ғ. Ғүмәрскийҙың «Уйламағанда ике никах» (1910), «Һуғышта» (1917), Ф. Туйкиндың «Ватан ҡаһармандары» (1912), «Тормош ҡорбандары» (1912), Б. Бәхтегәрәй улының «Ер һатыу» (1915), Ғ. Ниязбаевтың «Гөлбостан», «Ҡараңғы көндәр», «Ҡыҙыл истиҡбал* өсөн көрәш», «Брадәрән Ғәлимовтар» әҫәрҙәре — башҡорт драматургияһы моронлауҙың беренсе тәжрибәләре булды.

Шулай ҙа революцияға тиклемге башҡорт драматургияһы үҙенең тәүге ижад өлгөләрен бирҙе, тәжрибә туплауға ерлек булды һәм профессиональ башҡорт театрын тыуҙырыуға нигеҙ әҙерләне. Иң мөһиме, ул халыҡ тормошон, уның уй-хыялдарын, яҡты ынтылыштарын художестволы сағылдырыуҙы иғтибар үҙәгендә тотто һәм буржуаз йәмғиәттәге кире яҡтарҙы фашлау, иҫке, серек күренештәрҙе, социаль ҡаршылыҡтарҙы асыу өлкәһендә беренсе әҙәби-театраль тәжрибәләр тупланы, ижади көстәрҙең активлашыуында билдәле роль уйнаны.

Башҡорт совет драматургияһы «башҡорт совет театры менән берлектә, халыҡ таланттарының социалистик революция менән күтәрелгән тулҡынында, граждандар һуғышы дауылы диңгеҙендә ҡайнап тыуҙы» **. 1919 йылдың көҙөндә Стәрлетамаҡта күренекле режиссер һәм артист Вәли Мортазин-Иманский етәкселегендә ойоштороlған башҡорт театры башҡорт совет драматургияһының тыуыуында һәм үҫеүендә мөһим роль уйнаны. Уның репертуарындағы рус һәм татар классик драма әҫәрҙәре башҡорт драматургияһының яңы шарттарҙа формалашыуында мөһим әһәмиәткә эйә булды. Был процесс драматург Ғ. Ниязбаевтың ижадында асыҡ сағылыш тапты. М. Горький, Ғ. Ҡоләхмәтов пьесаларының йоғонтоһо аҫтында ул «Ҡыҙыл истиҡбал өсөн көрәш», «Береңсе таң» исемле революцион рухтағы пьесалар яҙҙы. Уның ижады хаҡында матбуғат: «Уның яҙған әҫәрҙәре, тулы мөндәрәжәһе, матур яҙылыуы, замандың ысын тормошонан алыныуы менән әҙәбиәтебеҙҙә беренсе урынды тоталар. Октябрь инҡилабынан һуң яҙған драмалары татар, башҡорт әҙәбиәтендә беренсе нигеҙ ташы урынын алалар» ***, — тип яҙҙы.

Ғ. Ниязбаев пьесалары араһында социаль мәсьәләләрҙең үткер ҡуйылышы, синфи көрәш шарттарында сыныҡҡан һәм халыҡ бәхете өсөн бөтә ғүмерен биргән эшсе-революционер образын тыуҙырыуы менән «Береңсе таң» драмаһы айырыуса әһәмиәтле. Киҫкен революцион көрәш шарттарында яҙылыуы, тәрән социаль йөкмәткеле, актуаль темалы һәм героик пафослы бындай пьесаның театрҙа ҡуйылыуы ҙур яңылыҡ ине.

---

* И с т и ҡ б а л — киләсәк.

** Башҡорт совет әҙәбиәте тарихы. Очерктар. БКН, Өфө. 1967, 37-се бит.

*** Күңелһеҙ хәбәр (Некролог). «Мәғариф эштәре», 1920, № 3.

Октябрь революцияһы һәм Совет власын нығытыу өсөн көрәш йылдарында А. Таһиров яҙған агитацион пьесалар, авторҙары билдәһеҙ әҫәрҙәр, схематик һәм риторик характерҙа булыуҙарына ҡарамаҫтан, яңы тормошто һыҙатларға тырышыуҙары, заман темаһын күтәрә башлауҙары менән иғтибарға лайыҡ инеләр.

Егерменсе йылдар башындағы башҡорт драматургияһында халыҡтың популяр йырҙары мотивына ҡоролған көнкүреш-этнографик пьесалар өҫтөнлөк итте. М. Буранғоловтың «Ашҡаҙар», «Буранбай», «Ялан Йәркәй», «Шәүрәкәй», «Башҡорт туйы», Х. Ғәбитовтың «Ынйығай менән Юлдығай» тибындағы пьесалар, йыр-көйҙөң әҫәрләндергес поэтик көсө, ваҡиғалар драматизмы, этнографик элементтар менән һуғарылған булып, был осорҙа театр сәнғәте менән яҡшы таныш булмаған ауыл тамашасыһының иғтибарын биләп торҙолар. Ләкин ундай пьесаларға социаль конфликттың йомшаҡлығы, персонаждар статиклығы, драматик хәрәкәт һүрәнлеге кеүек идея-эстетик һәм художество кәмселектәре хас. Шуның менән бергә, фольклор-этнографик пьесалар — башҡорт драматургияһының тыуыу һәм формалашыу процесында әҙәбиәтебеҙгә характерлы тәбиғи бер күренеш, ул фольклорҙан яҙма әҙәбиәткә күсеү, профессиональ драматургия ҡанундарын үҙләштереү юлында баҫҡыс булды, халыҡтың художество зауҡын уятыуҙа һәм күтәреүҙә зур роль уйнаны, прогрессив күренеш булды.

Башҡорт драматургияһында фольклор һәм әҙәби традицияларҙың үрелеү өлгөһөн биргән һәм сатирик фашлау йүнәлешен раҫлаған, йәғни комедия жанрына һәм уның музыкаль төрөнә нигеҙ һалыусыларҙың береһе «Зөлхәбирә», «Пианино мәсьәләһе», айырыуса күренекле «Башмағым» пьесаларының авторы Хәбибулла Ибраһимов булды.

1922 йылда сәхнәлә ҡуйыла башлаған «Башмағым» комедияһы буржуаз әхлаҡты, башҡорт һәм татар сауҙагәрҙәренең һаранлығын, тупаҫлығын, аңралығын, бысраҡ мещандар донъяһын сатирик буяуҙарҙа фашлауы менән әһәмиәтле. Хәл һәм ваҡиғаларҙың, драматик хәрәкәттең тығыҙлығы һәм динамикала бирелеүе, персонаждар теленең оҫта индивидуалләштерелеүе, образлылығы, диалогтарҙың үткерлеге, халыҡ ижады традицияларын, йыр-музыканың байлығы, социаль мотивтарҙың реалистик сағылышы әҫәрҙе ысын сәнғәт юғарылығына күтәрҙе, үлемһеҙ итте.

Д. Юлтый тарафынан 1920 йылда яҙылған «Ҡараҡол» драмаһы — социаль ҡаршылыҡтарҙы дөрөҫ көүҙәләндереүе, реаль ысынбарлыҡтағы көрәш атмосфераһын тарихи конкретлығында һүрәтләүе менән бигерәк тә характерлы әҫәр. Был пьеса драматургиябыҙҙың формалашыу процесының тәүге осоронда тарихи-революцион тематиканың өр-яңы битен асып ебәреүе һәм милләтселек рухындағы «Аҡшаҡ батыр», «Салауат батыр» (Ф. Соланмәнов) ише пьесаларға идея-эстетик отпор биреүе менән дә әҙәбиәт тарихында зур роль башҡарҙы.

«Ҡараҡол» менән нигеҙләнгән тарихи тематика 20-се йылдарҙа ике ҡат әҫәрҙең камиллаштырылған икенсе вариантында һәм Д. Юлтыйҙың «Салауат» тигән драмаһында нығытылды һәм артабан үҫтерел-

де. Тарихи ысынбарлыҡ атмосфераһын революцион йүнәлештә реалистик сағылдырыуы, йәнле характерҙары, художество алымдары һәм драматургик эшләнеше яғынан «Карағол», «Салауат» пьесалары дәүер өсөн бөтөнләй яңы ҡаҙаныш булды.

Егерменсе йылдар уртаһында башҡорт драматургияһында яңы тормошто, совет ысынбарлығын, совет кешеләрен һүрәтләүгә боролош яһала. А. Таһировтың «Алатау», «Күсеү осоронда», М. Ғафуриҙың «Ҡыҙыл йондоҙ», Д. Юлтыйҙың «Колансәс», «Тирмәндә» кеүек драма әҫәрҙәре революцион ысынбарлыҡты, синфи көрәш картиналарын кәүҙәләндереүҙә тәүге уңышлы башланғыстар булды. Был әҫәрҙәрҙә халыҡ тәү башлап сәхнәлә үҙен һәм яңы уйҙар менән яныусы үҙ вәкилдәрен күрҙе.

Шулай за заман һулышын сағылдырған әҫәр тыуҙырыу зур ауырлыҡтар аша бара. А. Таһировтың «Һәнәк һуғышы», «Ас-яланғастар», «Ауылда көрәш» һәм башҡа пьесаларҙа заман темаһы схематик һүрәтләндә, иллюстрация һәм натурализм үҙен ныҡ һиҙҙерҙе, осорҙоң мөһим мәсьәләләрен реалистик дөйөмләштереү оҫталығы етешмәне.

Шул шарттарҙа яҙылған «Алатау» драмаһы яңы кеше характерҙарын, әҙәбиәтебеҙҙә тәү тапҡыр коммунист образын сәхнә әҫәрендә тыуҙырыуы, социаль-политик драмаға нигеҙ һалыуы менән айырыуса иғтибарға лайыҡ.

РКП(б) Үҙәк Комитетының 1925 йылдың 18 июнендә ҡабул иткән «Художестволы әҙәбиәт өлкәһендә партия политикаһы тураһында» тигән резолюцияһы башҡорт драматургияһының формалашыу процесында ла зур роль уйнаны. Әҙәбиәт һәм сәнғәт мәсьәләләренә иғтибар көсәйҙе, йыш ҡына ҡәҙәшмәләр, йыйылыштар, дискуссиялар ойошторола. 1925 йылда иң һәйбәт пьесаларға республика конкурсы иғлан итеү зә ошо мөһим ҡараҙың заман һулышы һәм замандаш образын тыуҙырыуға саҡырған идеялары менән бәйле ине.

Конкурста М. Ғафуриҙың «Ҡыҙыл йондоҙ», Ф. Ғәйнетдиновтың «Дошман еңелде» драмалары бүләккә лайыҡ булды.

«Ҡыҙыл йондоҙ» пьесаһы башҡорт халҡының граждандар һуғышы һәм халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу осорондағы синфи көрәш вәкилдәрен, ауылда яңылыҡтың еңеүен реалистик асыҡлыҡ менән яҡтыртҡан ул дәүерҙәге уңышлы әҫәрҙәрҙең береһе. Уның төп геройҙары — ауылдағы ике антагонистик синыф вәкилдәре. Ярлы крәҫтиән вәкилдәре — Сәлих, уның улы Ғәзиз, Шиһап, Шәмсиә, Лоҡман, Ғәлим контрреволюция көстәренә — ауыл кулактары Сөләймән, Имай һәм уларҙың эйәрсәндәренә ҡаршы ҡуйыла. Әҫәр ошо ҡапма-ҡаршы синыф кешеләре бәрелешенә ҡороған.

Егерменсе йылдарҙың икенсе яртыһында совет кешеләре алдына заман ҡуйған мөһим проблемаларҙы художестволы образдарҙа сәхнәлә дөйөмләштереп күрһәтеү яҙыусылар менән бергә театр эшмәкәрҙәренең дә төп бурысына әйләнә.

Д. Юлтыйҙың был йылдарҙа ижад ителгән «Тирмәндә» («Аралбайҙар»), А. Таһировтың «Иртәнге нурҙар», «Көрәштәр аша яңы юл менән», «Баймаҡ», С. Мифтаховтың «Пандар иленда» кеүек көнүҙәк мәсьәләләрҙе көүҙәләндергән пьесаларҙың барлыҡҡа килеүе башҡорт драматургияһы, театр сәнғәте үҫеүенә һиҙелерлек яңылыҡ өҫтәне. Был әҫәрҙәр тормош ваҡиғаларының, социалистик реконструкциялау һәм коллективлаштырыуҙың ҡайнар эҙҙәре буйынса яҙылыуҙары менән әһәмиәтле. Шул уҡ ваҡытта улар драма жанрының эволюцияһын да билдәләйҙәр.

А. Таһиров, «Иртәнге нурҙар» драмаһын бер аҙ төҙәтеп, 1929 йылда уның «Үрнәк» исемендәге яңы вариантын яҙҙы. Коллективлашыу процесының тәүге осоро — ауыл хужалығы коммуналары төҙөү ваҡиғаларына арналған һәм шул осорҙоң синфи ҡаршылыҡтарын уңышлы һүрәтләгән был драмалағы ваҡиғалар һәм алынған проблемалар башҡорт әҙәбиәтенең башҡа жанрҙарында ла күтәрелгән темалар менән уртаҡ һәм дәүер өсөн хас ине.

Алдынғы совет кешеләренең синфи дошмандар менән көсөргәнешле алышының психологик тәрәнлектә һүрәтләнеүе драманы уңышлы яһаны, осорҙоң реаль шарттарын тергеҙҙе. Ул композицион яҡтан йыйнаҡ, ваҡиғалар динамик үҫештә, коллектив тормошҡа һәм хеҙмәткә күсеү дәүеренең йәнле атмосфераһы унда реалистик көүҙәләндерелә. Яҙыусының стиле йәнле һүрәтләү сараларына бай. Диалог һәм монологтарҙа персонаждарҙың билдәле кимәлдә индивидуаллаштерелеүе әҫәрҙе сәхнәлә оҙон ғүмерле итте. Ошо үҙенсәлектәр заман темаһына яҙылған башҡа әҫәрҙәрҙең дә йөҙөн билдәләне.

Утызынсы йылдар драматургияһы йәш таланттар әҫәрҙәре иҫәбенә шаҡтай арта төшә. А. Таһиров, Д. Юлтый кеүек оло буыын яҙыусылар менән С. Мифтахов, Б. Бикбай, Р. Нигмәти, Н. Ҡәрип һымаҡ әҙиптәр драматургияла төп көс булып өлгөрәләр. Ошо осорҙа Совет Башҡортостаны ысынбарлығын, дәүер һулышын һәм замандаштарыбыҙҙы сағылдырған пьесалар иҫәбенә әленән-әле яңыра барған театр репертуары барлыҡҡа килә. Драматургияла заман темаһының өҫтөнлөк алыуы пьесаларың идея-эстетик йөкмәткеһен дә үҙгәртеп ебәреүгә килтерҙе.

Д. Юлтый, А. Таһиров драмалары («Тирмәндә», «Үрнәк», «17—30» һ. б.) менән башланып киткән идея-эстетик йүнәлеш С. Мифтаховтың пьесаларында тағы ла уңышлыраҡ үҫешен тапты. Уның ижады милли театр сәнғәте тарихында үҙе бер этапты тәшкил итә. Халыҡсан һәм партиялы һәр әҫәрендә ул яңы проблемалар, киҫкен синфи көрәш картиналарын көүҙәләндерҙе, зур драматик оҫталыҡҡа өлгәште. Уның «Баҡмар», «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт», «Ялан ҡыҙы» әҫәрҙәрендә колхоз төҙөлөшөнөң типик геройҙары көүҙәләндерелә. Ауыл тормошондағы, хужалығындағы социаль һыныныш—коллективлаштырыу, яңы экономик үҙгәрештәр һөзөмтәһендә килеп тыуған яңы кешеләрҙең тормошон, аңы үҙгәрешен, ижади хеҙмәтен, көрәшен һәм улар араһындағы яңы мөнәсәбәттәрҙе реалистик картиналарҙа яҡтыртыу — был әҫәрҙәрҙең идея-тематик, эстетик әһәмиәтен билдәләй.

А. Таһировтың «Ҡалдыҡтар» (1934), Ш. Шәһәрҙең «Айырылышыу» (1933) драмаларында колхозлашыу һөҙөмтәһендә йәшәү тамыры ҡороған кулак ҡалдыҡтары менән көрәш, крәҫтиән аңындағы шәхси милекселек психологияһының коллективизм тойғоһо менән алмашына барыуы социалистик реализм методы ерлегендә кәүҙәләндерелә.

1934 йылда сәхнәләштерелгән «Себерәк Ғилман» драмаһында А. Таһиров ошондай уҡ теманы һәм образдар системаһын коллективлашыу процесының яңы бер этабында ҡүтереп һүрәтләне. Пьеса геройы Ғилман, ауыл хужалығы коммуналарын ойоштороуҙа актив ҡатнашып, бай тәжрибә туплай һәм коллективлашыуҙың тарихи процесында партия политикаһын тормошҡа ашырыуҙа төп фигура — етәксе коммунист булып кәүҙәләнә.

Башҡорт драматургияһында колхозлашыу мәлендәге социаль конфликтты художестволы кәүҙәләндереүҙә, синфи дошман ҡалдыҡтарын фашлауҙа, колхоздарҙың үҫешен, алдынғы совет кешеләренең типик һыҙаттарын һүрәтләүҙә Н. Ҡәрип уңышлы ғына ижади аҙым яһаны. «Сәлим ҡарт» (1935), «Алма» (1938) пьесалары менән ул әҙәбиәтебеҙ тарихында билдәле бер урын тота.

Экономикалағы, совет кешеләре аңындағы иҫкелек ҡалдыҡтарын йылдам бөтөрөү өсөн көрәш — был әҫәрҙәрҙә кәүҙәләндерелгән уртаҡ проблемалар. Ләкин «Сәлим ҡарт»та алынған тема бөтә тулылығында асылып етмәгән, драматик хәл-шарттар бер ни тиклем схематик килеп сыҡҡан.

А. Карнайҙың «Йәмле Агизел буйҙары», А. Таһировтың «Ватан өсөн» драмалары, ҡуйылған талаптар юғарылығында булмау сәбәпле, сәхнәлә күрһәтелмәй ҡалды.

Утызынсы йылдарҙа драматургия совет ысынбарлығын, совет кешеләренең яңы һыҙаттарын һүрәтләгән әҫәрҙәр менән байый барҙы. Заман темаһы театрҙар репертуарында үҙәк урынды яуланы. Д. Юлтыйҙың «Аралбайҙар», «Һин кем?», «Табылған Марат» әҫәрҙәре репертуарҙы байыҡтыра, Ш. Шәһәрҙең «Айырылышыу», Р. Нигмәтиҙең «Врач Ғимранов» кеүек әҫәрҙәре башҡорт драматургияһының яңы үҫеш алыуын билдәләнеләр.

«Врач Ғимранов» интеллигенция тормошон дөрөҫ ҡәүҙәләндергән тәүге драма булыуы менән әһәмиәтле. Р. Нигмәти драматургик хәл-шарттарҙы оҫта итеп ҡора, диалог һәм монологтарҙа образдарҙың синфи бүленешен тулы һүрәтләй алған.

Утызынсы йылдарҙа башҡорт драматургияһының идея-тематик даирәһе артабан киңәйҙе, промышленность производствоһы мәсьәләләренә, эшсе синыфы образдарына арналған пьесалар ишәйҙе.

Эшселәр синыфы образдарын кәүҙәләндергән тәүге әҫәрҙе А. Таһиров яҙҙы. Уның «Баймаҡ» («Завод») драмаһы, алдынғы эшселәр образын тыуҙырыу юлындағы башланғыс булараҡ, иғтибарға лайыҡ. Ләкин унда ҡоро һөйләшеүҙәргә ҡоролған натуралистик деталдәр, күп һанлы ваҡ картиналар, әҫәрҙең төп сюжет һыҙығына бәйләнмәйенсә, юғалып ҡалды. Пьесаны яҡшыртыу өҫтөндә автор ныҡышмалы эшләне һәм

1932 йылда уның «Завод» тигән яңы вариантын тамашасыға күрһәтте. Был ҡулъяҙма пьесаның геройҙары шаҡтай һүҙҙәрлек төҫ ала, промфинплан өсөн көрәштә социалистик ярыштың урыны, ударсылыҡ хәрәкәте, коллективта бер-береңә ярҙам кеүек идея-эстетик йөкмәткегә тормошсан эпизодтарҙа күрһәтелә, эшселәр тормошон натуралистик һүрәтләүҙән ҡотолоп, ысынбарлыҡты сәнғәтсә кимәлдә дөйөмләштереү асыҡ тойола.

«Завод» пьесаһындағы тәүге башланғыстар И. Насыриҙың «Сибай» инсценировкаһында һәм айырыуса С. Мифтаховтың «Урал ҡаны» драмаларында уңышлы дауам ителде.

«Урал ҡаны» пьесаһы «Белорет ҡалаһында тороп, заводта эшләгән кешеләр, инженер һәм техниктар мәнән яҡындан танышып, уларҙың ғәҙәттәрен, конкурсташтарын өйрәнеү»* һөҙөмтәһендә тыуа. Драманың конфликты алдынғы эшселәрҙең заводта ҡоротҡослоҡ алып барған контрреволюцион элементтарға ҡаршы киҫкен көрәш картиналарына ҡоролған.

Әҫәр драматургик яҡтан уңышлы ғына эшләнгән, әммә уның етди кәмселеге цех планын ҡулъяҙма партия ойошмаһы һәм уның етәкселәренең, коллективтың ролен дөрөҫ күрһәтә алмауҙа ине.

Утыҙынсы йылдарҙың икенсе яртыһында башҡорт драматургияһында ла тарихи тема ҙур урын ала. Был дәүерҙә Д. Юлтыйҙың «Маҡтымһылыу», С. Мифтаховтың «Зимагорҙар», Б. Бикбайҙың «Ҡарлуғас», «Салауат», Ҡ. Даяндың «Таңсулпан», С. Ҡудаштың «Мәжит Ғафури» пьесалары ижад ителә. Был әҫәрҙәрҙә хеҙмәтсән халыҡтың изеүселәргә ҡаршы көрәше, улар йәшәгән осорҙағы социаль-тарихи һәм идеологик ҡаршылыҡтар төрлө драматик формаларҙа ҡәүҙәләндерелә. Драматургтар ябай халыҡ массаһы араһынан сыҡҡан айырым геройҙарҙың тормошо, көрәше аша йәмғиәттәге социаль ҡаршылыҡтарҙы дөйөмләштерәләр.

Д. Юлтыйҙың «Маҡтымһылыу» пьесаһында колониаль изеүгә ҡаршы халыҡтың милли-азатлыҡ көрәшен ойоштороусы Тойғон, Иртуған, Асан образдары әһәмиәтле ине.

Ошо уҡ йылдарҙа М. Буранғолов та тарихи тематикаға «Гөлсәсәк», «Караһаҡал» (1939) пьесаларын яҙҙы, әммә улар драматургия тарихында ҙур уңыш ҡазана алманы.

1938 йылда сәхнәгә ҡуйылған «Ҡарлуғас» музыкаль драмаһы тарихи темаға яҙылған әҫәрҙәр араһында иң күренекле һәм булды. Ул илебеҙҙә бик күп сәхнәләрҙә (Ташкент, Баку һ. б.) ҡуйылды.

Б. Бикбай, тарихи дөрөҫлөккә тоғро булараҡ, был осорҙағы социаль-тарихи хәлде, башҡорттарҙың рус колонизаторҙары, «ҙ» байҙары тарафынан икеләтә изелеүен һәм хеҙмәтсән халыҡтың, бындай ауырлыҡтарға түҙә алмайынса, көрәшкә күтәрелеүҙәрен, һуңынан крәҫтиәндәр восстанһына ҡушылыуҙарын был пьесала реалистик алым менән ҡабырғәнешле картиналарҙа күрһәтә.

* Мифтахова Х. Сәғит писек эшләй ине. — «Совет Башҡортостаны», — 1957, 30 гинуар.

Ҡ. Даян «Таңсулпан» (1940) пьесаһында Б. Бикбай драмаһындағы теманы дауам итә һәм Крәҫтиәндәр һуғышынан һуңғы ваҡиғаларҙы тасуирлай.

Салауат Юлаев («Салауат», 1938) образын тыуҙырыуҙа Б. Бикбай менән Ғ. Сәләм ҡыҙыҡлы ғына тормошсан деталдәр тапҡандар. Салауатты улар Ҡараһаҡал башлаған эште дауам иттереүсе, уның «ергә төшкән ҡылысын юғары күтәреүсе» итеп, образды тарихи яҡтан киңәйтеберәк, осорҙоң социаль ҡаршылыҡтарын, Крәҫтиәндәр һуғышының тоҡаныш китеү сәбәптәрен анализлау нигеҙендә һүрәтләргә тырышалар.

«Мәжит Ғафури» пьесаһында иһә С. Ҡудаш халыҡ шағирының империалистик һуғыш, Февраль һәм Бөйөк Октябрь революцияһы осорондағы ижади тормошон сағылдырҙы һәм документаль нигеҙҙәге жанрҙың бизәктәрен төрләндереүгә, байытыуға өлөш индерҙе.

Ошо уҡ йылдарҙа драматургияла башҡорт халҡының XX быуат башындағы тормошон, Октябрь революцияһы алды, революция һәм граждандар һуғышы осорондағы героик көрәшен, ябай халыҡтың революцияға килеү юлдарын дөйөмләштергән уңышлы әҫәрҙәр ҙә барлыҡҡа килде.

Әҙәбиәтебеҙҙә халыҡтың үткән тормошон кәүҙәләндергән тарихи әҫәрҙәр араһында С. Мифтаховтың «Зимагорҙар» драмаһының әһәмиәте ифрат ҙур. Тарихи-революцион драматургияның яңы үҫеш этабын асыҡ билдәләгән был пьесаның геройҙары — эшселәр менән прииск хужалары араһындағы социаль ҡаршылыҡ реаль картиналарҙа кәүҙәләнә, унда төрлө ҡатлам кешеләре, синфи аңдары көндән-көн үҫә барған эшселәр һәм ысын революционерҙарҙың көрәше һүрәтләнә. Был пьесаһы менән С. Мифтахов революцияға тиклем башҡорт халҡының ауыр тормошта изелеп йәшәүен һәм уларҙың эксплуататорҙарға ҡаршы көрәшен дөрөҫ сағылдырыу йүнәлешендә башҡорт драматургияһына мөһим яңылыҡ өҫтәне.

Р. Нигмәтйәҙең «Аҡйәзел ярында» драмаһы ошо йүнәлештең артабанғы үҫешен күрһәтеүсе пьеса булды. Унда граждандар һуғышы осороноң иң яуаплы һәм ҡатмарлы мәле тасуир ителә.

Билдәле кәмселектәре булыуға ҡарамаҫтан, «Аҡйәзел ярында» пьесаһы Башҡортостандағы граждандар һуғышы ваҡиғаларын, легендар Чапаев образын, революция ҡаһармандарын һынландырыуы менән драматургиябыҙ үҫешендә мөһим күренеш булды.

Шулай итеп, 30-сы йылдарҙа башҡорт драматургияһында көнүҙәк проблемаларҙы, халыҡ тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы йәнле художество образдары, саралары менән һүрәтләүгә ынтылыш һиҙелерлек көсәйә. Драматургияла төрлө йүнәлештәге тематика һәм проблематика, жанр үҙенсәлектәре менән реаль ысынбарлыҡтың мөһим күренештәрен мауыҡтырғыс конфликттарҙа һәм тормошсан характерҙарҙа дөйөмләштереүҙең һәйбәт өлгөләре ошо осорҙа ижад ителә. Драматургия халыҡ тормошо менән йәшәне, социалистик реализм методы ерлегендә яңы

үсеш кимәленә күтәрелде, жанр формалары яғынан байыны, милли театр сәнғәтенең камиллаша барыуында хәл иткес роль уйнаны.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт яҙыусылары совет кешеләренең тылдағы һәм фронттағы батырлыҡтарын, тыл менән фронт берҙәмлеген юғары гражданлыҡ пафосы менән һүрәтләнеләр, патриотизм тәрбиәләү йүнәлешендә, үткер публицистик алымдарҙа халыҡтың героик тарихын, фольклорын уңышлы файҙаланып, юғары художестволы сәнғәт әҫәрҙәре ижад иттеләр. Һуғыштың тәүге айҙарында уҡ юғары пафослы пьесалар, совет һалдаттарының фронттағы батырлыҡтарын, партизандар хәрәкәтен кәүҙәләндергән героик драмалар яҙылды, һуңғараҡ совет кешеләренең тылдағы хеҙмәт ҡаһарманлыҡтары, фронт һәм тыл берҙәмлеге темаһына яҙылған пьесалар ишәйҙе.

Б. Бикбайҙың «Ватан саҡыра», Н. Ҡәриптең «Алмашсылар», С. Агиштың «Бер ғаилә», Р. Нигмәтйҙең «Петька», К. Мәргәндең «Бер ғаиләлә», «Минең ғаиләм» пьесаларында совет кешеләренең һуғыш башланыуға бәйле кисерештәре, дошманға ҡаршы берҙәм көрәшкә әҙер булыуҙары дөйөмләштерелә.

К. Мәргәндең «Яу», Р. Нигмәтйҙең «Урман шаулай» драмалары, идея-эстетик йөкмәткеләренең тәрәнлеге, һүрәтләнгән ваҡиғаларының реаллеге, характерҙарының индивидуаллеге, шул ҡондәр атмосфераһының көсөргәнешле күренештәрендә бирелеүе менән, үрҙәге пьесаларға ҡарағанда, ижади үсештә, яҙыусыларҙың һуғыш, ҡаһарманлыҡ, патриотизм темаларын шаҡтай уңышлы үҙләштерә барыуҙарын күрһәтте. Улар һәм С. Кулибайҙың «Йондоҙ» драмаһы һуғыш йылдары драматургияһы жанрҙарына героика үҙенсәлектәрен бирҙе, совет кешеләре характерына хас ҡаһарманлыҡ сифатын асыу алымдарын байытышты.

Б. Бикбайҙың «Бер ата балалары» («Бер туғандар»), А. Мөбәрәковтың «Бисәкәй» драмаларында һуғыш осороноң ҡонүҙәк мәсьәләләре, фронт һәм тыл бәйләнеше, хеҙмәтсәндәрҙең еңеүҙе тиҙләтеү өсөн физаҡәр хеҙмәте, сабырлыҡ, сыҙамлылыҡ кеүек әхлаҡ сифаттары тормошсан образдарҙа, йәнле картиналарҙа юғары пафос менән һүрәтләнде.

Һуғыш осоро драматургияһында тарихи темаға яҙылған пьесалар ҙа булды. Б. Бикбайҙың «Ҡаһым түрә», М. Буранғоловтың «Изеүкәй менән Моразым» әҫәрҙәре шундайҙарҙан ине. Ләкин, тарихи дөрөҫлөккә билдәле кимәлдәге хилафлыҡтары өсөн, был пьесалар тәнҡиткә дусар ителде.

Шулай ҙа, Совет иленең ныҡлығын, халҡыбыҙҙың ҡаҡшамаҫ идея-политик берҙәмлеген, әхлаҡ-этик сафлығын, патриотик тойғолар тәрәнлеген, фронт һәм тыл ҡаһарманлығын реалистик нигеҙҙә яҡтыртыуы, совет халҡында рухи бөйөклөк, ныҡлыҡ, матурлыҡ тәрбиәләүе менән, һуғыш дәүере драматургияһы үҙенең үсеүен һәм нығыныуын дауам итте. Коммунистик партияның кондәлек хәстәрлеге нигеҙендә уның идея-эстетик һәм художество кимәле күтәрелә барҙы.

Ватан һуғышынан һуңғы йылдарҙағы драматургияның, театр сәнғәтенең дөрөҫ йүнәлештә үҫеүенә КПСС Үҙәк Комитетының башҡа ҡа-

рәҙәры менән бергә, 1946 йылдың 26 августында ҡабул ителгән «Драма театрҙарының репертуары һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» тигән ҡарарының әһәмиәте ҙур булды. Унда етешһеҙлектәрҙең сәбәптәре асылды һәм драматургтар менән театрҙарҙың ысынбарлыҡты туҡтауһыҙ үҫешендә һүрәтләргә, совет кешеһе характерының һуғыш осоронда сағылған иң яҡшы һыҙаттарын үҫтереүгә ярҙам итеү кәрәклеге айырып күрһәтелде.

Был осорҙа байтаҡ языусылар драматургия өлкәһендә ныҡышмалы эшләй башланы һәм халыҡ тормошон, ижади хеҙмәтен, уй-теләктәрен, совет кешеһенең күркәм сифаттарын типиклаштырып күрһәтеүгә бороло алды.

Һуғыштан һуңғы ун йыллыҡта һикһәнгә яҡын пьеса яҙылды һәм драматургияның ошо рәүешле йәнләнеүе бәләкәй күләмле сәхнә әҫәрҙәренән башланды. Ул С. Агиш, Р. Ниғмәти, С. Кулибай, Ғ. Ғүмәр, Б. Бикбай, Ш. Насыров, И. Абдуллин, Н. Хафизов ижадтарында айырыуса асыҡ күренде.

Шулай ҙа драматургияның үҫеш тенденциялары, һәр ваҡыттағыса, күп шаршаулы традицион пьесаларға ҡарап билдәләнде. М. Кәримдең «Туй дауам итә», Ғ. Ғүмәрҙең «Яҡты йылға», Ғ. Әхмәтшиндең «Тальян гармун», И. Абдуллиндың «Беҙ айырылышмабыҙ» пьесаларында совет кешеһенең һуғыштағы ҡаһарманлығы, тыныс төҙөлөштәге хеҙмәт батырлығы данланды, заман һулышы, йәшлек дәрте асыҡ тойолдо, геройҙар кондәлек тормош шарттарындағы ҡатмарлы хәл-ваҡиғалар эсендә һүрәтләнде. Был пьесалар хроника характерында булып, уларҙа схематиклыҡ та үҙен һиҙдереп ҡуйҙы, әммә әҫәрҙәрҙә төҙөлөштәр һәм еңеү пафосы, яңы дәүер рухы өҫтөнлөк алды.

И. Абдуллиндың «Девон фонтандары» (1947) пьесаһы башҡорт драматургияһында тылдағы батырлыҡ, халыҡтың хеҙмәт ҡаһарманлығы темаһын художестволы яҡтыртыуҙа яңы дәүер өсөн мөһим башланғыс булды. Драматург әҫәрҙең икенсе «Тәрән һулыш» вариантында инде характер үҙенсәлектәрен хеҙмәт процесында, шуға бәйле коллизияларҙа геройҙарҙың эске донъяһын асырға ынтыла һәм нигеҙҙә «производство темаһы» буйынса тәүге өлгөнө бирә. «Ҡала иртәһе» пьесаһында К. Мәргән был теманы артабан үҫтерҙе һәм ижади хеҙмәт процесында кешеләрҙең характеры үҙгәреүе, интеллектуаль яҡтан үҫеүе мәсьәләләренә туҡталды, «Һүнмәҫ мөхәббәт», «Ирәндек» драмаларында М. Хәйҙәров завод эшселәре, колхозсылар хеҙмәтен, тормошон йәнле картиналарҙа күрһәтте.

Ошо уҡ йылдарҙа Р. Ниғмәти яҙған «Һинең йондоҙоң», «Онотолмаҫ йыр», «Уның һөйгән ҡыҙы» пьесалары тормошсан дөйөмләштереүҙәргә күтәрелә алмауҙары, конфликттан ситләшеү менән характерланды.

И. Абдуллин был йылдарҙа драматургияла айырыуса актив эшләне. «Вәғәҙә онотолмай» (1948), «Минең йырым» (1950) пьесаларында ул совет кешеләренең төрлө өлкәләге хеҙмәтен поэтиклаштырырға ынтылды, ә «Беҙ айырылышмабыҙ» (1949), «Йәмле Ағиҙел буйҙары» (1951) пьесаларында юмор һәм сатираға ыңғайланы, карьерист, ике йөҙлө кеше

типтарын фашлауға иғтибарын йүнәлтте. Был йүнәлеш драматургтың бер шаршаулы әсәрҙәрендә һәм, айырыуса, «Бажалар» (1952) комедияһында конкрет сағылды, автор оҫталығының камиллашыуын, драматургияла был жанрҙың йәнләнеүен билдәләне. Унда автор хеҙмәт кешеһенең намыҫ сафлығын, күңел таҙалығын данлай, карьера артынан ҡыуыусыларҙы, гәмһеҙҙәрҙе, уларҙы тыуҙырған социаль ерлекте сатирик фашлай.

Әсәрҙәге ваҡиғалар үҫешенең, конфликттың киҫкен хәл-шарттарҙа драматургик яҡтан оҫта бирелеше комедия жанрының үҫешендә мөһим күренеш ине.

Ҡ. Даян «Дим буйында» (1953), Ә. Мирзаһитов «Тымыҡ күл» (1953) комедиялары менән жанрҙың сатирик нигеҙҙәрен артабан үҫтерештеләр. Ә Н. Нәжми иһә, «Яҙғы йыр» (1950), «Хуш, Хәйрүш» (1952), «Саҡырылмаған ҡунаҡ» (1953) пьесаларын яҙып, башҡорт драматургияһын лирик ағым менән байытты. З. Биишева «Дуҫлыҡ» пьесаһы менән балалар драматургияһының яңы өлгөһөн бирҙе. Был пьесалар нигеҙҙә йәштәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе, әхлаҡ-этик проблемаларҙы яҡтыртыуға арналды. И. Абдуллин «Гөлмәрфуға» драмаһында ла совет йәштәренең мөхәббәт, дуҫлыҡ, тоғролоҡ һәм ғаилә мәсьәләләренә ҡараштары, үҙ-ара мөнәсәбәттәре ижтимағи тормошҡа, хеҙмәткә, бурыс һәм намыҫҡа бәйле картиналарҙа, хәл-шарттарҙа кәүҙәләндерелде, яңы әхлаҡ нормалары иҫке принциптарға ҡаршы ҡуйылды.

Илленсе йылдар башында колхоз ауылдарының, ауыл хужалығы эшсәндәренең экономик, культура тормошон яҡшыртыу, хужалыҡ нигеҙҙәрен нығытыу, ил байлығын арттырыу мәсьәләләренә иғтибар көсәйҙе. Ошо көнүҙәк проблемалар, социаль-тарихи ваҡиғалар драматургияла ла реалистик сағылыш алды. И. Абдуллиндың «Вәғәҙә онотолмай», М. Хәйҙәровтың «Ирәндек», Ә. Мирзаһитовтың «Боҙҙар аҡтарылғанда» һ. б. пьесаларҙағы колхоз ауылы кешеләренең көнкүрешен, хеҙмәт ҡаһарманлығын, бай рухи донъяһын, әхлаҡ нигеҙҙәрен тәрән, киң һәм етди һүрәтләү башланғысы үҙенең тулы һәм художестволы матурлығында сағылышын М. Кәримдең «Яңғыҙ ҡайын» (1950) драмаһында тапты һәм ул сәхнә әҙәбиәте тарихында этаплы күренеш булды.

1955 йылда башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһы көндәрендә Мәскәү тамашасылары араһында айырыуса ҡыҙыҡһыныу уятҡан был пьесаның төп үҙенсәлеге тураһында «Правда» газетаһының редакцион мәҡәләһендә: «Тамашасылар «Яңғыҙ ҡайын» спектаклендә замандашыбыҙҙың йәнле һәм көслө характерының сәхнәлә дөрөҫ асылыуын көсөргәнешле иғтибар менән күҙәтте» *, — тип әйтелде. Әммә авторҙың драматургик оҫталығы Шәүкәтовтың үҙенсәлекле характерының «дөрөҫ асылыуы» менән генә сикләнмәй. М. Кәрим был әсәрҙә, заман талаптарынан артта ҡалған шәхесте һүрәтләү менән бергә, гөмүмән кеше өсөн көрәш алып бара. Шуның менән пьесаның гуманистик асылы көсәйә, социаль яңғырашы арта. Иң мөһиме шунда: драматург пьесаһын-

* «Правда», 1955, 11 июнь.

да совет кешеләренең рухи байлығын, намыс сафлығын психологик тәрәнлектә сағылдыра, тормошсан картиналарҙа аса.

Б. Бикбай 50-се йылдарҙа ла тарихи тематиканан ситләшмәне. Партиялы тәнкиттең күрһәтмәләренә нигеҙләнеп, ул «Салауат» (1954), «Ҡаһым түрә» (1957) драмаларының яңы варианттарын яҙҙы һәм билдәле уңышҡа өлгәште.

Башҡорт драматургияһында тарихи-революцион тема ла үҫештән туҡтаманы. Уның был йылдарҙағы матур сағылышы Р. Нигмәтизең «Ағизел ярында» (1950) тигән драмаһында күренде. Был пьесала Өфөнө аҡтарҙан азат итеү ваҡиғалары, граждандар һуғышында халыҡтарҙың ихтыяр көсө, яуланған азатлыҡты яҡлауға бирҙәм күтәрелеше, ойошҡан революцион массаларҙың ҡаһарманлығы тарихи реаллектә сағылдырыла.

Бәләкәй күләмле пьесалар за был йылдарҙа күплап яҙылды. Башҡортостан китап нәшриәте тарафынан Б. Бикбай, Ҡ. Даян, С. Кулибай, И. Абдуллин, Ш. Биҡҡол, Ш. Насыров, Н. Хафизов яҙған бер шаршаулы пьесалар йыйынтыҡтар итеп сығарыла, ваҡытлы матбуғат биттәрендә баҫыла, үҙешмәкәр коллективтар көсө менән сәхнәләрҙә уйнала килде һәм билдәле уңыш ҡаҙанды.

Үткән ошо дәүер драматургияһын дөйөм ҡарағанда, уның һуғыштан һуңғы социалистик төҙөлөштә, хужалыҡты һәм экономиканы нығытыуҙа халҡыбыҙҙың хеҙмәт ҡаһарманлығын, рухи бирҙәмлеген, әхлаҡи бөйөклөгөн художестволы сағылдырыуҙа һиҙелерлек уңыштарға ирешеүе күҙгә ташлана, һәр драматургик жанрҙың үҫеү тенденцияларында аныҡ тойола. «Конфликтһыҙлыҡ теорияһы»ның кире тәьҫиренән, тормошто иллюстрациялауҙан арына барып, башҡорт драматургтары социалистик реализм методы, халыҡсанлыҡ, партиялылыҡ принциптары нигеҙендә коммунистик идеологияны реалистик образдарҙа раҫлауға, совет кешеләренең тыныс төҙөлөштөң һәр тармағындағы, өлкәһендәге хеҙмәт батырлыҡтарын, ҡаҙаныштарын сағылдырыуға. уларҙың типик характерҙарын индивидуаль биҙәктәре байлығында, сәнғәтсә дөйөмләштерелгән юғарылыҡта һүрәтләүгә өлгәштеләр.

Драматургияның төрлө жанрҙары һәр яҡлап үҫте һәм нығынды, ижад стилдәре баҙыҡланды.

Драматургия өлкәһендәге был ҡаҙаныштар Коммунистар Партияһының идеология мәсьәләләре, театр эҙәбиәте менән сәнғәтен үҫтереү өлкәһендәге мөһим талаптары, күрһәтмәләре һәм туранан-тура ярҙамы нигеҙендә яуланды.

Башҡорт яҙыусыларының II съезы (1954) һәм Мәскәүҙәге эҙәбиәт, сәнғәт декадаһы (1955) драматургиябыҙҙың ошондай ҡаҙаныштарын, алдағы бурыстарын билдәләне. Был — драматургияның киләсәктәге үҫешенә ныҡлы ерлек булды.

Хәҙерге башҡорт драматургияһының үҫеше илебеҙ тормошондағы бөйөк тарихи үҙгәрештәр һәм яуланыштар менән бәйле, ул төрлө яҡлап — һан яғынан да, сәнғәтсә юғарылыҡҡа күтәрелеүен билдәләүсе үҙенсәлекле сифаты яғынан да ыңғай характерлана. Уның төп йүнә-

кеше боғонғо көн кешеһен, айырыуса төрлө яҡлап үҫешкән, интеллектуаль хеҙмәт эйәһен, бөтә тулылығында, ҡатмарлылығында һәм бар тәҙәллегендә кәүҙәләндереүгә, замандың алдынғы, өлгө булырлыҡ геройы образын тыуҙырыуға ынтылыш менән билдәләнә. Хәҙерге ысынбарлыҡтың ижтимағи-политик һәм әхлаҡ-этик проблемаларын ҡыйыу дөйөмләштереүгә, героик рухлы совет кешеләре характерын социаль-психологик тәрәнлектә анализларға, коммунистик әхлаҡ принциптарын, кеше рухы проблемаларын тулыраҡ сағылдырырға ынтылыш бөгөнгө башҡорт драматургияһын идея-эстетик баһалау критерийына әүерелде. Ул М. Кәрим, И. Абдуллин, Н. Нәжми, Ә. Мирзаһитов, Н. Асанбаев, Ә. Атнабаев пьесаларында айырыуса асыҡ тойола. Ғ. Әхмәтшин, М. Хәйҙәров, Ғ. Байбурин, Р. Сафин, Ф. Богданов, М. Садиҡова, И. Йомаголов пьесалары ла етди әһәмиәткә эйә.

Хәҙерге драматургиябыҙҙың йөҙөн билдәләүсе М. Кәримдең «Йырланмаған йыр» (1960) драмаһы күтәрелгән проблемалары, тәрән идея-эстетик йөкмәткеһе менән театр әҙәбиәте тарихында — ҡыйыу һүҙ, үҫешендә яңы аҙым булды. Әҫәр дөйөм әҙәби оҫталыҡ, образдарҙың индивидуаль тулылығы, тормош дөрөҫлөгө, конфликт үткерлеге һәм актуаллеге, психологик кисерештәр тәрәнлеге яғынан да әһәмиәтле. Унда коммунистың тормоштағы урыны, ижтимағи роле һәм яуаплылығы мәсьәләләре ысынбарлыҡтың көнүҙәк проблемаһы итеп ҡуйылған, быларҙы шәхси мәнфәғәттәрендә файҙаланырға тырышыусы Ярлыҡапов, Вәзир ишеләр пьесала ҡыйыу фашлана, аяуһыҙ тәнҡит ителә, намыҫ һәм бурыс сафлығын раҫлаусы йәштәр образдары ҡәүҙәләндерелә, бөгөнгө ысынбарлыҡтың яҡты идеалдары яҡлана.

И. Абдуллиндың социаль-көнкүреш проблематикалы «Йөрәк менән шаярмайҙар» (1962) драмаһындағы бөтә ғүмерен физәкәр хеҙмәткә, кешеләр һаулығын һаҡлауға арнаған замандашыбыҙ хирург Арыҫлан Моталов, уның фронтташ дуҫы Владимир Павлович — көслө ихтыярлы, саф күңелле, бай рухлы кешеләр, коммунистар — образдары драматургия алдындағы яңы талаптарға ярашлы ижад һөҙөмтәһе рәүешендә ҡабул ителде. Пьеса кеше рухының бөйөклөгөн раҫланы, уны данланы.

Ошо уҡ осорҙа М. Хәйҙәровтың «Азамат», Н. Нәжмиҙең «Егет егетлеген итә», И. Абдуллиндың «Урман ҡыҙы», А. Мөбәрәковтың «Икенсе йәшлек», Ә. Атнабаевтың «Йәйҙең һуңғы көнө» ише социаль-көнкүреш пьесалары сәхнәләштерелде. Кешегә ышаныс күрһәтеү проблемаһын яҡтыртыуға арналыуы менән И. Абдуллиндың «Бер мөхәббәт яҙмышы» драмаһы ла заман рухына тап килде.

Бөйөк Ватан һуғышы темаһы был йылдарҙа ла башҡорт драматургияһының иғтибар үҙәгендә ҡала килде. Ә. Атнабаевтың «Ул ҡайтты» (1959) пьесаһында ул темаға үҙенсәлекле яңылыҡ индерелә. Автор унда совет кешеләренең патриотизмын, эске кисерештәрен, теләк, ынтылыштарын тулҡынландырырлыҡ алымдарҙа һүрәтләй, һуғыш афәтенең ҡәһәрле эҙҙәрен онотмаҫҡа өндәй, уның яраларының әле булһа күңелдәрҙә уңалмауын тормошсан картиналарҙа күрһәтә. Әҫәр яңы

һуғыш уты тоҡандырырға маташыусыларға көслө нәфрәтте һәм протесты тәң яраһы төҙәлһә лә, йөрәк яраларының төҙәлеп етмәүен һүрәтләү аша оҫта сағылдыра.

«Әсә хөкөмө» (1963) драмаһында ла Ә. Атнабаев Ватан һуғышына бәйле ваҡиғаларға мөрәжәғәт итә. Әммә бында автор, һуғыш яланын ташлап ҡасып, илгә хыянат итеүсе типҡа ҡарата ерәнеүҙе һүрәтләй, Ватанға, халыҡҡа, әсәгә һөйөү, намыҫ, бурыс мәсьәләләренә иғтибарҙы йүнәлтә.

Ватан һуғышы темаһына, һуғышҡа бәйле ваҡиғаларҙы яҡтыртыуға Ғ. Әхмәтшиндең «Урау-урау юлдарҙан», Н. Асанбаевтың «Алтын бишек», М. Кәримдең «Айғөл иле», И. Абдуллиндың «Онотолған ант», Х. Ғиләжевтең «Ил балаһы» пьесалары ла арналды. Уларҙа һуғышсан дуҫтарын, хатта ауылдашын фашистарға һатҡан хыянатсыны фашлау («Урау-урау юлдарҙан»), дуҫлыҡҡа, кешелек тойғоларына хыянат итеү («Онотолған ант»), ике лагерь, ике система, үлем менән йәшәү («Алтын бишек»), ҡаһарманлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ («Ил балаһы») кеүек әхлаҡ-этик проблемалар үҙәккә ҡуйыла. Ә М. Кәримдең «Айғөл иле» драмаһы ижтимағи-политик проблемалары, ваҡиғаларҙың, хәл-шарттарҙың етдилеге, психологик тәрәнлеге, кеше характерҙарының тулылығы, Тыуған ил һәм шәхес яҙмышын органик берлектә сағылдырыу, юғары художестволылығы менән, патриотик хистәр байлығын һүрәтләүе ягынан зур әҙәби ҡаҙаныш ине.

Н. Асанбаевтың «Кеше бәхете» драмаһының да үҙәгендә әхлаҡи проблемалар тора. Ул, совет йәштәренең үҙ-ара мөнәсәбәте, ынтылыштары фонын дөйөмләштереп, яҡшылыҡтың яманлыҡты еңеп сығыуын раҫлай.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт драматургияһында тарихи шәхестәрҙең художестволы образдарын һүрәтләүгә иғтибар арта төштө. Н. Асанбаев «Ҡанат йәйғәндә» пьесаһында герой-шағир Муса Йәлилдең шәхес булып формалашыуға һынау тотоуын, И. Абдуллин «Йыр булып ҡайтырмын» әҫәрендә герой-разведчик яҡташыбыҙ батырлығын, Х. Ғиләжев «Ил балаһы» драмаһында Александр Матросовтың үлемһеҙлеккә килеү юлын һүрәтләнеләр, А. Абдуллин «Онотма мине, ҡояш» пьесаһында шағир-патриот Сергей Чекмаревтың образын тергеҙҙе.

Совет кешеләренең көнкүрешен хеҙмәт процесы менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләүгә, ғаиләлә тоғролоҡ, намыҫ һәм бурыс кеүек әхлаҡ-этик проблемаларҙы дөйөмләштерергә ынтылыш, мещанлыҡты киҫкен тәнҡитләү һуңғы йылдар драматургияһында төп урындарҙың береһен биләй. Был тәңгәлдә Н. Асанбаев, Ә. Атнабаев, Ә. Мирзаһитов, Ғ. Әхмәтшин, М. Хәйҙәров зур тырышлыҡ күрһәтә. Ул яҡшы башланғысты драматургияға ошо осорҙа килгән Ғ. Байбурин, Р. Сафин, Ф. Богданов, М. Садиҡова үҙ әҫәрҙәрендә актив дауам итә башланылар.

«Әсәйемдең сал сәстәре» драмаһы менән Ә. Мирзаһитов был йүнәлештә уңышлы ерлеккә ҡуйғайны. «Күршеләр» тигән яңы пьесаһын-

да автор йөнә шул темаға ҡайтты һәм бөгөнгө тормоштағы көнүҙәк мәсьәләләрҙе ҡуҙғатты.

Пәйғәмбәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүгә Ғ. Байбуриндың «Тал бөгөлә», М. Садиҡованың «Бәхет эҙләгәндә», «Ерәнсәс», Ф. Богдановтың «Иртәнге томан» драмалары арналды.

Көнкүреш драмаларында психологизмдың мөһим үҙенсәлеккә эйә булыуын Н. Асанбаев «Рәйсә», «Фәйзи» дилогияһында яҡшы дәлилләй, Ғ. Әхмәтшин уны «Юғалған хаттар» пьесаһында ҡеүәтләй төштө.

Әхлаҡ-этик тәрбиәгә арналған әҫәрҙәр араһында Ә. Атнабаевтың «Балаҡайҙарым» драмаһы уңышлы. Унда гәмһеҙлек, намыҫһыҙлыҡ ҡаты тәнҡитләнә. Ә Р. Сафиндың «Йәнбикә» драматик поэмаһы ҡараштар бәрелешенең, геройҙарҙың йәшәү һәм кешеләргә хеҙмәт итеү, рухи бәйеклек философияһының үткер, йәнле хәл ителеше менән әһәмиәтле.

Башҡорт драматургияһының бөгөнгө йөҙөн заман рухын, замандаш образын сәнғәтсә камиллыҡта сағылдырған пьесалар билдәләй. Ил һәм халыҡ, йәмғиәт һәм шәхес, коллектив һәм кеше мөнәсәбәттәрен, геройҙар хәрәкәтенең төп мотивтарын, сығанаҡ һәм нигеҙҙәрен тәрән анализлау, коммунистик идеологияны раҫлау, йәмғиәт, ил, дөйөм кешелек мәнфәғәттәренә ярашлы гуманистик идеал өсөн көрәш, шуларҙы тормошҡа ашырыуға бәйле киҫкен психологик коллизияларҙы сисергә ынтылыш — хәҙерге башҡорт драматургияһының үҫешен сағылдырған төп сифаттар. Һуңғы йылдарҙа яҙылған күпселек пьесалар шуға миҫал булырлыҡ. Шул уҡ ваҡытта илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың хәҙерге юғары үҫешенә килеү юлдарын, социаль-тарихи шарттарҙы дөйөмләштереп күрһәтеү, уларҙы бөгөнгө бейеклектән анализлау һәм һығымта яһау, шуның аша йәшерәк быуындарға «тарих дәрестәре» биреү ҙә башҡорт драматургияһының иғтибар үҙәгендә тора. Шул йәһәттән Б. Бикбайҙың «Аҡҡош йыры», З. Биишеваның «Гөлбәҙәр» («Нәҙер»), «Серле ҡурай», К. Мәргәндең «Өҙөлгән моң», И. Йомағоловтың «Нәркәс», Ә. Атнабаевтың «Шоңҡар», М. Кәримдең «Ай тотолған төндә», «Салауат», Ә. Мирзаһитовтың «Утлы өйөрмә», «Бәхтәгәрәй» пьесалары тотош бер циклды тәшкил итәләр. Уларҙың барыһы ла халҡыбыҙ тормошондағы тарихи ваҡиғаларҙы башҡа-башҡа аспектта, художество яғынан — төрлө кимәлдә, әммә реалистик планда сағылдыралар. Әҙәби-театраль тәнҡит тарафынан был пьесалар һәм улар буйынса ҡуйылған спектаклдәр ыңғай ҡабул ителде.

Күҙ йүгертеп үтелгән һуңғы йылдарҙағы пьесалар жанр яғынан, билдәле булыуынса, драма менән трагедияға йышыраҡ бүленеүсән. Үҫештәренең һәр этабында үҙенсәлекле рәүештә нығына килеп, улар инде башҡорт драматургияһында драма менән трагедияның тамам өлгөрөп етеүҙәрен раҫлаусы әҫәрҙәр.

Әммә башҡорт драматургияһы драма һәм трагедия менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Хәҙерге милли драматургиябыҙ жанр формаларына шаҡтай бай. Башҡорт драматургияһы үҙенең тематик һәм проблематик киңлеге һәм тәрәнлеге, жанр үҙенсәлектәренең һәм стилдең бай-

лығы, драматургик характерҙарҙың күп төрлөлөгө менән характерлана. М. Кәрим, И. Йомағолов трагедияларында был жанрҙың яңы шарттарҙа, яңы буяу-төҫтәрҙә үҫеш алыуы драматургиябыҙҙа уның юғары баҫҡыҫҡа күтәрелеүен күрһәтә.

Хәҙерге драмаларыбыҙҙың төрлө үҙенсәлектәргә бигерәк тә бай булыуы күҙгә ташлана. Жанр һәм стиль айырмалыҡтары яғынан һуңғы йылдар башҡорт драмаларын ысынбарлыҡты юғары поэтик стилдә сағылдырыусы романтик драма, көндәлек тормоштағы драматик ваҡиғалар аша кеше характерҙарын тәрәндән асҡан көнкүреш драмаһы, психологик драма, героик (социаль-тарихи, социаль-политик, социаль-психологик, социаль-философик һ. б.) һәм драматик повесть, драматик поэма формаларына бүлеп ҡарарға мөмкин. Ләкин уларҙың барыһына ла мөһим уртаҡ сифат хас: драматургтар әлеге күп төрлө, жанр һәм стиль яғынан үҙенсәлекле драма әҫәрҙәрендә ҡатмарлы тормош күренештәрен, замандың үткер коллизияларын, тулы ҡанлы характерҙарҙы һүрәтләйҙәр, йәшәүҙең мәғәнәһе, кеше бәхете, ил һәм халыҡ яҙмышы, шәхси һәм дөйөм мәнфәғәттәр берҙәмлеге, намыҫ һәм бурыс хаҡында бөгөнгө интеллектуаль замандаштарыбыҙҙың тәрән уйланыуы, коммунистик яҡты идеалға ынтылышы, иҫкелек менән киҫкен көрәше тураһында фекер уртаҡлашалар. Һүрәтләгән геройҙары кеүек үк, яҙыусылар үҙҙәре лә ҡыйыу эҙләнәләр, табыштары менән ихлас уртаҡлашалар, уҡыусыларын һәм тамашасыларҙы ҡыуандыра торалар. Аяуһыҙ фажиғәле трагедия, тәрән киҫерешле, романтик, йәки башҡа төрлө драмалар менән бергә хәҙерге ысынбарлыҡты мауыҡтырғыс итеп сағылдырған лирик, сатирик һәм көнкүреш комедиялары театрҙарыбыҙ репертуарын әленән-әле тулыландыра киләләр. Күренекле драматург Х. Ибраһимовтың атаҡлы «Башмағым», «Еҙнәкәй» пьесаларынан килгән комедия жанры һуңғы йылдарҙа тематик яҡтан да, сатирик йәки, төмүмән, комик характерҙар ижад итеү оҫталығы йәһәтенән дә һиҙелерлек уңыштарға иреште. М. Кәримдең «Кыҙ урлау» (1958) комедияһы шуның иң уңышлы бер күренеше булды һәм ул әле лә Башҡорт дәүләт академия театрының сәхнәһендә ҙур уңыш менән бара.

Һуңғы йылдарҙа комедия жанрында башҡорт драматургтарының күбеһе уңышлы эшләй. И. Абдуллиндың «Ялҡынһыҙ яна йөрәк», «Тиле йәшлек», «Их, Өфө ҡыҙҙары!», «Яратам, яратам...», Ә. Атнабаевтың «Законлы никах менән!», «Игезәктәр», Н. Асанбаевтың «Күктән төшкән бәхет», «Һыу юлы», «Безгә егеттәр килде», Ә. Мирзаһитовтың «Ауыл күренештәре», Ғ. Әхмәтшиндең «Аҡизел тулҡындары», Н. Нәжмиҙең «Күршеләргә ҡунаҡ килгән», «Әтәмбәй», М. Хәйҙәровтың «Килен», «Кейәү балаҡай», «Ҡоҙалар, ҡоҙасалар», «Ҡотло булһын туйығыҙ!» кеүек художество яғынан төрлө-төрлө кимәлдәге комедияларҙа тормошта һәм ҡайһы бер кешеләрҙә осрай торған кәмселектәр йәки йомшаҡ яҡтар фашлана, етешһеҙлектәр тәнҡит ителә. Ғ. Байбуриндың «Аҡ ҡоҙғон», «Бер имән бар», С. Поварисовтың «Кәрлә йондоҙ» комедиялары ла театрҙарыбыҙ сәхнәһендә ҡуйылып алды. Үрҙә аталып үткән әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәре тик тышҡы билдәләре менән генә

бөгөнгө көн мәсьәләләренә ҡағылалар, уларҙа халыҡ тормошон тәрән дөйөмләштереү етеҡкерәмәй. И. Абдуллиндың «Ялҡынһыҙ яна йөрәк», «Бисәне айырам», М. Хәйҙәровтың «Килмешәк», Н. Асанбаевтың «Кәләш әйттергәндә», Ҡ. Даяндың «Тулҡынлана тәрән күл», Ғ. Әхмәтшиндең «Шөһрәт шауҡымы» комедиялары идея-художество сифаттары менән һай булыуҙары сәбәпле тамашасы күңеленә барып етмәнеләр. Билдәле, хәҙерге тамашасыны көнкүрештәге ҡанатһыҙ, ваҡ, арҙан интригалар менән генә ҡыҙыҡһындырыу мөмкин түгел. Ә И. Абдуллин, Н. Асанбаев, Ә. Атнабаев, М. Хәйҙәров кеүек танылған драматургтар айырым әҫәрҙәрендә идея-эстетик йөкмәткегә иғтибар итеү хәстәрлеген күреп еткермәйҙәр. Әммә драматургтар әҫәрҙәрендәге кәмселектәренән арына, оҫталыҡтарын һаман арттыра, туплаған тәжрибәләрен байыта киләләр. Һөҙөмтәлә, бөгөнгө башҡорт драматургияһында сәхнә әҙәбиәтенең төп жанрҙары — трагедия, драма һәм комедия — үҫә̀ренең бөтә төрҙәрендә лә ҙур һәм киң ҡүсеш алды. Был — драматургтарыбыҙҙың ҙур ижади мөмкинлектәре, сәнғәттең оло юлына сығыуҙары, художество оҫталығына эйә булыуҙарының төп билдәһе, драматургиябыҙҙың ҡаҙанышы.

М. Кәримдең «Ташлама утты, Прометей!» трагедияһы, «Диктаторға ат бирегеҙ!» политик памфлеты, «Йәйәүле Мәхмүт» комедияһы герой-яҙыусы ижадында яңы бизәктәр булды. «Ташлама утты, Прометей!» һәм «Оҙон-оҙаҡ баласаҡ» әҫәрҙәре өсөн М. Кәрим Ленин премияһына лайыҡ булды.

И. Абдуллиндың «Тиле йәшлек» исемле һуңғы йыйынтығында донъя күргән әҫәрҙәренән «Утың һүнмәһен, улым», «Ә ҡайындар һаман хәтерләй», «Йыр булып ҡайтырмын», «Күңелдәргә пәрҙә ҡормағыҙ», «Айһылыуҙың айлы кистәре», «Беҙ китергә килмәнек» драмалары яҙыусы ижад баҫҡыстарының камиллаша килеүенең бер өлгөһө, күрһәткесе рәүешендә ҡабул ителде.

Ғ. Әхмәтшиндең «Яр буйында усаҡтар» драмаһын башҡорт сәхнә әҙәбиәтендә мөһим күренештәрҙең береһе итеп һанарлыҡ. В. И. Ленинның тыуыуына 110 йыл тулыуға арнап, Башҡорт дәүләт академия театры сәхнәһендә ошо әҫәр буйынса ҡуйылған спектаклдә тамашасылар беренсе тапҡыр башҡорт драматургы тарафынан ижад ителгән дан̆и образын күреп һоҡландылар. Автор унда В. И. Лениндың, Н. К. Крупскаяның, Иван Якутовтың Өфөләге революцион эшмәкәрлеген художестволы яҡтырта.

«Таң йондоҙо» пьесаһында Н. Асанбаев граждандар һуғышы ваҡиғаларына мөрәжәғәт итһә, «Зәйтүнгөлдә» төп геройының оҙайлы яҙмышын психологик кисерештәрендә яҡтыртыуҙы гуманистик планда хәл итергә уйлаған, ә «Аҡ сирендәр»ҙә бөгөнгө көн нефть промышленносы эшселәренең, инженер-техник эшсәндәренең үҙ-ара, эшкә мөнәсәбәттәрен намыҫ һәм бурыс принциптары бейеклегенән әхлаҡ-этик аспектта һүрәтләй. Ә инде «Ҡыҙыл паша» драмаһы яҙыусының да һәм бөтә башҡорт драматургияһының да ҙур ҡаҙанышы булып танылды. Ябай хеҙмәт халҡы араһынан сығып, Октябрь революцияһы һәм

совет власын урынлаштырыу өсөн көрәш йылдарында күренекле партия һәм дәүләт эшмәкәре, ҡыҙыл командир, аҙаҡ совет илсеһе — дипломат дәрәжәһенә күтәрелгән башҡорт ҡаһарманы Кәрим Хәкимовтың тулҡынландырырлыҡ образын тыуҙырҙы. Бөйөк В. И. Ленин образы өҫтөндә эшләүҙә лә Н. Асанбаев ҙур көс һалды.

Совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышында еңеп сығыуы илебеҙҙә һәр йыл киң билдәләнә. Был тантана һәр кем өсөн изге һәм бөйөк, башҡорт драматургтары өсөн — бигерәк тә. Сөнки уларҙың барыһы ла тиерлек шул һуғыш һәм еңеү ветерандары. Һәм, әлбиттә, улар ижадында Ватан һуғышы темаһы, һәр ваҡыттағыса, даими рәүештә яҡтыртыла. Әммә шуныһы бар: һуғыш темаһына яҙылған хәҙерге күпселек башҡорт пьесаларындағы ваҡиғалар баталь эпизодтарҙан тормай, ә үҙәк мәсьәлә һуғыш ваҡыты һәм уның бөгөнгө көнгә мөнәсәбәте, һуғыш һәм именлек, бурыс һәм намыҫ, элекке фронтташтар һәм улар араһындағы хәҙерге мөнәсәбәттәр, һуғыш афәте һәм ул һалған яраларҙың һаман уңалып етмәүе, әрнеүе һәм айырым кешеләр, характерҙар яҙмышында тетрәткес кисерештәргә сәбәпсе булыуы кеүек тәрән психологик күренештәрҙе бөгөнгө көн юғарылығынан әхлаҡ-этик, рухи планда күҙаллауға ҡайтып ҡала. Н. Нәжмиҙең «Гармунсы дуҫ», Ә. Мирзаһитовтың «Әсәләр көтәләр улдарын», Ғ. Байбуриндың «Бер имән бар», И. Абдуллиндың «Онотолған ант» пьесалары шундайҙар. Был пьесаларҙың авторҙары элекке фронтташтарҙың хәҙерге тормошондағы ҡатмарлы, ысын мәғәнәһендәге драматик яҡтарына, геройҙарҙың эске донъяһына тәрән үтеп инеп кәүҙәләндерергә ынтылалар һәм улар билдәле уңышҡа өлгәштеләр ҙә.

Р. Сафиндың «Йәнбикә», «Тилекәй» драмалары лирик, романтик үҙенсәлектәрҙе көсәйтеште. Ә. Мирзаһитовтың «Ғүмер ике килмәй», Н. Асанбаевтың «Аҡ сирендәр», Ф. Богдановтың «Юлдар күперҙә осраша», «Иртәнге томан» пьесаларында эшселәр тормошо, хеҙмәт процесында кеше характерына һынау тотоу мәсьәләләре үҙәккә алынды.

Хәҙерге комедия жанрында героик (И. Абдуллин — «Их, Өфө ҡыҙҙары!»), водевиллек (И. Абдуллин — «Яратам, яратам...»), юмористик (Ә. Атнабаев — «Законлы никах менән!», «Игеҙәктәр», Н. Нәжми — «Күршеләргә ҡунаҡ килгән»), сатирик (М. Кәрим — «Йәйәүле Мәхмүт», Н. Асанбаев — «Һыу юлы», К. Мәргән — «Шомбай», М. Хәйҙәров — «Ҡоҙалар, ҡоҙасалар») һәм политик памфлет (М. Кәрим — «Диктаторға ат биреген!») һ. б. шартлы йүнәлештәр айырымлана төштө.

Мәктәп йәшендәге балалар өсөн яҙылған пьесалар ҙа ижад ителә. Ш. Бикҡолдоҡ «Һыҙылып таңдар атҡанда», Ә. Бикчәнтәевтең «Йәшенле таң», К. Мәргәндең «Олатайым сәғәте» ише пьесалар шуның өлгөләре.

Башҡорт драматургияһы үҫешендә башҡа жанрҙағы әҫәрҙәр буйынса яҙылған инсценировкалар ҙур урын тота. М. Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр» повесы нигеҙендә яҙылған трагедия һәм башҡа шундай әҫәрҙәр хәҙер театрҙар репертуарының алтын фондын тәшкил итәләр. Башҡорт драматургияһын сәхнәләштереү процесында Дәүләт академия

драма театры ҙур ҡаҙаныштар яуланы, тәржемә ителгән совет драматургияһы һәм донъя классикаһы әҫәрҙәрен ғәйәт оҫталыҡ менән күрһәтеү дәрәжәһенә күтәрелде. Шул уҡ ваҡытта, был өлкәләрҙә хәл ителеүҙе көткән мәсьәләләр, бурыстар һәм талаптар байтаҡ әле.

Дөйөм алғанда, башҡорт драматургияһы һәр яҡлап үҫә, сәнғәттең гүзәл юғарылығына күтәрелеп, ул хәҙер илебеҙ әҙәбиәттәре киңлегенә сыҡты һәм танылыу алды. Ләкин, шатланырлыҡ уңыштары менән бер рәттән, уның хәл ителәһе мәсьәләләре, яулаясаҡ бейеклектәре, күтәреләһе үрҙәре лә бар әле. Сөнки һәр яңы көн үҙенсә яңылыҡ килтерә, яңы шарттар тыуҙыра, шундай уҡ талаптар ҡуя, яуаплылыҡты кәметмәй. Һаң яғынан бай башҡорт драматургияһы әҫәрҙәрҙә заман рухын биреүҙә, замандаш образдарын һүрәтләүҙә үҙҙәренең интеллектуаль сифаты, кимәле, идея-эстетик йөкмәткеһе һәм социалистик реализм методы ҡуйған талаптар нигеҙендә ысынбарлыҡты художестволы сағылдырыу оҫталыҡтары, дөйөм камиллыҡтары яғынан бер үк дәрәжәлә тормай. Байтаҡ әҫәрҙәрҙәге персонаждарға, айырым осраҡтарҙа хатта үҙәк характерҙарға, тормош, ысынбарлыҡ геройҙарына хас юғары интеллектуаллек етеп бөтмәй. Героик эшселәр синыфы вәкилдәрен, данлы интеллигенция, бөгөнгө ауыл хужалығы батырҙарын, уларҙың хәҙерге психологик йөҙөн, эске донъяһын, дөйөм рухын юғары художество кимәлендә һүрәтләгән әҫәрҙәр аҙыраҡ яҙыла. Дөйөм кешелек, халыҡ-ара иҗтимағи мәсьәләләргә арналған әҫәрҙәр ижад итеү ҙә үҙ сиратын көтә.

Былар барыһы ла бөтә туғандаш драматургик әҙәбиәттәр өсөн дә хас, уртаҡ кәмселектәр һәм проблемалар. Әммә башҡорт драматургияһы үҫешенең үрҙә күҙәтеп үтелгән баҫҡыстары нигеҙендә, хәҙерге башҡорт драматургияһының дөрөҫ йүнәлештә алға барыуын, социалистик ысынбарлыҡты реалистик алымдарҙа киң һәм тәрән дөйөмләштерергә ынтылыуын асыҡ тойоп була. Был — башҡорт драматургтарының алдағы ҙур ижади бурыстарҙы ыңғай хәл итергә һәләтле булыуҙарына шик ҡалдырмай.

Миҙхәт Ғәйнуллин,
Илдус Бүләков



Мәжит Ғафури

(1880—1934)

Башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры, башҡорт һәм татар әҙәбиәттәре классигы Ғәбделмәжит Нурғәни улы Ғафуров Башҡортостандың Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Ғафури районы) Еҙем-Ҡаран ауылында ярлы хәлфә ғаиләһендә тыуған. Ете йәштән үҙҙәренең ауыл мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Үтәш һәм Ҡыйышҡы мәҙрәсәләрендә уҡый.

1898 йылда Троицк мәҙрәсәһендә уҡый. 1904 йылда Ҡазандағы «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһенә инә. 1906 йылдың аҙаҡтарында М. Ғафури Өфөгә ҡайта һәм «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға урынлаша.

1901—1902 йылдарҙа Мәжит Ғафури тәүге шиғырҙарын яҙа башлай. 1904 йылда Ҡазанда уның «Фәҡирлек менән үткән тереклек» хикәйәһе айырым китап булып сыға. Шул уҡ йылда Ырымбурҙа Ғафуризың «Себер тимер юлы, йәки әхүәле милләт» исемле тәүге шиғырҙар китабы баҫыла.

М. Ғафуризың революцион-демократик рухтағы әҫәрҙәре 1906—1907 йылдарҙа баҫыла башлай. «1906 йылдан 1907 йылға васыят» һәм «Етенсе йылдың яуабы» шиғырҙарында был йүнәлеш тағы ла асығыраҡ күренә.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһын М. Ғафури зур көтәренкелек менән ҡаршылай. Социалистик революция уның ижадына ҡанат ҡуйҙы, күңеленә бөтмәҫ дәрт өҫтәне, илһам бирҙе, уның ижадын яңы темалар һәм образдар менән байытҡтырҙы. Ысын патриотизм, халыҡсанлыҡ уның ижади принциптары булды.

Ул күп йылдар «Ирек», «Ҡыҙыл юл», «Шәреҡ ярлылары», «Урал», һуңынан «Башҡортостан», «Яңы ауыл» газеталары редакцияларында эшләй.

Совет власы шарттарында уның ижады тағы ла зурыраҡ темп менән үҫә. Поэзия менән бергә уның эпик формалағы прозаик әҫәрҙәре һәм пьесалары барлыҡҡа килә. 1923 йылда Башҡортостан хөкү-

мәте М. Ғафуриҙың ижади эшмәкәрлегенә 20 йыл тулыу уңайы менән уға халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирә. Башҡорт, татар, рус, латыш, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, үзбәк, удмурт, мари, украин, сыуаш, белорус һәм башҡа телдәрҙә баҫылып сыҡҡан ике йөҙгә яҡын китаптары менән ул миллионлаған уҡыусыларҙың яратҡан әҙибе булып таныла.

1980 йылда РСФСР, Башҡортостан һәм Татарстан йәмәғәтселеге Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 100 йыл тулыуын киң билдәләне.

ҠАРА ЙӨҘҘӘР *

Трагедия

4 шаршауҙа, 7 күренештә

Ҡатнашалар

Фәлимә — ауыл ҡыҙы, 18 йәштә.
Закир — Фәлимәнең һөйгән егете, 23 йәштә.
Фәхри — Фәлимәнең атаһы, 45—50 йәштәрҙә.
Хәмиҙә — уның ҡатыны.
Фимаҙи — Фәхриҙең кесе туғаны.
Мәсрүрә — уның ҡатыны.
Сәғит — уларҙың улы, 13 йәштәрҙә.
Шәйхулла — бакенщик ҡарт.
Сафи — мулла, 60 йәштәрҙә.
Ғәйфулла — бай малайы, 23 йәштәрҙә.
Мәзин.
Староста.
Фиңиәт — ауыл ҡарты.
Вәхит — мәҙрәсәлә ҡазый.
Фәли, Һаҙый — шәкерттәр.
Филми — имсе ҡарсыҡ.
Сәйфулла, Ғәбделхәй — ауыл ҡуштандары.
Ибрай, Филмүш, Мансур, Гәрәй — ауыл егеттәре.
Нәғимә, Ғөлниса, Фәриҙә — ауыл ҡыҙҙары.
Ауыл кешеләре: ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар, егеттәр.

---

* Ғәйнан Әмири, Вәли Фәлимов инсценировкаһы. Башҡортостан китап нәшриәтендә 1956 йылда баҫылған варианты алынды.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Бесән өсте. Вакыт кискә табан. Агиҙелдең текә яры. Ағаслык. Алыҫта ауыл күренеше. Сәхнәлә Закир, Филмүш, Мансур һәм тағы бер нисә егет эштән һуң ҡайтырға йыйыналар.

Бесәнсе егеттәр йыры.

Саң-саң итеп салғы яный
Егет һыу буйҙарында.
Салғы яныған егеттең
Кем икән уйҙарында?

Агиҙелдең туғайҙарын
Сәскәләр урап алған.
Сәскәнән дә матур бер ҡыҙ
Егетте утҡа һалған.

Саң-саң иткән салғы моңон
Ҡыҙ ҙа, бәлки, тыңлайҙыр.
Тыңлайҙыр ҙа, уйлайҙыр ҙа
Мөхәббәтен йырлайҙыр.

Закир. Быйылғы йыл бесәнгә бигерәк шәп килде. Ул ямғыр күрмәне.

Филмүш. Игендәрҙең дә быйылғы кеүек шәп булғаны бик һирәк. Боҙ һуғып-фәләп итеп китмәһә, байҙар ашлыҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәҫтәр.

Закир. Насип булһа, үҙебеҙҙең арышты һуғып бөтөргәс, тары өлгөргәнсе, кешеләргә ураҡ урып, өҫ-башты бөтәйтеп ҡалырға тырышырға кәрәк.

Мансур. Өҫ-баш тағы бер хәл. Бына бәләкәйерәк булһа ла һыйыр алып булһа ине. Ул саҡ, кәләш әйттереп, иркенләп ҡалыныр ине.

Көләләр.

Филмүш. Мансурҙың өмөтө ҙур.

Мансур. Ниңә? Тик бына бер аҙ хәлләнеп кенә алайым. Биллаһи, ауылдың бына тигән бер ҡыҙын ҡулға төшөрәм! Ә, шту?

Закир. Әйҙә-әйҙә, Мансур. Тик туйындан ҡалдыра күрмә.

Мансур. Ҡалдыра буламмы һуң? Тик бына эшләп ҡалырға кәрәк.

Ғилмүш. Хәҙер эш муйындан, эшләп кенә өлгөрт.

Закир. Быйыл да эшләп ҡалмағас, яраймы һуң? Быйыл беҙҙең кеүек ярлы-ябағайҙарҙың аҙ булһа ла аяҡҡа баҫып ҡала торған йылдары.

Ғәйфулла килеп инә.

Ғәйфулла. Ҡарағыҙ әле, малайҙар, ҡараңҡырап, яҡшыраҡ сабырға кәрәк бит. Тал араһында сабылмаған урындар ҡалғылай.

Ғилмүш. Яҡшы эшләргә тырышабыҙ инде, Ғәйфулла ағай. Улай ғына ҡалыр инде.

Ғәйфулла. Ҡалдырмаҫҡа кәрәк; эшләгәс, яҡшы эшләргә кәрәк.

Закир. Инде, Ғәйфулла ағай, беҙҙән дә хәйләһеҙ эшләгән кеше булмаҫ. Улай күп тылҡыйһың икән, хәҙер беҙ һинән башҡа ерҙә лә эш табырбыҙ. Донъяла бер һеҙ генә түгел.

Мансур. Шулай булмай! Кисә Микулай: «Әйҙә, беҙгә барығыҙ, дисәтинәһенә ике һум бирәм. Өҫтәүенә, сирек сәй, бер ҡаҙаҡ шәкәр арттырам», — тип торҙо.

Ғәйфулла. Улай, йәнегеҙҙе урыҫҡа һатырға йөрөйһөгөҙ икән?

Закир. Беҙ йәнебеҙҙе берәүгә лә һатырға йыйынмайбыҙ. Беҙҙең өсөн мосолман ни, урыҫ ни, тик эш хаҡы намыҫ менән түләнһен.

Ғәйфулла. Теленде кем шулай сарланы?

Закир. Бына бит, ҡулда яныуыс.

Егеттәр көләләр.

Ғәйфулла. Муйыныңа тауыҡ тәпәйе генә тағаһың ҡалған, бинамаҙ!

Закир. Һе... *(көлөп куйҙы.)* Эй Ғәйфулла ағай...

Ғәйфулла. Нимә «Ғәйфулла ағай?»

Закир. Былай ҡурҡытма тим шул.

Ғәйфулла. Бик үткерләнеп, кеше ҡотортоп йөрөй башлаһаң, һиңә управа табылыр.

Закир *(кыҙа төшөп)*. Кемде, нәмәгә ҡотортам һуң мин?

Ғәйфулла. Бына быларҙы. Микулайға барып, байығып ҡайтмаҡсы булаһығыҙ икән.

Ғилмүш. Эй, ҡуй әле, Ғәйфулла ағай.

Ғәйфулла. Эште өҙөп ҡарағыҙ...

Закир. Бәйләнде бит, күгәүен.

Ғәйфулла. Закир! Ҡара, мин ни эшләргә белермен!

З а к и р. Кызык, ни эшләрһең икән?

Ғ ә й ф у л л а. Беҙ һиңә күрһәтербеҙ, ҡайҙа баҫыр урын да табалмаҫһың.

З а к и р. Улай, тештәреңде һындырып, ҡулыңа тоторборбоҙ, ҡабырғаларыңды һанарбыҙ, тиһеңме?

Ғ ә й ф у л л а. Шулай шул, ул-был итеп ҡуймаһындар үҙеңде.

З а к и р. Ә-ә...

Ғ ә й ф у л л а. Шакир ағайың да шулай бик шәбәйеп киткәйне лә, кәрәген алды бит. Онотма.

З а к и р. Беҙ һеҙҙе онотмабыҙ, һеҙ үҙегеҙҙең кемдәр икәнегеҙҙе иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

Ғ ә й ф у л л а. Әле шулай ҡурҡытып булашаһыңмы? Вон, минең сабынлыҡта эҙең булмаһын, зимагор. *(Егеттәргә.)* Ҡарағыҙ, малайҙар, иртәгә таң менән эшкә! Ҡарағыҙ уны. *(Сығып китә.)*

М а н с у р. Вәт беҙ кемдәр өсөн эт көнө күрәбеҙ.

Ғ и л м ү ш. Бик ҡыйыу һөйләшәһең, Закир, ысынлап та үҙеңде ул-был итеп ҡуймаһындар.

З а к и р. Ысыны шулай булғас, ни тип әйтәйем?

Ғ и л м ү ш. Бик мәкерле кешеләр улар.

М а н с у р. Юҡ инде, малай, әллә үҙебеҙҙең бәхет юҡ? Ете ҡат тир сығарып эшләйбеҙ, улай ҙа ярап булмай.

З а к и р. Шулай шашынып йөрөгәне өсөн, анау саҡ Шакир ағай тетмәһен теткәйне, асыуымды килтерһә, минән дә бер алыр әле.

Ҡайтырға сыға башлайҙар. Йырлап ҡайтып килеүсе ҡыҙҙар тауышын ишетеп, ҡапыл туҡтап ҡалалар.

Ҡ ы ҙ ҙ а р й ы р ы.

Ай күтәрелә офоҡтан,
Инеп бара болотҡа.
Ай эргәһендә булырға
Һай бер генә минутҡа.

Ғ и л м ү ш. Ҡыҙҙар!

М а н с у р. Егеттәр, ҡыҙҙар!

Ғ и л м ү ш. Ҡалабыҙмы?

З а к и р. Эй, ниңә бойоғорға, билдәле, ҡалабыҙ. Эштән һуң бер аҙ күңел асып алайыҡ.

Һ а ҙ ы й. Риза булырҙармы?

Ғ и л м ү ш. Һәй, булмайҙармы һуң! Уларҙың да йөрәктәре туңмағандыр әле. Үҙем һөйләшәм.

М а н с у р. Өркөтөп, эште боҙоп ҡуймаҫһыңмы һуң?

Ғилмүш. Һәй, өркөтә буламы? Ғилмүш ағайығыҙ һүҙ өсөн кеҫәгә инмәй. Йәшенегеҙ! Хәҙер бер ҡыҙыҡ эш-ләйбеҙ.

Егеттәр таралышалар, тырмалар күтәргән ҡыҙҙар килеп инәләр.

Нәғимә. Бына беҙҙең тау, Ҡыҙҙар тауы!

Ғәлимә. Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ, ошонда саҡ ҡына туҡтап, өҫ-башты алмаштырып ҡайтайыҡ.

Нәғимә. Эйе шул, егеттәргә лә тап булыуыбыҙ бар, хур булмайыҡ.

Ҡыҙҙар ҡайһы берҙәре алъяпҡыстарын, ҡайһы берҙәре яулыҡтарын алмаштырып ябыналар.

Нәғимә. Ғәлимә, ҡасан тектең әле был алъяпҡыс-ты, күҙ яуын алып тора.

Ғәлимә. Атайым яҙғы йәрминкәнән алып ҡайтты, үҙем тегеп ҡайныным.

Фәриҙә. Атайың иллә ярата ла инде үҙеңде, Ғәли-мә. Йыл да бер нәмә алмай ҡалмай.

Ғәлимә. Ярата шул, мин дә уны бик-бик яратам. *(Ҡаяға күтәрелеп.)* Ҡыҙҙар, ҡарағыҙ әле! Ниндәй ма-тур... Ҡыҙарып ҡояш байый... Күрегеҙ, Ағиҙел өҫтө нин-дәй бөҙрәләнә! Ал, ҡыҙыл, зәңгәр...

Нәғимә. Матур...

Фәриҙә. Бик матур.

Ғәлимә йырлай башлай, ҡыҙҙар уға ҡушылалар.

Йыр.

Ағиҙелкәй ҡайҙа, һай, туғайҙа,
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа.
Ағиҙелкәйҙәрҙең һалҡын һыуы
Янған йөрәкәйгә ҙур файҙа.

Егеттәр килеп инәләр.

Ғилмүш. Сәләм һеҙгә, һылыу ҡыҙҙар!

Егеттәр. Сәләм, сәләм!

Ғилмүш. Күргәс, леп-леп итте ҡайнар йөрәк. Юҡ, юҡ, булмай, алдығыҙҙа теҙҙәр сүгәм, гөлдәр һибәм, һибәм ғишҡым гөлдәрен. Фәриҙәгә — һөйгән Ғилмүше-нән. *(Сәскә ташлай.)*

Егеттәр. Ғәлимәгә, Гөлнисағa, Нәғимәгә, Зәйтүн-гөлгә!

Егеттәр ҡыҙҙар алдына сәскәләр ташлайҙар. Көләләр.

Гөлниса. Әбәү, ҡыланыуҙары...
Ҡыҙҙар. Ә-ә... *(Көләләр.)*
Мансур *(үртәп)*. Ә-ә... Шул икән ҡаршы алыуҙары.
Нәғимә. Харап, йөрөйҙәр кеше көлдөрөп...
Филмүш. Алдашма! Көтә инегеҙ тилмереп.

Егеттәр көләләр.

Фәриҙә. Ah-ah, бынау Филмүш...
Филмүш. Һөйлә, тыңлайым, аҡҡош!
Фәлимә. Туҡтағыҙ әле, егеттәр! Һеҙгә ни ҡалған бында, ниңә килдегеҙ? Эшегеҙ бөткәс, ҡайтып китергә ине.
Закир. Тауышығыҙҙы ишетеп килдек, Фәлимә, тауышығыҙҙы.
Гөлниса. Бик кәрәгегеҙ бар ине. Һеҙҙең кеүек егеттәр быуа быуырға етерлек.
Филмүш. Һәй кем һөйләй, бәшмәк танау.

Егеттәр көләләр.

Егеттәр: Һеҙ ҙә әллә кем түгел,
Беҙ ҙә һеҙҙән кәм түгел.
Һеҙҙең әллә кем булыуҙар
Әҙәлгә дарыу түгел.

Ҡыҙҙар: Аҡлы ситса күлдәгемдең
Ең остары керләнгән.
Иҫем китеп ҡарап торам —
Кемдәр тәкәбберләнгән.

Егеттәр: Иртә буран, кис буран,
Сәкмәненде ныҡ уран.
Сабатаға серәкәй егеп,
Алып ҡайтырҙай булам.

Ҡыҙҙар: Элеп ҡуйған яулығымды
Ямғыр яуып сылатҡан.
Беҙҙең ауыл егеттәрен
Серәкәй тешләп илатҡан.

Ҡыҙҙар көләләр.

Ҡыҙҙар. Һоп-һоп, һоп!
Нәғимә. Кәмә ҡомға терәлде...

Көләләр.

Закир. Ҡуйығыҙ әле, ҡыҙҙар! Беҙ бында һеҙҙең менән әселәшергә килмәнек. Эштән һуң, ял итеп, бергәләп күңел асырға килдек.

Егеттәр. Әйе шул.

Фәриҙә. Килгәс, төртмә һүҙҙәр һөйләп тормайҙар.

Закир. Ярай инде, ҡыҙҙар, ғәйеп беҙҙә. Үпкәләмәгеҙ. Йә, ҡыҙҙар! Ана егеттәрҙең дә аяҡтары ҡысытып тора. Бер аҙ бейешеп алайыҡ.

Фәлимә. Бер ҙә бейер килбәттәре күренмәй. Мәсет ҡарттары һымаҡ, бөршәйеп-ҡоршайып бөткәндәр.

Ҡыҙҙар көләләр.

Мансур. Ай-ай, егеттәр, былар беҙҙе бөтөнләй хур иттеләр бит! *(Шаярып.)* Беҙгә ҡыҙҙар менән бейергә хәҙрәт ҡушмай шул.

Фәриҙә. Әбау, бахырҡайҙарым! *(Көләләр.)*

Закир. Ғилмүш, нимә, аҡшамы ҡалған мәзин һымаҡ, ебеп ҡалдың? Тарт гармуныңды.

Ғилмүш. Ярай, минән эш ҡалмаҫ, һеҙ сер бирмәгеҙ! *(Гармун тарта, бейеү башлана.)*

Фәлимә *(бейеү бөткәс)*. Йә, ҡыҙҙар, уйнаныҡ, көлдөк, күңел астыҡ, етте. Ҡайтышайыҡ.

Ғилмүш. Юҡ, юҡ, ҡайтмайбыҙ әле, уйнайбыҙ.

Мансур. Әйҙәгеҙ ҡапҡалы уйнайыҡ, ҡапҡалы.

Нәғимә. Юҡ, кәрәкмәй, ҡайтабыҙ.

Ғилмүш. Эй, әле күңел аҫҡан кеүек тә булманыҡ бит.

Фәлимә. Юҡ, юҡ... ҡайтышайыҡ. Көн кисләй.

Егеттәр. Ярай инде улай булғас, уйын һүҙҙәргә үпкәләп китмәгеҙ.

Ҡайтырға сығалар.

Йыр.

Аллы-гөллө сәскә ата
Майҙың ун берҙәрендә.
Аллы-гөллө сәскә атһын
Минең ғүмерҙәрем дә.

Егеттәр, ҡыҙҙар таралышалар. Сәхнәлә Закир менән Фәлимә ҡала.

Закир. Ғәлимә...

Фәлимә. Закир...

Закир. Ғәлимә, тим, тыңла әле.

Фәлимә. Йә, ни бар?

Закир. Миңә һинең менән һөйләшергә кәрәк ине.

Фәлимә. Һөйлә, мин тыңлайым, Закир.

Закир. Бик ҙур эш тураһында ине шул ул... Һине осратҡас, ҡапыл ғына ҡаушап киттем бит әле.

Фәлимә. Йә инде, Закир, әйтер һүзеңде тиз генә әйт тә, китәйем. Югиһә кешеләр әллә ни уйлай башлар.

Закир. Фәлимә, минең һиңә йөрәгемдә һаҡланып килгән бик кәрәкле һүзем бар.

Фәлимә. Ниндәй һүз һуң ул?

Закир. Бик әйтер инем дә, асыуланырһың тип ҡурҡам.

Фәлимә. Ниңә асыуланырға? Мине әрләргә йыйынмайһыңдыр бит?

Закир. Юҡ, юҡ, Фәлимә, киреһенсә... Мин һине бөтә йөрәгем менән маҡтарға теләйем. Мин һине маҡтап йырҙар ҙа сығарҙым әле...

Фәлимә. Мине маҡтап? Йырҙар?!

Закир. Әйе, Фәлимә, һине маҡтап. Бына тыңла әле.

Ҡашың ҡара, ҡашың ҡара,
Ҡашыңдан күҙең ҡара.
Керпегеңдән гөлдәр тама,
Күрһәм, йөрәгем яна.

Зөһрә йондоҙға ҡарайым,
Уны һиңә тиң күреп.
Шул ваҡыт һине уйлайым,
Бер күрергә тилмереп.

Фәлимә. Бик матур йырҙар! Ысынлап та һин сығарҙыңмы уларҙы, Закир?

Закир. Мин, Фәлимәкәй! Бына, йөрәгемдең әллә ҡайһы ерҙәренән... сығарҙым. Мин һинең турала бынан матурыраҡ йырҙар сығарыр инем дә... булдырып ҡына булмай.

Фәлимә. Ниңә һин шулай минең турала йырҙар сығараһың, Закир?

Закир. Һуң бит, Фәлимә... *(Уңайһыҙланып)*. Эй, Фәлимә, күрмәйһеңме ни инде үҙең?

Фәлимә *(көлөп)*. Мин һуҡыр түгел дә, ни эшләп күрмәйем, бына күреп торам.

Закир. Ундай күреү генә етмәй шул...

Фәлимә. Һуң, тағы ла нисек күрергә кәрәк?

Закир. Маңлай күҙе менән генә күреү етмәй, йөрәк, күңел күҙе менән күрә белергә, аңларға кәрәк кешене.

Фәлимә. Ярай, улай булғас, мин һине күңел күҙе менән дә күрәм, Закир.

Закир. Ысын әйтәһеңме, Фәлимә? Их, Фәлимә! Беҙ һинең менән шундай бәхетле булыр инек! Шундай матур йәшәр инек. Фәлимәкәй!

Фәлимә *(оялып)*. Әйе шул, Закир. Мин үзем дә шуны уйлайым. *(Оялып, башын ҡаға.)*

Закир. Их, Фәлимәкәй...

Ағастарға ышыҡланып, Фәйфулла килеп инә.

Фәйфулла *(Закир менән Фәлимәне күреп, үҙ алдына)*. Әһә... Бына ҡасан минең ҡулға килеп ҡапты был малай... *(Китә.)*

Фәлимә. Ярай, Закир, мин китәйем инде.

Закир. Тағы ҡасан күрешербеҙ һуң, Фәлимә?

Фәлимә *(йылмайып)*. Киләһе яҙға, Ҡыҙҙар тауында...

Закир *(ҡурҡып)*. Ни тинең, Фәлимәкәй?

Фәлимә *(ҡыйынһынып)*. Закир...

Закир. Нимә, Фәлимәкәй!

Фәлимә. Бына һиңә минән кескәй генә бүләк. *(Кулъяулыҡ бирә.)* Һин уны минең вәғәҙә бүләгем итеп ал.

Закир *(шатланып)*. Рәхмәт, Фәлимә йәнем.

Фәлимә. Ярай, хуш, Закир. *(Йүгереп сыға башлай.)*

Фәйфулла *(каршыларына килеп сығып)*. Сабыр! Ашыҡмағыҙ!

Закир. Һиңә ни кәрәк, Фәйфулла ағай?

Фәйфулла. Миңә һинең нәмәхрәм менән ни эшләп ултырыуыңды белеү кәрәк.

Закир. Беҙ һөйләшеп торҙоҡ.

Фәйфулла. Улай икән, нәмәхрәм менән яңғыҙ ҡалып, һөйләшеп торорға шәригәт ҡушамы икән? Ә?

Закир. Фәйфулла ағай! Шашма! Үсең бар икән, минән ал, ә ғәйепһеҙ ҡыҙ балаһы был эшкә бәйләмә!

Фәйфулла. Үсем бар, үсем ут булып яна! Башыңды ашайым, малай. Бына Фәйфулла менән алышып ҡара.

Закир. Донъяла йәшәйһең килһә, иҫәрләнмә.

Фәйфулла. Ишшу өркөтөп булаша, хәйерсе! Хәҙер миңә әйтегеҙ: бында, икәүҙән-икәү ҡалып, ни эшләп ултыра инегеҙ?

Закир. Унда һинең эшең булмаһын!

Фәйфулла. Эшем бар минең! Аулаҡта ҡыҙ алдап ятаһыңмы һин, ә?

Закир. Һиңә әйтәм, сыҙамым бөтөп бара, яҡшы саҡта кит юлдан!

Фәлимә. Закир, берүк ҡағыла күрмә, башыңды ашарҙар.

Ғәйфуллә *(котороп)*. Әйтегеҙ, шәригәт боҙоп, ни эшләп ултырағығыҙ бында?

Закир. Мин һинең кеүек һөнәргән бай көсөгө алдында иҫәп бирергә теләмәйем. Киттек, Ғәлимә!

Китә башлайҙар.

Ғәйфуллә *(каршыларына төшөп)*. Бирерһең, зимагәр, бирерһең!

Ныҙғыра. Гәрәй, Ибрай килеп инәләр.

Хәҙер мин һеҙҙе хәҙрәт алдына алып барам!

Ғәлимә *(ҡурҡып)*. Закир...

Закир. Ғәйфулла ағай, ябышлыҡта ебәр беҙҙе.

Ғәйфуллә. Ха... Өркөтөп булашҡан була тағы, йолҡош. Алығыҙ, хәҙрәт ҡаршыһына баҫтырырбыҙ үҙҙәрен.

Егеттәр Закир менән Ғәлимәгә ташланалар.

Закир *(Гәрәйгә)*. Ҡағылма, һатлыҡ! Ғәйфулланың араҡыһына йәнеңде һатып йөрөйһөң. *(Гәрәйҙе һелтәп ебәрә, ләкин шунда уҡ уға башҡалар ябырылалар.)*

Ғәлимә. Харап итмәгеҙ. Ибрай, Гәрәй, беҙҙең бер гонаһыбыҙ юҡ. Ебәрегеҙ!

Ғәйфуллә. Юҡ икән, уныһын хәҙрәт тикшерер.

Закир *(ысҡыра)*. Егеттәр!..

Уның ауыҙын ҡаплайҙар. Тартышҡандың һуңында, ҡулдарын бәйләйҙәр.

Ғәйфуллә. Тамағың тығылдымы инде? Әйттем мин һиңә, Ғәйфулла ағайың менән алышма, ул-был хәл булып ҡуймаһын, тинем. Бына хәҙер эләктең. Үҙең өсөн дә, Шакир ағайың өсөн дә ҡабырғаларыңды һанайым. *(Егеттәргә.)* Ҡарағыҙ, малайҙар, һүҙ бер булһын: «Келәт артында тоттоҡ!» — тиергә.

Гәрәй. Булды. Ләббәйкә. Келәт артында тоттоҡ.

Ғәйфуллә. Ну, киттек.

Киләләр, Закир менән Ғәлимәне алып сығып китәләр. Пауза. Ҡыҙҙарын ҡосаҡлап, Ағиҙел өҫтөндә бакен уттары балҡый башлай. Көйләп, Шәйхулла ҡайтып килә.

Шәйхулла. Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын
Бала өйрәктәр ҡаршы йөҙә алмай.
Ошо михнәттәрҙе күрә йөрөп,
Ҡарт йөрәгем минең түҙә алмай.

Шаршау

Икенсе күренеш

Ауыл мәҙрәсәһе. Шаршау асылғанда ҡ а з ы й тирләп-бешеп сәй эсеп ултыра. Б а ш ҡ а л а р гөж килеп, үҙ-ара бәхәс алып баралар.

Ҡ а з ы й. Хәҙер бына һеҙ миңә шуны әйтегеҙ: Хөҙөр ғәләйһеәссәләмдең һаҡалында нисә бөртөк төк булған һәм һәр төк осонда нисә фирештә ултырған?

Ғ ә л и. Бының ауырыраҡ мәсьәлә...

Ҡ а з ы й. Йә кем белә? Хәҙрәт һөйләгәйне бит!

С ә ғ и т. Онотолған шул. Шулай ҙа бик күп булырға тейештер инде ул.

Ҡ а з ы й. Һой, аңралар, һеҙҙе күпме уҡытһаң да шундай ғилемдәргә төшөнә алмаҫһығыҙ.

М а н с у р. Ҡазый ағай, булмаһа үҙең генә әйт тә бир инде.

Ҡ а з ы й. Хәтерегеҙҙән сығармағыҙ. Хөҙөр ғәләйһеәссәләмдең һаҡалында йөҙ мең туғыҙ йөҙ ҙә туҡһан туғыҙ төк булған. Һәм һәр төк осонда мең дә туғыҙ йөҙ ҙә етмеш биш фирештә ултырған. Йәмғеһе: йөҙ мең дә, тағы ла йөҙ мең дә, тағы ла йөҙ мең дә... донъя тиклем йөҙ мең дә туғыҙ йөҙ ун өс фирештә булған.

С ә ғ и т. Кәсер ҙә ҡалмаймы?

Ҡ а з ы й. Ниндәй кәсер?

С ә ғ и т. Хөҙөр ғәләйһеәссәләмдең һаҡал төктәрен фирештәләр һанына бүлгән ваҡытта берәй фирештә артып ҡалмаймы тим шул.

Ҡ а з ы й. Алйот, һин ни һөйләйһең? Фәрештәне урталай бүлеп буламы ни?

Ғ ә л и. Э-э...

Ҡ а з ы й. Эй, һайыҫҡан, ал самауырҙы. *(Кикереп ҡуя.)* Әлхәмделилләһе, биргәнеңә шөкөр! Ипләп, ипләп, сынаяҡты ҡыйратып ҡуйма!

С ә ғ и т. Ҡазый ағай, берәй уйын уйнап алайыҡ әле. Э?

Ш ә к е р т т ә р. Эйе шул, рөхсәт ит инде, ҡазый ағай.

Ҡ а з ы й *(ҡырын ятып)*. Ярай, уйнағыҙ.

С ә ғ и т. Нимә уйнайбыҙ?

Т а у ы ш т а р. Кем һуҡтылы. Юҡ, лағыр-логорҙо...

Ҡ а з ы й *(эре генә)*. Һәй, уны кисә лә уйнаныҡыҙ бит, улай иткәнсе, кем һуҡтылы уйнағыҙ.

М а н с у р. Юҡ, лағыр-логор шәп уйын ул.

Ҡ а з ы й. Һәй, йолҡонған! Шул һәр ваҡыт ҡаршы төшкән булыр.

Ғ ә л и. Әйҙә, ҡазый ағай, лағыр-лоғорҙо уйнайыҡ.
Ҡ а з ы й. Юҡ, мин уны уйнамайым.

Шәкерттәр, түңәрәккә ултырып, уйнай башлайҙар.

Ҡ а з ы й. Ҡана, мин дә уйнайым, булмаһа.
Ғ ә л и. Ә-ә... Ҡазый ағай, уртаға, һин уртаға!
Ҡ а з ы й. Ни эшләп мин уртаға?
М а н с у р. Һуң һин һуңға ҡалдың бит. Һин уртаға.
Ҡ а з ы й. Кәрәкмәй, улай булғас, мин уйнамайым.
Т а у ы ш т а р. Йә инде, ҡазый ағай!
Ҡ а з ы й. Һеҙ бик ҡаты һуғаһығыҙ.
М а н с у р. Юҡ, ҡаты һуҡмабыҙ.
Ҡ а з ы й. Йә ярай. Ҡарағыҙ, ҡаты һуҡмағыҙ.

Х о р м е н ә н. Лағыр-лоғор, лағыр-лоғор — һап!

Ҡ а з ы й *(арҡаһын тотоп)*. Ниңә шул тиклем ҡаты һуғаһың, тамуҡ әтәсе?

М а н с у р. Әйҙә-әйҙә, һөйләнмә, эҙлә!

Х о р м е н ә н. Лағыр-лоғор, лағыр-лоғор — һап!

Ҡ а з ы й *(ауыртыуға сыҙай алмай)*. Ҡара, малай, мин төкөшә лә башлармын. *(Үҙ-ара һуғышып китәләр.)*

С ә ғ и т. Һәй, был уйындың да ҡыҙығы ҡалманы.

Ғ ә л и. Ысындан да, бөтөрәйек, булмаһа.

Ҡ а з ы й *(тыныслана алмай, Мансурға асыула ҡарап)*. Күрһәтермен мин һиңә!

М а н с у р. Ярай, ярай, ул тиклем ирәймә, ҡазый булдым тигәс тә.

Ҡ а з ы й. Ҡазый шул, һинең кеүек йолҡош түгел. Иәй уртаһы, уҡыу юҡ, ни юҡ, ауылыңа ҡайта алмай, мәҙрәсәлә наҫып ятаһың.

М а н с у р. Ауылыма ҡайтмаһам, тамаҡ яллыҡ эшләйем, мәҙрәсәлә торам — торор урын юҡҡа. Ә һуң һин үҙең?

Ҡ а з ы й. Минең эш башҡа, хәйере-саҙаҡаһы килеп тора, аллаға шөкөр, һәр көн тигәндәй, үлем-етем, йыназаһы булып тора.

М а н с у р. Эй, йәһле мөрәккәп, төн убырылай, ауыл балаларын йыйып, тере һайыҫҡан осороп ултыраһың шунда.

Ҡ а з ы й. Һинең ҡулдан килмәй шул, баш кәрәк бит уға, баш.

М а н с у р. Беләбеҙ беҙ һинең башты: аш тиһәң, башыңды ташҡа бәрергә тораһың, балаларҙың ҡайһы-һын-ҡайҙа ҡараҡлыҡҡа өйрәтеп бараһың.

Ҡ а з ы й. Ҡасан, кемде ҡараҡлыҡҡа өйрәттем?

Мансур. Бына был эҡиәттәрҙе бушҡа ғына һөйләйһеңме ни һин уларға, өйҙәренән ташып өлгөртһөндәр генә.

Ҡазый *(уға ташланып)*. Күрһәтермен мин һиңә, тамуҡ әтәсе!

Егеттәр арага төшәләр.

Шәкерттәр *(көйләйҙәр)*.

Саң-саң итеп салғы яный
Егет һыу буйҙарында...

Ҡазый *(уларҙың йырҙарын бүлеп)*.

Ғәли әйтур, йә Рәсүл, бән барайым,
Зөлфәҡар илә чиҡәрен ярайым.
Йә үлә бән, йә дейеү башын киҫәм,
Хаҡ ғинәйәт әйләр исә бән баҫам.

Их, әгәр ҙә мин хәҙрәте Ғәли кеүек көслө булһам, бер һелтәүҙә мең кафырҙы йәһәннәмгә ебәрер инем. Шуның кеүек көслө булаһы ине!

Мансур. Ғәли батырҙың һелтәп ебәргәндә оҙоная торған «Зөлфәҡар» тигән ҡылысы менән һуғышҡа менеп сыға торған, ел кеүек елә торған «Дөлдөл» исемле аты булған бит. Һин уларҙы ҡайҙан алаһың?

Ҡазый. Эй, уның кеүек көслө булһаң, ҡылысы табылыр ине әле. Булмай икән, Иҙел буйындағы берәй оҙон тирәкте, башынан тотоп, тамырҙары менән һурып алаһың да, шуны бер улай, бер былай һелтәп, кафырҙарҙы ҡыраһың да йөрөйһөң.

Мансур. Әгәр ҙә, Салсал кеүек, үҙеңде бер һуғыуҙа теге донъяға ебәрә торған көслө кафырға осраһаң, ни эшләрһең?

Ҡазый. Мин бит Ғәли батыр кеүек көслө булһам тим. Уның кеүек көслө булһам, күрһәтермен Салсалға! *(Күкрәгенә һуғып.)* Мин Ғәли батыр! *(Кулына таяҡ тотоп, һелтәнә башлай.)*

Мансур. Һин Ғәли батыр булһаң, мин Салсал!

Ҡазый. Ә мин Әбүбәкер Сиддик хәҙрәттәре!

Сәғит. Мин Салсал яҡлы!

Ҡазый. Мосолмандар, бында килегеҙ! Ана кафырҙар килә, кафырҙар килә!

Мансур. Бөтөрәм, ҡасығыҙ!

Ҡазый. Зөлфәҡар һуҙыла!

Һуғышалар, шау-шыу, илаш.

Һаҙый *(кереп)*. Хәҙрәт килә.

Шәкерттәр, шыбырлашып урындарына таралышалар. Сафи мулла инә.

Сафи мулла. Әссәләмәғәләйкүм!

Вотсһе лә. Вәғәләйкүмәссәләм!

Сафи мулла *(мендәр өҫтөнә ултырып)*. Я аллаһу... *(Шәкерттәрҙе барлап сығып.)* Сыбыҡ ҡайҙа?

Ҡазый. Бына, тәҡсир, рәхим ит!

Сафи мулла. Ҡазый! Ҡайҙа, килтер әле, бөгөн кемдәр намаҙға бармай ҡалды?

Ҡазый. Хәҙер, хәҙрәт. *(Исемлекте алып уҡый.)* Дөлдөл Мансур, аҡ керпек Һаҙый, төлкө Фәли, Басир...

Сафи мулла. Йә, төлкө, һөйлә, һин ниңә йәсту намаҙына барманың?

Фәли. Мин, мин... эштән бик арып ҡайттым да, самауыр ҡуйып ҡалдым, хәҙрәт.

Сафи мулла *(асыуланып)*. Ят, ахмаҡ... Һин һәр ваҡыт шулай, самауыр ҡуйыуҙы һылтау итеп, намаҙ ҡалдыраһың! Сәкмәнеңдә сисеп ят! Ә һин, оңҡот, ниңә барманың?

Мансур. Мин... мин...

Сафи мулла. Йә, телең ҡорономо әллә? Тиҙ яуап бир!

Мансур. Мин, хәҙрәт... эштән бик арып ҡайттым да...

Сафи мулла. Ят, хинзир! Әлеп ят. Һаҙый, яуап бир, ниңә өйлә намаҙында булманың?

Һаҙый. Мин, хәҙрәт, бөгөн мәҙрәсәлә киҙеү.

Сафи мулла. Ә, киҙеүме? Ят әле, ят, зиндиҡ. Кемдәр көлә, ә?

Шәкерттәр шырхылдап ҡуялар.

Ятығыҙ барығыҙ ҙа! *(Һуҡтыра.)* Икенсе рәт намаҙҙан ҡалмаҫһыңмы?

Фәли. Ҡалмам, ҡалмам, хәҙрәт!

Сафи мулла. Намаҙҙан ҡалмаҫһыңмы?

Мансур. Ҡалмам, хәҙрәт.

Сафи мулла. Ал ҡулыңды!

Ҡазый *(бер шәкерткә күрһәтеп)*. Хәҙрәт, бына тағы бераҙһе ҡалды.

Шул саҡ сәхнә артында тауыш ҡуба. Ишектән ҡулдарына күҫәктәр тоткан Ғәйфулла менән Ғәрәй килеп керә.

Сафи мулла. Ни бар унда? Ни булды? Эш бүлдереп, төн менән, ут сыҡҡан кеүек, нимәгә шаулашып йөрөйһөгөҙ?

Ғәйфулла *(ишеккә ҡарап).* Һеҙ уларҙы, ебәрмәй, шунда тотоп тороғоҙ әле! Хәҙрәт ни ҡушыр. Ҡулдан ысҡындырмағыҙ!

Сәйфулла *(тыштан).* Юҡ, юҡ! Хәҙер тиҙ генә ысҡына алмаҫтар инде!

Ғәйфулла. Һеҙ бигерәк тә Закирын ҡарағыҙ!

Сафи мулла. Йә, ни бар? Былай ҡарап яуап биреген!

Сәхнә артында Ғәлимәнең әрнеп илау тауышы, кемдеңдер: «Сеү, сеү, кәрәкмәй, сабыр итегеҙ, туҡмамағыҙ», — тигән тауышы ишетелә.

Сафи мулла *(тағы ла асыулана төшөп).* Йә, ни бар? Ниңә берегеҙ ҙә һөйләмәй? Ҡиәмәт ҡуптымы әллә?

Ғәйфулла. Хәҙрәт, эш ҙур!.. Боҙоҡтар аяҡ аҫтында яталар икән... Шуларҙы тотоп, һеҙҙән шәриғәт һорарға килдек!

Сафи мулла. Йә, ниндәй боҙоҡтар? Нәмә? Берәй кешенең малы таланғанмы? Тиҙерәк әйтегеҙ!

Ғәйфулла, Ғәрәй *(икеһе бергә).* Бына, Бәкер малайы Закир менән...

Сафи мулла. Улай икәүләп һөйләмәгеҙ, арағыҙҙан берегеҙ генә һөйләһен.

Ғәйфулла. Хәҙрәт, һөйләргә лә ауыр инде... Ана теге Бәкер малайы Закир менән Фәхри ҡыҙын тоттоҡ. Эш харап, хәҙрәт! Үҙең шәриғәт ҡушҡанды эшлә!

Сафи мулла. Кемдәр күргән? Шаһиттар бармы?

Ғәйфулла. Бар!.. Бар!.. Шаһиттар әҙер.

Сафи мулла. Гөнаһ эйәләре ҡайҙа һуң? Уларҙы бында алып инегеҙ!

Ғәйфулла *(ишеккә).* Ҡайҙа, бында алып инегеҙ үҙҙәрен!

Закир менән Ғәлимәне алып керәләр. Закирҙың бишмәте йыртылған, бүрке йәнселгән, битте ҡанға буялған.

Сафи мулла *(Ғәлимә менән Закирға асыулы ҡарап торғандан һуң).* Тфү, ҡара йөҙҙәр! Йә, кемдәр күргән? Кемдәр, шаһит булып, үҙҙәренең гыуаһлыҡтарын бирәләр? Шулар алғараҡ сыҡһындар әле!

Ғәйфулла. Башлап беҙ күрҙек, хәҙрәт, унан һуң Сәйфулла ағай менән Ғәбделхәй ағайҙар күрҙе... Шунан һуң башҡалар ҙа килделәр инде.

Сафи мулла. Һеҙ ҙә күрҙегеҙме? Ҡайҙа күрҙегеҙ?

Сәйфулла, Ғәбделхәй *(бергә).* Күрҙек, күрҙек, хәҙрәт!.. Келәт артында бер-береһенә яҡын уҡ ултыралар ине.

Ғәйфуллә *(бышылдап)*. Ҡосаҡлашып ултыралар ине тиегеҙ.

Сафи мулла. Юҡ, улай яҡын ултырыу ғына етмәй, шәриғәт ҡаршыһында заный менән заныяның ғонаһтарын дүрт кеше бергәм күргән булырға тейеш. Был бик ауыр мәсьәлә.

Ғәрәй. Хәҙрәт, күрҙек инде. Беҙгә һөйләргә генә оят. Улар һеҙ әйткәнсә торалар ине. Былар килгәндә ултыралар ине.

Ғәбделхәй. Шулай, хәҙрәт, беҙ уларҙы һеҙ әйткәнсә күрҙек.

Закир. Юҡ, хәҙрәт, ялған һөйләйҙәр! Улар үслек менән...

Ғәйфуллә. Тик тор һин, ҡара йөҙ!.. Бында килеп, оялмай, һүҙ һөйләгән булаһың тағы!

Сафи мулла. Сабыр итегеҙ, шауламағыҙ, шәриғәт хөкөмөн көтөгөҙ!

Ғәлимә. Эй хоҙайым, нахаҡ бәлә яғалар... Беҙҙең һис бер ғонаһыбыҙ юҡ!..

Ғәйфуллә. Юҡ икән... Тағы нәмә кәрәк?

Сәйфуллә. Шәриғәттә шулай ултырырға ярай икән?!

Ғәрәй. Күрәһең, ҡыҙҙарға шулай кәрәктер!

Ғәйфуллә. Бына шәриғәт нимә әйтер бит!

Сафи мулла. Сабыр итегеҙ, сабыр итегеҙ! Тауышланмағыҙ әле, йәмәғәт! Һәр нәмәнең...

Ишәү ағарып, күҙе аҡайған хәлдә Фәхри килеп инә.

Фәхри. Ҡайҙа улар? *(Ғәлимәне күреп.)* Һин, оятһыҙ, ҡарт көнөмдә аҡ һаҡалыма ҡара яҡтың! Бөтә ғәләм алдында рисуай иттең. *(Ғәлимәне тупмай башлай.)*

Закир *(алға ынтылып)*. Был ниндәй эш? Ниңә күрәләтә ҡыҙ баланы тупматаһығыҙ...

Ғәйфуллә. Тик тор һин.

Ғәрәй. Оятһыҙ!

Ғәбделхәй. Ата булғас, шулай итергә хаҡлы.

Сәйфуллә. Фәхри ҡарт шәриғәт буйынса шулай тупмарға тейеш.

Сафи мулла. Тотоғоҙ, етте, әле хөкөм бөтмәгән. *(Асыуланып.)* Фәхри, ултыр. Һин сабыр ит. Был зур эш. Был хаҡта шәриғәт хөкөмө бар. *(Шаһиттарға.)* Һеҙ дороҫ әйтәһегеҙҙер инде?

Ғәйфуллә. Хәҙрәт, беҙ күргәнде әйтәбеҙ. Беҙ уларҙы өйҙәренән алып сығып бында алып килмәнек инде. Бая әйткәнсә, келәт менән ҡойма араһында бергә торалар ине... Шуны үҙ күҙебеҙ менән күрҙек.

З а к и р. Хәҙрәт, ялған һөйләйҙәр!..

Ғ ә й ф у л л а. Тик тор, ауыҙ күтәреп һөйләп тора тағы!

Г ә р ә й. Күрҙек, хәҙрәт, күрҙек. Яр буйында... Эй, Фәхри ағайҙарҙың келәт артында бергә яҡын уҡ тороп һөйләшеп торалар ине.

Ғ ә л и м ә *(саҡ ишетелерлек итеп)*. Эй хоҙайым...

С а ф и м у л л а. Хуш... Гөнаһ итеүселәр йәш булһалар, уларға йөҙәр ҡамсы һуғырға, ҡарт булһалар — билдәренә тиклем ергә күмеп, ситтән таш менән бәреп үлтерергә ҡуша шәриғәт. Бәс шулай булғас...

Ғ и н и ә т *(журҡынып)*. Юҡ, юҡ, был балаларҙың ундай гөнаһтары юҡ.

Бер нисә кеше уны хуплай.

Ғ ә й ф у л л а. Һеҙҙеңсә, шулай нәмәхрәм менән аулаҡта, икәүҙән-икәү ҡалып ултырырға ярай икән?! Был ни тигән һүҙ?

С а ф и м у л л а. Ай алла. Һеҙ эштең асылын һорашып бөтөргә ирек бирмәйһегеҙ! Шәриғәт хөкөмөн йөрөтөү беҙҙең бурысыбыҙ. Боҙоҡлоҡҡа ҡаршы тороу өсөн, бындай эштәрҙе яҙаһыҙ ҡалдыра алмайбыҙ. Быныҡ өсөн фәтүә китаптарында сәрих дәлилдәр бар. Был дәрәжәлә ҡалған кешенең иманы зәғиф, тигән хәдис бар.

Ғ ә й ф у л л а. Шулай, хәҙрәт, дөрөҫ!

З а к и р. Беҙҙең ғәйебебеҙ юҡ. Ғәйепләргә хаҡығыҙ юҡ!

Ғ ә л и м ә. Бинахаҡҡа ғына харап итәләр бит...

Г ә р ә й. Оялмайынса, һөйләнеп торалар бит әле.

Ғ ә й ф у л л а. Әйттек бит инде, хәҙрәт, боҙоҡлоҡтарын үҙ күҙебеҙ менән күрҙек.

И б р а й. Юҡ, хәҙрәт, улар ярҙа һөйләшеп кенә торалар ине. Былар әйткәнсә түгел.

Ғ ә й ф у л л а. Һе, һинеңсә, шулай нәмәхрәм менән аулаҡта, төндә ултырырға яраймы? Был ни тигән һүҙ?

Г ә р ә й. Улай! Әллә тағы яҡлап маташырға уйлайһыңмы?

И б р а й. Дөрөҫ түгел. Ялған һөйләйҙәр...

Ғ ә й ф у л л а. Тик тор! Әллә үҙең башҡоҙа булдыңмы? Вәт нисек яҡлаша. Бар, сыҡ. Хәҙер сығып кит!

Ибрайҙы төрткөләп сығарып ебәрәләр. С т а р о с т а керә.

Ғ ә б д е л х ә й. Әйҙүк, староста. Бына ул да закон һүҙен әйтер.

Ғ ә й ф у л л а. Закон шәриғәт һүҙен тыңлаймы-юҡмы, белербеҙ бына.

Староста. Йә, нимә бар бында? Ниндәй тауыш?

Ғәйфуллә. Эш зур бында, староста. Бына ике оятһыҙ уйнаш итеп тотолдо.

Староста. Уйнаш итеп?! Ниндәй оятһыҙҙар улар?

Ғәйфуллә. Бына Фәхри ҡыҙы Ғәлимә менән Бәкер малайы Закир...

Староста. Эссәләмәғәләйкүм! Хәҙрәт, эштең асылын тикшерҙеңме?

Сафи мулла. Вәғәләйкүмәссәләм. Тикшерҙем, шаһиттар бар. Иртәгә был гөнаһ эйәләренә закон һәм шәриғәт хөкөмөн сығарырбыҙ.

Староста. Ярай. Һин, хәҙрәт, үҙең шәриғәт һүҙен әйт. Закон шәриғәт һүҙенән сыҡмаҫ. Мин ауылда бындай аҙғынлыҡтарға юл ҡуймам. Тфү, бәдбәхеттәр!

Финиәт. Йәмәғәт, сабыр итегеҙ әле. Һеҙ шәриғәт тә шәриғәт тиһегеҙ. Халыҡ ни әйтер бит әле. Халыҡ һүҙен тыңларға кәрәк.

Староста. Был ниндәй ҡарасҡы тағы ла? Халыҡ имеш, закон һәм шәриғәт һүҙенән үтеп, халыҡ ҡайҙа бара ала?

Финиәт. Шулайын шулай ҙа ул, староста. Бер ҙә гөнаһеҙгә балаларҙы былай мәсхәрә итеү...

Староста. Ярар, ярар. Сама белеп һөйлә. Телең башыңа бәлә килтермәһен. Хәҙрәт, әйт шәриғәт һүҙен!

Сафи мулла. Иртәгә шаһиттарҙан берәм-берәм яуап алырбыҙ. Һәм был оятһыҙҙарға тейешле язаны бирербеҙ. Хәҙер быларҙың икәүһен ике урынға бикләп, ҡарауыл ҡуйығыҙ.

Ғәйфуллә. Икәүһен ике ҡара мунсаға ябып, шунда ҡарауыл ҡуйырға кәрәк.

Финиәт. Һай, йәмәғәт, уйламай эш итәһегеҙ. Халыҡ быға риза булмаҫ. Һис юғында Ғәлимәне беҙҙең өйгә ҡуйып торайыҡ.

Фәхри *(Ғәлимә ҡаршыһына килеп)*. Минең йортома ҡайтып керәһе булма! Беҙҙең нәҫелдә булмаған эште эшләнең... Ҡарт көнөмдә хурлыҡҡа ҡалдырған кешегә минең өйөмдә урын булмаҫ! *(Сығып китә.)*

Ғәлимә. Атай, харап итмә! Нахаҡ бәлә яғалар...

Староста. Йә, ни тораһығыҙ? Алығыҙ үҙҙәрен! Икеһен ике ҡара мунсаға ябығыҙ!

Закир менән Ғәлимәне алып сығып китәләр. Шәкерттәр, тын да алмай, ҡурҡышып торалар.

Сафи мулла *(зур тынлыҡтан һуң)*. Аллаһы тәғәләнең бойорғонан баш тартҡан бәндәләргә донъялыҡта

яҡты көн булмаған кеүек, әхирәттә лә миңһырбан күрһәтелмәҫ. *(Сыға башлай.)*

Сәғит *(үҙенә, илап)*. Минең матур Фәлимә апайым ни эшләр инде?!

Сафи мулла *(ишетеп ҡалып)*. Ни эшләр? Ундай хәсистәр ыжғырып торған тамуҡта мәңге янасаҡтар! *(Асыулы сығып китә.)*

Шәкерттәр баштарын түбән эйеп, ҡурҡыулы рәүештә, һүҙһеҙ ултыралар. Сәғит илай.

Шаршау

Өсөнсө күренеш

Ауыл урамы. Ҡалҡыулыҡта мәсет, уң яҡта Фәхриҙәрҙең ҡапҡаһы һәм ай ҡыйығы күренеп тора. Ҡапҡаға дегет буялған. Ҡояш сығып килгән мәл. Сәхнә буш.

Бер аҙҙан, моңһум эште башҡарып йөрөгәндәй, Сәйфулла менән Фәбделхәй килеп инәләр.

Сәйфулла. Ауылдан бәрәкәт ҡасырып!

Фәбделхәй. Үҙҙәре хәҙер ни йөҙ менән торалар икән?

Сәйфулла. Эй, оятһыҙҙар!.. Ҡара йөҙҙәр!..

Фәбделхәй. Уның Закирына шунда ныграҡ бирергә кәрәк ине! Аҙ булған...

Фәхриҙең ҡапҡаһын ҡағалар.

Хәмиҙә *(тауышы)*. Я алла, ниңә ул тиклем шаҡыйһығыҙ? Хәҙер асам. Сеү тим, хәҙер... Кем бар? Ни йомош?

Сәйфулла. Фәхри ҡарт үҙе өйҙәлер бит? Фәлимәгеҙҙе Закир менән тоттолар! Берҙән-бер ҡыҙығыҙҙы ла ҡарамайһығыҙ, уйнаш итеп йөрөй. Ҡайҙа Фәхри? Тиҙ сығһын!

Хәмиҙә. Эй аллам, ни күрәһеләребеҙ бар икән? Хәҙер әйтәм. Сығыр.

Шул ваҡыт Сәғит инеп, быларға ҡурҡыулы ҡарап тора.

Фәбделхәй *(Сәғиттө күреп)*. Ана, Закирҙың ҡәйнеше лә килгән, езнәһе менән апаһын ҡаршы алырға килгәндер. Хи-хи-хи!..

Сәйфулла. Езнәһенең бәке биргәнен көтә торғандыр. Кейәү ингәндең иртәһенә ҡәйнешкә бәке бирәләр бит.

Ғәбделхәй. Бәке бирә торған ҽҙнәләр келәт артында булмайҙар улар, келәт эсендә, сымылдыҡ эсендә булалар.

Сәйфулла. Ҡайҙа, Сәғит, һөйәк һаплы бәке алдыңмы?

Мыҫҡыллы көләләр.

Сәғит. Хаҡығыҙ юҡ!.. Ғәлимә апайҙы мыҫҡыл итергә һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ!.. Уның һис ғәйебе юҡ! *(Илап ебәрә лә йүгереп сығып китә.)*

Ғәбделхәй менән Сәйфулла әшәке рәүештә көлөп ҡалалар.

Фәхри *(тауышы)*. Кем бар унда?

Сәйфулла. Беҙ. Ҡапҡаңды ас, Фәхри ағай!

Фәхри. Нимә кәрәк һеҙгә? Ни йомош?

Ғәбделхәй. Әйткәс, ас инде, әллә танымайһыңмы? Был мин — Ғәбделхәй. Сәйфулла менән һине алырға килдек.

Фәхриҙең ҡапҡа биген асып булашыуы ишетелә.

Фәхри *(сығып)*. Йә, ни бар? Нимәгә дулап йөрөйһөгөҙ таң менән?

Ғәбделхәй. Әйҙә, Фәхри ағай, һине ахун хәҙрәт саҡырта, унда һине көтөп торалар.

Фәхри *(ауырлыҡ менән)*. Унда минең ни кәрәгем бар? Минең эшем юҡ, ул бөгөндән алып минең ҡыҙым түгел. Теләһәләр нимә эшләтһендәр.

Сәйфулла. Унда беҙҙең эшебеҙ юҡ. Әллә хәҙрәт һүҙенә, шәриғәт бойороғона үҙең дә ҡаршы киләһеңме?

Тынлыҡ. Фәхри башын түбән эйә. Хәмиҙә илай.

Ғәбделхәй. Фәхри, тиҙерәк бул, ахун хәҙрәттәрҙе көттөрмә, һинән һорай торған һүҙҙәре барҙыр! Шәриғәт бойороғона ҡаршы тороп булмай бит!

Сәйфулла. Илсе кешегә үлем юҡ, Фәхри ағай. Беҙ ахун хәҙрәт ҡушҡанға килдек. Беҙҙең менән бармаһаң да, барыбер, икенсе кешеләр килеп, үҙеңде алып китерҙәр. Унда халыҡ бик ҡыҙған!

Ғәбделхәй менән Сәйфулла сығып китә. Фәхри ҡалтырана, меҫкен булып ҡала.

Хәмиҙә. Барып ҡайт инде, атаһы. Тәҡдирҙә шулай яҙғандыр. Тәҡдирҙә яҙғанды күрмәй булмай...

Фәхри *(ҡурҡынып, ҡыҙғала башлай)*. Мин ни йөҙөм менән халыҡ күҙенә күренәйем? Был мәсхәрәләрҙе лә

күрер көнөм бар икән! Ҡарт көндәремдә ата-баба күрмәгән хурлыҡҡа төштөм... *(Тегеләр артынан меҫкен рәүештә сығып китә.)*

Пауза. Икенсе яҡтан борсолоп Гимаҙи, Мәсрүрә һәм Сәғит килеп керәләр.

Гимаҙи. Сеү әле, балам, илама. Һуң кисә мәҙрәсәлә нәмәләр булды? Ғәлимә апайыңды күрҙеңме?

Сәғит. Көүҙәһен күрҙем дә йөҙөн күрмәнем. Ул һаман илап торҙо, үҙҙәренә нахаҡ бәлә яҡҡандарын әйтте.

Мәсрүрә. Ни генә булды икән был Ғәлимәгә? Бер ҙә ундай-бындай эше һиҙелгәне юҡ ине...

Гимаҙи. Нимә булһын? Уларҙың һөйләшеп тороуҙарын күреп, дошман егеттәр эште шулай ҙурға ебәргәндәр.

Мәсрүрә. Булмаһа ла, булды тип күрһәтәләр бит әле... Ғәлимә ни эшләр инде? Ул хәҙер ҡайҙа барыр?

Гимаҙи. Ҡайҙа барһын? Бына үҙебеҙгә алырбыҙ. Мин Ғәлимәне беләм, ул боҙоҡлоҡ эшләй торған бала түгел. Ғабдрахман байҙар ғына түгел, бөтә донъя һөйләһен — ышанмайым.

Сәғит *(шатланып)*. Шулай шул, атай, шулай итербеҙ!

Сыға башлайҙар.

Шәйхулла *(инеп)*. Һауғынамы, Гимаҙетдин! Арыу ғына йөрөйһөңмө?

Гимаҙи. Шөкөр әле, Шәйхулла ағай. *(Дегеткә буялған ҡапҡаға күрһәтеп.)* Бына тормоштоң йәме китеп тора бит әле. Ни төшһә лә беҙҙең кеүек кеше башына төшә.

Шәйхулла. Кешене тикшереүҙән элек, үҙ морон аҫтарын ҡарарға көрәк ине уларға. Ана Ғәйфуллалары, көн һайын иҫереп, әҙәм ҡуркытып йөрөй; муллаһы — ҡалаға китһә, фәхешхананан сыҡмай, старостаһына килһәң — тоже.

Гимаҙи. Ни эшләйһең бит, Шәйхулла ағай? Нисә әйтһәң дә, әлеге лә баяғы, закон улар ҡулында шул, закон.

Шәйхулла. Эй, Гимаҙетдин, закон тиһең һин. Ил бөлдөрөп, халыҡ талап яткан ул законға әйтер инем мин әйтеүен дә, ҡалып торһон инде...

Гимаҙи. Ярай, Шәйхулла, һөйләшербеҙ әле. Йәштәр яҙмышы күңелде бик борсой, шул тирәгә барып әйләнеп киләйем әле. Кереп ултыр, Шәйхулла ағай.

Шәйхулла. Бында тауыш күтәрерлек бер ни дә юк. Юкка ажгырып йөрәйзәр.

Гимази. Шулай да бит... *(Сыгалар.)*

Гилми һәм тагы ла бер нисә карсык керә.

Гилми. Сибәрлек менән дан сыгарган кыз шулай була ул!

Беренсе карсык. Үзен әре тота ине...

Гилми *(дегеткә буялган капкага ымлап)*. Бына уйнашсы Гәлимә йорто.

Икенсе карсык. Илаһым, үзең тәүфик бир!

Беренсе карсык. Балаң шулай йөз каралыгы килтерһә, ни эшләр инең? Тәүбә, әстәгфирулла!

Гилми. Ауылдан бәрәкәт касырып, зина кылалар бит, хозайзың ете кәһәре һуккырзары!

Икенсе карсык. Алланан нисек куркмайзар, әзәмдән нисек оялмайзар?

Беренсе карсык. Алланан куркмаһалар, бәндәләрзән оялырга кәрәк ине.

Гилми. Алланың бәддоғаһы төшһөн, илаһым-хозайым. Кул-аяктары корошһон, мәлгүндәрзең!..

Шәйхулла. Ай-һай, бик тәүфиклы булып киткәнһегеҙ, карсыктар. Һин үзең дә бит, Гилми карсык, әлхәмделилләһи шөкөр, алты иргә еткән катын. Тамук киҫәүҙәре һымак, гәйбәт һатып ултырган булаһыгыз тагы ла, асыуым да килмәгәйе.

Гилми. Тәүбә-тәүбә. Тәүбә, әстәгфирулла...

Беренсе карсык. Атак-атак, был кем? Йүнһеҙ, мөртәт Шәйхулла түгелме һуң?

Икенсе карсык. Шул, шул үзе. Карт башы менән шул тәүфикһыҙзарзы яклап тора.

Гилми. Бәддоға төшкөрө. Теле короһон, илаһым-хозайым...

Шәйхулла. Эй, сихыр тубалдары!

Халык йыйыла башлай.

Гиниәт. Ни бар, ниндәй йыйын? Ниндәй дау күтәреп йөрәйзәр тагы ла?

Берәү. Юк нимә куҙгаталар...

Шәйхулла. Үткән йыл ат каракгарын тоттолар, уларзы ла был көнгә төшөрмәгән инеләр. Гәйепһеҙ ике йән баланы шулай хур итеү килешәме? Йә, был хак эшме инде?

Гиниәт. Фауға күтәрерлек бер нәмә лә юк бында.

Берәү. Әйтеп торам да баһа, ерле юк нәмә кузғаталар.

Фәбделхәй. Һе, һеҙҙеңсә, шәриғәткә һыймай торған эште эшләп йөрөү ярай икән?

Сәйфулла. Күрәһең, улар өсөн ярай торғандыр.

Финиәт. Кыҙ менән егет һөйләшеп торғандан ни булған?

Шәйхулла. Йә инде, йә инде, бер ҙә ғәйепһеҙгә харап итәләр бит балаларҙы.

Икенсе берәү. Килешә торған эш түгел был, хәҙрәт менән нығлап һөйләшеп карарға кәрәк.

Берәү. Хәҙрәт тиһең һин, закон бар бит әле. Старостаға әйтергә кәрәк, ни карай, порядкә һалаһын.

Сәйфулла. Ана, егетте алып киләләр!

Халық кузғала. Фәйфулла, Гәрәй һәм тағы ла бер нисә кеше Закирҙы алып инәләр. Уның башы түбән эйелгән.

Беренсе катын. Эй хоҙайым, ниңә шулай бәғерһеҙ кыланалар инде?

Икенсе катын. Танырлык та түгел, эштән сығарғандар бит баланы.

Гәрәй. Бына шәп егет, никахһыҙ-туйһыҙ кыҙ алған!

Фәйфулла. Туй менән булғас, акса сыға бит, ә былай анһат! Шәберәк атла, кисә бик шәп инең бит.

Гәрәй. Малайҙың бөгөн кикриге төшкән! Хи-хи...

Фәбделхәй *(икенсе якка карап)*. Ана тегеһен дә алып сыктылар!

Халық араһында тынысһыҙлык. Фәлимәне алып инәләр, уның йөҙө шәл менән капланған.

Сәйфулла. Бына үҙе!

Гилми. Бөгөн оялған була бит әле. Ер бит!

Беренсе карсык. Ауылдың бәрәкәтен касырып йөрөүселәр!

Икенсе карсык. Кыҙ башы менән ни эшләп йөрөй!

Фәбделхәй. Һылыу кыҙ шулай була ул!..

Башы түбән эйелгән Фәхри сәк атлап, сәхнәгә килеп инә. Халыкты һәм Фәлимәне күреп, тертләп туктай. Фәлимә каршыһына килеп, уға карап тора ла, Фәлимәгә һүтып ебәрә, йөҙөнә төкөрә.

Фәхри. Бынан һуң минең йортома кайтып инәһе, ишек алдыма аяк баҫаһы булма! Теләһең кайҙа юғал! *(Капкаһынан инеп, шалдыр-шолдор йоҙак һала.)*

Фәбделхәй. Юл бирегеҙ! Хөкөм сыға.

Халық шымып кала. Сафи мулла, староста, мәзин һәм хәлфәләр сығалар.

Староста. Йәмәғәт! Тынлыҡ! Беҙ, закон һәм шәриғәт хөкөмө буйынса, был оятһыҙҙарға тейешле язаны сығарҙыҡ. Хәҙер хәҙрәт бөтәһен дә бәйнә-бәйнә һөйләп бирер. Тауышланмай ғына тыңлағыҙ!

Сафи мулла *(алғараҡ сығып)*. Йәмәғәт! Был ике ҡара йөҙ зина ҡылып тотолдо. Бәс, шулай булғас, беҙ уларҙы шәриғәт ҡанундары әсәсендә ҡаты язаларға тейешбеҙ. Шулай итмәгәндә, аллаһы тәбәрәкә вә тәғалә беҙҙең өҫтән рәхмәтен һәм бәрәкәтен аласаҡ. Был мәлғүндәрҙе шул көйө ҡалдырһаҡ, ерҙәребеҙгә ҡоролоҡ, терлек-малдарыбыҙға үләт ебәрәсәк.

Карсыҡтар. Илаһым-хоҙайым, рәхмәтеңдән ташлама.

Сафи мулла *(тауышын күтәрә төшөп)*. Бинаән ғәләйһи, беҙ был гөнаһ эйәләренә ҡаты яза бирергә тейешбеҙ.

Бер төркөм. Дөрөҫ, хәҙрәт, хаҡ һүҙ!

Сафи мулла. Беҙҙең хөкөм шул: хәҙер һәр икеһен бергә бәйләп, йөҙҙәренә ҡара ягып, муйындарына биҙрәләр, иҫке сабаталар тағып, бөтә ғәләм алдында рисуай итеп йөрөтөгөҙ!

Бер ҡыҙ ҡуркыуҙан ҡысҡырып ебәрә. Халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ.

Фәлимә *(тетрәп)*. А-а...

Закир. Хаҡығыҙ юҡ! Агайҙар, ярҙам итегеҙ!! Һис ғәйепһеҙгә ялған бәлә тағалар бит...

Сафи мулла *(ҡоторонып)*. Алығыҙ үҙҙәрен, башҡаларға ғибрәт булыр!

Шәйхулла. Хәҙрәт, сабыр итегеҙ! Ғәйепһеҙгә балаларҙың баштарын һәләк итергә ярамай, уйлашырға кәрәк.

Гиниәт. Дөрөҫ, бындай эш килешеп бөтмәй. Уйлап эш итергә кәрәк!

Староста. Кемдәр шаулаша унда?

Шәйхулла. Халыҡ шаулай! Халыҡ гөнаһһыҙ балаларҙы былай мәсхәрә итеүгә риза түгел.

Икенсе берәү. Дөрөҫ, ярай торған эш түгел был.

Староста. Һе, улай икән, әле яҡлашып маташаһығыҙмы? Һай, нишаналар! Былай булһа мин һеҙҙең менән башҡаса һөйләшә башлармын.

Гиниәт. Улай итергә хаҡығыҙ юҡ!

Староста *(аҡырып)*. Күрһәтермен мин һеҙгә хаҡты! Шәйхулла, ҡара, халыҡ болартып йөрөмә! *(Ғәйфуллаларға.)* Алығыҙ үҙҙәрен! *(Сығып китә.)*

Ғәйфуллә. Егеттәр! Икеһенең ҡулдарын ҡуша бәйләгеҙ! Ҡайҙа, иҫке сабаталар тағығыҙ! Биттәренә ҡара яғайыҡ.

Закир менән Ғәлимәне ҡушлап бәйләйҙәр.

Закир. Был ни эш, ағайҙар, ниңә юл ҡуяһығыҙ? Һис ғәйебебеҙ юҡ!

Халыҡ ҡыҙғалырға ла итеп ҡуя, ләкин ҡыя алмай, тағы туҡталып ҡала.

Ғәйфуллә. Һөйләнмә, әйҙә, зимагор! Алығыҙ, егеттәр, киттек!

Закир. Ҡағылмағыҙ, хәшәрәттәр! Ну, Ғәйфулла, ҡара уны, был ҡәбәхәтлегең бушҡа ҙтмәҫ!

Ғәйфуллә. Ә, шулаймы? Ҙтмәҫме? *(Тибеп.)* Әйҙә, атла, атла!

Гәрәй *(Закирҙарҙы һөйрәп).* Әйҙә, атлағыҙ, ил коротҡостар!

Фиҙиәт. Улай аҡылһыҙланмағыҙ, йәмәғәт! Килешә торған эш түгел!

Ғәйфуллә. Шаулама, ҡарт! Беҙ изге эш — шәригәт хөкөмөн ҙтәйбеҙ!

Закир менән Ғәлимәне алып сығып китәләр.

Шәйхуллә. Был ни эш? Ниңә саф күңелле балаларҙың йөҙөн ҡарайталар? Был ниндәй законһыҙлыҡ?

Тауыштар. Дөрөҫ, законға һыя торған эш түгел.

Бер кеше. Өйәҙгә прашение яҙырға кәрәк. Кактак?

Староста *(кереп).* Ҡарттар, яҡшыға әйтәм, шауламағыҙ! Бында закондан ҙтеп бер ни ҙә эшләнмәй.

Шәйхуллә. Ә хәҙрәткә, биш ҡатын алып, өйөндә фәхешхана ҡороп ятырға ярай? Старостаға тол ҡатындарҙы ҡурҡытып алдарға ярай? Ә беҙҙең балаларға һөйләшеп торорға ла ярамай икән! Бына һиңә шәригәт, бына һиңә закон! *(Сығып китә.)*

Староста. Шәйхулла! Мин һинең башыңды каторгала серетермен! Йәмәғәт, закон ҙтеп, дау сығарып йөрөй торған булһағыҙ...

Фиҙиәт. Ҡарттар, ҡайтышҡанда ла ярай!..

Халыҡ, старостанан риза булмаған хәлдә, Фиҙиәт артынан сығып, таралышып бөтә.

Староста. Йәмәғәт, тим, йәмәғәт!.. *(Сыға.)*

Сәхнә артында бизрә, батмус ҡаҡҡан тауыштар ишетелә. Бер аҙҙан Ғәйфуллалар төркөмө Закир менән Ғәлимәне һөйрәп алып инәләр. Уларҙың биттәренә ҡором яҡҡандар. Иңдәренә иҫке сабаталар, бизрәләр аҫҡандар.

Ғәйфуллла. Ҡарағыҙ был ҡара йөҙҙәргә, ғибрәт алығыҙ!

Ғилми. Ил ҡоротҡостар!

Ғорәй. Шәриғәт тапаусылар!

Ғәйфуллла. Уйнашсылар.

Закир. Ебәрегеҙ, йыртҡыстар! Был ниндәй эш?

Ғәйфуллла. Ҡысҡырма, иманһыҙ! Ә быныһын ҡара, нисек ҡыйшанлаған була! Әйҙәгеҙ, тағы берәй урам өйләндерәйек үҙҙәрен!

Алып сыға башлайҙар, шул ваҡыт Шәйхуллла менән Ғимаҙиҙар атылып килеп инәләр.

Шәйхуллла. Был ни эш?! Һеҙ ни эшләйһегеҙ, эттәр? Ебәрегеҙ балаларҙы! Хәҙер үк ебәрегеҙ!

Ғәйфуллла. Шәйхулла ҡарт! Ҡара! Беҙ шәриғәт ҡушҡанды эшләйбеҙ!

Шәйхуллла. Ә, шәриғәтме? Шәриғәт шулай ҡушамы? *(Кулындағы арба кендеген күтәрә башлай.)*

Бөтәһе ҡасып сығып бөтәләр. Закир менән Ғәлимә эсенә йығылалар.

Мәсрүрә. Балаларым! *(Үкһеп, Ғәлимә менән Закир өҫтөнә ташлана.)*

Шәйхуллла *(Ғәйфуллалар киткән яҡҡа йоҙроҡ күрһәтеп).* Йыртҡыстар!

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Дүртенсе күренеш

Ғимаҙи өйө. Ваҡыт кис. Ғәлимә һандыҡ өҫтөндә, шәле менән йөҙөн ҡаплап, илап ултыра. Мәсрүрә сәй урыны әҙерләп йөрөй. Ғимаҙи ҡайҙалыр сығырға йыйына.

Мәсрүрә. Илама инде, Ғәлимә, хәҙер һин беҙҙең өйҙә бит.

Ғимаҙи. Ғәлимә, борсолма. Һин беҙҙең үҙ балабыҙ кеүек бит. Үҙ өйөңдәге кеүек бул. Үҙеңде юҡҡа борсома... Мин малдарҙы ҡарап керәйем. Һеҙ сәйгә ултыра торогоҙ. Мин оҙаҡламам. *(Сығып китә.)*

Мәсрүрә. Борсолма, Ғәлимә туғаным. Һинең борсолоуың беҙгә лә бик ауыр. Үҙҙәренең йөҙҙәре ҡара бул-

һын, кешеләрҙе бинахаҡҡа рәнйеткән өсөн, үҙҙәре бер көн хур булһындар.

Сәғит инә. Уны күреп, Фәлимә йөҙөн ҡаплай.

Сәғит *(үҙенә)*. Минән дә уңайһыҙлана!.. Әйтерһең дә, мин уны ғәйепләйем...

Мәсрүрә. Кил, Фәлимә, ултыр, сәй эсәйек.

Фәлимә. Юҡ, кәрәкмәй, эскем килмәй, еңгә.

Мәсрүрә. Улай итмә, Фәлимә, кисәнән бирле тамағыңа бер ни ҡапҡаның юҡ бит.

Сәғит. Әйҙә инде, Фәлимә апай. Һин бер ҙә ҡурҡма, Фәлимә апай. Үҫкәс, мин уларҙың кәрәктәрен бирермен әле!

Мәсрүрә. Һин артыҡ борсолғанһың. Бына хәҙер ҡарағат ҡағы ҡайнатып эсерермен, тирләһәң арыу булыр. Башыңдың ауыртыуы ла бөтөр. *(Сыға.)*

Сәғит *(уңайһыҙ тынлыҡтан һуң)*. Башың ауыртамы, Фәлимә апай?

Фәлимә. Ауырта шул... Мин үлермен инде, Сәғит туғаным...

Сәғит *(ҡурҡып)*. Фәлимә апай, үлергә яраймы ни? Һин бер ҙә ҡайғырма! Һине яратыусылар ҙа, һинең ғәйепһеҙ икәненде аңлаусылар ҙа бар бит. Мин дә, атайым да, әсәйем дә, Шәйхулла бабай ҙа — тағы бик күп кешеләр һине яраталар, һинең ғәйепһеҙ икәненде беләләр...

Фәлимә. Әле миңә донъяла торорға яраймы ни? Әле мине кешегә һанаусылар ҙа бармы ни?

Сәғит. Эйе шул, һин бер ҙә илама. *(Күҙ йәштәрен һөртә.)* Ҡайғырма һин, Фәлимә апаҡайым! *(Илай.)*

Фәлимә. Һин бала ғына шул әле, Сәғит, һин аңламайһың. Мине бөтөнләй һәләк иттеләр шул инде хәҙер. Әгәр ҙә бөтә кешеләр ҙә, һин аңлағанса, һәйбәт күңелле булһалар, бик яҡшы булыр ине лә бит... Юҡ шул, ауыл — Сафи мулла, Ғабдрахман байҙар ҡулында. Ни теләһәләр, шуны эшләйҙәр.

Сәғит. Эй, Фәлимә апай, ишеттең бит, кисә халыҡ ҡайһылай шауланы. Бөтә ауыл шулай торһа, хәҙрәт бабайҙар ғына бер ни ҙә эшләй алмаҫтар.

Фәлимә. Белмәйем шул, Сәғит туғаным. Был хурлыҡтарҙы күтәрә алмам... Ҡайҙан алайым мин ул көстө? Бынан һуң Закирҙы ла күрә алмам инде...

Сәғит. Улай итмә, Фәлимә апай. Бер ни булмаҫ. Бына икегеҙ ҙә бәхетле булырһығыҙ.

Фәлимә. Беҙ бәхетле — шат йәшәргә теләй инек тә бит, күрәһең, тормош беҙ тигәнсә түгел. *(Сәғиттә күкрә-*

ғәнә ҡысып.) Юҡ, ғөлкәйем, мине харап иттеләр шул инде!

Мәсрүрә менән Хәмиҙә инәләр. Ғәлимә, әсәһен күреп, һиҫкәнеп китә лә яулығы менән битен ҡаплай. Хәмиҙә, күҙен алмай, уға ҡарап тора.

Мәсрүрә. Әйҙә, килендәш, түрҙән уҙ.

Хәмиҙә. Эй балам, балам! Һиңә ни булды? Беҙҙе лә хурлыҡҡа төшөрҙөң, үҙең дә һәләк булдың. Бөтә бәхетеңде юғалттың... *(Илай.)*

Ғәлимә. Мин ғөнаһлы түгел, әсәй. Хоҙай хаҡы өсөн шуға ышан!

Мәсрүрә. Хәмиҙә килендәш, һин сабыр ит, Ғәлимәгә һүҙ әйтмә! Ул ғәйепһеҙ. Уны былай ҙа етерлек рәнйеттеләр инде, һиңә шуны аңларға ваҡыт.

Хәмиҙә. Белмәнем шул мин, белмәнем! Атаһы ике көндән бирле ҡолаҡ итемде ашап бара. «Һин ни ҡарап торҙоң? Ниңә күҙ-ҡолаҡ булманың?», — ти. Әйтмәгән һүҙҙәрҙе ҡалдырманы. Хәҙрәт тә: «Ҡыҙыңды өйөңә аяҡ баҫтыраһы булма, фатихам юҡ»,— тип бик ҡаты иҫкәртеп ҡуйған. Үҙ башына төшмәгән кеше белмәй шул. Бигерәк ауыр эш бит. Ул кисәге урам хурлыҡтарына кем сыҙар?!

Мәсрүрә. Фәхри ҡайнағаға ла сабыр итергә кәрәк ине инде. Ир кеше бигерәк түҙем булырға тейеш ине. Һин дә уға сабыр итергә ҡушыр инең.

Хәмиҙә. Ул бик ғәрсел кеше бит, минең һүҙҙе түгел, әллә кемдең дә һүҙен тыңламаҫ. *(Ғәлимәгә ҡарап.)* Белмәйем инде, баш етмәй, баш. Уйламаған хәсрәттәргә килеп төштөк, күрәһебеҙ барҙыр инде. *(Ғәлимә янына килеп, арҡаһынан ҡаға.)* Ни эшләнең һин, балам? Башың ауыртамы ни? Ауыртыр шул, ауыртыр. Харап булдың шул, балам.

Ғәлимә илай, Фимаҙи инә.

Фимаҙи. Тағы ниндәй хәсрәттәрҙе яңыртып ултыраһығыҙ? *(Күҙе менән Ғәлимәгә ымлап.)* Шуны уйлап, бер аҙ аҡылға килергә ваҡыт ине. Себер китерлек эш түгел, әҙәм ултергән кеше юҡ та баһа? Үҙебеҙҙе лә, башҡа кешене лә бөтөрөргә ярамай. Әле мин Фиҙиәт ҡарт менән һөйләшеп торҙом. — «Юҡҡа харап иттеләр», — ти. Нахаҡ бәлә икәнен бөтә халыҡ аңлай.

Хәмиҙә. Белмәйем инде, белмәйем. Һис юҡҡа харап иттеләр шул баламды.

Фимаҙи. Ғәлимә бөтә ауылда бер ҡыҙ ул. Уны күрә алмайҙар, шуға күрә лә ғәйеп эҙләйҙәр.

Фәхри *(аңарған, күзе аҡайған хәлдә атылып кереп, Хәмиҙәгә).* Инеп тә өлгөрҙөңмө ни әле һин, ҡәһәр һуҡҡан нәмә?! Тиҙ сыҡ, башыңды һуғып ярырмын! Мин һиңә: «Уның янына инеп, уның ҡара йөҙөн күреп йөрәйһө булма, минән мәңге бәхиллек юҡ!» — тип әйттем бит.

Ғәлимә. Атай, мин ғәйепле түгел!.. Нахаҡҡа харап итмәгеҙ! Уф, ҡайҙа ғына барайым?!

Фәхри. Тауышыңды сығарма, динеңдән яҙған нәмә, һуғып үлтерермен! *(Өҫтөнә килә.)*

Гимаҙи *(араға инеп).* Ағай, ни эшләйһең һин? Баланды һәләк итәһең бит! Ай ағай, ағай. Бер аҙ уйлап ҡара, ул тиклем ҡыланырға ҡиәмәт булмаған да баһа. Сабыр ит, һөйләшеп, төшөнөп алайыҡ.

Хәмиҙә. Һиңә әйтәм, атаһы, үҙ балабыҙҙы һәләк итмәйек.

Фәхри. Һин, Гимаҙи, минең эшемә ҡатышма! Ҡара йөҙҙө яҡлап, йәнең сыҡмаһын! Үҙ башыңа төшмәгәс, яҡшы булып киткәнһең икән! *(Хәмиҙәгә.)* Үҙ балабыҙ, имеш. Ниндәй үҙ балаң ул? Йөҙөңдән көлөп, бөтә илгә мәсхәрә булған нәмә! Сыҡ тимен, хәҙер сыҡ; ана, ҡараусылары бар бит, шулар ҡараҙҙар!.. Ул инде беҙҙең бала түгел, беҙгә бәлә генә булды.

Гимаҙи. Аҡылыңа кил, тим, ағай. Һин бала түгел! Был ҡылығың менән һин Ғәлимәне үҙе йырып сыға алмаҫлыҡ һаҙға батыраһың!

Фәхри. Сәсрәп китһен, беҙ көслəп һәләк итмәгән, үҙе тапҡан, үҙе эҙләп алған ауырыу. Ниңә бөгөн ер йотмай шунда! *(Ғәлимәгә.)* Илап торған була бит әле. Хоҙайҙың ҡәһәре хәҙер үк һуҡҡандыр шул!.. Илаһым, шул ятҡан ереңдә ҡат! Тик минең тупһама аяҡ баҫаһы, минең күҙемә күренәһе булма, һуғып үлтерермен! *(Дулап сығып китә.)*

Хәмиҙә. Бына был кеше менән ни эшләргә инде? Өйгә ҡайтып инеү ҡурҡыныс. Тереләй ер аҫтына керерлек булдым инде. *(Сыға.)*

Мәсрүрә. Сабыр итергә кәрәк. Бара торғас һыуынып әле, ни эшләйһең бит?

Гимаҙи. Былар менән ни эшләргә инде? Әйткәнде һис тыңламайҙар. Муллалар һүҙенә ҡарап, харап итәләр бит баланы.

Мәсрүрә. Үҙ ҡыҙҙарын үҙҙәре башҡа кешеләргә ҡарағанда ла дошман күрәләр. Бер кеше лә һөттән аҡ, һыуҙан паҡ түгел, тик бына Ғәлимәгә генә ауырлыҡ яһайҙар... *(Гимаҙи менән сығалар.)*

Ғәлимә *(тәҙрә эргәһенә килә лә, башын быялағa һалып, йырлай.)*

Аҡиҙелкәй буйлап бер һал йөҙә,
Ярҡайҙарға бәрелә тулҡыны.
Йәшлек ғүмеремде йотармы ни
Ҡараңғы ла тормош упҡыны?

Ай нурҙары кеүек балҡый ине,
Кеүһеҙ ине минең йөҙҙәрем.
Уҫал кешеләр уны ҡарайттылар,
Ҡанлы йәштәр баҫты күҙҙәрем.

Гимаҙи менән Мәсрүрә. инеп, шым ғына Ғәлимәнең йырлауын тыңлап торалар.

Мәсрүрә *(Ғәлимә эргәһенә килеп, йомшаҡ ҡына).* Ят инде, туғаным! Тыныслан.

Ғәлимә. Уф еңгә, йөрәгемә сыҙай алмайым шул... Башым да, йөрәгем дә ут булып яна...

Мәсрүрә. Яналыр шул, был тиклем ҡыланыуҙарына... Уранып ҡына ятыр инең, Ғәлимә!

Гимаҙи. Артыҡ борсолма, Ғәлимә, үҙеңә генә ауыр итәһең.

Сәғит *(йәшен саҡ тыйып).* Их, уның күңелендәге бөтә ҡайғыларын алып ташлап, кисәге шат ваҡытына ҡайтараһы ине!

Мәсрүрә лампаны ҡыҫа. Тынлыҡ. Ҡапыл тәҙрә янында ғармунға ҡушылып йырлай башлайҙар.

Йыр.

Фәхри бабай һалған келәт,
Аҙбарҙарына терәп.
Келәт артына Ғәлимә
Үҙе сығҡандыр теләп.

Ғәлимәнең шәлендә
Бармы икән аҡ ере?
Ғәлимәгә ҡуна барған
Түбән остоң Закиры.

Ғәлимә, битең ниңә яптың,
Ниңә ҡаралар яҡтың?
Йөҙөң ҡара булмаҫ ине —
Закир менән ник яттың?

Фәлимә еләк йыйған саҡта
Сулпылары сылтырай.
Закир менән йөрөгәндә
Ҡуркыуынан ҡалтырай.

Беҙҙең ауыл — ҙур ауыл,
Булып тора ел-дауыл.
Төндә егет менән ятһаң,
Ана шулай була ул.

Фәлимә ни эшләргә белмәй, үкһеп илай башлай.

Фәлимә. Уф, үләм инде!..

Мәсрүрә. Сеү, Фәлимә, ярһыма, сабыр ит. Язаларын күрмәй ҡалмаҫтар әле ул ҡәбәхәттәр.

Фәлимә. Юҡ, мин артыҡ йәшәй алмайым. Мин китәм...

Мәсрүрә *(ағарып китеп)*. Юҡты һөйләмә, тыныслан, туғаным...

Сәғит. Тыныслан, Фәлимә апай. Хәҙер мин уларҙы!..

Гимаҙи *(нигереп тороп, кыҙып)*. Мин уларҙың был эштәренә сыҙап тора алмайым. Сығам да берәйһен балта менән сабып үлтерәм! *(Йыйына башлай.)*

Мәсрүрә *(ҡурҡып)*. Зинһар, тим, сыға күрмә, үҙеңде бәреп үлтереп ташларҙар... Эттәр өрөрҙәр-өрөрҙәр ҙә китерҙәр. Ҡыҙма, тыныслан.

Сәғит. Атай, сыҡма инде, йырлап бөттөләр, киттеләр... *(Фәлимәнең ҡулынан тотоп.)* Илама, апай, борсолма, улар киттеләр инде.

Йыр тауышы алыҫлаша.

Гимаҙи. Үҙҙәренең йөҙҙәре ҡара булһын.

Мәсрүрә. Дошман ауыҙын томалап булмаҫ. Фәлимә, ят әйҙә, тыныслан, киттеләр. Сәғит, һин дә ят, йоҡла.

Яталар. Фәлимә лә ята. Тынлыҡ.

Сәғит *(атаһына бышылдап)*. Фәйфулла, ҡуштан Гәрәй, тағы әллә кемдәр йырлайҙар. Мәзин Әхтәретдине гармун тарта.

Гимаҙи. Шулар булмай, кем булһын? Үҙ баштарына шашалар улар.

Сәғит. Атай, Закир ағайҙы ла бик ныҡ туҡмағандар икән, башы зарарланған, унан күкрәген изгәндәр.

Гимаҙи. Эттәр. Үҙҙәрен ватырға ине лә ул хәшәрәттәрҙең, кешеһе юғыраҡ, кешеһе.

Сәғит. Ниңә улай һуң ул, атай?

Гимаҙи. Нимә?

Сәғит. Тормош ниңә былай? Кешеләр бер-береһе менән һөйләшеп торған өсөн ошондай ауыр язаларға тарыталар?

Гимаҙи *(ни әйтергә белмәй торғандан һуң)*. Ят, балам, йоҡла. Уны аңлау иртәрәк әле һиңә.

Сәғит. Шул-шул бына, һораһаң, әйтмәйҙәр...

Гимаҙи. Йоҡла, тим мин һиңә.

Сәғит. Атай, атай, хәҙрәт бабай ниңә Ғәлимә апай менән Закир ағайҙың биттәренә ҡара яҡтырҙы?

Гимаҙи. Йоҡла. Уны аңлау иртәрәк әле һиңә.

Сәғит. Шул-шул бына. Һораһаң, әйтмәйҙәр...

Гимаҙи *(паузанан һуң)*. Алдағы көҙҙән ҡала мәктәбенә урыҫса уҡырға барырһың. Бер файҙалы кеше булып сығырһың. Тырышһаҡ, көс етер әле.

Сәғит *(шатланып)*. Шулай шул, атай. Бик яҡшы булыр ине! Ул сағында мин...

Мәсрүрә. Йоҡлағыҙ инде, йоҡлағыҙ, тынғыһыҙҙар.

Тынлыҡ.

Ғәлимә *(һаташып)*. Кит, кит, кәрәкмәй! Ни тип йырлайҙар бит... Атайым асыуланды шул. Юҡ, мин үлһәм дә өйгә инмәйем... Эй алла, мине ни эшләттеләр? Минең биттәрем ағармаҫ инде... Закирҙы ултерәләр бит!..

Мәсрүрә. Ғәлимә туғаным, һаташаһың, тороп ултыр, уҡынып ят, туғаным. *(Үҙ-үҙенә.)* Кисәнән бирле булған эштәрҙән ҡурҡып ҡалған шул, бахырҡай...

Ғәлимә. Ана, үлтерергә киләләр!..

Мәсрүрә. Туғаным, Ғәлимә, уян әле, һаташаһың.

Ғәлимә күҙҙәрен асып ебәрә лә, аптырап, оҙаҡ һүҙһеҙ ҡарап тора.

Гимаҙи. Ғәлимә, тынысһыҙ йоҡланың ахыры?..

Мәсрүрә. Уҡынып ят, бер ни ҙә булмаҫ, ҡурҡма, һин беҙҙә бит.

Ғәлимә *(тынлыҡтан һуң тәрән итеп тын алып, йылмайып, ҙур өмөт менән)*. Ҡурҡтым шул. Мин һаташтым ғынамы ни? Былар барыһы ла төш кенәме әллә?!

Шаршау

Шул үк сәхнә. Мәсрүрә бешеренеп йөрөй. Фәлимә, башын бәйләп, уның өстөнә шәлен һалған. Түр һикелә Гилми ҡарсыҡ ултыра. Сәғит.

Гилми. Мәсрүрә килен, Фәлимәне өшкөрмәгәндә, ауырыуы бик көсәйеп, кешелектән сығыуы, аҡылдан яҙыуы, енләнеүе мөмкин, әлғәйәзе биллаһи... Урам буйлап, яман һүҙҙәр ҡысҡырып, бала-сағаларҙы ҡурҡытып тик йөрөр.

Мәсрүрә. Ундай көндәрҙе күргә яҙмаһын инде, хоҙайым.

Гилми. Хоҙайҙыҡын белеп булмай шул. Бына өсөнсө йыл, Ибәтулла ишандың аҫрау ҡыҙы енләнгәйне. Ул да шулай тирә-яҡта матурлығы менән дан алған ҡыҙ ине. Уйнаш итеп бала тапты. «Балам ишан хәҙрәттән»,— тип һөйләп йөрөгән. Шунан һуң ишан хәҙрәт: «Мине рисуай итә», — тип уға бәддоға уҡыған. Шунан теге ҡыҙ, енләнеп, ата-әсәһен дә танымай башлаған. Бер көн килеп, балаһын быуып үлтергән...

Фәлимә *(һиҫкәнеп)*. Аһ!.. *(Йөрәген тота.)*

Гилми. Шунан, ишан хәҙрәттең миһырбаны килеп, ҡыҙҙы ғәфү иткән. Аҡ мунсаларына ябып, ете көн, ете төн буйына өшкөргән. Шунан ҡыҙҙың ауырыуы ҡул менән алған кеүек булған.

Мәсрүрә. Эй хоҙайым, доғалары килешәлер шул.

Гилми. Килешмәй буламы һуң, Мәсрүрә килен, килешмәй буламы һуң... Тик алла ҡаршыһында кеселекле булырға кәрәк. Бына теге ҡыҙ, терелгәс, алланың рәхмәтен онотоп: «Баламды ишан быуып үлтерҙе!» — тип, ишан хәҙрәттең яманатын һатып йөрөй башлаған. Ишан хәҙрәт доғаһын кире алған. Шунан һуң бер төндө ҡыҙҙы, ендәре һөйрәп алып китеп, һыуға батырып үлтергәндәр.

Фәлимә. Аһ, йөрәгем, башым... Ни эшләйем инде?!

Мәсрүрә *(йүгереп килеп)*. Ай, Фәлимә туғаным, ни булды?

Гилми. Башы осона ҡөрьән ҡуйырға кәрәк. Ендәре ҡасыр.

Мәсрүрә. Ни һөйләйһең һин, Гилми әбей? Уның ниндәй ендәре булһын?

Гилми. Шулай тиҙәр бит.

Мәсрүрә. Дошмандар һөйләйҙәр уны...

Гилми. Ни эшләп дошман булһын... Хәҙрәт үҙе һөйләгән.

Мәсрүрә. Хәҙрәткә лә әйтер инем инде...

Ғилми. Сеү, Мәсрүрә килен, хәзрәткә тел тейҙереп, ғөнаһлы булма. Тәүбә-тәүбә.

Мәсрүрә. Ғөнаһһыҙ ҡыҙ баланы ғүмергә бәхетһеҙ йһарға шәриғәт ҡушамы ни?

Ғилми. Уныһы алла эше, килен.

Хәмиҙә инә.

Хәмиҙә. Иҫән генә тораһығыҙмы? Ғилми әбей, иҫәнме?

Ғилми. Хоҙайға шөкөр, үҙең бик иҫәнме?

Мәсрүрә. Әйҙә, Хәмиҙә килендәш, түрҙән уҙ.

Хәмиҙә *(Ғәлимә эргәһенә килеп)*. Йә, хәлең нисек, балам?

Ғилми. Хәлегеҙ бик ауыр инде, хоҙа ярҙам бирһен. Әле Шәмсеҡәмәр оҫтабикәләрҙә ҡатындар ашында булғайным. Шунда Ғабдрахман бай Рабиғаһы: «Ғәлимә енләнгән икән, шул кәрәк ул уйнашсыға», — тип һөйләнеп ултырҙы.

Ғәлимә *(ҡапыл һикереп торон)*. Ҡотҡарығыҙ, әсәй! Мин ғәйепһеҙ бит... Ниңә мине былай рәнйетәһегеҙ?!

Ғилми. Ғабдрахман бай малайы Ғәйфулла: «Келәт араһында уйнаш итеп торғандарын үҙ күҙем менән күрҙем, өҫтәренә барып сыҡтыҡ», — тип һөйләй.

Ғәлимә. Ялған! Ялған! *(Ишеккә табан ташлана.)* Мин китәм!

Мәсрүрә. Туғаным, китмә, китеп ҡайҙа бараһың? Һин ауырыу бит...

Ғәлимә *(тартышып)*. Юҡ, мин ауырыу түгел!

Хәмиҙә *(илау ҡатыш)*. Бәбекәйем, балам, китмә!

Ғәлимә. Мин йәшәмәйем! Ниңә мине ебәрмәйһегеҙ!

Сәғит йүгереп сығып китә.

Мәсрүрә. Хәмиҙә килендәш, бар, Фәхри ҡайнағаға әйт, килһен. Донъя хәлен белеп булмай...

Хәмиҙә. Ғилми әбей, һин Ғәлимәне бер аҙ өшкөрөп китер инең... *(Мәсрүрәгә.)* Мин атаһына ҡайтып әйтәйем әле. *(Сыға.)*

Ғилми. Шулай шул, әллә ҡасан өшкөртөргә кәрәк ине... Берәй нәмәнән зәхмәт ҡағылғандыр. *(Ғәлимә янына килеп, доғалар уҡый ҙа, ауыҙын сыйылдатып, төкөрөнә башлай.)*

Ғәлимә. Кит бынан, кит тим!.. Мин ауырымайым. Кит!

Ғилми. Әшһәҙәннә...

Ғәлимә. Кит, тим, ни эшләйһең һин, ә?

Ғилми. Доға уҡығанды ендәре яраттырмай, шуға күрә ҡаршы тора, ләйлаһы... тфү, тфү...

Ғимаҙи менән Сәғит инәләр.

Ғимаҙи. Һин бында ни эшләп ултыраһың, убырлы ҡарсыҡ? Бар сыҡ!

Ғилми *(ни эшләргә белмәй, ситкәрәк ултырып).* Ай, ай, былар кем булғандар?.. Убырлы ҡарсыҡ, имеш, үҙҙәре кем булған... Минең ҡыҙҙарым да, улдарым да былай, хурлыҡҡа ҡалып, енләнеп ятмай.

Ғимаҙи. Тиҙ сығып кит бынан, күҙемә күренмә, сихыр тубалы! *(Ҡыуа.)*

Ғилми *(йомшарып).* Сығам, сығам... Харап булған икән! Доғанан, өшкөрөүҙән ҡасалар! Бынағайыш...

Ғимаҙи *(асыуын баҫа алмай).* Кит, күҙемә күренмә! Өшкөртһәк тә һинең кеүек тамуҡ киҫәүенән өшкөртмәбеҙ. Доған да, им-томоң да үҙеңә булһын.

Ғилми. Бик эре һөйләшмә! Доғанан, диндән көлмә! Хоҙай үҙегеҙгә күрһәтәһен күрһәтеп тора бит әле. Ғәлимәгеҙ, донъяға һыймай, «мин — кем!..» тип йөрөй инелә... *(Сығып китә.)*

Ғимаҙи. Шул йәһәннәм ҡарсығын ниңә бында килтереп йөрөтәһегеҙ? Улар бит нәҫел-нәсәптәре менән сихырсылар...

Сәғит *(ҡулына торонбаш тотоп, ярһыған хәлдә Ғилми артынан сыға башлай).* Убырлы ҡарсыҡтың кәрәген бирәйем әле!

Мәсрүрә. Сәғит, ни ҡыланыуың, иҫәрләнмә! *(Тота.)*

Сәғит. Ебәр, барыбер киҫәү менән башына ҡундырам.

Ғимаҙи. Сәғит, алйотланма. Улай ярамай.

Сәғит *(гәрләнеп).* Ә ниңә ул Ғәлимә апайыма улай әйтә? Ниңә ул, енле ҡарсыҡ, бында инеп, ендәр тураһында һөйләнеп, апайымды ҡурҡытып ултыра? *(Йәшен һөртә.)*

Закир *(тауышы).* Инергә буламы?

Ғимаҙи. Әйҙә, әйҙә, рәхим ит, кем унда?

Закир инә.

Закир. Әссәләмәғәләйкүм!

Ғимаҙи. Вәғәләйкүмәссәләм. Әйҙүк, түрҙән уҙ, Закир!

Закир. Һауғынамы, Ғимаҙи ағай!

Ғимаҙи. Шөкөр, үҙең ни хәлдә?

Закир. Иҫәнлекме, Мәсрүрә еңгә?

Мәсрүрә. Бер көйө, уҙ! Түрҙән уҙ, Мөхәммәтзакир!

Закир. Рәхмәт, рәхмәт! Уҙып тормайым.

Фәлимә *(Закирҙың тауышын ишетеү менән, ҡаты һиҫкәнеп китә лә, уға оҙаҡ ҡарап торғандың һуңында).* Закир, һин?!

Закир. Эйе, мин, Фәлимә! Һаулығың нисек?

Фәлимә. Ниңә индең һин бында? Ниңә индең? Тағы ла харап итерҙәр бит беҙҙе?

Закир *(Фәлимәне тынысландырырға теләп).* Ҡурҡма, Фәлимә, башҡа бәйләнә алмаҫтар, булғанына ла үкенерҙәр әле.

Фәлимә. Кит, Закир, кеше-ҡара күргәнсе, зинһар, сығып кит!

Закир. Фәлимә, мин һинең менән күрешеп сығайым тип кенә ингәйнем.

Фәлимә. Ниңә тыңламайһың һин, Закир. Эй аллам!

Закир. Мин һине күреп китергә тип, бер генә минутҡа индем, Фәлимә. Ағайым янына ҡалаға китәм.

Фәлимә *(ҡурҡып).* Китәһең? Һин дә китәһеңме ни, Закир? Мин япа-яңғыҙым ҡаламмы ни шулай, ут йотоп?

Закир. Мин оҙаҡҡа түгел, Фәлимә. Нахаҡҡа беҙҙе ғазаплаған ҡәбәхәттәр язаһыҙ ҡалырға тейеш түгелдәр...

Фәлимә. Эй аллам... Һуңғы өмөтөм дә китеп юғаламы ни шулай? *(Һикегә ятып, үкһеп илай башлай.)*

Закир. Бик бөтөрөнмә инде, Фәлимә, сабыр ит. Бына тиҙҙән икәүебеҙ ҙә һауығырбыҙ. Матур, күңелле итеп йәшәй башларбыҙ.

Фәлимә. «Матур, күңелле тормош». Донъяла шундай һүҙҙәр ҙә ҡалдымы ни әле? *(Ярһып.)* «Күңелле, матур тормош, матур, күңелле тормош...» *(Үкһеп илап, шаршау эсенә инеп юғала.)*

Мәсрүрә. Фәлимә, туғаным, сеү, сабыр ит. *(Уның артынан инеп китә.)*

Бөтәһе лә ауыр тынлыҡ эсендә һүҙһеҙ ҡалалар.

Закир. Һис ғәйепһеҙгә янған утҡа һалдылар бит Фәлимәне, Гимаҙи ағай! Ғәл ине бит, күкрәп үҫкән ғәл ине...

Гимаҙи. Ни эшләйһең, Закир ҡустым, ҡараңғы тормош.

Закир. Ҡараңғы тормош упҡыны тиһәнсе, Гимаҙи ағай.

Ғимаҙи. Бына, бына тап үҙе, дөрөҫ әйттең, Закир. Уңҡын, тормош түгел, уңҡын! *(Күҙ йәшен һөртөп алып.)* Әйе... Шулай итеп, ҡалағамы ни инде юл, Закир?

Закир. Шулай инде, Ғимаҙи ағай. Ҡалағa барып, докторға күренергә кәрәк. Унан Ғәйфуллаларҙың был ҡобәхәтлектәре язаһыҙ ҡалырға тейеш түгел. Ғәлимәнең намыҫын аҡларға тейеш мин!

Ғимаҙи. Дөрөҫ, Закир, тура закон табып, судҡа бирергә кәрәк уларҙы.

Закир. Билдәле. Бигерәк тә шуның өсөн барам да. Уларҙың был эштәре бер төрлө законға ла һыймай. Был эштә хәҙрәт үҙе лә бик ҙур ғәйепле буласаҡ.

Ғимаҙи. Дөрөҫ тә шул. Был эш бер ҙә аҡылға һыймай.

Фәхри менән Хәмиҙә инә.

Фәхри *(уңайһыҙ тынлыҡтан һуң)*. Һаумы, Закир улым, иҫәнме!

Закир. Бер көйгә әле, Фәхри ағай. Үҙең ни хәлдә?

Фәхри. Эштәр күңелһеҙгә әйләнеп китте бит әле, кем Закир. Ни эшләйһең, тәҡдир шулайҙыр инде, күрәһең.

Закир. Фәхри ағай, Ғәлимәне ҡалағa алып барып, докторға күрһәткәндә, нисек булыр икән?

Фәхри. Юҡ инде, Закир, улай, хәҙрәттән уҙып, дуҡтырға күрһәтеп йөрөү килешмәҫ. Хәҙрәттәрҙе саҡырып, ҡөрьән сығартырға кәрәк булыр.

Закир. Ихтыяр һеҙҙә инде, Фәхри ағай... Тик, хәле ауырайып китеп, аҙаҡ үкенесле була күрмәһен.

Фәхри. Шулай инде, шәриғәттән үтеп булмай, Закир. Хоҙа яҙған булһа, терелер.

Закир. Ай, Фәхри ағай, шәриғәткә, им-томға ғына ышанып ҡалмаҫҡа ине. Йыраҡ бараһы түгел, үҙең беләһең, анау Нурислам ҡыҙы им-том арҡаһында зәғифләнеп, кешелектән сығып ҡалды бит.

Фәхри. Алла һаҡлаһын инде, алла һаҡлаһын.

Закир. Бына, шулай булғас, үҙең уйла, мин дә ҡалағa докторға күренергә барам. Теләгең булһа, әйҙә, бер уңай Ғәлимәне лә алып китәйек.

Фәхри. Булмаҫ, юҡ нәмәгә ҡыҫтама, Закир. Беҙ шәриғәттән уҙа алмайбыҙ, ни хәл итәһең.

Ғимаҙи. Уйлап эш ит, ағай, аҙаҡ үкенескә ҡалмаһын, Закир дөрөҫ әйтә.

Фәхри. Һин, Ғимаҙи, тик тор! Шәриғәттән үтеү беҙгә килешмәй ул. Башҡаларҙа минең эшем юҡ. Бына шулай.

Закир. Ярай инде, улай булғас, ни эшләмәк кәрәк, һау булып торороҙ.

Бөтәһе лә. Хуш, иҫән йөрөп, һауығып ҡайт, Закир.

Закир сығып китә.

Хәмиҙә *(Фәлимәне шаршау эсенән алып сығып).* Әйҙә, балам, үҙебеҙгә ҡайт, бына атайың менән һине алырға тип индек.

Фәхри *(Фәлимәнең йөҙөн күреп, ҡурҡыуға төшә һәм, һүҙ таба алмай, уңайһыҙланып торғандан һуң, тәрән һулай).* Хоҙа тәҡдирелер, үҙебеҙгә алып ҡайтайыҡ. Көрьән сығартып, өшкөртөргә кәрәк.

Фәлимә *(атаһына ҡурҡыулы ҡарап тора ла).* Ҡайтмайым, юҡ, ҡайтмайым...

Хәмиҙә *(аҡһынан һөйөп, йомшаҡ ҡына).* Балам, атайың үҙе килде бит, ул үҙе һине саҡыра, әйҙә, балаҡайым, үҙебеҙҙә яҡшы булыр.

Фәлимә. Һуң нисек инде, ул миңә асыуланды, мине балам түгел тигәйне бит?

Фәхри. Балам, үҙем әйтәм, ҡайт, балам... Хәҙер мин һиңә асыуланмайым, яңылыш ҡына асыуланғанмын. Әйҙә, балам, әйҙә... *(Ситкә ҡарап йәшен һөртә.)*

Мәсрүрә. Атайҙарҙың асыуҙары була ла, бөтә лә ул. Унан һуң тағы ла элеккесә булалар.

Фимаҙи. Фәлимә, ҡайтаһыңмы, бында тораһың киләме?

Фәлимә. Минең өйгә бик ҡайтҡым килә лә, ҡурҡам шул. Ҡайтҡас, атайым йәнә туҡмай башламаһа ярай ҙа... Тағы ла ҡыуып сығарһа, унан мин ни эшләрмен?

Хәмиҙә. Балам, беребеҙ ҙә асыуланмайбыҙ, әйҙә ҡайтайыҡ.

Фәхри *(Фәлимә эргәһенә үк килеп).* Ҡайт, балам, беҙ һиңә асыуланмайбыҙ.

Фәлимә *(икеләнеп торғандан һуң).* Улай булһа, әйҙә, ҡайтайыҡ. *(Сыға башлай.)* Ниңә илайһың һин, әсәй?

Хәмиҙә. Юҡ, былай ғына. Шатлыҡтан илайым мин, балам.

Фәлимә. Илама, әсәй, кәрәкмәй.

Фәхри. Ҡайһы ерең ауырта һуң, балам?

Фәлимә. Юҡ, бер ерем дә ауыртмай, тик бына йөрәгем әллә ни эшләй, йөрәгем ҡаға... башым ауырта. Юҡ, ул да ауыртмай торғандыр... Әйҙә, әсәй. *(Хәмиҙә менән сығып китәләр.)*

Ф ә х р и *(күҙ йәшен һөртөп).* Үҙем харап иттем баламды... Габдрахман байҙар һүҙенә ҡарап, харап иттем! Улай итмәгән булһам, бәлки, был хәлгә лә төшмәгән булыр ине балаҡайым... *(Ең менән күҙен һөртөп, сығып китә.)*

Г и м а ҙ и *(ҙур тынлыҡтан һуң тәрән итеп көрһенә).* Шәриғәт, шәриғәт тип, ниндәй хәлгә төшөрҙәләр гөл кеүек баланы!

С ә ғ и т. Шәриғәт кешеләрҙе харап итә торған нәмә икән... Шәриғәт шул икән!

Шаршау

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Алтынсы күренеш

Ф ә х р и өйө. Муллалар килеүенә өй мәтүрлап йыһазландырылған. Шаршау асылғанда Х ә м и ҙ ә менән М ә с р ү р ә өй йыйыштыралар. Ғ ә л и м ә, һандығын ачтарып, моңһоу ғына көйләп ултыра.

Ғ ә л и м ә.

Ҡарлуғаҫҡай ҡара, муйыны ала,
Ник моңая икән был бала?
Моңаймаҫ та ине, һай, был бала,
Йөрәккәйе тулы ут яна.

Пауза.

Ул ҡайтмаҫ инде, ғүмергә ҡайтмаҫ... *(Ҡулына бер яулыҡ алып.)* Был яулыҡты уға бирермен, тип ҡайығайным.

Х ә м и ҙ ә. Хоҙайым, шифаһы ғына тейһен инде. Сәғәте тура килеп, ҡул менән һыпырып ташлағандай булһын ине.

М ә с р ү р ә. Һауыҡһын ине лә, бына шулай әҙерләнеп, туй итһәң ине.

Ғ ә л и м ә *(һандыҡтағы нәмәләрҙе ачтарып).* Бына бының бүләк өсөн, бының бирнәгә булыр... Был билғау кейәү бүләге бит, әсәй?.. Минең яулыҡтарым ҡайҙа һуң?.. Теге, төрлө төҫтәге дебеттәр менән ҡайыған яулыҡ бында юҡ бит...

Х ә м и ҙ ә. Балам, һин хәҙер яңы күлдәгеңде кейеп, шәленде ябын.

Мәсрүрә. Ысын, Фәлимә, кейенеп ал әле.

Фәлимә. Хәҙер кейенмәйем әле. Бына Ҡыҙҙар тауына уйынға сыҡҡанда кейенермен.

Хәмиҙә. Бына, алла теләһә, терелгәс, уйынға ла сығырһың. Бөтәһе лә булыр, балам. Бына хәҙер үҙеңде өшкөрөргә мулла бабайың менән хәлфә ағайыңдар килә.

Фәлимә *(ҡурҡып китеп)*. Мулла бабай? Кәрәкмәй, кәрәкмәй! Мин уларҙан ҡурҡам, кәрәкмәй, әсәй!

Мәсрүрә. Юҡ, Фәлимә, туғаным, улар хәҙер өшкөрөргә генә киләләр! Бына улар ҡорьән сығып өшкөргәндән һуң, терелерһең. Улар һиңә файҙа итергә киләләр. Кейен, улар килерҙәр ҙә китерҙәр, шунан һауығып китерһең, башың да ауыртмаҫ, әсең дә бошмаҫ.

Фәлимә. Ниңә өшкөрәләр? Шулай бик ҡаты ауырыймымы икән ни мин? Минең бит саҡ ҡына башым ауыртып тора. Юҡ, килмәһендәр, әсәй, мин уларҙан бик ҡурҡам.

Хәмиҙә. Ҡурҡма, балам, улар өшкөрөрҙәр ҙә китерҙәр.

Фәлимә *(кәйефһеҙләнеп ултырғандың һуңында)*. Эй алла!

Мәсрүрә. Йә, Фәлимә, бынау күлдәгеңде кей. Мулла абзыйыңдар килер ваҡыт етә.

Фәлимә *(күҙҙәрен тултырып ҡарап)*. Шулай бит әле...

Хәмиҙә. Бар, балам, сәстәреңде тарап ал.

Мәсрүрә. Әйҙә, шаршау эсенә инәйек, үҙем кейендерермен.

Фәлимә *(һыҙланып)*. Башым ауырта, йөрәгем дә...

Шаршау эсенә инәләр.

Хәмиҙә. Эй, балам, балам... Шифаһы тейһә генә ярар ине инде.

Гимаҙи инә.

Гимаҙи. Ағайым ҡайтманымы ни әле?

Хәмиҙә. Юҡ, әле, Гимаҙи. Ул өйләнән сығыу менән муллаларҙы алып килергә булды, килеп тә етерҙәр инде.

Гимаҙи. Белмәйем инде, был эштән берәй нәмә сығырмы икән...

Хәмиҙә. Шифаһы тейә күрһен инде, Гимаҙи. Бар көстө һалып саҡырабыҙ. Башҡа бер төрлө ышанысыбыҙ ҙа, өмөтөбөҙ ҙә ҡалманы бит. Баланың хәле көндән-көн насарлана бара.

Гимаҙи. Ҡарағыҙ инде, тик, ай-һай, файҙаһы тейерме икән? Үҙҙәре харап иттеләр ҙә хәҙер йөрөгән булалар.

Сәғит *(йүгерep инә)*. Киләләр, киләләр! Мулла бабайҙар киләләр.

Сәхнә артынан мулла, хәлфәләрҙең шаулашыу, һөйләшеү, сәләм биреү тауыштары ишетелә.

Фәхри. Әйҙә, хәҙрәт, рәхим ит! Хуш килəһегеҙ!

Беренсе хәлфә. Һеҙ, гөләмәләр, һеҙ, хөрмәтле ваттар, һеҙ алдан рәхим итегеҙ!

Сафи мулла. Әйҙә, әйҙә!.. Ярай, хуш!

Фәхри *(инә)*. Муллалар килде. Әҙер булдығыҙмы?

Хәмиҙә. Әҙер, әҙер.

Фәхри. Улай булһа, инһендәр.

Хәмиҙә. Ярай, инһендәр.

Мулла, мәзин, хәлфәләр керә, һәр ҡайһыһының ҡулында китап. Һикегә урынлашып бөткәс, доға ҡылалар, иҫәнлек-һаулыҡ һорашалар.

Фәхри. Бына шулай инде, хәҙрәт, ҡыҙыбыҙ Фәлимә ауырыбырак китте. Һеҙҙән, фатиха алып, өшкөртөргә булдыҡ.

Сафи мулла. Бәрәкалла, бәрәкалла. Бик мәслихәт эш эшләйһегеҙ, өшкөрөүҙең шифаһы ҙур була уның, мулла кем Фәхретдин.

Мәзин. Эйе, эйе, донъяла ен һуғыу ваҡиғалары бик күп осрай ул. Миңә лә үҙ ғүмеремдә бындай эштәрҙе күп күргә тура килде. Шуларҙың йөмләнән береһен һөйләп алайым. Бер көн, йәшә намаҙынан сыҡҡас, Исламгәрәй ҡарттарға барҙым, ен һуғып ауырыған улдарын өшкөртөргә саҡырғайнылар. Малай ни эшләргә белмәй, дулап ята. Ошкөрө башланым. Теге уның һайын дулай, уның һайын һаташа. Мин уҡыған аяттарҙы ватып, кире һүтеп бара. Шунда яңағына бик нығлап берҙе ҡундырҙым да: «Күҙеңә нәмә күренә, хәҙер әйт!» — тип һораным. Малай йомшаны: «Мәзин ағай, миңә теймә, миңә әйтмәҫкә ҡушалар», — ти. «Кемдәр әйтмәҫкә ҡуша?» тим. «Ҡуркам, ҡуркам», — ти. Яңынан тағы берҙе ҡундырғайным: «Әйтәм, әйтәм. Минһаж ҡарттарҙың ҡара эттәре», — ти. Күрәһең, теге пәри уға әт һүрәтендә күренә икән. Шунан һуң «Минһажетдин ҡарттың ҡара эте» тип бер ҡағыҙ яҙҙым да, аятел көрси уҡып, яндыра башланым. Шул ваҡыт малай ни эшләргә белмәй: «Зинһар, яндырма!» — тип ялына башланы. Уның ай-вайына ҡарамай, яндыра бирҙем. Малай ни эшләргә белмәй,

дулай, тыпырсына. Ҡағыҙҙы яндыртмаҫҡа итә. Уға ҡарамаҫым, яндырҙым. Бына шунан һуң малай рәхәтләнеп әрен йоҡлап китте.

Ҡ а з ы й. Эйе, шул ул ҡәһәр пәриҙәр...

М ә з и н. Туҡта әле, бөтмәне. Шулай мәшәҡәтләнә торғас, уларҙа бик һуңға ҡалдым. Урам буйлап ҡайтып киләм... Бына бер заман үгеҙ кеүек әт ҡаршыма килә, бер алдыма, бер артыма сыға. Мине ҡурҡа тип белде, күрәһең. «Ә, әле һин тегендә булдыра алмағас, бында килгәнһең икән!» — тип, уҡынып, таяғымды һелтәп ебәргәйнем, теге нәмә шунда уҡ ғәйеп булды.

Ҡ а з ы й. Шулай ул, ен, пәри тигән нәмәләр әҙәм балаларына зыян-зарар килтерергә ҡасд итеп кенә тораларҙ.

С а ф и м у л л а. Мосолман пәриҙәре улай уҡ булмайҙар, бигерәк тә кафыр пәриҙәре кешеләргә дошман булалар. *(Нимәлер уҡынып ҡуя.)*

М ә з и н. Эйе, миҫал өсөн алғанда...

С а ф и м у л л а *(асыуланып)*. Мәзин, етер инде һиңә! Ай алла...

М ә з и н. Ә? Ә... бөттө, бөттө, хәҙрәт.

С а ф и м у л л а. Кем Ғимаҙетдин, һиңә бик ҙур үпкәм бар. Һуңғы ваҡыттарҙа мәсет юлында бик һирәк күренә башланың.

Ғ и м а ҙ и. Бер ҙә ваҡыт арттырып булмай бит, хәҙрәт. Тормош бик ауырайҙы. Донъя мәшәҡәте ваҡытты күп ала.

С а ф и м у л л а. Һе... Донъяһы донъя ла, әхирәтте лә оноторға ярамай, ти китап.

Ғ и м а ҙ и. Китап әйтер ҙә бит ул, хәҙрәт...

Ф ә х р и. Ғимаҙетдин, сеү!.. *(Тамаҡ кырып ҡуя.)*

С а ф и м у л л а. Көфөр һөйләйһең, Ғимаҙетдин. Тамуҡ-йәһәннәм ғазаптары тураһында уйла.

Ғ и м а ҙ и. Эй хәҙрәт, тәүҙә, донъяһы тураһында уйларға кәрәк әле.

Б ө т ә һ е л ә. Ләхәүлә вәлә ҡеүүәтә.

Ф ә х р и. Сеү тим, Ғимаҙетдин... бына һин әле.

С а ф и м у л л а. Әле, ишетеүемә ҡарағанда, Сәғитте лә, минең мәҙрәсәнән алып, урыҫ шкулына бирмәксе булаһың икән. Дөрөҫ булһа, минән һис бер фатиха юҡ.

Ғ и м а ҙ и. Шулайыраҡ уйлап торабыҙ әле.

С а ф и м у л л а. Һай, динһеҙ... Минең фатихамдан башҡа бер аҙым да атлай алмаҫһығыҙ!

Ғ и м а ҙ и. Эй хәҙрәт, улай тип тороп булмай инде. Шәриғәт, бәддоға, фатиха тип, балаларҙы харап итеп бөттөгөҙ бит инде. Рус мәктәбендә уҡыһа, донъя эшенә

ярарлыҡ кеше булып сығыр исмаһам. Бында күпме уҡыш та бит *(хәлфәләргә күрһәтеп)* бына бит, бына...

Сафи мулла *(урынынан һикереп торон)*. Аллаһомма онсор, тиген! Онсор тиген! Хәҙер тәүбә ит!

Фәхри. Гимаҙетдин, шаштыңмы әллә, был ни эшең? Тәүбә ит!

Сафи мулла. Тәүбә итһен, дуңғыҙ! Юғиһә, хәҙер бәддоғам төшөр!

Гимаҙи. Бәддоғаң үҙеңә төшһөн, хәҙрәт!

Сафи мулла. Йөҙөң ҡара булһын! Бәддоға һуҡһын! Әле берегеҙ, шәриғәткә ҡаршы йөрөгән өсөн, йөҙө ҡара булып, ен һуҡты бит!

Гимаҙи. Кешенең йөҙө ҡара булыуына һеҙ сәбәп булдығыҙ. Доғаң ҡабул була торған булһа, үҙеңдең бөкрө мәхдүмеңде төҙәтеп, әҙәм рәүешле яһа.

Сафи мулла. Фәхретдин, был мөртәт бында булғанда, тупһаңдан атламам. Фатихам юҡ, бәддоғам төшөр. Мин китәм!

Фәхри. Хәҙрәт, зинһар улай итмә әле. Тыныслан! *(Гимаҙиға.)* Шашҡан, динеңдән яҙҙыңмы әллә?

Гимаҙи. Ағай, ризығыңды...

Фәхри. Хәҙер күҙемдән юғал, миңә ағай тип әйтәһе булма.

Гимаҙи. Ҡурҡма, ағай. Был харам тамаҡтар менән бергә ултыраһым юҡ. Тик шуныһы, быларҙы тығындырып ултырыуың үкенескә булыр. *(Сыға.)*

Фәхри. Бына әле һин... Йә әле, хәҙрәт, кәйефегеҙҙе боҙмағыҙ. Уның ғәҙәте шул инде. Ни эшләмәк кәрәк, диндән яҙған.

Сафи мулла *(урынына ултырып)*. Я алла, я алла, я Баһаүетдин... Ахрызамандыр был.

Мәзин. Кем Фәхретдин, беҙ аш өсөн килмәнек. Беҙгә ашаһаҡ та ярай, ашамаһаҡ та ярай. Тик өлгөргән аш ронйеп ҡалмаһын тигән һүҙ генә.

Казый. Эйе, бешкән ашты ашамай китеүҙе китап бер ҙә килештермәй.

Сафи мулла *(уны бүлеп)*. Йә, хәлфәләр, башлағанда ла ярай. Кем, Фәхретдин, Ғәлимәне килтерегеҙ инде, өшкөрөйөк, шайәт шифаһы тейер.

Фәхри. Ярар, хәҙрәт, шулай итәйек. *(Шаршау эсенә инеп, Ғәлимәне алып сыға.)*

Сафи мулла *(тәрән һулап)*. Я аллаһу...

Ғәлимә *(муллаларҙы күреп, һиҫкәнеп китә)*. Килгәндәр бит, килгәндәр! Йөҙөмә ҡара яғырға килгәндәр...

Фәхри. Кыҙым, Ғәлимә, сабыр ит, улар һине көрьән уҡып, өшкөрөргә генә килделер, ҡара яҡмайҙар. Кил, кыҙым.

Ғәлимә. Һуң улар битемә бер тапҡыр төкөрҙөләр бит инде, тағы ниңә килгәндәр?

Хәмиҙә. Балам, беҙ бында, тыныс бул. Бына, алла теләһә, терелерһең.

Ғәлимәне һикегә ятҡыралар. Мулла һәм хәлфәләр уны уратып алып уҡыралар. Бер юлы шаулашып, ҡысҡырып, етеҙләткәндән етеҙләтә барып, ҡөрьән уҡый башлайҙар.

Хәлфәләр. Әғүзе билләһе минашайтан ирражим...

Сафи мулла. Бисмилләһиррахман иррахим...

Ғәлимә *(ҡурҡып, һикереп тора.)* Кәрәкмәй, кәрәкмәй!.. *(Тороп китергә теләй.)*

Хәлфәләр уны тотоп ятҡыралар ҙа уҡыуҙарын дауам иттерәләр. Уҡыу араһында Ғәлимәнең йөҙөнә, өҫтөнә «тфү-тфү» тип төкөрәләр.

Юҡ, мин гөнаһлы түгел, эй алла! Ниңә минең битемә төкөрәһегеҙ? Атай, ҡотҡар, харап иттермә мине!

Хәлфәләр уға иғтибар бирмәй, уны ятҡырып, ҡул-аяҡтарын тотоп тораҙар, ҡҙҙәре тағы ла ҡыҙыулатып, дәртләнеберәк уҡый башлайҙар.

Мәзин *(уҡыуын бүлеп.)* Ендәре шулай ҡоторта, ендәре дин әһелдәрен күрә алмайҙар. Миҫал өсөн бына...

Сафи мулла. Мәзин...

Ҡыҙыулатып уҡый башлайҙар. Доға уҡып тағы ла төкөрөнәләр. Ғәлимә битен юрғаны менән ҡаплай, ләкин уны шунда уҡ асалар. Өй ҡуркыныс бер төҫкә инә. Ғәлимә йөрәк өҙгөс тауыш менән «Әсәй!» тип ҡысҡырып ебәрә лә юрған аҫтына бөгөрләнеп ята.

Фәхри *(ҡурҡып).* Кара әле, хәҙрәт, Ғәлимәгә бик ауыр була түгелме һуң?

Сафи мулла. Фәхри, тик тор һин. Хәҙергә шулайыраҡ булыр ул. Доғаны яратмай, ендәре шулай ғазаплай уны.

Уҡыйҙар, төкөрөнәләр.

Фәхри *(түҙә алмай).* Хәҙрәт, туҡтатығыҙ инде, етер! Балам бигерәк тә ғазаплана бит.

Сафи мулла. Йә, ярай. Етһә, етеп торор шул. Йәгеҙ, хәлфәләр.

Доға ҡылалар. Фәхри ҡалтырай-ҡалтырай уларға сәзәҡа тарата. Амин тоталар.

Ф ә х р и. Хәҙрәт, хәҙер инде, рөхсәт итһәгеҙ, аш-һыу ултыртырбыҙ.

Б ө т ә һ е л ә. Ә, шулаймы? Ярай, ярай, бик мәслихәт.

С а ф и м у л л а. Кем Фәхретдин, ашҡа тиклем һауаға сығып бер аҙ...

Ф ә х р и. Ә, яҡшы-яҡшы, хәҙрәт. Сәғит балам, ҡайҙа, һин мулла бабаңдарға ҡомған сығарып, ҡулдарына һыу һалып тор.

Фәлимәнән бүтәндәр сығып китәләр. Х ә м и ҙ ә менән М ә с р ү р ә Фәлимә янына киләләр.

Х ә м и ҙ ә. Балам, балаҡайым!
М ә с р ү р ә. Фәлимә, хәлең нисек туғаным?

Ф ә л и м ә өндәшмәй.

Х ә м и ҙ ә. Фәлимә, балам, ишетәһеңме?

Фәлимәнең өҫтөндәге юрғанын асалар. Фәлимә хәрәкәтһеҙ, уның күҙҙәре зур асылып, бер нөктәгә төбәлгәндәр. Хәмиҙәләр ҡурҡыу менән артҡа сигенәләр.

Х ә м и ҙ ә *(зур тынлыҡтан һуң, эштең нәмәлә икәнен төшөнөп, йөрәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырып ебәрә).* Фәлимә! Харап булды балам!.. *(Үкһеп илай башлай.)*

Фәлимә, тирә-йүндәге хәлде аңламай, тороп ултыра ла, нимәлер уйлаған һымаҡ, ҡулдарын ауыҙына ҡуйып, шул көйө ҡатып ҡала.

Ш а р ш а у

Етенсе күренеш

Кыҙҙар тауы. Беренсе шаршау күренеше. Көҙ. Ағастар япраҡ төшкән. Ф ә л и м ә, яр башына ултырып, моңайып ҡына көйләй. С ә ғ и т, алыҫтараҡ бер ағас ышығында ултырып, нимәлер яҙа. Үҙе әрә-тирә Фәлимәгә күҙ йөртә.

Ф ә л и м ә. Толомомда талир тәңкәм
Шылтыр-шылтыр итәлер.
Шылтыраған тәңкә кеүек,
Һығырап ғүмерем үтәлер.

С ә ғ и т *(Фәлимәнең йырынан әҫәрләнеп, күҙ йәшен һөртә лә ярым тауыш менән генә уҡый).* Мулла-мәзиндәрҙең ен, пәриҙәр тураһында һөйләгән ҡурҡыныс ваҡиғалары күңелдән сыҡмай. Улар үҙҙәре лә кешеләрҙе

аңаштыра, аҡылдан яҙҙыра торған ҡара шәүләләр кеүек күренәләр. *(Яҙа.)* Әгәр Ғәлимә апай тыныс ҡына тормошта, төрлө һүҙҙәр ишетмәй, һау кешеләрҙе лә ҡурҡытырлыҡ им-том иттермәй, өҫтө-өҫтөнә ауыр күренештәр күрмәй генә торған булһа, әллә терелеп, тәбиғи хәленә төшөп киткән булыр ине. Ләкин улай булманы...

Ғәлимә *(үҙ алдына)*. Мине харап иттеләр шул, йөҙөмә ҡара яҡтылар, битемә төкөрҙөләр...

Сәғит *(тертләп китә. Унан Ғәлимәгә яҡынлашып)*. Ғәлимә апай, ниңә бында яңғыҙың ҡалдың? Әйҙә, ҡайтайыҡ.

Ғәлимә. Һин килдеңме ни әле? Улар ҡайҙа киттеләр һуң? Йөрәйһең шунда кеше ҡурҡытып!

Сәғит. Ғәлимә апай, кемдәрҙе ҡурҡыттым һуң?

Ғәлимә *(ишғтибар менән Сәғиткә ҡарап)*. Ул ҡурҡа шул. Һин кит әле, ул килһен... *(Капыл бер яҡка йүгереп.)* Килделәр бит инде, килделәр! Һин ни тиһең?.. Туйҙан ҡасалар тиме икән ни? Аллаға шөкөр, йөҙөм дә ағарҙы инде.

Сәғит. Әйҙә инде, ҡайтайыҡ, апай.

Ғәлимә *(уфлап)*. Әйҙә, улай булғас. *(Китә башлай ҙа, кире боролоп.)* Ниңә ҡайтабыҙ? Килгәндәрме ни? Юҡ, мин уларҙы күргем килмәй.

Ярға ултырып уйға ҡала.

Сәғит. Кемдәрҙе күргең килмәй? Бында бер кеше лә юҡ бит.

Ғәлимә. Муллаларҙы, уҫал кешеләрҙе...

Ҡулдарына төйөндәр күтәреп, Гимаҙи менән Мәсрүрә инәләр.

Гимаҙи. Сәғит балам, бында икәнһең, һине таба алмай аптырап бөттөк. Юлға сығырға ваҡыт.

Сәғит. Мин әҙер, атай. Бына Ғәлимә апайым бында тағы бер яңғыҙы.

Мәсрүрә. Ай алла, ниңә күҙ-ҡолаҡ булмайҙар шул балаға. Хәҙер мин уны үҙем менән алып ҡайтып китермен. Бына, балам, бында юл аҙыҡтарың, был төйөндә кейем-һалымдарың... Берүк уҡытыусы ағайыңдарҙы тыңлап, тырышып уҡы инде. Йөҙгә оят килтерерлек булма.

Сәғит. Һин борсолма, әсәй, мин бик тырышып уҡырмын. Шаярмам, дәрес ҡалдырмам, бик тырышырмын.

Мәсрүрә. Шулай бул, балам. Бына, ҙур үҫеп, ҡалаға китәһең, һау кешенең рәхәт шул... *(Бер Сәғиткә, бер Ғәлимәгә ҡарап, күҙ йәшен һөртөп ала.)*

Ғ и м а ҙ и. Уҡыһын инде. Бына беҙ уҡымау арҡаһында харап булдыҡ. Үҙебеҙ генә түгел, башҡаларҙың да харап булыуына сәбәпсе булдыҡ. Наҙанлыҡ менән эшләгән эшенә хәҙер ағайым да үкенә лә бит... *(Ғәлимәгә карап алып, башын түбән эйә.)*

М ә с р ү р ә. Шулай ҙа бит, ни хәл итәһең инде.

Ғ и м а ҙ и. Ярай, әсәһе, һин бар, Ғәлимәне алып ҡайт инде, беҙ китәйек.

М ә с р ү р ә. Ярай, улайһа, хәйерле юл. Хуш, балам, ҙур үҫеп, ғалим булып ҡайт.

С ә ғ и т. Ярай, әсәй, һау бул. *(Күрешәләр. Ғәлимә янына килеп.)* Иҫән бул инде, Ғәлимә апай.

М ә с р ү р ә. Күреш, Ғәлимә, күреш, ул ҡалаға китә.

Ғ ә л и м ә *(әҫәрләнмәй)*. Ҡасан китәһең, ә? Миңә һабын алып ҡайт. Закир ҡалаға барғанда һабын алып ҡайта торғайны! *(Көлөп куя ла, йөҙөн үҙгәртеп.)* Эй, туҡта, мин дә ҡалаға барайым әле, унда Закирҙы күрермен.

Ғ и м а ҙ и. Ҡуй, һылыуым, ҡыҙҙар ҡалаға бармайҙар, уларға йөрөргә ярамай.

Ғ ә л и м ә *(омотһоҙ булып артҡа сигенде лә)*. Улай булғас, мин һыуға барып ҡайтам әле, унда көтә торғандарҙыр. *(Бер ситкә китә.)*

С ә ғ и т *(Ғәлимәгә карап торғандан һуң)*. Эх, Ғәлимә апай, Ғәлимә апай...

Ғ и м а ҙ и. Киттек, балам.

С ә ғ и т. Киттек, атай, киттек! *(Бара биргәс, туҡтап, ауыл күренешенә күҙ ташлай ҙа.)* Ауыл ҡарайып артта ҡалды... Э беҙ алға киттек.

Ғ и м а ҙ и менән С ә ғ и т сығып китәләр.

М ә с р ү р ә. Туғаным Ғәлимә, әйҙә ҡайтайыҡ, гөлкәйем!

Ғ ә л и м ә *(Мәсрүрә янына йүгереп килеп)*. Еңгә, бөгөн Закир менән беҙҙең туй була... Әйҙә, еңгә, тиҙерәк ҡайтайыҡ.

Мәсрүрә менән сыға башлайҙар, ҡаршыларына З а к и р осрай. Закир, Ғәлимәне күреүгә, баҫҡан ерендә, туҡыш ҡала. Ғәлимә, ҡалтыранып, ҡурҡып киткән кеүек була. М ә с р ү р ә уңайһызланып сығып китә.

Ғ ә л и м ә. Эй йәнем, килдеңме? Нисек килдең, күрерҙәр бит...

З а к и р *(паузанан һуң, Ғәлимәнең ҡаршыһына килеп)*. Ғәлимә?.. Был һинме, Ғәлимә?..

Ғ ә л и м ә *(башта Закирға мөлдөрәп, ҡыҙғаныс итеп ҡарай ҙа, үҙгәреп, йылмайып, бик еңеләйеп китә)*. Эй,

Закир! Аһау йөҙөп йөрөгән ҡаҙҙарҙың бер ояһы беҙҙеке бит. Бәй, һинең йөҙөңдә ҡара бөткән икән!.. Әйҙә, ултыр әле *(Закирҙы үҙ яныңа тарта.)*

З а к и р *(аптыраған хәлдә Фәлимә әргәһенә ултыра).* Фәлимә, ауырыйһыңмы, эсең бошамы?

Ф ә л и м ә *(көлә төшөп).* Юҡ, ни эшләп ауырыйым ти? Туйҙан элек ауырыған инем дә, инде терелдем. Белмәгән кеше кеүек, һорашҡан була бит әле!.. *(Башын түбән эйеп, көлә башлай.)*

З а к и р *(бер аҙ тынлыҡтан һуң).* Бына һин терелерһең дә, шунан һуң беҙ һинең менән бергә булырбыҙ. Бик күңелле булыр. Бына шунда беҙ ҙә, ошо ҡаҙҙар кеүек, матур ҡаҙҙар аҫрарбыҙ.

Ф ә л и м ә. Ниңә, һин мине ташлап китәһеңме ни?.. Әсәйем шулай: «Терел, терел, туй булыр», — ти. Әйтерһең мин ауырыйым. *(Төҫөн үҙгәртеп.)* Мине, тиле, тиҙәр шул. Эй алла, мин ауырыймымы икән ни? *(Уйға бата.)*

З а к и р. Терелерһең, Фәлимә. Бына мин һине ҡалаға алып барырмын. Унда докторҙар яҡшылап дарыуларҙар. Шунан һуң матур итеп туй яһарбыҙ. Бергәләп, бәхетле йәшәрбеҙ.

Ф ә л и м ә *(ҡапыл күңеллеләнеп).* Шулай шул, йәнем. Ҡарамалыҡ туғайына икәүләп бесән сабырға барырбыҙ. Бейек итеп көбән һалырбыҙ! Эйе бит?..

З а к и р. Әлбиттә, шулай итербеҙ, Фәлимә. *(Бер ҡулы менән йөҙөн ҡаплап, ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөртә.)*

Ф ә л и м ә *(Закирҙың яулығын күреп).* Эй, Закир, был яулыҡты һиңә мин бүләк иткәйнем бит әле... Вәғәҙә бүләге бит был, Закир, эйеме?

З а к и р. Эйе, Фәлимәкәй...

Ф ә л и м ә *(тәрән уйға батып, аҡрын ғына йырлап сәбәй).*

Аҡ киндерҙәр һуҡҡан саҡта
Тала минең беләгем.
Усаҡтағы уттар кеүек,
Яна минең йөрәгем...

(Закирға бик яҡын итеп ҡарай ҙа, көлөп, ситкә ҡарай. Закирҙың күҙҙәрендә йәш бөртөктәрен күреп). Эй, илама, йәнем, туйҙа илайҙар тиме ни? *(Закирҙың башын күкрәгенә ҡуйып иркәләй.)*

Хәмиҙә килеп инә. Закирҙы күреп, яулығы менән бер яҡ битен ҡаплай, кире китә башлай.

З а к и р *(Хәмиҙәне күреп).* Фәлимә йәнем, ана әсәйең килгән!

Ғәлимә *(урынынан тороп, әллә ҙур шатлыҡ, әллә ҙур ҡурҡыныс аңлатҡан тауыш менән).* Әсәй! Әсәй!..

Хәмиҙә *(уңайһыҙланып килеп).* Һаумы, Закир? Иҫән-һау ҡайттыңмы? Бына донъялар шулай булып китте бит әле.

Закир. Иҫән әле, Хәмиҙә еңгә. Үҙегеҙ ни хәлдә?

Хәмиҙә. Һорама инде, Закир. Бына ошо хәсрәт көнөнә ҡалдыҡ.

Закир. Башта уҡ ҡалаға алып барып, докторға күрһәтергә кәрәк ине шул, Хәмиҙә еңгә, өшкөртөүгә алданып ҡалмаҫҡа ине.

Хәмиҙә. Һөйләмә инде, Закир. Терһәкте бик тешләр инек тә, булмай шул инде.

Ғәлимә *(ашығып).* Әсәй, әсәй!.. Закир ҡайтты... Мин уларға барам... Беҙҙең туй булды...

Закир *(уңайһыҙланып Хәмиҙәгә ҡарап).* Туй ҙа яһарбыҙ... Тиҙерәк терел, тим...

Хәмиҙә *(күҙҙәрен һөртөп).* Булыр, балаларым, туй ҙа булыр... Тик һауыҡ ҡына. Әйҙә, балам... Әйҙә, атайың да көтә торғандыр... Уның эшкә бараһы бар.

Закир. Ғәлимә, бар инде... Мин дә ҡайтам... *(Ситкә ҡарап, күҙен һөртә.)*

Ғәлимә. Әйҙә, улай булһа!.. *(Тиҙ генә урынынан һикереп тора ла, алға атлай башлай, Закирға ҡарай.)* Һин ҡал... Беҙҙә Закир бар... Ул мине көтәлер, ул һәр көн беҙгә килә... Минән башҡа бер кемгә лә күренмәй. Ул, һине күрһә, асыуланыр... *(Ашығып сығып китә.)*

Закир *(яңғыҙ ҡарап ҡалып).* Их, Ғәлимә, Ғәлимә! Ниндәй генә дауалар табып, һине элекке кеүек матур, шат күңелле, аҡыллы Ғәлимә итергә? Ошо ҡараңғы тормош уҫҡынында күпме кешеләр һәләк була, талана, ғазап эсендә йәшәй... *(Пауза.)* Ләкин бит Аҡиҙел буйҙарында ҡасан да булһа бер көслө ташҡын ҡалҡырға тейеш?!

Шәйхулла менән Финиәт инәләр.

Шәйхулла *(Закирҙы күреп).* Бәй, Закир балам, һин түгелме һуң? Һау ғына ҡайттыңмы, балам?

Закир. Имен генә, Шәйхулла бабай, үҙең нисек? Һаумы, Финиәт бабай?

Финиәт. Шөкөр. Ҡарттарса ғына, балам.

Шәйхулла. Ярай, улым, һауыҡҡанһың икән әле, бик яҡшы.

Финиәт. Ҡайҙарҙа йөрөнөң, Закир, ҡалаламы?

Закир. Эйе, ҡалала булдым. Ай ярымға яҡын больницала яттым, унан сыҡҡас, бындағы ҡәбәхәтлектәргә

ҡаршы тоғро закон барҙыр тип, хаҡлыҡ эҙләп ҡараным, булманы. Суды ла, полицияһы ла — бөтәһе лә шул уҡ мулла, шул уҡ староста икән.

Шәйхулла. Шул инде ул, балам. Ҡарға ҡарғаның күҙен сыҡмай.

Гиниәт. Иш ише менән, иш ҡушы менән тиҙәр бит.

Шәйхулла. Кем Закир балам, һин бик ят һүҙҙәр һөйләй башланың бит әле; әйҙә, булмаһа, Иҙел буйына төшәйек, беҙҙең балыҡ тотҡанды ла ҡарарһың.

Закир *(йылмайып)*. Һуң, төшһәк ни, төшәйек.

Төшөп китәләр.

Фәлимә *(ҡурҡынып йүгереп инә)*. Эй алла, көскә ҡотолдом бит үҙҙәренән! Ҡайтаммы һуң, үлһәм дә ҡайтмайым... Хәҙрәт бабай килә, ҡасығыҙ, ҡас!.. Йәнем, китмә инде, бергә китербеҙ...

Алыҫтан Шәйхулланың йырлаған тауышы ишетелә.

Ерән атҡайымдың, ай, ялдарын
Киблаларҙан иҫкән ел тарай.
Үҙ бәхетҡәйҙәрең, ай, булмағас,
Байға хеҙмәт итеп кем ярай.

Фәлимә. Йырлайҙар... Кем йырлай... Белмәйем... Ай, ана сәлләле кешеләр киләләр, аяғымдан тарталар... Ҡулдарымдан тоталар... Ҡотҡарығыҙ!.. А-а-а!..

Ҙур көс менән ҡая башына йүгерә менә лә ҡапыл ярҙан ысҡына. Пауза. Яр аҫтында Шәйхулланың тауышы ишетелә.

Шәйхулла *(тауышы)*. Эй! Кешеләр! Ярҙам!

Сәхнә артында шау-шыу күбәйә башлай. Тауыштар: «Фәлимә харап булған!» «Бында килегеҙ!» «Тиҙерәк ярҙам! Ярҙам!»

Шәйхулла *(йүгереп менеп, бер яҡҡа ҡыҫҡыра)*. Эйй! Кемдәр бар унда! Фәлимә харап булды! Ярҙам! *(Кабат төшөп китә.)*

Сәхнәнең икенсе башында тауыш көсәйә. Бер аҙҙан, тындары ҡурылып, Фәхри менән Хәмиҙә, улар артынан тағы бер нисә кәше килеп инә.

Фәхри. Ҡайҙа ул, ҡайҙа балам? Ни булды?

Яр аҫтына төшөп китәләр.

Аҫта тауыш. Паузанан һуң халыҡ ярҙан менә. Закир Фәлимәне күтәргән. Фәлимәнең сәстәре һалынып төшкән. Ҙур тынлыҡта Фәлимәне ергә һалалар. Фәхри уның өҫтөнә ҡапланып йығыла.

Ғ и н и ә т *(әкрен генә).* Йәне бармы?

Ш ә й х у л л а. Ошо тиклем яр башынан ташҡа йығылып төшкән кеше иҫән ҡала буламы?

Ғ и н и ә т. Эй бисара бала...

Ш ә й х у л л а. Харап иттеләр. Алтын кеүек бала ине! Гөл ине бит, гөл, күкрәп үҫкән гөл ине!

З а к и р. Хуш, саф күңелле, матур Ғәлимә, мәңгегә хуш...

Ф ә х р и *(йөҙө ағарған, күҙҙәре ҙур асылған хәлдә, ятҡан еренән тора).* Дин, тинем, шәриғәт тинем... Аҡтыҡ ризығымды ҡырҡып, ғөшөр, фытыр ашаттым уларға. Шул муллаларҙың һүҙҙәренә ҡарап бит, күҙ ҡарамдай күргән берҙән-бер баламды харап иттем. *(Күҙ йәше менән.)* Бына, ҡарағыҙ — минең ғәзиз баламдың йөҙө апаҡ! Муллалар ғына уның саф йөҙөнә ҡара яҡты... Йөрәге кеһеҙ, фекере саф, зиһене үткер бер бала ине. Муллалар ғына уны аҡылынан шаштырҙы! Ул муллаларға ашатҡан ашым, биргән саҙаҡаларым харам булһын! Был ғонаһһыҙ баланың туҡҡан күҙ йәштәре, кисергән ғазаптары уларҙың башына таш булып яуһын! Шулар ғына һәләк итте баламды. Балам, балам! *(Ғәлимәнең күкрәгенә ятып илай.)*

Шаршау

Дауыт Юлтый

(1893—1937)

Дауыт Исхаҡ улы Юлтыев 1893 йылдың 18 апрелендә элекке Самар губернаһы Бығаулыҡ өйәҙенә ҡараған (хәҙерге Ырымбур өлкәһе) Юлтый ауылында тыуа. Тәүҙә ул үҙҙәренең ауыл мәҙрәсәһендә, аҙаҡ үҙҙәренә яҡын булған Сорокин мәҙрәсәһендә уҡый.

Д. Юлтый 1914 йылда Беренсе бөтә донъя һуғышына алына һәм өс йылдан ашыу һуғыш яландарында ҡатнаша. Октябрь революцияһын Д. Юлтый фронтта ҡаршылай һәм беренсе көндәрендә үк Ҡыҙыл Армияға доброволец булып яҙыла. Ул 1919 йылда Коммунистар партияһы сафына инә. 1921 йылда Юлтый «Башҡортостан» гәзитәһына редактор итеп ҡуйыла, шунан башлап ул республика матбуғаты һәм культурабыҙҙың башҡа ойошмаларының эшен юлға һалышыуҙа бөтә көсөн биреп эшләй. 1925—1926 йылдарҙа Мәскәүҙә Ҡыҙыл профессура институтында уҡый, бер ни тиклем ваҡыт Центриздатта редактор булып эшләй. Утыҙынсы йылдарҙа «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналының, «Әҙәби удар» гәзитәһының редакторы, Башҡортостан яҙыусылар союзын ойоштороусыларҙың һәм уның етәкселәренең береһе була.

Д. Юлтый ижад эше менән 1908—1909 йылдарҙа уҡ шөғөлләнә башлаһа ла, уның исеме матбуғатта 1916—1917 йылдарҙа ғына күренә: Октябрь революцияһына тиклем һәм революция осоронда яҙылған шиғырҙары тик 1921 йылда «Урал моңдары» тигән йыйынтыҡта баҫылып сығалар. Егерменсе һәм утыҙынсы йылдарҙа уның күп һандағы шиғырҙары, «Мәйсәрә», «Нефть тураһында әкиәт», «Айһылыу» һәм башҡа поэмалары китап булып баҫылалар.

Д. Юлтый — талантлы прозаик. Уның «Ҡан» романы башҡорт прозаһы үҫешендә хәл иткес роль уйнаны. Күп һандағы хикәйә һәм очерктары ла дөйөм әҙәбиәт үҫешенә ҙур йоғонто яһанылар.

Д. Юлтый үҙенең «Ҡарағол» драмаһы менән әҙәбиәтебеҙҙә тарихи драматургияға шиғеҙ һалды. Уның шулай уҡ «Салауат», «Маҡтымһылыу», «Ҡолансәс», «Тирмәндә», «Һин кем?», «Табылған Марат», «Аралбаевтар» кеүек әҫәрҙәре театрҙар сәхнәһендә ҡуйылалар. Ул бер шаршаулы пьесалар ҙа яҙҙы. Башҡорт театры һәм драматургияһы тураһында мәҡәләләре менән культура тормошонда актив ҡатнашты.

Яҙыусының әҫәрҙәре рус һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгән.

ҠАРАҒОЛ

Тарихи трагедия
5 шаршауҙа

Ҡатнашалар

Ҡараҡол — ихтилал башлығы, баҫыңҡы тәбиғәтле, 40 йәштәрҙә.
Гөлбикә — уның бисәһе, 35 йәштәрҙә.
Таңсулпан — уларҙың ҡыҙы, 18 йәштәрҙә.
Ҡыраубикә — Ҡараҡолдоң әсәһе, 60 йәштәрҙә.
Мозой — Ҡараҡолдоң күршеһе, бер ҡатлыраҡ, еңел тәбиғәтле кеше, 28 йәштәрҙә.
Һөйөндөк — ихтилалсы, Таңсулпандың һөйгән егете, 28 йәштәрҙә.
Яланғол, Ҡәҙерша — Ҡараҡолдоң иптәштәре, ихтилалсылар, 30 йәштәрҙә.
Ишмырҙа кантон — түрәлектә, шәһәрҙә яратыусы кеше, 50 йәштәрҙә.
Иван Иванович — отставка алған генерал, ҙур имение эйәһе кеше, 50 йәштәрҙә.
Елизавета — уның бисәһе, бик ҡыланырға яратыусы ханым, 35 йәштәрҙә.
Батюшка Андрей — рухани миссионер, 40 йәштәрҙә.
Вася — Иван Иванович ҡулында тәрбиәләнгән, уның имениеһында актер булған крәҫтиән балаһы, 25 йәштәрҙә.
Наташа — ул да имениела тәрбиәләнгән, актриса, крәҫтиән ҡыҙы, Васяның һөйгәне, 20 йәштәрҙә.
Кондрат Петрович — кантон штабында команда башлығы, 30 йәштәрҙә.
Кузьма — крәҫтиән, төрмә һаҡсыһы, Васяның дуҫы, 30 йәштәрҙә.
Ғөлбәғизә — Ишмырҙа кантондың ҡыҙы, 18 йәштәрҙә.
Әпкәләй — Ишмырҙа кантондың шымсыһы, ҡара эсле, маҡтансыҡ кеше, 43 йәштәрҙә.
Дуня — Иван Ивановичтың аҫрау ҡыҙы, 18 йәштәрҙә.
Аҫылбай — ҡурайсы башҡорт егете, 25 йәштәрҙә.
Барсынһылыу — Таңсулпандың иптәш ҡыҙы, 17 йәштәрҙә.
Имение һаҡсылары, төрмә башлыҡтары, төрмәлә ятҡан крәҫтиәндәр һәм башҡалар.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе картина

Йәйге кис. Тирмә алды. Алыçта, эңер ҡыҙыллығына күмелгән тауҙар күренә. Сәхнә асылғанда йылҡы көтөүе оҙатҡан, һыйыр көтөүе ҡаршылаған, йылҡы кешнәгән, һыйыр мөңрәгән тауыштар, шау-шыу ишетелә.

I күренеш

Г ө л б и к ә *(ҡулына күнәген аҫып, ашығып сыға).* Көтөү ҙә ҡайтып бөткән икән. Эш менән булашып, ҡаршыларға сыға алманым тағы. Быҙауҙарым ҡушылмаһалар ярар ине. Таңсулпан ҡайҙа йөрөй икән? Таңсулпан, Таңсулпан!

Т а ң с у л п а н *(артта).* Әүү!

Г ө л б и к ә. Таңсулпан!

Т а ң с у л п а н. Әү, тимен, әсәй! *(Килеп сыға.)*

Г ө л б и к ә. Көтөү ҡаршыланыңмы әллә?

Т а ң с у л п а н. Эйе, әсәй, барыһы ла теүәл, ала башмаҡ ҡына ҡайтмаған.

Г ө л б и к ә. Ярар, ҡайтыр әле. Балам, мин һыйырҙарҙы һауып алайым. Һин тирмә тирәһен ҡарай тор. Хәҙер атайың да ҡайтыр инде. Ул ҡунаҡтар менән ҡайтырмын тигәйне. Һауыт-һабаңды әҙерләп, ҡымыҙҙарыңды тултырып ҡуй.

Т а ң с у л п а н. Әсәй, ҡайҙан, кемдәр икән?

Г ө л б и к ә. Кемдәр, тип ни, шул Үмер буйынан. Һөйөндөктәр ахырыһы...

Т а ң с у л п а н. Һөйөндөктәр?!

Г ө л б и к ә. Белмәйем тағы, шулар булырға кәрәк. *(Кабаланып сығып китә.)*

Т а ң с у л п а н. Һөйөндөктәр! *(Үҙ алдына.)* Ысынлап та Һөйөндөктәр киләләрме икән?.. Мин уларҙы килер тип һис көтмәгәйнем. *(Уйланып тора.)* Уны ла күрер көнөм бар икән!.. Ул ниңә килергә уйланы икән? Ул ни өсөн килә икән? Ул килһә, мин уға нисек күренермен, мин уға ни һөйләрмен? Миңә ул һауанан төшкән бөркөт кеүек күренә! Мин уны күрһәм... эйе, мин уны күрһәм, ҡаушап ҡалырым төҫлө күренә.

Шул саҡта Ә п к ә л ә й килә, ҡарап тора.

Улар ҡасан килерҙәр икән? Хәҙер кис була, бына улар яҡтыла килһәләр икән. Мин уларҙың анау тау башынан төшкәндәрен ҡарап торған булыр инем. *(Китә.)*

Әпкәләй алға сыға.

II күренеш

Әпкәләй *(яңғыҙы. Таңсулпан киткән яҡҡа ҡарап).* Бына ҡыҙ. Бына ҡыҙ тиһәң дә ярай!.. Күрәһең, уға хәҙер дәрт ингән. Ул әллә ҡайҙарға, тау башына ҡарап, әллә ниҙәр һөйләгән була бит әле! Бына мин шундай ҡыҙҙы яратам инде! Бына ул ҡыр ҡаҙҙарына оҡшаған. Бына ул һәр ваҡыт түш-баштарын ҡалҡытып, ҡыр ҡаҙҙары кеүек осорға ғына тора... Бына ул үҙе бик һылыу, бик һәйбәт... Атаһы насар шул. Ҡыҙыңды миңә бир, тип атаһынан һорап ҡара әле. Әй-йәй-йәй, ул яҡын да килмәҫ, бына, уның атаһы булмаһа ине, мин ул ваҡытта ҡылыҡты ҡылыр инем инде!.. Бәлки, күндереп тә булыр ине. Ҡарағол менән дошманлашып кителде шул! Дошманын дошман да, ошо ҡыҙын күрһәм, күңел ирей ҙә китә. Ҡарағол менән ярашып, килешеп ҡуйғы ла килә. *(Уйланып тора.)* Бик уҫал кеше бит ул. Уның менән кантондың үҙе килешә алмағанда, мин килешә аламмы һуң?

Мозой килә.

Мозой *(алдына сығып туҡтай).* Әпкәләй ағай, нихәл?

Әпкәләй. Бик яҡшы. Ә, Мозой ҡорҙаш, һинме ни әле? Мозой ҡорҙаш, һин миңә ағай тиһең дә тиеүен, һин минән өлкәнерәк түгел микән, миңә ағай түгелме икән?

Мозой. Мин һинән өлкән буламмы? *(Көлә.)*

Әпкәләй. Юҡ, ысынлап, мин шулай уйлап йөрөйөм әле. Әсәйем мәрхүм, мине — сыҫкан йылында, һине йылҡы йылында тыуған, тип әйтә торғайны.

Мозой. Бәлки, шулайҙыр. Бәлки, һин сыҫкан йылында тыуғанға күрә бәләкәй булғанһыңдыр?

Әпкәләй *(төҫөнә ололоҡ сығарып).* Һин мине бәләкәй тип хурламаҡсы булаһың тағы! Аҫыл һөйәк буйға ҙур булмай ул.

Мозой *(артына әйләнеп, елкәһенә төртөп көлә).* Дөрөҫ, дөрөҫ, Әпкәләй ағай.

Әпкәләй *(әреләнеп).* Ҡорҙаш, шулай ул. Бына мин бәләкәй булһам да, бер урында ла бәләкәй тип тормайҙар. Кантонға барһаң: «Һыуу, әйҙүк түргә!» — тип кенә тора. Ә баярға барһаң: «Ах, кенәз, кенәз!» — тип кенә ҡаршы ала. Бына хикмәт башта бит ул! Бына һеҙҙең Ҡарағол бар. Һыны ла һәйбәт, төҫө лә матур, һүҙгә лә сәсән, ә үҙе бер урынға ла һыя алмай. Ул ниҙән килә, беләһеңме? Уның башында хикмәт юҡ.

Мозой. Әпкәләй ағай, һуң шул хикмәтеңде беҙгә лә өйрәт әле!

Әпкәләй *(көлөп)*. Һәй, алйот! Ул хикмәт тигән нәмә өйрәтә торған нәмә түгел. Ул нәҫелдән килә. Беҙҙең атай, олатайҙың тайраһы Әбүбәкер Сиддиҡ сәхәбәгә барып тоташҡан. Беҙҙең олатайҙар борондан изге булып килгәндәр. Хәҙер тарханлыҡ алғандар. Батша белмәйенсә тарханлыҡты бирмәй ул.

Мозой *(шаярып)*. Һиңә кантон ғына булырға ине, Әпкәләй ағай.

Әпкәләй. Әллә булмаҫ тип беләһеңме, әллә булмаҫ тип беләһеңме? Булыр ҙа ул! *(Китә.)*

Мозой. Хикмәт... Изге нәҫел... тархан... кенәз... *(Башын һелкеп тора.)* Тфү!.. Бының теле булмаһа, күҙен күптән ҡарға суҡып киткән булыр ине. Әгәр ҙә үҙен күрмәй, һүҙен тыңлаһаң, ысынлап та, был ҙур кеше икән тип уйларһың! Ошаҡ ташып, баяр тупһаһына теҙ сүгеп, тамағын туйҙыра. Имеш, уға баярҙар «кенәз» тип әйтәләр. Бына хикмәт ҡайҙа ул! *(Көлә.)* Үҙе минән ун биш йәшкә ҙур, миңә ҡорҙаш ти! Ғәрләнеп үлерһең бит!

Шул ваҡыт Карағол инә.

III күренеш

Карағол *(асыулы төҫ менән ҡабаланып йөрөй)*. Ярар, күрербеҙ, ни булһа, шуны күрербеҙ! Шунан башҡа юл юҡ. Улар беҙҙе таныһындар!.. *(Ҡамсыһын һелтәп.)* Шунан һуң һөйләшербеҙ!.. Шунан һуң улар беҙҙең кем икәнлекте аңларҙар!

Мозой *(яҡын килеп)*. Карағол ағай, Карағол ағай, ниңә ҡыҙып ҡайттың?

Карағол *(һиҫкәнеп)*. Ә-ә-ә, һин, Мозой, бындамы ни әле? Ярай, бик яҡшы. Һин миңә бик кәрәк инең әле. *(Тауышын аҡрынайтып.)* Ҡустым, мин Үмер буйынан киләм. Ҡыпсаҡ ырыуына абжурнай команда ҡуйғандар. Ишмырҙа кантон беҙҙең Коростал, Оло Бүләк буйҙарын Красиков баярына биргән. Беҙҙе йәйләүҙән ҡыуасаҡтар. Әгәр ҙә ҡарышһаң, беҙгә лә абжурнай команда ебәрәсәктәр.

Мозой. М-м-м... Әле генә Әпкәләй беҙҙең ауылға килде. Ишемғол ҡартҡа ҡарай китте. Моғайын, ул берәй әшкәмә ҡороп йөрөй торғандыр!

Карағол. Әпкәләй? Бына нисек! *(Уйланып тора.)* Уны хәҙер үк бөтөрөп ташларға кәрәк! *(Йөрөй.)* Йә, ни һөйләй, ниңә килгән?

Мозой. Уның һүзенең ата-инәһе юк. Ул һаман мактана ғына.

Карағол. Ммм... *(Кулын һелтәй.)* Ярар, йөрөһөн әле. Мозой, һин уға күҙ-колак бул. Ни һөйләй, кайҙа бара, барыһын да аңдып торорға кәрәк. Ул берәй нәмә һиҙеп килмәнеме икән?

Гөлбикә килә. Мозой китә.

IV күренеш

Гөлбикә *(күнәген кулына аҫып)*. Бәй, һин кайтканһың икән!

Карағол *(төҫөн үҙгәртеп)*. Йә, Гөлбикә, мал-тыуар именме, барыһы ла теүәлме? Таңсулпан кайҙа?

Гөлбикә. Барыһы ла иҫән. Таңсулпан аш-һыу тирәһендә йөрөй торғандыр. *(Өҫтөнә карап.)* Кара әле, һин бөгөн әллә ни эшләп үҙгәреп кайтканһың. Әллә бер-бер хәл булдымы?

Карағол *(белгертмәй)*. Юк, юлда асыуым килде. Беҙҙең ауылдың йылкы өйөрҙәрен Иван Иваныс еренә кыуып ташлағандар! Коростал башына килеп сыкһам, кыуып алып китергә маташып яталар. Баяр кешеләре менән камсыға камсы килеп талашырға, өйөрҙө кайырып алып кайтырға тура килде.

Гөлбикә *(хафаланып)*. Бөтә йорт өсөн бер үҙең талашаһың да йөрөйһөң! Һиңә ниңә кәрәк ул!

Карағол *(һүҙен бороп)*. Гөлбикә, юкҡа хафаланма әле. Оҙакламай кунактар килер. Һин аш-һыу тирәңде карап куй.

Гөлбикә. Был арала һин дә өйҙә тормай башланың. Күк тана өс көндән бирле кайтканы юк. Бынау кара башмак һәр көн инәһен имә лә куя. Көрән бейәнең колонона һакау булған. Өйҙә торһаң, шуларға берәй төрлө әмәл яһар инең, исмаһам!

Карағол. Ярар, ярар. Барыһын да иртәгә эшләрмен.

Гөлбикә китә.

Бисә тиһәң бисә инде. Һаман да шул башмактарын, колондарын килтереп кыҫтыра. Минең башымда шул ғына ине шул!

Кыраубикә менән Таңсулпан инәләр.

Таңсулпан *(алдан йүгереп килеп)*. Атайым кайтҡан!

Кыраубикә. Балам, ҡайтҡанһың икән. Һыуһап кайтҡанһыңдыр, ни эшләп урамда тораһың? *(Таңсулпанға ҡарап.)* Бар, балам, атайыңа ҡымыҙ әҙерлә.

Таңсулпан. Атай, ҡунаҡтарың ҡайҙа? Әсәйем, ҡунаҡтар менән килә, тигәйне бит?

Карағол. Килерҙәр, балам, килерҙәр.

Кыраубикә. Кемдәр улар?

Карағол. Үмер буйҙары. Һөйөндөк, Кәҙерша, Яланғол.

Таңсулпан *(үҙ алдына)*. Һөйөндөктәр киләләр, Һөйөндөктәр киләләр! *(Йүгереп тирмә артына китеп юғала.)*

Кыраубикә. Ул Кәҙерша тигәне кем балаһы?

Карағол. Ул — Ғәҙелша ҡарт балаһы. Ҡыпсаҡ ырыуынан. Шул ыруҙың бер батыры инде.

Кыраубикә. Балам, улар төнгә ҡарай ниндәй йомош менән йөрөйҙәр? Әллә берәй кәңәш-фәлән бармы?

Карағол. Юҡ, әсәй, былай ғына.

Кыраубикә. Былай ғына булһа, ярай инде. *(Китә башлай, әйләнеп килә.)* Кара әле, балам, анау Әпкәләй тигәндәре Ишемғол ҡарттарға килеп туҡтаны. Мин үткәндә, һаман һинең менән булашҡаны ҡолағыма салынды. Етмәһә, беҙҙең Таңсулпанға өмөт һалып йөрөй, тип һөйләйҙәр.

Карағол *(күтәрелеп)*. Әпкәләй Таңсулпангамы? *(Ирония менән көлә.)*

Кыраубикә. Яусы ебәрәм, үҙе бирмәһә, закон менән ҡурҡытып алам. Мин Карағолдоң ниндәй эш менән йөрөгәнен беләм, тип әйтә ти.

Карағол *(үҙ алдына)*. Бына ни һөйләй бит ул! Шул әҙәм аҡтығы, шайтан күләгәһе Карағолдоң ҡыҙын һораһын, имеш! Һин уның телен ҡара! Ул шуның менән әллә кемдәрҙе ышандыра бит! Бөтә йортто болғап йөрөй бит ул! Ысынлап та, шул һүҙҙе әйтәме икән?

Кыраубикә. Ат аҡтығы илгә бүре килтерә, тиҙәр, балам. Уҫаллыҡҡа таһарәт кәрәкмәй ул. Йорт эсендә тыныслыҡ тыуып тора. Һин, балам, бик ҡыҙыу ҡанлыһың, берүк, инде шундай эштәргә ҡатыша күрмә!

Карағол. Бына минең ҡаным шул тиклем ҡайнай, ул Әпкәләй тигәндәрен хәҙер үк барып өҙгөләп ташла-

гым килә! Әгәр ҙә ул шул һүҙен һөйләп йөрөй торған булһа, мин уны хәҙер үк быуып ырғытам!

Ҡ ы р а у б и к ә. Балам, эт менән эт булма. Бер аҡҡа ҡара төшһә, унан арыныуы ҡыйын булыр. Хәҙер хөкөм бик ауырайҙы бит, балам.

Ҡ а р а ғ о л. Инде, әсәй, Әпкәләйҙе лә өҫкә баҫтырып тороп булмаҫ.

М о з о й йүгереп инә. Ҡыраубикә сығырға була. Шул ваҡыт Ҡыраубикәгә бәрелә.

VI күренеш

Ҡ ы р а у б и к ә. Абау, шаталаҡ, күҙемде сығарырһың бит! Әҙәм төҫлө йөрөһәң ни була?

М о з о й. Инәй, берүк асыуланма инде! Яңылыш булды. Ысынлап та, минең күҙемә аҡ-ҡара күренмәй. *(Ҡарағолға.)* Йә, Ҡарағол ағай, әле һин һаман да бында тораһың икән. Мин... *(Ҡыраубикәгә ҡарап, һүҙен әйтеп бөтөрмәй.)*

Ҡ ы р а у б и к ә. Бөгөн һеҙгә ни булған?! Ҡарағол, һин арыған<u>һың</u>ыр, инеп һыуһын эс, ҡунаҡтарың килгәнсе, ял итеп ал. *(Сыға.)*

Ҡ а р а ғ о л. Йә, ни бар?

М о з о й. Һаҡ булырға кәрәк. Был Әпкәләй тигәндәре шымсылап йөрөй икән! Ни ҙә булһа, бер нәмә һиҙеп маташа торғандыр.

Ҡ а р а ғ о л. Ул шымсылап әллә ни ырата алмаҫ. Бөгөн бында Ҡәҙершаларҙан башҡа Вася тигән крәҫтиән егете лә килмәксе ине. Һин Айсыуаҡҡа әйт, ул килә ҡалһа, ҡараңғы төшкәнсе Айсыуаҡта тороп торһон.

М о з о й. Ҡарағол ағай, ул Әпкәләй шул төҫө, ҡиәфәте менән беҙҙең Таңсулпанды телләп маташа икән!..

Ҡ а р а ғ о л. Беләм, беләм, ишеттем. Хәҙергә һөйләнһен әле...

М о з о й. Ярай, ул ваҡытта мин китәйем әле. *(Китә.)*

VII күренеш

Ҡ а р а ғ о л *(яңғыҙ)*. Бына нисек улар йөрәкте ағыулайҙар бит! Бына улар нисек һинең намыҫыңдан көләләр бит! Ишмырҙа кантондың үҙе талағаны, йортто хурлағаны етмәгән, Әпкәләй кеүек шайтан шәүләләрен өҫкә ебәрә бит! Быға нисек итеп түҙеп торорға?! Әпкәләй...

Йә, Әпкәләй ҙә килеп, һинең йортоңда һүҙ һөйләп йөрөһөн!.. *(Йөрәй, гасабилана.)* Юҡ, былай булһа, түҙер хәл ҡалманы! Бөгөн ҡк эш ҡуҙғатырға кәрәк. Бөгөн ҡк, ни булһа ла берәй ҡылыҡ ҡылырға кәрәк!.. *(Йөрәй.)* Табаныбыҙ аҫтынан ерҙәребеҙҙе тартып ала башланылар. Үҙ ерҙәребеҙҙән үҙ малдарыбыҙҙы ҡыуа башланылар. Ыҫынлап та, уйлап торһаң, шунан башҡа сара ҡалмай бара бит инде!.. *(Уйланып тора, унан һуң артына ҡарай.)* Ниңә былар оҙаҡлап киттеләр? Ҡараңғы төшөнкөрәһен тип торалармы икән? Улар килгәнсә бер аҙ ял итеп торорға кәрәк. *(Инеп китә.)*

Әҙ генә ваҡыт сәхнә буш ҡала. Таңсулпан инә.

VIII күренеш

Таңсулпан *(яңғыҙ).* Бөгөн Һөйөндөктәр киләләр. Уны күреү өсөн минең йөрәгем шул тиклем ярһый! Бына йөрәгемдә ат сапҡан кеүек. Бына, ул ат сапҡан кеүек тибә! *(Йөрәй.)* Мин уны шул тиклем яратам! Уны һис бер телем менән әйтә алмаҫ кеүекмен! Мин уны нисек күрермен, нисек һөйләшермен?! Ул мине үҙе күрерме, әллә мин күрерменме? Юҡ, юҡ, мин үҙем күрә алмам! Ул миңә үҙе килһен!..

Гөлбикә инә.

Гөлбикә. Бөгөн һиңә ни булды? Утҡа баҫҡан бесәй кеүек үҙгәләнәһең!

Таңсулпан. Юҡ, әсәй, мин... *(Һүҙен әйтә алмай, ҡаушай.)*

Гөлбикә. Бар, ҡаҙан аҫтыңды ҡара. Ҡайнап артылып китмәһен.

Таңсулпан. Ярар, әсәй. Хәҙер, хәҙер. *(Үҙ ихтыярынан тыш йүгереп сыға.)*

Гөлбикә. Бөгөн ни булған быларға?! *(Һөйләнеп тирмәгә инә.)*

IX күренеш

Барсын *(йүгереп инә).* Таңсулпан! Таңсулпан!

Артта тауыш.

Таңсулпан *(килеп сыға).* Әү!

Барсын. Бөгөн һеҙгә ҡунаҡтар киләме ни?

Таңсулпан. Барсынҡайым, әйҙә, тегендә, усаҡ алдына, барабыҙ. Мин һиңә бик матур һүҙҙәр һөйләрем! *(Тартҡылап алып китә.)*

Барсын. Абау, ҡулымды ҡайыраһың! Таңсулпан, ни булды һиңә? Туҡта, туҡта! *(Китәләр.)*

Шул ваҡыт сәхнә артынан ат тояҡтары тауышы ишетелә. Һөйөндөк, Кәҙерша, Яланғолдар килеп инә.

X күренеш

Кәҙерша *(бик эре атлап алға килеп баҫа)*. Әле мин юл буйына шуны уйлап килдем. *(Һөйөндөк менән Яланғол алдына килә лә.)* Мин әйтәм, ысынлап та, беҙ башлаһаҡ, бөтә йорт беҙҙең арттан ҡуҙғаласаҡ. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, һеҙ... мин... шулаймы?.. Ил ҡарттары беҙҙең һүҙҙән сыҡмайҙар бит.

Тегеләр. Әйе, әйе, дөрөҫ.

Кәҙерша. Әле мин Ҡарағолдоң тупһаһына килеп баҫҡас, уның кисәге һүҙенә тамам ышандым. Бына уның шул һүҙенә ҡөүәт итеп Васяны алайыҡ. Бөтә урыҫ крәҫтиәне Вася тип үлергә тора бит. Был тирәлә башҡа гәскәр көсө юҡ. Үмер буйындағы абжурнай команда беҙгә бер кислек эш!

Һөйөндөк. Кәҙерша уҙаман, сисенгән һыуҙан таймаҫ, тиҙәр. Бола ҡуҙғатыу бер беҙҙән түгел, ата-олатанан була килгән эш.

Яланғол. Ҡарағол өйҙәме икән?

Шул ваҡыт Вася менән Мозой киләләр.

Мозой. Бына Ҡарағол тирмәһе.

Тегеләр *(күмәк тауыштан)*. Вася, Вася! Беҙ һине килгәндер, тип тора инек әле.

Вася. Һеҙ ҙә яңы ғынамы?

Тегеләр. Килеп төшөп кенә торабыҙ.

Ҡарағол сыға.

Ҡарағол. Ниндәй тауыш тиһәм, һеҙ килгәнһегеҙ икән. Йә, иҫәнме, һаумы, ҡустылар?

Күрешәләр.

Кәҙерша *(көлөп)*. Һинең тирмәң кантон штабына оҡшап киткән. *(Көләләр.)*

Карагол *(шым ғына)*. Егеттәр, бында күҙгә-башҡа күренеп тормағыҙ, әйҙәгеҙ, тирмәгә, бында шымсылар йөрөй... Һаҡ булырға кәрәк... Унда һөйләшербеҙ.

Барыһы ла инәләр. Карагол менән Кәҙерша ҡалалар.

Кәҙерша. Бына шул була инде...

Карагол *(Кәҙершаға яҡын килеп)*. Йә, Кәҙерша, был кешеңдең артҡы уйы-фәләне юҡмы икән? Ышаныслымы икән?

Кәҙерша *(бик ышаныслы тауыш менән)*. Мин әйткәнсә!

Карагол *(уйланып)*. Шулай булһа, ярай ҙа.

Кәҙерша. Беҙҙең эшебеҙ абжурнай команда менән генә бөтмәҫ бит. Беҙ Иван Иваныстың имениеһын да туҙырырға тейешбеҙ. Ул баяр имениеһының бөтә ҡатмарын белә. Ул баяр имениеһынан ҡыуылған, ҡасҡан кеше. Бөтә крәҫтиән уны күҙ өҫтөндә ҡаш кеүек итеп тота. Ул үҙе урмандарҙа, тау араларында ҡасып, яңғыҙ йөрөһә лә, крәҫтиәндәр уның ҡайҙа баҫҡанын белеп торалар. Ул беҙҙең юл кешеһе.

Карагол *(төҫөнә шатлыҡ сығарып)*. Ысынлап та шулай булһа, беҙҙең эш бик уң булыр! Булды... булды... Мин һиңә ышанам, Кәҙерша... Әйҙә, инәбеҙ.

Мозой ҡаршы сыға.

Мозой. Йә, ағай, ни эшләйбеҙ?

Карагол. Хәҙер ҡымыҙ, аш килтерегеҙ!

Караголдар тирмәгә инәләр. Мозой тирмә артына инеп юғала. Һөйөндөк сыға.

XI күренеш

Һөйөндөк *(ян-яғына ҡаранып)*. Таңсулпан күренмәй, әллә минән ҡасты инде. Ҡалайтып ҡына уны күрергә инде?! *(Уйланып тора.)* Юҡ, бөгөнгә мин уны ҡуйып торайым. Шундай ҙур кәңәштәр башҡарғанда, был эште Карагол һиҙеп ҡалһа, яҡшы һүҙ әйтмәҫ. Бәлки, ул мине оноторҡандыр ҙа инде. Күптән, бик күптән күргән юҡ бит инде. Хәҙер ул минең хәтеремдә алдымдан осоп үткән аҡ күгәрсен кеүек кенә ҡалған. Ул ваҡыт мин уға ниҙер һөйләнем, ул миңә ниҙер әйтте, уларҙың береһен дә, береһен дә хәтерләмәйем! Уға күп ваҡыт уҙҙы, әммә ми-

нең күңелдә ул һаман ҡалды. Ә бөгөн мин уны Ҡараҡол хәтере өсөн йөрәктә һаҡларға тейешмен.

Шул ваҡыт Гөлбикә — аш, Мозой ҡымыҙ күтәреп килә.

Мозой. Йә, йәш ҡоҙа, һин ниңә улай сығып ҡастың?

Гөлбикә. Иҫәнме, Һөйөндөк? Күптән күргәнебеҙ юҡ.

Һөйөндөк. Эйе, күптән инде.

Мозой. Йәгеҙ, инегеҙ. Ҡараҡол аҡай бик ашыҡтыра бит.

Инәләр, улар артынан Таңсулпан менән Барсынһылыу сыға.

XII күренеш

Таңсулпан *(Барсынһылыуға)*. Күрҙеңме, ана теге әсәйемдәр менән инеп киткән егет Һөйөндөк була инде!

Барсын. Мин йүнләп күрә лә алмай ҡалдым!

Таңсулпан *(Барсындың күлдарынан тотоп)*. Шул тиклем һөйкөмлө ул!.. Бына күрһәң ине... Әгәр ҙә бөгөн ҡунһалар, мин һиңә уны күрһәтермен...

Барсын. Әйҙә, тирмә ишегенән ҡарайыҡ!

Таңсулпан. Ҡуй, улай килешмәҫ! Атайым белеп ҡалһа, яратмаҫ. Атайым ундай ғәҙәтте һис тә яратмай.

Барсын. Әллә ҡыҙғанаһыңмы? Әллә яман күҙ тейер тип ҡурҡаһыңмы?

Таңсулпан. Бигерәк тә тегеләй һин! Ул минең кемем? Әллә ниҙә бер килгән кешегә шулай тиһең! *(Үпкәләгән һымаҡ ситкә китә.)*

Барсын *(барып ҡосаҡлап ала)*. Юҡ, юҡ, Сулпанҡайым, былай ғына әйтәм! Һин үпкәләмә тағы!

Таңсулпан *(төҫөн үҙгәртеп, эсенән сығарып)*. Барсынҡайым, белһәң ине!.. Мин уны үткән яҙ Таштүбә уйынында күрҙем. Унан күмәкләшеп ауылға ҡайттыҡ. Бына шул ваҡыттар һис хәтеремдән сыҡмай.

Барсын. Мин унда булманым шул...

Таңсулпан. Эйе, булманың шул... Мин уны бер кемгә лә һөйләгәнем юҡ. Минең күңелемдең иң алыҫ ерендә һаҡлана!

Барсын *(үпкәләгән һымаҡ)*. Ярай инде, дуҫлығың шул икән!

Таңсулпан. Мин һиңә, мин уны һөйләрем, бик матур итеп һөйләрем...

Барсын. Ысынлап, һөйләрһеңме? Ҡасан һөйләрһең? *(Һикергелә́й.)*

Шул вакыт Гөлбикә сыга.

Гөлбикә. Ниңә шулай һикергеләйһегеҙ? Әллә ситтән егеттәр килгәс, йөрәгегеҙгә түҙә алмай йөрәйһәгеҙмә? Кыҙ кешеләргә улай килешмәй ул!

Таңсулпан. Ошо әсәйем бушты һәйләр ҙә йөрөр инде.

Китәләр, төрөпкәһен тоҡандырып Вася сыға.

XIII күренеш

Вася *(яңғыҙ)*. Бөгөн минең бөтә иҫке уйҙарым емерелде. Мин ошо көнгә тиклем христиандан бүтән халыҡҡа дин дошманы тип ҡарай инем. Донъялағы бөтә афәттәрҙы шуларҙан ғына күрә инем. Антихрис, вәхши тип ҡарай инем. Бөгөн мин бөтөнләй үҙгәрҙем. Улар ҙа беҙҙең кеүек үк ҡыҫылалар, иҙеләләр, хур ителәләр. Уларҙа ла ирек теләгән яҡшы йөрәк бар. Бөгөн улар миңә шул тиклем яҡындар, туғандар! Үҙемдең крәҫтиәндәрем кеүек туғандар! Ҡараңолдоң осҡон сәскән күҙҙәре, ялҡын һипкән йөрәге минең йөрәгемә һүҙһеҙ ҡушылды. Ах, әгәр ҙә бөтә диңгеҙ тулҡындары бөгөн минең йөрәгем кеүек көслө типһәләр ине!.. Мәңге тулҡын ярып ултырған ҡая таштар селпәрәмә килерҙәр ине. Әгәр ҙә янар тауҙар минең күкрәгем менән һулыш алһалар ине, минең ихтыярымды быуған бөтә таш стеналар көлгә әйләнеп күккә осорҙар ине! *(Шул ваҡыт тирмә эсендә оҙон көйгә тартылған моңло ҡурай тауышы яңғырап китә. Вася шул тауышҡа шашып ҡала ла, тирмә эргәһенә килә.)* Был ниндәй тауыш? Был тауыш әллә ҡайҙан, алыҫтан, йөрәктең иң тәрән, ҡайғылы еренән килгән кеүек. Мин бындай йөрәктән ҡайғы менән аҡҡан тауышты беренсе ишетәм. Гүйә, бында, минең йөрәктә, йырлай төҫлө тойола. Гүйә, бында минең Наташам да ҡайҙалыр, ҡараңғы мөйөштәрҙә, ҡараңғы урман араларында илай төҫлө тойола! Мин үҙем дә ҡараңғы, елле, шомло төндәрҙә, урман араларында яңғыҙым ҡунған саҡтарҙа, ҡолағыма ошондай өндәр ишетелә торғайны. Шул ваҡыт минең ауыр тойғоларға күмелгән йөрәгем яҡтылыҡ теләп ашҡына торғайны. Бөгөн мин кешелек йөрәген аңланым... Бөгөн мин улар менән азатлыҡ өсөн көрәшкә сығам. Әй, дуҫтар, уйнағыҙ шуны, бөгөн мин һеҙҙең менән! *(Тирмә ишегенә ынтыла.)*

Ҡурай тауышы дауам итә. Сәхнә ҡараңғылана. Аҡрын ғына шаршау төшә.

Икенсе картина

Шул үк Карагол төйәге. Кис. Тирмәнең арт ягында усакта базлап ут күренә. Икенсе яғында агаслык күренә.

I күренеш

Әпкәләй *(агаслык араһынан сыға).* Бында ни булһа ла бар!.. *(Бөкрәйеңкерәп атлап, тирмә эргәһенә килә. Тыңлай.)* Әйе, әйе, шулар... Әйттем дә шул!.. *(Башын һөйә.)* Һай, башта хикмәт бар шул! *(Уйланып тора.)* Былар кемдәр булыр икән? Аттары был якты якына окшамай. Кайҙан да булһа, ситтән килгәндәрҙер. Былар тиктәскә килмәҫтәр... Былар ни ҙә булһа берәй этлек уйлап йөрөй торгандарҙыр. Караголға йүнле кешеләр киләме һуң!.. *(Камсыһын һелтәп.)* Тукта, тукта, алыҫка китә алмаҫһығыҙ!.. Әпкәләй башында хикмәт бар... Белер ул... Калайтып кына һуң уларҙы күргә? Якын барырға мөмкин түгел. Әгәр ҙә Карагол һиҙеп калһа, ул бөркөт кеүек ташланыр ҙа, быуа ла башлар. Тиҙерәк китергә кәрәк... Ярар... *(Әкрен генә китә.)*

Шул ваҡыт Һөйөндөк менән Таҡсулпан сығалар.

II күренеш

Һөйөндөк *(шикләнеп).* Ниндәйҙер шәүлә күренде. Шыптырлаған аяк тауыштары ишетелде. Әллә берәй кеше булды инде. Кайҙа, мин шул якка барайым әле.

Таҡсулпан. Куй, Һөйөндөк, барма, өкө, ябалакфәләндер, йә куяндыр. Кайһы ваҡыт төндә шуларға тап булам да, үҙем дә, караҡмы әллә, тип куркып калам.

Һөйөндөк. Миңә кеше аяғы кеүек ишетелде. Йә, ярар, улай булғас, уны куйып торайык... Шулай, һин бере һен дә онотмағанһың икән! Мин уларҙың бере һен дә хәтерләмәйем. Тик һине генә хәтерләйем...

Таҡсулпан. Бәлки, һин мине лә онотҡан булғанһыңдыр әле...

Һөйөндөк. Юк, юк, һис юк! *(Усаҡ алдына килә-ләр.)* Минең йөрәгемдә ошо ут кеүек бер ут кына калды. Ул бының кеүек һүнә торған ут түгел, яна торған, янған һайын ҙурая торған, күтәрелә торған бер ут булды!

Таҡсулпан. Һин бигерәк тә арттырып ебәрә һең инде! *(Көлә.)* Мин ни эшләп ундай ут булайым ти?

Һөйөндөк. Калай итеп әйтәйем инде? Алда ут булғас, шуға окшаттым инде.

Таңсулпан. Улай булғас, һин алдыңда ни күрһоң, мине шуға оҡшатаһың икән! *(Көлә.)*

Һөйөндөк *(башын һелкеп)*. Ай-яй-яй!.. Минең телемде бөтөнләй ҡырҡтың бит! Хәҙер инде мин ни һөйләһәм дә ҡурҡа башланым.

Таңсулпан. Һөйлә, һөйлә, мин уны һис уйлап әйтмәнем. Мин уны былай ғына әйттем.

Һөйөндөк. Бая аҡ күгәрсен тинем. Ул һүҙемдән дә көлдөң. Хәҙер инде ни тип әйтергә лә белмәйем!

Таңсулпан. Һөйөндөк, теге ҡурай тартҡан егет һеҙҙең кемегеҙ?

Һөйөндөк. Ул Кәҙерша тигән бер батыр.

Таңсулпан. Ысынлап та, шулайҙыр, тигәйнем. Ул ҡурай тартҡан саҡта, уның тауыштары урғылып, ташып сыға. Мин уны тирмә артынан тороп оҙаҡ тыңланым. Йотлоғоп тыңланым. Ул бигерәк тә моңло тарта!..

Һөйөндөк *(ҡапыл һикереп тора)*. Әллә һин уны яраттыңмы?

Таңсулпан *(аптырап ҡала)*. Ул ни тигән һүҙең, Һөйөндөк?

Икеһе ҡарашып ҡалалар.

Һөйөндөк *(ҡапыл әйләнеп ситкәрәк атлай, үҙ алдына)*. Мин ни эшләнем? Мин бөгөн үҙемде тота алмайым. *(Таңсулпанға яҡынай.)* Юҡ, мин былай ғына әйткәйнем. Ысынлап та, ул моңло уйнай, ысынлап та, ул һәр кем яратырлыҡ уйнай!

Таңсулпан. Һөйөндөк, мин киттем, атайымдар күрер, яҡшы түгел... *(Ҡапыл китә, юғала.)*

Һөйөндөк *(ҡапыл, яуапһыҙ ҡала)*. Таңсулпан, Таңсулпан! Туҡта әле! Бер генә һүҙем бар ине... *(Уның артынан китә.)*

Карағол, Кәҙерша, Вася, Яланғолдар сыға.

III күренеш

Карағол *(күккә ҡарап)*. Таң да яҡындыр инде. Беҙ бында көндөҙгә ҡалмайыҡ. Кеше күҙенә күренергә ярамай. Бигерәк тә Васяға ярамай. *(Тағы күккә ҡарай.)* Болоттар ҙа ҡуйырып, ел сығып тора. Ямғыр яуыр, ахыры.

Кәҙерша. Беҙҙең өсөн иң һәйбәт төн. Бүреләр йөрөй торған төн. Вася бүреләр менән күп йоҡлаған кеше. Шулаймы, дуҫ?

В а с я. Бындай төндәрҙә бәләкәй уттар ҙа алыҫтан ҙур, ҡурҡыныс булып күренәләр. Әле был ҡараңғы төндө күргәс, минең башыма шундай иҫәр бер уй төштө: әгәр ҙә беҙ ошондай ҡараңғы төндә Иван Иванович имениеһына ут һалһаҡ, унан лаулап сыҡҡан ут шәүләләре ҡайҙа тиклем күтәрелер ине, дуҫтар?!

Я л а н ғ о л. Улмы, ул бөтә тирә-яҡты ҡып-ҡыҙыл шәүлә итер.

Ҡ ә ҙ е р ш а *(көлә)*. Был һүҙең күңелемә оҡшай, Вася... Минең башым ҡымыҙ менән дә иҫергән. Ә был һүҙҙәрең мине тамам иҫерттеләр. Ысынлап та, шул уттар минең күҙ алдыма хәҙер үк күренә башланылар.

Ҡ а р а ғ о л *(алға сығып)*. Шулай... Яҡшы һүҙҙәр улар... Ул һүҙҙәр бер беҙҙең генә йөрәктә түгел, бөтә йорттоң йөрәгендә ҡайнай. Халыҡ көҙгө ҡылған кеүек дөрләп янырға, тоҡанырға тора. Бөгөн Васяны күргәс, уның менән аңлашҡас, минең был уйҙарым тағы ла дөрөҫкә сыҡтылар.

Ҡ ә ҙ е р ш а *(йөрөй)*. Бына шул һүҙҙәрегеҙ йөрәгемде елкендерә бит!..

Ҡ а р а ғ о л *(Мозойға ҡысҡыра)*. Мозой, Мозой!

М о з о й *(йүгереп тирмәнән сыға)*. Йә, ни бар?

Ҡ а р а ғ о л. Хәҙер үк айғырыңды мен, Айсыуаҡҡа бар. Ул эҙер торһон. Хәҙер беҙ уға барып етербеҙ.

М о з о й. Хәҙер. *(Китә.)*

В а с я. Мин хәҙер тамам ышандым. Һеҙ ҙә минең кеүек кеше икәнһегеҙ. Мин һеҙгә шуны әйтәм: мин баяр балаһы түгел. Мин крәҫтиән балаһы. Мин йәштән зирәк булғанмын, йырға оҫта булғанмын, шуға күрә мине баярҙар уҡытҡандар. Мин күп уҡыным. Күп донъя күрҙем. Күп аҡыллыларҙың һүҙҙәрен ишеттем. Шуға күрә лә мин баяр һарайында уйынсы, йырсы булып ҡына ҡала алманым. Мин һаман үҙ туғандарымды — крепостной крәҫтиәндәрҙе яҡын күрҙем. Шулар араһына киттем. Шулар өсөн мин имениеның управляющийын үлтерҙем!.. Ҡастым... Хаҡлыҡ эҙләнем. Ул хаҡлыҡ тигән нәмә көрәшмәйенсә табылмай икән. Уның өсөн беҙ башлап көрәшергә тейешбеҙ икән. Бөгөн мин һеҙҙә шул хаҡлыҡты күрҙем. Бына, беҙ барырбыҙ, беҙҙе күрерҙәр ҙә, беҙҙең арттан бөтә йәберләнгән халыҡ күтәрелер. Шулай түгелме, дуҫтар?

К ү м ә к т а у ы ш. Шулай, шулай, Вася!

Ҡ а р а ғ о л *(барыһына ла)*. Йәгеҙ, ҡустыларым, ваҡыт уҙмаһын. *(Ян-яғына ҡарана.)* Бәй, һөйөндөк ҡайҙа, ул ҡайҙа китеп юғалды?

Яланғол. Аттар янында булыр. Һөйөндөк! Һөйөндөк!

Һөйөндөк йүгереп сыға.

Һөйөндөк *(ҡаушағаң киәфәт менән).* Бәй... һеҙ йыйынған да икәнһегеҙ, мин ни төптө абайламай торам!

Ҡарағол. Әйҙәгеҙ, аттарығыҙға менегеҙ!

Вася, Яланғол, Һөйөндөк китә. Ҡәҙерша менән Ҡарағол ҡала.

IV күренеш

Ҡәҙерша. Йә,Ҡарағол, юлды ҡалай тотабыҙ?

Ҡарағол. Сәлим йәйләүенән сығып, Әлмәш тауы аша тура тартығыҙ. Айсыуаҡтар беҙҙе Әпәкә сабынлығында көтөргә тейештәр.

Ҡәҙерша. Аттар ҙа асыҡтылар инде. Көн тыуғансы беҙгә Шар урманына, Әпәк сабынлығына төшөргә кәрәк булыр.

Ҡарағол. Ярар, бар, һин егеттәрҙе алып бара тор. Мин өй эсе менән генә күрешәйем инде.

Ҡәҙерша китә. Мозой инә.

Мозой. Ҡарағол ағай, Айсыуаҡтар йүнәлделәр.

Ҡарағол. Бик яҡшы. Һин, Мозой, минең йортҡа күҙ-ҡолаҡ бул. Кантон тирәһендә йөрөштөр. Тегеләйбылай хәбәр булһа, беҙгә ирештер. Бигерәк тә Әпкәләйҙе һағала. Хәҙергә беҙҙең ҡайҙа киткәнде бала-сағалар белмәһендәр...

Шул ваҡыт Ҡыраубикә инә.

V күренеш

Ҡыраубикә. Бәй, ҡунаҡтар киттеләрме ни?

Ҡарағол. Киттеләр, әсәй.

Ҡыраубикә. Һин дә ысын яһау булып кейенеп алғанһың даһа! Бынау ете төн уртаһында ҡайҙа барабығыҙ, балам? Бөгөн төшөм дә боларып бөттө, төн буйы йоҡлай алмай сыҡтым. Ни ҙә булһа, берәй эш артынан йөрөйһөгөҙҙөр ахыры, балам. Ундай ваҡыттарҙа ҡарт әсәйеңдең кәңәше кәрәк булыр ине, балаҡайым!

Карағол. Йә, әсәй, юҡҡа көйәләнмә әле! Үҙең беләһең инде, донъяның маҙаһы китеп тора бит. Шуны байҡап ҡайтмаҡсы булғайныҡ.

Кыраубикә. Ундай ваҡытта ил ҡарттары кәңәш итә торғайнылар. Һеҙ йәшерен-бошорон ғына эш итергә уйлайһығыҙ. Үҙегеҙгә ауырлыҡ килмәһен. Хәҙер хөкөм бик ауыр тип һөйләйҙәр бит.

Карағол. Әсәй, һин батала бул. Эштең йәшерене юҡ. Барыбер һиңә әйтмәксе инем. Инде ағай-эне һаҡ торһон. Бөтә йорт бер ауыҙҙан торғанда, беҙгә генә ҡырын ҡалып булмаҫ.

Кыраубикә. Ярар инде, балам. Заман һеҙҙеке. Тик бына бала-сағаларың бар бит. Эшең уң сыҡмаһа, бәләһе үҙеңә булыр. Былай ҙа йән өшөп бөткән. Бәй, Гөлбикә, Таңсулпан ҡайҙа? Уларға әйтмәй китәһеңме ни? Мин ни тип әйтермен?

Карағол. Әсәй, һин инде артыҡ шаулама. Беҙ ундай уҡ эшкә китмәйбеҙ, улар юҡҡа хафаланмаһындар.

Кыраубикә. Ярай, инде, балам, хәйерле булһын!

Гөлбикә, Таңсулпан инәләр.

VI күренеш

Гөлбикә *(ҡабаланып)*. Бынау ҡараңғы төндә ҡайҙа елкендең тағы?

Таңсулпан. Бәй, һөйөндөктәр ҙә киттеләрме ни?

Кыраубикә. Киткәндәр шул, бына атайың да китергә тора бит.

Карағол. Гөлбикә, һин юлға арҡыры төшөп тормаһаң, ни була?

Гөлбикә. Ат яманы тайға эйәрер, тигәндәй. Өйөрлө йәш-елкенсәк артынан ҡайҙа бара торғанһыңдыр! Әллә үҙеңә йәш кәләш димләнеләрме?

Карағол. Юлға сыҡҡанда шул ғәҙәтең бер ҙә килешмәй инде!

Кыраубикә *(Гөлбикәгә)*. Йә, килен, ирең юлға сыҡҡанда киреле-миреле һөйләп торма инде! Үҙ хәлен үҙе белә торғандыр. Йомошо барҙыр.

Гөлбикә. Ҡайтып өйҙә ҡунманы, тағы ла китергә алғаҫыған! Башына ни төшһә, шуның артынан атына менә лә саба! Башҡа кешеләрҙең ирҙәре бер ҙә улай итеп йөрөгәне юҡ!

Таңсулпан. Һөйөндөк ағайҙар менән булғас, ни булыр тип беләһең?

Кыраубикә. Ярар, хафаланма, килен!

Карагол. Йә, хәҙергә хуш булып тороғоҙ. Беҙ бернике көндән ҡайтырбыҙ. *(Мозойға.)* Һин күҙ-ҡолаҡ бул. Анау байтал туры бейәне тышаулап һауһындар. Унан һуң мин әйткәндәрҙе ҡолағыңа ал, Мозой... *(Китә.)*

Кыраубикә. Ир кешенең иҫәбе — ат тояғы менән тигәндәр. Башында иҫәбе булғас, уны юлынан тотоп буламы ни?

Гөлбикә. Кис кенә ҡайтты, төндө лә ҡунманы. Әйткән юҡ, ниткән юҡ, тағы сыҡты ла китте!

Нәҫәләр. Таҡсулпан яңғыҙы ҡала. Бер ағас төбөнә ултыра.

VII күренеш

Таҡсулпан *(яңғыҙы)*. Һөйөндөк: «Ҡайтҡас та, яусы ебәререм», — тине. Улар, береһе көнгә ҡайтырбыҙ, тинеләр. Миңә бөгөн көтөргә, иртәгә көтөргә, иртәнән һуң көтөргә... Әй, бигерәк оҙаҡ та... Әллә ниңә күңелем һаман тыныҫланмай! Шул ҡәһәр һуҡҡан Әпкәләй һүҙҙәре йөрәгемде сәнсә лә тора! Хатта төштәремә инә... Ҡурҡып уянам. Бөгөн йоҡо ла килмәне. Йырлашып ултырыр инек, Барсынһылыу ҙа ҡайтып киткән булды. Нисек итеп төн уҙғырырға инде, әле бөгөнгө төн, иртәгә лә төн була... Иртәнән һуңға инде яусы килә... Әллә ниңә бик оҙаҡ кеүек тойола бит әле!.. Ҡайтмаҫтар шул!.. Рәхәтләнеп һөйләшеп тә булманы, исмаһам! Әллә ниңә ашыҡтылар. Бынау ҡараңғы төндә, әсәйем әйтмешләй, ашығып ҡайҙа баралар икән? Төн ҡараңғы... Был төндө нисек итеп уҙғарырға икән?! *(Йырлай.)* Һөйөндөк әллә нәмә әйтмәксе иткәйне, әйтә алманы. Атайым ҡыҫҡырып ебәргәс, йүгереп минең эргәмдән китеп барҙы. *(Тирә-яғына ҡарана.)* Төн ҡараңғы, ямғыр болоттары ҡалҡып тора. Абау, ниндәй ҡурҡыныс! Аяҡ тауыштары ла килә!.. *(Ҡурҡып йүгереп китә.)*

Сәхнә аҙ ваҡыт буш ҡала. Йәшен йәшенләй. Әпкәләй әкрен генә килеп инә.

Әпкәләй *(тирә-яғына ҡаранып)*. Әһә, аттар юҡ. Шылғандар ахыры... Ҡайҙа киттеләр икән? Ай, эттәгенәһе! Ишемғол ҡартта боларып, һиҙмәй ҙә ҡалғанмын! Моғайын, Үмер буйына киткәндәрҙер. Ярар, иртәгә белермен әле... Бөгөнгә юлығыҙҙы буш куяйым инде, иртәгә һеҙҙең эҙегеҙгә төшмәһәм, исемем Әпкәләй булмаһын!.. *(Ауыҙына бармағын тығып, уйланып тора.)* Юҡ,

юк, былар артынан барырга кәрәк, барырга кәрәк... *(Йүгереп сәхнәнән сыга.)*

Йәшен йәшенләй.
Аҡрын гына ш а р ш а у төшә.

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Ауыл урамы күренә. Б е р н и с ә к е ш е һөйләшеп тора. Шаршау асылганда М о з о й инә.

I күренеш

М о з о й *(ашығып килеп сыға)*. Йә, ағай-әнеләр, һаумыһығыҙ? Ни эш бөтөрөп тораһығыҙ?

Б е р е н с е к е ш е. Ни эш тип, ниен һөйләйһең инде уның?.. Йәйләү тураһында һөйләшеп торабыҙ әле. Ҡайынлыҡолдан ҡыуалар. Имәнлек яғына күсмәһәк, башҡа бер рәтле урын да ҡалманы инде.

И к е н с е к е ш е. Кантонға барырга кәрәк, үҙенә әйтергә кәрәк.

М о з о й *(көлә)*. Белмәйем, ағайҙар. Анау Үмер буйҙары кантонға барҙылар. Ырымбурға кеше ебәрҙеләр. Тауыш күтәрҙеләр. Барыбер рәт сыҡманы. Етмәһә, өҫтәренә абжурнай команда килтереп ҡуйҙылар. Хәҙер инде ни эшләргә лә белмәйҙәр.

Б е р е н с е к е ш е. Былай булһа, бында торорға рәт ҡалманы. Күсеп китергә кәрәк.

И к е н с е к е ш е. Шулай, шулай.

Б е р е н с е к е ш е. Күскәндә лә ныран-заран килтереп китергә кәрәк.

И к е н с е к е ш е. Ҡайҙа һуң беҙҙең егеттәр? Ҡайҙа булды һуң беҙҙең дәртле егеттәр?

М о з о й. Дәртле егеттәр бар ул... Бына уларға арҡа таянысы юҡ. Халыҡ бер ауыҙҙан торһа, хәҙер улар эште дөрөп алып китергә торалар...

Б е р г ә. Ҡайҙа, кемдәр улар?

М о з о й. Бына Ҡарағол, Ҡәҙерша, Яланғол, Һөйөндәктәр бар. Ана крипоснуй крәҫтиәндәр ҡушылырға торалар.

Б е р г ә. Бәй, бәй, шулай булғас ни...

Ө с ө н с ө к е ш е. Ни булһа, булһын, ысынлап та, ҡарттар, иттифаҡлашып ҡарарға кәрәк.

М о з о й. Әпкәләй ауыҙына ҡарап торһағыҙ, ул һеҙҙе кәкре ҡайынға терәтер әле!

Дүртенсе кеше. Яһаҡ та яһаҡ! Түләмәһәң, ҡамсы!.. Егеттәр, был ерҙә тороргә рәт ҡалманы инде!

Беренсе кеше. Ул Әпкәләй тигәндәрен быуып үлтереп ташларға кәрәк! Етер, илде күп ҡоротто инде!

Шул ваҡыт бер нисә татар, рус крәҫтиәне килеп сыға.

II күренеш

Мозой *(алдарына сығып)*. Бына юлаусылар. *(Тегеләргә.)* Йә, ҡайҙан киләһегеҙ?

Тегеләр туҡтайҙар, хәл йыялар.

Юлаусы *(маңлайынан тирҙәрен һөртөп)*. Беҙ бик алыҫтан киләбеҙ.

Башҡалары ултыралар.

Мозой. Юл башы ҡайҙа?

Юлаусы. Юл башы ҡайҙа тип... Һорашмағыҙ инде. Уралға барабыҙ.

Икенсе кеше. Бына шулар килеп беҙҙе ҡыҫалар!

Беренсе кеше. Эйе, бына шулар килеп беҙҙе ерҙән ҡыуҙыралар!

Өсөнсө кеше. Уларҙың килгән береһен үткәрмәй, бөтөрөп тороргә кәрәк!

Мозой. Ҡуйығыҙ, ҡарттар, һеҙ ни һөйләйһегеҙ? Улар үҙ иректәренән йөрөй тип беләһегеҙме ни?

Юлаусы. Әй ҡарттар, туғандар! Бына был ҡусты дөрөҫ әйтә. Беҙ крепостной крәҫтиәндәр. Беҙҙе хужаларыбыҙ ҡыуып йөрөтә. Беҙ ҙә, һеҙҙең кеүек үк, үҙ йортобоҙҙа рәхәт кенә ятҡан булыр инек тә, булмай шул!

Беренсе кеше. Һеҙ беҙҙең ергә килмәгеҙ! Һеҙ бына беҙгә афәт булаһығыҙ... Ерҙәребеҙҙән ҡыуҙыраһығыҙ.

Юлаусы. Ҡарындаштар, яңылыш уйлайһығыҙ. Беҙҙең үҙебеҙҙе лә ҡыуып йөрөтәләр. Бына беҙ нисә йөҙ сакрымдар йәйәүләп барабыҙ. Әле арттан да каруандар киләе. Беҙ заводтарға эшләргә барабыҙ.

Беренсе кеше. Хәйер, быларға гөнаһ юҡ инде.

Мозой. Һеҙгә бармаҫҡа ине. Тоторға ла ҡасырға ине.

Юлаусы. Ҡасып ҡайҙа бараһың? Йортта семья ла бар.

Мозой. Һеҙ бармағыҙ.

Ю л а у с ы. Нисек ул? Ул ни тигән һүҙ?.. Беҙҙең ихтыярҙамы ни ул?

М о з о й. Беҙҙә ялан иркен, тау-урман күп. Тотоғоҙ ҙа беҙгә ҡушылығыҙ!

Башҡалар хәрәкәтләнәләр. Мозойға ҡарайҙар.

Ю л а у с ы. Мин аңламайым. Беҙ уны күптән уйлайбыҙ ҙа, булмай шул!

Тын ҡалалар, артта ҡыңғырау тауышы ишетелә, тауыш китә.

— Моғайын, кантон килә!
— Эйе, кантон!
— Ҡарттар, ҡасырға кәрәк!
— Эйе, ул берәй эш менән килә торғандыр...
— Һуҡтырырға килә торғандыр...
— Һуҡтырырға!
— Һуҡтырырға!..

Ҡаса башлайҙар. Крәҫтиәндәр ни эшләргә лә белмәйҙәр.

Ю л а у с ы л а р. Был ни эш?
— Әллә берәй хәл бармы?
— Беҙ ни эшләйбеҙ!

У л а р ҙ а китәләр. Сәхнә буш ҡала. Артта ат тояҡтары, ҡыңғырау шалтыраған, яҡынайған т а у ы ш т а р ишетелә. Ҡалын, көр тауыштар менән һөйләшәләр. Бер аҙҙан И ш м ы р ҙ а кантон, Ә п к ә л ә й инә.

III күренеш

Ә п к ә л ә й. Берәү ҙә юҡ, бөтәһе ҡасҡан, кантон хәҙрәт.

И ш м ы р ҙ а. Ул ни тигән эш?! Ҡайҙа ауылнай? Ҡайҙа дисәтскийҙәр?

Ә п к ә л ә й. Әйтәм бит, кантон хәҙрәт, был ауылда ни ҙә булһа, берәй ҡотҡо бар... Ҡараҡолдоң шауҡымы бында ла бар...

И ш м ы р ҙ а. Әгәр ҙә улар кантонды һанға алмаһалар, бөтә ауылын һуҡтырырға әмер бирермен! Был ауыл йәйләүҙән ҡайтты бит, барыһы ла өйҙә булырға тейеш!

Ә п к ә л ә й. Кантон хәҙрәт, әллә боҫтолармы икән?

И ш м ы р ҙ а. Булмаҫ, булмаҫ! Төтөндәре сыға, барыһы ла өйҙә булыр. Бар, Гөләйфә еңгәң менән Гөлбәғизәнең Иҫәргәп байға төшөр. Ауылға хәбәр тарат, кантон ҙур эш менән килгән, тиген. Мәрхәмәт менән килгән, тиген. Үҙенә «сәскә ататыу» туйына халыҡ йыясаҡ, тиген.

Э п к ə л ə й *(китə)*. Сəскə ататыу туйы!.. Сəскə ататыу туйы... Кантон мəрхəмəт менəн килгəн!.. Сəскə ататыу туйы!..

И ш м ы р ҙ а *(яңғыҙ ҡалып)*. Шулай шул... Əпкəлəй үҙе белə ул. *(Йөрөй.)* Фу, тирлəп киттем!.. Ҡайҙа һуң былар? Ауылнай ҡайҙа йөрөй икəн? Ул минең алдан килгəнде белеп, ат əҙерлəп торорға тейеш бит! Ул кафырҙы һуҡтырырға кəрəк! Ҡатай нəҫеленəн йүнле кеше сығармы һуң? Кафыр, эт аҙығы! *(Китə.)*

Г ө л б ə ғ и ҙ ə килеп сыға, тирə-яғына ҡарана.

IV күренеш

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Ҡайҙа киттеләр! Атайымдар ҡайҙа киттеләр? Бəй, ауылдарында бер генə кеше заты күренмəй! Был ни тигəн эш?

М о з о й килеп сыға.

М о з о й. Йə, ҡоҙаса, юл башы ҡайҙа? Кантон хəҙрəт ҡайҙа бара, əллə берəй туйғамы?

Г ө л б ə г и ҙ ə *(аптырап)*. Юҡ, туйға түгел. Беҙ йəйлəүһайларға барабыҙ. Атайымдың сəскə ататыу туйы була. Шунда бөтə халыҡты йыясаҡ.

М о з о й *(көлөп, үҙ алдына)*. Тапҡан ваҡыт, бында халыҡ башын күтəргə ҡаңғыра, ул сəскə туйы йыя!.. *(Гөлбəғиҙəгə.)* Йə, кантон хəҙрəт үҙе ниндəй сəскə һайлай?

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Белмəйем, уны халыҡ һайларға тейеш бит.

М о з о й *(үҙенə)*. Мин уға дегəнəк сəскəһе һайлар инем! *(Гөлбəғиҙəгə.)* Бик яҡшы, бик яҡшы... Əллə ҡыҙҙар йыйырға килдегеҙме?

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Эйе, мин был ауылдың ҡыҙҙарын сақырам. Атайым бөтə ҡурайсыларға, уйынсыларға хəбəр иттерҙе. Ике йылҡы, дүрт тыу һыйыр, утыҙ һарыҡ һуйҙырабыҙ. Ҙур батша түрəләре буласаҡ. Бигерəк тə ҡыҙыҡ буласаҡ. Кара əле, ҡоҙа, һин Таңсулпан, Барсынһылыуҙарға əйт, улар ҙа килһендəр, ҡалмаһындар.

М о з о й *(башын һелкеп)*. Əйтəм, əйтəм, үҙем дə ҡалмайым. *(Китə башлай.)*

Г ө л б ə г и ҙ ə. Ҡайҙа, ҡара əле. Оят булһа ла, мин һеҙҙən бер һүҙ һорайым əле...

М о з о й *(əйләнеп килə)*. Йə, йə, ҡоҙаса...

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Оялам шул... *(Битен баҫып тора.)*

Мозой. Йә инде, әйтмәгәс, башламайҙар уны! Күңелгә тәйән итәһең бит, ҡоҙаса!

Гөлбәғиҙә. Кешегә әйтмәһәгеҙ, әйтәм...

Мозой. Әллә мине яратаһыңмы, ҡоҙаса? *(Көлә.)*

Гөлбәғиҙә. Ҡуй әле, бушты һөйләмә әле!

Мозой. Йә, улай оят түгелдер?

Гөлбәғиҙә. Әйткәс, әйтәйем инде. Һеҙ Ҡәҙерша тигән ҡурайсыны белә́негеҙме?

Мозой. Бик яҡшы беләм.

Гөлбәғиҙә. Бына, мин сәскә туйына шуны сақырырға һорағайным. Атайым уға ҡаршы килә...

Мозой. Ҡаршы килә?

Гөлбәғиҙә. Әйе, ҡаршы килә.

Мозой. Нисек, һеҙ уны ҡайҙан белә́негеҙ?

Гөлбәғиҙә. Мин уны бер нисә тапҡыр күргәнем бар. Уның ҡурайын мин бик яратам.

Мозой. Үҙен?

Гөлбәғиҙә *(оялып)*. Һин, ҡоҙа, бушты һөйләйһең. Улай һөйләмә, ҡоҙа!

Мозой *(үҙ алдына)*. Ә... Бына нисек икән! Егетең кантон ҡыҙының эсенә ут йүгерткән шул... Белмәйем, белмәйем, ул һинең атайың менән килешә алырмы икән һуң? *(Гөлбәғиҙәгә.)* Ярар, ҡоҙаса, минең ашығыс йомошом бар ине, һау бул. *(Китә.)*

Гөлбәғиҙә яңғыҙы ҡала.

Гөлбәғиҙә. Ҡәҙерша кантон улы булһа, минең атайым уны яратыр ине. Ниңә ул берәй кантондың улы булманы икән?.. Мин Ҡәҙерша тиһәм, атайымдың сәсе тора. Ниңә яратмай икән? Буйы тиһәң, буйы... Һыны тиһәң, һыны... Төҫө тиһәң, төҫө... Һис кимәгән ере юҡ! Ниңә шундай егеттәрҙе кантон балаһы ғына итмәне икән хоҙайым?! *(Илай.)* Ниңә уны кантон балаһы ғына... итмәнең... хоҙайым?! *(Китә.)*

Уның артынса бер нисә кеше менән Әпкәләй килеп инә.

V күренеш

Әпкәләй. Алйоттар! Алйоттар! Әллә кантон гел генә һуғырға килә тип белә́негеҙме ни?

Өндәшмәйҙәр

Губернатор тағы ла уға ҙур дәрәжә биргән. Шуға күрә лә ул, бөтә халыҡты йыйып, туй итәсәк. Ул үҙенең исе-

мен мәңге ҡалдырыу өсөн үҙенең исеменә сәскә ататасаҡ. Хәҙер ул шуны иғлан итергә сыҡты. Егеттәр, кантондың кәйефен боҙорға ярамай. Ул бик ныҡ һуҡранды.

К ү м ә к т а у ы ш. Ярай инде...

— Беҙҙең яланыбыҙҙа уға атарға сәскә ҡалмай бара бит инде!

— Кантон хәҙрәт беҙҙең ерҙәребеҙҙе ҡайтарһа икән!

— Эйе, мәрхәмәт итһә икән!

Э п к ә л ә й. Һа, барыһы ла була! Кантон хәҙрәткә мин үҙем әйтәм. Мин әйттемме — булды, күреп торогоҙ, ҡарттар: мин әйттемме — булды!

Өндәшмәйҙәр.

Бына шулай ул, мин ни әйтһәм, шул була! Әле мин кантон хәҙрәттең үҙе менән ҡушлап ултырып килдем. Ул әйтә, мин һиңә йәш кәләш алып бирәм әле, ти. Мин әйттемме, була ул! Шулай ул, ҡарттар, түрә эргәһендә түрә кеүек булырға кәрәк.

Т а у ы ш. Бар кеше лә һин була алмай шул.

Э п к ә л ә й. Ҡарттар, шуны әйтәм әле. Барығыҙ ҙа беләһегеҙ: Ҡараҡол тигән бер кеше бар. Былай ҡарап торғанда, кеше кеүек. Әммә үҙе холҡона китһә, эттән дә кире! Улай итеп йортҡа хужа булып булмай ул. Мин әйтәм, кантон хәҙрәткә әйтәм, ундай кешеләрҙе ҡоро тоторға кәрәк, тим. Ул әйтә, дөрөҫ, ти.

Х а л ы ҡ. Ҡараҡол...

— Ул ни әйтмәксе була?

Э п к ә л ә й. Ҡарттар, мин һеҙгә әйтәйем әле... *(Шул ваҡыт тирә-яғына ҡарана, унда тауыштар ишетелә.)* Ҡарттар, ҡарттар! Кантон хәҙрәт килә, кантон хәҙрәт килә!.. Иван Иваныс та бар!.. *(Төшөп ҡаршыларына йүгерә.)*

VI күренеш

К ү м ә к т а у ы ш. Кантон килә!

— Баяр ниңә килә икән тағы?

— Бер-бер хәл юҡмы икән?!

И ш м ы р ҙ а л а р инә. Иван Иванович эргәһендә комендант Кондрат Петрович бар.

И ш м ы р ҙ а. Йә, ҡарттар, һаумыһығыҙ?

К ү м ә к. Һау, һау, кантон хәҙрәт!

И ш м ы р ҙ а. Бына Иваныс килгән. Ул Ҡайынлығол буйын үҙенә алды. Шуға йорттоң асыуы килгән тип ишеткән. Батша әмеренә ҡаршы килергә ярамай. Ул уның

өҫтөнә мәрхәмәт итә. Мин башҡорт халҡын бик яратам, ти. Татыу торайыҡ, ти. Татыу торһаҡ, беҙҙең дә ярҙамыбыҙ булыр, ти. Ул батшаның ҙур кешеһе. Ул беҙҙең илгә рәхмәт менән килә.

Өндәшмәйҙәр

Әпкәләй. Йәгеҙ, ҡарттар, бай һүҙегеҙҙе әйтегеҙ!

Иван Иванович. Господин кантон, минең исемдән шуны әйтегеҙ: мин был ауыл халҡына бүләк бирәм. Минең ҡулға киткән ерҙәр өсөн дисәтинәһенә өс барнауыл аҡса, налог түләй алмағандар өсөн налог түләргә уңай булыр. Ике баш шәкәр, ун ҡаҙаҡ сәй, тыу һыйыр һуйҙырырмын. Минең ошо мәрхәмәтемде ирештерегеҙ.

Күмәк тауыш. Бәй, бәй, ысынлап та шулаймы икән!

— Бөгөн кантон хәҙрәт мәрхәмәтле күренә!

— *(Ишмырҙаға).* Ул еребеҙ ҡайтмаҫмы икән?

Ишмырҙа. Карттар, юҡ өсөн ҡайғырмағыҙ, ер бөтөр тип беләһегеҙме? Өлкән кеше яҡшылыҡ менән эйткәндә, тыңлағыҙ! Ундай һүҙҙәр ҡуймағыҙ! *(Иван Ивановичҡа.)* Бүләктәрҙе Әпкәләйгә бирегеҙ, ул өләшер. Мин ул турала йортауай старшинаға әмер бирермен. Ҡара халыҡ менән һөйләшеп тороуҙың кәрәге юҡ. Беҙҙең әмерҙәр сығып, бер ҡайҙа ла бармаҫтар.

Иван Иванович. Рәхмәт, господин кантон! Әле мин, бында һеҙҙе осратырмын, тип уйламағайным. Бөгөн кискә миңә барығыҙ. Миндә ҡунаҡтар булыр. Күп эштәр хаҡында һөйләшә торған бар. Да, мин онотҡанмын, һеҙҙең туйығыҙ була икән. Минең өсөн был бик ҙур яңылыҡ. Шайәт, мин дә ҡатнашырмын инде, шулай өмөт итәм.

Ишмырҙа. А, гаспадин гиныралҙ, һеҙ ҡалаһығызмы һуң? Һеҙ минең иң ҡәҙерле ҡунағым буласаҡһығыҙ! Тағы ла күп кенә ҙур кешеләрҙе саҡырасаҡмын.

Әпкәләй *(бүләк нәмәләрен ҡосаҡлап).* Кантон хәҙрәт, былардың барыһын да өләшәйемме? Ә, барыһын дамы?

Ишмырҙа *(илтифатһыҙ ғына).* Ярар, үҙең бел шунда,...

Әпкәләй. Үҙем беләм инде... Үҙемә ҡалһа, беләм инде... *(Халыҡҡа.)* Күрҙегеҙме, мин әйттем бит... Шулай була ул, бына шулай булырға кәрәк! Күрҙегеҙме? Күрҙегеҙме? Иван Иваныстың мәрхәмәтен күрҙегеҙме? *(Йөрәй.)*

Иван Иванович. Йә, господин кантон, мин һеҙҙең юлығыҙҙы тотмайым. Хәҙер минең күңелем тыныс.

Боғон тегелəй-былай хəбəрҙəр ишетеп, күңелем борсолғайны. Шуға күрə килгəйнем.

К о н д р а т П е т р о в и ч. Мин əйтəм, барып ҡайтайыҡ, их, Иван Иваныч, берəү уҫал уй менəн халыҡҡа берəй һүҙ əйтһə, ҡара халыҡ ҡотора башлай. Улар аңламай ҡоторалар бит. Беҙҙең Иван Иваныч — бик нескə күңелле кеше ул. Ул бик ныҡ эҫəрлəнгəн. Шунан ул халыҡтан доға алырға теләне. Мин уны бик мəғҡул күрҙем.

И ш м ы р ҙ а. Ҡара халыҡ уны аңламай бит. Шулай — аңлаһын... *(Халыҡҡа.)* Бына күрҙегеҙме, фетнəселəргə ҡарарға ярамай! Һəр ваҡыт шулай закун яғында булығыҙ!

И в а н И в а н о в и ч. Ярар, рəхмəт, хуш булығыҙ. Кискə беҙгə рəхим итегеҙ.

И ш м ы р ҙ а. Илтифатығыҙға ҙур рəхмəт!

И в а н И в а н о в и ч ҡ а р китə, шулар артынса Г ө л б ə ғ и ҙ ə күмəк ҡ ы ҙ ҙ ə р менəн инə.

VII күренеш

Г ө л б ə ғ и ҙ ə *(йүгереп килə.)* Атай, атай, бына мин ҡыҙҙар йыйҙым. Уларҙы һинең туйыңа саҡырҙым. Улар һиңə йырҙар сығарасаҡтар.

И ш м ы р ҙ а. Бына яҡшы, бына шулай кəрəк! Бəрəкалла! *(Арҡаһынан һөйə.)* Мин һиңə туй көнө өсөн ебəк билғау, ебəк яулыҡ алып бирермен. Алмасыбарыңа менеп, ҡыҙҙарыңды ҡаршы алырһың. Уларҙы ҡунаҡ итерһең, ҡыҙым.

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Атай, унда ҡурайсылар ҙа буламы?

И ш м ы р ҙ а. Була, була.

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Атай, һин барыһын да саҡыртмағанһың бит!..

И ш м ы р ҙ а. Кемде саҡыртмаған! Барыһын да саҡырттым.

Г ө л б ə ғ и ҙ ə. Барыһын да түгел шул!

И ш м ы р ҙ а. Барыһы ла, барыһы ла килерҙəр.

Г ө л б ə ғ и ҙ ə *(ҡыуанып)*. Барыһы ла киләләрме? *(Ҡыҙҙарға.)* Барыһы ла киләләр, ти!

Ҡ ы ҙ ҙ а р *(йырлай)*.

Кантон ҡыҙы Гөлбəғизə
Бəйləм сəскə йыялыр.
Бəйləм сəскə йыйғанда,
Күңелен кемгə ҡуялыр.

Кантон ҡыҙы Гөлбәғиҙә
Гөлдәр услап йөрөһөн.
Аҡ тирмәнең һынсыл ҡыҙы
Иш итмәҫ ҡыр бүреһен.
Кантон ҡыҙы Гөлбәғиҙә,
Атаң туйы уң булһын,
Атаң туйы уң булһын,
Һый-хөрмәте мул булһын!
Һый-хөрмәтен ашарбыҙ,
Туйын ҙурлап яһарбыҙ.
Туй һуңында атаңа
Ниндәй сәскә атарбыҙ?
Сәскә атар еребеҙ
Беҙҙең ҡулдан ҡалды инде:
Сәскә тапап үҫкән ерҙе
Атаң килеп алды инде...

Гөлбәғиҙә. Нисек улай инде, ҡыҙҙар? Нисек улай инде? Атай, уларҙың йыры минең күңелгә оҡшамай! Матур булһа ла, минең күңелгә оҡшамай!..

Ишмырҙа *(Әпкәләйгә).* Павузкаға ат екһендәр! Хәҙер ат екһендәр! Миңә ҡайтырға кәрәк! Миңә хәҙер ҡайтырға кәрәк!

Әпкәләй. Ауылнай юҡ, ауылнай өйҙә юҡ...

Ишмырҙа *(асыуланып).* Миңә хәҙер үк ат кәрәк. *(Гөлбәғиҙәгә.)* Хәҙер әсәң менән китегеҙ, мин штабҡа барам! *(Ҡыҙҙарға.)* Һеҙ хәҙер үк таралығыҙ!

Ҡыҙҙар тараласы.

Әпкәләй *(йүгереп йөрөй).* Карттар, ат егегеҙ! Хәҙер павузкаға ат килтерегеҙ!

Гөлбәғиҙә китә.

Ишмырҙа *(ажырып).* Ат килтермәһәләр, ошонда торғандарҙың үҙҙәрен егегеҙ. Мине елкәләре менән һөйрәп илтһендәр! Улар кантондың әмерен тыңламайҙар икән, уларға иртәгә үк абжурнай команда килтерәм! Быларҙың барыһын да Карағол ҡоторттҡан. Быларҙың барыһы ла Карағол!..

Күмәк тауыш. Кантон хәҙрәт, хәҙер ат булыр.

— Хәҙер ат килтерәбеҙ.

— Хәҙер үҙ аттарыбыҙҙы егәбеҙ.

Ишмырҙа *(асыуланып, гәйрәтләнеп).* Уларға штраф шулай. Миңә һеҙҙең атығыҙ кәрәкмәй, ҡайҙа павузка? Килтерегеҙ, хәҙер килтерегеҙ.

Повозканы һөйрәп алып сығалар.

Килтерегеҙ. *(Пистолетын сығарып, кешеләрҙе теҙә.)* Ә һеҙ — теҙелегеҙ!

Әпкәләй. Кантон хәҙрәт, быға аттар кәрәк бит.

Ишмырҙа. Хәҙер алты кешене миңә һайлап бирегеҙ! Улар мине муйындары менән һөйрәп алып барһындар. Шул ваҡыт улар мине таныҙрҙар! Улар батша әмеренән баш тартырға уйлайҙар икән. Хәҙер улар мине һөйрәп ҡараһындар әле!

Әпкәләй *(кешеләрҙе һөйрәп сығарып, повозка эргәһенә алып килә. Тартышалар, сыҡмайҙар).* Ҡайҙа команда кешеләре? Килһендәр! Әгәр ҙә тыңламаһалар, ҡылыс менән тыңлатырмын!

Күмәк беренсе. Йәгеҙ, егеттәр, ҡарттар, кантон ҡуша бит.

Күмәк икенсе. Беҙ ниңә һөйрәйек, беҙ ат түгел бит!

Күмәк өсөнсө. Ҡушҡас, эшләргә кәрәк! *(Киләләр.)*

Ҡыҙҙар. Кеше егәләр!..

Ишмырҙа *(менеп ултыра).* Егелегеҙ, егелегеҙ, хайуандар! Һеҙ — хайуан. Һеҙ минең әмергә ҡаршы килә-һегеҙ!

Әпкәләй *(ҡамсы менән).* Егелегеҙ!

Ишмырҙа. Һеҙгә һүҙем шул: йә мине һөйрәп алып бараһығыҙ, йә иртәгә ауылығыҙға абжурнай команда алаһығыҙ — икенең береһе!

Халыҡ. Абжурнай команда!..

— Юҡ, юҡ, абжурнай команда килтермәгеҙ, кантон хәҙрәт!

— Илтәбеҙ, илтәбеҙ!

Ишмырҙа. Әгәр ҙә тыңламаһағыҙ, барығыҙҙы ла Себергә ҡыуҙырам. Ырымбурҙан ғәскәр саҡыртам! Был эшегеҙ өсөн барығыҙға ла яза бирәм!

Халыҡ. Йәгеҙ, егеттәр, эш боҙолмаһын, ҡул алмаш итербеҙ. Ҡуша бит!

Егеләләр. Әпкәләй менеп ултыра.

Ишмырҙа *(тантана менән).* Бына шулай, ҡарышһағыҙ, елкәгеҙ менән дә һөйрәһегеҙ әле!

Әпкәләй. Бына кантон дыҡ кантон!

Китәләр, ҡыҙҙар ах-ах илашалар. Шау-шыу, ыңғыраш.

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Иван Иванович имениеһы. Матур өй алды, терасса, яҡшы диван, өҫтәлдәр тирә-яғы сәскәләр менән уратылған. Шаршау күтәрелгәндә, Иван Иванович менән Ишмырҙа кантон күренә. Алдарында эсемлектәр бар. Яҡшы уҡ ҡыҙып алғандар.

I күренеш

Иван Иванович. Ҡайҙа музыканттар? Бейеүселәр?

Наташа. Хәҙер, барин!

Бейеүселәр саҡыра, ике бейеүсе ҡыҙ, береһе — крәҫтиән ҡыҙы формаһында, береһе балет формаһында килеп сыға. Музыкант уйнай. Ҡыҙҙар бейей. Байтаҡ ваҡыт үтә.

Иван Иванович. Етер инде, барығыҙ, инегеҙ!

Бейеүселәр инә.

II күренеш

Иван Иванович. Тимәк, ышаныслы, господин кантон? Миңә ул ерҙәрҙе алырға булыр?

Ишмырҙа. Шик тә юҡ, мин әйткәс, була инде! Әгәр ҙә күнмәһәләр, мин уларҙы *(һамсыһын күрһәтеп)* бына былай күндерермен! Был турала тыныс бул, Иван Иваныс!

Иван Иванович. Шулай кәрәк, господин кантон! Начальниклыҡты шулай күрһәтеү кәрәк уны! *(Көлөп, аркаһынан һарғып.)* Әммә һаты кешеһегеҙ! Мин һеҙҙең яҡшы хеҙмәттәрегеҙ тураһында губернатор менән һөйләштем әле.

Ишмырҙа *(мыйыҡтарын һыпырып, эреләнеңкерәп).* Ҡулдан килгән хеҙмәтте батша хәҙрәттәренән аямайбыҙ инде уны! Нисек кенә булһа ла, тура хеҙмәт итергә тырышабыҙ инде!

Иван Иванович *(күҙҙәрен ҡыҫып).* Батша хәҙрәттәре шулай мәрхәмәтле ул. Үҙенә тура хеҙмәт иткән кешеләрҙе һәр ваҡыт иҫендә тота ул.

Ишмырҙа *(кырынайыңҡырап).* Әле мин теге Имәнлек буйын үҙемә алмаҡсы булып торам. Халыҡты күндереп киләм инде. Ул турала йортауай старшинаға ла әмер бирҙем. Ул сағында теге урманды һеҙгә бирергә мөмкин булыр. Бына һеҙҙең тарафтан вәгәҙә ителгән нәмәнең осона сығып булмай бит әле!

Иван Иванович. А, ул булыр. Ул минең бөтенләй хәтеремдән сыҡҡан икән! Булыр ул. *(Һүҙҙе борып.)* Ну... теге баш тартырға маташыусылар тураһында сара күрҙеңме әле?

Ишмырҙа. Минең Әпкәләй уларҙы бик нык һағалай. Улар минең ғәйрәттән ҡурҡып, батырсылыҡ итә алмайҙар, ахырыһы. Тик бына Ҡәҙерша менән Ҡараҡол тигәндәрен ҡулға алырға ине...

Иван Иванович. Батшанан был турала бик ҡаты әмер бар. Әгәр ҙә шулай баш тартыусылар булһа, беспощадно уларҙы наказать итергә кәрәк. Бына был Васяны ҡалайтып ҡулға алырға тағы?

Ишмырҙа. Губернатырҙан әмер алдым. Эйе, ул еренә еткереләсәк. Бер аҙна эсендә Ҡараҡолдар ҙа, Васялар ҙа ҡулда булырҙар.

Иван Иванович. Шулай кәрәк. Власты нык торорға кәрәк.

Ишмырҙа. Иван Иваныс, мин киттем инде, миңә төнгә ҡалырға ярамай, управлинйәгә ҡайтып етергә кәрәк.

Иван Иванович. Ярай, хуш бул инде, господин! Теге күк йүгеректе миңә килтерергә онотма инде!

Ишмырҙа. Була ул, була! Иртәгә үк килтерергә әмер биререм. Пока прощай и сам гүсте гүләй, сәскә байрамына! *(Сыға.)*

Иван Иванович яңғыҙ ҡала. Арлы-бирле йөрөй.

III күренеш

Иван Иванович *(диванға килеп ултыра)*. Ярай, был яҡтан эштәр яҡшы, ләкин ниңәлер бөгөн минең йөрәгем тыныс түгел. Әллә бындағы тынысһыҙ тормош минең нервыларымды шулай ҡаҡшаттымы, белмәйем... Был Вася ваҡиғаһы имениема ҡара бәлә булды! Шул ваҡиғанан бирле крәҫтиәндәр араһында тынысһыҙлыҡ китте. Уның өҫтәүенә, башҡорттар ҙа һаман сыуалып ҡына торалар. Ни тиклем килешергә теләһәм дә, вәғәҙәләр итһәм дә, һаман хәл яҡшырмай! Бөгөн миңә ҡарайҙар, иртәгәһенә урманға ҡарайҙар. Был аллы-артлы булып торған ваҡиғалар аҡылымды тамам сыбалттылар! Былай тороп эш сыҡмаҫ. Губернатор менән был турала һөйләшергә, ҡаты саралар күреүҙе һорарға кәрәк. Әгәр ҙә ул Вася тигәндән, сиғандан арынһам, бәлки, бер аҙ тыныслыҡ тапҡан булыр инем. Уны ҡулға алмай тороп, име-

ниенан китеүе мөмкин түгел. Бөгөн сиркәүгә лә барҙым. Алланан күңел тыныслығын һораным. Ләкин ниңәлер йөрәк һаман тыныс түгел! Елизавета Антоновна ла йәһәтерәк ҡайтмай, исмаһам! *(Диванға ҡырын ята.)* Тамам арығанмын, ахырыһы... *(Ойоп китә.)*

Әҙерәк пауза һуңында сәхнә ҡараңғылана. Зәңгәр яҡты ебәрелә. Вася, Карағол һәм ихтилалсы башҡорттарҙың һүрәттәре тасуир ителә. Иван Иванович һиҫкәнеп тора, уларға ҡарап, аптырап ҡала. Тегеләр ауыҙҙарын йырып, мыҫҡыл итеп көләләр, телдәрен сығаралар, төрлө ҡиәфәттәргә инәләр. Иван Ивановичҡа һөжүм итергә ынтылалар.

(Йән асыуы менән.) Вася!.. Вася!..

Вася. Эйе... Мин!..

Иван Иванович. Ах, ни күрәм мин?!

Алдынан үлем скелеты үтә.

Кемдәр улар?

Карағол. Беҙ!

Иван Иванович шаша, һуштан тайып йығыла. Тегеләр уның баш өҫтөндә ҡоралдарын уйнаталар, төрлө яҡҡа һөйрәйҙәр, тирәһенән әйләнәләр. Сәхнә тағы ҡараңғылана. Бер аҙ торғас, ғади яҡты бирелә. Иван Иванович диванда була. Ҡапыл һиҫкәнеп, уянып китә лә, шашып, йөрөй башлай.

IV күренеш

Иван Иванович. Ах, ни булды миңә?! Ниндәй гонаһ шомлоғо!.. *(Тороп ҡыҙыу йөрөй, төрлө ергә ҡағыла-һуғыла.)* Аҡылдан шаштым мин!.. Аҡылдан!.. Ни тиклем ҡуркыныс ул!.. Юҡ, юҡ, бынан китергә кәрәк. Китергә миңә!.. Мин ауырыу... Мин ауырыйым, ахырыһы!.. *(Диван эргәһенә һөйәлеп ҡала.)* Эйе, эйе, шулай!.. Шулай...

Наташа килеп сыға.

Наташа... Һинме? Һинме был?!

Наташа. Эйе, мин барин... *(Йөҙөнә ҡарап).* Ах, барин, ни булды һеҙгә?

Иван Иванович. Эйе... *(Бер аҙ тора.)* Юҡ, былай гына...

Наташа. Төҫөгөҙ ағарған! Миңә шулай күренә.

Иван Иванович. Шулайҙыр, бөгөн эскелек миңә шулай тәьсир итте, ахырыһы, миңә һыу килтерһәгеҙ икән!..

Наташа. Хәҙер. *(Китә.)*

V күренеш

И в а н И в а н о в и ч *(диванға ултыра).* Был эш ҡалай булды һуң? Әй... эйе, эйе, Ишмырҙа кантон менән булдым... Шулай, шулай... Унан һуң... Васялар килдә...

Н а т а ш а килеп сыға.

Эйе, Васялар килде...
Эйе, эйе, шулар килделәр... эйе,эйе, шулай... унан, унан... Наташа!

Н а т а ш а. Рәхим итегеҙ, барин.

И в а н И в а н о в и ч *(һиҫкәнеп).* Һинме, Наташа?.. Әллә Вася бындамы?

Н а т а ш а *(аптырап).* Вася?..

И в а н И в а н о в и ч. Эйе, эйе.. *(Ҡапыл һиҙеп ҡала.)* Ә, юҡ, әй, башың ҡорогоро... Кем һуң шул?! Эйе, эйе, кем шул инде?!

Н а т а ш а. Кем һуң ул, барин?

Д у н я һыу алып инә.

И в а н И в а н о в и ч. Ана, ана, һыу бирегеҙ миңә! Һыу бирегеҙ миңә! *(Һыу эсә.)* Ярар, мин сарҙаҡҡа ял итергә менәм... *(Урынынан ҡуҙғала.)* Елизавета Антоновна ҡайтһа, миңә хәбәр итегеҙ!

Н а т а ш а. Уларҙан хәбәр килде, барин, улар батюшка Андрей менән ҡайтасаҡтар икән.

И в а н И в а н о в и ч. Ярай, бик яҡшы! *(Баҫҡыҫҡа менә башлай.)* Өҫтәл әҙерләгеҙ! *(Тағы артына әйләнеп.)* Управляющий Кудрявцевҡа әйтегеҙ, барин, тиегеҙ, бөгөн арғы имениға бара алмай тип әйтте, тиегеҙ, ярармы? *(Иван Иванович менән, уны ҡултыҡлап Дуня менеп китә.)*

Н а т а ш а яңғыҙы ҡала. Бер аҙҙан Д у н я инә.

VI күренеш

Д у н я *(Наташаға).* Ҡара әле, Наташа, һеҙ бик бойоҡ күренәһегеҙ. Һеҙ һаман ҡайғыраһығыҙ, һаман моңланаһығыҙ!

Н а т а ш а. Шулай шул, ҡәҙерлем Дуня! Мин Вася өсөн ҡайғырам. Ул шулай китте лә юғалды. Ул бар саҡта миңә күңелле ине, был урындар миңә йәннәт төҫлө тойола ине! Ә хәҙер зинданға әүерелделәр улар!

Дуня. Нисек һуң бынан шулай китте?

Наташа. Ул эш бында сер тотола.

Дуня. Һеҙ шулай уны бик нык һөйә инегеҙме?

Наташа. Мин уны бик, бик ярата инем, ағылдарымдан шашып ярата инем!

Дуня. Бигерәк тә ҡыйын булған икән!

Наташа. Бик ҡыйын шул!.. Әгәр ҙә мөмкин булһа, бында бер минут та тормаҫ инем, Вася булған ергә китер инем. Ләкин мөмкин түгел шул!

Дуня. Ул ҡайҙа китте һуң, бик алыҫтамы?

Наташа. Ул шулай ҡасып урман араларында йөрөй, уны бик нык күҙәтәләр. Һәр ваҡыт эҙәрләйҙәр уны.

Дуня. Ниндәй ҡыҙғаныс!.. *(Башын тота.)* Ул ниндәй ҙур гөнаһ эшләне, уны ниңә ул тиклем эҙәрләйҙәр?..

Наташа. Бына бөтә сер ҙә шунда шул, Дуня!

Дуня. Наташа, бәғерем, һөйлә әле, мин дә беләйем әле! Һөйләрһең бит, Наташа, эйе бит?

Наташа. Ләкин берәүгә лә һөйләмә!

Дуня. Юҡ, юҡ, һис кемгә!

Наташа. Ул бик яҡшы кеше ине, ул ошо имениеның сәскәһе ине. Уны бөтә кеше, бөтә крәҫтиәндәр ҙә ярата ине. Ул үҙе лә крәҫтиәндәрҙе ярата ине. Уларҙы ҡыҙғана ине. Улар өсөн ҡайғыра, улар өсөн хәсрәтләнә ине. Уны крәҫтиәндәр араһына барыуҙан тыялар ине. Ләкин ул шуға ҡараманы, төндәрен йәшеренеп, улар араһына бара ине. Шулай уҡ мине лә ярата ине. Минең төрлө ҡунаҡтарға, бигерәк тә киске ҡунаҡтар өсөн йырлағанымды, бейегәнемде яратмай ине. Бына шул арҡала уның өҫтөнә ошаҡтар күбәйҙе. Ана теге крәҫтиәндәр араһында булып алған бола ваҡыттарында, ҡатышы бар тип, уны ла гәйепләнеләр. Уны икенсе бер баярға һатырға уйланылар. Уның минең эргәнән, бигерәге бындай крәҫтиән дуҫтары эргәһенән айырылғыһы килмәне. Ахырында, бер көн имениенең уҫал ҡарт управляющийын үлтереп, крәҫтиәндәр араһында тағы болалар ҡуҙғатып, урманға ҡасты. Шунан бирле минең дә бөтә яғым кәртәләнде.

Дуня *(илап)*. Бигерәк тә ҡыҙғаныс булған икән!

Наташа. Ҡара әле, Дуня, һин минең дуҫым булырһың. Бөгөн мин Васяның килеүенән хәбәр алдым, мине төндә сығармаҫтар, ә һин Михаилға бар. Әгәр төндә килә ҡалһа, һинең арҡыры миңә хәбәр итһендәр.

Дуня. Килә тиме, ысынлапмы? Ах, һеҙ ниндәй шатланырһығыҙ!

Наташа. Ярай, бында күп һөйләшеп тормайык, бар һин, ин, хәҙер барыня ла ҡайтыр. Әгәр ҙә теге убырлы ҡарсыҡ үҙенде бында күрһә, эш харап!

Дуня. Ах, нисек шатланырһың икән, Наташа!.. *(Йүгереп инеп юғала.)*

VII күренеш

Наташа *(яңғыҙы)*. Әгәр ҙә минең Вася өсөн түккән күҙ йәштәрем, һораған теләктәремдең барыһы ла алла ҡаршында ҡабуллыҡҡа ашһалар ине... Ләкин ниңәлер уларҙың барыһы ла әллә ҡайҙа, киң бушлыҡҡа инеп юғалалар!.. Мәрйәм-ананың алдында күпме төндәр ғибәҙәт ҡылдым, ихлас күңелемдең бөтә киңлеген асып, Васяма иреште рөүҙе һораным. Ул түбән ҡараған ҡабаҡтарын асып, миңә бер генә тапҡыр күҙҙәрен дә һалманы, исмаһам!.. Ниндәй телдәр менән, ниндәй күңелдәр менән миңә нәжәт һорарға? Белмәйем, әллә мин ҡол булғанғамы, минең күҙ йәштәрем көсһөҙҙәр? *(Тыңға ҡала, күккә ҡарай, оҙаҡ ҡарап тора ла.)* Күктә йондоҙҙар йымылдайҙар, көләләр, йылмаялар, дөм ҡараңғы төндәрҙә ялҡын атҡан Васяның күҙҙәре кеүек миңә ҡарайҙар улар... Унда киңлек... Ах, мин дә шунда булһамсы! Васяның урмандарҙа йөрөгәнен юғарынан ҡарап торһамсы! Ниндәй бәхетле булыр инем мин!

Йүгереп Дуня килеп сыға.

VIII күренеш

Дуня. Наташа! Наташа!

Наташа *(ҡапыл әйләнеп.)* Нимә бар? Ни булды, Дуня?..

Дуня. Барынялар ҡайтты, барынялар!

Наташа. Бар һин, баринға хәбәр ит.

Дуня. Килделәр, тиемме?

Наташа. Эйе, эйе. Бар! Бар! Бар! Ҡапыл ғына әйт, ҡайттылар, тиген!..

Дуня баҫҡыстан юғары менә, Наташа аҡрын ғына терасса артына китеп юғала. Шул уҡ ваҡыт Елизавета Антоновна менән батюшка Андрейҙың һөйләшкән, көлгән тауыштары ишетелә.

IX күренеш

Елизавета *(батюшка менән инә. Иван Иванович баҫҡыстан төшә)*. А, Иван Иванович та өйҙә, бына беҙ ҡунаҡ менән!

Иван Иванович *(баҫҡыстан)*. Рәхим итегеҙ, бик хуш! Исәнмеһегеҙ, батюшка Андрей?

Андрей. Бик шәп! Бик шәп, Иван Иваныч.

Күрешәләр. Диванға ултыралар.

Елизавета. Ах, бөгөн күңелле булды! Иван Иванович, Мария Константиновналар менән кәмәлә кататься иттек. Тағы ла бер ҡыҙыҡ булды...

Иван Иванович *(һалмаҡ ҡына)*. Хуш... тағы ни булды?

Елизавета *(батюшка Андрейға)*. Һөйләйекме?

Андрей *(яурынын бөрөштөрөп)*. Һөйләргә кәрәк. Ҡыҙыҡты уртаҡлашырға кәрәк.

Елизавета. Ҡыҙыҡ шунан ғибарәт булды: беҙ башҡорт ҡатындарын ҡурҡыттыҡ.

Иван Иванович. Йә, нисек булды?

Елизавета. Очень просто... Улар, значит, еләк һатырға килгәндәр, беҙ һатыулашҡан булабыҙ. Бер генә ауыҙ ҙа русса белмәйҙәр, тап дикарҙар төҫлө, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, беҙгә ҡарап тик торалар. Вот шул ваҡыт миңә бер фекер килде: мин быларҙы ҡурҡытырға уйланым. Анна Ивановнаның пистолетын алдым да, тегеләрҙең баш осонан ғына — пуххх!.. Тегеләр тауышҡа ҡурҡыуҙарынан сразы ергә йығылдылар. Бына китте көлкө!.. Ул ғына етмәне, теге пупсик тигән эттәре тегеләрҙе абалап алып китте. Ҡайҙа ғына ла ҡасырға белмәйҙәр шул тегеләр! Беҙҙең көлә-көлә эстәребеҙ ҡатып бөттө. Значит, шуның менән беҙҙең охота ла тамам булды.

Иван Иванович *(башын һелкеп һалмаҡ ҡына)*. Да, охота шәп булған.

Андрей. Ысынлап та удачно!

Көлөшәләр.

Елизавета. Ха-ха-ха!.. Уның ҡыҙығы ни тора бит!

Андрей. Елизавета Антоновна — күңелле ханым ул!

Елизавета *(күтәрелеп китеп)*. Вообще, шундай приключениеларҙы яратам мин!

Андрей. Әгәр ҙә һеҙ ир енесенән булһағыҙ ине, мотлаҡ һуғыш генералы булыр инегеҙ, Елизавета Антоновна!

Елизавета. Конечно... Мин үҙем дә военный кешеләрҙе яратам, батюшка Андрей.

Андрей. Һеҙҙә шундай выходкалар бар. Әйтәм бит, бөйөк Рәсәйҙең маҡтаулы генералы булыр инегеҙ!

Елизавета. Ха-ха-ха! Ысынлап та, шулаймы? *(Шул ваҡыт һүлпән ултырған Ивановичты күреп.)* Ҡара әле, һеҙ ниңә шулай күңелһеҙ? *(Барып, башын тота.)* Әллә ауырыйһығыҙмы?

Иван Иванович. Юҡ, былай ғына, Елизавета Антоновна...

Елизавета. Аҙыраҡ шампанский килтерәйек, кәйефең төҙәлер.

Иван Иванович. Тыныс бул, ҡәҙерлем, бөгөн һеҙ ҙә булмағас, бер аҙ йәнем тыныслыҙланды.

Елизавета. Ғәфү ит, Иван Иваныч!

Андрей. Аллаға ғибаҙәт итергә, күңел тыныслығы һорарға кәрәк, Иван Иваныч!

Елизавета. Дөрөҫ, батюшка Андрей. Ләкин беҙ бөгөнгө кисте, һеҙ булғас, былай ҙа күңелле үткәрербеҙ. Мин хәҙер музыканттар, бейеүселәр килтертәм, яңы нота-лар алып ҡайттым, уйнарбыҙ, эсербеҙ.

Иван Иванович. Бик яҡшы, рәхмәт, Елизавета Антоновна!

Андрей. Мин дә бер аҙнанан бирле күңел күтәрә алғаным юҡ ине әле. Бына бөгөн Елизавета Антоновна ханымды күргәс, тәҡдимен кәтмәйенсә үк килергә булдым. Бөгөн бында килергә мыуаффаҡ булыуыма бик шатмын.

Иван Иванович. Мин дә бына, һеҙ килгәс, бөтөнләй башҡарып киттем әле.

Елизавета. Ысынлап та, бында публика юҡ бит, ә Мәскәүҙә ваҡытта бер генә минутың да бушҡа үтмәй. Көндөҙ ҡунаҡтар менән көнөң үтә, кис менән бал-маскарад, театр, цирк һәм башҡалар... Ә бында бөтә тирә-яғыңда некультурный халыҡтар!

Андрей. Шулай шул.

Иван Иванович. Күңел тыныслығы юҡ...

Елизавета. Мәскәүгә китергә кәрәк, бик һағындырҙы инде. *(Улар эргәһенән китеп, сәскәләр тирәһендә йөрөй.)*

Иван Иванович *(Андрейға)*. Йә, батюшка Андрей, һеҙҙең эштәр нисек бара?

Андрей. Мыуаффаҡҡиәтһеҙ. *(Башын һелкеп ҡуя.)*

Иван Иванович. План нисек ине һуң?

Андрей *(һүҙен дауам итеп).* Ғөмүмән, башҡорттар араһында православие идеяһын таратыу хәҙергә мөмкин эш түгел. Башта минең теләк бик ҙур ине, бында килгәс емерелде. Һуңғы ваҡыттағы ваҡ-төйәк буталыштар тағы ла мәсьәләне ҡыйынлата төштө. Ләкин уларҙың ҡара халыҡтарына ҡарағанда, түрәләре, мырҙалары араһында эшләүе еңелерәк, сөнки улар дәрәжәгә ҡыҙығалар.

Иван Иванович. Да, уларҙың ундайҙарын ҡулға алырға мөмкин. Бына бында Ишмырҙа кантон бар, уның миңә күп хеҙмәттәре тейҙе. Бынау участкаларҙың барыһы ла уның арҡыры алынған ерҙәр. Билдәле, уның өсөн башҡорттар менән байтаҡ тартышырға тура килде. Главный көс беҙҙең яҡта булғас, эшләүе мөмкин ине.

Андрей. Бына миңә лә участка кәрәк ине. Минең бында килеүемдең икенсе бер сәбәбе лә шул ине.

Тағы бер аҙ сәхнә ҡараңғылана төшә.

Иван Иванович. Уныһы мөмкин эш уның.

Алыҫтан йәшен йәшенләгән яҡтылар күренеп ҡала.

Елизавета *(шәпләп былар эргәһенә килә).* Күрәһегеҙме, һауа боҙолорға тора. Йәшен йәшенләй, әйҙәгеҙ, өйгә инәбеҙ!

Андрей. Мөмкин, Елизавета Антоновна.

Иван Иванович *(һауаға ҡарап).* Бөгөн һауа боҙолоңҡорап тора, ахырыһы.

Инәләр. Ике ҡарауылсы килеп сыға.

X күренеш

Беренсеһе *(тегеләрҙең ингәндәрен күреп).* Былар ямғырҙан ҡасып өйгә инәләр, э беҙ өйҙән ҡасып, ямғыр аҫтына киләбеҙ!

Икенсеһе *(ҡалын, һалмаҡ тауыш менән).* Бәхетең шулай булһа, һин дә шулай итер инең дә, һинең менән миңә тигән бәхетте алла артҡы йәшниккә үк һалып ҡуйҙан шул!

Төрөпкәләрен сығаралар.

Беренсеһе. Шул тиклем кешегә алла бәхетте ҡайҙан алып еткерһен ти!

И к е н с е һ е. Еткермәгәс, яратмаҫка ғына кәрәк ине.

Б е р е н с е һ е. Ергә төшөп, һинең менән минән кәңәш һорап тормағандыр шул. Теләгәс, тотҡандыр ҙа яратҡандыр инде!

Көлөшәләр.

И к е н с е һ е *(башын һелкеп, төрөпкәһен ҡабып).* Ысынлап та, уның менән мин согласен түгел, әй!

XI күренеш

Н а т а ш а *(йүгереп баҫҡыстан төшә, артынан Андрей ҡыуып сыға).* Батюшка Андрей мин был эшкә һис күнә алмайым!..

А н д р е й. Ҡурҡма, Наташа, ҡурҡма!.. Бер нәмә лә булмаҫ!.. *(Иҫерек киәфәттә.)*

Н а т а ш а. Юҡ, юҡ, мин ҡурҡам!

А н д р е й. Ҡасмағыҙ, алла тарафынан ергә ебәрелгән хурҙыр бит һеҙ!

Н а т а ш а. Зинһар, батюшка, мине ҡалдырығыҙ!

А н д р е й. Ихтирамһыҙлыҡ был, Наташа!

Н а т а ш а. Ихтирам итәм, ләкин был урында түгел!

А н д р е й. Аллаңдан ҡурҡ, Наташа. Мине былай түбәнһетмә, Наташа!..

Н а т а ш а. Һеҙ үҙегеҙ түбәнһенмәгеҙ, батюшка Андрей!

А н д р е й. Кил, Наташа! *(Барып тота.)*

Н а т а ш а. Юҡ, булмай, батюшка! *(Ҡулынан ысҡынып, баҫҡыстан йүгереп менеп китә.)*

А н д р е й. Ниндәй намыҫһыҙлыҡ? *(Асыуланып.)* Хайуандыр ул!

Шул арала ишектән Е л и з а в е т а А н т о н о в н а күренә.

XII күренеш

Е л и з а в е т а. Ах, батюшка Андрей, һеҙ бындамы? Мин һеҙҙе тамам юғалттым.

А н д р е й *(уңайһыҙ хәлгә ҡалып).* Эйе, эйе... Елизавета Антоновна... Мин бында, һауаға...

Е л и з а в е т а. Ах, батюшка, бөгөн мин ниндәй шат, ниндәй күңелле! Һеҙ килгәс, Мәскәү вечерҙары иҫкә төшөп китте. Ах, унда саҡта!..

Андрей. Бөгөн миндә лә шундай настроение... *(Ҡулынан тота.)* Бөгөн һеҙ, Елизавета Антоновна, ниндәй матур күренәһегеҙ! Күк фирештәләренә оҡшағанһығыҙ!..

Елизавета. Ах, комплимент!.. *(Ҡыҫҡырып көлә, Андрейға һырыша.)* Батюшка... Мин һеҙҙе күрһәм, әллә нишләп китәм... Ысынлап та, һеҙ һөйкөмлө, магнитлы кешенегеҙ!..

Андрей. Беҙ бит алла юлында...

Елизавета. Ысынлап та шуғалыр, батюшка Андрей.

Андрей. Елизавета Антоновна, беседкаға һауа еҫкәргә, боронғо саҡтарҙы иҫкә төшөрөргә барабыҙмы?

Елизавета *(тағы ла һырыша биреп)*. Һеҙ ниндәй яҡшы ухажер... Һауа еҫкәргә, боронғо саҡтарҙы иҫкә төшөрөргә тиген, ә?.. Ха-ха-ха!.. Ниндәй матур кинәйәләр!.. Барабыҙ, барабыҙ, һауа еҫкәргә обязательно барабыҙ!..

Андрей. Һауа еҫкәргә барабыҙ, Елизавета Антоновна!..

Көлөшә-көлөшә ҡараңғыға инеп юғалалар. Ике һаҡсы инә.

XIII күренеш

Һаҡсыларҙың береһе *(арттарынан ҡарап ҡалып)*. Һауа барыбер түгелме икән ни?

Икенсеһе. Күрәһең, улар өсөн барыбер түгелдер инде...

Беренсеһе. Хәйер, уларҙыҡын белмәҫһең!..

Икенсеһе *(уның ҡолағына яҡын килеп)*. Әле һин Вася тураһында берәй нәмә белдеңме?

Беренсеһе. Уның бөгөн килеүе тураһындамы?

Икенсеһе. Беләм, беләм, ләкин беҙгә ни эшләргә инде?

Беренсеһе. Ни эшләргә, тип ни, күҙ күрер әле.

Шул арала иҫерек ҡиәфәт менән Иван Иванович сыға. Төҫө баяғыға ҡарағанда бөтөнләй башҡа, йөҙөнә уҫаллыҡ сыҡҡан.

XIV күренеш

Иван Иванович *(тотлоғоп)*. Бөгөн... Бөгөн... *(Береһенең моронона сиртә.)* Хуш... Эйе... ә... үҙ эшегеҙҙе беләһегеҙме һеҙ?.. *(Баш әйәләр.)* Эйе, беләһегеҙме?.. *(Береһен әтеп ебәрә.)* Белеп торогоҙ!

Икенсеһе. Баш өҫтө, барин, бик яҡшы беләбеҙ.

Иван Иванович. Шулай... *(Ауыҙына бармағын кабып тора.)* Э... Елизавета Андреевнаны күрҙегеҙме? Ҡайҙа улар?

Беренсе һе. Һауа еҫкәргә киттеләр, барин.

Иван Иванович. Эһе... Һауа еҫкәргә киттеләр, тиһегеҙме?

Беренсе һе. Әйе, һауа еҫкәргә киттеләр.

Шул арала Елизаветаларҙың тауыштары ишетелә. Киләләр.

XV күренеш

Елизавета *(Андрейға)*. Ах, ул Шарданский кисәһе бер ваҡытта ла иҫтән сыҡмай! Беләһегеҙме, унда нисек күңелле булды?

Андрей *(башын һелкеп)*. Эйе, эйе, минең хәтеремдә бик нык урынлашҡан ул...

Елизавета. Унда мин һеҙҙең менән... *(Иван Ивановичты күреп.)* Ах, Иван Иванович... Һин дә һауаға сыҡтыңмы? Беләһегеҙме, мин батюшкаға, төндә булһа ла, гөл баҡсаһын күрһәтеп килдем.

Иван Иванович *(ҡаршы бара биреп)*. Бик яҡшы, бик яҡшы.

Андрей. А, бик күңелле икән, Иван Иванович!

Елизавета. Әйҙәгеҙ, өйгә инәбеҙ! Мин үҙем берәй вальс уйнармын, Наташаны йырлатырбыҙ, бейетербеҙ. Ишетәһегеҙме?

Андрей. Бик яҡшы булыр.

Елизавета. Беләһегеҙме, бөгөн минең башҡа шампанский бер аҙ тәьҫир иткән...

Йәшен йәшенләй. Барыһы ла күккә ҡарай.

Болоттар ҡуҙғалған, көслө ямғыр килә, ахырыһы! Ниндәй ҡурҡыныс!

Андрей *(суҡына)*. Рәхмәте менән килһен инде!

Инеп китәләр. Күк күкрәп, йәшен йәшенләп китә. Шул ваҡыт сәхнә артында матур музыка һәм йыр тауыштары ишетелә. Һаман йәшен йәшенләүендә дауам итә. Һаҡсылар әҫәрләнеп, ағас эргәһендә тыңлайҙар. Шул саҡ Әпкәләй менән бер ҡарауыл начальнигы офицер килеп сыға.

XVI күренеш

Начальник *(һаҡсыларға)*. Һеҙ шулай баҫҡыс төбөндә ҡарауыллайһығыҙмы? Беләһегеҙме үҙ вазифағыҙҙы?

Берендеһе. Бик яҡшы беләбеҙ!

Начальник. Бөгөн төн ҡараңғы, имениены ныҡ күҙәтегеҙ. Әгәр ҙә бер случай булһа, унан һуң мин һеҙгә..

Баҫҡыстан үрелә̆ләр, инә̆ләр. Музыка туҡтай.

Икендеһе *(тегеһенә аҡрын ғына)*. Әллә берәй эш һиҙҙеләрме икән?

Берендеһе. Әллә...

Икендеһе *(башын һелкеп)*. Былар тиктәҫкә йөрөмәйҙәр...

Шул арала Иван Иванович һәм тегелә̆р сығӑлар.

XVII күренеш

Иван Иванович. Значит, так... Шулай ҙа уларҙың бөгөн килеү ихтималдары юҡ.

Начальник. Тик улар ойошалар ғына шикелле.

Әпкәләй. Әле бөгөн Үмер буйына кискә ҡарай киттеләр. Улар шул тегендә, ҡотҡо һалып, баш күтәрергә уйлайҙар, ахырыһы. Мин уларҙы бик ныҡ күҙәттем. Ул турала Ишмырҙа кантонға хәбәр бирә торҙом. Ул, кис булһа ла, алдан хәбәр биреп ҡуйырға ҡушты. Шуға күрә ашығып килдем.

Иван Иванович. Һәр хәлдә һаҡ булырға кәрәк.

Начальник. Тыныс булығыҙ, һис борсолмағыҙ! Мин әмерҙе ҡаты бирермен. Беҙҙең ҡораллы көскә берике генә юлбаҫар һәр хәлдә батырсылыҡ итә алмаҫ! Уларҙың бөтә һөжүмдәре лә бер-ике ат урлауҙан уҙмаҫ әле. Ә иртәгә инде мин уларҙың бөтә ояларын йөн кеүек туҙҙырасаҡмын.

Иван Иванович. Шулай әмер бирегеҙ. Ундай баш күтәреүселә̆ргә ҡаршы бик ҡаты саралар күрегеҙ!

Начальник. Бик яҡшы!

Иван Иванович. Әпкәләйҙе оҙатығыҙ, һуң булһа, үҙегеҙҙә ҡундырығыҙ.

Әпкәләй. Минең иптәштәрем бар. Бөгөн мин бында ҡалмайым. Кантон шулай ҡушты.

Иван Иванович. Ярай, иҫән булығыҙ, кантонға сәләм әйтегеҙ. Ул да алдан сараларын күрһен.

Китәләр. Иван Иванович инеп китә. Тағы ла музыка, йыр тауыштары башлана. Йәшен йәшенләй, күк күкрәй. Бер аҙ ваҡыттан Вася килеп күренә.

XVIII күренеш

Вася *(аҡрын ғына килә, музыка тыңлай).* Кәйефсафа! Төнгө ямғырҙар ҙа уларҙың кәйефтәренә зарар итмәйҙәр! *(Йыр тауышы ишетеп.)* А, ниндәй тауыш ишетәм мин?! Наташа тауышы түгелме был!.. Эйе, эйе, уның тауышы, ул йырлай! Ах, Наташа, Наташа!.. *(Баҫҡыҫҡа бара.)*

Шул арала теге һаҡсылар уны күреп ҡалалар, һикереп тороп ҡаршы баралар ҙа, ҡараңғыла танымайынса, һөжүм яһарға уйлайҙар. Береһе Васяны танып ҡала.

Беренсеһе. А, Вася, һинме был?

Вася. Эйе, мин, Михаил!

Икенсеһе. Вася, һин кит бынан, китеп тор бынан... Беҙгә ҡаты приказ бирелде, харап булырбыҙ!..

Беренсеһе. Дөрөҫ, шулай, Вася, хәҙер түгел, һуңыраҡ...

Вася. Ни һөйләйһегеҙ һеҙ?.. Әллә һеҙ ҙә һатылдығыҙмы? *(Михаилдың тамағынан тота.)* Белəһегеҙме, бөгөн беҙ имениены яндырабыҙ, әгәр ҙә ҡаршы килһәгеҙ, һеҙҙе лә шунда бергә яндырабыҙ!

Беренсеһе. Ах Вася, ни һөйләйһең һин?! Нисек инде имениены яндырырға?!

Вася. Үс алырға!.. Белəһегеҙме, үс алырға!

Уттар һүнә.

Беренсеһе. Харап булырһығыҙ, Вася, харап булырһығыҙ! Бөгөн әмер шулай булды!..

Вася. Ах, һеҙ ни тиклем ҡурҡаҡтар!

Икенсеһе. Ярай, бөттө, улай булһа, бөттө!..

Вася сәхнә артына ҡарап ҡул болғай. Шул арала Ҡараҕол һәм уның иптәштәре сәхнә алдына килеп тулалар.

Вася. Ҡараҕол, хәҙер барыһы һеҙҙеке. Бына һеҙгә йорттар... Улар бында ғиш-ғәшрәт итәләр әле!..

Ҡараҕол *(ҡарауылсыларға).* Ә былар кемдәр?

Вася. Үҙебеҙҙекеләр... *(Һаҡсыларға.)* Һеҙ бынан китегеҙ!

Ҡараҕол. Ярай, көс һынашып ҡарайыҡ! Кемдең уғы әсерәк булыр икән! Беҙҙең уҡтарҙы ла татыһындар әле!

Ҡәҙерша. Мин үҙем алдан... Мин ул утты үҙ ҡулым менән төртəм! Мин ул уттарҙы үҙ ҡулым менән төртөп, үҙем ҡарарға күптән ашҡынам! Ҡайҙа, сыра баштарын үҙемə бирегеҙ, Ҡараҕол!

К а р а ғ о л. Сабыр...

В а с я. Йә, тиҙерәк эшкә башлайыҡ!..

К а р а ғ о л. Сыра баштарын әҙерләгеҙ, уларҙың ҡандары ер өҫтөн бысратып ҡалырға тейеш түгел, күккә көл булып, үҙҙәренең һарайҙары менән бергә осорға тейешле, беләһегеҙме!? Әйҙәгеҙ!..

Барыһы ла баҫҡыстан төшөп, йорттоң төрлө яғына һөжүм итә башлайҙар. Сәхнә артынан ҡысҡырыш, үлем тауыштары ишетелә. Был тауыш өс минуттар самаһы дауам иткәндең һуңында, б а р ы һ ы л а сығалар. Төрлө ерҙән өйгә ут төртәләр.

Алыҫта тревога, колокол тауыштары ишетелә. Йәшен йәшенләй, күк күкрәй. В а с я менән Н а т а ш а килеп сыға.

В а с я. Әйҙә, Наташа, беҙҙең менән!..

Толпа араһына инәләр.

К а р а ғ о л. Ха-ха-ха! Бына беҙҙең күҙ йәштәре шулай ялҡынланып яналар улар!.. Иван Иваныс, хәҙер һин әмерҙәреңде беҙҙең өҫтөн түгел, үҙең янған ут өҫтөнән йөрөт инде!

К ә ҙ е р ш а. Был уттар алыҫтарға, алыҫтарға күренә торғандыр! Әйҙәгеҙ, киттек! Мин уларҙы алыҫтарҙан ҡарап торғом киләл

К а р а ғ о л. Әйҙәгеҙ, ҡустыларым, киттек!.. Хәҙер абжурнай командаға! Беҙҙең ерҙә бер баяр, бер команда ҡалырға тейеш түгел! Әйҙәгеҙ, ҡустыларым!

Китеп юғалалар. Ут көсәйә, күк күкрәй, ямғыр яуа, ҡыңғырау, шау-шыуҙар ишетелә.

Ш а р ш а у

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Кис. Төрмә эсе. Өс камера күренә. Беренсеһендә — Караголдар, икенсеһендә — крепостной крәҫтиәндәр. Өсөнсөһөндә — Н а т а ш а яңғыҙы. Шаршау асылғанда, Караголдар камераһында К а р а ғ о л менән В а с я ғына күренә. Һөйөндөк, Ялангол, Йортбағыштар ер аҫтында булалар.

I күренеш

В а с я *(Караголға)*. Бер яҡтан, беҙҙең эш бөтөүгә яҡынлашһа, икенсе яҡтан, беҙгә үлем сәғәттәре лә яҡын һуғалар. Бөгөн кис беҙ ҡорған планды нисек кенә булһа ла еренә еткерергә кәрәк.

К а р а ғ о л. Уны мин дә шулай уйлап торам, Вася. Мин әле һаман шуға үкенәм. Әгәр ҙә беҙ иң тәүҙә Керән

урманына киткән булһаң, быларҙың ҡулдарына төшмәгән булыр инек. Беҙ Ҡайынлығолда ҡалып харап булдыҡ.

Вася. Ҡорған план барып сыҡманы шул! Беҙ Ишмырҙаларҙан үс алабыҙ тип, шулай һуңғарып киттек бит!

Карағол. Беҙ уларға унан тороп та еткерер инек инде. Бында һеҙҙең кирелегегеҙ генә уңайһыҙланы.

Вася. Дөрөҫ, хаталыҡ беҙҙә булды. Үткәнде кире ҡайтарып алыуы ҡыйын инде ул. Әйҙә, алдағы өсөн ҡайғырайыҡ әле!

Карағол. Шулай, Вася, үткән эштән төш яҡшы тиҙәр.

Икеһе лә уйға ҡалалар. Пауза.

Вася. Һин Ҡәҙерша тураһында ни уйлайһың?

Карағол. Ҡәҙерша тураһында?

Вася. Эйе... Шулай уҡ беҙҙең турала оноттомо икән, тим.

Карағол. Әгәр ҙә Ҡәҙерша ҡулға төшмәһә, ул ете диңгеҙ ҡыҙырып булһа ла, беҙҙе ҡотҡарырға тейеш. Ҡәҙерша ул шундай кеше: ул бер һүҙ әйттеме, ете ҡабат йәнен алһалар ҙа, унан ҡайта торған егет түгел.

Вася. Шулайҙыр ҙа, бына унан бер генә хәбәр ҙә юҡ шул!

Карағол. Унан хәбәр ҙә булыр, ҡыйғыр ҡош һымаҡ, ул төрмә өҫтөнә килеп тә ҡуныр.

Вася *(тороп йөрөй)*. Ысынлап та, ул бына шулай килһен ине. Ул, осоп килеп, беҙҙе ҡотҡарһын ине! Минең шул тиклем иректе күргем килә!.. Иректә мин ыласын булып осҡом килә. Дошмандарымды ҡырғым килә!.. Дошмандың төрмәһендә ятыуҙан ҡыйын нәмә юҡ!..

Карағол. Минең йөрәгем шуны һиҙә... Ошо төрмәлә мәңге ҡалыуҙы һис уйламайым. Сөнки ул мөмкин түгел...

Вася *(Карағолдоң арҡаһына һуға)*. Бына шул һүҙең өсөн рәхмәт! Ул һүҙҙәрең минең йөрәгемә рәхәтлек бирәләр!

Ишектән аҡрын ғына Кузьма инә.

II күренеш

Кузьма *(ҡулында фонарь, бик һаҡ ҡына)*. Карағол, Вася, беләһегеҙме, мин бөгөн нәмә ишеттем? Һеҙгә хөкөм сығарылған: иртәгә кискә һеҙҙе аҫасаҡтар.

В а с я. Иртәгә кискә?! Аҫасаҡтар?! *(Шашып ҡала.)*

К у з ь м а. Эйе, аҫасаҡтар...

Ҡ а р а ғ о л. Мин һис үҙемдең шулар ҡулынан аҫылып тороуымды күҙ алдыма килтерә алмайым! Иртәгә аҫасаҡтар?! Ниндәй ҡыҙыҡ хәбәр!

К у з ь м а. Беләһегеҙме, бөгөн мин дежурстванан төнгө сәғәт 12-лә алышынам. Әгәр ҙә ҡотола алмаһағыҙ, миңә рәнйей күрмәгеҙ.

В а с я *(Кузьманың муйынына аҫылына)*. Һин минең бәләкәс ваҡытымда ла миңә дуҫ инең, мин һине ярата инем, Иван Иваныч һарайында ла дуҫ инек. Төрмәлә лә һин шул уҡ Кузьма! Һин беҙгә тереклегеңде йәлләмәйһең, мин һине мәңге онотасаҡ түгелмен!

К у з ь м а. Вася, ишетәһеңме, әгәр ҙә һеҙ бынан ҡотолһағыҙ, мин һеҙҙең арттан китәсәкмен. Мин был тормоштан тамам туйҙым инде.

В а с я. Беҙ бик шат булырбыҙ, тик бына ҡотолоуы ғына...

К у з ь м а. Һеҙҙең Наташаға ҡарай булған ер аҫты юлығыҙ ни хәлдә?

В а с я. Уныһы бөгөн өлгөрә.

Ҡ а р а ғ о л. Кузьма, һин үҙең һаҡ бул инде. Әгәр ҙә һине һиҙһәләр, беҙҙең бөтә эш боҙолор.

В а с я. Был тәҙрә тапҡырында ҡарауыл көслөмө?

К у з ь м а. Көслө ҡарауыл ҡапҡа яғында, бында берәү генә йөрөй. Уның менән һәр хәлдә хисаплаша алырбыҙ...

Ҡ а р а ғ о л. Аттар нисек?

К у з ь м а. Мәмерйә буйында бөгөн аттар һеҙҙе көтөргә тейеш. Мозойҙан хәбәр алдым. Ну, мин китәйем инде. Миңә бында күп торорға ярамай. *(Сыға.)*

Сәхнә артынан дежурный менән Кузьма араһында һүҙ башлана.

III күренеш

Н а ч а л ь н и к *(Кузьмаға)*. Һин нисек бында?

К у з ь м а. Мин проверка яһарға индем, ваше благородие!

Н а ч а л ь н и к. Приговор иғлан ителгәнме?

К у з ь м а. Никак нет. Миңә әмер булманы.

Н а ч а л ь н и к. Иртәгә сәғәт туғыҙҙа иғлан итерһегеҙ.

К у з ь м а. Ишетәм, ваше благородие.

IV күренеш

В а с я. Аҫасаҡтар, тиген...

К а р а ғ о л. Ҡайғырып файҙа юҡ. Һөйөндөктәргә хәбәр итәйек. Ишек төбөнә насанниктар килгән түгелме? Һөйөндөктәргә әйтергә кәрәк булыр. *(Баҙға күрһәтә.)*

В а с я *(карауат аҫтына башын тығып).* Һөйөндөк, Йортбағыш, килегеҙ әле!

Һ ө й ө н д ө к менән Й о р т б а ғ ы ш т ы ң баштары күренә.

К а р а ғ о л. Йә, сығып тороғоҙ, ҡустыларым, тегендә эт сируәләре йөрөй, эште боҙоп ҡуймаһындар.

Һ ө й ө н д ө к. Ни бар?

В а с я. Начальник килеп инә яҙҙы. Һаҡ булайыҡ. Бында берәй хәйлә ҡорорға кәрәк булыр.

Һ ө й ө н д ө к. Ниндәй хәйлә?

К а р а ғ о л. Уныһын сыҡҡас.

Сығалар.

В а с я. Һеҙ юҡта дежурный начальник килеп инә яҙҙы. Ул ваҡытта бөтә эш боҙола ине. Был эш бөткәнсе, минең башыма шундай уй килде: һеҙ өҫ, аяҡ кейемдәрегеҙҙе ҡалдырығыҙ. Беҙ, эсенә һалам ҡуйып, өҫтәрен кейем менән ябып ҡуяйыҡ. Һеҙҙе йоҡлап ята тип белһендәр, ә беҙ бында...

Я л а н ғ о л. Һай, иреңде! Ҡайҙан таптың был аҡылды? Хәҙер эшләйбеҙ уны.

Барыһы ла кейемдәрен һалалар, һаламдан кеше һындары яһап, өҫтәренә кейемдәр ябып ҡуялар.

В а с я. Бына булды, һеҙ йоҡлайһығыҙ икән, ти!..

К а р а ғ о л. Унда эш күпме әле?

В а с я. Әйҙәгеҙ, инәбеҙ.

Һ ө й ө н д ө к. Эш күп түгел, тик ҡаҙыған балсыҡтарҙы ситкә ташый торғаны ғына ҡалды.

К а р а ғ о л. Беләһегеҙме, иртәгә беҙгә приговор уҡыясаҡтар: иртәгә кискә аҫырға тип хөкөм сығарылған!

Һ ө й ө н д ө к. Иртәгә аҫырға?

В а с я. Эйе, аҫырға, бөгөн һәр хәлдә ҡотолорға тейешбеҙ.

Я л а н ғ о л. Бында эш бөттәгә иҫәпләнә. Тәҙрәгә ҡалһа, уның да ярты эше бөткән инде.

К а р а ғ о л. Йәгеҙ, туғандар, ваҡыт уҙҙырмағыҙ, эште йылдамыраҡ бөтөрөгөҙ!

В а с я. Тимәк, Наташа беҙҙең менән ҡотоласаҡ!..

Инә башлайҙар.

К а р а ғ о л. Ҡотолор, Наташа беҙҙең менән булыр... *(Васяға).* Һин үҙең дә ин.

В а с я. Ярар, инәм. *(Инеп юғала.)*

К а р а ғ о л яңғыҙы ҡала.

V күренеш

К а р а ғ о л *(йөрөй).* Эйе, башың ауырлыҡҡа төшһә, бына шулай яңғыҙ ҡалаһың икән шул. Беҙ баярҙар өҫтөнә үрт һалып йөрөгән мәлдәрҙә дуҫ-иштән күп кеше юҡ ине, хәҙер инде... *(Ҡурҡып тора.)* Береһе лә юҡ. Кәҙерҙә ҡайҙа? Кәҙерҙә быны һиҙмәйме икән ни? Юҡ, юҡ, унан да эш сыҡманы! Бөгөн аҫырға тип пригауар сығарғандар!.. *(Капыл күтәрелеп.)* Шулай мин улар ҡулынан аҫылырмынмы икән ни? Юҡ, юҡ, мин уны күҙ алдыма килтерә алмайым! Әгәр ҙә беҙҙе аҫһалар, бөтә илең, көнөң Әпкәләй, Ишмырҙалар ҡулына ҡала түгелме? Эйе, эйе, шулай... Юҡ, юҡ. Улай булырға тейеш түгел! Улай булырға тейеш түгел!.. *(Теге баҙ ауыҙына ҡарай бара.)* Вася! Вася! Вася, сыҡ әле!

Аҫтан: «Ни бар?» — тигән тауыш ишетелә.
В а с я башын сығара, уның муйынынан тотоп һөйрәп ала.

В а с я *(һөрөнөп китә).* Ни эшең, Ҡарағол, әллә аҡылдан шаштыңмы?

К а р а ғ о л *(айнып киткәндәй булып).* Юҡ, юҡ, былай ғына. Беләһеңме, Вася, әле мин яңғыҙым ҡалғас, иртәгә беҙ аҫыла торған майҙан тураһында уйланым.

В а с я. Хуш, хуш!?

К а р а ғ о л. Мин уны шулай булыр тип һис күҙ алдына килтерә алмайым! Бына шуға минең асыуым килде!

В а с я. Ҡарағол, Ҡарағол, тыныс булайыҡ. Беләһеңме, унда беҙҙең эш бөтә.

К а р а ғ о л. Вася, беләһеңме, бынан сыҡҡас, Әпкәләй, Ишмырҙа кеүектәрҙе һис бер һуғып ултерергә ярамай! *(Ҡулдарын күрһәтеп.)* Күрәһеңме, бына ошолай итеп быуып, шыҡырлатып ултерергә кәрәк! Бына минең ошо ҡулдарым уларҙы быуған саҡтарҙа, күҙҙәре етмеш аҙым ергә атылһындар! Беләһеңме?!

В а с я. Ҡараҕол, мин дә аҫылыныуҙы күҙ алдыма килтерә алмайым. Сөнки беҙ бөгөн ҡалай ғына булһа ла, бынан ысҡынасаҡбыҙ. Ләкин аҙ ғына булһа ла тыныс булайыҡ.

Ҡ а р а ҕ о л. Юҡ, Вася, мин былай ғына... Яңғыҙ ҡалғас, башымдан әллә ниндәй уйҙар үттеләр. Бына шулар минең башыма һыйманылар, бына шулар минең йөрәгемде ярһыттылар, асыуымды ҡабарттылар.

В а с я. Ҡараҕол, беҙҙең унда эш бөтә, ә беҙ шым булайыҡ!..

Ҡ а р а ҕ о л. Шулаймы? Ярар.

Икеһе лә яталар. Күрше крәҫтиәндәр камераһында хәрәкәт башлана.

VI күренеш

Б е р е н с е һ е. Иван, тор әле, тәмәке тартайыҡ, исмаһам!

И к е н с е һ е. Ай-һай, төн оҙон, һис йоҡлағы килмәй!

Ө с ө н с ө һ ө. Әйҙә, компания өсөн монах та өйләнгән, тиҙәр, мин дә һеҙҙең менән берҙе төрөп ебәрәйем әле!

Тәмәке төрәләр, тоҡандыралар. Йырлайҙар. Шул арала ишек артында дежурный начальник т а у ы ш ы ишетелә.

Н а ч а л ь н и к. Бында ниндәй ҡабаҡ! *(Килеп инә.)* Беләһегеҙме, хәҙер төн!.. Шулай тәртипте боҙорға яраймы?!

Б е р е н с е һ е. Эс бошҡанға йырланыҡ, ваше благородие.

Н а ч а л ь н и к. Бына хөкөм еренә еткерелгәс, телә-гәнсә йырларһығыҙ, ләкин бында түгел!

И к е н с е һ е. Әллә беҙгә шул ваҡытта ла хужа булыр инегеҙме?

Н а ч а л ь н и к. Ишетәһегеҙме, йырларға ярамай. Тыныс булығыҙ, хәҙер төн! *(Сығып китә.)*

Ө с ө н с ө һ ө. Ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тығып ултыраһығыҙ! Әллә уларҙың йөҙҙәрен күреү бик таныҡмы?

Барыһы ла тыналар.

VII күренеш

Н а т а ш а *(нимәлер ишетеп, һиҫкәнеп тора)*. Ҡайҙан ер аҫтынан тауыш килә?! Әллә Кузьманың һүҙҙәре дөрөҫ буламы? Ул, бөгөн бөтә мәсьәлә хәл ҡылыныр, тигәйне...

Әллә ысынлап та шулаймы? Шулай булырмы икән ни?.. Һис күңелем менән ышанып бөткөм килмәй! *(Йәрәй.)* Хәҙер төн... *(Тыңлай, төрлө ерҙәрҙән ятып тыңлай.)* Әллә ҡолаҡтарым шулай яңылыш ишетәләрме?.. *(Тора.)* Ах, әгәр ҙә бынан ҡотолһаҡ, ни тиклем шатлыҡ булыр ине! Тағы урмандарға, киң сахраларға китер инек! Унда Васям менән бергә булыр инек! Ләкин ул булырмы икән? Булырмы икән ул? *(Уйға ҡала.)*

Ш'ул арала ишекте шалтыратып асып, дежурный начальник инә.

VIII күренеш

Начальник. Наташа!

Наташа һиҫкәнеп, әйләнеп ҡарай ҙа аптырап ҡала.

Наташа, тим!.. Белəһеңме, мин ниңə килдем? Иртəгə һеҙгə приговор уҡыла, бөгөн һуңғы кисегеҙ... Белəһегеҙме, төрмəләге һуңғы кисегеҙ!.. Мин һеҙҙең өсөн ҡайғырам, Наташа! Белəһегеҙме, мин һеҙҙе нисек яратам!.. Əгəр ҙə минең һүземде тыңлаһағыҙ, мин һеҙҙе һəр хəлдə ҡотҡарырға тырышасаҡмын, тик һеҙҙең генə...

Наташа өндəшмəй.

Наташа, мин бит һеҙҙе ҡыҙғанып əйтəм...

Наташа *(көлөп)*. Господин начальник, һеҙҙе нисек аңлай белəйек?

Начальник. Белəһегеҙме, мин һеҙҙе ҡыҙғанам: ошондай йəш сəскəлəй бер зифа бағанала аҫылынып тороуын мин теләмəйем! Əгəр үҙ ғүмерегеҙҙе ҡыҙғанһағыҙ, сараһын табасаҡмын, тик быныңбер генə шарты бар... Һеҙ мине яратырға тейешһегеҙ! Ул ваҡытта...

Наташа. Ниңə шулай тынысһыҙланаһығыҙ минең өсөн? Мин əле үҙемдең йəнемде үлемдəн ҡотҡарыу өсөн, һеҙгə ярҙам һорап барғаным юҡ бит.

Начальник. Мин һеҙҙе һəр хəлдə тыныслыҙ күрəм. Һəр хəлдə, үлергə теләмəй торғанһығыҙҙыр. Бына шул минутта мин һеҙҙең ярҙамсығыҙ булайым!

Наташа. Бер үлемгə хөкөм ителгəс, үлергə мəхкүмбеҙ инде. Мин хəҙер үлемемə һис үкенəсəк түгелмен, господин начальник!

Начальник *(баш һелкеп)*. Ниндəй тəкəббер ҡыҙ!

Наташа. Хəҙер минең иң һуңғы ләззəтем ана шул үлем алдындағы тəкəбберлегем генə!

Начальник. Аңламайһың мине, Наташа, белəһеңме, мин һине нисек ҡыҙғанам? *(Алдына бара.)* Ҡыҙғанам мин һине!

Наташа. Башта төрмə, унан һуң үлемгə хөкөм, унан һуң ҡыҙғаныу... Ниндəй шəфҡəт эйəлəре бар икəн донъяла! Ха-ха-ха!

Начальник *(төҫөн үҙгəртеп)*. Ярай, Наташа, лəкин һуңынан... Баҙана алдына барһаң, үкенерһең əле...

Наташа. Шулай, беҙҙең бөтə яҙмышыбыҙ үкенескə ҡоролған инде!

Начальник сыға. Наташа яңғыҙ ҡала.

IX күренеш

Наташа *(йөрөй)*. Ниндəй шəфҡəт, ниндəй ҡыҙғаныу!.. Үлем сəғəтендə лə кешенең яҙмышы менəн уйнамаҡсы булалар! Имеш, уны яратырға, һөйөргə кəрəк! Уны һөйөү өсөн Васяны күңелдəн һепереп ташлап, шул тупаҫ, ҡəбəхəт йөҙлө кешегə шунда урын əҙерləргə кəрəк! Был үҙе бер үлем түгелме ни һуң?! Ниндəй ҡыҙыҡ кешеләр бар донъяла!

Шул арала ҡулына фонарь тотҡан Кузьма килеп инə.

X күренеш

Кузьма. Наташа!

Наташа. Ах, Кузьма, был һинме? *(Муйынына барып аҫылына.)*

Кузьма. Наташа, бөгөн төн ни булһа ла булырға тейеш... Һин һаҡ бул! Тегендə эш рəтлəнə, һиңə ер аҫты юлы килə...

Наташа. Шул дөрөҫмө, Кузьма? Бөгөн шул эштəр эшлəнерме?!

Кузьма. Тыныс бул, Наташа, һин берүк шаулама! Бөгөн икенең бере...

Наташа. Мин дə шулай китəремме?!

Кузьма. Бөтə мəсьəлə һине ҡотолдороуға туҡталып тора ине, ул да бөгөн тамамлана. Белəһеңме, Наташа, юғиһə иртəгə барығыҙға ла үлем бит!..

Наташа *(аптырап)*. Һуң мин ни эшлəйем инде, миңə ни эшлəргə?!

К у з ь м а. Тыныс бул, эштең барып сығыуын сабырлыҡ менән көт! Улар һине килеп алырҙар, унан һуң тәҙрәнән сығырһығыҙ...

Н а т а ш а. Ах, ниндәй шатлыҡ!! Булырмы икән ул эш?! Тимәк, бөгөн йә үлем, йә урман?..

К у з ь м а. Эйе, эйе, Наташа... Мин хәҙер сығайым инде... Һеҙ ҡотолһағыҙ, мин дә һеҙҙең арттан...

Н а т а ш а. Һин дә беҙҙең менән? *(Кузьманы үбә.)*

К у з ь м а ишекте асып сығып китә. Наташа арлы-бирле йөрөй.

XI күренеш

Крәҫтиәндәр камераһында.

Б е р е н с е һ е. Һис йоҡлағы килмәй!

И к е н с е һ е. Ниңә шулай тыныслыҙланаһығыҙ?

Б е р е н с е һ е. Һаман ҡыҙым Маруся күҙ алдыма килә, шуны ҡыҙғанам!

Ө с ө н с ө һ ө *(уянып, төрөпкәһен тоҡандыра)*. Нисек булды һуң һеҙҙең ваҡиға?

Б е р е н с е һ е *(башын һелкеп)*. Шулай булды инде...

И к е н с е һ е. Йә әле, һөйлә әле! Үҙең генә ҡайғырма, беҙ ҙә ишетәйек. *(Ул да тәмәке тарта.)*

Б е р е н с е һ е. Маруся һис риза түгел ине. Сөнки ул үҙенең кейәү буласаҡ егетен бик нык һөйә ине. Аҡылдарынан шашып һөйә ине. Шулай, туйҙар яһалды, Маруся кейәү ҡуйынына инер ваҡыт етте. Ул баяр ҡуйынында ҡунмағайны. Унан благословление алмағайны. Беҙ әйтеп ҡараһаҡ та барманы, һаман иланы. Мин дә, уның ҡайғылы йөҙҙәрен күреп, ҡыҙғандым. Ата бит, аталыҡ хисе еңде шул мине! Яңынан көсләмәнем. Бөтә күршетирәбеҙ ҙә уны ҡыҙғанды. Бына бер ваҡыт баяр кешеләрен ебәрә, Марусяға әмер бирелә. Шул ваҡыт ул өҙөлөп-өҙөлөп миңә аҫылынып иланы, һуштан яҙҙы. Уны шул көйөнсә һөйрәнеләр. Мин дә иланым, уны ебәрмәҫкә аҫылындым. Беҙҙең был илауыбыҙ күрше тирә-яҡҡа тәьҫир итте. Уларҙың да ҡандары ҡыҙҙы. Бына бер ваҡыт тартыш, һуғыш... Беләһең, ҡара халыҡ бер ҡоторһа, уны тыйыу бик ҡыйын: эштәр ҡанлы үлтерештәргә барып етте. Шунан һуң барыбыҙҙы ла, баш тартҡан өсөн, дау сығарған өсөн йыйып бында килтерҙеләр.

Б а р ы һ ы л а. Да, ҡыҙғаныс шул!..

Тын ҡалалар. Ҡараҙолдар камераһында хәрәкәт башлана.

XII күренеш

Ҡараҕолдар камераһы.

Ҡ а р а ҕ о л *(ҡыҙғалып)*. Йә, ни эшләйһегеҙ?

В а с я. Бөткәндәрҙер... *(Тишек эргәһенә бара.)* Һөйөндөк! Яланғол!

Я л а н ғ о л *(килеп сыға)*. Егеттәр, бында эш бөттө!

Аллы-артлы сығалар.

Һ ө й ө н д ө к. Уф... тирләнем!

Ҡ а р а ҕ о л. Йә, Вася, былар арыҡандарҙыр, хәҙер һин тәҙрә эшенә кереш. Унан һуң — Наташаға.

Я л а н ғ о л. Тәҙрә эше күп түгел.

В а с я *(карауат аҫтына һаламдар араһына тығыла)*. Ну, һеҙ төрлө яҡҡа ҡолаҡ һалығыҙ, ә мин хәҙер... *(Игәү менән тәҙрәгә бара, эшкә керешә.)*

Һ ө й ө н д ө к. Йә, Ҡараҕол аҕай, бынан сыҡҡас та, шул Мәмерйә буйына ҡарай ынтылабыҙ инде.

Ҡ а р а ҕ о л. Унда бөгөн Мозой булырға тейеш. Кузьма шул хәбәрҙе алған.

В а с я. Ну, тыуғандар, бында эш булды! *(Ҡыҡып төшөрә.)* Мин хәҙер Наташа эргәһенә барайым. Һеҙ тыныс булығыҙ. Хәҙергә ҡолаҡ һалып, тын ғына ултырығыҙ... *(Тишеккә инеп юғала.)*

Былар үҙ-ара һөйләшәләр, ишектән тыңлайҙар.

XIII күренеш

Наташа камераһы.

Н а т а ш а *(ер аҫтынан хәрәкәт һиҙә)*. Әллә киләләрме?! *(Иәрөй, ҡарана.)* Әллә киләләрме?! *(Ишеккә бара.)* Туҡта!.. Уф, йөрәгем түҙмәй!..

Шул арала В а с я күренә.

Ah, һин!.. Һинме был?! Әллә шулай күҙемә күренәһеңме?! *(Васяға ташлана.)* Вася, мин!..

В а с я. Наташа, мин... Сеү!.. Тыныс бул. Хәҙер китәбеҙ.

Н а т а ш а. Китәбеҙ?! *(Аҫылына.)* Шулай, дөрөҫ, китәбеҙме?!

В а с я. Әйҙә, киттек, Наташа!..

Н а т а ш а. Әйҙә!

Ғаҙға инеп юғалалар. Ҡараҕолдар камераһына килеп сығалар.

XIV күренеш

Ҡ а р а ғ о л *(Васяларҙы күреп).* Аһ, Васялар ҙа бында! Наташа!.. Бына хәҙер ул да беҙҙең менән!..

Н а т а ш а. Ҡараҡол ағай! Һинме бында? Күҙҙәремә һис ышанмайым! Төшөммө әллә был?!

В а с я. Наташа, хыяллана торған ваҡыт түгел! Тиҙерәк бынан китергә кәрәк!

Һ ө й ө н д ө к. Хәҙер, барыбыҙ ҙа бергә!..

Ҡ а р а ғ о л. Йәгеҙ, туғандарым, ир булығыҙ, ныҡ булығыҙ, йә үлем, йә ирек! Бына ошо юлда беҙ көс һынашырға тейешбеҙ! Хәҙер юл асыҡ беҙгә, тик ошо юлдағы арҡыры ятҡан баҡаналарҙы беҙ ҡырҡып үтергә тейешбеҙ! Әйҙәгеҙ, егеттәр!

Башлап Ҡ а р а ғ о л сыға, уның артынан Н а т а ш а, уның артынан — б а ш ҡ а л а р; В а с я артта ҡала.

В а с я *(халыҡҡа).* Беҙ хәҙер иркен яланға, тыныс урман эстәренә киттек!.. Килер ваҡыт, һине лә беҙҙең уттар ялмар! Беҙ һине ут эсендә күреп көләрбөҙ!.. *(Югала.)*

Сәхнә бер аҙ ваҡытҡа тын ҡала. Тәҙрә аша ялтырап йәшен уттары күренеп ҡала.

XV күренеш

Крәҫтиәндәр камераһында хәрәкәт башлана.

Б е р е н с е *(күрше камералағы хәрәкәтте һиҙеп).* Нимәлер бар күрше камерала? Ниндәйҙер ер аҫты тауыштары ла булды!..

И к е н с е. Юҡтыр, һаташаһыңдыр, булмаҫ!

Шул арала К у з ь м а күренә.

К у з ь м а. Иә, ниңә йоҡламайһығыҙ?

Б е р е н с е. Күрше бүлмәлә тынысһыҙлыҡ, нимәлер бар унда!..

К у з ь м а. Булмаҫ, бер нәмә лә булмаҫ!..

Шул арала д е ж у р н ы й н а ч а л ь н и к килеп инә.

Н а ч а л ь н и к. Нәмә һеҙ төнө менән?

Б е р е н с е. Күрше камерала тынысһыҙлыҡ, господин!

Н а ч а л ь н и к. Нисек? Ҡайҙа?

Кузьма. Булмаҫ, ваше благородие.

Начальник. Бар, тиҙерәк барып ҡара, берәй нәмә юҡмы?

Шул арала Кузьма сыға. ҠараҒолдар камераһына килә.

Кузьма *(юҡлыҡтарын күреп).* Киткәндәр... Киткәндәр улар... Ә мин... мин дә китәм! Бөгөн булмаһа, иртәгә китәм! *(Сыға. Начальник эргәһенә инә.)* Ваше благородие, унда... ҠараҒолдар ҡасҡандар!..

Начальник *(шашып).* Ҡасҡандар?!

Кузьма. Эйе, ҡасҡандар...

Икеһе лә йүгереп сығып, ҠараҒолдар камераһына инәләр.

Начальник. Ҡасҡандар?! Тиҙерәк набат һуғырға!.. Тиҙерәк!!!

Сығалар, артта тауыш китә, начальник Наташа камераһына бер нисә һаҡсы менән килеп инә.

Ah, Наташа ла юҡ! Ул да киткән!.. Тиҙерәк — аттарығыҙға! Юғиһә үлем һеҙгә, үлем!!! *(Ишек төбөндә аптырап ҡала.)*

Сәхнә артынан ҡыңғырау тауыштары, дөбөрләгән, команда биргән тауыштар ишетелә. Шул сәхнә артындағы көслө тревога шау-шыуҙары араһында **шаршау** төшә.

Шаршау

БИШЕНСЕ ШАРШАУ

Ишмырҙа кантон правлениеһы. Кантон эргәһендә үҙенең секретары. Күрше бүлмәнән писарҙар инеп-сығып йөрөй. Кондрат Петрович йөрөп тора. Шаршау асылғанда, Әпкәләй килеп инә.

I күренеш

Әпкәләй *(бик эшлекле ҡиәфәт менән).* Кандрат Петрувис, әмерегеҙ буйынса, ҠараҒолдоң семьяларын алып килдем.

Кондрат. Бик хуш.

Әпкәләй. Кандрат Петрувис, ну ҡыҙы ла ҡыҙы инде! *(Күҙ ҡыҫып.)* Бына нисек итеп кенә шуныһын ҡулға төшөрөргә?

К о н д р а т. Ничево, унығы ҡасмаҫ! Унығын ҡарарбыҙ һуңынан... Ну, Ҡараҫолдар тураһында һораштырғыланыңмы?

Ә п к ә л ә й *(башын һелкеп)*. Юҡ, әй!.. Юл буйынса юхаланып килдем, төрлө яҡтан һораштырғыланым, һис ул яҡтан һүҙ ысҡындырмайҙар!..

К о н д р а т *(шулай уҡ башын һелкеп)*. Әйтмәйҙәр, тиген?

Ә п к ә л ә й. Ай-ай-ай!.. Уның теге ҡарсығы би-ик аҫтыртын ҡарсыҡ бит!

К о н д р а т. Әйтмәһәләр... әйтмәһәләр... *(Ҡамсығын күрһәтеп.)* Быныҡ менән аҙ ғына йомшартып алаһың уны!..

Ә п к ә л ә й. Әллә шул... Тик ҡыҙына ғына тейергә ярамай!

К о н д р а т. Ай-һай, Әпкәләй! *(Көлөп.)* Һин ҡыҙына була уларға үҙең һатылманыңмы, шайтан?

Ә п к ә л ә й. Юҡ, юҡ!..

Шул арала бер ғәскәри бер башҡорт ҡартын алып инә.

II күренеш

Ғ ә с к ә р и. Ваше благородие, был башҡорт һуғылырға хөкөм ителгән.

К о н д р а т. Сәбәбе ни?

Ғ ә с к ә р и. Кантон үрге ауылдан ҡайтҡан саҡта, повозкаға йүнле аттар екмәгән. Аттары тулап, бер сөкөрҙә кантон хәҙрәтте ауҙара яҙғандар. Шуның өсөн ул бик ҡамсы һуҡһындар, тине.

Б а ш ҡ о р т *(үҙәлһеп)*. Ни эшләйем, гаспадин? Аттарым йәш аттар, бик аҫау малдар ине! Ғәйеп миндә түгел, аттарымда бит, гаспадин харунжа!

К о н д р а т. Молчать! Барығыҙ, еренә еткерегеҙ!

Б а ш ҡ о р т. Бер юлға ҡоткарығыҙ инде? Бигерәк тә пахаҡҡа бит!..

Әпкәләй мыҫҡыл йөҙө менән көлөп тора.

К о н д р а т. Һис һүҙһеҙ!

Ғ ә с к ә р и. Ишетәм, ваше благородие! *(Алып сығып китәләр.)*

К о н д р а т *(артынан)*. Мерзавецтар улар!

Ә п к ә л ә й. Ай-яй, Кандрат Петрувис, бик яҡшы иттең! Мин әле уның тураһында бер әңгәмә һөйләйем

әле. Ул күрше ауылдың Яҡшыбай тигән бер ауыл ҡарты. Ул һәр ваҡыт Ҡарағолдар яғын тартыңҡырай торған кеше. Юрый мыҫҡыл итеп шундай аттар еккәндер әле. Анау көндә беҙ барҙыҡ. Беҙгә тәкә лә һуйманы, һаумал ҡымыҙы менән генә һыйлап ебәрҙе. *(Башын сайҡап көлөп.)* Әммә яҡшы булды һуң әле үҙенә!

К о н д р а т. Да, күренеп тора: һин приказ бирәһең, ул һаман теленә һалына!

Э п к ә л ә й. Әммә ҡаты ҡуллы насанникһың инде!

К о н д р а т. Как же, шулай булмаһаң, бында Ҡараҡолдар күптән елкәгә менерҙәр ине.

Шул арала бер ғәскәри инә.

III күренеш

Ғ ә с к ә р и *(ашығып)*. Кантон хәҙрәт килә, ваше благородие!

Барыһы ла аяҡҡа баҫалар. Бөтә шалтырауыҡтарын тағып, И ш м ы р ҙ а килеп инә. Ниҙәлер кәйефе күтәренке.

И ш м ы р ҙ а *(үҙ алдына)*. Бына һин әле, эт яшығы!.. *(Әпкәләйгә.)* Бар тиҙерәк, Аҫылбай ҡурайсыны алып ин!

Э п к ә л ә й. Хәҙер, кантон хәҙрәт!

К о н д р а т. Әллә берәй хыянат эшләгәнме?

И ш м ы р ҙ а. Ғәрлегеңдән үлерһең бит! Әле приказ ебәртеп алдырҙым. Унда барып, Сәлим кантонға көй сығарып ята икән!

К о н д р а т. Вон что!

Әпкәләй, А ҫ ы л б а й килеп инә.

Э п к ә л ә й. Бына, кантон хәҙрәт, алып килдем, ни бойораһығыҙ?

И ш м ы р ҙ а *(Аҫылбайға)*. Йә әле, бындараҡ кил әле!

А ҫ ы л б а й *(ҡурайын тотҡан көйөнсә)*. Уйнарға ҡушаһығыҙмы, кантон хәҙрәт?

К о н д р а т сыға.

И ш м ы р ҙ а. Һин кеше кантонына барып, Сәлим кантонға көйҙәр сығарып йөрөйһөңмө? Башҡа кантондың даның тараткансы, үҙ кантонығыҙҙыҡын тарат һаң, ни була?

А ҫ ы л б а й. Кантон хәҙрәт, улар бит мине һоратып алдырҙылар. Мин бармаҫҡа ҡырталашһам да булдыра алманым. Баргас, мине ебәрмәнеләр, ахырында уға ар-

нап бер көй сығарҙым. Унда бер мин генә түгел инем, башҡа ҡурайсылар ҙа бар ине.

И ш м ы р ҙ а. Хуш, шунан көй сығарҙыңмы?

А ҫ ы л б а й. Сығарҙым шул.

И ш м ы р ҙ а. Һин, Аҫылбай, улай итеп елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөмә. Хәҙер беҙҙә ҡал! «Ишмырҙа кантон көйө» тип бер көй сығар! Сәлим кантон көйөнә ҡарағанда ла шәберәк булһын!

А ҫ ы л б а й. Ҡалай булыр икән һуң?

Ә п к ә л ә й. Йә, көй сығарған өсөн Сәлим кантон һиңә ниндәй бүләктәр бирҙе?

А ҫ ы л б а й. Улмы? Ул бер ҡонан айғыр биргәйне, бик яҡшы булмаҡсы ине, үлеп ҡалды.

Ә п к ә л ә й. Һиңә йүнлеһен бирәме ни ул? Үлә торганын биргәндер ул, алйот!

И ш м ы р ҙ а. Беләһегеҙме, мин уны үҙемә пастаянный күсер итеп алам. Шунда үҙем менән һәр ваҡыт ҡурай тартып йөрөр!

А ҫ ы л б а й. Ярай инде, тырыштырып ҡарарбыҙ, кантон хәҙрәт!

И ш м ы р ҙ а. Иртәгә бөтә тирә-яҡтағы ҡурайсыларҙы саҡыртығыҙ, иртәгә ҙур мәжлес ҡорам. Шунда миңә сығарылған көйҙө барыһы ла уйнарҙар.

Ә п к ә л ә й. Барыһы ла булыр, кантон хәҙрәт! *(Аҫылбайға.)* Йә, йә, бер уйнап ал!

Аҫылбай уйнай. Г ө л б ә г и ҙ ә инеп тыңлап тора.

И ш м ы р ҙ а *(Аҫылбайға)*. Бик яҡшы! Бар, хәҙер кит, унда килендәргә бейәләрҙе тотоп һауыш, тәкәләрҙе һуйыш, малдарҙы ҡараш, иртәгә мәжлескә килерһең.

А ҫ ы л б а й сыға.

Г ө л б ә г и ҙ ә. Атай, был ниндәй ҡурайсы?

И ш м ы р ҙ а. Аҫылбай тигән ҡурайсы. Ебәртеп алдырҙым. Ул үҙе беҙҙең ырыу әҙәме. Шайтан, ситкә барып, ят ырыуҙың данын таратып йөрөй икән!

Г ө л б ә ғ и ҙ ә. Атай, мин тыңлап торҙом да бик яраттым. Ул бик моңло итеп уйнай икән! Ул тап Хәҙерша кеүек итеп уйнай икән!..

И ш м ы р ҙ а *(йөҙө боҙолоп)*. Хәҙерша?! Ул һүҙҙе ҡайҙан алдың?.. Уны кем әйтте һиңә?..

Г ө л б ә ғ и ҙ ә *(һаушап)*. Атай, мин... ни... оҡшаттым ғына...

И ш м ы р ҙ а. Ҡыҙым, һин минең дошманды маҡтап йөрөмә!.. Ул ҡараҡ! Кантон ҡыҙының ауыҙында ҡараҡтың исеме булырға тейеш түгел! Бар, сығып кит!

Г ө л б ә ғ и ҙ ә *(ҡаушап, ишек төбөнә бара).* Атай, мин яңылыш әйттем... Яңылыш әйттем!..

И ш м ы р ҙ а. Яңылыш та әйтмә!

Г ө л б ә ғ и ҙ ә *(үҙ алдына).* Миңә ни булды? Мин ниңә әйттем уны?! Уның ҡурай тауышы йөрәгемде елкендерҙе! Түҙә алманым! Әйттем... Ах, ул Кәҙерша, ул ҡайҙа йөрөй икән?! *(Сығып китә.)*

И ш м ы р ҙ а. Гөлбәғиҙәгә ни булған?! Ул әллә уны яратамы? Юҡ! Әгәр ҙә мин уны һиҙһәм, бына уға! *(Ҡамсыһын күрһәтеп.)* Кантондың еләк кеүек ҡыҙы бер ҡараҡ тураһында уйларға тейешме? Ул мөмкин түгел!..

Кондрат Петрович инә.

К о н д р а т. Кантон хәҙрәт, Ҡараҡолдоң семьялары бында.

И ш м ы р ҙ а. Бик яҡшы, хәҙер барыһын да бында, штабҡа, алып кил. Күрәйек, ни һөйләрҙәр икән?..

Ә п к ә л ә й. Хәҙрәт, мин уларҙы Яҡшыбай ҡарттарға төшөргәйнем. Әй-әй, ҡыҙы бик шәп икән!..

И ш м ы р ҙ а. Йә, күп лыҡылдама, хәҙер алып кил, губернаторҙан әмер шулай.

Ә п к ә л ә й. Хәҙер, хәҙер! *(Сығып китә.)*

IV күренеш

И ш м ы р ҙ а. Йә, Кандрат Петровис, был Ҡараҡолдоң семьяһын ни эшләтәбеҙ инде? Уның инәһе — бик аҫтыртын кеше. Уны нығыраҡ ҡыҫырға кәрәк булыр. Ул һәр хәлдә Ҡараҡолдоң эштәрен белергә тейеш.

К о н д р а т. Кантон хәҙрәт, улар менән мин яҡшылап һөйләшә алмам. Бында хәйлә кәрәк булыр, хәйлә... Бында эште башта ғәфү итеү яғынан башларға кәрәк, унан һуң, бәлки, улар серҙе ысҡындырырҙар...

И ш м ы р ҙ а. Ярар, уныһын шулай итербеҙ. Әле неҙ Ҡараҡолдар тураһында берәй хәбәр алманығыҙмы? Шымсыларығыҙ ниндәй хәбәр килтерҙеләр?

К о н д р а т. Имән урманында булһалар кәрәк, унда малдар ҙа юғалғылаған икән. Унда ҡапыл ғына барып инеп булмай, дөм-ҡара урман — бик уңайһыҙ, берәм-һәрәм барырға ярамай.

И ш м ы р ҙ а. Әһә... *(Башын түбәнерәк һалып, уйланып тора.)* Былар башҡа бәлә булдылар бит!

К о н д р а т. Уларҙы бик күмәгәйгән, тиҙәр. Вася менән Наташа ла улар эргәһендә, тиҙәр.

И ш м ы р ҙ а. Уны хәҙер бик уҫал ҡараҡ булып киткән, тиҙәр. Быларҙың барыһын да ҡулға алмайынса тороп, тыныслануырға ярамай. Бәлки, Ҡыраубикә ҡарсыҡтарҙы нығыраҡ ҡыҫһаң, осо килеп сыҡмаҫмы әле?

П и с а р ь *(өҫтәленән тороп)*. Кантон хәҙрәт, үткән аҙнала теге Сиркәш юлы буйында Плащанов баярының управляющийын үлтергәндәр. Был эш Ҡараҙолдарҙың эше булырға тейеш, тип һөйләйҙәр.

И ш м ы р ҙ а. Булыр, булыр!

П и с а р ь. Имәнлегол урманында ла, тиҙәр, төндәрҙә бында килеп, таңға ҡарай шунда йәшеренәләр, имеш, тип тә һөйләйҙәр.

И ш м ы р ҙ а. Улай икән!

К о н д р а т. Да, унда булыуҙары бик ихтимал.

И ш м ы р ҙ а. Уларҙы нисек тә булһа тоторға кәрәк! *(Иөрөй.)* Нисек кенә булһа ла тоторға кәрәк! Был турала губернаторҙан шундай ҡаты әмер килгән. Бер ай эсендә улар юҡ ителергә тейеш. Быны ҡолағыңда тот, Кандрат Петровис! Иртәгә үк үҙең кит!

К о н д р а т. Уларҙы төрмәлә саҡта уҡ аҫырға кәрәк ине! Нисек уларҙы ҡасырғандар, әллә хыянат итеүселәр булдымы икән?

И ш м ы р ҙ а. Эйе шул, шунда ғына аҫып ҡуйырға кәрәк ине шул!

Бер ғәскәри килеп инә.

V күренеш

Ғ ә с к ә р и *(Кондратҡа)*. Әмерегеҙ еренә еткерелде, тағы ла яһаҡ түләмәгән ике башҡортто килтергәндәр.

К о н д р а т. Ул турала ниндәй әмер бирелгән?

Ғ ә с к ә р и. Егерме ҡамсы.

К о н д р а т. Һуғығыҙ!

И ш м ы р ҙ а *(ғәйрәтләнеп)*. Унан һуң ябып ҡуйығыҙ! Иртәнән һуң барып, малдарын һаттырып, түләттерегеҙ! Әгәр ҙә батша әмеренән баш тартһағыҙ, эш уның менән генә ҡалмаҫ, Ишмырҙа кантон шулай тип әйтте, тиегеҙ, ишеттегеҙме?

Ғ ә с к ә р и. Ишетәбеҙ, кантон хәҙрәт!

К о н д р а т. Ярай, китегеҙ! *(Сыға.)*

Уның артынса уҡ Әпкәләй, Ҡыраубикә, Таңсулпан, Гөлбикәләр килеп инә.

Әпкәләй *(зур әш кешеһе киәфәтле).* Йә, кантон хәҙрәт, бына һеҙгә ҡунаҡтар!

Ишмырҙа. Бик яҡшы, бик яҡшы! *(Кыраубикәгә.)* Әллә һеҙ Ҡараҡолдоң әсәһе — Кыраубикә ҡоҙағый булаһығыҙмы? Ҡоҙағый тип һөйләшәйек инде, улай булғас.

Кыраубикә *(үҙ алдына).* Ҡара көнөңдә ҡарға алдына үләкһә һорап бараһың, тиҙәр, беҙ ҙә шулай булдыҡ, ахырыһы! Ҡарт көнөмдә былай әҙәм көлкәһенә ҡалырмын, тип һис уйламағайным. *(Ишмырҙаға.)* Әйе, Ҡараҡолдоң әсәһе — Кыраубикә ҡарсыҡ мин булам инде.

Ишмырҙа. Ә, улай икән! Ҡараҡолоң ҡайҙа йөрөп ятыр, унан хәбәр-хәтерегеҙ юҡмы?

Кыраубикә. Ҡарт әсәм, бахыр, бәндә алдына бәндә итмәһен хоҙайым, тип теләй торғайны, бәндәгә бәндә булыу тигәндәре ошо булалыр инде.

Ишмырҙа. Йә әле, ҡоҙағый, һүҙҙе әллә ҡайҙан уратып маташма әле, «ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ», тиҙәр, мин дә бит үҙегеҙҙең бер түрәгеҙ әле.

Кыраубикә. Бер ҙә белмәйем шул, кантон хәҙрәт, уны ниңә беҙҙән һорайһығыҙ? Бөтә фарман үҙ ҡулығыҙҙа. Беҙ уны ҡайҙан беләйек? Китте лә юғалды бит!

Ишмырҙа *(үҙ алдына).* Бына ҡайҙа һалдыра бит ул! *(Гөлбикәгә.)* Йә, һин, йәш ҡоҙағый, бәлки, ҡарт кеше белмәй торғандыр. Ундай эшкә ҡатышмай торғандыр, һин был турала ни әйтәһең?

Гөлбикә. Әгәр ҙә Ҡараҡолдоң иҫәнлеген, ҡайҙалығын белһәк, үҙебеҙ ҙә был тиклем күҙ йәше түкмәгән булыр инек! Һыуға батҡан кеше кеүек, батты ла юғалды бит!

Ишмырҙа. Эштең дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ҡоҙағыйҙар! Губернаторҙан әмер булды, уның менән килешергә, барыһын да ғәфү итергә уйлайбыҙ. Булған эш булған инде. Илдәренән, көндәренән айырылып, рисуай булып йөрөмәһендәр, тибеҙ. Ул да бит бер яҡшы ата балаһы...

Кондрат *(үҙ алдына, башын сайҡап).* Да, ғәфү итербеҙ инде!.. *(Мыйығын көлдөрә.)*

Кыраубикә *(уйланып тороп).* Был эш, бүренең һарыктарға көтөүсе булыуы кеүек булмаҫ микән? *(Ишмырҙа кантонға.)* Кантон, беҙҙән ундай нәмәләрҙе һорама ла, беҙҙе ҡыҫтама ла, — беҙ, бисә кешеләр, ул эште ҡайҙан беләйек?

И ш м ы р ҙ а *(Кондратҡа ишара итеп).* Был ҡарсыҡты алып китегеҙ. Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәгән өсөн, әҙерәк һыйлаштырып алығыҙ!

К о н д р а т. Бик яҡшы, кантон хәҙрәт! *(Ҡыраубикәне тота.)*

Таңсулпан менән Гөлбикә Ҡыраубикәгә һырылалар.

Ҡ ы р а у б и к ә. Атаҡ, кантон хәҙрәт, был ни эшегеҙ? Ҡарт көнөмдә мине ниңә былай әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдыраһығыҙ?!

И ш м ы р ҙ а *(ғәйрәт сәсеп).* Әгәр ҙә яҡшылыҡ менән әйтмәһәгеҙ, шулай итергә мәжбүрмен! Губернаторҙың әмере шулай!

Ҡ ы р а у б и к ә. Ниңә былай нахаҡҡа тәҡәтебеҙҙе ҡоротаһығыҙ. Алтмыш йәшкә еттем, нәҫел-ырыуымдан, дуҫ-дошманымдан яман һүҙ ишетмәнем! Ошо көндә...

И ш м ы р ҙ а *(һүҙен бүлеп).* Нахаҡҡа, нахаҡҡа, имеш! Әле балаңдың ғәйептәрен белмәйһеңме ни? Ул кеше үлтереүсе, ҡараҡ, биглый бит! Етмәһә, шул балаңды әрсәләп, ғәйебен йәшереп торған булаһың! Бында һинең дә ҡатышың юҡ түгел!..

Ҡ ы р а у б и к ә. Етмәһә, миңә яла яға башланыңмы ни, кантон хәҙрәт?

И ш м ы р ҙ а. Шулаймы ни әле, минең менән әрепләшә башланыңмы әле?! *(Ҡамсы менән ынтыла.)*

Таңсулпан менән Гөлбикә килеп ҡаплайҙар.

Бар, алып кит!..

Таңсулпан һуштан яҙа. Әпкәләй тотоп ала. Алып сығып китәләр.

Ә п к ә л ә й *(сығып барғанда Ишмырҙаға ҡарап).* Ай, ир икәнһең, кантон хәҙрәт!

И ш м ы р ҙ а. Һабаҡтарын яҡшыраҡ уҡытығыҙ! *(Яңғыҙ, иҙән буйлап йөрөй.)* Ҡара һин уны, эт ҡарсығын!! Яҡшы ҡәҙерен эт белмәҫ, тиҙәр.

Ә п к ә л ә й әйләнеп инә.

Ә п к ә л ә й. Кантон хәҙрәт, ҡыҙын күрҙеңме? Уның ҡыҙын әрәм итергә ярамай!.. Әллә шуны миңә икенсе ҡатынлыҡҡа?..

И ш м ы р ҙ а. Ай эт ҡойҡаһы, ул ҡыҙҙың һиңә бара торғаны бармы һуң?

Ә п к ә л ә й. Әллә үҙең самалайһыңмы, кантон хәҙрәт?

И ш м ы р ҙ а *(көлөп).* Ярамаҫлыҡ түгел бит, ҡыҙы матур икән! Уның шулай еткән ҡыҙы барлығын белмәй инем әле.

Әпкәләй. Кыҙ тигәндә лә кыҙ инде! *(Ситкә карап.)* Кара һин уны, үҙе самаларға уйлай бит әле, өс бисә етмәгәнме икән ни быға?

Ишмырҙа. Әпкәләй, яҡын кил әле бында!

Әпкәләй килә, Ишмырҙа уйланып тора.

Әллә, мин әйтәм, был Караҕолдоң кыҙын үҙебеҙгә алырғамы икән, тим, юҡһа, караҡтар ҡулында әрәм булыр...

Әпкәләй. Әллә шул...

Ишмырҙа. Нәмәкәй, әллә шул, тип тораһың?!

Әпкәләй. Оҡшаһа инде...

Ишмырҙа. Кара әле, Әпкәләй, беҙ уны былай итәйек әле: Кыраубикә ҡарсыҡҡа бар, әгәр Караҕолдоң кыҙын миңә дүртенсе ҡатынлыҡҡа бирһә, барыһын да ҡотҡарам, тип әйтә тиген. Бәлки, шул юл менән Караҕолдарҙы ла ҡулға алып булмаҫмы?

Әпкәләй. Бына, бына, ҡайҙан ул уйҙы уйлап сығарҙың, кантон хәҙрәт?

Ишмырҙа. Бар, Ишмырҙа кантон шулай тип әйтте, тиген.

Әпкәләй. Була ул, була, яусыға үлем юҡ, тиҙәр.

Ишмырҙа. Йә, иҫәүән, күп лыҡылдап торма!

Әпкәләй. Хәҙер!.. *(Үҙ-үҙенә.)* Былай булһа, бөтә эш боҙола! *(Сығып китә.)*

Ишмырҙа *(иҙән буйынса йөрөй, писарҙар эргәһенә барып)*. Теге Йыуасалы ерен Нежданов баярына һатыу тураһында Табын йортауай старшинаһына әмер бирелдеме?

Писарь. Барыһы ла әҙер, мисәт һуғып, ҡул ҡуя торғаны ғына ҡалды.

Ишмырҙа. Ярай, килтер, ҡул ҡуяйым. *(Ҡул ҡуя.)* Яһаҡ түләмәгән кешеләргә әмер яҙығыҙ!

Шул арала Әпкәләй, уның артынан Кондрат йүгереп килеп инә.

VII күренеш

Әпкәләй. Кантон хәҙрәт!.. *(Әйтә алмай.)*

Кондрат. Кантон хәҙрәт, бер төркөм һыбай тау башынан саң борҡотоп килеп төштө!

Ишмырҙа *(аптырап)*. Йә, йә, ни бар?!

Әпкәләй. Караҕолдар киләләр, «үлем, үлем!» тип киләләр!..

Ишмырҙа. Караҕолдар, Караҕолдар?!

Кондрат. Шулар, шулар!..

И ш м ы р ҙ а. Йәһәтерәк әмер бирегеҙ, бөтә гәскәр атҡа атланһын! Йәһәтерәк, йәһәтерәк!

Буталыш китә. Барыһы ла штабтан сыға. Сәхнә артында тауыш, атыштар китә. Сәхнә буш тора.

VIII күренеш

Ә п к ә л ә й *(йүгереп сәхнәгә инә).* Ах, харап булдыҡ! Таңсулпан, тинем, уны алыр өсөн Ҡараҡол менән дошманлаштым, Ишмырҙа кантонға шуның арҡаһында хеҙмәт иттем! Бөтә эш бөттө, харап булдым! Хәҙер ҡайҙа барырға? Үлем миңә, үлем!!!

Шул арала Ҡ а р а ҡ о л килә, Ә п к ә л ә й өҫтәл артына йәшеренә.

IX күренеш

Ҡ а р а ҡ о л *(төҫөндә ҡаһарманлыҡ балҡый).* Илдең күҙ йәше ояһы булған Ишмырҙа кантон штабы ла туҙҙырылды! Күкрәккә һыймай тышҡа ташҡан үстәр алынды! Хәҙер күкрәгем ул ауыр үс утынан бушанды! Йөрәгемдә ҡара ҡан булып төйнәлгән Ишмырҙа кантондың «һыны» ла һыпырылып ташланды! Ерҙәр үбеп, бөтә тауташтарҙы шаһит итеп биргән антым бөгөн еренә еткерелде! Хәҙер миңә бынан китһәм дә ярай. Хәҙер Ҡараҡол Урал тауҙарына, елһеҙ ерҙәргә, киң урман араларына китергә, бынан һуң һағалаған дошмандарҙың күҙҙәренән мәңге юғалырға тейеш!

Шул арала өҫтәл артынан Ә п к ә л ә й сыға.

Ә п к ә л ә й. Миңә барыбер үлем!.. *(Арттан хәнйәр менән ҡаҙай.)*

Ҡ а р а ҡ о л. Ах, ни булды, кем ул? Кем ул? Һөйөндөк... Вася... А-ah! Харап иттеләр мине!.. *(Йығыла.)*

Шул арала В а с я, Ҡ ә ҙ е р ш а, Н а т а ш а, һ ө й о н д о к т ә р килеп инә.

В а с я. Ҡараҡол, һин ни эшләнең?!

Шау-шыу итәләр.

Килтерегеҙ Ҡараҡолдо үлтергән кешене, килтерегеҙ!!

Ҡ ы р а у б и к ә *(өҫтөнә килеп).* Ил намыҫы тип, үҙ башыңды бирҙең, күкрәгемдең һөтө хәләл булһын, балам!

Һойондок. Кәүҙәң өҫтөндә ант итәм, Ҡараҕол ағай, һинең исемеңде ергә күммәбеҙ!

Вася. Ҡараҕолдо күтәрегеҙ, хәҙер беҙгә бында уртаҡ эш ҡалманы. Китәбеҙ!

Ҡараҕолдо күтәрәләр, сыға башлайҙар.

Яланғол *(эҙләнеп йөрөгәндә, Әпкәләйҙе өҫтәл артынан һөйрәп сығара)*. Бына кем үлтергән икән Ҡараҕолдо!

Әпкәләй. Эйе, мин үлтерҙем. Мине теләһәгеҙ ни эшләтегеҙ!

Вася *(шашып)*. Атмағыҙ, киҫмәгеҙ, һеҙ уны быуып үлтерегеҙ!

Әпкәләйҙе быуып алып сығалар. Гөлбәғизә инә, уға бөтәһе лә ҡарап ҡаталар.

Гөлбәғизә *(Кәҙершаны күреп)*. Кәҙерша... Һин минең атайымды үлтерҙең, атам һиңә дошман ине. Мин һине йөрәгемдән яраттым. Мине үҙең менән алып кит!

Кәҙерша *(иптәштәренә ҡарай, унан һуң Гөлбәғизәгә)*. Гөлбәғизә, мин һине алып китә алмайым. Ишмырҙа кантондың бөтә тоҡомон ҡоротормон, тигән һүҙем бар. Мин ул һүҙемде һинең өсөн кире аласаҡ түгелмен!

Гөлбәғизә. Мин һине улай булыр, тип уйламағайным! Бөтә күңелемде һиңә бирҙем! Һин уны ҡабул итмәйһеңме?

Кәҙерша. Юҡ! *(Иптәштәренә ҡарай.)* Ҡараҕолдо алығыҙ! Бөгөн үк Ҡыпсаҡ, Табын ырыуҙарына хәбәр итегеҙ. Беҙҙең ерҙәребеҙ киткән кеүек, беҙҙең дошмандарыбыҙ ҙа ҡулыбыҙҙан үтте. Хәҙер беҙ боҫорға, бынан китергә тейешбеҙ...

Вася. Китәбеҙ, китәбеҙ, туғандар!

Китәләр, Гөлбәғизә Кәҙерша артынан бара.

Кәҙерша. Һинең юлың беҙҙең менән түгел, ҡал!

Гөлбәғизә. Мин ҡалдым!.. *(Ергә ыҡтыла.)*

Артта ат тояҡтары ишетелә.

Шаршау



Мирхәйҙәр Фәйзи

(1891—1928)

Мирхәйҙәр Мостафа улы Фәйзуллин 1891 йылдың 1 ноябрендә элекке Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең Күкшел ауылында тыуған. Орск һәм Ырымбурҙағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәләрендә уҡый. Әҙәби әҫәрҙәр яҙыу менән йәшләй ҡыҙыҡһына башлай. Уның «Сәскәләр араһында», «Биҙәнеү», «Йәштәр алдатмайҙар» кеүек тәүге сәхнә әҫәрҙәре 1912 йылда баҫылып сыға. Ошо уҡ йылдарҙа «Йәштәр алдатмайҙар» комедияһы Ҡазанда «Сәйәр» труппаһы тарафынан сәхнәлә ҡуйыла.

1916 йылда М. Фәйзи «Сәғәҙәтбаныу» тигән драмаһын яҙа. Азаҡ, бер аҙ үҙгәрткәндән һуң, «Ғәлиәбаныу» исемендә был пьеса тиҙ арала популярлыҡ яулай һәм башҡорт, татар театрҙары репертуарының алтын фондына әүерелә.

Ғ. Ибраһимов Мирхәйҙәр Фәйзиҙе «драмалар ғәләмендә яңы мәктәп асыусы» тип уның ижадын юғары баһаланы. «Ҡыҙғаныс», «Тәкдирҙең шаярыуы», «Ауыл байрамы», «Урал һыуы буйында», «Аҫылйәр», «Аҙашҡан күңел» һәм башҡа пьесаларында халыҡ тормошо реалистик алымдарҙа һүрәтләнә.

Граждандар һуғышы йылдарында М. Фәйзи бөтөнләйгә Башҡортостандың Баймаҡ районы Юлыҡ ауылына күсеп килә. Ауыл халҡы араһында культура-ағартыу эштәрендә актив ҡатнаша, драма түңәрәктәрендә спектаклдәр ҡуйыу, әҙәби һәм күңел асыу кисәләре ойоштора, китапханала эшләй. Ошо тәбәктәге комсомол йәштәренең контрреволюцион элементтарға ҡаршы көрәшен сағылдырған «Ҡыҙыл йондоҙ» пьесаһын тамамлай.

1922 йылда Теләс ауылына күсә һәм «Ҡыҙыл Урал» газетаһының редколлегия ағзаһы булып эшләй. Тиҙҙән ул Өфөгә саҡырыла һәм Башҡорт дәүләт театрының даими драматургы итеп билдәләнә.

1925—1928 йылдарҙа Баймаҡта йәшәй. Мирхәйҙәр Фәйзи ике тиҫтәгә яҡын пьесаларҙың, күп һандағы шиғырҙар, йырҙар һәм хикәйәләрҙең авторы.

1928 йылдың 9 июлендә Баймаҡта үлә.

Баймаҡ районы хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең яратҡан драматургын ҡаланың үҙәк паркына хөрмәтләп күмәләр.

ҒӘЛИӘБАНЫУ *

Д р а м а
дүрт шаршауҙа

Ҡатнашалар

Б ә ҙ р и — хәлле генә кеше. Беренсе һәм дүртенсе шаршауҙарҙа салбарһыҙ, ситек, камзул һәм түбәтәйҙән, икенсе-һендә — бүрек, салбар, көҙәкей кейә, 50-лә.

Ғ ә л и м ә б а н ы у — ҡатыны. Ябай ауыл кәйемендә, 40-та.

Ғ ә л и ә б а н ы у — ҡыҙҙары. Беренсе, икенсе, дүртенсе шаршауҙарҙа ябай кейемдә; өсөнсөлә — аяғына яңы ситек — өҫтөнә яңы күлдәк кейеп, сигелгән алъяпҡыс бәйләгән. Сәс үргесенә сулпылар таҡҡан, яулыҡ бәйләп, шәл ябынған була. Бик матур ҡыҙ. 17-лә.

С а ҙ р е т д и н — улдары. Кейеме түбәтәй, күлмәк-ыштандан тора. 8-ҙә.

Х ә л и л — йәшләй ата-әсәһенән айырылған. Урта хәлле матур егет, һәр ерҙә — аяғында ыҫпай итек, ҡайтармалы яға, итәктәре сигелгән күк сатин күлдәк өҫтөнән төймәһен ҡаптырмай ғына ябай пинжәк кейгән. Башында ҡырыныраҡ һалынған йәйге бүрек. 21-ҙә.

И с м ә ғ и л — күп ер биләүсе бай егет. Аяғында американский итек, ыҫпайлығы бик күҙәтелмәгән киң генә салбар, өҫтөндә һәйбәт тужурка, башында эшләпә. 25-тә.

Б ә ҙ и ғ а — яусы булыу менән даны сыҡҡан ҡарсыҡ. 65-тә.

Р ә х м ә т у л л а
С и б ә ғ ә т
Х ә м ҙ ә
Ғ ә л и
Ш ә м с е т д и н
Б и к т и м е р — барыһы ла итекле; ҡайһыһы тужурка, ҡайһыһы көҙәкей кейгән, 18—23-тәр араһындағы ауыл егеттәре.

Г ө л м и
Р ә б и ғ а
Х ә й е р н и с а
С ә ғ и ҙ ә — кейенгән-яһанған, 16—18 араһындағы ауыл ҡыҙҙары.

Г и м а ҙ и — Бәҙриҙең малайы. Күлдәк-ыштандан, ялан баш, ялан аяҡ.

Ҡ а т ы н — аяғында ҡуңысы ҡайтарылып торған ситек, күлдәген күтәреп ҡыҫтырғанға ҡыҙыл балаҡтары күренеп тора; яулыҡсан, 40-та.

---

* Драма Ҡазанда 1962 йылда баҫылып сыҡҡан вариантынан алынды.

К ө т ө ү с е — аламараҡ кейемле, башында иҫке эшләпә, ялан аяҡ; билбауына бер ҡап-ҡара бәләкәс кенә ҡапсыҡ менән ҡурай ҡыҫтырған, елкәһенә оҙон сыбыртҡы элгән, 16-ла.

С т а р ш и н а.

К е ш е л ә р (ике).

Ваҡиға Ырымбур яғы ауылдарының береһендә бара.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Уң яҡта бер ишек, түрҙә тыҡрыҡҡа ҡараған бер, һул яҡҡа баҡсаға ҡараған ике тәҙрә. Бәҙриҙең ишек алды яҡ өйө. Кис.

Беренсе күренеш

Шаршау күтәрелгәндә урамдан «Ғәлиәбаныу» көйөнә гармун менән йырлап, һыҙғырып, ҡулдар сабып үткән тауыш ишетелә.
Ғ ә л и ә б а н ы у, сигеп яҡҡан эше ҡулында көйөнсө, өҫтәл янында тыңлап ултыра.

Й ы р:

Баҡсаларҙа гөлдәр ал икән,
Гөлдә былбыл бар икән;
Ҡашы ҡара, буйы зифа,
Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм,
Кемгә насип йәр икән?

Үҙегеҙ өйҙә ултыраһығыҙ,
Тышҡа сыҡҡан нурығыҙ;
Нурығыҙға күҙ сағыла,
Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм,
Йәшел пәрҙә ҡороғоҙ.

Тауыш туҡтай.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Ай, шул көй, өҙә бит минең үҙәгемде. Бер көн ҡайҙан, күкрәгемдең ҡайһы еренән алып ҡына йырланым икән һуң мин был көйҙө. Инде бына үҙ исемемде ҡушып йырлай башланылар. Мин уны үҙемдең һөйгәнем өсөн генә йырлаған инем; ул ҡаршымда булған ваҡытта ғына йырлай алған инем бит... *(Тороп.)* Ошо көйҙө, шундай йырҙарҙы ни хәҙәр тыңлаһам да туя алмайым, бигерәк тә гармунда ул уйнаһа. Атайҙарҙан ҡурҡмаһам, кешенән оялмаһам, тәҙрә төбөмдә йырлатып төн буйы ултырыр инем. *(Тәҙрәгә бара башлап.)* Киттеләр ахырыһы. Атай өйҙә саҡта күп тормағандары яҡшы. *(Тәҙрәнең пәрҙәһен асып ҡарай.)*

Шунда уҡ гармун менән йырлап ебәрәләр.

Тәҙрәнән ҡарайһың,
Ҡарап кемде таныйһың?
Ҡарап күҙең талдырғансы,
Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм,

Ник саҡырып алмайһың?
Бөҙрә, бөҙрә, бөҙрәһең,
Бөҙрә сәсең көйҙөрәһең...

Ғәлиәбаныу *(беренсе йыр башлағас та, ҡапыл сигенеп китеп, тыңлап тора ла, икенсе йыр башланғас).* Хәйерһеҙҙәр икән. Тиҙерәк ебәрергә кәрәк. Атай кәрәкте бирер... *(Тиҙ генә барып, лампаны баҫып күтәрә.)*

Уйынсылар йырҙың яртыһында шып туҡтайҙар.

Киттеләр. Юлығыҙға фәрештәләр гөл һипһеп! *(Эшен алып ултыра.)*

Йыраҡтан ғына егеттәрҙең йырлап киткәндәре ишетелә.

Беҙ урамдан үтәрбеҙ,
Йырлай-йырлай һиҙҙереп,
Йоҡоң килһә, ятып йоҡла,
Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм,
Уятырбыҙ һыҙғырып...

Шул ваҡыт Саҙрый баҡса яҡ тәҙрәнән башын тыға.

Саҙрый. Апай, Фәрхәнә апай һине бында ғына сыҡһын әле ти; баҫҡыста. *(Китә.)*

Ғәлиәбаныу. Ярай. Елəккә барырға тиҙер инде. *(Эшен өҫтәлдәге бәләкәс кенә һандыҡтың аҫтына ҡуйып, сығып китә.)*

Күп тормай Бәҙри, тағы һуңыраҡ Ғәлимә инәләр.

Икенсе күренеш

Бәҙри, Ғәлимә.

Бәҙри *(ҡыуанып).* Кара әле, беҙгә бит, беҙгә йырлайҙар. Бөтөнләй төбәп йырлайҙар. Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм тиме, аппағым, тиме?.. *(Башын борғолап.)* Ай-яй, уҫалдар, көй ҙә сығарып өлгөрҙөләр.

Бер биҙрә һыу күтәреп, Ғәлимә керә.

Ишеттеңме, ҡатын?

Ғәлимә. Нимәне?

Бәҙри. Яңы ғына урамдан йырлап үткәндәрен!

Ғәлимә. Ишетмәгән ҡайҙа. Ошо беҙҙең тыҡрыҡтан ғына үттеләр бит. Яңы көй тигән булалар. Әллә беҙҙе асыуландырмаҫ өсөн юрый әйтәләр. *(Һыуын һикегә ҡуя.)*

Бәҙр и. Яңылыҡҡа яңы инде ул. Кисә Бортас баҙарында ла ишеттем мин уны.

Фәл и мә. Бигерәк беҙгә төбәп йырлаған кеүек инде. Әллә бөтөнләй Ғәлиәбаныуға атап сығарғандар?

Бәҙр и. Кисә Бортас баҙарында Камали ҙа әйтә: Бәҙри ағай, ти, был, ти, үҙегеҙгә төбәп йырлаған кеүек булалыр инде, ти. Төбәп йырлаһалар ҙа ярарлыҡ бит, ти. Көлә үҙе, бәдбәхет.

Фәл и мә. Халыҡҡа етә ҡала инде ул. Шулай уҡ урам көсөктәренә лә һыныҡҡа һылтау табылып ҡына тора. Йырҙарын да бит һайлап ҡына йырлайҙар.

Бәҙр и. Теймә, ҡатын, йырлай бирһендәр. Беҙгә сыҡҡан көймә, түгелме, йөрөй бирһендәр. *(Һикегә ултыра.)*

Фәл и мә. Шунда ла инде килешеп бөтмәй. Уңайһыҙ тойола. Һин үҙең дә аҙыраҡ ҡатыраҡ тормайһың. Һинең ниндәйлегеңде белгәнгә, улар асыҡтан-асыҡ йырлай бирәләр. Аҙыраҡ ҡатыраҡ була белһәң, улай уҡ ҡыланмаҫтар ине. *(Мейес тирәһендә маташа.)*

Бәҙр и. Бар, сығып бәйләнеп ҡара һин! Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарғаныңды күрерһең. «Яңы бешкән алма кеүек һин, Ғәлиәбаныу»ҙар урынына «ауыҙҙарың алаптай, тешкәйҙәреңе тараҡтай» тип йырлағандарын ишетәһең киләме ни?.. Әле нисек кенә тип ебәрәләр. Ҡашың ҡыйғас, битең ҡояш, ти бит. *(Ҡыуанып көлә.)*

Фәл и мә. Ул тиклеменә шөкөр инде шөкөрләккә. Ҡыҙыбыҙ әле лә ауылда бер ине. Был көйҙәре бер уйлағанда нур өҫтөнә нур тигән кеүегерәк булды инде. Хоҙай инде үҙе яман ниәттәрҙән һаҡлаһын тағы.

Бәҙр и. Арғы яҡтың яланы, ти, әсе була баланы, ти, ай, ҡояшым, ҡыйғас ҡашым, тилмертмә был баланы, ти... Әй, ҡатын, беҙҙең Ғәлиәбаныуҙың ҡашы ҡыйғас уҡ түгелдер бит?

Фәл и мә. Ҡыйғас, ҡап-ҡара һыҙылып киткән ҡыйғас ҡаш.

Бәҙр и *(ҡыуанып)*. Ҡара һин дуңғыҙҙарҙы. Тыуғандан бирле алдында торған атаһы белмәй, ә улар барыһын да ентекләп бөткәндәр. *(Көлә.)*

Фәл и мә. Күҙ өҫтөндә ҡаш булып тора инде. Хоҙай уңайлы урынын насип итһен...

Бәҙр и. Инде егеттәр Бәҙриеңә бер саҡрымдан сәләм бирә башларҙар. *(Шәбәйеп.)* Шундай бер ҡыҙ үҫтереп биргәс ни... Әй... ни әйткәндәй, ҡатын, һин абайланыңмы? Мин был йырлап үткән кешене Исмәғил түгелме икән тиеберәк ҡалдым.

Фәл и мә. Юҡ та.

Бәҙри. Уны белəһе ине. Йəштəр улар күңелдəренең сəләмен ситтəн əйләндереп килтереп, оҫталыҡ менəн генə еткерə торған.

Фəлимə. Ай-һай, булмаҫ та. Ул беҙҙең тирəлə сыуалырмы икəн?

Бәҙри. Былай йырлап үтеү тиклеменə сыуалыуфəләндең ҡатнашы юҡ та инде уның, шулай ҙа бит, белмəҫһең, сəстəре сəскə бəйләнгəн булһа, Фəлиəбаныу менəн дуҫлашып йөрөүҙəре лə мөмкин шул.

Фəлимə. Бик кенə матур эш булыр ине лə бит, белмəйем шул. Хоҙай шундай рəхмəтен бағышлаған булһа, дүрт ҡул менəн бирер инек инде. Үҙе серегəн бай, үҙе йəш...

Бәҙри. Унан да һəйбəт урынды көтөргə лə ярамай. Белмəҫһең, Фəлиəбаныуҙың матурлығына ҡыҙыҡһа, алам тиһə, уның ҡаршы килер кешеһе юҡ. *(Тороп, Фəлимə янынараҡ килеп.)* Шунда ла, ҡатын, өмөтһеҙ шайтан, мин үҙем был турала күптəн уйлап йөрөйөм йөрөүен, һин ҡараштырғыла əле, араларында вəғəҙə-мəғəҙə барын белеп булмаҫмы! Хəҙер инде ул еткəн ҡыҙ, артыҡ ҡыҫып маташырға ла ярамай.

Фəлимə. Фəлиəбаныу минəн башҡаға буласаҡ түгел тип əйтə икəн Исмəғил тип, бер көн Фəйни һəйләп торған булған ине уны. Мин уға, һəйләйһең тағы яҙмағанды, тинем дə ҡуйҙым. Уның һүҙҙəренең ундан береһе генə лə дөрөҫ булмай торған ине. Шуға күрə ышанырға уйламаным да мин унда.

Бәҙри. Шулай булһа, хоҙайҙың теләргə ҡурҡҡан бер теләкте ҡабул итеүе булыр ине, ҡана һуң... Туҡта, беҙ, ҡатын, Саҙрыйҙы ебəреп ҡарайыҡ, шул төркөм эсендə Исмəғил бармы, юҡмы белеп ҡайтһын. Əгəр ул булмаһа, тикмəгə булмаҫ. Ул алай юҡҡа ваҡланып йөрөй торған бала түгел.

Фəлимə. Йөрөмəҫ тип булмай ҙа уныһын. Йəштəр улар ул турала барыһы ла бер сыбыҡ менəн ҡыуылған. Шунда мин Саҙрыйҙы ебəрəйем əле. *(Сыға башлап.)* Һыу буйына табан төшөп киткəндəр ине шикелле.

Бәҙри. Туҡта əле һин! Исмəғил бармы икəн тип əйтмə тағын. Һуңынан хəйлə менəн генə һəйләтербеҙ.

Фəлимə. Нисек тим һуң?

Бәҙри. Һин былай тиген: шул йыйында Ноғман ағайың булһа, атайым саҡырҙы, тип алып кил, тиген! Тиҙ ҡайт, тиген. Ноғман, билдəле, унда юҡ, ул күптəн түгел генə ике кəҙə салып, ҡалаға китте.

Фəлимə сыға.

Өсөнсө күренеш

Бәҙри яңғыҙ.

Бәҙри. Хоҙай ҡушып башланған ғына булһасы. Егет бына тигән. Үҙе бай, үҙе хужа. Донъяны дер һелкетеп тора. Шәйхи бай ҙа унан һуң беҙҙең менән һаҡланыбыраҡ һөйләшер ине. Фәтихтың да ауыҙы томаланыр ине... Исмәғилдең теге халыҡ араһына сыҡҡан һүҙе раҫ булһа, ул әйткәнен эшләмәй ҡалмаҫҡа тейеш ине. Ай, Фәлиәбаныу ҙа йоҡлап тормаған ғына булһа... Туҡта, бер-бер ишараһын табып булмаҫмы? *(Ян-яғына ҡаранып, һаҡланып ҡына өҫтәл өҫтөн аҡтара. Сиккән ҡулъяулыҡ табып алып, шатлана.)* Башланған, башланған, хоҙайға шөкөр, моғайын шуғалыр. Яңы ғына сигеп бөткән. Ебен дә өҙмәгән...

Фәлимә керә.

Дүртенсе күренеш

Бәҙри, Фәлимә.

Бәҙри *(тиҙ генә яулыҡты йәшерә лә, Фәлимә икәнен белгәс).* Ҡатын, ҡатын, тиҙ, бында кил әле. *(Фәлимә килә башлағас.)* Әй, ҡара, ишегеңде яҡшы яптыңмы? *(Фәлимә ишекте ҡарап килгәс.)* Эш бешә.

Фәлимә. Ни бар, ә?

Бәҙри. Һөйөнсө! Һөйөнсө! Башланған. Бына Исмәғилгә бүләккә эшләп ҡуйған.

Фәлимә *(карап).* Ай, хәйерһеҙ икән, ысынмы? Ҡайһы ерҙән алдың?

Бәҙри. Өҫтәлдә, бына был һандыҡтың аҫтында ине. Таҫлап һалып ҡуйған. Шул ана, мин уны шунда уҡ уйланым. Өҙөлөп-өҙөлөп әйтә бит, бер күргә интизар булам, Фәлимәбаныу, ти...

Фәлимә. Китсе инде, мыҫҡыл итеп маташма әле...

Бәҙри. Әй, яңылышам ғына ла, Фәлиәбаныу инде, Фәлимәбаныу тип аяғына таш бәйләп һыуға һалһаң да әйтмәҫ. Һин минең генә наҙлы бикәм бит. *(Яулығынан тартып ҡуя ла, ҡыҫҡырып көлә.)*

Фәлимә. Сеү, тилермә. *(Ишеккә ымлай.)*

Бәҙри ҡапыл ауыҙын баҫып ишекте ҡарап килә.

Фәлимә. Тиҙерәк урынына ҡуй инде! Үҙе һиҙмәһен тағы.

Бәҙри. Туҡта әле. Тағы берәр нәмә табып булмаҫмы? *(Яулыҡты урынына ҡуя ла әҙләнә.)*

Фәлимә *(килеп)*. Ни булһа ла, бына был һандыҡтың эсендә булыр ине лә, бикле икән шул.

Бәҙри. Ишекте һаҡла, ишекте! Фәлиәбаныу килеп инһә, икебеҙҙе лә тотоп сикәләр.

Фәлимә. Әйберҙәрен урыны-урынына ҡуй бер ҡк.

Бәҙри. Бына, был ни? Хат бит. *(Аса.)*

Икеһе лә бик ентекләп ҡарайҙар.

Бәҙри *(ҡыҫҡырып ебәрә)*. Егеттәр хаты.

Фәлимә *(Бәҙриҙең ауыҙына һуҙылып)*. Аҡрын, тим!

Бәҙри *(хатты кеҫәһенә тығып, дәррәү ишеккә әйләнеп ҡарай ҙа)*. Мә әле, һин маташтыра алмаҫһыңмы?

Фәлимә. Кит унан, мин яҙыу танымайым да баһа.

Бәҙри. Танымайым тип, быны уҡымай ҡалырға ярамай инде. Танымаһаң да уҡы! Көндөҙ булһа, һиңә әйтеп тә тормаҫ инем. Беләһең бит кис күҙемдең яҙыу уҡый алмағанын.

Фәлимә. Ут янынараҡ барып ҡараһаң?

Бәҙри. Әйтеп торам да баһа һиңә, ут яҡтыһында уҡый алмайым тип. Мә, тиҙерәк ҡара!

Фәлимә. Ай, аллам, белмәгәс, нисек итеп уҡыр ти икән.

Бәҙри. Мин өйрәтеп торормон. Мә, шунан иң һуңғы һүҙен генә ҡара! Башҡаһы кәрәкмәй ҙә.

Фәлимә *(алып ҡарап)*. Бында бер «әлеп» бар, атаһы!

Бәҙри. Ә-ә-ә, таяҡ кеүекме? Ана инде шуның янында бер тырма теше кеүеге лә юҡмы?

Фәлимә. Ундай юҡ. Таяҡтан һуң салғы кеүек кәкрәйеберәк киткән нәмә бар.

Бәҙри. Уныһы ни булды тағы?.. Хуш, тағы, тағы?.. Шул салғы янында һаплы суҡмар кеүек нәмә юҡмы?

Фәлимә. Суҡмар кеүек түгел. Балыҡ аулай торған йәтмә кеүек бер нәмә бар.

Бәҙри. Әһә, әһә, инде бер табағас кеүеге лә бармы?

Фәлимә. Бар... *(Ҡыуанып китеп.)* Аҙағында ләм, атаһы, ләм!

Бәҙри. Ләм? Ҡармаҡ кеүекме?

Фәлимә. Эйе, эйе, уныһын мин үҙем дә таныйым.

Бәҙри *(бик ҡыуанып)*. Исмәғил инде, Исмәғил. Аллаға шөкөр, аллаға шөкөр!

Фәлимә. Мә, алған ереңә ҡуй тиҙерәк!

Бәҙри. Бына һин, бөтә эште бешереп ҡуйған Ғәлиәбаныу... *(Хатты ҡуя.)* Эй хоҙайым, һәр икеһенә тигеҙ мөхәббәт бир!

Ғәлимә. Ҡыуаныс, шатлыҡ менән ғүмер итергә яҙһын.

Бәҙри. Күркәм итеп тамамларға насип булһын инде. Әйтәм шул бик тилмереп йырлайҙар ине. «Ғәлиәбаныу, ғүмерлек йәр булһана!» — ти бит. Тикмәгә түгел икән ул. Мин уны шунда уҡ уйланым. Исмәғил башҡалар ыңғайына юҡҡа йөрөмәҫ тип. *(Ҡыуанып көлөп ҡуя.)*

Ғәлимә. Хоҙай күктән көткәнде ерҙән бирҙе.

Бәҙри. Ғәлиәбаныуҙы әйтәм, етеҙ ҙә һуң, вәғәҙәгә билге итеп бирергә яулығын да әҙерләп ҡуйған һиҙҙермәй генә.

Ғәлимә. Ундайҙарҙы төндә ултырып ҡына эшләйһең инде уны.

Аяҡ тауышы ишетелә.

Берәү инә, атаһы!

Бәҙри йәһәт кенә өҫтәл янынан китә. Саҙрый инә.

Бишенсе күренеш

Бәҙри, Ғәлимә, Саҙрый.

Саҙрый. Атай, Ноғман ағай унда юҡ. Ҡалаға киткән тигән булалар.

Бәҙри. Ә, шулаймы икән ни? Кем әйтте улай тип?

Саҙрый. Шәми әйтте.

Бәҙри. Ҡайһы Шәми?

Саҙрый. Шәми булғас Шәми инде. Теге... Яр буйындағы... Шәмсетдиндәр бар бит.

Бәҙри. Ваҡбаҫар Ғәниҙең Шәмие була инде. Улар ни эшләп ултыра һуң унда?

Саҙрый. Хәлил ағай гармун уйнай. Сибәғәт ағай бейей. Ҡыҙыҡ. Мин әле тиҙерәк ҡайт тигәс кенә ҡайттым.

Бәҙри. Тағы ни эшләйҙәр?

Саҙрый. Бер нимә лә эшләмәйҙәр.

Ғәлимә. Йырлайҙар ҙамы?

Саҙрый. Юҡ, йырламайҙаҙ.

Бәҙри. Өс-дүрт кенә кеше ни ҡыҙыҡ табып ултыралар икән.

Саҙрый. Унда кешеләр күп. Вәли ағай, Төхби, Хәмзә, Йосоптар ҙа бар.

Ғәлимә. Йә, йә?

Бәҙри *(уны тотоп туҡтатып, бошоноп).* Шунан башҡаларын таныманыңмы?

Саҙрый. Юҡ.

Бәҙри менән Ғәлимә бошоноп бер-береһенә ҡарашалар.

Саҙрый. Әсәй, йоҡом килә.

Ғәлимә. Йоҡоң килһә, апаң урын йәйгәндер. Күргәндәреңде һөйләп бөтөр, сығып ятырһың.

Саҙрый. Бөттө инде. *(Сыға башлай.)*

Бәҙри. Туҡта, туҡта әле!.. Ху-уш, Вәли бейеп маташҡан буламы ни?

Саҙрый. Юҡ тим бит инде.

Бәҙри. Һиңә бер һүҙ ҙә әйтмәнеләр ҙәме?

Саҙрый. Юҡ, юҡ, юҡ!

Ғәлимә. Ноғманды кем саҡырҙы тип тә әйтмәгәндәр икән.

Саҙрый. Исмай әйтә, апайың саҡырҙымы әллә, ти.

Бәҙри *(ҡыуанып китеп).* Исмәғилме?

Ғәлимә Бәҙригә төртә.

Саҙрый. Эйе, миңә: «Нихәл, ҡәйнеш?» — тигән була.

Тегеләр ҡыуаныш бер-береһенә төртөшәләр.

Ғәлимә. Ҡара һин хәйерһеҙҙе!

Бәҙри. Һин нимә тинең һуң уға?

Саҙрый. Һыртыңа ишкән ҡайыш, тип йүгереп киттем. Йоҡом килә инде. *(Сығып китә.)*

Алтынсы күренеш

Бәҙри, Ғәлимә.

Бәҙри. Инде кәрәгең дә бөттө. *(Ҡулдарын ыуып, бик ҡыуанып.)* Йә, күрҙеңме, ҡарсыҡ?

Ғәлимә. Эй, шулай ҡыланыуыңды бер яратмайым. Ҡырҡ йәшендәге кеше ҡарсыҡ була микән?

Бәҙри *(көлөп).* Йә, ҡатын, улайһа, ҡатын. Ҡыҙ бирергә йөрөйһөң, ҡарсыҡ булмай, әллә ҡайҙа бара алмаҫһың инде... Бына һиңә, эш беште бит, ә? Егет тә һөйә, ҡыҙ ҙа һөйә, беҙ ике баштан дүрт ҡуллап риза. Туй итергә генә ҡалды.

Ғәлимә. Исмәғил яуызды әйтәм, уҫаллығын, Саҙрыйҙың беҙгә ҡайтып һайрайһын белеп, ҡәйнеш тиеүен.

Бәҙр и *(ҡыуанып)*. Әйтмә лә. *(Йүткереп.)* Һем, ҡәйнеш тип әйтә, ти, ә?.. Миңә ҡайным, ти инде ул, һиңә ҡәйнәм, ти. *(Ҡыуанып көлөп ебәреп.)* Насар түгел бит, ҡатын, ә? Нибус, әбей булырһың. Туй! Туй!

Фәлимә. Туй тигәндән, быйыл беҙҙең ни барыһы алты ғына ҡаҙ бар. Тағы аҙыраҡ һатып алырбыҙмы икән һуң? Туйыңа ла, кейәү һыйларыңа ла булғас.

Бәҙр и. Алырбыҙ инде, алырбыҙ. Иртәгә үк ҡалаға китергә кәрәк. Бер арыуыраҡ салбар ҙа алып тектермәй хәл юҡ. Ыштандан ғына килешмәй. Ҡатнашҡан кешең бай булғас, һиңә лә аҙыраҡ кешесә ҡыланмай тура килмәй.

Фәлимә. Шунда бер юлы Саҙрыйға ла камзуллыҡ алырһың. Туйҙа әллә ни беленмәһә лә, ҙәнәһен йөрөткән саҡта күңелһеҙ булыр. Унан миңә лә ҡоҙағыйҙар алдында кейергә йөнмө, сатинмы бер күлдәк яһамай килешмәҫ.

Бәҙр и. Шундай ваҡ-төйәкте алданыраҡ әҙерләп торорға кәрәк. Бер егерме-утыҙ ботлап бойҙай һалып, иртәрәк китәйем... Ә унан был мунсаны ла тиҙ генә бөтөрөп алырға кәрәк. Иртәгә иртүк, насип булһа, Ғаббас ҡартты күреп әйтергә онотторма әле. Иҙәнгә үҙебеҙҙәге таҡталар ҙа ярар, әләүкәлек, һикелек яңы таҡта алырбыҙ тием.

Фәлимә. Йә, әйҙә, бынан сығайыҡ инде, Ғәлиә ятырға көтөп йөрөйҙөр.

Бәҙр и. Әле бында нисек инмәй йөрөй һуң?

Фәлимә. Бая Фәрхәнә менән баҫҡыста ултыралар ине. Ай яҡтыһы тип йөрөйҙәрҙер тағы.

Бәҙр и. Йөрөһә йөрөһөндәр әле. Мин үҙем дә тегеләрҙең йырҙарын ишетһен тип, өндәшмәй тора инем.

Фәлимә. Ул таш баш Фәрхәнәһенә эйәрһә, тыңлайбыҙ тип, китеп тә барғандарҙыр әле.

Бәҙр и. Үҙ исемеңә бер көй сығарып, урта бармаҡтай егеттәр исемендә телдәрендә тибрәтә башлаһалар, тыңламау түгел...

Был ваҡыт йомшаҡ ҡына һыҙғырған тауыш ишетелә. Ҡарттар бер-береһенә ҡарашалар.

Ҡатын, берәү һыҙғыра бит.

Фәлимә. Мин дә шулай ишеттем.

Икеһе лә тороп, ишек яғынараҡ ауышып, тыңлап торалар. Тағын һыҙғырыу.

Бәҙр и. Тиҙ-тиҙ, ҡатын! Килде, килде...

Фәлимә. Исмәғил, Исмәғил!..

Бәҙр и. Тиҙерәк Фәлиәбаныуҙы ебәр!.. Ят инде, тиең. Әйҙә! Аҡрын!..

Сыға башлайҙар.

Фәлимә. Эй, хоҙайым, хәйерле ит!..

Бәҙр и *(ишектән сыҡҡанда әйләнеп)*. Төклө аяғың менән, кейәү!

Сығалар. Күп тормай Фәлиәбаныу инеп ишекте әләҫ.

Етенсе күренеш

Фәлиәбаныу яңғыҙ.

Фәлиәбаныу. Бөтә ауыл йоҡлап бөткән, быларға ни ҡалғандыр төн һаҡларға. Хәлил килеп һыҙғырмаһа ярар ине тип ҡурҡып бөттөм. Берҙән, Фәрхәнәһе һағыҙ кеүек һыланды. *(Өҫтәлдәге яулыҡты алып ебен өҙә, остарын төйнәй-төйнәй.)* Хәлил тәҙрәгә килмәй китмәҫ. Хәйер, Исмәғил менән һүҙгә килгән булһалар, ҡайтып та киткәндер. Ул Исмәғил дә бер йән көйөгө булды миңә. Атайҙарға һүҙ һала ғына күрмәһен инде. Үҙемде йөҙәткәне лә етәрлек булды. *(Иҫенә төшөрөп.)* У, шуның хатын йыртып ташлайым әле. Атайымдар күрер йә. *(Йыртып ташлап.)* Хаттары менән, сәләмдәре менән, йырҙары менән тамам теңкәмә тейҙе инде. Үҙ көйөмә тип рәхәтләнеп торғанда ғына, күбеһенсә ул килеп сыға ла, суртан сабаҡтарҙы ҡасырған кеүек, башҡаларҙы ситкә ҡағып, ҡолаҡ итемде кимерергә тотона. Әле бөгөн дә шуларҙың артынан һыу буйына төшөп китте. *(Һикегә урын йәйеп маташа.)* Хоҙай башымды шул ҡанһыҙға яҙмаһын. Ун өс йәшемдән алып йөрәгемә инеп ултырған Хәлилем бар сағында уның ҡыҙыҡһыҙ байлығына бер ҙә иҫем китмәй...

Шул ваҡытта тағы әсе генә һыҙғырыу.

Ай, Хәлилме икән? *(Лампаны һүндерә лә, пәрҙәне күтәреп, тәҙрәне аса, тулған ай бүлмәне яҡтырта. Фәлиәбаныу тыңлап тора.)*

Тағы һыҙғырыу.

Сығаймымы икән, сыҡмайыммы икән? *(Башына шәл алып бөркәнә.)* Әсәйемдәр ҙә ятып бөтмәгән. *(Ишеккә барып тыңлап килеп.)* Бөгөн сыҡмайым, булмаһа. Әсәйем һиҙһә, яҡшы түгел.

Шул ваҡыт матур тауыш менән һүҙып ҡына «Фәлиәбаныу» көйөнә йырлаған тауыш ишетелә.

Билемдәге ал билбауым
Тормай ҡыҫтырған ерҙә;
Үҙе саҡыра, үҙе ҡаса,
Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм,
Сыҡмай һыҙғырған ергә.

Ғ ә л и ә б а н ы у *(тәҙрә яныңа килеп йырлай).*
Йүгереп төштөм һыу буйына,
Һыуҙа ҡоштар йөҙә тип;
Сыҡмайһың тип үпкәләмә,
Йәнейем, бәғерем, һылыуым иркәм,
Ҡурҡам кеше һиҙер тип.

Х ә л и л. Урамдарҙан үткән саҡта,
Күҙем төштө сарлаҡҡа;
Иңбашыңа шәлең һалып,
Сыҡһаң инде аулаҡҡа.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Өй түрендә йөрөмә, йәнем,
Ләйсән яуған ҙәҙәр бар;
Көн һайын да сыға алмайым,
Әсәйемдән һүҙҙәр бар.

Х ә л и л. Ал ҡалпаҡта зәңгәр суҡ,
Һабындарға һалып сыҡ;
Атаң-әсәң йоҡлаған бит,
Аҡрын баҫып яныма сыҡ.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Ҡыҙып ураҡ урған саҡта
Ус төптәрем тирләр тим.
Күптән атылып сығыр инем,
Әсәй һиҙһә, тиргәр тим.

Хәлил *(тәҙрәгә килеп).*
Тәҙрәнде асып ҡуйып,
Кемгә күлдәк киҫтең һин?
Ҡара ҡашым, ҡарлуғасым,
Ғәлиәбаныу, һылыуым иркәм,
Кем бәхетенә үҫтең һин?

Ғ ә л и ә б а н ы у. Быйыл, быйыл тигәнем,
Быйылғы йыл көйгәнем,
Йәнем, бәғрем, һылыуым иркәм,
Ҡулдарына гармун тоҡкан
Егет минең һөйгәнем.

Х ә л и л. Тәҙрә төбөм ҡаты бал,
Ашайһың килһә, ватып ал.
Һөйөүҙәреңә ысын булһа,
Тәҙрәнән тартып ал.

Ғәлиәбаныу шәле менән ҡапланыбыраҡ ҡулын бирә, Х ә л и л бүлмәгә инә. Ҡулында гармун.

Х ә л и л *(Ғәлиәбаныуҙың ҡулын тотҡан көйө).*
Ситән аша төшкән саҡта
Бүрәнәгә абындым.
Минуты ай, сәғәте йыл,
Шул ҡәҙәре һағындым.

Ғәлиәбаныуҙы һикегә табан тарта. Үҙе ултыра. Ғәлиә ултырмай.

Йәнкәй, шәлең һалһаңсы,
Кил алдыма ятһаңсы.
(Тартып алдына ултырта.)
Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?
Борғоланмай әйтһәңсе.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Аяғыңдағы итегең,
Болғар икән олтаны.
Һине һөймәй кемде һөйәйем,
Һин бит егет солтаны.

Х ә л и л. Көмөш йүгән кейҙерткәндә
Башын сайҡай атҡайым.
Бит уртаңдан һурып үбәм,
Асыуланма, йәнкәйем.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Алмағасы эйелгән,
Алмалары ҡойолған.
Кисә лә бик ҡаты үптең,
Бына иренем уйылған.

Хәлил үбә, Ғәлиәбаныу үпкәләй.

Х ә л и л. Бейек тауға менәмһең,
Болот килә, күрәмһең.
Үҙәктәремде өҙәһең,
Илама, Ғәлиәм, илама,
Бер үпкәндән үлмәҫһең.

Ғ ә л и ә б а н ы у *(көлөп ебәрә).* Аңланым.

Хәлил шатланып китә. Ҡосаҡлашып үбешәләр.

Х ә л и л. Һинең тирәлә ҡоҙғондар осҡаны беленмәйме?

Ғ ә л и ә б а н ы у. Ул тиклемен белмәйем. Һыу буйында булдыңмы?

Х ә л и л. Булдым. Исмәғил араға инә бит. Мин уның менән саҡ-саҡ һүҙгә килмәй йөрөйөм.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Мин мәңге уға барасаҡ түгелмен. Атайҙар ҡыҫтап йөҙәтә башлаһалар, һин миңә ярҙам итерһең бит, Хәлил.

Х ә л и л. Теләһәң, мин иртәгә үк һиңә яусы ебәрәм.

Ғ ә л и ә б а н ы у. Яҡшылыҡ менән бирмәһәләр, мин ҡасып сығам.

Хәлил *(аяҡҡа баҫып, ҡулын һуҙып).* Вәгәҙәме?
Етегән йондоҙ бар сағында,
Сулпан йондоҙ ҡалҡырмы?
Һәйгәне өсөн ҡорбан булыуҙан
Йәш егет баш тартырмы?
Егет әйтә, ҡыҙ булһын,
Ҡыҙҙар әйтә, үҙ булһын.
Алдым-бирҙем ошо булһын,
Вәгәҙә өсөн һүҙ булһын.

Фәлиәбаныу *(ҡулын биреп).* Вәгәҙә!

Хәлил *(Фәлиәбаныуҙың ҡулын ҡыҫҡан көйө).* Мин иртәгә яусы ебәрәм.

Фәлиәбаныу. Иртәгә үк ебәр! Иртәгә үк ебәр! Исмәғил ҡыҫылғанса бер хәл булһын.

Әтәс ҡысҡыра.

Таң әтәсе ҡысҡыра,
Айырылыуҙың билгеһе.
(Өҫтәлдән яулыҡ алып бирә.)
Был бүләгем һине һөйөп,
Ысын күңелемдән ҡайнап сыҡҡан
Вәгәҙәләрҙең билгеһе.

Хәлил. Рәхмәт!
Һыу буйында һалҡын ел,
Туңам, йәнем, туның бир.
Айҙар бата, сулпан ҡалҡа,
Сулпан ҡалҡып таңды уята,
Китәм, йәнем, ҡулың бир.

Күрешәләр ҙә, ҡосаҡлашалар ҙа, Хәлил гармунын алып, ян-яҡҡа ҡарап, һаҡланып ҡына сыға.

Хәлил *(ҡулын һуҙып).* Хуш, йәнем! Мин тыныс күңел менән китәм.

Фәлиәбаныу *(күрешеп).* Юлыңа аҡ йәймә!

Хәлил гармун уйнап китә.

Фәлиәбаныу *(тәҙрәнән оҙаҡ ҡарап ҡалып).*
Аҡ уҡаға ынйы теҙҙем,
Бер бөртөгө ҡалғансы;
Аҡ теләктәр теләй-теләй,
Оҙатҡанда ҡарап ҡалам,
Күҙ керпегем талғансы.

(Тәҙрәне яба.)

Һуҙып ҡына әтәс ҡысҡыра.

Шаршау

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Бәзризең урам яҡ өйө, һикелә Ғәлимә ҡаба менән еп илəп ултыра. Шунда уҡ ҡапсыҡтар тотоп Бəзри инə.

Беренсе күренеш

Ғəлимə, Бəзри.

Бəзри. Ҡатын, бына был ҡапсыҡтарҙы ямайһы бар икəн. Шəмбе баҙарына барғанда кəрəк булыр. *(Ғəлимəнең алдына килтереп ташлай.)*

Ғəлимə. Нигə уны бында ташлайһың? Бер ҡулым тейгəн арала ямармын əле. Соланға ташлай тор!

Бəзри. Онотма улайһа. *(Алып алдына ташлай.)* Һин теге көрпələге ҡапсыҡты ла бушатып бирерһең əле... Мине оҙатҡансы был эшеңде ҡуйып торһаң да ярар ине.

Ғəлимə. Ҡуйып торһаң тип, минең ни хəжəтем бар инде. Кəрəк-ярағыңды əҙерлəп ҡуйҙым, ҡапсыҡты Ғимаҙи ҙа бушата алыр уны. Ғəлиəбаныуҙың шəлен тиҙерəк бəйлəтеп алайым тип маташам.

Бəзри. Ярай, ярай, улайһа.

Ғəлимə. Кəшифəнең ҡулы буш саҡта биреп ҡалайым тием, Ғəлиəбаныу үҙе хəҙер бəйлəй алмаҫ инде... Эй, ана, солан ишеген асыҡ ҡалдырғанһыңдыр инде. Тауыҡтар инде шикелле. Бар əле тиҙерəк, ҡоротомдо харап итəлəр.

Бəзри *(ишекте асып)*. Көш-ш, ləғнəт һуҡҡырҙары!.. Ас беттəр, көш-ш! Көнənə нисə тапҡыр ашатаһың, уның өҫтənə ҡараҡлыҡҡа һалышалар, көш-ш... *(Ҡысҡырып ебəреп.)* Көш-ш тием! *(Өй алды ишеген ябып кереп.)* Был тауыҡ-себештən хоҙай һуҡҡан ҡош юҡ.

Ғəлимə. Əйтмə лə, һəйləмə лə. Минең улар менəн яфа күргəнем инде... Аҙ ғына ирек ҡуйһаң, күҙеңде килеп суҡырҙар.

Бəзри. Кəһəр төшкөрҙəрен ғүмеремдə лə аҫрамаҫ инем.

Ғəлимə. Ҡатын-кыҙ шул бөтə кəрəк-ярағын шул йомортҡа менəн генə еткереп тора ла...

Бəзри. Ай, ҡатын, теге яулыҡ ни эшləгəн? Яулыҡ? Осҡандыр инде ул күптəн.

Ғəлимə. Бына хəҙер Ғəлиəбаныу һыуға китер, ҡарарбыҙ.

Бəзри. Инде икеləнеп тораһы ла юҡ. Бойҙайҙы һалып тиҙерəк ҡалаға китергə генə. Хəҙер баҙарҙы арзан тиҙəр тиеүен. Яҫмыҡ күҙ Хəйрулла өсөнсө көн генə ваҡ бойҙайҙы илле тиндəн бирҙеләр тип торҙо. Кəрəге шундай

булгас, алып бармай хәл юк шул... Әле Ғаббас картты күреп һөйләшеп кайттым, иртәгә килеп тотонмаксы булды. Быйылға артығырак сығым булһа ла, бай кейәүҙе кара мунсаға индереп булмаҫ бит. *(Ҡыуанып көлөп ебәрә.)* Ғәлиәбаныу төҫ менән дә ауылда бер ине, аҡыл менән дә өҫтөн булып сыҡты. Бына тигән егет һайлай белде.

Ғ ә л и м ә. Бындайҙы инде шәм яғып эҙләһәң дә тапмаҫһың. Бай, төҫкә лә ярайһы ғына, артыҡ боҙоҡлоғо ла ишетелмәй.

Б ә ҙ р и. Боҙоҡлоғо тип, ундай ғына ғәйеп хан ҡыҙында ла була. «Егет булһа — мут булһын, мут булмаһа — юҡ булһын», — ти. Кеҫәң ҡалын булһа, йөрәктең фәкирлеге күренмәй ул. Алтын күҙҙең яуын ала тиҙәр бит... Инде, ҡатын, Ғәлиәбаныу үҙенә тейешен үтәне. Беҙгенә йоҡлап тормайыҡ... Ғәлиәбаныуҙы ул үҙе алтын-көмөшкә сумдырыр. Беҙгә лә был турала... *(Ян-яғына ҡаранып.)* Эйе, үҙең беләһең инде... Шулай инде... Эйе, уныһын ҡарарбыҙ әле.

Ғ ә л и м ә. Инде Хисами Әсмәһе лә аҡылға килер. Ғәлиәбаныуҙы көнләшеп үлеп бара ине.

Б ә ҙ р и. Мин дә шуны әйтәм, Фатихтарҙың ауыҙы томаланыр инде, тим. *(Эреләнеп кенә бер йөрөп килеп, Ғәлимәнең янына ғына ултыра.)* Ҡатын, кисә аҙыраҡ тыңлап тороргә булған.

Ғ ә л и м ә. Тыңламаным инде. Ҡамасауламайым тинем. Ир кеше тауышын ишеткәс тә, тиҙ генә киттем; белдереп ҡуйырмын да, китеп бармаһын тип ҡурҡтым.

Б ә ҙ р и. Шулай, шулай, бик яҡшы иткәнһең. Был ваҡытта һуҡыр булып, һаңрау булып тороргә ла ярай. Ярай әле, алдан һиҙенеп ҡалдыҡ. Алданыраҡ әҙерләнеп тороргә уңай булды. Бәлки, оҙаҡламай яусы ла ебәрер. Туҡта, мин яулыҡты ҡарап киләйем. *(Сыға.)*

Икенсе күренеш

Ғәлимә яңғыҙ.

Ғ ә л и м ә. Мәһәр ҡотлап ни һалырмын икән инде? Ике бөтөн тәңкәм бар. Шуға бер кешимир яулыҡ ҡушып һалһам ярармы икән? Әллә ситса ғына булһа ла күлдәк ҡушырмынмы икән? Сатин күлдәк булғанда бик йәмле булыр инде булыуын, тегене күндереп булмаҫ. Үҙемә йөн күлдәк тигәнгә тиҙ генә күнде улай ҙа. Күңеле йомшап китте уның да. Бала бит. Ҡоҙағыйға бирергә лә бер затлыраҡ әйбер һалмай килешмәҫ...

Б ә ҙ р и инә.

Өсөнсө күренеш

Бәҙри, Ғәлимә.

Бәҙри *(йәһәт керә-керә)*. Вжжт, елдәр иҫә тегендә, осҡан! Яулыҡ күптән Исмәғилдең кеҫәһендә ята инде.

Ғәлимә *(ҡыуанып)*. Был йәштәрҙең уҫаллығына ла шаҡ ҡатырһың. Ҡайҙан хәйләләрен табып бөтөрәләр. Беҙ ҙә йәш саҡта шулай инекме икән?

Бәҙри. Үткән саҡтарҙы иҫкә төшөрөп йөрәкте әрнетмә инде, ҡатын! Унһыҙ ҙа әле йәшлекте һағынып ебәрҙем.

Ғәлимә *(көлөп)*. Тилер тағы! Туй тигәс тә, дәртләнеп китте.

Бәҙри. Ваҡытында беҙҙең дә ҡыланмаған ҡалманы, ҡатын! Ата-бабанан ҡалған йола булғас инде, йәш саҡта шулайыраҡ булғаны яҡшы. Ни ҡәҙәр һағынһаҡ та, ул бәхет беҙҙән алыҫ ҡалған...

Ғәлимә *(көлөп)*. Ситтән генә ауыҙ һыуын ағыҙып ултырырға ҡалдымы?

Бәҙри. Эй сепрәк баш, һин дә мыҫҡыл иткән булаһың тағы.

Ғәлимә. Сепрәк баш булыу сүбек баш булыуҙан артыҡ, тип әйткән ти бер ҡатын иренә.

Бәҙри. Ҡара, ҡара, ниндәй елле ҡундырҙы. *(Ғәлимәнең янына килеп ултырып, арҡаһына ҡулын һала.)*

Ғәлимә *(ҡыланып)*. Китсе, осонма әле, бар инде юлыңа. Һаҡаллы сабый. *(Бәҙриҙең ҡулын алып ташлай.)*

Бәҙри. Улай итһәң, мин ҡаланан бер йәш ҡатын алып ҡайтып та ҡуйырмын.

Ғәлимә. Эй-й, асыу китергес. Һин туң бүкәнгә ҡыҙ бирәм тип торалар ине ти...

Тәҙрәгә Гимаҙи килә.

Гимаҙи. Бәҙри ағай, атты егәйемме инде?

Бәҙри. Э, ҡапсыҡтарҙы тейәп тә ҡуйҙыңмы әллә?

Гимаҙи. Тейәнем.

Бәҙри. Улайһа келәттәге көрпәне ҡайҙа булһа ла бушатып, ҡапсығын арбаға һал әле. Унан ат егерһең!

Ғәлимә *(ултырған еренән ҡысҡырып)*. Шунда уҡ балсыҡ һалған тартма бар; балсығын бер ситкәрәк ергә түк тә көрпәне шул тартмаға бушат!

Гимаҙи. Ярай. *(Китә.)*

Ғәлимә *(ҡысҡырып ҡала)*. Келәттең ишеген яҡшы ябып сыҡ! *(Үҙ-үҙенә.)* Һин, һантый, асыҡ та ҡалдыра торганһың әле.

Бәҙри *(ҡапыл иҫенә төшөрөп)*. Ә, кем, Ғимаҙи! *(Тәҙрәнән башын тығып.)* Келәттәге теге аҡ дуғаны ла арбаға һал әле!

Тауыш. Ярай.

Бәҙри *(башын алып)*. Ул дуғаны буятып алырмын тием, туйҙа егергә йәмле булыр.

Фәлимә. Һин сәй эсеп китерһең бит? Ғәлиәбаныу самауыр ҡуйғандыр.

Бәҙри. Әҙер булһа эсермен... Мин юҡта, ҡатын, яусы-маҙар килһә, мин ҡайтҡас яуап бирербеҙ тиһәң дә, ризалығыбыҙҙы һиҙҙереп ҡуй!

Фәлимә *(эшен ҡуйып)*. Кара әле, кем әйткәндәй, үҙебеҙҙең ризалығыбыҙҙы Ғәлиәбаныуға аҙыраҡ һиҙҙереп ҡуйғанда ни эшләр икән? Уның да алданыраҡ әҙерләнгәне яҡшыраҡ булыр ине. Былай ул беҙҙән ҡурҡып торор. Уның әйберҙәре бит үҙебеҙ кеүегерәк кешегә ҡаршы әҙерләнгән. Инде байҙар менән аралашырға булғас, арттырғылар быҙ.

Бәҙри. Ҡоҙалар бай булғас та бит, беҙгә шул түшәгебеҙгә ҡарабыраҡ аяҡ һуҙмай булмаҫ, ҡатын. Ғәлиәбаныуҙы ул үҙе лә кейендерер. Беҙгә бигерәк үҙебеҙҙе ҡайғыртырға кәрәк. Аҙыраҡ йүнәткеләрбеҙ ҙә, ярар.

Фәлимә. Улай тип инде, атаһы, берҙән-бер ҡыҙың шундай бай йортҡа төшөргә торғанда, аяҡ аҙыраҡ юрғандан сыҡһа ла ярай. Дуҫ-дошман араһында ла күркәмерәк булғаны яҡшы бит. Шәберәк йыһаз менән барһа, Ғәлиәбаныуҙың үҙенә лә ҡайнылар араһында йөҙ аҡлығы булыр.

Бәҙри. Хәлдән килгәнсә тырышырбыҙ инде. Нисек тә Ғәлиәбаныуға һиҙҙерергә ярай шул. Беҙҙән шикләнеп тормаһын. *(Сыға башлай ҙа, яңынан килеп.)* Шуны әйтермен тигән инем әле, Ғәлиәбаныу һыуға-нигә төшкәндә кейенеберәк, матурланыбыраҡ төшһөн ине. Уны ла аңлатып ҡуй.

Фәлимә. Ул ҡәҙәреһен электән үк әйтә киләм инде. Ул турыға үҙе лә бик шәп ул.

Икеһе лә сыға. Ғәлиәбаныу ҡаршы осрай.

Дүртенсе күренеш

Ғәлиәбаныу яңғыҙ.

Фәлимә *(ишек төбөндә)*. Ҡыҙым, самауыр ҡуйғанһыңдыр?

Ғәлиәбаныу. Ҡайнар ҙа инде.

Ғәлимә. Атайың ҡалаға китә бит, йомоштарың булһа, әйт! *(Китә.)*

Ғәлиәбаныу. Эм-м, бер-ике бармаҡ тамбур ебе алып ҡайт тиһәм, асыуланырмы икән? Шул тиклем ҡабаланып китерлек ниндәй эш төштө икән тағы?.. Китһен, китһен, бик яҡшы. Йома көн өйҙә булмағаны яҡшы. Һыу буйында иркенләберәк йөрөрмөн... Эй, уныһы имгәк икән тағы, Хәлилдән яусы килеп елгөрмәй ҡала бит. Атайым киткәнсе килеп ҡалһын ине инде...

Ғәлимә инә.

Бишенсе күренеш

Ғәлиәбаныу, Ғәлимә.

Ғәлиәбаныу. Әсәй, атайыма ике генә бармаҡ тамбур ебе алырға ҡушһам, асыуланырмы икән?

Ғәлимә. Ниңә асыуланһын, асыуланмаҫ. Тағы башҡа йомоштарың булһа ла әйт. Епте күберәк ҡушһаң да аныҡ булмаҫ әле... Сатынғамы, бер затлыраҡ нәмәгә сиктерһәкме тип тә торам әле мин.

Ғәлиәбаныу *(ҡурҡып)*. Ниңә ул?

Ғәлимә. Ниңә тип, һинең әйберҙәреңде етеш иткем килә. Шундай йомоштарың булһа, әйт тип кенә иҫеңә төшөрөм. Берҙән-бер ҡыҙына атаң да ҡаршы килмәҫ. Атаң да әйтә, берҙән-бер ҡыҙыбыҙҙы кеше араһында күркәм булырҙай итеп әҙерләй алһаҡ икән, ти. Йәшең дә етмәне түгел; хоҙай бәхетеңде бирһен инде.

Ғәлиәбаныу *(бик шикләнеп)*. Әле бер көн генә, бөтә нәмәң дә етеш инде тип тора инең. Хәҙер ниңә етешмәҫ булды тағын?

Ғәлимә. Унан ни аныҡ? Үй бит ул үҙгәрә тора. *(Көләборәк.)* Атаң әйтә, йәштәр улар һинең ваҡытыңа ҡарамай, күңелдәре бер нәмәгә төшһә, уларҙы айырып булмай, ти. Фореат бар саҡта алдан әҙерләнеп торорға кәрәк, ти. Яңғыҙ бер ҡыҙыбыҙ, беҙ уның теләгенә ҡаршы килеп йөрөмәбеҙ инде, үҙе теләгәнен эшләрбеҙ, ти.

Ғәлиәбаныу *(үҙ-үҙенә)*. Әллә былар минең эшемде һиҙҙеләрме икән? Кисә һаҡһыҙыраҡ ҡыландыҡ шул.

Ғәлимә. Шунлыҡтан ғына әйтәм уны, бер нәмәне теләһәң, атай-әсәй ҡаршы килер тип торма тием. Үҙең кейәсәк кеемде үҙең һайлаған яҡшы, үҙең торасаҡ өйҙө үҙең йыйыштырған яҡшы, башҡа эштәрҙә лә шулай...

Ғәлиәбаныу *(үҙ-үҙенә)*. Моғайын былар белгәндәр икән. Теләгемә ҡаршы килмәүҙәрен белдерергә тырыша бит. Шулай булһа, ниндәй бәхетле булыр инем.

Ғәлимә. Берҙән-бер ҡыҙ булғас, һинең теләгең беҙҙең дә теләк инде ул. Һөйөклө ҡыҙыңың теләген үтәй алһа, ата-әсәнең бәхете шул.

Ғәлиәбаныу *(үҙ-үҙенә, ҡыуанып).* Ах, шатлығымдан шашам инде, әйтмәй сыҙай алмайым. *(Әсәһенә.)* Рәхмәт, әсәй, һиңә лә, атайға ла... *(Ситкә ҡарап.)* Нисек кенә белдертәйем? Урыны килгәндә, әйтеп ҡалырға ине. *(Әсәһенә.)* Минең... теләгемә ҡаршы килмәһәгеҙ бәхетле булыр инем. Әйбер яһағыҙ тип ҡыҫтамайым... тик... *(Әйтә алмай тукталай.)*

Ғәлимә. Беҙҙең дә бар теләгебеҙ һинең бәхетле булыуың. Һүҙеңде әйтеп бөтөр, ҡыҙым... Минән тартынма.

Ғәлиәбаныу. Минең кейенеү-яһаныуҙан башҡа бер теләгем бар... Тик әйтергә генә оялам... Үҙегеҙ ҙә беләһегеҙҙер инде...

Ғәлимә. Үҙең дә аҡылһыҙ ҡыҙ түгелһең. Ни эшләгәнеңде белеп эшләгәнһеңдер. Ҡыҫҡаһы ғына, ҡыҙым, беҙ һинең ниәтеңде белдек. Хоҙай аҡ тормоштар бирһен инде. *(Сыға башлай, ишеккә еткәс.)* Атайың көтә, сәйгә сыҡ инде.

Ғәлиәбаныу. Мин атайым киткәс сығам.

Ғәлимә сыға.

Алтынсы күренеш

Ғәлиәбаныу яңғыҙ.

Ғәлиәбаныу *(ҡыуанып, һикергеләп).* Эх, мин ниндәй бәхетле, ниндәй бәхетле! Был ҡәҙәр бәхетле булырмын тип уйламағайным. Атайҙарҙы күндереп булмаҫ, тип ҡурҡҡайным. Был ҡыуаныс хәбәрҙе Хәлил белмәй бит әле. Бөгөн инде яныма сыҡмай ҡалмайым. Хәҙер Хәлилдең һалдатҡа алынмауын ғына теләргә ҡалды. Хәйер, китһә ҡайтыр әле. Уныҡы булып ҡалһам, биш йыл көтөргә лә риза. Нисек был саҡлы уңай ғына булып сыҡты. Хәлилде яратып йөрөгәндәрҙер шул. Улар ҙа Исмәғилгә бирәбеҙ тип йәнемде алырҙар, тип ҡотом осоп тора ине; рәхмәт төшкөрҙәре, үҙҙәре үк юлды асып бирҙеләр.

Бәҙиға ҡарсыҡ инә.

Етенсе күренеш

Ғәлиәбаныу, Бәҙиға.

Ғәлиәбаныу *(ҡаршы йүгереп барып).* Әбей, миңә яусыға килдеңме әллә?

Бәҙиға. Әйе, әйе, ҡыҙым, һинең башыңды ашарға килдем.

Фәлиәбаныу. Хәлилдән килгән булһаң, ашай бир.

Бәҙиға. Хәлилдән, Хәлилдән. *(Ултырып.)* Һине башҡаға әрәм итәмме һуң?

Фәлиәбаныу *(Бәҙиғаның аръҡаһынан ҡағып).* Рәхмәт, әбей. Тағы йөҙ йыл тор!

Бәҙиға. Үһ-ү, һин бигерәк күбәйттең. Бер унауына барып булһа ла ярар ине әле.

Фәлиәбаныу. Әсәйем өйҙә, хәҙер ебәрәм.

Бәҙиға. Әсәйеңдәр нисек, күнергә яйҙары бармы?

Фәлиәбаныу. Күнә, күнә.

Бәҙиға. Ай етеҙ! Ул яҡты ла нығытып өлгөргән.

Фәлиәбаныу. Шулай итмәй ни уны. *(Сыға башлай ҙа кире килеп.)* Әй, әбей, Хәлил миңә бер нәмә лә әйтмәнеме?

Бәҙиға. Әйтмәгән ҡайҙа, тау саҡлы иттереп сәләм әйтте. Унан һуң, һыу буйына уйынға сыҡмай ҡалмаһын, тине.

Фәлиәбаныу. Ярай тип әйтте тиерһең, йәме? Мин әсәйемде ебәрәйем. Атайым киткәнсе, һөйләшеп ҡалығыҙ. *(Сыға.)*

Һигеҙенсе күренеш

Бәҙиға яңғыҙ.

Бәҙиға. Бына ҡыҙ тиһәң дә ҡыҙ, сәсрәп тора. Уңған, етеҙ. Ул тоҫ тиһәң, иҫ китәрлек. Хәлил менән икеһе пар алма кеүек пар килтереп яратылғандар инде. Хәлил дә йоҡламаған: бөтә тирә-йүн егеттәре күҙ тотоп торған ҡыҙҙың күңелен бәйләп өлгөргән. Донъяны һелкетеп торған Исмәғил һөйләнеп ҡалды. Ә Хәлил һуғып алды. Шулай итәләр уны... Сәскә кеүек ҡыҙ ине, ярай әле, егетенә тура килде...

Фәлимә инә.

Туғыҙынсы күренеш

Бәҙиға, Фәлимә.

Фәлимә. Ҡунаҡ бар икән, абайламай ҙа ҡалдым. Һау йөрөйһөңмө?

Бәҙиға. Аллаға шөкөр, үҙең иҫән генә тораһыңмы? Әле ниҙәр емереп йөрөйһөң?

Ғәлимә. Әле үҙен ҡалаға оҙатырға йөрөй инек тә...

Бәҙиға. Ә, улайһа минең йомошомдо ул киткәнсе йомошлап ҡалырға кәрәк ине. Мин һеҙгә ҙур ғына бер йомош менән килгәйнем. Китеп барманымы әле үҙе?

Ғәлимә. Юҡ, яңы ғына кейенеп сыҡты әле.

Бәҙиға. Улайһа, Ғәлимәбаныу, күп һуҙып торорға ваҡыт юҡ, Бөҙри киткәнсә бер яуап белеп ҡалырға кәрәк. Мин һеҙҙең ҡыҙығыҙ Ғәлиәбаныуға яусы булып килгәйнем. Үҙегеҙ ҙә белгәнһегеҙҙер...

Шул ваҡыт Бәҙризең арба менән сығып барған тауышы ишетелә.

Бәҙиға. Китеп барҙымы әллә?

Ғәлимә *(һикереп тороп, тәҙрәгә йүгерә; ҡысҡырып)*. Һин! Һин! Ҡара әле. Туҡта әле! Атаһы!

Тышта Бәҙризең «тыр-р» тигән тауышы ишетелә.

Ғәлимә. Тиҙ генә өйгә инеп сыҡ әле. Бәҙиға абыстай килгәйне. *(Тәҙрәнән башын ала.)*

Бәҙиға. Инәме?

Ғәлимә. Инә. *(Килеп ултырып.)* Бойҙай алып бара ине лә, киске баҙарға өлгөрәйем тип, бик ашығып тора.

Бәҙиға. Тиҙ генә яуап бирегеҙ улайһа.

Билдәрен быуып кейенгән Бәҙри инә.

Унынсы күренеш

Бәҙиға, Ғәлимә, Бәҙри.

Бәҙри *(асыҡ йөҙ менән)*. Ә, иҫәнме, Бәҙиға абыстай, һау ғына йөрөйһөңмө? *(Ишек төбөндә генә ултыра.)*

Бәҙиға. Аллаға шөкөр. Бер көйө генә ҡыштырлап йөрөйөм шунда. Үҙең гөрләтеп кенә йөрөйһөңмө?

Бәҙри. Бик әлхәмделилла әле. Бына ҡалаға китеп барам.

Бәҙиға. Шулай икән шул. Һинең юлыңды бүлдерҙем. Мин һеҙгә бер хәйерле эш менән килгәйнем. Бына Ғәлимәбаныуға әйтәм әле. Шуға бер яуап әйтеп китһәң, ҡалғаны тураһында аҙаҡтан һөйләшер инек...

Ғәлимә. Ғәлиәбаныуға яусы булып килгән Бәҙиға абыстай...

Бәҙиға. Ашығыс булғас, онотмаҫ борон шуны ла әйтәйем әле, йәштәрҙең бер-береһенә вәғәҙәләре лә бар икән. Инде эш һеҙҙән генә ҡалып тора. Ғәлиәбаныу етеҙ ҡыҙ ул, үҙе лә, бәлки, әйткәндер әле тием. *(Көлөп.)* Был саҡта ҡыҙҙар ҡыйыу булалар бит.

Бәзри *(кыуанып)*. Ай, Бәҙиға абыстай, һин дә ҡорога ғына йөрөмәйһең. Ишеткәс үк, беҙҙе ҡыҙыбыҙҙан айырырға йөрөмәйме икән, тип эсем жыу итеп киткәйне. Уйға килгән алға килә ти шул. *(Көлә.)*

Фәлимә. Ҡыҙлы өйгә Бәҙиға абыстай килеп инһә, тиктәҫкә булмай инде ул.

Бәҙиға. Әлхәмделилла, яусы булып бирҙергән ҡыҙҙарым барыһы ла ал да гөл булып ғүмер итәләр. Бәҙиға ҡарсыҡ башымды ашаны, тигәнде бер ҙә ишеткәнем юҡ. Бер-береһенә тиң булмағандарҙы яусылап та йөрөмәйем мин. Ана, түбән ауылдың Сәйфи мәзин Аҡкерпек Вәли ҡыҙына яусы бул, тип нә тиклем тилмерҙе. Кит, кит, тилереп йөрөмә, алма кеүек ҡыҙҙы бер ҡарасҡыға димләр хәлем юҡ, тип ҡул ғына һелтәнем. Ғына Фәлиәбаныуҙы ла тәүәккәлләһәгеҙ, бынан да артыҡ уға тиң булған урын булмаҫ инде. Хан ҡыҙын димләһәң дә сят килтермәҫлек егет.

Фәлимә. Эйе, егеткә һүҙ әйтерлек түгел.

Бәҙри. Әле нисә әйтһәң дә бер һүҙ, китергә ашығам, һуҙып та, наҙланып та торорға ваҡытым тар, Фәлиәбаныуҙың күңелен дә белгән инек. Беҙ ҡыҙыбыҙҙың теләгенә ҡаршы килмәйбеҙ. Үҙҙәре табышҡан, үҙҙәре вәғәҙә ҡуйышҡан. Шулай булғас, хоҙай бәхеттәрен бирһен тиеүҙән башҡа һүҙебеҙ юҡ.

Фәлимә *(күҙҙәрен һөртөп)*. Хоҙай хәйерле итһен инде!

Бәҙиға. Эйе, ҡыҙ баланы еткәс тапшырған яҡшы инде. Әле Фәлиәбаныу бик бәхетле ҡыҙ икән, бына тигән егеткә бара. Икеһе лә бәхетле балалар икән. Кейәүегеҙ ҙә һәр кемдең ышанысын ҡаҙанған. Бик һәйбәт егет, ауылда бер тип әйтерлек.

Бәзри менән Фәлимә ултырып сыҙай алмайҙар.

Инде, улайһа, юлыңдан туҡтатмайым, Бәҙри, бар, юлдарың уң булһын. Бар, мин дә ҡайтып егетте ҡыуандырайым. Юлдан күҙен алмай көтә торғандыр.

Бәҙри *(торон)*. Шулай, аллаға тапшырабыҙ инде. Вәғәҙә. Мин иртәгә үк ҡайтырға тырышырмын. Башҡа тураһында шунда һөйләшербеҙ.

Бәҙиға *(торон)*. Рәхмәт инде, һүҙемде кире ҡаҡмаһығыҙ.

Фәлимә. Ай, ҡуҙғалма әле, сәй эсмәй китергә ни.

Бәҙри. Эйе, эйе, сәй эсермәй ебәрмә.

Бәҙиға. Юҡ, юҡ, рәхмәт, ултырмайым. Ҡыуаныс хәбәрем бар, тиҙ генә бирәүҙе шатландыраһым бар, икенсе юлы эсәрмен әле. Тиҙ ҡайт, тип тилмереп ҡалды.

Ғәлимә. Ҡуй, улай килешәме ни...

Бәҙиға. Әйтмә лә, хәҙер ултыра алмайым, рәхмәт.

Ғәлимә. Улай бик күңелһеҙ була бит.

Бәҙиға. Ултырған да, эскән дә саҡ булыр әле. Инде үҙ кеше булдыҡ. Хушығыҙ!

Бәҙри. Икенсе килеүеңдә, улайһа, һый әҙерләп ҡаршы алырбыҙ.

Сығалар.

Ун беренсе күренеш

Ғәлиәбаныу яңғыҙ.

Ғәлиәбаныу *(йүгереп кереп)*. Бирҙеләр, «башымды ашанылар», рәхмәт төшкөрҙәре! Бына хәҙер мин Хәлилдеке... Ултырҙыңмы, Исмәғил!.. Шулай була ул! *(Тәҙрәгә барып.)* Ана, атайым да китте. Хәйерле юл, атай, рәхмәт төшкөрө! Иҫән йөрөп, һау ҡайт, атай йәнем! Көҙерлем! Аҡыллым!.. *(Йүгереп сыҡмаҡсы була ла, туҡталып.)* Мин кейәүгә йәрәшелгән ҡыҙ, әсәйем янына сығырға ла оялам инде. *(Йүгереп сыҡҡанда, ишектә әсәһе менән бәрелешә.)*

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Һыу буйында талдар янында бер күренеш. Сәхнәнең бер яғына — ҡыҙҙар, бер яғына егеттәр ултырғандар. Шаршау күтәрелгәндә ҡара-ҡаршы йырлашыу бара.

Беренсе күренеш

Егеттәр, ҡыҙҙар*.

Ҡыҙҙар. Мейес тултырып утын яҡтым,
Сатнай-сатнай тик янһын.
Уңмағанға беҙ бармайбыҙ,
Мыйығын һыпырып тик ятһын.

---

* Был йырҙарҙы «Лимонад» көйөнә йырлау матур сыға. Икешәр кеше йырлай ҙа, ҡалғандары: «Эйе шул, шулай шул»,— тип ҡушылалар. Мәҫәлән: «Йәр һеймәгән йәш ҡыҙҙарҙы һөйҙөрә торған хәлдәр бар». Башҡалар, ҡул сабып: «Эйе шул, шулай шул, һөйҙөрә торған хәлдәр бар»,— ти. *(Автор иҫкәрмәһе.)*

Егеттәр. Һыу буйында талдар бар,
Япрағында балдар бар.
Йәр һөймәгән йәш ҡыҙҙарҙы
Һөйҙөрә торған хәлдәр бар.
Ҡыҙҙар. Урамығыҙ төҙ түгел,
Төҙәлеуе тиҙ түгел.
Егет үҙе ялынмаһа,
Ялыныусы беҙ түгел.
Егеттәр. Һеҙ ҙә ата балаһы,
Беҙ ҙә ата балаһы.
Һөймәгәнгә һөйкәлмәйбеҙ,
Һөйһәң йәрҙәр табылаһы.

Ҡыҙҙар яуап таба алмай, туҡталып ҡалалар. Егеттәр көлә.

Хәмзә *(үртәп)*. Кәмә ҡомға терәлде, һуп!.. һуп!.. Ну, ҡалдығыҙ.

Егеттәр көләләр.

Хәлил. Ну, ярай! Бынығы менән алдырҙыҡ шул. Йәгеҙ әле, бер бейеп алайыҡ. *(Уртаға сығып бер гармунды кулына тотоп, икенсе гармундың өҫтөнә ултыра.)*

Фәли. Әйт шуны йышыраҡ! *(Урынынан тороп, Сибәләтте һөйрәп сығара.)* Әйҙә, туҙандарыңды ҡағып ал.

Биктимер. Ҡаршыға Сәғиҙәне.

Фәли *(жулын һелтәп)*. Өндәшмә, Фәли үҙе белә ул.

Хәлил бейеү көйө уйнай башлай. Сибәләт бейеп китә. Фәли ғәяҡ үрә баҫып ҡул сабып тора. Биктимер төрлө таҡмаҡтар әйтеп ебәрә. Сибәләт ҡыҙҙар өҫтөнә осоп ҡунып, Рәбиғаның яулығын тартып алып, яулыҡ һелкеп бейей.

Фәли *(Гөлмиҙе һөйрәп торғоҙоп)*. Йә әле, һин дә күҙен һанап ҡара.

Сибәләт туҡтай. Гөлми бейей башлай. Егеттәр артығыраҡ хәрәкәт яһайҙар. Биктимер мәҡтау йырҙары йырлай. Ҡыҙ туҡтағас, егет, егет туҡтағас, ҡыҙ бейеп, һуңынан ҡара-ҡаршы бейеп китәләр. Биктимер ҡыҙға, егетҡә тура килтереп, ошо таҡмаҡтарҙы әйтә.

Биктимер. 1. Һип, һип һуғанға,
Теймә беҙҙең туғанға.
Беҙҙең туған матур булған,
Зифа буйлы булғанға.
2. Баҫ, баҫ күҙенә,
Күҙ теймәһен үҙеңә;
Йәшел үлән үҫеп тора
Аяҡ баҫҡан эҙеңә.
3. Ҡазандан килгән егет,
Ойоҡ-сабата кейеп;

Бында килеп, итек кейеп,
Нишләп йөрөйһөң бейеп.
Һайт! Һип!

4. Ай-ли, был Гөлми,
Матур баҫа түгелме;
Тып-тып баҫып бейегәндә
Өҙәләр бит күңелде.

5. Баҫ, ҡыҙым, Әпипәм,
Һин баҫмаһаң, мин баҫам,
Шундай йәмле һыу аҡҡанда,
Баҫып ҡалайыҡ исмаһам.

6. Бейек тауҙың башынан
Күренәлер бер ауыл;
Йыйын йәштәр бергә килгәс,
Бына шулай була ул.

7. Иҫке шырпы ҡабы,
Яңы шырпы ҡабы;
Быйыл алған итегең
Туҙа инде тағы.

8. Ҡыҙҙар ергә баҫмайҙар,
Йөрәгемә баҫалар;
Баҫып ерҙе һелкетә,
Йөрәгемде елкетә.

9. Мәсет манаралары,
Манара аралары;
Әйттерәләр, типтерәләр,
Замана балалары.

10. Тыпыр, тыпыр, тыпыр килеп,
Бейеп йөрөйһөң икән;
Мин кейәүгә китәмен тип,
Көйөп йөрөйһөң икән.

11. Бейек тауҙың башынан
Күренә пәрей шәһәре;
Быйыл ҡыҙҙарҙың мәһәре
Бер боҙаука бәрәңге.
Һәйли, һәллә-лә!

12. Баҫ, баҫ күҙенә,
Күҙ теймәһен үҙеңә;
Емер тимер ҡоймаһын,
Юл өҫтөнә ҡормаһын;
Ҡаҡ, һуҡ ҡоймаһын,
Бәҙри аҫаң тоймаһын.
Тоймағайы, сәнселһен,
Юлына күмер сәселһен*.

Бейеүселәр туҡтап урындарына ултыралар. Хәлил гармунын ҡуя.

* 9—10—11—12-се номерҙар «Кейәү менән килен» бейеүенә хас.

Ш ә м и. Күҙенә генә баҫалар бит.

Х ә м з ә. Күҙен һананыңмы, Сибәғәт?

С и б ә ғ ә т. Һананым. Ике күҙе бар Гөлмиҙең.

Көләләр.

Нисә һанаһам да арттыра алманым.

F ә л и. Был Исмәғил ҡайҙа бөгөн, бер ҙә күренмәй?

Р ә х м ә т. Уның сыйырсығы осҡан бит.

Шаулап көләләр

Х ә л и л. Ай-яй, уҫал һин, Рәхмәт!

Р ә х м ә т. Кешенең сыйырсығын осорған һин уҫал әле.

С ә ғ и ҙ ә. Сыйырсыҡты ҡоҙғондан ҡотҡарған ҡарсыға ул.

Сыр килеп ҡысҡырышалар.

Х ә л и л. Бына рәхмәт Сәғиҙәгә.

С ә ғ и ҙ ә. Һеҙ Хәлилде ҡарсығаға тиңләп ҙурланығыҙ. Ғәлиәбаныуҙы сыйырсыҡҡа тиңләп хурланығыҙ.

Г ө л м и. Һин нисек атар инең?

F ә л и. Уны бер көн Рәхмәт һандуғас тип атаны.

К ү б е һ е б е р г ә. Шулай! Дөрөҫ, бына былай ярай!

С и б ә ғ ә т. Әйҙәгеҙ әле, килен хөрмәтенә үҙ көйө менән бер әйттереп ебәрегеҙ! Йәгеҙ! Бар ҡыҙҙарҙың зирәктәре, тибрәнһен бер йөрәктәре. Йә, Хәлил!

Х ә м з ә. Әйҙә йырлайбыҙ. *(Хәлилгә.)* Йә, Хәлил, әйт аҙаныңды. Ғәлиәбаныуға һандуғас тип исем ҡушабыҙ.

Р ә х м ә т. Бынан һуң беҙ уға «һылыуым иркәм» тип бик иркенләп әйтә алмабыҙ инде.

Көләләр. Хәлил «Ғәлиәбаныу» көйөн уйнай. Хәмзә менән Рәхмәт парлап йырлайҙар. Шәми ҡайһы бер ерҙәрҙә һыҙғырып ҡушылғылап ала.

Һыу буйына гөлдәр үҫкән,
Ҡыҙҙар йөрөгән ерҙер был;
Һөйөп алыу, һөйөп барыу,
Ғәлиәбаныу, һандуғасым,
Илдә булған эштер был.
Алмағастың алына,
Былбыл ҡунған талына;
Егет алһын, ҡыҙы барһын,
Йәне һөйгән йәренә.

Туҡтайҙар.

Ғәли. Вәт, әйтһәң әйт шулай. Әйттергәс, шулай әйтерәләр уны!

Ғәлиәбаныу. Тау саҡлы рәхмәт!

Хәлил. Минән сәпсек саҡлы рәхмәт!

Гөлми. Осоп китер бит ул.

Шаулап көләләр.

Биктимер. Эй, ярылтыҡ!

Рәхмәт. Ризамын әйтеүеңә.

Хәмзә. Рәхмәттең тау саҡлы булыуынан, бәләкәс кенә булһа ла, ҡанатлы булыуы яҡшы икән.

Ғәлиәбаныу. Улайһа, минән дә шул ҡанатлы рәхмәт булһын!

Хәмзә. Яҡшы һүҙең өсөн — бәхетең ҡанатлы булһын.

Ғәлиәбаныу. Ауыҙыңдан ел алһын! Мин бәхетемдең ҡанатлы булыуын теләмәйем.

Шаулап көләләр.

Сибәғәт. Килештерҙең, Хәмзә.

Хәйерниса. Бының теләге яҡшы икән.

Шәмси. Теләк ул — теләй белһәң теләк, теләй белмәһәң имгәк.

Хәлил. Һин улай теләмә инде, иптәш.

Рәхмәт. Юҡ, ҡанатлы булһа булһын, тик, Ғәлиәбаныу, һин уның, килеп ҡунғас та, ҡанаттарын йолҡоп ташла.

Көләләр.

Гөлми. Юҡҡа ҡайғырмағыҙ. Хәлилдең ҡанаты юҡ әле.

Биктимер. Көҙгә һалдатҡа алып ҡуйһалар, ҡанатһыҙ уҡ осор.

Шаулап көләләр.

Ғәлиәбаныу. Мин улай ҡанатһыҙ осҡандан ҡурҡмайым. Ҡанатланып осмаһа ярай...

Шул ваҡыт Ғәли ҡыҙҙар өҫтөнә төлмәрйен ташлай. Ҡыҙҙар: «һай», — тип һикереп торалар, башҡалар көләләр. Шау-шыу.

Хәйерниса. Хәйерһеҙ, әллә нимә ташланы.

Сәғиҙә *(кыҫҡырып)*. Абау, төлмәрйен!

Буталышҡан арала Хәмзә Рәбиғаның шәлен тартып ала.

Рәбиға. Шаярма, малай!

Рәхмәт. Ҡара-ҡара, бының да теле бар икән.

Рәбиға. Бая береһе яулығымды тартып алған ине, инде шәлемде таланылар.

Көләләр. Хәмзә шәлде бөркәнеп, ҡыҙҙар янына барып ултыра. Ҡыҙҙар Хәмзәне төрткөләйҙәр.

Хәмзә. Ниңә тейәһегеҙ, мин ҡыҙ булдым бит инде!

Сәғиҙә. Кит бынан, бүре тиреһе ябыныу менән генә һарыҡ бүре булмай ул.

Фәлиәбаныу. Һы, былар үҙҙәрен бүрегә ҡуялар икән.

Шәми. Беҙҙе һарыҡ иттеләр.

Гөлми. Итерһең һеҙҙе һарыҡ.

Хәйерниса. Һеҙ төлкө.

Сибәғәт. Әйтмә, беҙ төлкө, улар бүре булһалар ҙа, хәйлә менән ҡулға төшөрөрбөҙ әле.

Хәмзә *(һикереп тороп, шәл бөркәнгән көйө ҡыҙҙар тауышы менән таҡмаҡ әйтеп, бейеп китә).*

Тиратай, тиратай,
Бер кейәүгә бир, атай!
Тиратай, тиратай,
Бер кейәүгә бир, атай!

(Шәлде алып ташлап, үҙ тауышы менән.)

Бер кейәүгә бирмәһәң,
Кәләш алып бир, атай!
Бер кейәүгә бирмәһәң,
Кәләш алып бир, атай!

Көләләр.

Рәбиға *(шәлен алып).* Әй, Сибәғәт, минең яулыҡты бир әле!

Сибәғәт. Йө инде, миңә бүләгең булыр.

Рәбиға. Аша!

Сибәғәт. Биктимер көнләшер тип ҡурҡаһыңмы әллә! *(Яулыҡты ташлай.)*

Хәлил *(гармунын ҡыҫҡырта башлай).* Әйҙә, ҡыҙҙарҙы йырлатабыҙ.

Рәхмәт. Фәлиәбаныу менән Гөлмиҙе.

Сәғиҙә. Рәхмәт менән Сибәғәтте.

Сибәғәт йырлай. Хәлил «Йәмилә» көйөн уйнай башлай. Бер ҡабат уйнағандан һуң, Фәлиәбаныу менән Сәғиҙә ҡушыла.

Сибәғәт. Ҡарлуғас ҡара, муйыны ала,
Осоп киткәс, юғала;
Ҡыҙ бала тигән ғәзиз бала
Үсеп еткәс юғала.
Ай-ли, Йәмилә,
Йәй көндәре йәмле лә.
Китә ҡыҙҙар йәше еткәс,
Алмалай матур бешкәс;
Ир балалар ҡайта киткәс,
Ҡыҙҙар ҡайтмай бер киткәс.
Ай-ли, Йәмилә,
Йәй көндәре йәмле лә.
Сибәғәт. Ана шулай!..
Еҫкәп еҫен йәмле гөлдәрҙең,
Тибрәтәйек бер күңел ҡылдарын!

Йыр дауам итә.

Күк арғымаҡ киң күкрәк,
Еккән һыңар тәртәгә;
Егеттәргә һәм ҡыҙҙарға
Илдә булһын мәртәбә.

Йырҙың ҡушымтаһына Хәмзә лә ҡушыла һәм аҙаҡҡа ҡәҙәр йырлай.

Егет елкенмәй ҡалмаҫ,
Ҡыҙҙар уға алданмаҫ;
Егет менән ҡыҙҙар барҙа,
Уйын-көлкөһөҙ булмаҫ.
Ай-ли, Йәмилә,
Ошолай ултырыу йәмле лә.

Туҡтайҙар.

Сибәғәт. Өҙәләр үҙәкте.
Рәхмәт. Теләләр бәғерҙе.
Биктимер. Турайҙар бауырҙы.

Шаулап көләләр.

Хәлил. Әйҙәгеҙ, ҡуҙғалмайбыҙмы?

Фәлиәбаныу һикереп тора.

Фәли. Фәлиәбаныуҙы һикерттең, Хәлил.

Көләләр.

Рәхмәт. Быға тиклем сыҙағандарына ла рәхмәт әле.

Биктимер. Раҫ. Тамам интеккәндәр икән; бересе әйтте, икенсеһе һикереп торҙо.

Сибәғәт. Шулай була торған ине ул.

Хәлил. Башығыҙ йәш әле, белерһегеҙ.

Барыһы ла тораҙар, егеттәр төркөмө алға сыға.

Фәли. Туйҙы ҡасан яһайбыҙ, Хәлил?

Хәлил. Көнө еткәс.

Сибәғәт *(Хәлилдең арҡаһына һуғып).* Молодец, иптәш. Сирттең бит аҫыл ҡошто.

Фәли. Һандуғасты тип әйт. *(Көлә.)*

Хәмзә *(лә килеп).* Башҡаһын белмәйем, Исмәғилдең танауына сирттең дә һуң.

Хәлил. Ҡыуаныс ҙур инде. Тик Исмәғил ҡаныҡыр.

Сибәғәт. Сөйәбеҙ беҙ уны. Быға тиклем ҡоторғаны ла етер.

Хәмзә. Ну, малай, ҡайҙа баҫҡанын белмәҫ үҙе лә.

Фәли. Ҡара уны, Хәлил, туйҙа һыйҙы мул яһа!

Хәлил. Унан эш ҡалмай.

Егеттәр алға табан атлайҙар. Ҡыҙҙар бирерәк килә.

Хәйерниса. Ана, көтөү ҙә ҡайта.

Рәбиға. Ай, әйҙәгеҙ, тиҙерәк ҡайтайыҡ.

Һыйырҙар мөңрәгән, быҙауҙар ҡыҫҡырған, кәзәләр баҡырған, «Ҡайҙа бараһың, ебәрмә, Фәләүи» кеүек тауыштар ишетелә башлай. Сыбыртҡы шартлаған тауыштар ишетелә.

Фәлиәбаныу. Әйҙәгеҙ, әйҙә!

Сәғиҙә. Ҡара, Хәлилдән ҡалырға түгел.

Көләләр.

Фәлиәбаныу. Юҡ, хәҙер ҡайтып һыуға төшәһем бар.

Биктимер. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, ҡалмағыҙ, бапаҡ тейер.

Хәлил «Нужа» көйөн уйнай. Хәмзә йырлай. Һыҙғырыу, ҡул сабыу, торло ҡыланыштар. Дау күсереп ҡуҙғалып китәләр. Хәмзә йырҙың беренсе бүлеген яңғыҙ йырлай. Һуңғы бүлектә ҡыҙҙар һәм егеттәр тауышы ҡушыла.

Улай ҙа беҙгә нужалай,
Былай ҙа беҙгә нужа;
(Ҡушылып.)
Әй-й-й-й!
Уйнамай ҙа, йырламай ҙа,

Йәш ғүмер нисек уҙа.
Өй түрендә гөлдәр үҫкән,
Һабаҡтарын кем киҫкән?
Бер ҙә уйнамай, бер ҙә көлмәй,
Был донъяла кем үҫкән?
Ҡытайский әфлисунды
Килә тиҙәр йәшниктә;
Ҡартайғас та үкенербеҙ,
Йөрәп ҡалайыҡ йәшлектә.

Тауыш юғала. Көтөү ҡайтҡан ваҡыттағы тауыштар. Ҡулына сыбыҡ тотҡан бер ҡатын инә.

Икенсе күренеш

Ҡатын яңғыҙ.

Ҡатын *(йәһәт кенә килеп инеп).* Ләғнәт һуҡҡыры, өйгә туры ҡайтмай теңкәмә тейә бит. Ҡайҙа ғына китеп ҡалды инде тағы? *(Ҡулын ҡашына куйып ҡарана).* Был тирәлә лә күренмәй. Ҡайһы йәһәннәмгә китеп барҙы шул арала. Һәр көн шуның артынан йөрөй-йөрөй эт булып бөтәм... Көтөүсеһе лә, сәнселгере, малдарын бер йүнләп ҡарамай. Малдары ҡайһы унда, ҡайһы бында тарала ла бөтә... *(Ситкә ҡарап ҡысҡырып.)* Сусҡа малай, малдарыңды йүнләп ҡарамайһың да, кешегә ни ҡәҙәр мәшәҡәт яһайһың. Беҙҙең Селтәрбаш ҡайҙа? Әллә тағы ҡырҙа уҡ ҡалдырҙыңмы?

Көтөүсе малай инә.

Өсөнсө күренеш

Ҡатын, көтөүсе.

Көтөүсе *(вайымһыҙ ғына).* Һеҙҙең аҙғын һыйырҙарығыҙҙы мин ни эшләтәйем уны? Әле лә уларҙың артынан әҙ сапмайым мин.

Ҡатын. Һине шуның өсөн дә яллағандар бит. Ҡайҙа минең һыйырым? Әйҙә, табып бир!

Көтөүсе. Үҙең дә әҙләрһең әле. Ҡаршы барып алыр инең.

Ҡатын *(ҡысҡырып, асыуланып).* Һин ләғнәтте ҡурайың менән туҡмайһы ғына бар. Ҡурай уйнап ултырып, малдарын таратып бөтөрә... *(Сығып китә.)*

Уның артынан малай китә.
Күп тә тормай, тал араһынан Исмәғил килеп сыға.

Дүртенсе күренеш

Исмәгил яңгыз.

Исмәгил *(уртала туҡтап).* Неужели был хәбәр ысын булыр? Ысын булһа бит, страм, валлаһи! Һинең күҙ тотоп йөрөгән, күҙ тотоп ҡына түгел, минеке тип ышанып торған ҡыҙыңды икенсе берәү ҡулыңдан тартып алһын, имеш. Алыусыһы кем тағы? Һинең ҡулыңа һыу һалырға ла ярамаҫлыҡ бер малай ғына бит... Юҡ, мин быға ышанмайым. Мин барында нисек уға бирергә ҡыйһындар. Мин нисә тапҡыр һүҙемде ишеттерҙем бит инде. Теләмәгән ваҡытта ла минән ҡурҡырға тейеш улар. Аңламайым... Моғайын, мине ҡотортоп әйткәндәрҙер. *(Үйлап тороп.)* Ғәлиәбаныуҙы алам тип йөрөүем бөтә тирә-яҡҡа таралды. Әгәр, ысынлап та, һелтәп ҡуйһалар бит, асыуыңдан шартларһың... *(Ғәйрәт менән.)* Юҡ, быға тиклем бөтә тирә-яҡты һелкетеп торҙом. Бынан һуң да минән ҡурҡырға тейештәр. Әллә ниндәй бер малай минең менән ярышмаҫҡа тейеш! *(Ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөп алып.)* Ниңә мин былай йоҡлап йөрөнөм? Ниңә күптән аталарына хәбәр бирмәнем? Мин шул үҙемдән башҡаға бирергә баҙмаҫтарына ышандым. Әгәр биргән булып сыҡһалар? *(Ҡулын һелтәп ебәреп.)* Хурлыҡ валлаһи! *(Арлы-бирле йөрөй.)* Юҡ, Ғәлиәбаныуҙың минән башҡаға барыуын уйларға ла ярамай. Был була торған эш түгел. Хәлилдең дә башы ике түгел, белә тороп минең араға инергә... *(Ситкә ҡарап.)* Ана, Ғәлиәбаныу үҙе килә... Ни эшләргә?.. *(Тиҙ генә тал араһына баҫа.)*

Көйәнтә-бизрә күтәргән Ғәлиәбаныу сәхнәнән үтә башлай.

Бишенсе күренеш

Исмәгил, Ғәлиәбаныу.

Исмәгил *(сығып).* Юлыңа гөлдәр үҫһен, Ғәлиәбаныу.

Ғәлиәбаныу *(боролоп, Исмәгилде күргәс, сырайып боҙоп).* Рәхмәт! *(Китмәксе була.)*

Исмәгил. Ниңә ул тиклем ашығыс?

Ғәлиәбаныу. Кеше ошаған һайын туҡтай башлаһаң, көнө буйы йөрөрһөң.

Исмәгил. Минең янымда аҙ ғына ла торғоң килмәйме ни?

Ғәлиәбаныу. Ашығам шул
Исмәғил. Биш кенә минутҡа!

Ғәлиәбаныу өндәшмәй китә башлай.

Исмәғил *(ынтылып, ҡаты һәм ҡурҡытырлыҡ итеп).* Ғәлиәбаныу!

Ғәлиәбаныу туҡтап, хурлау менән Исмәғилгә ҡарай.

Исмәғил. Һеҙҙең тирәлә ҡоҙғондар йөрөй, тиҙәр. Ысынмы әллә шул һуҙ?

Ғәлиәбаныу. Ысын ине лә, ҡотолдом инде.

Исмәғил *(ҡыуанып).* Теләмәнеңме?

Ғәлиәбаныу. Теләмәнем.

Исмәғил *(бик ҡыуанып).* Хәлилдеме?

Ғәлиәбаныу. Юҡ, Исмәғилде.

Исмәғил йәшен һуҡҡан кеүек була. Ғәлиәбаныу китә башлай.

Исмәғил *(тиҙ генә барып тотонop).* Ғәлиәбаныу!

Ғәлиәбаныу. Һин миңә тотона алмайһың! Мин Хәлилгә вәғәҙә бирҙем.

Исмәғил. Алданаһың!

Ғәлиәбаныу. Алданһам, мин һиңә үпкәләмәм...

Исмәғил. Юҡ, һин минеке булырға тейеш... Һин минеке бул!

Ғәлиәбаныу. Мәңге булмам.

Исмәғил. Ҡара, бының аҙағы яҡшы булмаҫ!

Ғәлиәбаныу. Мин берәүгә лә насарлыҡ эшләгәнем юҡ. Шунлыҡтан миңә берәү ҙә зыян итергә батырсылыҡ итә алмаҫ.

Исмәғил *(ялыныбыраҡ).* Ғәлиәбаныу, йәнем! Мине шул Хәлилдән кәм күрәһеңме ни? Үҙ бәхетеңде кәртәләмә. Минең кемлегемде беләһеңме? Минең исемем ишетелгәндә, бөтә тирә-яҡ халҡы тетрәп тора. Минең бөтә ауыл халҡын бармағымда уйнатырға ҡулымдан килә. Минең күңелемде йығып, башҡаға китеүҙең ахыры бик яҡшы булмауын уйлап ҡара.

Ғәлиәбаныу. Зинһар, Исмәғил ағай, мине йәберләмә, мин Хәлилде һөйәм. Һиңә һис кенә лә күңелем ятмай. Юҡҡа минең юлымды быума!

Исмәғил. Яҡшылыҡ менән күнмәһәң, ни эшләргә белермен.

Ғәлиәбаныу. Хоҙайҙан ҡурҡ аҙыраҡ.

Исмәғил. Асыу килгән ваҡытта хоҙай иҫтән сыға. Унан да аң бул.

Ғәлиәбаныу. Хатта минең һинең менән һөйләшкем дә килмәй. *(Китмәксе була.)*

Исмәғил *(бик асыу менән).* Мин һиңә китмәҫкә ҡушам.

Фәлиәбаныу. Миндә һинең эшең юҡ.

Исмәғил. Китә алмаҫһың!

Фәлиәбаныу. Артыҡ тора алмайым. *(Китә башлай.)*

Исмәғил тиҙ генә барып Фәлиәбаныуҙың башынан шәлен тартып ала. Көйәнтә-биҙрәләре шалтырап ергә төшә.

Зинһар... *(Боролоп килеп.)* Туҡтатма мине, бир шәлемде!

Исмәғил *(мыҫҡыл итеп).* Бар кит, ниңә китмәйһең?

Фәлиәбаныу *(көйәнтә-биҙрәләрен алып).* Исмәғил ағай, йөҙәтмә мине юҡҡа. Барыбер файҙа юҡ... Бир шәлемде.

Исмәғил. Хәлилгә барырға ашығаһыңмы?

Фәлиәбаныу. Зинһар туҡтатма.

Исмәғил *(каршыһында ялынып торған Фәлиәбаныуҙы мыҫҡыллап, шәл тотҡан ҡулын бөйөрөнә таянып, «Фәлиәбаныу» көйөнә йырлай).*

Йәйгә сыҡһаң, елләр өсөн
Йәй келәткә урыныңды.
Минән артыҡ йәр тапмаҫһың,
Бик күтәрмә мороноңдо.

Фәлиәбаныу *(тамам аптырап).* Телəһəң нисек итеп хурла, тик шәлемде бир!

Исмәғил. Көйөң был йыр менән тағы ла матурыраҡ була икән, ə?

Фәлиәбаныу. Зинһар рəнйетмə... Шəлемде бир!

Исмәғил *(ысҡырып көлə).* Бар, ана теге сүплек башындағы өйҙə һине килен итеп көтөп торалар ти.

Фəлиəбаныу. Миңə шул да ярай. Унда һинең эшең булмаһын.

Исмəғил. Йə, бар, ниңə китмəйһең? Түбəһеҙ өйгə шəлһеҙ килеп дə ярай...

Шул ваҡыт Хəлил йүгереп инеп, Исмəғил менəн Фəлиəбаныу араһына баҫа.

Алтынсы күренеш

Исмəғил, Фəлиəбаныу, Хəлил.

Хəлил *(Исмəғилдең ҡулынан шəлде йолҡоп алып).* Беҙ уны һинəн һорамабыҙ. Унда ни эшең бар, бəдбəхет, ҡара йылан! Һин беҙҙең араға инмəксе булаһыңмы ни?!

Ғәлиәбаныу *(Хәлилдең ҡосағына атылып).* Йәнем, бәгерем, ҡотҡар мине!

Хәлил. Тыныс бул, Ғәлиәбаныу, уның менән һөйләшә белермен. *(Исмәғилгә.)* Исмәғил! Бел шуны, башың ике булһа, ин беҙҙең араға! *(Ғәлиәбаныуҙы алып сығып китә.)*

Исмәғил *(бик асыу менән ҡарап ҡалып).* Әгәр ошо Хәлилдең ҡулынан Ғәлиәбаныуҙы тартып ала алмаһам, Исмәғил исеме миңә харам булһын! *(Ныҡ-ныҡ баҫып сығып китә.)*

Ситтә көтөүсе малайҙың ҡурайҙа бер моңло көйҙө уйнағаны ишетелә. Дүрт-биш минуттан Хәлил менән Ғәлиәбаныу инәләр. Ғәлиәбаныу һыу көйәнтәләгән.

Етенсе күренеш

Хәлил, Ғәлиәбаныу.

Хәлил *(моңайып ҡына йырлап килә).*

Аҡлы ситса күлдәгемде
Һаламын да кейәмен;
Йәрем яттар менән уртаҡ,
Янамын да көйәмен.

Ғәлиәбаныу *(һыуын ергә ҡуйып).* Йәнем, мин ул Исмәғил эште бутар тип ҡурҡам.

Хәлил *(йыуатып).* Бер ни ҙә эшләй алмаҫ. Һинең, минең ризалыҡтарыбыҙ өҫтөнә, атай-әсәйеңдең күнеүе менән булған эште ун Исмәғил дә боҙа алмаҫ. Бөтә ауыл беҙҙең яҡта. Яңғыҙ Исмәғил әллә ҡайҙа бара алмаҫ.

Ғәлиәбаныу *(бик борсоулы).* Белмәйем шул. Ул әллә ниндәй яла ябыуҙан да тартынмаҫ. Бигерәк яман күңелле кеше икән инде. Миңә эт кеүек йәбеште бит... Әллә ни, атайымдарҙы кире ҡайырмаһа ярар ине тип ҡурҡам.

Хәлил. Унан уға ни файҙа ла, беҙгә ни зыян? Аҙыраҡ беҙҙең эш мәшәҡәтлерәк сығыр, бары шул.

Ғәлиәбаныу. Беҙҙең атай бик аумаҡай кеше ул. Шунлыҡтан күңелем бик шикләнә башланы. Исмәғил, моғайын, атайымдарҙы кире күндерер ул.

Хәлил. Әйтәм бит, йәнем. Унан беҙгә ни зыян.

Ғәлиәбаныу. Ни зыян тиһеңме? Элек Ғилмитдиндәр Фатиманы биклəп ҡуйған кеүек, мине биклəп ҡуйырҙар. Унан Исмәғилгә никах уҡытырҙар ҙа тейəп ебәрерҙəр.

Хәлил. Һин атайыңдарҙы шулай эшләрҙәр тип үк уйлайһыңмы?

Фәлиәбаныу. Атай ҙа, әсәй ҙә Исмәғилгә һатылып ҡуймаһындар тип ҡурҡам.

Хәлил *(уйға ҡала, бер аҙҙан)*. Һуң ни эшләйек тиһең, Фәлиәбаныу?

Фәлиәбаныу. Зинһар бер юлын тап! Минең аҡылым етмәй...

Хәлил. Улайһа, бына нәмә, Фәлиәбаныу, беҙ хәҙер сабыр итеп торайыҡ. Атайың ҡаланан ҡайтһын. Әгәр Исмәғил ысынлап эште болғатып, атайыңдар кире уйлаһалар һәм ыҙалай торған булһалар, шул уҡ төндә Көмшәр ауылына ҡасырбыҙ ҙа никах уҡытырбыҙ.

Фәлиәбаныу. Улар бит мине бикләп ҡуйырҙар.

Хәлил. Һин уларҙың кире уйлағанын һиҙгәс тә, улар яҡлы бул, мин Хәлилде ташланым, тиерһең. Шунан һине бикләмәҫтәр. Ауыл тынғас, мин һинең тәҙрәңә барырмын да Көмшәргә ҡасырбыҙ.

Фәлиәбаныу. Ярай ҙа һин килһәң. Бер-бер сәбәп менән килә алмаһаң?.. Мин унан һуң харап булам бит.

Хәлил. Юлыма таш яуһа ла бармай ҡалмам, вәғәҙә бирешкән саҡтағы «һөйгәне өсөн ҡорбан булыуҙан йәш егет баш тартырмы» тигән һүҙҙе мин уйнап ҡына әйтмәнем. Тик үҙең теге хәйләне онотма!

Фәлиәбаныу. Ярай, мин күнәм. Һинеке булып ҡалыр өсөн тау тишеп сығырға ла ризамын. Ҡапыл ғына бәхетле булдым тип ҡыуанған инем. Ни тиклем ҡыйынлыҡтар, ни тиклем һүҙҙәр ишетәһем бар икән әле.

Хәлил. Бәлки, әле бер нәмә лә булмаҫ...

Фәлиәбаныу *(ситкә ҡарап)*. Тегендә ни саҡлы халыҡ өйөлөп тора. Моғайын, беҙҙең ғәйбәтте һаталарҙыр инде.

Хәлил. Кешенең ауыҙын тегеп буламы ни. Күңеленде ныҡ тот! Ни булыр тиһең?

Ситтән гармун тауышы ишетелә башлай.

Фәлиәбаныу. Улар кемдәр?.. Исмәғил түгелме?

Хәлил. Шулар.

Фәлиәбаныу *(борсоулы)*. Хоҙайым, мыҫкыл итеп йырларға тотонорҙар инде. Унда ни тиклем халыҡ йыйылған.

Хәлил. Йыйылһа тағы. Әйҙә, белгәненән ҡалмаһын.

Гармунға ҡушылып «Фәлиәбаныу» көйөнә йырлай башлайҙар.

Йәйҙең йәмле көндәрендә
Аҫыл ҡоштар ҡыҫҡыра:
Әллә ниндәй ебегән ауыҙ,
Егет һайын ҡостора.

Фәлиәбаныу. Йәнем, харап итәләр...

Хәлил асыуланып мығырлай.

Йыр.

Һары атым һаҙ буйында,
Еҙ ҡамыты муйынында;
Алмаһам да үкенмәйем,
Күп йоҡланым ҡуйынында...

Фәлиәбаныу *(ҡысҡырып)*. Ах, ялған! Ялған! *(Йығыла башлағанда, Хәлил тотоп ҡала.)*

Шаршау

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе картина

Ишек алды яҡ өйҙең түре сығҡан Бәҙризең баҡсаһы. Бер ситендә һике. Өҫтөндә яңы йыйып бөтөп килгән сәй урыны. Фәлимә батмус һөртә, Бәҙри һикенән аяғын һалындырып, ситтәрәк ултыра. Кис.

Беренсе күренеш

Бәҙри, Фәлимә.

Бәҙри. Иртәгә иртүк Бәҙиға абыстай килеп тә етер. Әле беҙ ул турала бер нәмә лә һөйләшмәнек. Туйлығына күпме, мәһәренә күпме һорайбыҙ?

Фәлимә. Уларын үҙе лә еренә еткереп эшләргә тырышыр инде. Исемен буярлыҡ итмәҫ. Кем бүләктәре тигәндә, Исмәғил бүләктәре тип ҡысҡырып тороролоҡ итер.

Бәҙри. Юҡ ул, ҡатын, улай тип кенә торорға ярамай. Дөрөҫ, биткә ҡыҙыллыҡ килтерерлек итмәҫ. Шулай ҙа булһа, урыны килгәндә *(Ҡулы менән көрәп күрһәтә.)*, сумырыбыраҡ ҡалырға кәрәк. Бер әләктерһәң, ошо туй араһында әләктереп ҡалаһың уны. Ҡыҙҙы бер алып китһә, беҙгә шул бай ҡоҙаһы булыуҙан артығы күп тәтеп бөтмәҫ.

Ғәлимә *(сынаяҡтарын ашъяулыҡ менән тәрәп ҡуйып).* Күпме һорарбыҙ һуң?

Бәҙри. Бына шуны билдәләп ҡуйырға ине.

Ғәлимә. Беҙ һорарбыҙ. Ә ул тағы ла күберәк бирергә уйлап торған булыр.

Бәҙри *(тороп йөрөй башлай).* Әй, ҡаҙалғыры! Уныһы бар икән тағы. Артыҡ һорап ташлаһаң, кейәүҙе асыуландырып, эште боҙоп ҡуйыу бар. Самалабыраҡ һораһаң, уның күберәк тә бирергә уйы булғанлығын белеп, эс яныуы бар... Шайтан тейгере, был байға ҡыҙ биреү ҙә еңел эш түгел икән.

Ғәлимә. Шуның өсөн үҙ иркенә генә ҡуяйыҡ тим.

Бәҙри *(башын тырнап, уйланып).* Үҙ иркенә генә ҡуяйыҡ тиһең дә, әгәр ул туйлығына, мәһәренә ни барыһы ике йөҙ һум ғына биреп ҡуйһа?

Ғәлимә. Ниңә, шул етмәйме ни? Туйға илле һум булһа, башҡаларҙың төшөнә лә инмәгән әле ул...

Бәҙри *(асыуланып).* Эй, сепрәк баш, сепрәк баш! Ташла исмаһам, шул яулығыңды! Бер кеше төҫлө уйлай алмаҫһыңмы икән. Һуң Исмәғил кеүек бер байға ҡыҙ бир ҙә, имеш, ике йөҙ менән эш бөтөр... Был ҡатын тигән ҡәһәр һуҡҡан менән ни алыҫ барырһыңмы?! Сығарырға булһа, йомартлана: үҙенә йөн күлдәк тә кәрәк, балаһына камзул да кәрәк, ҡоҙағыйына фәләнсә кәрәк. Ә инергә булһа *(Елкәһен һикертеп.),* юҡ... Ҡайҙа әле үҙҙәре табыу сараһын күреү, кешегә юлды быуып йөҙәтәләр. *(Ҡулын һелтәп.)* Исмаһам, йөҙ илле һум туйлыҡ, илле һум мәһәр тип тә әйтә белмәй бит...

Ғәлимә *(асыуланыбыраҡ).* Йә, йә инде, күп ебәрелмә! Улай бик аҡыллы булғас, кәңәшләшмәҫ инең. Миңә тимәһә, өс йөҙ һум һора.

Бәҙри. Өс йөҙ?.. Бына мин, улайһа, мең тәңкә һорайым... Ишетәһеңме? Мең! Уны өс йөҙ менән ҡала торған булғас, Исмәғилгә бирмәйем дә. Ғәлиәбаныу кеүек ҡыҙыҡ барҙа, йөҙ кейәү табып була.

Ғәлимә. Илаһи, ал ғына, мин бер ҙә күпһенмәйем..

Бәҙри *(еңгән һымаҡ).* Улаймы? Аҡылға килдеңме? Мең һум тиҙәр уны. Аҡылға килтерер ул.

Ғәлимә. Улай ҙурҙан һорай белгәс, әҙерләй ҙә бел инде.

Бәҙри *(йомшап).* Тегенән сиртеүен генә сиртәйем, бына тигән итеп туй яһарбыҙ. Ике мискә бал әсетербеҙ...

Ғәлимә. Уныһы ҡалмаҫ инде.

Бәҙри. Һиңә тағы бер кәшимир шәл алырбыҙ. Бер настоящий американ галуш алырбыҙ. Шуны кейеп ҡоҙа-

ғыйҙар янында ерҙе емерттереп йөрөрһөң. «Ҡоҙағыйҙың үҙе былай, ҡыҙы ут сығарып баҫалыр», — тип таң ҡалһындар бер, ә, бисәкәй? *(Ғәлимәнең арҡаһына һуғып ҡуя.)* Инде Ғәлиәбаныуға, Ғәлиәбаныуға, теге, мырҙа ҡыҙҙары ғына кейә торған, бағанаға ултыртҡан ситек алырбыҙ. Шуны кейеп, тарһылдата баҫып, самауырҙы кейәүҙең алдына дыңҡ иттереп алып барып ултыртһа, күҙҙәре ут булыр малайҙың.

Ғ ә л и м ә. Ул тураларҙа инде сер бирмәбеҙ.

Б ә ҙ р и. Әйткәндәй, һорарға онотоп торам икән, Ғәлиәбаныу кисә уйынға сыҡтымы?

Ғ ә л и м ә. Сыҡмаған ҡайҙа, биҙәнде, яһанды ла, Гөлмиҙәргә барам, тигән булып сығып китеп, ҡояш байығас ҡына ҡайтты.

Б ә ҙ р и. Ярай, ярай, зыян юҡ. Була торған эш. Ул турала йәштәр алдатмайҙар. Нисек, былай һүҙ-маҙар ишетелмәнеме?

Ғ ә л и м ә. Ниндәй һүҙ?

Б ә ҙ р и. Туй араһында ни, төрлө хәбәрҙәр була торған ул.

Ғ ә л и м ә. Улай ишетелмәй. Сыға алғаным да юҡ. Ебемде, бер тормай ултырып, күптән түгел генә иләп бөтөрҙөм. Кисә көтөүҙә генә Миңлениса осрап: «Туй яһарға ятаһығыҙ икән, хәйерле булһын», — тип китте.

Б ә ҙ р и. Килеүсе-фәләң дә булманымы?

Ғ ә л и м ә. Юҡ... Һиңә әйтмәм дә тигән инем, бөгөн иртә менән Саҙрый ингән дә, әллә ниндәй хәбәрҙәр һөйләргә тотондо. Имеш, Ғәлиәбаныу элек башҡа берәү менән йөрөгән дә, уны ташлап, икенсегә барған була. Теге ташланған егетте бүлмәһенә алғылаған була. Хәҙер ул егет шуларҙы урамда йырлап йөрөй, имеш, ти. Белмәйем, ысындырмы?

Б ә ҙ р и. Ана, әйтәм бит, туй ваҡытында төрлө хәбәрҙәр була тип. Саҙрый үҙе ишеткәнме йырлап йөрөгәндәрен?

Ғ ә л и м ә. Әфләтундар мөйөшөндә күп кешеләр йыйылып, һөйләшеп торалар ине, ти.

Б ә ҙ р и. Әйҙә, һөйләй бирһендәр. Чорт с ним! Йөрөһә йөрөгәндер, кем йөрөмәй. Исмәғил кеүек егетте ҡулға төшөрөрлөк булғанда, элеккеһен ниңә ташламаҫҡа!.. Уйнамағыҙ һеҙ Ғәлиәбаныу менән! Ул алдата торған бала түгел, төҫөн, буйын, аҡылын, фиғелен, белемен, етеҙлеген, үткерлеген хоҙай «мә һиңә!» тип биргән дә ҡуйған инде. Шуның өсөн дә бит, берәүгә лә сыҡмаған көй уға сыҡты.

Фәлимә. Эт өрөр, бүре йөрөр, ти. Кеше һүзенә ҡарап бөтөп булмаҫ инде.

Бәҙри *(абайлап)*. Шундай ай яҡтыһында ниңә ут яндырып ултыраһың? Һүндер! Әле бит мең һум ҡулға инмәгән. Унан һуң көндөҙ ҙә яғып ултырырбыҙ.

Фәлимә *(һүндерә)*. Әле ай яңы ғына күтәрелде бит... Ҡара әле, һин туй тураһында һөйләшеп бөткәс тә, «Төрән үҙәк»кә барып, Нәғимәне алып ҡайтырһың. Туй үткәнсе Фәлиәбаныу янында торор. Ҡаланан ҡайтышлай ғына инеп ал тип әйтергә онотҡанмын уны. Иҫәр булғас ни...

Бәҙри. Сеү әле, сеү! *(Ағастар араһына үрелә-үрелә ҡаранып.)* Кем был килә? *(Тағы аҙыраҡ ҡарап.)* Исмәғил. Тиҙ, тиҙ, ҡатын!.. Китәйек, Фәлиәбаныуға килә...

Фәлимә *(һикереп төшәм тигәндә, яңылыш баҫып, ергә ҡаплана)*. Алла... *(Тора алмай ята.)*

Бәҙри. Эй, сәнселгере!.. Тиҙ тор инде, ни һыйыр кеүек йәйелеп ятаһың!.. *(Тартып торғоҙоп, һөйрәп китә башлай. Фәлимә аҡһай-аҡһай йүгерә.)*

Исмәғил тауышы. Бәҙри ағай, ҡайҙа ҡасаһың? *(Сәхнәгә килеп инә.)*

Бәҙри менән Фәлимә туҡтайҙар.

Икенсе күренеш

Бәҙри, Фәлимә, Исмәғил.

Бәҙри *(килеберәк)*. Ә... Һин икәнһең... Кемдер тип, уҫалдар-маҙармы тип тора...

Исмәғил. Уҫал булһаҡ та булырбыҙ шул.

Бәҙри *(hи-hи-hи, тип көлөп ялағайланып)*. Беҙ йәштәрҙең бындай уҫаллығын сит күрмәйбеҙ... Йәш саҡта шулай була инде ул.

Исмәғил. Ни хәл, Фәлимә еңгә, эштәр гөрләйме?

Бәҙри. Һи-hи-hи...

Фәлимә. Аллаға шөкөр, бик һәйбәт әле.

Исмәғил. Төн буйы баҡсала икәү генә нимә серләшеп ултыраһығыҙ.

Бәҙри. Ни серләшәйек. Барыһы ла шул инде... Эйе, үҙебеҙҙең бәхетебеҙҙе, күргәндәрҙе һөйләшеү. Тағы...

Исмәғил *(асыуын тыйырға тырышып, мыҫҡыл иткән һымаҡ)*. Һеҙ бик шат, Бәҙри ағай! Ҡыуанысығыҙ эсегеҙгә һыймағандай күренә.

Фәлимә. Хоҙайға шөкөр инде. Шундай ҙур эшкә нисек ҡыуанмаҫһың.

Бәҙри. Һи-һи-һи... Ҡыуанысыбыҙ әсебеҙгә генә түгел, донъяға ла һыя алмай.

Исмәғил. Мин дә шулай тип ишеткәйнем. Мөбәрәк булһын туйҙар!

Бәҙри. Шулай инде, шулай... *(Ғәлимә менән ишаралар яһашып.)* Беҙ һиңә ҡамасаулаһаҡ, китәйек...

Исмәғил. Мин тараҡан булдым, ахырыһы, һеҙгә.

Бәҙри. Юҡ, юҡ. Алла һаҡлаһын!..

Исмәғил *(саҡ-саҡ үҙен тыйып)*. Хәйер инде, һеҙҙең донъяға һыймаған ҙур ҡыуанысығыҙға тарлыҡ яһайымдыр шул.

Бәҙри. Улай тип әйтә күрмә. Беҙ үҙебеҙ һиңә тараҡан булмайыҡ тибеҙ.

Исмәғил *(сабырын юйып)*. Рияланма юҡҡа, Бәҙри ағай! Бөтәһе лә беленде инде.

Бәҙри менән Ғәлимә шикләнеп китәләр.

Бәҙри. Нисек, нисек? Нимә беленде? Ни булды?

Исмәғил *(асыу менән)*. Ни булғаны үҙегеҙгә билдәле, ниңә минән һорайһың уны! *(Ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөй башлай.)*

Ғәлимә. Эй хоҙайым, араға дошман индеме әллә?

Бәҙри. Беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ, ни хәл был, ә?

Исмәғил *(туҡтап, бик асыу менән)*. Һин тиле, һин аңра!

Бәҙри һүҙ әйтә алмай ҡалтырап ҡала.

Ғәлимә *(илай башлап)*. Эй хоҙайым, башы дөмөк-көрө! Дошман ингән икән араға...

Исмәғил. Ярай, ярай, дошман уҡ булайым. *(Бармаҡ һелкеп.)* Тик белеп ҡуйығыҙ, мине дошман яһау менән файҙа итә алмаҫһығыҙ...

Бәҙри. Исмәғил...

Исмәғил *(аяҡ тибеп ҡысҡыра)*. Молчать!

Бәҙри дер-дер килә.

Исмәғил *(ғәйрәт менән)*. Мине танымай йөрөйһөгөҙ икән әле. Бына танырһығыҙ, минең менән шаярғығыҙ килгән икән... Постой! Мине Исмәғил тиҙәр. Мин һеҙҙең ҡәҙерле кейәүегеҙ Хәлил кеүектәрҙең унауын бер бармаҡта бейетәм, беләһегеҙме?

Бәҙри } *(икеһе бергә)*. Хәлил кейәү? Ул ни тигән
Ғәлимә } һүҙ тағы?

Исмәғил. Улмы? Ғәлиәбаныуҙы Хәлилгә йәрәшкәнһегеҙ тигән һүҙ.

Фәлимә. Туҙға яҙмағанды кем әйтә?

Бәҙри. Бына тағы кәрәк булһа. Юҡ, юҡ!

Исмәғил *(асыуланып, ҡысҡырып)*. Тағы ниндәй күҙгә ҡарап алдау! Бына мин әйтәм.

Фәлимә. Дошман һүҙелер.

Бәҙри. Һине алдағандар. Хәлил тигәнде уйға ла индергәнебеҙ юҡ.

Исмәғил. Ә ҡыҙығыҙ?

Бәҙри. Ҡыҙыбыҙ ҙа һин тип үлеп тора.

Исмәғил *(ҡысҡырып)*. Алдама!

Фәлимә. Һуң, вәғәҙә билгеһе итеп үҙеңә сиккән яулыҡ та бирҙе лә баһа.

Исмәғил. Сиккән яулыҡ?.. Улайһа ул яулыҡ Хәлилдә.

Бәҙри | *(икеһе бергә)*. Ә! *(Бер-береһенә*
Фәлимә | *ҡарашалар.)*

Исмәғил. Йә, тағы ла әйтә торғаныҡыҙ бармы?

Бәҙри. Эх Исмәғил... Улайһа беҙ яңылышҡанбыҙ... Беҙ һин тип белдек.

Фәлимә *(өтәләнеп йөрөй)*. Харап ҡына булдыҡ... Оятлы ғына булдыҡ...

Бәҙри. Был ни тигән эш?! Юҡ, юҡ, былай ярамай. *(Фәйрәт менән.)* Бар, ҡатын, алып сыҡ ҡыҙҙы бында! Мин ҡыҙымды ундай урам көсөктәренә тоттороп ебәрермен тип үҫтермәнем. Шундай егеттең ниәте барын белә тороп, мин ундайҙарға күнә алмам. Бар, тиҙ алып сыҡ! Мин уның менән һөйләшеп ҡарайым.

Фәлимә йүгереп сыға.

Өсөнсө күренеш

Бәҙри, Исмәғил.

Исмәғил. Ул яғын үҙең ҡара, Бәҙри ағай, мин китәм. Бәлки, әйләнеп килермен дә. Ғәлиәбаныу непременно миңә булырға тейешле. Һиңә йәшермәй әйтәм. Быға тиклем алам тип йөрөп, инде ситкә ебәреү — миңә үлем менән бер. Бында минең Исмәгиллегем иҙелә. Мин үҙемдең исемемде әллә ниндәй малайҙарҙан тапатмаҫ өсөн һәр төрлө юлға инергә лә әҙер. Ғәлиәбаныуҙы Хәлилгә биргәндәр, тип хәбәр сыҡҡанға бер генә тәүлек булһа ла, миңә төбәп байтаҡ ҡына һүҙ ишеттерҙеләр. Бына шулай ишеттереүселәргә һәм ишеттерәсәктәргә минең яуабым Ғәлиәбаныуҙы үҙемә алыу менән генә буласаҡ... Яҡыныраҡ кил, Бәҙри ағай!

Бәҙри яҡын килә.

Әгәр Ғәлиәбаныуҙы Хәлилдән айырып, иртәгә үк миңә никах уҡытып бирә алһаң, туйлыҡ мәһәрҙәрҙән башҡа үҙеңә мең һум. *(Туп-тура Бәҙриҙең күҙенә ҡарай.)*

Бәҙри *(һуңғы һүҙҙең дәһшәтенән аптырап, ни әйтергә белмәй ҡалып).* Э... е... е... ме-ме-мең тәңкә?!

Исмәғил. Эшләйһең бит, Бәҙри ағай, шуны?

Бәҙри *(күҙҙәре дүрт булып).* Булды, ҡыҙ һинеке. *(Ҡулын бирә.)*

Исмәғил. Ҡара, һүҙеңдә ныҡ тор. Уларҙың вәғәҙәләре бик ныҡ. Һин шуны емерергә тейеш. Булдыра алмаһаң, икегеҙгә лә яҡшы булмай. *(Китә.)*

Бәҙри *(күҙҙәрен ялҡынландырып).* Мең тәңкә...

Ғәлиәбаныу менән Ғәлимә инәләр.

Дүртенсе күренеш

Бәҙри, Ғәлимә, Ғәлиәбаныу.

Ғәлиәбаныу *(борсоулы, ҡурҡып ҡына).* Мин ниңә кәрәк булдым?

Бәҙри. Әле бында, ҡыҙым, буласаҡ кейәү ҙә бар ине. Шуға күрә һине лә саҡыртҡайным.

Ғәлиәбаныу. Ниндәй кейәү?

Бәҙри. Үҙеңдең буласаҡ кейәүең, Исмәғил.

Ғәлиәбаныу *(ҡурҡып китеп, аптырап).* Исмәғил? Ул ниндәй кейәү булһын?

Бәҙри. Ниңә кейәү булмаһын, һине биргәс, кейәү була инде ул.

Ғәлиәбаныу *(аптырап).* Был ниндәй һүҙ тағы? Бер бирҙегеҙ бит инде.

Бәҙри. Кемгә?

Ғәлиәбаныу. Хәлилгә.

Бәҙри. Юҡ, беҙ һине Хәлилгә биргәнебеҙ юҡ. Исмәғилгә тип бирҙек.

Ғәлимә. Беҙ һинең тәҙрәңә килеп йөрөгән кешене Исмәғил тип белдек.

Ғәлиәбаныу. Ах, был ни эш?

Бәҙри. Ни эш булһа ла булған да үткән. Бына һиңә шул, һин Исмәғилгә барырға тейеш!

Ғәлиәбаныу. Бәҙиға абыстайға ла вәғәҙә биреп ебәрҙегеҙ бит.

Бәҙри. Унда ла беҙ Исмәғилдән килгән тип белдек.

Ғәлимә. Тәҙрәгә килеп йөрөгән кешене Исмәғил тип белгәнгә, Бәҙиға абыстай яусы булып килдем тигәс тә, Исмәғил ебәргәненә шикләнмәнек.

Бәҙри. Йә, үткән эште күп һүҙма. Бына, Ғәлиәбаныу, яҡшылап әйткәнде тыңлаһаң шул, һин тилелегендә ҡуй! Исмәғилгә бар!

Ғәлимә. Ҡарт көнөбөҙҙә битебеҙгә оят килтермә, ҡыҙым, үҙ бәхетеңде көртәләп ҡуйма! Хоҙай һиңә бер ҡыҙға ла бирмәгән бәхетен һүҙып тора.

Ғәлиәбаныу *(аптыраштан айныый алмай)*. Атай, әсәй, зинһар, мине йәберләмәгеҙ. Минең бәхетемә аяҡ салмағыҙ.

Ғәлимә. Йүләрләнмә! Нишләп аяҡ салыу булһын ул? Һине бәхетле итергә тырышабыҙ бит.

Ғәлиәбаныу. Мин уға бармайым... *(Иҫенә төшөп, үҙ-үҙенә.)* Ах, яңылыштым... Инде ни эшләйем?..

Бәҙри *(ҡысҡырып)*. Мин барырһың тием!

Ғәлиәбаныу *(түҙмәй)*. Ҡанһыҙ ул, йыртҡыс!

Бәҙри *(Ғәлиәбаныуҙың ауыҙын баҫып)*. Туҡта яҡшылыҡ менән! *(Тирә-яғына ҡарап алып.)* Тауышыңды сығарма! Юғиһә тегеләй мин һине...

Ғәлиәбаныу *(ғәйрәт менән)*. Мин туҡтамайым, мин Исмәғилгә бармайым.

Бәҙри *(ҡысҡырып)*. Барырһың!

Ғәлимә. Ҡыҙым, зинһар, тилермә! Шундай урынға бармайым тиергә нисек телең бара? Шундай кеше һорап торғанда, ҡарышыу гөнаһ булыр. Ундай кешенең күңелен йығыуҙың ҡурҡынысы ла бар бит.

Ғәлиәбаныу. Мин һөймәгән кешемә нисек барайым?

Бәҙри. Барғас һөйөрһөң, ҡарышма!

Ғәлиәбаныу *(ялынып)*. Атай, йәнем, булмай тием...

Бәҙри. Тауышыңды сығарма, бәдбәхет ҡыҙ! Ҡарышһаң, минән яҡшылыҡ көтмә!

Ғәлиәбаныу. Ни эшләйем һуң?

Бәҙри. Һин Исмәғилгә бар!

Ғәлиәбаныу. Мин уға барырға мәңге риза түгел.

Бәҙри *(асыуынан ҡалтырап, йоҙроғон Ғәлиәбаныуҙың баш түбәһенә үк килтереп)*. Мин әйткәнгә күнмәһәң, йәненде алырмын мин һинең. Бармайым тип ауыҙыңды асаһы булма!

Ғәлиәбаныу. Үлтерһәң дә, риза булыр хәлем юҡ. Мин Хәлилдеке.

Ғәлимә. Ғәлиәбаныу, зинһар, аҡылыңа кил! Алдыңдағы шундай ялтыраҡ торған бәхетеңде лә күрмәҫлек дәрәжәлә үк Хәлилдең нимәһенә ашҡындың? Ике матур бер ергә килеп, бәхетле була алмаҫтар, тигән боронғолар.

Ғәлиәбаныу. Бәхетһеҙ булһам, һеҙгә үпкәләмәм.

Бәҙри *(екеренеп)*. Тағы бер әйтәм, туҡтайһыңмы?!

Ғәлиәбаныу *(илап)*. Атай, йәнем, ҡыҫтама мине...

Ғәлимә. Ҡыҙым...

Бәҙри *(ҡысҡырып)*. Ҡыҫылма һин! *(Төртөп ебәрә. Ғәлиәбаныуға.)* Атай, барам, тип әйт!

Ғәлиәбаныу илай.

Барырһың!

Ғәлиәбаныу. Булмай.

Бәҙри *(өҫтөнә барып)*. Булмаймы?

Ғәлимә *(Бәҙриҙең елкәһенә йәбешеп)*. Атаһы, атаһы!

Ғәлиәбаныу. Булмай.

Бәҙри *(ҡулына йәбешеп)*. Булмаймы?

Ғәлиәбаныу. Булмай тием...

Бәҙри бик асыуланып, ғәйрәт менән һелтәп ебәрә, Ғәлиәбаныу йығылып барып төшә.

Ғәлимә. Йүнләп...

Бәҙри *(ҡысҡырып)*. Тик тор, һиңә лә кәрәкме әллә?! *(Уны ла һелтәп ебәрә.)*

Ғәлиәбаныу, ерҙә ятҡан көйө, үкһеп илай. Бәҙри күҙҙәрен алартып, уға ҡарап тора.

Ғәлиәбаныу *(тороп, аҡрынлап, өҫтөрәлеп кенә барып, бер аҫҡа һөйәлеп, үҙ-үҙенә)*. Инде ни эшләйем? Атай хәҙер йәнемде алырға тора... Былай итеп кенә булмай икән... Әгәр Хәлил ҡушҡанса эшләһәм?.. Ул килмәй ҡалһа, бөгөн, иртәгә үк Исмәғилгә никах уҡытып ҡуйһалар, ни эшләрмен?..

Бәҙри. Йә, ҡыҙым, күп уйланма! Инде аҡылға килмәнеңме?

Ғәлиәбаныу *(үҙ-үҙенә)*. Күнәм инде. Бынан башҡа сара юҡ. *(Атаһы яғына бер-ике атлап.)* Инде... Ихтыярығыҙ... Мин шунан артыҡ ҡаршы тора алмайым. Һеҙ улай риза булмай торғас, ҡарышыуҙан файҙа сыҡмаҫ. Һеҙ минең өсөн ҡайһыһы яҡшы булғанын артығыраҡ беләһегеҙҙер.

Ғәлимә. Бына рәхмәт, ҡыҙым! Күптән шулай ғына әйткән булһаң, бындай күңелһеҙлектәр сыҡмаған булыр ине. *(Аҫҡаһынан һөйә.)*

Бәҙри *(тыныҫланып)*. Беҙ бит һинең бәхетең өсөн тырышабыҙ... Ярай әле, һуң булһа ла аҡылға килдең. Исмәғилгә барырға риза булдың бит инде?

Ғәлиәбаныу. Һеҙҙең теләгегеҙгә риза булдым. Ихтыярығыҙ.

Бәҙри *(ҡаранып)*. Ана, Исмәғил үҙе лә килә. Илағаныңды белдермә! Ҡара, уйлап һөйләш!..

Исмәғил инә.

Бишенсе күренеш

Бәҙри, Ғәлиәбаныу, Ғәлимә, Исмәғил.

Исмәғил. Иҫәнме, Ғәлиәбаныу!

Ғәлиәбаныу баш эйә. Өндәшмәй.

Бәҙри *(асыҡ сырай менән)*. Насип булһа, иртәгә никах уҡытырбыҙ инде, кейәү.

Ғәлиәбаныу һиҫкәнеп китә.

Исмәғил *(ҡыуанып)*. Эш булдымы ни?

Ғәлимә. Һинең кеүек егет булғанда, бик ҡыуанып инде.

Бәҙри. Бала бит әле, яңылышҡан ғына. Төшөндөрөп биргәс, бик ҡыуанып риза булды.

Исмәғил *(иркәләп кенә)*. Шулаймы ни, Ғәлиәбаныу туташ?

Ғәлиәбаныу өндәшмәй.

Бәҙри. Ул ояла инде.

Исмәғил. Улайһа, ҡулыңды ғына бир!

Ғәлиәбаныу хәрәкәтһеҙ тора.

Бәҙри, Ғәлимә *(икеһе бергә)*. Ҡулыңды бир! Бир, ҡыҙым!

Ғәлиәбаныу *(ҡулын биреп)*. Йәнең тыныс булһын!

Исмәғил. Бына рәхмәт.

Ҡарттар ҡыуанышалар.

Исмәғил. Ярай, бөгөнгә мин киттем. Ҡалғаны иртәгә. Хушығыҙ!

Бәҙри *(эйелеп ҡала)*. Хуш, хуш! Аллаға тапшырҙыҡ...

Шаршау

Икенсе картина

Беренсе картиналағы күренеш. Төн уртаһы. Ай нурҙарын ҡоя. Тынлыҡ. Аҡрын ғына Исмәгил инә.

Беренсе күренеш

Исмәгил яңғыҙ.

Исмәгил. Йоҡлайҙар. Бөтә ер тынлыҡҡа сумған. Тик мин генә йоҡлай алмайым. Бына тағы бында килдем. Ниңә килдем мин бында? Төндә ни бар миңә бында? Ғәлиәбаныуҙың бүлмәһенә инергәме?.. Юҡ... Мине бында көнсөллөк килтерә. Ғәлиәбаныуҙы Хәлилдән көнләшеү килтерә. Көнләшеү генә түгел, ҡурҡыу килтерә... Ҡыҙҙың атаһын һатып алдым. Ҡыҙ ҙа инде тулай алмаҫ. Тик иртәгә никахты беркетҡәнгә тиклем Хәлилдән һаҡларға кәрәк. Төндә килеп, Ғәлиәбаныуҙы тағы кире уйларға өндәп йөрөмәһен... *(Бик ғорурлыҡ менән.)* Эх Хәлил, көслө менән көрәшмәйҙәр уны! Күп телеңде тыймаһаң, сәнселеп төштөңмө? Шулай була ул... Имеш, уны Ғәлиәбаныу һөйә. Инде бына һөйөп ҡараһын. Мин уны нисек тота белермен. Әгәр йүнгә килмәй икән, миңә нимә! Һуңынан миңә тиһә сәнселһен... Миңә намыҫ ҡыйбат. Миңә исемемде тапатмау ҡыйбат. Матурлығы менән бөтә тирә-яҡта дан тоткан ҡыҙҙың, минән уҙып, башҡаға китеүе ул ниндәй хурлыҡ!.. Бына ниндәй генә юл менән булһа ла, мин шул хурлыҡты күтәрмәҫкә тейеш. Тамам ҡармаҡҡа эләктергәнсе, кәрәк булған сараларҙың ниндәйенән дә мин ҡасмам. Йоҡлаймы икән үҙе? *(Аҡрын ғына барып, тәҙрәнән ҡарап килә.)* Йоҡлай, ахырыһы... Урынына йөҙ түбән ятҡан. Илай-илай йоҡлап киткәндер. Әйҙә, ила! Кисә бик шәп инең әле. Йыраҡ бара алманың шикелле... *(Сыбыҡтар сытырлаған тауыш ишетеп.)* Был ни?.. *(Тыңлап тора.)* Берәү килә ахырыһы. *(Сыбыҡтар араһынан күрергә тырышып.)* Берәү килә... Хәлилдер... Әгәр Хәлил булһа?.. Моғайын, шул булыр, кем килһен бүтән... *(Ҡарап.)* Хәлил. Ярай, кил! Мин һиңә кемлегемде танытайым. *(Кеҫәһенән револьвер алып.)* Күп шаяра башлаһаң, мин һине быныҡ менән дә һыйлай белермен. *(Ағастарға ышыҡлана.)*

Аҡрын ғына баҫып, тирә-яғына ҡарана-ҡарана, һаҡланып ҡына Хәлил инә.

Икенсе күренеш

Исмәгил, Хәлил, Фәлиәбаныу.

Хәлил *(сәхнә уртаһында туҡтап)*. Ни хәлдәр бар икән был йортта? Эштәр башҡасаға әйләнгән булып, һаҡлап тороп, харап итә күрмәһендәр. *(Фәлиәбаныу тәҙрәһенә барып, үрелеп ҡарай, тирә-яғына ҡарап алып, һаҡланып ҡына тәҙрәгә сиртә.)*

Исмәгил, револьверын тотҡан килеш, бик ентекләп ҡарап тора. Хәлил аҙыраҡ көтеп тороп, тәҙрә асылмағас, йырлай.

Тәҙрәгә егет килгән,
Йоҡлап ятма, гөлкәйем;
Ҡасып сыҡмай, үҙ-үҙеңде
Утҡа атма, гөлкәйем!
(Тағы сиртә, тәҙрә асыла.)

Фәлиәбаныу. Хәлил, килдеңме?

Хәлил. Йә, эштәр нисек?

Фәлиәбаныу. Эй, йәнем, мине Исмәғилгә барырға күндерер өсөн күрһәтмәгәнде ҡалдырманылар.

Хәлил. Мин әйтҡәнсә эшләнеңме?

Фәлиәбаныу. Бында башта уҡ ҙур яңылышлыҡ булған. Атайҙар мине Исмәғилгә бирҙек тип белгәндәр. Мин быны ишеткәс, аптырап ҡалып, ни эшләгәнемде лә белмәнем.

Хәлил. Быға кәрәк булһа! Һуң, нисек бөттө?

Фәлиәбаныу. Риза булған булып, эште саҡ йүнәттем.

Исмәгил үҙәрен китә. Асыуынан ни эшләргә белмәй.

Хәлил. Мин аттар, кешеләр алып килдем. Ҡуралар артында ғына тора. Китәйек улайһа, тиҙ!

Исмәгил револьверын тотоп, атылып сыҡмаҡсы була. Тағы тыйыла.

Фәлиәбаныу. Яҡын тирәлә кеше-кара юҡмы?

Хәлил. Юҡ, әйҙә тиҙерәк!

Фәлиәбаныу тәҙрәнән төшә. Хәлил күтәреп ала.

Исмәгил *(сыҙай алмай, өҫтәренә атыла яҙып)*. Бөтөрәм!

Фәлиәбаныу. Тотолмаһаҡ ҡына ярар ине.

Хәлил *(Фәлиәбаныуҙың биленән алып)*. Хәйерле сәғәттә!

Ғәлиәбаныу *(ҡыҙғалмайынса)*. Бик ҡурҡам, тотолмабыҙмы икән?

Хәлил. Бер ни ҙә юҡ. Әйҙә, тием, минуты ҡиммәт.

Ғәлиәбаныу. Кешеләр килеп тотһа, ни хәл итербеҙ?

Хәлил. Ғәлиәбаныу, былай тороу — ҙүҙе ҡурҡыныс бит. Бер ҙә ҡаушама, ныҡ бул! Атла аяғыңды! Ул михнәткә түгел... бәхеткә табан, уны асыҡ бел!

Ғәлиәбаныу. Хәйерле генә булһын инде!

Хәлил. Йә, киттек...

Ғәлиәбаныуҙың биленән тотҡан көйө йүгереп китә башлайҙар. Исмәғил револьверлы ҡулын кеҫәһенә тығып, тып итеп алдарына килеп баҫа. Былар кире сигенәләр.

Ғәлиәбаныу *(бик ҡурҡып)*. Ах!

Хәлил *(ҡурҡыу-асыу ҡатыш)*. Ни кәрәк һиңә?

Исмәғил *(бик ҡаты асыу менән)*. Ебәр Ғәлиәбаныуҙы!

Хәлил. Ниңә ебәрәйем мин уны!.. *(Китмәксе була.)*

Исмәғил *(револьверын төҙәп)*. Ҡуҙғалма!

Ғәлиәбаныу. Һай!.. *(Ҡулдары менән йөҙөн ҡаплап, Хәлилдең күкрәгенә ташлана.)*

Хәлил. Ҡуй! *(Ҡурҡып сигенеп китә.)*

Исмәғил. Бир яҡшылыҡ менән Ғәлиәбаныуҙы!.. Йә Ғәлиәбаныуҙы бирәһең, йә йәнеңде!

Хәлил. Булмаҫ нәмә менән ҡыҫтама. Ебәр беҙҙе. Үҙеңә лә файҙа юҡ.

Исмәғил. Минең файҙа, зыянымда һинең эшең булмаһын. Минән йә Ғәлиәбаныуҙы, йә йәнеңде биреп ҡотолаһың.

Хәлил *(бик аптырап)*. Уйла, зинһар, Исмәғил. Мине үлтергән менән барыбер Ғәлиәбаныуҙы ала алмайһың бит...

Исмәғил. Унда һинең эшең булмаһын! Уныһын мин үҙем ҡарармын. Һин бына үҙ хәленде тикшер. Ташлайһыңмы яҡшылыҡ менән, юҡмы?

Ғәлиәбаныу *(саҡ ҡына башын күтәреп, револьверға күҙен төшөрмәй генә)*. Зинһар, Исмәғил ағай, беҙҙе йәберләмә!

Хәлил. Беҙ бәләкәй саҡтан бер-беребеҙҙе һөйөп, бәғәҙәләр бирештек. Һиңә көндәш булыу тигәнде уйлағаным да юҡ. Һин беҙҙе юҡҡа харап итмә!

Исмәғил. Ниңә шунда хоҙай үҙе никахығыҙҙы уҡып яратмаған. Ул һүҙҙәрҙең береһе лә ҡолағыма инмәй хәҙер. Тик һеҙ минең алдымда ҡалтырап торорға тейеш икәнде генә беләм. Һәм бына шуны күҙем менән

күреп торам. *(Револьверын Хәлилдең маңлайына үк килтереп.)* Бына Исмәгилдең ҡулы был ерҙән вәгәҙәләрегеҙҙең көлө күккә осҡандан һуң ғына алыныр...

Фәлиәбаныу *(хәлдән тайып).* Атма! Атма!

Исмәгил. Кит Хәлилдең янынан, ташла уны!

Хәлил менән Фәлиәбаныу, ни эшләргә белмәй, аптырашып тораҙар.

Исмәгил *(аҙ ғына көтөп тора ла һул ҡулы менән Фәлиәбаныуҙың ҡулына тотона; Фәлиәбаныу тартыла; көс менән тартып алып, Хәлилгә).* Инде Фәлиәбаныу миңдә. Һин үҙеңдең яҙмышыңды билдәлә! Йә тура ғына сығып кит, йә донъя менән иҫәнләш! Бер минут ваҡыт һиңә...

Хәлил ҡапыл Исмәгилдең өҫтөнә ташлана. Исмәгил атырға өлгөрә алмай ҡала. Револьверы ергә төшә. Икәү алыша башлайҙар. Ахырыһы Исмәгил, Хәлилде ергә йығып, өҫтөнә атлана. Ләкин Хәлил ерҙәге револьверҙы алып өлгөрә лә ятҡан еренән өҫтөндәге Исмәгилгә төҙәй.

Исмәгил *(кире сигенә биреп).* Шаярма тием минең менән!

Хәлил. Тор! Атам!

Исмәгил. Уйнама тием! *(Ажрын ғына тора.)*

Хәлил *(револьверҙы төҙәгән килеш тороп).* Бына инде һин минең ҡулда. Инде мин һинең яҙмышың менән уйнайым. Беҙҙән ҡалаһыңмы? Юҡмы?

Фәлиәбаныу *(Хәлилгә килеп йәбешеп).* Ай, үҙеңде харап итәһең. Атма, зинһар! Атма тим, Хәлил! Ташла ергә уны! Ташла зинһар, ташла!

Исмәгил. Йә, күрһәт егетлегеңде.

Хәлил. Һинең кеүек әтте атырға хурланам. *(Револьверҙы ергә бәрә.)*

Исмәгил револьверға ташлана.

Ая, иманың булмаһа, шул ергә ташланған алтатарҙы!

Исмәгил. Кит, һөйләнмә! Тыяһыңмы телеңдә? Китәһеңме яҡшы саҡта?

Фәлиәбаныу. Иманһыҙ үк икәнһең!

Хәлил. Ниҙә китәйем мин!

Исмәгил. Китәһеңме тием?

Хәлил ике бармағын ауыҙына ҡабып, әсе итеп һыҙғыра.

Исмәгил *(револьверын төҙәп).* Стоп! Ә, һин шулаймы ни?!

Фәлиәбаныу *(ҡулын һуҙып, Исмәгилгә ҡаршы йүгереп).* Зинһар, Исмәгил ағай!..

И с м ә ғ и л *(төртөп ебәрә)*. Кит бынан!

Ғ ә л и ә б а н ы у *(аяғына йығылып)*. Кыҙған!

Х ә л и л. Ялынма ул эткә!

И с м ә ғ и л *(асыуынан быуылып)*. Ә, этме?!

Х ә л и л. Эт һин! *(Кеҫәһенән бәке сығарып, Исмәғилгә һөжүм итә.)*

И с м ә ғ и л. Мә улайһа! *(Атып ебәрә.)*

Хәлил салҡан килеп төшә.

Ғ ә л и ә б а н ы у *(һикереп тороп, әсе тауыш менән ҡысҡыра)*. Ах!

Хәлилдең шаһиттары С и б ә ғ ә т менән Х ә м з ә йүгереп киләләр.

Өсөнсө күренеш

И с м ә ғ и л, Х ә л и л, Ғ ә л и ә б а н ы у, С и б ә ғ ә т, Х ә м з ә.

Х ә м з ә. Ни булды, ни булды?

С и б ә ғ ә т. Ни эшләне? Кем атты?

Хәлилде ҡарайҙар. Хәлил ғазаплана. Исмәғил шашып ҡала. Ҡасырға ла, ҡасмаҫҡа ла белмәй. Ғәлиәбаныу Хәлилгә ташлана.

Х ә м з ә. Кем атты? Кемдең эше был? *(Исмәғилгә бара.)*

С и б ә ғ ә т *(ҡаты тауыш менән ҡысҡыра)*. Килегеҙ! Кеше ултерҙеләр!

И с м ә ғ и л. Ниңә ҡысҡыраһың! Ул үҙен-үҙе атты.

Х ә м з ә. Ниңә атты?

Ғ ә л и ә б а н ы у *(күтәрелеп)*. Хәлилде Исмәғил атты.

И с м ә ғ и л. Алдама!

С и б ә ғ ә т. Һин атҡанһың, бәдбәхет!

Х ә м з ә *(ситкә ҡарап)*. Бар, бар, Ибрай ағай, кире йүгер. Старшинаны саҡырығыҙ! Ултереш!

И с м ә ғ и л. Ҡара, миңә бәйләнмәгеҙ!

Х ә м з ә. Хәҙер күҙ алдында булған эште лә танмаҡсы булаһыңмы? *(Барып йәбешә.)*

И с м ә ғ и л *(нелтәнеп)*. Не смей миңә йәбешергә.

Өйҙән күлмәк-ыштандан ғына Б ә ҙ р и, эске кейемдәрҙә Ғ ә л и м ә, уларҙың артынан Ғ и м а ҙ и йүгереп киләләр.

Дүртенсе күренеш

К и л е ү с е л ә р. Был ни хәл? Ни булды? Ни эшләнеләр? *(Хәлилде күреп, сигенеп китәләр.)*

Ғәлимә. Ай аллам!

Бәҙри. Был ни эш? Был ҡайһыҙҙан?

Ғәлиәбаныу *(илап)*. Хәлил, йәнем, үләһеңме ни?..

Хәлил. Уф!.. *(Ғазаплана.)*

Хәмзә. Бына Хәлилде атҡандар.

Бәҙри *(Исмәғилде абайлап, үҙ-үҙенә)*. Ай, эште боҙған, ахыры.

Йүгерә-йүгерә старшина һәм ике кеше инәләр.

Бишенсе күренеш

Старшина. Ни эшләнегеҙ? Ни булды, үлтерешме?

Бәҙри. Үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ. Яңы сығып ошо хәлде күреп торабыҙ.

Ғәлиәбаныу. Исмәғил атты. Тотоғоҙ атыусыны!

Аҙаҡ килгәндәр ғәжәпләнеп Исмәғилгә ҡарайҙар.

Исмәғил. Мин атҡаным юҡ. Ул үҙе атты.

Ҡайһылары Хәлилде барып ҡарай.

Старшина. Ниндәй эш был? Күреүселәр бармы? *(Хәмзәләргә.)* Һеҙ бында ҡасан килдегеҙ?

Сибәғәт. Беҙ әсе һыҙғырған тауышты ишетеп килә инек. Килеп еткәндә, алтатар шартланы. Беҙ күргәндә Хәлил шулай ята, Исмәғил шашып, ни эшләргә белмәй тора ине.

Исмәғил. Мин атманым. Миңә бәйләнмәгеҙ.

Старшина *(елкәһен һикертеп)*. Ғәжәп! *(Хәлил янына барып.)* Йәне бармы?

Бер кеше. Бар.

Старшина *(Хәлил янында ятҡан бәкене табып алып)*. Был ниндәй бәке?

Исмәғил. Уя... бәке... Хәлил мине атмаҡсы булды ла, мин үҙемде һаҡлар өсөн бәке алдым.

Ғәлиәбаныу *(кысҡырып)*. Ялған!

Старшина. Һин сабыр ит.

Бәҙри *(Ғәлиәбаныуға)*. Тор, Ғәлиәбаныу, унан! Һиңә улай ултырыу ярамай.

Ғәлимә. Әйҙә, Ғәлиәбаныу, өйгә инәйек.

Бәҙри менән Ғәлимә Ғәлиәбаныуҙы торғоҙалар.

Ғәлиәбаныу. Зинһар, исмаһам, һуңғы һулыштарында...

Бәҙри *(асыулансыбырап)*. Шаулама күп!

Старшина. Эйе, уны алып инһәгеҙ ҙә ярар.

Хәмзә. Ниңә алып инергә? Был эштә иң кәрәкле кеше бит ул, алып китмәгеҙ.

Бәҙри ирекһеҙҙән туҡтай, Фәлимә Фәлиәбанығы тотоп тора.

Старшина *(Исмәғилгә)*. Нисек һуң әле ул, элек һине атмаҡсы булып, һуңынан үҙе атылды?

Исмәғил. Мин һеҙгә үҙе атылды тип әйтәм бит, ниңә уны төпсөп һорайһың? Мин үлтергән тиергә батырсылыҡ итәһегеҙме әллә?

Бер кеше. Исмәғил ниңә улай эшләһен, әйе...

Старшина. Булыуын булмаҫ та...

Фәлиәбаныу. Аҙ ғына хоҙайҙан ҡурҡығыҙ. Белә тороп, бер йыртҡысты яҡлайһығыҙ.

Бәҙри. Тик тор тием.

Фәлиәбаныу *(тайпылып, тырышып-тырышып)*. Мине Исмәғилгә көсләп бирмәксе булдылар. Мин мәңге уға буласаҡ түгелмен. Үҙемде үҙем һыуға ташлап булһа ла, уға бирелмәм. Мин Хәлилде генә һөйәм. Ул минең өсөн үҙен харап итте. Миңә биргән вәғәҙәһен ул һуңғы сиккә ҡәҙәр һаҡлағас, мин дә уның хаҡын мәңге һаҡлармын. *(Фәлимәнән ысҡынып, Исмәғилдең алдына уҡ баҫып.)* Әйт бына, мин үлтермәнем тип, минең күҙемә ҡарап; уны һин үлтерҙең! Һин бит!

Исмәғил яуапһыҙ, Фәлиәбаныуҙың күҙенә ҡарап тороп, ҡалтырап китә.

Инде танмаҡсы булаһыңмы? Уны һин аттың! Һин үлтерҙең!

Исмәғил *(сабырлығы етмәйенсә)*. Эйе, мин үлтерҙем.

Бөтә кешелә үҙгәреш.

Бәҙри. Ах, Исмәғил, бик ҙур хаталыҡ.

Фәлимә. Өмөтһеҙ ҡк икәнһең! Беҙ һиңә бирҙән-бер алма кеүек ҡыҙыбыҙҙы бирергә йөрөйбөҙ тағы, һин улайһа, кеше үлтереүсе икәнһең!

Исмәғил. Мин үлтерҙем, мин аттым. Асыуымдан белмәй аттым. Мин уны ҡурҡытмаҡсы ғына булғайным, ул бәкеһен сығарғас, һиҙмәй атып ебәрҙем.

Старшина *(бер аҙ аптырап, ни эшләргә белмәй торғас, ҡыймай ғына)*. Улайһа беҙ һине ҡулға алырға тейешбеҙ.

Сибәғәт. Үҙе өҫтөнә алып торғанда, яҡламаҡсы булаһығыҙмы әллә?

Хәмзә. Тотоғоҙ атыусыны!

Старшина *(Сибәғәткә).* Уйлап һөйлә, егет!

Хәлил. Уф!.. Үләм.

Исмәғил. Мин был эште эшләүемә үкенеп, ғәйебемде муйыныма алам. Судтың тоғро хөкөмөнә бирелəм.

Старшина *(кешеләргә).* Әйҙәгеҙ, беҙ ғәйеплене алып китәйек!

Кешеләр Исмәғилде тоталар.

(Калыусыларға.) Һеҙ Хәлилде ҡарағыҙ. *(Бәке менән револьверҙы ала.)* Өлгөрһәм, килеп етермен, килә алмаһам, өйөнә илтә торорһоғоҙ. Әйҙәгеҙ!

Китәләр.

Алтынсы күренеш

Хәлил, Ғәлиәбаныу, Бәҙри, Ғәлимә, Ғимаҙи, Сибәғәт, Хәмзә.

Ғәлимә. Беҙ уға ҡыҙ бирергә йөрөйбөҙ тағы.

Бәҙри. Шаулама инде!

Ғәлимә *(Хәлилгә барып).* Хәлил! Хәлил! Улым, хәлең нисек?

Хәмзә. Хәлил, Хәлил!

Башҡалар ҙа Хәлил янына йыйыла.

Хәлил. Үләм... *(Ғазаплана.)*

Ғәлиәбаныу *(илап).* Хәлил, китәһең бит инде...

Ғәлимә. Эй бисара, бисара. Былай уҡ булыуын белмәнем, белмәнем...

Сибәғәт. Иптәш, Хәлил...

Хәлил. Ғәлиә... баныу... *(Ҡулын һуҙа.)*

Ғәлиәбаныу *(ҡулын тотоп).* Хәлил! Йәнем!

Хәлил *(ғазапланып күтәрелеп).* Кил... Үләм...

Ғәлиәбаныу *(Хәлилдең башын ҡосағына алып, илап).* Шулай уҡ айырылабыҙмы ни?!

Хәлил *(өҙөп-өҙөп кенә).* Инде үлһәм дә... үкенмәйем, Ғәлиәбаныу, һылыуым... иркәм, йән... бирәмен... ҡуйы... ныңы... да... *(Үлә.)*

Ғәлиәбаныу. Үлде. *(Илай.)*

Ғәлимә *(илап).* Эй хоҙайым, изге йәндәрҙән ит!

Сибәғәт *(ҡулының тамырын тотоп ҡарап).* Эй дуҫҡай, үлдең бит!

Хәмзә. Хуш, иптәш, мәңгегә!

Бәҙри. Алып китергә кәрәк ине.
Фәлимә. Ипләп һалығыҙ әле.
Сибәғәт. Бәҙри ағай, ат егергә кәрәк ине.
Бәҙри. Гимаҙи, бар, һин тиҙерәк ат ек!

Гимаҙи китә. Хәлилде һуҙып һалалар.

Фәлиәбаныу *(Хәлилдең янына теҙләнеп)*. Хуш, йәнем, Фәлиәбаныуыңа ҡауышыу шатлығы урынына һинең йыназаң өҫтөндә илап ултырырға тура килә инде. Хәлил! Күңелемдең иң тәрән еренән ҡаршымда һин бар ваҡытта ғына килеп сыға алған, һин «Фәлиәбаныу» тип атаған көй минең берҙән-бер йыуанысым булып ҡалды. Бынан һуң был көйҙө һине һағынып йырлармын. Һинең төҫөң итеп тотормон... Хәлил! Был көйҙө һинең өсөн генә йырлай ала инем. Бына шуны йыназаң өҫтөндә һинең исемеңә мәңгелек бүләк итеп бағышлайым.

Был ваҡыт алыҫтан скрипкала «Фәлиәбаныу» көйөн уйнаған тауыш ишетелә. Барыһы ла тын ғына тәьҫир менән тыңлап торалар. Бер аҙҙан Фәлиәбаныу бик моңло итеп ҡушылып йырлап китә.

Аҡ атласым етмәне,
Алмас ҡайсым үтмәне;
Ун өс йәштән бирле һөйөшөп,
Күҙебеҙ күҙҙәрҙән китмәне,
Хоҙайым насип итмәне.
(Илап, Хәлилдең өҫтөнә ауа.)

Шаршау

Хәбибулла Ибраһимов

(1894—1959)

Хәбибулла Кәлимулла улы Ибраһимов 1894 йылдың 29 гинуарында Ырымбур ҡалаһында грузчик ғаиләһендә тыуған. Тәүҙә ул дини-схоластик характерҙағы «Хөсәиниә» мәҙрәсәһендә уҡый. Ләкин системалы белем ала алмай. Кесе йәштән үк музыка менән мауыға, гармунда, мандолинала һәм скрипкала уйнай.

1915 йылдан 1917 йылға тиклем Хәбибулла Ибраһимов хәрби хеҙмәттә була. Демобилизациянан һуң Ырымбурҙа музыкант һәм музыка уҡытыусыһы булып эшләй. 1919 йылдың аҙағында Ҡыҙыл Армияға доброволец булып китә һәм Төркөстан фронтының политбүлек ҡаршыһындағы театрҙа музыка етәксеһе булып эшләй. Һуңынан ошо театр менән Башҡортостандың шул осор баш ҡалаһы Стәрлетамаҡҡа күсеп килә һәм башҡорт профессиональ театрын ойоштороуҙа актив ҡатнаша, артист булып та, музыкант булып та эшләй.

1922—1925 йылдарҙа Ленинградтың Музыка мәғарифы институтын тамамлап ҡайтҡас, бөтә ғүмерен башҡорт театры менән бәйләй. Ул күп һандағы популяр йырҙарҙың авторы.

Х. Ибраһимов 1921 йылда яҙылған «Башмағым» әҫәре менән комедия жанрына инеҙ һалды. Уның «Зөлхәбирә», «Пианино мәсьәләһе», «Ғәзизә», «Ватан өсөн», «Партизанка» кеүек әҫәрҙәре лә театрҙар сәхнәһендә ҡуйылды.

1951 йылда уға Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән исем бирелә.

БАШМАҒЫМ

Комедия

Катнашалар

Кәрим бай — ҡала байы.
Сәрби — уның ҡатыны.
Сәрүәр — уларҙың ҡыҙы.
Йыһан ҡарсыҡ.
Сыщик.
Маһруй, Хөсни — Сәрүәрҙең иптәш ҡыҙҙары.
Вафа — Кәрим байҙың кейәүе.
Ғилми — Кәримдең оло ҡыҙы.
Хөснөтдин, Вәли — Кәрим байҙың ялсы малайҙары.
Ғәлимьян.
Сәлим.
Хәйрүш.
Городовой.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Байҙарса йыйылғтырылған зал. Түрҙә арка. Халыктан һулда ҙур өҫтәл, тирәһендә урындыктар. Ситтә бер диван, уң яҡта беренсе планда тәҙрә һәм Кәримдең яҙыу өҫтәле. Стенала көҙгө, комод өҫтөндә аҡса һандығы күренеп тора. Шаршау асылғанда өҫтәл тирәһендә: Маһруй, Хөсни, Сәрүәр, ҡайһыһы тегеп, ҡайһыһы сигеү сигеп ултыралар. Шаршау асылғанса музыка бер тапҡыр көйҙө уйнап сыға. Музыка аҡрын ғына уйнағанда, яй ғына шаршау асыла, музыка ҡабатлап уйнауында дауам итә. («Төзкирә» көйө уйнала.)

Һыу буйына төшкән инем,
Япраҡ ярған тал-тирәк,
Яна тиһәң ялҡыны юҡ,
Ялҡынһыҙ яна йөрәк.
Һикереп-һикереп ағалыр ҡар һыуы,
Ник баҫылмай йөрәктең ярһыуы.
Беҙҙең урам арҡыры,
Аға һыуҙың һалҡыны, шул,
Һыу һипһәң дә баҫылмайҙыр,
Янған йөрәк ялҡыны.
Һикереп-һикереп ағалыр ҡар һыуы,
Ник баҫылмай йөрәктең ярһыуы?

Хөсни. Ысындан да был йөрәктең ярһыуы ниңә баҫылмай икән?

Маһруй. Ҡурҡма, кейәүгә сыҡҡас, баҫылыр әле.

Хөсни. Һин, Маһруй, уны ҡайҙан беләһең? Кейәүгә сыҡҡаның юҡ бит әле.

Маһруй. Уның нимәһе бар белмәҫкә, әллә һин үҙең белмәйем, тимәксе булаһыңмы?

Хөсни. Мин ҡайҙан беләйем, белмәйем шул.

Маһруй. Һин уны тағы белмәйем, тип, күсер Вәлигә һөйлә, яраймы, миңә һөйләмә, яраймы?

Хөсни. Әй алла, ярар, ярар, һөйләмә, тамағым төбөнә тоҡ һалдың.

Сәрүәр. Куйығыҙсы шул юҡ һүҙҙәрегеҙҙе. Һеҙ, ҡыҙҙар, бик төрөнгө инеп киттегеҙ, йә берәйһе тыңлап торор, алла һаҡлаһын.

Хөсни. Маһруй инде ул ирҙәрҙе һөйләй башлаһа, ҡыҙып китеп, бөтә донъяһын онота.

Маһруй. Ә үҙең һуң? Мин башламаным әле, һин башланың, кешене тикшергән була тағы.

Сәрүәр. Етәрегеҙ инде, йә талашып китерһегеҙ.

Хөсни. Иҫем китте, шуның өсөн талашып торам тағы, алла һаҡлаһын. Ҡара әле, онотоп торам икән, ҡана тегеҙ хатты уҡыт әле, нимәләр яҙған икән? Бая ла уҡырға иткәндә генә Сәрби апай инеп бүлдерҙе.

Маһруй. Ысын да, Сәрүәр, ни эшләп һин уны йәшергән төслә һаман да һаҡлап тораһың, әйҙә уҡыйыҡ әле.

Сәрүәр *(кеҫәһенән алып)*. Мәгеҙ, зинһар уҡығыҙ. Әллә ҡыҙғана тип беләһегеҙме? Тик әсәй генә килеп инмәһен, һаҡ булырға кәрәк.

Маһруй. Ниҙәр яҙған булды икән инде? *(Уҡый башлай.)* «Вә исими тәғалә, йөрәгем ут кеүек яна ла. Һеҙки лиззәт лайыҡ, хөрмәтле мыуафиҡ улан-фәләнгә. Беҙки фәләп ибни фәләндән бер күргә зар, интизар булып, күптән күп суҡ-суҡ сәләмде ирсал вә тәблиғ әйләнем. Әммә бының бәгендә беҙҙең тарафтан һорау шәрифтәрегеҙ улына ҡалһа, тәндә йән тиеү белә-һегеҙ! Әммә һеҙҙең ғишҡығыҙ менән тәҡатем таң булып, ятмаҡтин, эсмәктин мәхрүм булып ҡалдым. Зинһар ғәйеп итә күрмәгеҙ инде. Йәнем, мин һине бер күреү менән ғашиҡ булдым. Бер көн, эсәйегеҙ менән ашҡа барған ваҡытығыҙҙа, мин лавканан сығып килә инем. Шул ваҡыт һеҙҙең нурлы йөҙөгеҙҙө күреп, шул көндән бирле һеҙҙе һөйә башланым: шул көндән бирле ашағаным аш, эскәнем һыу түгел. Һеҙ инде мине ғәфү итегеҙ, әгәр ҙә мөмкин булһа, бөгөн ошо яҙыуҙы биреүсе артынан миңә бер ҡош телендәй хат яҙып ебәрһәгеҙ икән, мин бик шат булыр инем. Һеҙҙән яуап көтөп ҡалам, тиҙлектә ҡауышыуҙы теләп, фәләп ибни фәләп тиеп белә-һегеҙ. Ғәйеп итә күрмәгеҙ, исемде ҡуйманым.

Ас тәҙрәң еләҙгә,
Кей камзулың көйәҙгә,
Исемең әйтеп йырлар инем,
Фаш булаһың өйәҙгә.

Исемем бәдеүәм.»

Бөтәһе лә көлөшәләр.

Хәсни. Яуап яҙҙыңмы һуң, Сәрүәр?

Сәрүәр. Ни эшләп мин уға яуап яҙып торайым? Аллам һаҡлаһын. Атайымдарға ишетелһә, күрерһең күрмәгәнеңде.

Маһруй. Мин булһам яҙыр инем, фәләп ибни фәләп, тиһең дә яҙаһың, исемеңде белмәгәс, һине шайтан белһенме ни?

Сәрүәр. Унан һуң ул ҡапҡа төбөнән бер ҙә китмәҫ. Даныңды бөтә ҡалаға таратыр.

Маһруй. Эй Сәрүәркәйем, шундай егет дан тара-тамы һуң инде? Нисек тигән әле? Ошо яҙыуҙы биреүсе

кеше арҡыры бер генә, ҡош телендәй генә хат яҙып ебәрһәгеҙ, тигән бит, өҙөлөп-өҙөлөп һораған. Бигерәк тә бәгерһеҙ икәнһең, Сәрүәркәйем.

Х ө с н и. Әйтмә инде, әхирәткәйем, бигерәк тә бәгерһеҙ ҡыланаһың. Шундай буйлы, һынлы егеткә лә яуап яҙмаһаң, ул ни тигән әш инде?

С ә р ү ә р. Әй, әхирәткәйем. Күңелемде әллә ни эшләтәһегеҙ, һөйләмәгеҙ инде. Йөрәгем сығырҙай булып тибә башлай. Ҡайҙан ғына ҡабул иттем шул хатты?

М а һ р у й. Мин һинең урыныңда булһам, Сәрүәркәйем...

Х ө с н и. Ике егеткә бер юлы яҙыр инеңме?

Ишек асылған тауыш. Музыка «Моҳәммәдиә» көйөн уйнай. Йы һ а н инә.

И ы һ а н *(йырлап инә, башында төйөн).*

Был йүләр бәндәләреңбулмаһа, мин ни ҡылыр инем,
Был ғаси ҡолоңа, раббым, низәнризалыҡ бирер инең,
Киә кис Хәмиҙәлә булдым, тағы бер шешә май һондом,
Бөтә илгандарым сәсеп, ҡоймаҡлап сәй эсеп, ҡундым.
Хәҙер был йүләрҙәреңалдап, бөтә ялгандарын ялғап,
Өгөр бер шешә май һатһам, иҙәрҙем шөкөр илә ихлас.

Төйөндө өҫтәлгә ҡуя, музыка туҡтай.

И ы һ а н. Нихәл балаҡайҙар, иҫән тораһығыҙмы? Сәрби өйҙәме? *(Дога ҡыла.)*

С ә р ү ә р. Бик яҡшы әле хәҙергә, үҙең һау ғына йөрөйһөңмө, Йыһан әбей?

И ы һ а н. Аҡрынлап йөрөйөм инде шунда, балалар. *(Урынынан тороп.)* Сәрүәр, балаҡайым, Хәмиҙәләрҙә сәйҙе күберәк эскәйнем. *(Сәрүәрҙең колағына шыбырлай.)*

С ә р ү ә р. Хәҙер, Йыһан әбей, бая нимә йырлап индең әле һин, ниндәй йыр ине ул?

И ы һ а н. Арбағы ул, ҡыҙым, арбағы. Мин уны һәр ваҡыт яратып уҡыйым.

Х ө с н и. Әллә мин берәй йырмы икән, тип торам.

И ы һ а н. Юҡ, ни эшләп мин ҡарт башым менән йыр йырлап йөрөйөм ти, туҙға яҙмағанды һөйләйһең.

М а һ р у й инә.

М а һ р у й. Йыһан әбей, әҙерләнем...

И ы һ а н. Рәхмәт, балаҡайым. *(Сыға.)*

М а һ р у й *(өҫтәл янында.)* Әйҙәгеҙ, төйөнөн сисеп ҡарайыҡ әле, нимәләре бар икән?

Хөсни. Ҡуй, яғыла күрмә. Йә берәй нәмәһе юғалған булыр ҙа, беҙҙән күрә башлар.

Маһруй. Атаҡ, нимәгә ҡурҡаһығыҙ унан, тотам да үҙем сисәм. *(Төйөндө сисә лә, бер шәл алып, ситкә китеп ҡарай.)*

Сәрүәр бер ҡалпаҡ алып, көҙгө янына бара, Хөсни бер корсет алып, биленә ҡуйып маташа. Йыһан инә.

Хөсни *(күрһәтеп)*. Инәй, был ҡыйбатмы?

Йыһан. Ун һум, ҡыҙым, туғыҙҙан да кәм ярамай. Эй, балаҡайым, мосолман ҡыҙҙары корсет кеймәй бит ул, ниңә уның хаҡын һорап торған булаһың?

Хөсни. Бәлки, мин кейер инем.

Маһруй. Инәй, был ни хаҡ? *(Шәлде алдына куйып күрһәтә.)*

Йыһан. Ҡарағыҙ әле, һеҙ минең бөтә нәмәмде аҡтарып бөткәнһегеҙ бит, ул һеҙгә ниңә кәрәк инде?

Маһруй. Бәлки, кәрәк булыр ине.

Сәрүәр. Инәй, был ни хаҡ? *(Калпаҡты күрһәтә.)*

Йыһан. Эй, балаҡайым, күңелеңә оҡшаһа, ал да ҡуй, һеҙҙең менән килешербеҙ әле, һеҙҙең менән минең арала хисап өҙөлөшөп торғаны юҡ бит.

Сәрүәр. Энйеһе вағыраҡ та, үрнәге матур эшләнгән икән.

Хөсни. } Ысындан да бигерәк матур эшләнгән
Маһруй. } икән! *(Ҡарайҙар.)*

Йыһан. Сәрүәр балам, миңә саҡ ҡына һыу биреғеҙсе, бик эскем килеп китте.

Сәрүәр. Бар, Маһруй, һыу алып килеп бирсе.

Маһруй. Хәҙер, Йыһан инәй, килтерәм. *(Сыға.)*

Хөсни. Йыһан инәй, тағы нимәләрең бар, ҡарайыҡ әле?

Ҡулдарындағы нәмәне төйөнгә ҡуялар.

Йыһан *(төйөндө аҡтарып)*. Бына бында һеҙгә бик ҡулайлы нәмәләр бар. *(Бер нәмә алып.)* Бына бик һәйбәт катырша майы, еҫе инде әллә ҡайҙан аңҡып тора, унан һуң бына бик яҡшы йофар һабындары, әле үрге ос ҡыйыҡ үксә Шәмсиҙәр кейәү мунсаһына ҡуйырға, тип дүрт киҫәк ошондай һабын менән бер ҡаҙаҡ катырша майы алып ҡалдылар.

Маһруй *(инеп)*. Мә, Йыһан инәй, иҫәнлеккә эсеп ебәр.

Йыһан. Ай, рәхмәт төшкөрө. *(Йотлоғоп эсә.)*

Сәрүәр. Йыһан инәй, Шәмсиҙәр ҡыҙҙарын кемгә биргәндәр?

Йыһан. Ай алла, ишетмәнегеҙме ни әле?

Сәрүәр. Ҡайҙан ишетәйек, беҙ сығып йөрәйбеҙмә ни?

Йыһан. Ғәлимовтарҙың прикащигына, ти, егетте бик маҡтайҙар. Ашамай, эсмәй, ти.

Хөсни. Меҫкен, ашамай-эсмәй нисек тора икән ул?

Йыһан. Ашамай, эсмәй тигәнем, аҙып-туҙып йөрөмәй, тигән һүҙ ул.

Хөсни. Шәмси апайҙарҙың ҡыҙҙары бик йәш түгелме һуң? Нисек бирергә булдылар икән?

Йыһан. Эй, йәш булһа ни булған? Кейәүгә ҡартайғас бармайҙар уны.

Хөсни. Әгәр Ғәлимовтарҙың теге мыйыҡлы прикащигына булһа, меҫкен әрәм инде.

Йыһан. Ниңә, уға ни булған?

Маһруй. Йыһан инәй, беҙҙең бит Хөсни мыйыҡлы ирҙәрҙе яратмай.

Йыһан. Ул ни тигән һүҙ тағы? Мыйыҡһыҙ ир, ирме ни ул?

Сәхнә артында Сәрби тауышы.

Сәрби. Сәрүәр, ҡыҙым, ҡайҙа һин? *(Инә.)* Кеше бар тип әйтмәйҙәр ҙә бит, нихәл, Йыһан әбей, һау ғына йөрөйһөңмө? *(Ултыра.)*

Йыһан. Хоҙайға шөкөр, Сәрби балаҡайым, үҙегеҙ һау ятаһығыҙмы?

Сәрби. Бер көйсә генә әле, Йыһан әбей! Әле аш өйөндә йомоштар бар ине лә шунда булыштым. Аҫрауҙарға ғына ышанып торһаң, бер нәмәне лә һин тигәнсә эшләмәйҙәр, ошо арала үҙен дә көтөп торабыҙ әле. Бар, ҡыҙым, һин теге яҡҡа сығып, сәй эҙерләт. Йыһан әбейгә сәй эсереп ебәрербеҙ, һыуһағандыр ҙа.

Сәрүәр. Хәҙер, әсәй.

Ҡыҙҙар. Тукта, Сәрүәр, бергә. *(Йүгерешеп сығалар.)*

Йыһан. Юҡҡа мәшәҡәтләнәһең, бер ҙә эскем килмәй ине...

Сәрби. Эсербеҙ әле, сәйҙе бит сәйнәһе юҡ, бара бирә ул. Йәле, сисенеп ултыр, ашыҡмайһыңдыр бит, сәйҙән һуң мунса инеп сығырбыҙ.

Йыһан. Рәхмәт инде, Сәрби балам. Бик хөрмәт итәһең. Алла әжерен ҡайтарһын. *(Доға ҡыла.)* Сәрби балам, ишеттеңме әле, үрге ос ҡыйыҡ үксә Шәмсиҙәр ҡыҙҙарын биргәндәр бит. Эй хоҙайым, шул булдыҡһыҙ ҡыҙға ла кейәү сығыр икән.

Сәрби. Кемгә биргәндәр, Йыһан әбей?

Й ы һ а н. Ғәлимовтар прикащигына, ти. Күнәгенә күрә ҡапҡасы тигәндәй, тура килгәндер инде. Егетен дә әллә ни маҡтамайҙар. Уткән көҙ һалдаттан ҡалыр өсөн, тип, бер ҡолағын боҙҙороп һаңрауланған, бер аяғына әнә ҡаҙалып, аҡһаған, ти; Ғәлимов үҙе, ҡыҙын биреп, йортҡа индермәксе булғас, егет: үлһәм үлермен, уның сатан аяҡлы, ҡылый күҙле ҡыҙын алып, ғүмеремде әрәм итмәм, тип ҡырт киҫкән, ти.

С ә р б и. Ул Ғәлимовтар ҙа шул ғәриптәренә кейәү таба алмай йөҙәнеләр инде, меҫкендәр. Былтыр бүрексе таҙ Хисамиҙы өйҙәренә саҡырып: берҙән-бер балабыҙҙан айырылғыбыҙ килмәй, шуға күрә килгән бер яусыны кире ҡаға торабыҙ, Хисами ҡустым, әллә йортҡа инеп, балабыҙ булып, ҡул арабыҙға керәһеңме, тип, ялынып ҡарағандар, ти. Теге лә үҙенә күрә түгел икән. Ғәлим ағай, һүҙҙең дөрөҫө кәрәк, ни әйтһәң дә риза, тик бынһына ғына көсләмәгеҙ, тип, шыма ғына яуап биргән, ти.

Й ы һ а н. Әле һин таҙ Хисами менән миңрәү Хәҙисәнең мажараларын ишетмәнеңме ни, Сәрби балам?

С ә р б и. Юҡ, Йыһан әбей, был арала бик һирәк киләһең бит. Ни эшләгәндәр һуң, ни булған, ти?

Й ы һ а н. Таҙ Хисами менән миңрәү Хәҙисә бесән баҙарындағы мәсет тыҡрығында осрашып торалар икән, шул ваҡыт ҡыҙмаса ғына көйөнсә, төнтәр Шафиҡтың уртансы улы, лабра Хаяттың ире килеп сыҡҡан да, уйнаш итәһегеҙ, тип, икәүһен дә, бер уңға, бер һулға биргеләп, ауыҙҙарын ҡара ҡанға туҙҙырып тукмаған.

С ә р б и. Йә, шунан һуң, шунан һуң?

Й ы һ а н. Шунан һуң, таҙ Хисаметдиндән өслөктө, миңрәү Хәҙисәнән берлекте алып, хәҙер күҙемдән юғалығыҙ, тип, ҡыуып ебәргән, ти. Ярай әле ағай-эненең йоманан сыҡҡан ваҡыттарына тура килмәгәндәр, мин уларҙың аталарын танытыр инем, тип һөйләнеп йөрөгән, ти.

С ә р б и. Йә, шунан һуң, шунан һуң?

Й ы һ а н. Булыр, булыр, ул лабра Хаятының ирен бик маҡтайҙар: аҙыраҡ төшөрһә, дин өсөн йәнем фиҙа булһын, тип әйтә икән, ти. Бер көндө лабра Хаятының үҙен сәсенән һөйрәп урам буйынса: ниңә минең башымдан көләһең? Ниңә мине ир итмәйһең? Ниңә мине ҡаршы алырға сыҡмайһың, тип, халыҡ алдында туҡмаған, ти. Бисараны өшкөртөп тә ҡарағандар шикелле, эшкә инмәне.

С ә р б и. Өшкөртөп тигәндән иҫкә төштө әле, теге эш буламы, Йыһан әбей?

Йыһан. Булды, Сәрби балам. Алып уҡ килдем. *(Ситәк кунысынан бер шешә май сығарып өҫтәлгә куя.)* Бына, балаҡайым, мин инде вәғәҙә иткән эште ҡасан кисектергәнем бар?

Сәрби *(шешәне әйләндереп ҡарап)*. Быны ни эшләтергә һуң инде, әсергә түгелдер бит?

Йыһан. Юҡ, Сәрби балам, быны Кәримдең яратып ашай торған ашына һиҙҙермәйенсә генә, ҡушып бирергә кәрәк.

Сәрби. Ай алла, ул һиҙеп ҡуйыр бит?

Йыһан. Бер ҙә ҡурҡма, һиҙмәҫ, шунда уҡ әреп китә ул. Бына инде шунан һуң, һин күр ҙә мин күр, икенсе бисә алам тигән һүҙҙе теленә лә килтермәҫ, үҙең дә тынысланырһың, аҡһаҡ Әхмүш Фатимаһы, ниндәй аҙғын ирен, бер шешә май менән үҙенә ҡараткан да ҡуйған, ти. Һаман рәхмәт әйтеп бөтөрә алмай, барһам инде бына «ах» итеп тора. Саҙаҡаһынан ҡалдырмай, бүләгенән дә буш итмәй. Йыһан әбейем, тип, өҙөләнеп бөтә алмай. Шуны яһаған әбей әйтә: «Бынан һуң былай килешә торған яһамам инде, әле быныһын да һүҙ тыңлап, һинең хаҡыңа ғына яһайым, юғиһә һеҙҙең бай ҡатындарығыҙ миңә бер бүләк тә ебәргәндәре юҡ», ти. Мин әйтәм, яһа инде, Сәрби ул хаҡына ҡаршы тора торған кеше түгел, тим. *(Көлә.)*

Сәрби. Эше — эш булһа, бүләгенән эш ҡалмаҫ та уның. Быныһына күпме бирергә һуң инде, Йыһан әбей?

Йыһан. Ай алла, һин донъя күрмәгән ҡатын түгел бит. Бер кәрәк кеше, тағы кәрәк, тиһәң мулыраҡ бирһәң дә зыян итмәҫ.

Сәрби *(комод өҫтөнән бер аҙ аҡса алып)*. Йыһан әбей, хәҙергә шуны биреп торорһоң, тағы үҙе ҡайтҡас, буш итмәм. Мин быны йәшереп куям әле. *(Икенсе ишеккә сығып китә.)*

Йыһан *(аҡсаны ҡарап)*. Илле һум, үҙе ҡайтҡас тағы илле һум әлөкһә, ярамаймы ни ул? Иҫәрҙе бит уны сәсеп үҫтермәйҙәр, үҙе үҫә. Ул, һеҙҙең осраған бер сарафанға иҫтәре китеп йөрөй торған ирҙәрегеҙҙе бындай майҙың күлендә ҡойондорһаң да рәткә индерә алмаҫһың. Йә, миңә нимә, үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын. Миңә башҡаһы кәрәкмәй. Иллелектәр күберәк яуып торһа, шул еткән... *(Куйынына карап.)* Ә был әкәмтөкәмдәр һатылмаһалар ҙа үкенесе юҡ. Улар миңә ошондай йорттарға инергә ярҙамсы булып, тағылып ҡына йөрөйҙәр. Мәкәрйә башынан бирле бер нәмә лә һатҡаным юҡ, аллаға шөкөр, шулай ҙа кеҫәм бер ҙә йоҡармай әле. *(Яҡ-яғына ҡаранып, кеҫәһенән бер хат сығарып.)*

Ыныһын нисек тапшырырға икән инде? Теге Филәж байҙың прикащигы һабындар алған ваҡытта зинһар, инәй, ошо хатты Кәрим байҙың ҡыҙына тапшыра күр инде, буш итмәм, тип, бик инәлеп биргәйне.

Сәрүәр йүгереп инә.

Сәрүәр. Әсәй, сәй әҙер, әйҙәгеҙ әсергә.

Йыһан *(яҡ-яғына ҡарап)*. Аҡрын, балаҡайым, әсәйең бында юҡ әле. *(Хатты күрһәтеп.)* Сәрүәр балаҡайым, һиңә бер аманат бар ине. Шуны кеше юҡта тапшырайым әле. Мәле, балам. *(Хатты бирә.)* Илсегә үлем юҡ, ти бит, яуап-маҙар яҙһаң, бер ингәндә алып сығырмын.

Сәрүәр хатты алып, уҡымаҡсы була ла, Сәрбиҙең ингәнен күреп, йәшерә.

Сәрби *(Сәрүәргә)*. Ҡыҙым, был яҡты аҙыраҡ йыйырға кәрәк, атайың ҡайтып-нитеп төшмәһен. *(Йыһанға.)* Әйҙә, Йыһан әбей, беҙ сәй эсеп алайыҡ.

Йыһан төйөнөн ала, сығып китәләр.

Сәрүәр *(яңғыҙы хатты ҡулына ала, яҡ-яғына ҡаранып)*. Тағы ниндәй һүҙҙәр менән тулған икән инде? *(Уҡый башлай.)* «Йәнем кеүек күргән фәләнгә...» *(Хатты йомарлап.)* Һаман шул бер үк балыҡ башы сәйнәй ҙә сәйнәй, бөтмәгән фәлән булды инде. Исмаһам, кеше төҫлө хат та яҙа белмәй. *(Өҫтәл янына килеп, ултыра.)*

Шул ваҡытта Маһруй менән Хөсни йүгереп инәләр.

Икеһе бергә. Һөйөнсө, һөйөнсө, һөйөнсө! *(Сәрүәрҙе килеп тоталар.)* Нимә бирәһең, Сәрүәр, һөйөнсөһөнә.

Сәрүәр. Нимә бар һуң, әйтегеҙ әле, әллә апайымдың бәпесе бармы?

Маһруй. Кәрим ағайҙан телеграмма бар, бөгөн ҡайтып етермен, тигән, һөйөнсө! *(Телеграмманы бирә.)* Бына шулай, яҙған ти, һөйөнсө!

Сәрүәр. Ниңә һуң был асыҡ?

Хөсни. Уны күсер Вәли почтальондан астырып уҡытҡан. Барыбер кеше саҡырып уҡыталар, үҙең генә уҡып бир инде, тигән. Шунан почтальон асып уҡып биргән, сегодня едем, тигән. Һөйөнсө!

Сәрүәр. Туҡтағыҙ әле, улай булғас, әсәйгә инеп әйтәйем. Һеҙ был яҡты йыйыштыра тороғоҙ. *(Сыға башлай.)*

Хөсни. } Үҙем әйтәм, үҙем һөйөнсө алам. Һөйөн-
Маһруй. } сө, һөйөнсө! *(Сығып китәләр.)*

Сәрүәр *(яңғыҙ шатланып)*. Атайым да ҡайтып етә инде, ниндәй шатлыҡ. Мин уны нисек һағынғайным. Беләһе ине. Был юлы миңә мәкәрйәнән бүләк итеп нимә алып ҡайтыр икән? *(Шатланып.)* Аһ, атайым тиҙерәк ҡайтһын ине.

Шул ваҡыт Сәрби, Маһруй, Хөсни, Йыһан инәләр.

Маһруй. Һөйөнсө, һөйөнсө, Сәрби апай, һөйөнсө, Кәрим ағай!

Хөсни. Ҡайтам, тигән, һөйөнсө.

Сәрби. Ярар, ярар, балаҡайҙарым, һөйөнсөһө ҡасмаҫ, ҡайҙа һуң вокзалға ат төшөрәһе ине, ҡайһы поезд менән ҡайтам, тигән һуң?

Маһруй. Уныһын әйтмәгән, сегодня едем тигән. Шунан башҡа бер һүҙ ҙә яҙмаған, һөйөнсө.

Хөсни. Күсер Вәли почтальондан уҡытҡан, һөйөнсө.

Сәрби. Улай булғас, Вәлигә әйтергә кәрәк, ат егеп вокзалға төшһөн.

Йыһан. Илаһый хәйер-рәхмәте менән ҡайтһын инде. *(Ултырып доға ҡыла.)*

Сәрби. Кейәүҙәргә хәбәр итергә кәрәк, ай алла, бөтөнләй быуындарым ҡалтырап китте. Өйҙө ҡараштырығыҙ. Аш һалып ебәрергә кәрәк. Бәлки, хәҙер үк ҡайтып төшөрҙәр.

Маһруй. Мин Вәлиҙе вокзалға ебәрәм.

Хөсни. Мин барып Ғилми апайҙарҙан һөйөнсө алам, үҙҙәрен дә саҡырып ҡайтам. *(Йүгереп сығып китә.)*

Сәрби *(Сәрүәргә)*. Бар, ҡыҙым, бар, теге бүлмәләрҙе йыйыштырт, сәй янына сөсөнән генә булһа ла берәй нәмә әҙерләргә кәрәк. *(Йыһанға.)* Йыһан әбей, һин ултырып тор инде, мин сығып шул эштәрҙе аҙыраҡ ҡараштырайым. *(Сыға.)*

Сәрүәр ҙә сыға.

Йыһан *(яңғыҙ)*. Ғүмер тигәнең уҙа ла китә, мәкәрйә лә ҡайта башланы, китмәйенсәрәк торам әле, эштәре рәтле булған булһа, Сәрби буш итмәҫ. Мәкәрйә бүләгә тип берәй нәмә әләктереп булмаҫмы? Кәрим ул үҙе лә былай бик үк һаран кеше түгел, файҙа иткән булһа, берәй унлыҡты ысҡындырмаҫмы? Инде алла бойорған булһа, эш ходҡа китә. Бөтәһенең ирҙәре ҡайта. Уларҙың мәкәрйәһе ябылыуға минең мәкәрйәм асыла. Хәҙер инде теге майҙы ташып ҡына өлгөрт. *(Аяҡ тауышы ишетелә. Уҡына башлай, шул ваҡытта.)*

М а һ р у й. Һөйөнсө, һөйөнсө, һөйөнсө, Кәрим ағайҙар ҡайттылар. *(Бүлмәгә инеп китә.)* Һөйөнсө, һөйөнсө, Кәрим ағайҙар ҡайттылар.

Бүлмәнән С ә р б и, С ә р ү ә р, М а һ р у й сыға.

Йыһандан башҡаһы б ө т ә һ е л ә түр ишектән Кәримде ҡаршы алырға сығып китәләр. Тыштан эт өргән тауыш, шаулашҡан тауыштар ишетелә. Йыһан комод өҫтөндәге тартманан аҡса алып, ситек ҡунысына төшөрә. Бер аҙҙан К ә р и м, С ә р б и, С ә р ү ә р, М а һ р у й, Х ө с н и, В ә л и, Х ө с н ө т д и н килеп инәләр. Кәрим беренсе планға үтеп, сисенә башлай, башҡалар әйберҙәрҙе урынлаштыралар.

К ә р и м. Уф! Тамам эштән сығып арыным, ул Вәлие тағы әллә ни маташҡан, тиҙерәк төшмәгән.

С ә р ү ә р. Атай! Әллә Вәли төшөп өлгөрмәнеме?

К ә р и м. Өлгөрмәне шул, извозчик ялларға тура килде. Ярты юлда Вәли осраны ла күсеп ултырҙыҡ. Извозчикка ярты аҡсаһын ғына биргәйнем, алмай.

С ә р б и. Ни эшләп алмаған була, һиңә әйтәм?

К ә р и м. Нет, князь, ти, мин һеҙҙе өс һумға алып барырға ялландым, аҡсамды полный дауай, ти. Шул тиклем әйтеп ҡарайым, мин бит палавина дарога ғына бит, тим, юҡ, һис нәмә аңламай. Ул китте халыҡ йыйналып, ул китте... Ағай-эне күрә башланы, күрешә башланылар. Бөтәһе лә — «ҡайтып киләһегеҙ икән, хәйерле булһын, хәйерле булһын» тиҙәр. Ярай әле, бер таныш унтер осрап, тегене «Пачему таксинан артыҡ һорайһың?» тип, ҡыҙҙыра башламаһынмы, шунан һуң ғына саҡ ҡотолдоҡ. Етмәһә тағы күҙ асҡыһыҙ саң, бөтөнләй эштән сыҡтым. *(Креслоға ултыра.)*

С ә р б и. Һиңә әйтәм, күҙҙәреңде йыуаһыңмы? Ҡомғанда йылы һыу бар.

К ә р и м. Ярай, ярай, йыуынырмын. Уф алла, саҡ ҡайтып йығылдым бит. Мәшәҡәт һуң юлда йөрөүе лә. *(Ишек төбөнә ҡарап.)* Хөснөтдин, һин барып вокзалдан багаждарҙы алып ҡайт. Мә, кәпитәнсәһе *(Кеҫәһенән ҡағыҙ сығарып бирә.)*

Х ө с н ө т д и н *(ҡағыҙҙы алып).* Ярай, бай ағай. Хәҙер алып ҡайтырмын. *(Сығып китә.)*

Й ы һ а н. Һау ҡайттыңмы, балаҡайым, сәфәрең уңдымы? *(Кәрим менән күрешә лә, урынына ултырып, бик оҙаҡ доға ҡыла.)*

К ә р и м. Рәхмәт, Йыһан әбей, аллаға шөкөр, тиерлек сауҙа булды. *(Еңдәрен һыҙғанып сыға башлай.)* Йыһан әбей, һин китмәй тор, аҙыраҡ бүләк алып китерһең.

Й ы һ а н. Рәхмәт, Кәрим балаҡайым. *(Доға ҡыла.)*

Кәрим. Кызым, нәмәләрҙе сисә тороғоҙ.
Сәруәр. Ярай, атай...

Кыҙҙар нәмәләрҙе сисә башлайҙар.

Вәли. Бай ағай, ат кәрәкмәҫме, туғарам.
Кәрим. Ярай, туғар, хәҙергә кәрәге юҡ.

Вәли сығып китә.

Сәрби. Балаҡайҙарым, рәтләп кенә сисә күрегеҙ. Ватыла торған нәмәләре булмаһын.

Кәрим йыуынып инә. Сәрби таҫтамал бирә.

Кәрим. Йыуынғас бер аҙ хәл инеп китте әле.
Сәрби. Һиңә әйтәм, мин мунса ла яҡтырҙым әле.
Кәрим. Уныһы яраған.
Йыһан *(үҙ-үҙенә)*. Татар байына мунса булһа бөтә нәмә теүәлләнә инде ул.
Сәруәр. Атай, нәмәләрҙе сисеп бөтөрҙөк. Урындарынан үҙең ҡуҙғатаһыңмы?
Кәрим. Үҙем алырмын. *(Өҫтәл эргәһенә килеп, нәмәләрҙе аҡтара башлай.)* Бына быныһы, Сәрби, һиңә, ә быныһын килеүселәргә бүлгеләп бирерһең. Быныһын кейәүҙәргә бирергә кәрәк. Ә быныһын, ҡызым, һин иптәштәреңә таратырһың. Быныһы, Йыһан әбей, һиңә, доға ҡылырһың. *(Бөтәһенә төрлө киҫәктән нәмәләр сығарып бирә.)*
Йыһан *(бүләкте алып)*. Рәхмәт инде, Кәрим балаҡайым, бик ҙурлағанһың. Аллаһы тәғәлә малыңа бәрәкәт, йәнеңә һаулыҡ биреп, тапҡан малдарыңдың рәхәтен күрергә яҙһын. *(Доға ҡыла.)*
Кәрим *(бик эреләнеп)*. Ҡана әле, ҡызым, анауы сумканы алып бир. Унда һиңә тигән бик ҡиммәткә төшкән бүләк бар.
Сәруәр. Ниндәй бүләк икән ул, атай? *(Иркәләнеп сумканы алып бирә.)*
Кәрим *(сумканы аса башлап)*. Бына хәҙер күрерһең. Үҙе лә ҡиммәткә төштө инде. Мәкәрйәлә алтарай Садиҡ бай менән ярышта тарғи менән, биш йөҙ һумға тиклем ҡыуып алдым, ул хаҡ арттыра, мин арттырам, ул арттыра, мин арттырам... *(Бер туҡтауһыҙ шап-шоп иттереп өҫтәлгә һуға.)*
Сәрби. Йә, шунан һуң?

Бөтәһе лә Кәримгә ҡарап тораҙар.

Кәрим. Шунан һуң, шул. Теге Садиҡ байға бирмәйенсә биш йөҙ һумға һуғып алдым бит. Бөтә алтарай

йортон шартлаттым. Үҙемә алтарай яһаусы еврей һуңынан: «Ай-һай, Кәрим Хисаметдинович, үҙең иллә задорный икәнһең, тәки һүктың бит», — тигән була. *(Сумканы асып бер төргәк ала. Торғәктән әллә нисә ҡағыҙҙарҙы алып иҙәнгә ырғыта башлай. Кәримдең ырғытҡан бер ҡағыҙын ҡыҙҙар йыя баралар.)* Бына, ҡыҙым, һиңә мәкәрйә бүләге. *(Ҡул усына күтәреп.)* Шәп бит, ә? *(Мактатаһы килгән кеүек, бүлмә буйынса үтә.)*

Б а ш ҡ а л а р. Уйй... бик һәйбәт икән!

К ә р и м. Һәйбәттер шул. Биш йөҙ һум бит ул үҙе лә. Йә әле, ҡыҙым, аяғыңа яраймы икән, кейеп ҡара.

С ә р б и. Ярамайынса һуң, ярай, ярай.

С ә р үә р *(ситеген һалып ырғытып, аяғына башмағын кейә.)* Ярай, ярай, атай, үҙемә үлсәп теккән кеүек, тап-таман. *(Итәктәрен күтәреп, аяғына ҡарай.)*

Й ы һ а н. Ҡотло булһын инде, ҡыҙым. Сәрүәр, атайың бик ҙурлаған, рәхмәт әйт инде. Йән тыныслығы менән кейергә насип итһен.

С ә р үә р. Рәхмәт, инәй.

М а һ р уй. Бигерәк матур инде, уҡалары, уҡалары ут кеүек ялтырап торалар, етмәһә үҙеңә ниндәй кәлешә тағы!

Х ө с н и. Үҙеңә үлсәп теккән төҫлө. Ҡойолоп ҡуйған кеүек, һыланып ҡына тора.

С ә р үә р *(атаһы янына барып)*. Атай, рәхмәт һиңә.

К ә р и м. Бар, ҡыҙым, ҡыуаныс менән кейеп туҙҙыр.

Сәрүәр ситектәрен алып, ҡыҙҙар менән сығып китәләр.

С ә р б и. Һиңә әйтәм, аш әҙер, ашап алмайһыңмы? Унан һуң мунса ла өлгөргән. Мунсанан һуң бер аҙ ял итеп алырһың.

К ә р и м. Ярай, хәҙер ашарбыҙ. Телеграмма ғына яҙып алайым. *(Өҫтәл янына барып яҙа башлай.)*

С ә р б и. Йыһан әбей, китмәй тор, ашап китерһең. Мин аш ҡына ҡарап инәм. *(Сыға.)*

К ә р и м *(яҙып бөтөрөп үҡый)*. Нижгородский ярминка номера Волга. Маруся Петровна, блогополучин пришол. Без тебя скучно письмо пиши, скоро Мәскәү приедим там увидимся. Кәрим. *(Ҡағыҙҙы бөклән, кеҫәһенә һалып.)* Бөгөн үк һуғырға кәрәк. Йә, вәғәҙәһеҙ тип үпкәләй башлар. *(Йыһанды күреп.)* Был шайтан әбей бында ултыра икән дә баһа. Әл дә артыҡ ыҫкындырып ебәрмәнем. Ярай әле, минең һымаҡ урыҫса белмәй, юҡһа эш харап ине.

С ә р б и *(инеп)*. Һиңә әйтәм, ашты ултырттым.

К ә р и м. Хәҙер, хәҙер. Әйҙә, Йыһан әбей, аш ашарға. *(Сыға.)*

Й ы һ а н. Рәхмәт, Кәрим балаҡайым, үҙегеҙ ашағыҙ. Әле юлдан ҡайтҡан кеше аҙыраҡ һүҙҙәрегеҙ ҙә барҙыр. Иркенләп ашағыҙ. *(Доға ҡыла.)* Бик рәхмәт, саҡ ҡына ла ҡапҡым килмәй.

С ә р б и. Йыһан әбей, әллә мунса инеп сығаһыңмы? Ҡайтҡас, иркенләп ашар инең.

Й ы һ а н. Бик яҡшы булыр, Сәрби балаҡайым, йомшарып китер инем. Был арала әллә ни эшләп арҡа-ҡүҙәктәрем һыҙлап тора.

С ә р б и. Улай булһа, Йыһан әбей, һин бар. Бөтә нәмә әҙерләнгән. Мәйештә ҙур ауыҙлы һелте, ләүкәлә миндек. Тәҙрә төбөндә һабын менән йыуынса. Тәндәреңде ҡыҙыл башлы сөлгөгә һөртөрһең, кәрәк булһа балалар ҡатыҡ та алып барырҙар. Ашыҡмайынса ғына йыуын. Әле үҙенең тамаҡланаһы ла бар. Ярай, мин сығайым инде.

Й ы һ а н. Рәхмәт, Сәрби балаҡайым, аллаһы тәғәлә донъя ахирәт дәүләттәрегеҙҙән айырмаһын.

С ә р б и сыға. Музыка «Мөхәммәдиә» көйөн уйнай.

Хоҙайым, рәхмәтең бик киң, ки попты әйләһәң мөьмин,
Ошо аҙғын бәндәләр булмаһа, нишләр инем һуң мин.
Барып мунсаһына инәйем, ки байҙар ҡөҙрәтен күрәйем,
Шәфҡәт ҡыл үҙең раббым, әгәр ғ сын булыр булһаң.

Й ы һ а н сығып китә. Музыка «Башмағым» көйөнә уйнай башлай. С ә р ү ә р, М а һ р у й, Х ө с н и йүгерешеп инә. Сәрүәрҙең ҡулында башмаҡ. Сәрүәр башмаҡты ҡулына күтә п йырлай.

С ә р ү ә р.

Башмағымдың башы башҡа,
Кейеп йөрөрмөн һәр ашҡа.

М а һ р у й.

Баҫып йөрөмә ваҡ-ваҡ ташҡа,
Тиҙ тишелер табандары.

С ә р ү ә р *(башмаҡты өҫтәл өҫтөнә ҡуйып, ситтән карап йырлай.)* Ниндәй матур күренәләр
Алыҫтан ҡараған саҡта.

М а һ р у й
Х ө с н и } Ем-ем итә уҡалары
Йондоҙҙар шикелле хатта.

Музыка туҡтай.

Сәрүәр. Әй, хоҙайым, онотҡанмын да, әсәй Йыһан әбейгә әсе ҡатыҡ алып барырға ҡушҡайны бит. Әйҙә әле, Маһруй, алып барып ҡайтайыҡ.

Маһруй. Ҡайҙа һуң Йыһан әбей?

Хөсни. Мунсала йыуынып ята.

Сәрүәр. Бар әле, Маһруй, теге бүлмәнән әсе ҡатыҡты ал да алып барайыҡ, йә әсәйем асыулана башлар.

Хөсни. Әйҙәгеҙ китәйек, мин дә барам.

Сәрүәр. Әйҙә. *(Сыға башлай.)*

Хөсни. Ә башмаҡ шунда ҡаламы ни?

Сәрүәр. Хәҙер инәбеҙ бит, тороп торһон шунда. *(Башмаҡ янына барып йырлай.)*

Һау булып тор, башмаҡҡайым,
Хәҙер киләм, матурҡайым.

Маһруй. Әйҙә тиҙерәк, Сәрүәркәйем, Йыһан әбей көтәлер бит.

Хөсни. Кәрим ағайҙың да мунса инер ваҡыты етә бит.

Музыка туҡтай. Сығып китәләр. Бер аҙҙан, ҡағыҙға төргән бик күп нәмәләр тоткан хәлдә, Фәлимьян инә.

Фәлимьян. Әссәләмәғәләйкүм — әссәләмәғәләйкүм! Был бүлмәлә юҡ та баһа һис бер кем.

Әһем! Әһем, ҡайҙа һеҙ,
Әһем! Әһем, ҡайҙа һеҙ?
Сәрүәрҙе күрә алмаһам
Эш файҙаһыҙ.

(Ҡаранып.)

Былар ҡайҙа дәмөккән,
Былар ҡайҙа дәмөккән?
Тиҙ ҡайт, тиеп
Ебәрҙеләр.

(Яҡ-яғына ҡаранып.)

Бере̂һе лә күренмәй. Бая бер аҙ нәмәләр алып, бер малайығыҙ арҡыры ебәрһегеҙ, тип, лавкала ҡалдырғайнылар. Филәж ағай Вәхитовты ебәрмәксе булғайны ла, мин әйтәм, Филәж ағай, аптекаға ла бараһым бар ине, үҙем генә индереп сығайым. Бай ни, ярай, тип, биреп ебәрҙе. Бындай ергә шундай һылтауҙар менән генә инмәһәң, башҡаса мөмкин түгел инде. *(Ҡаранып.)* Ниңә һуң

былар бересһе лә күренмәй? Әллә ер йоттомо, үҙҙәрен? Йыһан әбей теге хатты тапшырҙымы икән? Туҡта әле, ултырып торорға кәрәк. *(Ултыра.)* Ну һуң, ҡырағай ҡыҙ ҙа был Сәрүәр. Нисә тапҡыр хат яҙҙым. Шунда бер яуап та бирмәй бит. *(Өҫтәлдәге башмаҡты күреп.)* Башмаҡ, ә үҙе өҫтәл өҫтөндә, күрәһең, бигерәк ҡәҙерле кешенекелер инде. Юғиһә былай уҡ түргә менмәҫ ине. *(Уйға ҡалып.)* Ә, белдем, моғайын, Сәрүәрҙекелер! Туҡта әле, ҡыҙыҡ итәйем, ҡыҙыҡай, мин һине. *(Башмаҡты алып, күйынына тыға.)* Бына хәҙер башмағыңды эҙлә инде! Көндәҙ сыра яндырып эҙләһәң дә тапмаҫһың.

Музыка «Баламишкин» көйөн уйнай. Йырлай.

Нисә тапҡыр хат ебәрҙем, яуап көттөм үртәлеп,
Эҙлә инде башмағыңды, йөрөһәң мороноң күтәреп.
Көлөп йөрөгән инең минән, инде мин көләм һинән.
Һәр бер һыңар башмағыңды ун ҡат үптермәй бирмәм.

Артҡан Вәлизең тауышы ишетелә, Фәлимьян ҡурҡынып китә.

Тиҙерәк кәрәк шылырға, тотолмай ҡотолорға,
Күп маташһаң, бында мөмкин тотолорға.

(Уйланып.) Туҡта әле, яҙып ҡалдырырға кәрәк. Йә бер әйһенә япһарып гөнаһлы булырҙар. *(Яҙа башлай.)* Мин фәлән ибне фәлән өҫтәл өҫтөнән теге башмаҡты урлап сыҡтым. *(Көләмде күйып.)* Булды бына хәҙер эҙләгеҙ инде фәләнде. *(Яҡ-яғына ҡаранып, аяҡ остары менән генә баҫып сығып китә.)*

Бер аҙҙан ҡулына миндек тоткан, шәлен тартпһеҙ рәүештә башына һалған Йыһан инә лә диванға килеп ултыра.

Йыһан *(миндеген аяҡ араларына күйып).* Рәхмәттор генә яуһын был Сәрбигә. *(Доға ҡыла.)* Мунсалары шул тиклем яҡшы инде, бер ҙә әйтеп бөтөрөрлөк түгел, ул парын әйтерһеңме, һелтеһе тиһеңме, ул һәйбәт ҡайын миндеге — гөж-гөж килеп тора инде.

Сәрүәр, Маһруй, Хөсни инәләр.

Маһруй. Йыһан инәй, мунса яҡшы булдымы?

Йыһан. Бик шәп булды, рәхмәт, балаҡайҙарым.

Сәрүәр. Еҫ теймәнеме?

Йыһан. Юҡ, еҫтең әҫәре лә юҡ. Бик һәйбәт.

Хөсни *(өҫтәл янына барып).* Бындағы башмаҡ ҡайҙа?

Сәрүәр. Ә? *(Аптырап ҡала.)* Бәлки... Әсәйем йыйып ҡуйғандыр. Туҡта әле, һорап сығайым. *(Сыға.)*

Бер аҙҙан һуң шаулашып Сәрби, Сәрүәр, Кәрим инәләр.

Сәрби. Мин алманым, балаҡайым, ҡайҙа ҡуйған инең һуң?

Сәрүәр. Бына бында ғына ҡуйып, Йыһан әбейгә ҡатыҡ алып барырға ғына сығып киткәйнек. Ҡайтһаҡ, башмаҡ юҡ.

Кәрим *(асыуланып)*. Башмаҡ юҡ, йоҡлап йөрөйһөгөҙ шул. Берәйһе инеп алып сыҡҡандыр шунда. *(Ҡыҙҙарға.)* Һеҙ бында инегеҙме?

Маһруй.
Хөсни. } Юҡ, беҙ ҙә сыҡҡайныҡ.

Йыһан. Илаһи хоҙайым, был ниндәй бәлә тағы? *(Доға ҡыла.)*

Кәрим *(Йыһанға)*. Һин бында инеңме?

Йыһан. Юҡ, Кәрим балаҡайым, күрмәнем, мин әле яңы ғына мунсанан сыҡтым, алла рәхмәт итһен, был мунса бик яҡшы булды.

Кәрим. Фу, шайтан ҡарсығы, бер туҡтауһыҙ доға ҡыла ла ҡыла. Мин һинән һорайым бит: бурҙы күрҙеңме?

Сәрүәр. Эй хоҙайым, башмаҡҡайым шулай уҡ юғалырмы икән ни?

Шул ваҡыт Вафа менән Филми инәләр.

Вафа. Ни булды, нимә бар, иҫәнме ҡайным? Һау ҡайттыңмы? *(Күрешәләр.)*

Кәрим. Һау, һау. *(Асыуланып йөрөй.)*

Филми. Нимә булды, ниңә әйтмәйһегеҙ? Иҫән ҡайттыңмы, атай? *(Күрешә.)*

Кәрим. Иҫән, иҫән...

Вафа. Зинһар, һөйләп бирегеҙсе, нимә булды һуң?

Музыка «Езнәкәй» көйөн уйнай.

Сәрүәр. Атай миңә мәкәрйәнән. *(Илай.)*

Хөсни. Бүләк итеп башмаҡ алған, абзыҡай.

Вафа. Зинһар һөйләп бирһәнә, балдыҙым, яңғыҙым.

Филми. Һөйләп бөтөрһәнә, һылыуым?

Вафа. Балдыҙым, яңғыҙым. *(Кәримгә ҡарап.)* Ниҙәр булды һөйләп бирсе, ҡайныҡай?

Филми. Ниңә әйтмәйһең, беҙгә уны, атаҡай?

Сәрби. Беҙ үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ, ҡыҙым, кейәү балаҡай.

Йыһан. Минән генә күрмәһәләр ярар ине, аллаҡай.
Сәрүәр. Атай бүләк итеп алған башмаҡты,
Урлап сығып киткәндәр шул, еҙнәкәй.
(Илай.)

Вафа *(Сәрүәрҙе йыуатып)*. Ай, ниндәй ҙур бәхет-һеҙлек, балдыҙым, яңғыҙым.

Маһруй, Хөсни } Ҡайғырма табылыр Сәрүәр.

Вафа. Балдыҙым, яңғыҙым. *(Ҡәримгә.)* Полицияға хәбәр итәйек, ҡайныҡай.

Филми. Бәлки бур, табылыр ине, атаҡай.

Кәрим, Сәрби } Уныһын үҙегеҙ ҡарағыҙ, ҡыҙым, кейәү, балаҡай.

Йыһан. Мине тентей күрмәһендәр, китәйем тиҙ-рәк, аллаҡай.

Музыка туҡтай, ишектән Вәли килеп инә.

Вәли. Кәрим ағай, яңы ғына һеҙҙе бер кеше һорап килгәйне. Күрҙеңме?

Кәрим. Ниндәй кеше ул? Кем ул, нимә тине? Моғайын, шул бур булғандыр. Ах, һеҙ әрәм тамаҡтар, үҙ күҙҙәре менән оҙатып өйгә бур индергәндәр бит.

Вафа. Эҙләп ҡайтабыҙмы, ҡайным?

Кәрим. Эҙләргә, эҙләргә!

Музыка «Башмағым» көйөн уйнай, йырлайҙар.

Киттек башмаҡты эҙләргә,
Бурҙың артынан күҙләргә,
Эй хоҙайым, үҙең ярҙам
Итә күр инде беҙҙәргә.

Сыға башлайҙар.

Сәрүәр *(өҫтәлдәге яҙыуҙы күреп уҡый ҙа)*. Туҡтағыҙ, туҡтағыҙ, хат яҙып ҡалдырғандар, бур үҙ ҡулы менән яҙған булырға кәрәк. *(Хатты еҙнәһенә бирә.)* Мә әле, уҡып бир.

Вафа *(хатты алып уҡый)*. Мин, фәлән ибни фәлән, башмағыңды урланым.

Бөтәһе лә ҡарап торалар. Музыка «Башмағым» көйөн уйнай.

Вафа. Хоҙай һуҡҡан мәлгүн ҡараҡ.
Филми. Ҡайҙан торҙо икән ҡарап.
Кәрим. Табылмаһа эшебеҙ харап.
Сәрби. Ярҙам бирһен үҙе хоҙай.

Бөтәһе бергә.

Киттек башмаҡты эҙләргә,
Бурҙың эҙенән күҙләргә.

(Ҡулдарын юғары күтәреп.)

Эй хоҙайым, үҙең ярҙам
Итә күр инде беҙҙәргә.

Шаршау

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Шул уҡ Кәримовтар йорто. Шаршау күтәрелгәндә Сәрүәр, яңғыҙ, тәҙрә янында баҫып тора. Музыкаға ҡушылып йырлай.

Сәрүәр:

Эҙләп киттеләр башмаҡты,
Ҡара инде мин ахмаҡты,
Бер кешеһеҙ ҡалдырырға
Яраймы шунда башмаҡты?

Атайым әрләй туҡтауһыҙ,
Башмағыңды эҙләп тап, ҡыҙ,
Инде башым тамам ҡатты,
Ашаған ашым да татһыҙ. *(Илай.)*

Мин уны ҡайҙан эҙләйем,
«Фәләнде» ҡайҙан беләйем,
Хурлыҡҡа нисек түҙәйем,
Хоҙайым, ятып үләйем!..

Йыһан *(инеп)*. Сеү, Сәрүәр, сеү, был ни эшләүең, һиңә хат бар, йөрәккәйем.

Сәрүәр *(ҡулын һелтәп)*. Фәләнибни фәләндәндер, зинһар бирмә, инәкәйем! *(Икенсе яҡҡа күсә.)*

Йыһан *(ирония менән)*. Сеү, балам, сеү, ҡырағайланма, улай бик эре ҡыланма.

Сәрүәр *(ялынып)*. Атай белһә, яҡшы түгел, зинһар мине утҡа һалма.

Йыһан *(яҡын барып)*. Илама, балам, сабыр ит, тик шайтандар сабырһыҙҙар. Минең һүҙҙәрҙе тотһаң, бәлки, башмағың табылыр.

Сәрүәр *(ялынып)*. Әйт, инәкәй, ниҙәр кәрәк, ни теләһәң итәм бүләк. Һин бит, инәй, хайран зирәк, табып бирсе башмағымды.

Йыһан *(көлөп).* Белəһең бит, мин бер ҡатлы, мə əле, уҡы ошо хатты. *(Хатты бирə.)*

Сəрүəр. Тағы ни күрермен икəн, йөрəгемə уттар яҡты.

Ҡыҙҙар. Сəрүəр, Вəли ағай ҡайтты, яңы ғына инеп əйтте. Ҡала буйын эҙлəгəндəр, тапмағандар башмағыңды.

Йыһан *(асыуланып).* Ул тилеләр ҡайҙан тапһын, ер йотҡоро башмағыңды.

Музыка туҡтай.
Кəрим тауышы: «Унда һинең ни эшең бар, урыныңда бул».

Ҡыҙҙар. Эй хоҙайым, Кəрим ағай асыуланып ҡайтҡан ахыры.

Күрҡып сығып китəлəр. Йыһан менəн Сəрүəр урындарында ҡалалар. Кəрим асыуланып инə лə, кейемдəрен төрлə яҡҡа ырғытып, изəн буйлап уфылдап йөрөй.

Йыһан *(үҙ алдына).* Бик асыуланып ҡайтҡан, ҡыҙҙырып сығармаһа ярар ине.

Кəрим *(асыулы тауыш менəн).* Нимə һин унда мығырлап ултыраһың? *(Сəрүəргə.)* Бар, əсəйеңə əйт, бында инһен, нимə ҡатып тораһың?

Сəрүəр. Хəҙер, атай. *(Сығып китə.)*

Йыһан. Мығырламайым, Кəрим балаҡайым, доға уҡып ултырам, илаһи, малдарыңа бəрəкəт бир.

Кəрим. Бөтмəҫ һинең доғаң, үксəңде күтəрһəң дə ваҡыт инде.

Йыһан *(үҙ-үҙенə).* Эләктереп кенə сығармаһа ярар ине. Бигерəк ҡыҙып ҡайтҡан. Нисек сығып китергə инде?

Шул ваҡытта Сəрби инə.

Сəрби. Ай алла, һиңə əйтəм, ҡайттыңмы ни? Аш өйөндə эштəр ҡарай торғас, белмəй ҙə ҡалғанмын. *(Йыһанға.)* Нихəл Йыһан əбей, иҫəн йөрөйһөңмө?

Кəрим *(асыуланып).* Ярай, башҡа ваҡытта һайрашырһығыҙ, бөгөн генə күрмəгəнһегеҙҙер бит Йыһан ҡарсыҡты, ул илле йылдан бирле — Йыһан инде. *(Йөрөнə.)*

Сəрби. Ни эшлəүең был, һиңə əйтəм?

Кəрим *(ҡысҡырып).* Ҡарышма миңə, мин тиремə һыя алмайым.

Йыһан. Əйҙə... Сəрби балаҡайым, озатып ҡына ебəр, ирҙəрҙе асыуландырыу ярамай ул. Кəрим балам, алла малыңа бəрəкəт бирһен. *(Сыға.)*

К ә р и м. Сәнселеп китһәнә, ен ҡарсығы! Һине күргәм килеп кенә тормай әле.

С ә р б и *(Кәримгә ҡарай)*. Ни булды, һиңә әйтәм, бик төҫөн үҙгәргән.

К ә р и м. Көнө буйы ҡалала ашамайынса сабып йөрөһәң, һин дә үҙгәрерһең. Убырлы ҡарсыҡтар менән ғәйбәт сәйнәү түгел бит ул. Кермәгән часть ҡалманы, күрмәгән урядник ҡалманы. Ул, теге ужым боламығы, тағы әллә ҡайҙа айырылып юғалды.

С ә р б и. Кемде әйтәһең, һиңә әйтәм?

К ә р и м. Кемде булһын, кейәүеңде әйтәм. Китте лә юғалды. Әллә тағы ер йотто үҙен.

Шул ваҡытта В а ф а инә.

С ә р б и. Бына үҙе лә ҡайтты. Һине генә һөйләп тора инек әле, кейәү.

К ә р и м *(ултырып)*. Ҡайҙа йөрөнөң? Ни әшләп бик оҙаҡ йөрөнөң?

В а ф а. Ҡайныҡай, мин йөрөмәгән ерҙе ҡалдырманым инде. Талчокты өс ҡат ураным. Яңы биҫтәгә барҙым. Абурка Мәхәммәтйәнгә лә инеп, күҙ-ҡолаҡ бул әле, тип әйтеп сыҡтым.

К ә р и м. Хуш, тағы?

В а ф а. Баҙарҙа ағай-эне әйтә, ҡараштырғыларбыҙ ти, бөтәһе лә ишеткәндәр икән. Полицияға һин әйттеңме, ҡайныҡай?

К ә р и м. Мин әйттем, мин, мин әйтмәйенсә уның артынан кем йөрөһөн? Хурлыҡ бит, шул тиклем тартышып алған нәмәңде урлаһындар имеш.

В а ф а. Әйтмә лә инде, ҡайныҡай. Садиҡтарҙың прикащигы әйтә: Кәрим ағай беҙҙең менән ярышып алғайны. Үҙенә насип булмаған икән, ти. Мәкәрйәлә бер генә нәмә ине бит, ти...

К ә р и м. Бер шул, бер булғанға эҙләйем дә, табырмын да. Мин, мин... полицияны аяҡҡа баҫтырырмын, эттәр менән эҙләтермен. *(Сәрбигә.)* Бар, саҡыр Вәлиҙе.

С ә р б и. Хәҙер, һиңә әйтәм.

К ә р и м *(Вафаға)*. Һин хәҙер онсо Фәхригә бар. Ваҡиғаны бәйнә-бәйнә һөйләп бир, ҡайным буш итмәм, тип әйтте тиген, Сафиҙарҙың юғалған нәмәләрен дә шул табып биргәйне бит. Уларға тегендәйерәк халыҡтар төшкәләп йөрөй имеш, ти...

В а ф а. Ярай, ҡайныҡай, сәйҙән һуң барып ҡайтырмын.

К ә р и м. Ниндәй сәй бындай ваҡытта? Бына мин иртәнән бирле сәйһеҙ сабам, әйҙә бар, ҡайтҡас эсерһең.

В а ф а. Ярай улай булһа, хәҙер киттек. *(Сыға башлай.)*

К ә р и м. Ә, туҡта әле, туҡта.

В а ф а. Нимә, ҡайныҡай.

К ә р и м. Ярар, бар инде, бар, шулай тиген, буш итмәм, тип әйтте тиген.

В а ф а. Ярай, ярай, шулай тип әйтермен инде. *(Сыға башлай.)*

К ә р и м. Туҡта әле, туҡта, мин унда үҙем барырмын, һин барма, һөйләй белмәҫһең.

В а ф а. Ярай улай булһа, бармайым, ҡайныҡай.

К ә р и м. Йә, хәйерле булһын, йә, бар инде, бар. Онотма, буш итмәм, тип әйтте тиген, яраймы? Бар, тиҙ йөрө.

В а ф а. Ярай, шулай тиҙ булырмын. *(Сыға.)*

К ә р и м *(ултырып)*. Уф, тамам кешелектән сығып, алйып бөттөм бит... Әйтергә генә аннат, ярты көн эсендә бөтә ҡаланы әйләнеп сыҡ әле. Иң элек барҙым первый часҡа, унда, таныш приставты күреп, уға һөйләп бирҙем, ул инде бик тырышырмын, тип, вәғәҙә бирҙе, телефон менән бөтә частарҙы күҙ алдында әйтеп сыҡты, уға ғына ышанмайынса, бөтә частарға үҙем йөрөп сыҡтым. Әллә ниндәй бурҙар башлығын күреп бөттөм, бөтәһенә һөйләнем. Әгәр ҙә шул башмаҡты тапһағыҙ, полный-полный на чай, тинем. Етмәһә, бөтә ҡалаға хәбәр таралып өлгөргән. Кемде генә күрмәйем: «Кәрим ағай, башмаҡ эҙләйһегеҙме? Бик ҙур ҡазалы булғанһығыҙ икән, хәйерле масибәт булһын инде»,— тиҙәр. Ҡайһы береһе шунда теш ыржайтып көлөп ҡала. Бына көрәк булһа, сыҫҡанға үлем, бесәйгә көлкө. Һин бында ут йотоп йөрәйһөң, ә улар һинән көләләр. Әйҙә көлһөндөр, барыбер тапмайынса ҡуймам.

Сәрби, Вәли инәләр. Сәрби өҫтәл эргәһенә килеп ултыра. Вәли ишек төбөндә ҡала.

В ә л и. Һин саҡырғайныңмы, бай ағай, ни бойораһығыҙ?

К ә р и м. Ни бойораһың, ни бойораһың. Әрәм тамаҡ, ҡайҙа йөрөйһөң, саҡырғанда булмайһың?

В ә л и. Бай ағай, мин бик арып ҡайттым да, аҙыраҡ ҡапҡылап алайым, тип ултырғайным. Абыстай саҡырғас та индем.

К ә р и м. Шул, шул ашауҙан башҡаны белмәйһегеҙ. Арып нимә эшләнең? Бына ни тиклем йөрөнөм, һаман да ашамайым, һеҙҙә шул тамаҡ ҡайғыһы, аш булһа,

башҡа нәмә кәрәкмәй, һөйлә ҡайҙарҙа булдың? Кемдәрҙе күрҙең?

Вәли. Мин, мин, иң элек бөтә дворҙарҙы йәрәп сыҡтым.

Кәрим. Хуш?

Вәли. Унан һуң үҙебеҙҙең таныш байҙарҙың күсерҙәренә һөйләп сыҡтым.

Кәрим. Хуш?

Вәли. Унан һуң мөйөш һайын бөтә извозчиктарға йәрәп әйтеп сыҡтым, теге сатан Ғәниҙе күреп, уға әйттем. Баҙарға сығып ҡыяр һатыусы мәрйәләргә һөйләнем. Күҙ-ҡолаҡ булығыҙһана, бик ҡиммәтле нәмә ине, бай полный на чай бирер, тинем.

Кәрим. Йә, хуш?

Вәли. Шул, унан һуң өйгә ҡайттым, ҡайтышлай Ғимаҙи сәйханаһына инеп, половойҙарға әйтеп сыҡтым, «ярар, ҡарарбыҙ» тинеләр.

Кәрим. Шул ғынамы?

Вәли. Шулай ғына шул, бай ағай. Әллә тағы йәрәп ҡайтайыммы?

Кәрим. Етәр, бар хәҙер ат ек, бараһы ерем бар.

Вәли. Ярай, хәҙер. *(Сыға.)*

Сәрби. Һиңә әйтәм, сәй әҙерләйемме? Бик һыуһаған һыңдыр инде.

Кәрим. Ниндәй сәй ул? Иҫерҙегеҙ инде шул сәйегеҙ менән. Сәйеңде, ана, ҡайтҡас кейәүеңә эсерерһең. Һеҙҙә сәй ҡайғыһы, миндә башҡа ҡайғы... Әй, һеҙ уның хәҙерен беләһегеҙме ни? *(Кыҙып.)* Бар, саҡыр Сәрүәрҙе.

Сәрби. Хәҙер, һиңә әйтәм. *(Сыға.)*

Кәрим. Бына ҡайғы юҡтан ҡайғы, бөтә ҡаланың иҫен китәрермен, тип кенә торғанда, шундай хәлдәр булып китһенсе. Был хурлыҡҡа нисек түҙергә кәрәк? Һис бер булышырлыҡ кешем юҡ, исмаһам. Кейәү балаҡай ебегән, хеҙмәтселәр ашауҙан бушамайҙар. Ҡатын булған нәмәм әллә ниндәй ен һуҡҡан ҡарсыҡтар менән ғәйбәт һатыуынан бушамай. Тамам аптыраттылар бит, уф...

Сәрби, Сәрүәр инәләр.

Сәрби. Әйҙә, ҡыҙым, атайың саҡыра һине.

Сәрүәр ишек төбөндә баҫып тора.

Кәрим *(ҡыҙып)*. Бына, ҡыҙым, һиңә шул: башмаҡты теләһәң ҡайҙан тап.

Сәрүәр. Атай, мин уны ҡайҙан табайым?

Кәрим. Урлата белгәс, таба ла белерһең, һин уны табырға тейешһең.

Сәрби. Һиңә әйтәм, ниңә ул тиклем ҡыҙаһың?

Кәрим. Һин миңә өйрәтмә, үҙ ҡыҙыңды өйрәт Оҙаҡламайынса ҡыҙыңды ла урлатырһың әле.

Вәли инә.

Вәли. Ат әҙер, бай ағай.

Кәрим. Ярай. *(Йыйына. Сәрүәргә ҡарап.)* Ҡара уны, ишетһен ҡолағың, башмағыңды тап, юҡһа минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ. *(Сәрбигә.)* Мин хәҙер ҡайтырмын. Кейәү ҡайтһа, китмәйенсә торһон. *(Сыға.)*

Сәрби. Ярай, ярай, һиңә әйтәм. *(Сыға.)*

Сәрүәр урындыҡҡа ултыра. Музыка «Башмағым» көйөн уйнай.

Сәрүәр.

Бер туҡтауһыҙ илай-илай,
Башмағым өсөн түгәм йәшем,
Тағы ла ниҙәр күрер икән,
Минең был бәхетһеҙ башым?

Ҡыҙҙар.

Насип булһа табылыр әле,
Илама, түкмә күҙ йәшең.

Сәрүәр *(зарланып)*.

Нишләйем һуң атай ороша
Башмаҡты табырға ҡуша.
Яңы ғына сығып китте,
Эсәйемде лә эрләне.

Ҡыҙҙар.

Беҙ ҙә ҡурҡып ҡарап торҙоҡ,
Йөрөгәндәрен арлы-бирле.
Китәйек, Йыһан әбей килһен,
Ойҙон өйгә инеп йөрөһөн,
Кемдә икәнлеген белһен ул,
Табып бирер башмағыңды.

Сәрүәр. Йыһан әбей бая килде, миңә тағы бер хат бирҙе. *(Кеҫәһенән хатты ала).*

Ҡыҙҙар. Ҡайҙа, Сәрүәр, уҡыйыҡ уны, белмәбеҙме кемдең ҡулы.

Сәрүәр. Фәлән ибне фәләндәндер, башҡа кемдән булһын инде.

Музыка туҡтай.

(Хатты уҡый.) «Һыу аллаһы барый, һағынмаҡтың зары. Һеҙки ғиззәтле йәнемдән артыҡ күргән фәләнгә күптән-күп, суҡтан-суҡ сәләмдәремде ирсал ит-

тегем бағында, тиҙлектә ҡауышыуҙы хоҙайҙан теләп ҡалам. Әммә бының бәгендә һеҙҙең тарафтан бик ҡайғылы хәбәр ишетеп, бик хафаландым. Атайығыҙ бүләк итеп алып ҡайтҡан берҙән-бер күҙ ҡараһы кеүек күргән башмағығыҙҙы урлағандар икән. Алла ахырын хәйерле итһен. Шулай, йәнем, өмөтөңдө өҙмәйенсә тор. Бәлки, насип булһа, башмағығыҙ табылыр. Әгәр ҙә минең һүҙемде ҡабул күрһәгеҙ, бөгөн кискә Батыр бабай баҡсаһына сығығыҙ, шунда мин һеҙҙе көтәп торормон! Зинһар-зинһар сыҡмайынса ҡалма, мин нисек булһа ла тырышып башмағығыҙҙы эҙләп табырмын. Ғәйеп итә күрмәгеҙ. Һүҙем күп ине, мохтасар ҡылдым.

Тәҙрә ҡормаларың селтәрме,
Араһынан елдәр үтерме,
Ҡулдарыңды ҡыҫып күрешмәгәс,
Хатҡа яҙып һүҙҙәр бөтөрмө.

Хуш, һау булып тор. Яҙыусы фәлән ибне фәлән».

Хөсни. Моғайын, Сәрүәр, был шул егет эшелер. Юҡһа бындай һүҙҙәр яҙмаҫ ине. Әллә баҡсаға сығып һорашаһыңмы?

Сәрүәр. Әйтә күрмәгеҙ, белмәгән-нитмәгән кеше менән нисек итеп һөйләшергә кәрәк?

Маһруй. Атаҡ, уның нимәһе бар? Тотаһың да һөйләшәһең. Унан һинең бер ерең дә кителмәҫ. Әгәр, бәхетеңә тура килеп, Ғилаж бай прикащигы булһа, ул ярамаҫ егет түгел.

Сәрүәр. Уныһы улай ҙа, минең бер ҙә күңелем тартмай шул.

Хөсни. Эйәләшкәс улай булмаҫ әле, сыҡ та ҡуй.

Аҙҡ тауышы ишетелә. Хатты йәшерәләр, Ғилми, Вафа инә.

Вафа. Нихәл, иҫән тораһыңмы, балдыҙым?

Сәрүәр. Һорама, хәлем бик ауыр, еҙнәкәй.

Ғилми. Ни булды һуң һылыуым һиңә?

Вафа. Балдыҙым-яңғыҙым.

Шул ваҡыт Сәрби инә. Ғилми Сәрби яныша барып йырлай.

Ғилми. Сәрүәрҙең бик кәйефе киткән, әсәкәй.

Сәрби. Ауырырға итәһеңме, балаҡай?

Вафа. Берәй нәмә кәрәкмәйме, балдыҙым-яңғыҙым.

Ҡыҙҙар. Ауырып китмәһен, хоҙайым.

Вафа. Балдыҙым-яңғыҙым.

Сәрүәр. Бер стакан һыу бирһәнә, апаҡай.

Вафа. Һалҡын һыу ярармы икән һуң, балдыҙым?

Ҡ ы ҙ ҙ а р. Һаҡлана күр, Сәрүәр йәнем!
В а ф а. Балдыҙым-яңғыҙым.
С ә р б и. Һыуҙы бик күп эсмә, ҡыҙым.
В а ф а. Тапма тотор, балдыҙым.
Ғ и л м и. Төҫтәреңдә бигерәк киткән.
В а ф а. Балдыҙым-яңғыҙым.
Ҡ ы ҙ ҙ а р. Әйҙә, Сәрүәр, бүлмәгә кер.
В а ф а. Балдыҙым-яңғыҙым.

Ҡ ы ҙ ҙ а р, С ә р ү ә р бүлмәгә инеп китәләр.

Беҙгә бик ваҡыт ҡайтырға, Ғилмекәй.

Ғ и л м и. Хисаметдинем илар инде, әсәкәй. Имеҙмәйенсә килгәйнем, буҫығып бөтөр балаҡай.

С ә р б и. Атаң ҡайтыр, ҡыҙым, һин дә китмә, кейәү балаҡай.

Й ы һ а н *(инеп)*.

Нихәл, ни эшләп тораһығыҙ?
Ниндәй кәңәштәр һорайһығыҙ,
Табылманымы башмағы,
Сәрүәр ҡайҙа һуң күренмәй?

В а ф а *(ситкә)*. Тағы килгән шайтан ҡарсыҡ, ен һуҡҡыры, һис иренмәй.

Йыһан беренсе пландағы креслоға килеп ултыра.

Хәҙер мин лавкаға барам, балдыҙға бүләктәр алам.

С ә р б и. Йөрөмәү көрәк ине юҡҡа расходланып, кейәү балам.

Й ы һ а н. Мин ҡаҙ ашап килгәйнем, һыу бирһәнә, Сәрби балам.

С ә р б и. Хәҙер, Йыһан әбей, бирәм. *(Сыға.)*

В а ф а. Был ни эшләп йөрөй һуң бирән?

Й ы һ а н *(Вафаға)*. Был һуң нимә мығырлана, миңә ҡарап алан-йолан.

В а ф а. Ярай, мин китәм лавкаға бая әйткән йомош менән.

Ғ и л м и *(Вафаға)*. Мин дә өйгә ҡайтып китәм, туҡта, бергә һинең менән. Һау булып тор, Йыһан әбей, мин хәҙер әйләнеп киләм.

Й ы һ а н. Йөрө инде кеше көлдөрөп арыш боламығы менән.

С ә р б и *(инеп)*. Оҙағыраҡ торҙом буғай, Йыһан әбей, һалҡын булып тамағыңа теймәһен тағы.

Йыһан. Рәхмәт балам. *(Әсә.)* Әй һыуһағанмын да инде. Хәмдиҙәрҙә ҡаҡлаған ҡаҙ ашағайным, бына ҡыҫтап-ҡыҫтап ашаттылар инде. Нисек һуң, Сәрби, башмаҡтың осо күренмәйме? Кәримьян өйҙә юкмы ни? Бая, инде ҡыҙҙырып ҡына сығармаһа ярар ине, тип, ҡотом сығып ултырҙы.

Сәрби. Әйтмә инде, Йыһан әбей, ул башмаҡ булманы, башҡа бәлә генә булды. Бая үҙенең дә асыуланып ҡайтыуы шул башмаҡ өсөн булған. Етмәһә, Сәрүәрем ауырып китте бит әле.

Йыһан. Нимә тинең? Сәрүәр ауырый тиһеңме? Ай алла, ниңә килгәс тә әйтмәнегеҙ. Ҡайҙа һуң ул Сәрүәр балаҡайым? Тәһәрәтем дә бар, аҙыраҡ өшкөрөп алайым әле, бәлки, шифа булыр, ай алла, белмәй ҙә торам икән.

Сәрби. Үҙ бүлмәһендә ятып тора ине әле. Булмаһа, инеп сыҡ, Йыһан әбей.

Йыһан. Инәм, инәм, ул ни тигән әш? Бына инмәйенсә яраймы һуң. Күгәрсенкәйем, ауырып киткән икән дә баһа.

Сәрби. Ярай, Йыһан әбей, һин инеп, Сәрүәр менән һөйләшеп ултыр. Мин хәҙер инермен. *(Сыға.)*

Йыһан *(каранып)*. Нисек итеп кенә шуны бөгөн баҡсаға алып сығырға инде? Әгәр ҙә был эште булдыра алһам, Филәж бай прикащигынан 25-лекте әләктерәм дә әләктерәм. Бисмиллаһи иррахман иррахим. *(Сыға.)*

Бер аҙҙан Кәрим, Вәли инәләр.

Кәрим. Һин тағы бында ниңә индең?

Вәли. Үҙең инергә ҡуштың бит, бай ағай!

Кәрим. Мин бит һиңә аҫтағы өйгә инергә ҡуштым, ә һин, мейеһеҙ тараҡан, һөйрәлеп бында менгәнһең.

Вәли. Яңылыш аңлағанмын, күрәһең, гәйеп итмәгеҙ инде.

Кәрим. Бар, бар, күп һөйләнеп торма бында.

Вәли сыға.

Сәрби! *(Сисенә.)*

Сәрби *(ингәндә абына)*. Нимә бар, һиңә әйтәм?

Кәрим. Ныйыр, алдыңа ҡарап йөрөй белмәйһең, кейәү ҡайтманымы?

Сәрби. Ҡайтты ла сығып та китте, һиңә әйтәм.

Кәрим *(асыуланып)*. Ҡайҙа китте тағы, мин һиңә әйтеп киттем: ҡайтһа мине көтмәй китмәһен, тинем. Сәрүәр ҡайҙа?

Сәрби. Үҙ бүлмәһендә ине, ауырыбыраҡ тора! Әле Йыһан инәй аҙыраҡ өшкөрәм тип, уның янына инеп киткәйне.

Кәрим *(асыуланып)*. Ниндәй Йыһан тағы ул? Нимә өшкөрә, кемде өшкөрә?

Сәрби. Ай алла, үҙебеҙҙең Йыһан әбей инде. Сәрүәрҙе өшкөрә, бәлки, шифаһы булмаҫмы икән, ти.

Кәрим. Өшкөрә, өшкөрә... Нимә белә ул һинең убырлы ҡарсығың?

Сәрби. Ай алла, һиңә әйтәм, ул ни тигән һүҙ? Бер яҡшынан, бер ямандан, тигәндәр. Ҡайҙан беләһең, бәлки, шифаһы тейер.

Кәрим. Файҙалы, ти, ул ҡарсыҡты ҡыҙың янында күберәк йөрөтһәң, уларҙың тыны тағы ла шифалыраҡ булыр, ҡыҙыңдың таҙага әйләнеүен һиҙмәй ҙә ҡалырһың. Самауырың бармы? Һыуһап үләм инде. Көнө буйы бер нәмә ашамай, эсмәй саптым. *(Ултыра.)*

Сәрби. Бар, бар, һиңә әйтәм, хәҙер өлгөрә. Мин сығып өҫтәл генә әҙерләтәйем.

Кәрим *(яңғыҙ)*. Бына бәхетһеҙлек, нимә генә эшләмәйем, һаман киреғә китә. Әле ат ектереп сыщиктар башлығына барғайным. Ул ҡатыны, бала-сағаһы менән урманға гуляниеға сығып киткән. Ҡайтҡас та беҙгә бара күрһен, бик йомошом бар ине, тип, атаһымы, бабаһымы шунда бер ҡартҡа әйтеп ҡалдырҙым. Ни эшләр, былай һүҙҙе ситкә ҡаҡҡаны юҡ ине. Теге ҡарт ҡына аңлатып һөйләй алһа, уныһы тағы ҡолаҡҡа ҡаты, бер нәмә ишетмәй, һин уға бер нәмә хаҡында һөйләйһең, ә ул үҙенә әллә нимә түкый. Уларҙан киткәс, барҙым Ғимази ундырға, уныһы тағы Кәрим ағай, ти, йәмәғәтем балаға ауырып ята, зинһар инде, ти, был хаҡта һөйләшер өсөн иртәгә рәхим ит, ти, бөгөн ваҡытым юҡ, ти. Унда ла эш сыҡмағас, киттем түҡ Шәрәфигә. Унда барһам, уныһы тағы ла лаяҡып иҫергән. Изәндә аунап ята. Унан ғына сығып проломный менән ашығып китеп барғанда, тарантастың күсере шарт итеп һынды. Ул бәхетһеҙлеге генә етмәгән, сәй өҫтәнә түкмаҡ — городовой килгән, һеҙ князь, ти, тарантасығыҙҙың хәлен белгәс, ҙур урамға инеү кәрәкмәҫ ине, ти. Күрәһегеҙ бит, бында йөрөүселәргә уңайһыҙлайһығыҙ, ти. Унан инде нисек кәрәк, шулай, тарантасты һөйрәп китеп кенә бара инем, осраны бит, иҫерек Хәйруш. Туҡтаны ла, давай аҡса, ти, минең эсергә аҡсам юҡ, ти. Һинең ҡорһағың бик йыуан, кеҫәң дә ҡалын, аҙыраҡ закатын сығарып кит әле, ти. Шул тиклем әйтеп ҡарайым, Хәйруш ҡустым, ағай-эненән яҡшы түгел, бар юлыңда бул, лавкама барырһың, тим,

юҡ бит, ебәрмәй ҙә, шабаш. Әгәр, ти, аҡса бирмәһәң, ти, эшеңде фаш итәм, тип, ҡысҡыра. Бына ен һуҡҡан кеше, Мәкәрйәгә киткәнсе теге аптекалағы йыуан мәрйә менән купальный янында һөйләшеп торғанды күргәйне. Һаман онотмай бит шуны. Уф алла, тамам эштән сыҡтым. *(Кеҫәһенән ҡағыҙ ала.)* Йәрәй торғас, телеграмманы ла бирергә онотҡанмын. Туҡта әле, Вәли арҡыры булһа ла ебәрергә кәрәк, йә үпкәләй башлар. *(Ишеккә.)* Вәли, Вәли!

В ә л и *(инеп)*. Ни бар, бай ағай?

К ә р и м. Мә әле, ошо телеграмманы алып барып ҡайт. Ҡайтҡас та кәпитәнсәһен индереп бирергә онотма.

В ә л и. Ярай, бай ағай. *(Сыға.)*

С ә р б и *(инеп)*. Һиңә әйтәм, сәй әҙер.

К ә р и м. Ярай, сутка булғанда бер сәй.

Ул сыға башлағанда, пальто яғаһын торғозған, йәшел күҙлектән, ҡулында кәкре башлы таяҡлы, кепкаһын баҫып кейгән, ҡултыҡ аҫтына бәләкәй генә эт ҡыҫтырған с ы щ и к б а ш л ы ғ ы инә.

Сыщик ингәс тә туп-тура Кәримгә бара ла, ситкә тартып, ҡолағына ниҙер әйтә.

К ә р и м. Әһә, булды. *(Сәрбигә.)* Бар, сығып тор, саҡырмайынса инмә лә, башҡаларҙы ла индермә.

С ә р б и. Ярай, һиңә әйтәм. *(Сыға.)*

К ә р и м. Рәхим итегеҙ, господин Попов.

С ы щ и к. Бөгөнгә Попов түгел, Иванов.

К ә р и м. Әһә! Господин Иванов, рәхим итегеҙ урындан.

С ы щ и к *(ултырып)*. Беҙҙе тыңлап тормайҙармы?

К ә р и м. Юҡ, юҡ, господин По... ә юҡ, Иванов, тыныс булығыҙ.

С ы щ и к. Ҡайтҡас та бабай хәбәр итте, шунда уҡ быны алдым да саптым. *(Эткә күрһәтә.)*

К ә р и м. Рәхмәт инде, Господин Иванов.

С ы щ и к. Как же, беҙҙең хеҙмәт шундай. *(Бик оҙаҡ тора ла.)* Әһә. *(Тороп иҙәндән бер бәләкәй генә суп киҫәге алып, кеҫәһенән лупа сығарып, төрлөсә ҡарай. Унан һуң эткә еҫкәтә. Һуңынан үҙе еҫкәй ҙә, Кәримгә күрһәтеп.)* Күрәһегеҙме?

К ә р и м. Юҡ, бер нәмә лә күрмәйем. Господин Иванов.

С ы щ и к. Әһә! *(Кеҫәһенән лупа алып, Кәримдең күҙенә килтереп.)* Ә хәҙер?

К ә р и м. Йөн киҫәге тип әйтәйемме, сәскә лә оҡшаған. Бесәй йөнө булырға кәрәк.

С ы щ и к. Артыҡ шауламағыҙ. Йөн, ҡайҙағы йөн, ни йөнө икәнен тиҙ беләбеҙ.

К ә р и м. Яҡшы, яҡшы, господин Иванов.

С ы щ и к *(урынға ултырып)*. Ваҡиғаны баштан уҡ һөйләп бирегеҙсе?

К ә р и м. Аҙыраҡ Мәкәрйә бүләге бар ине, әллә әҙерләтәйемме, күңеллерәк булыр.

С ы щ и к. Әһә! Не откажусь.

К ә р и м *(ишеккә барып)*. Сәрби, Сәрби!

С ә р б и *(аҡрын ғына тауыш менән)*. Ни бар, һиңә әйтәм?

К ә р и м. Мәкәрйә бүләгенән — берҙе, өйҙәгенән — икене, ашарға берәй нәмә, тиҙ бул.

С ә р б и. Хәҙер, һиңә әйтәм. *(Сыға.)*

К ә р и м *(ултырып)*. Һеҙ инде, господин Иванов, ваҡиғаны ишеткәнһегеҙҙер.

С ы щ и к. Беҙ ҙә ишетмәгән нәмә яраймы ул! Башмаҡ? Шулайҙыр бит?

К ә р и м. Тап үҙе, господин Иванов.

С ы щ и к. Ҡайҙан юғалды? Ҡасан, нисек, иртәнме, көндөҙмө, кемдәр күргәндәр. Бик тиҙ һөйлә.

С ә р б и *(әйберҙәр, эсемлектәр күтәреп инә)*. Һиңә әйтәм, үҙең урынлаштыр инде.

К ә р и м *(Сәрбиҙең ҡулдарынан әйберҙәрҙе ала)*. Ярай, үҙем ҡарармын, ишетһен ҡолағың, кеше ҡара индермә, китап асырға тип, Ғиләж мулла килмәксе ине, килһә, көтөп торһон, аҙ ғына шөғөлө бар, тиерһең.

С ә р б и. Ярай, һиңә әйтәм. *(Сыға.)*

К ә р и м *(эсемлек алып)*. Йәле, господин Иванов, Мәкәрйә бүләгенән аҙыраҡ ауыҙ итеп алайыҡ.

С ы щ и к. Әһә! Не откажусь! *(Тиҙ генә эсеп ебәрә.)* Ҡайҙан юғалды тиһегеҙ?

К ә р и м. Бына ошо канторка өҫтөнән күҙ асып-йомғанда ғына юҡ булды ла ҡуйҙы.

С ы щ и к *(тиҙ генә урынынан тороп, кеҫәһенән бикләмәле аршын сығарып, өҫтәлдең арҡыры, буйын үлсәй. Унан һуң, аршынды эткә еҫкәтеп, үҙе лә еҫкәй ҙә кеҫәһенә һала.)* Бынығы ла булды, хәҙер ҡараҡтың эҙенә төшә башланыҡ. *(Кәримгә ҡарап.)* Тағы ла ниҙәр әйтергә теләйһегеҙ? Ләкин ҡыҫҡа тотоғоҙ. *(Этен күрһәтеп.)* Беҙ күп һөйләнеүгә ҡарағанда, күберәк хәрәкәт итеүҙе артыҡ күрәбеҙ. *(Эткә закуска ҡаптыра.)*

К ә р и м *(араҡы һалып)*. Ниҙәр әйтергә теләйһегеҙ, тип, беҙ ни әйтергә теләһәк тә шул, тиҙерәк табып бирһәгеҙ икән инде. *(Кеҫәһен ҡапшап.)* Ә, туҡта әле, мин онотоп ебәргәнмен, һеҙгә бит эште башлап ебәрер өсөн аҙы-

раҡ расходҡа кәрәк булыр. *(Аҡса биреп.)* Хәҙергә ошоно алып тороғоҙ, унан һуң тағы күҙ күрер.

Сыщик *(аҡсаны йәһәт кенә алып).* Үҙем өсөн бер тин кәрәге юҡ, агенттар өсөн необходимо. *(Араҡы эсә лә канторкаға табан бик диҡҡәт менән ҡарай. Тиҙ генә һикереп тороп, канторканан ялтырауыҡлы бер сүп кисәге алып лупа аҡҡыры ҡарай башлай, һуңынан эткә еҫкәтеп, Кәримгә килтереп лупа аҡҡыры күрһәтә.)* Бына, таптым хәҙер, беҙҙең ҡулдан тиҙ генә ысҡына алмаҫ. *(Сүпте кеҫәһенә һалып.)* Тиҙ генә ысҡына алмаҫ. *(Эсә.)*

Кәрим. Зинһар тырыша күрегеҙ инде, юҡһа бөтөнләй әҙәм көлкөһенә ҡалам. Хеҙмәт хаҡы тураһында тыныс булығыҙ.

Сыщик. Беҙ *(әткә күрһәтеп)* өҫтөбөҙгә алған эште бер ваҡытта ла ослап сығармай ҡалғаныбыҙ юҡ, ул хаҡта тыныс булығыҙ, ә хеҙмәт хаҡы — чепуха. Башта эште бөтөрөргә кәрәк. *(Эсә.)* Унан һуң хеҙмәт хаҡы.

Кәрим. Онотоп ебәргәнмен, ҡараҡ бит хатты үҙ ҡулы менән яҙып ҡалдырған. *(Кеҫәһен ҡапшап.)* Ҡайҙа һуң әле?

Сыщик *(урынынан һикереп тороп).* Әһә! Бирегеҙ әле вещественный доказательство — самый важный.

Кәрим *(кеҫәһен ҡапшап).* Ҡайҙа китте һуң ҡәһәрең?

Сыщик. Табырға кәрәк, нипременно табырға. Ундай документ менән ҡараҡтың эҙенә бер сәғәт эсендә төшөргә була. *(Ултырып эсә.)*

Кәрим. Рәхим итегеҙ, рәхим итегеҙ, ҡыҫтарға ла онотам, бөтөнләй башым ҡатты. *(Кеҫәләрен ҡарап. Ҡағыҙ биреп.)* Бына рәхим итегеҙ.

Сыщик *(ҡағыҙҙы алып уҡый башлай).* Нежгородский йәрминкә, номера Волга, Маруся Петровна. *(Ҡағыҙға һуғып.)* Әһә! Булды.

Кәрим. Тукта әле, яңылыш булған. *(Ҡағыҙҙы алып.)* Әй, тауыҡ мейе эскән. Кейәүгә биргәйнем дә баһа. Бөтөнләй иҫтән сыҡҡан. Ул хәҙер ҡайтыр, мин уны бында бер йомош менән генә ебәргәйнем. Йә әле, берәрҙе рәхим итегеҙ.

Сыщик *(эсеп).* Рәхмәт, ләкин миңә хәҙер үк китергә кәрәк. Кейәүегеҙ ҡайтҡас та, хатты минең йортҡа ебәрегеҙ, ул беҙҙең өсөн бик важный документ. *(Урынынан тороп.)* Ә хәҙергә һау булып тороғоҙ. *(Ишек төбөнә еткәс әйләнеп килеп Кәримде ситкә алып.)* Хатты хәҙер үк ебәртегеҙ, әһә!

Кәрим. Әлбиттә, һис тотҡарһыҙ ебәрермен.

Сыщик. Пока һау булып тороғоҙ. *(Сыға.)*

К ә р и м *(үҙ-үҙенә).* Белмәйем, был мәжнүндән эш сығырмы икән? Күңел бер ҙә ышанмай. *(Ишеккә барып.)* Сәрби, Сәрби!

С ә р б и *(тышҡы яҡтан).* Хәҙер, һиңә әйтәм.

К ә р и м. Тиҙерәк бул.

С ә р б и. Ни кәрәк, һиңә әйтәм, ҡунаҡ китте ләме ни әле?

К ә р и м. Әйҙә китһә, хәйерле булһын, ундай ҡунаҡтар сәҡ торналар кеҫәгә көйә төшә башлай.

К ә р и м менән С ә р б и һөйләшә-һөйләшә эске бүлмәгә инәләр, С ә р ү ә р менән Й ы һ а н ҡарсыҡ инәләр.

Й ы һ а н. Әйҙә, ҡыҙым, бындай ваҡытта үҙеңде батырыраҡ тоторға кәрәк. Һиңә бит һәр ваҡыт сығып йөрөү әләкмәй! Ошо һылтау менән генә сыҡмаһаң.

С ә р ү ә р. Әллә, Йыһан инәй, бармайыммы, бер ҙә күңелем тартмай шул, әллә ни булыр төҫлө, йөрәгем сығырҙай булып талпына.

Й ы һ а н. Эй ҡыҙым, ошо буйың, ошо һының менән әрәм булып ошонда бикләнеп ятҡансы, исмаһам, бер булһа ла рәхәтләнеп йөрөп инерһең. Әйҙә, тиҙерәк барайыҡ. Ул инде күптән көтә торғандыр, кешене зарыҡтырыу килешмәй, күп уйлап торма, ҡыҙым. Йә атайың ҡайтып килер, кеше-ҡара күргәнсе тиҙерәк сығып китәйек.

С ә р ү ә р. Һуң атайыма ни тип яуап бирербеҙ, Йыһан инәй?

Й ы һ а н. Әйттем бит инде, өшкөртөргә барҙыҡ тиербеҙ. Иҫең киткән икән, шуны һорашып тормаҫ әле.

С ә р ү ә р. Ярай ҙа ул ышанһа, ә ышанмаһа ни эшләрбеҙ?

Й ы һ а н. Әйҙә, ҡыҙым, бер ҙә ҡурҡма, батыр бул. Мин үҙем атайыңды нисек тә ышандырырға белермен. Бер-ике тапҡыр һәйбәтләп кенә ант итһәм, ышанмай ҡайҙа бара ул? Әйҙә киттек, ҡыҙым.

С ә р ү ә р. Аллаға тапшырҙым инде... Был башмаҡ булманы, башҡа хафа ғына булды.

Й ы һ а н менән С ә р ү ә р сығып китә, К ә р и м менән С ә р б и инәләр.

К ә р и м. Йә хоҙа! Тағы ла ниҙәр генә күрһәтерһең икән, раббым. *(Диванға ултырып, тешен соҡой башлай.)*

С ә р б и *(юхаланып).* Минең бәлешемде яраттыңмы, һиңә әйтәм.

К ә р и м. Яраттым! Бик яҡшы булды! *(Кикерә.)* Ҡайҙа һуң кейәү, ниңә килмәй? Бар әле, әсәһе, Сәрүәрҙе саҡыр. Бер аҙ әйтәһе һүҙҙәрем бар.

Сәрби. Ярай, һиңә әйтәм, хәҙер. Сәрүәр балам, сыҡ әле, атайың саҡыра.

Ҡыҙҙар. Сәрби абыстай, улар киттеләр.

Сәрби *(аптырап)*. Киттеләр?

Кәрим. Ҡайҙа киттеләр, кем менән киттеләр?

Ҡыҙҙар. Йыһан инәй менән, өшкөртөргә киттеләр.

Кәрим *(нигәрәп тора)*. Нимә, ҡайҙа киттеләр, тиһегеҙ, өшкөртөргә?

Ҡыҙҙар. Эйе, өшкөртөргә киттеләр.

Сәрби. Был ни булды икән, ай алла, хәле ауырайып киттеме икән ни?

Кәрим *(ҡыҙып)*. Был ниндәй хәл, ә? Төн уртаһында ҡыҙың өшкөртөргә киткән! Был ниндәй эш, ә? Өшкөртөргә киткән, ә? Ишеттеңме, Йыһан әбей ҡыҙыңды өшкөртөргә алып киткән? Йә, нимә үрә ҡаттың, ниңә өндәшмәйһең?

Сәрби. Эй алла, был ни хәл икән тағы? *(Илай.)*

Кәрим. Барыһы ла үҙеңдән, нисә тапҡыр әйттем, шул убырлы ҡарсыҡты йөрөтмә, аяҡ баҫтырма, тинем! Юҡ, тыны шифалы, имеш... Ана, ҡыҙыңды эҙлә хәҙер, тағы ла шифалыраҡ ергә өшкөртөргә алып киткән.

Хөснөтдин багаж күтәреп инә.

Хөснөтдин. Бай ағай, багаждарҙы алып ҡайттым, ҡайҙа ҡуяһың?

Кәрим. Сәнселеп кит багаждарың менән.

Хөснөтдин *(үҙенә)*. Байға ни булды икән? *(Вафа инә, ҡулында нәмәләр.)*

Вафа. Мин балдыҙға бүләктәр алып килдем әле.

Кәрим. Балдыҙың юҡ шул инде.

Филми инә, уның ҡулында бала.

Филми. Хисаметдин ярһып бөткән, саҡ туҡтаттым, илаған.

Вәли инә.

Вәли. Ағай, телеграмманы бирҙем, бына кәпитәнсәһе.

Кәрим *(асыу менән)*. Сәрүәр өшкөртөргә киткән.

Хөсни.
Филми.
Вәли. } Өшкөртөргә?

Кәрим.
Сәрби.
Ҡыҙҙар. } Эйе, өшкөртөргә!

Вафа. Ҡайҙа киттеләр икән, ҡайным, эҙләп ҡайтырға кәрәк.

Кәрим. Эҙләргә, әлбиттә, эҙләргә.

Музыка «Башмағымды» башлай.

Сәрби. } Киттек Сәрүәрҙе эҙләргә.
Кәрим. } Арттарынан төшөп күҙләргә.

Филми. } Вафа. } Ниндәй хурлыҡ был беҙҙәргә.

Хөснөтдин. } Вәли. } Әгәр ҡасып сыҡҡан булһа!

Барыһы хор менән.

Ниндәй хурлыҡ был беҙҙәргә,
Әгәр ҡасып сыҡҡан булһа.

Музыка туҡтай.

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Ҡала баҡсаһы. Беренсе планда ике башта ла эскәмйә. Түрҙә, урталыҡта, һәйкәл, уның эргәһендә халыҡҡа ҡаршы бер эскәмйә. Шаршау асылғанда сәхнә буш. Бер аҙҙан Хәйрүш менән Сәлим инә.

Хәйрүш. Бына ошонда ултырып аҙыраҡ ял итеп алайыҡ, Сәлим дуҫ.

Беренсе планға килеп ултыралар.

Сәлим. Так точно, Хәйрүш! *(Ултыра.)*

Хәйрүш. Кемгә Хәйрүш, ә һиңә — Хәйрүш абзыҡайың булырмын. *(Араҡыны биреп.)* Мә, фәсен һалдыр, ҡулыңды йыуҙыңмы?

Сәлим. Так точно, Хәйрүш абзыҡайым. *(Араҡыны аса.)*

Хәйрүш. То-то, ату тапҡанһың: Хәйрүш.

Сәлим. Яратам мин һине, Хәйрүш абзыҡайым, кил әле бер үбәйем үҙеңде. *(Үпмәксе була.)*

Хәйрүш. Көш, көш. *(Сәлимде ситкә ҡағып.)* Хәйрүш абзаңды уны эсәһе лә үпмәйенсә генә үҙтерҙе. *(Араҡы һалып, Сәлимдең алдына ҡуя.)* Бына, рәхим ит. *(Закускаларҙы бирә, Сәлим ашарға тотона.)* Туҡта, турар-

ға кәрәк, һин бит господалар түгел. Господалар ҙа әҙерәк тәртип беләләр.

Сәлим. Так точно, Хәйрүш абзыкай, беҙ господалар түгел. *(Стаканды алып йырлай.)*

Айҡап ебәр, сайҡап ебәр,
Атлы казак ҡамсыһын,
Йырлап бирәм, эсеп ебәр,
Ҡалдырмайса тамсыһын.

(Стаканды Хәйрүшкә биреп йырлай.)

Алай ҙа бергә-бергә
Былай ҙа бергә-бергә,
Хәйрүш менән Сәлим бергә
Күгәрсен кеүек гөрлә.

Хәйрүш. Ә быныһын вот мин понимаю. *(Эсә.)* Ниңә һине Кәрим бай ҡыуып сығарҙы?

Сәлим *(араҡыны эсеп)*. Ә һине Садиҡ бай ниңә ҡыуҙы?

Хәйрүш. Дурак, һорауға һорау менән яуап бирәһең. Мин, ниңә Кәрим бай ҡыуып сығарҙы, тим?

Сәлим. Һин инде уны минән йөҙөнсө тапҡыр һорайһың.

Хәйрүш. Ә һин, йүләр, Хәйрүш абзаң һорағас, йөҙ ҙә беренсе тапҡыр яуап бир.

Сәлим. Ну что же, пожалуйста. Кара юрға атымды, Сәлим күсер ҫс итеп, эҫеләй һолоға ҡушҡан, тип миңә бәлә яҡты ла теге эшен һәйләгән өсөн ҡыуалап сығарҙы.

Хәйрүш. Эш хаҡыңды баҫып алып ҡалды?

Сәлим. Верно.

Хәйрүш. Уны эшкә алмағыҙ, тип, бөтә байҙарға һөйләп йөрөгән.

Сәлим. Тоже верно.

Хәйрүш. Верно, верно, э вот мин...

Сәлим. Ә что һин?

Хәйрүш. Минме? Мин Садиҡ байҙың елкәһенә рас. *(Сәлимдең елкәһенә һуғып ала, Сәлим һиҫкәнеп артҡа тайшана.)* Корһағына два. *(Сәлимдең эсенә төртә.)*

Сәлим *(ситкә тартылып)*. Аңлашылды, уныһын күрһәтмәһәң дә ярай.

Хәйрүш. То-то.

Сәлим. Зато мәҙрәсәгә инеп сыҡтың.

Хәйрүш. Пустяк, зато үсемде алдым, хаҡымды ҡалдырманым, һал берҙе.

Сәлим *(араҡы һалып Хәйрүшкә бирә).* Рәхим ит, Хәйрүш абзыҡайым, тутый ҡошҡайым.

Хәйрүш. Сәлим дуҫ.

Сәлим.
Ләббәйкә, Хәйрүш абзыҡайым.

Хәйрүш.
Бер йырлайыммы үҙеңә, Сәлим былбылым.

Сәлим.
Рәхим генә итһәнә, һандуғаҫҡайым.

Хәйрүш.
Аҫыл ҡошто матур һайрай, тиҙәр.
Аҫыл ҡоштар, Сәлим, ҡайҙа һуң?
Һөйгән һөйгән йәрҙәре янында,
Сәлим, беҙҙең һөйгән йәрҙәр ҡайҙа һуң?

Сәлим.
Һөйгән һөйгән йәрҙәр янында, Хәйрүш,
Һөйгән һөйгән йәрҙәр янында, Сәлим,
Беҙҙең һөйгән йәрҙәр ҡайҙа һуң?

Ҡыҫҡа көйгә парлап йырлайҙар.

Хәйрүш.
Байҙар байҙар бал эсә,
Урта байҙар һыра эсә,
Сәлим менән Хәйрүш бергә
Ҡымыҙ эсә, ҡыҙ ҡоса.

Хәйрүш. Һал бирҙе тағы, Сәлим дуҫҡайым.

Сәлим *(ситтә күренгән городовойға күрһәтеп).* Аштик, Хәйрүш абзыҡайым, селедка килә.

Городовой *(Хәйрүш янына килеп).* Эй, һеҙ өтөктәр, ни эшләп бында ауыҙ асып йырлап ултыраһығыҙ, әллә бында атайығыҙҙың өйө бар тип белдегеҙме, вон бынан.

Хәйрүш *(торып честь биреп).* А... Господин пристав, ни эшләп улай бик кәйефегеҙ китте, хәҙер табабыҙ уны, жива. Господин приставҡа бик мул ғына итеп бирҙе һалып бир әле.

Сәлим *(араҡы һалып городовойға бирә).* Рәхим итегеҙ, господин пристав.

Городовой. Беҙгә поста эсергә ярамай. *(Яҡ-яғына ҡаранып ала ла тиҙ генә эсеп ебәрә.)*

Хәйрүш *(тиҙ генә араҡы һалып).* Ә быныһы минең һаулыҡҡа, господин пристав. Һин беҙҙе обижать итмә. Сәлимдән алғас мине лә сауаптан мәхрүм итмә.

Городовой. Никак нельзя, беҙгә поста эсергә ярамай, начальстволан яҡшы түгел.

Хәйрүш *(тәмәке биреп).* Беҙгә һинән дә ҙур начальство юҡ, господин пристав.

Сәлим *(городовойға шырпы ҡабыҙып).* Правильно, господин приставтан да ҙур ниндәй начальство булырға может, шулай бит, Хәйрүш абзыҡай.

Хәйрүш. Верно. Мин уйлап торам-торам да, ҡатындың ҡолағын борам, тигәндәй, был начальстволарға хайран ҡалам. Шундай мөһабәт кешене генерал яһамайынса тоталар. Мин батша булһам, бер нәмәгә ҡарамайынса, господин приставҡа генерал чины бирер инем. *(Бармаҡ остарын үбеп.)* Вот ниндәй генерал сығыр ине, шулай бит, Сәлим дуҫ.

Сәлим. Совершенно правильно. *(Ситкә ҡарап.)* Таш бәйләп, һыуға һалаһы ғына ҡалыр ине.

Городовой. Но, господа, оҙаҡламайынса обход булырға тейеш. Һеҙ инде нисек булһа ла ситкәрәк китеп тороғоҙ, юҡһа начальствонан миңә һүҙ тейеүе бар.

Хәйрүш. Була ул, господин пристав, хәҙер таябыҙ. *(Сәлимгә.)* Йыйна әйберҙәрҙе, бәрәкәт ерҙә ятмаҫ.

Алыҫта свисток тауышы ишетелә.

Хәйрүш *(Городовойға).* Хәйерле юл, господин пристав, хәҙер ысҡындыҡ. *(Сәлимгә.)* Әйҙә шылдыҡ.

Йырлайҙар.

Алай за бергә-бергә,
Былай ҙа бергә-бергә,
Сәлим менән Хәйрүш бергә,
Күгәрсен кеүек гөрлә.

Ҡосаҡлашып, йырлап сығып китәләр. Модный татар кейемендә ашығып Фәлимьян инә.

Фәлимьян *(яҡ-ягына ҡаранып).* Күренмәйҙәр әле, уф... Һин ашыҡҡанда ул ҡабалана, тигәндәй, лавка ябыр алдынан ғына тулды алыусыһы, һис ҡотолор хәл юҡ. Һуңға ғына ҡалмаһам ярар ине, тип, тиҙерәк саптым. *(Сәғәтен ҡарап.)* Сәғәт туғыҙ ҙа тулған. Йыһан әбей эште булдырһа ғына ярар ине. Әллә ни эшләп йөрәк һуға башланы. Хәйер, Йыһан әбей эшләйем тигән эште булдыра инде ул. *(Ултырғысҡа ултыра.)*

Хәйрүш инә.

Хәйрүш. Сәлим дуҫ, һин ҡайҙа? Һиннеҙ миңә юҡ файҙа. *(Фәлимьянға.)* Нихәл, ҡыҙыл ауыҙ, ҡармаҡ һалырға килдеңме ни?

Фәлимьян. Ауыҙыңа телең һыймаймы әллә?

Хәйрүш. Ах һин, мальчишка, минең телемдә һинең ни эшең бар, ә?

Фәлимьян. Ә минең ни эшләп йөрөүемдә һинең ни эшең бар, иҫерек баш.

Хәйрүш. Как минең эшем булмаһын, минең эшем һиндә генә түгел, бөтә ҡала кешеһендә бар. Һин әле эшеңде миңә белдермәйенсә генә эшләмәксе булаһыңмы? Юҡ, энекәйем, булдыра алмаҫһың, мин, энекәйем, бик күп кешеләрҙең аштарына тараҡан булып төшкән кеше, аңланыңмы?

Фәлимьян. Тараҡан булғас, төшөрһөң шул.

Хәйрүш. Һин, энекәйем, ҡыҙыл ауыҙ, мороноңдо күтәреп, ауыҙыңды йәйеп, кешенән көлөп ултырма, белә-һеңме? Мин потомственный почётный гражданин булырмын, һин кем менән һөйләшкәнеңде аңлап һөйләш. Юҡһа күрерһең күрмәгәнеңде. *(Йоҙроғон күрһәтеп.)* Бына күрәһеңме был йоҙроҡто? Абзаңдың бына ошо йоҙроғо бик күп ҡыҙыл ауыҙҙарҙың һырттарын тырнаганы бар. Ул һинең яңаҡҡа менеп төшөргә лә бик ҡиммәт һорамаҫ. *(Эскәмйәгә ултыра.)* Тегендәрәк бар.

Фәлимьян. Ярай, күрһәм әйтермен.

Хәйрүш. Тегендәрәк бар, тим мин һиңә, ҡыҙыл ауыҙ. *(Фәлимьянды ҡулы менән этә.)*

Фәлимьян. Вот нахал. Донъяға һыймай башланы инде. *(Тороп беренсе пландағы урынға ултыра.)*

Хәйрүш. Наҙан, Хәйрүш ағаңа урын бирмәҫкә итәһең. Белмәйһеңме ни уның йоҡоһо килгәнде. *(Ята.)* Тәмәке бир әле.

Фәлимьян. Кайҙан килеп сыҡты һуң был иҫерек баш.

Хәйрүш. Нимә һин унда ауыҙ эсенән бутҡа бешереп ултыраһың? Тәмәке бир, тиҙәр бит һиңә. Һаңрау, әллә ишетмәйһеңме?

Фәлимьян. Хәйерсегә ялсы кәрәкмәй. *(Үҙ-үҙенә.)* Бер ситкә китеп тормаһаң, был нахалдан ҡотолоп булмаҫ ахырыһы. *(Китә.)*

Хәйрүш *(Фәлимьяндың киткәнен белмәйенсә).* Әй, һин, ярғанат, ҡара әле, ана күктә бер йондоҙ атылды, һинең йондоҙ түгелме икән ул? Ана Етегән дә ҡалҡты.

Музыка «Әсхәпьямал» көйөн уйнай.

Етегән йондоҙҙоң ҡойроғо
Бороламы икән таң етһә,
Минең былай йөрөүемде
Йәнкәй ни эшләр ишетһә?

Ҡайтыр инем илемә,
Ҡарҙар яуған юлыма,
Ҡар яуһа ла ҡайтыр инем,
Малдар төшмәй ҡулыма.

Музыка тыҡтай, шул ваҡыт Йыһан менән Сәрүәр инәләр.

Й ы һ а н. Әйҙә, ҡыҙым, әйҙә бына хәҙер үҙе лә килеп етер, оҙаҡламаҫ. *(Фәлимьян ултырған эскәмйәгә килеп ултыралар.)*

С ә р ү ә р. Юҡҡа ғына сыҡтыҡ, Йыһан әбей, кешеҡара ғына күрмәһә ярар ине. Атайыма ишетелһә, ғүмер буйы сәйнәр.

Й ы һ а н. Бер нәмә лә булмаҫ, балаҡайым, атайыңа үҙем яуап бирәм.

Х ә й р ү ш *(ятҡан еренән)*. Әй, ҡыҙыл ауыҙ, мин һинән тәмәке һорайым бит, ниңә тиҙерәк килтереп бирмәйһең? Әллә оялмайынса мине урынымдан тороп барып алырға ҡушаһыңмы?

С ә р ү ә р *(урынынан тороп)*. Абау, хоҙайым, кем һуң был? Ниндәй кеше ята? Ҡара әле, иҫерек түгелме һуң? Әйҙә, зинһар киттек бынан, йә тороп бәйләнә башлар!

Й ы һ а н. Ҡурҡма, балаҡайым, ҡурҡма, хәҙер мин барып ҡарайым, һин ошонда тороп ҡына тор. *(Хәйрүш янына бара.)* Абау, тҫһоҙ, нимә эшләп ятаһың бында? Хәйрүш, һинме был?

Х ә й р ү ш *(тороп)*. Ә, Йыһан әбей, нихәл, ни эшләп йөрөйһөң? Тауар алып ҡайттыңмы әллә? *(Ауа-тҥнә беренсе планға бара.)* Был ярғанат ҡайҙа китте һуң әле? *(Сәрүәргә ҡарап.)* Был ниндәй тутый ҡош тағы? Был һинең тауармы әллә, Йыһан әбей? Малы шәп күренә. Тик аҡса юҡ ваҡыт инде. *(Ҡараштырып.)* Ҡайҙа китте һуң теге ярғанат?

Й ы һ а н. Кемде әйтәһең һуң һин?

Х ә й р ү ш. Әле яңы ғына Ғиләж байҙың бер ярғанаты ошонда ултыра ине. Һеҙ күрмәнегеҙме һуң?

Й ы һ а н. Ул ниндәй ярғанат? Күрәйек әле?

Х ә й р ү ш. Ах, каналья, ҡасҡан бит. Ярҙылыҡ та әләктереп алып булманы. Ҡайҙа әле, Йыһан әбей, һинең юҡмы бер ярҙылыҡ, бик баш ауырта.

Й ы һ а н. Тапты һуҙ, әллә мине аҡса һуға тип беләһеңме? Ҡайҙан алып бирәйем мин уны?

Х ә й р ү ш. Бирмәһәң, сәнселеп кит аҡсаң менән. Бына нимә, был тутый ҡошоң менән мине берәй күрештерерһең әле, яраймы? Ә мин хәҙер теге ярғанатты әҙләргә сығам. *(Сәрүәргә.)* Һау булып тор, аппаҡай, күрешмәҙ әле.

Музыка «Әсхәпьямал» көйөн уйнай.

Х ә й р ү ш *(йырлап сығып китә.)*

Улай ҙа беҙгә нужа, былай ҙа беҙгә нужа,
Өҫтә кейем нисек туҙа, йәш ғүмер шулай уҙа.

Музыка туҡтай.

С ә р ү ә р. Уф! Йөрәгем ярыла яҙҙы. Килеп сыҡмаһа ғына ярар ине, тип, саҡ түҙеп торҙом. Йыһан инәй, әллә китәйекме?

Й ы һ а н. Ул ни тигән һүҙ, балаҡайым, ошо тиклем ергә килеп, күрешмәйенсә ҡайт, имеш. Ундай йолҡоштарҙың нимәһенән ҡурҡырға, ти?

Ф ә л и м ь я н күренә.

Ә ана үҙе лә килә. *(Фәлимьянға ҡаршы барып.)* Ни эшләп бик һуңға ҡалдың? Беҙ бына һине баянан бирле көтөп торабыҙ. Әйҙә күрешегеҙ, балаҡайым.

Фәлимьянды Сәрүәр янына алып бара.

Ф ә л и м ь я н. Иҫәнме, Сәрүәр туташ. *(Ҡулын һуҙа.)*

Й ы һ а н. Күреш, ҡыҙым, күреш, оялып торма.

Сәрүәр күрешә.

Ф ә л и м ь я н. Йыһан әбей, мин бая уҡ килгәйнем инде, әле бында теге иҫерек Хәйрүш килеп сыҡты ла бәйләнә башланы, шул китә төшһөн, тип баҡсаның теге яғынараҡ барып ултырғайным.

Й ы һ а н. Ул иҫерек баш яңы ғына китте әле. Әйҙәгеҙ, балалар, мин һеҙгә бер бик аулаҡ урын күрһәтәйем. Шунан һуң һөйләшеп ултырырһығыҙ, йә бында теге Хәйрүш тағы килеп сығыр ҙа бәйләнә-нитә башлар.

Ф ә л и м ь я н *(Сәрүәргә)*. Әйҙә, йәнем. *(Ҡултыҡламаҡсы була.)*

С ә р ү ә р *(ситкә ҡарап)*. Ярай, мин үҙем дә барырмын. *(Китә башлай.)*

Йыһан менән Фәлимьян артта ҡалалар.

Й ы һ а н *(Фәлимьяндың итәгенән тартып)*. Ҡана, тиҙерәк аяҡ юлын сығар.

Ғәлимьян *(ашығып, кеҫәһенән аҡса сығара).* Мә. Йыһан *(Ғәлимьяндың итәгенән тартып).* Был ни эшләүең, ошондай ебәк кеүек ҡыҙ менән ҡауыштырған өсөн 3 һум. Исмаһам, 10 һум бир.

Ғәлимьян *(ашығып).* Мә инде, күҙең туйманы һинең дә. *(Бирә.)*

Йыһан. Ярай, әйҙә мин һеҙҙе алып барып ҡуяйым.

Китәләр. Хәйрүш инә.

Хәйрүш. Әллә үҙен ер йотто инде, һис бер ерҙән табып булмай. Яңы ғына ошо тирәгә килгән кеүек ине, черт возьми, таки күҙ яҙҙырҙы бит малайҙы. Бер яҙ йәнен тартып алмаҡсы инем. *(Ултыра.)*

Сәхнә артынан Кәримдең тауышы ишетелә.

Кәрим *(тыштан).* Ҡайһы яҡҡа киттеләр, тиһең? Ошо яҡҡа киттеме? *(Ашығып сәхнәгә инә.)* Ну, шайтан алғыры, бында юҡ. Ҡайһы йәһәннәмгә киттеләр икән һуң? *(Хәйрүште күрмәй.)*

Хәйрүш. Был, моғайын, теге тутый ҡошто электерергә йөрөй торғандыр әле.

Кәрим *(һиҫкәнеп).* Күрмәйенсә торам, ни эшләп ултыраһың? Бында күптән ултыраһыңмы, тегеләрҙе күрмәнеңме?

Хәйрүш. Кемдәрҙе тиһең, Кәрим ағай?

Кәрим. Кемдәрҙе булһын, тегеләрҙе инде, тегеләрҙе.

Хәйрүш *(үҙ-үҙенә).* Һис шикһеҙ, был теге тутый ҡошто электерергә йөрөй торғандыр. Күрҙем, күрҙем, Кәрим ағай! Ярҙылыҡ бирһәң, табып та бирәм.

Кәрим. Нимә, күрҙем тиһеңме?

Хәйрүш. Эйе, күрҙем. Бына ярҙылыҡ бирһәң, табып та бирәм.

Кәрим. Әйҙә, зинһар күрһәт, ҡайҙа булыр? Ярҙылыҡ түгел, бөтөнләк алырһың, күрһәт кенә. *(Хәйрүште тартҡылай.)*

Хәйрүш. Туҡта әле, Кәрим ағай, бик ҡаты тартҡылама, йә кәзәкейҙең мәсихен боҙорһоң.

Кәрим. Әйҙә инде, зинһар күрһәт, тим мин һиңә, күп телеңә һалынып ултырма.

Хәйрүш. Элек аҡса бир, Кәрим ағай, унан һуң күрһәтермен. Һеҙ ресторанға инеп китерһегеҙ ҙә унан һуң көт һинең сыҡҡаныңды.

Кәрим *(аҡса биреп).* Мә, ал, тик тиҙерәк күрһәт кенә.

Хәйрүш *(аҡсаны алып)*. Ай-һай, Кәрим ағай, бик ҡыҙғанһың. Әйҙә инде күрһәтәйем. Ну, малды таптың үҙең дә, Кәрим ағай.

Кәрим. Әйҙә инде, күп лығырлап торма.

Китәләр. Сәлим йырлай-йырлай инә.

Сәлим. Хәйрүш менән Сәлим бергә, күгәрсен кеүек гөрлә.

Әллә был Хәйрүште ер йоттомо! Тағы берҙе төшөрөп алаһы ине бит. Баҡсаның теге башында Филәж мулла бер урыҫ менән йөрөй. Яртылыҡ электерҙем үҙенән. Ҡурҡа меҫкен. «Сәлим энем, күрмә лә, белмә лә инде» ти. Чёрт с тобой, мин әйтәм, берәр ҡош артынан сабалыр инде. Ял итергә кәрәк әле. *(Ултыра.)* Хәйрүш килеп сыҡмаҫмы.

Вәли менән Хөснөтдин инәләр.

Эй һеҙ, ҡыҙыл ауыҙҙар, нимә юғалттығыҙ, ниңә балтағыҙ һыуға төшкән?

Вәли. Кисәге көнде юғалттыҡ, Сәлим, әллә эҙләшәһеңме?

Сәлим. Була ул. *(Вәли янына барып.)* Сәлим абзаҡ, кәрәк булһа, көндәр түгел, йылдар ҙа табып бирер ул. Бир әле бер офисер бармағын, янһын йөрәге дошмандың, һөйһәм алмай ҡалмамын, тип, ҡабыҙып ебәрәйек.

Вәли *(папирос биреп)*. Эштәр шәпме һуң, Сәлим?

Сәлим *(тәмәке ҡабыҙып)*. Ал-да гөл. Дила идет, контора пишет, ә беҙҙең Кәрим бай чют-чют дишит.

Хөснөтдин. Да, брат, Кәрим байға көндәр ҙә тугават.

Сәлим. Ничего, бер аҙ ҡорһағы шиңер. Мин Хәйрүш абзыйҡайҙы эҙләйем әле, Филәж мулланың фытыр саҙаҡаһы этәс булып ҡысҡыра. Һау булығыҙ, тутый ҡоштарым, алай ҙа бергә-бергә... *(Сыға.)*

Икеһе бергә. Бында ла юҡ.

Икеһе ике яҡҡа инеп китәләр. Бер аҙҙан тағы инәләр.

Вәли. Тамам хәлдән тайҙым. *(Бүркен һала.)*

Хөснөтдин. Эштән сығып арыным.

Вәли. Үҙебеҙ ҙә дуралтар һуң инде.

Хөснөтдин. Ниңә?

Вәли. Өшкөртөргә киткән кешене баҡсанан эҙләйбеҙ бит, уларҙы башҡа ерҙән эҙләргә кәрәк ине.

Хөснөтдин. Ниңә эҙләмәйһең һуң?

Вәли. Мин арыным инде. Үҙең әҙлә.

Хөснөтдин. Мин дә арыным, һин әҙлә.

Шул ваҡыт Маһруй, Хөсни инәләр.

Маһруй *(Вәлигә)*. Юҡмы? *(Ултыра.)*

Вәли. Юҡ.

Хөсни *(Хөснөтдингә)*. Табылманымы? *(Ултыра.)*

Хөснөтдин. Табылманы.

Вәли *(Маһруй янына һылашып)*. Арыганһыңдыр инде, Маһруй, йән киҫәгем. *(Ҡулын тота.)* Аҙыраҡ ял ит.

Хөснөтдин. Хөсни бәгерем, мин әйткән һүҙгә ҡасан яуап бирәһең, ә? *(Хөснигә яҡын килә.)*

Маһруй. Бик арыным шул, Вәли йүләрем. *(Көлә.)*

Хөсни. Мин һинең урында булһам, бындай ваҡытта яуап һорамаҫ инем инде.

Ҡосаҡлашалар.

Хөснөтдин *(яҡ-яғына ҡарап)*. Улай булғас. *(Хөсниҙе үбә.)*

Вәли *(Хөснөтдин менән Хөснигә күрһәтеп)*. Кешенән ғибрәт алырға кәрәк, Маһруй сибәрем. *(Үбешәләр.)*

Вафа менән Ғилми инәләр. Вафаның ҡулында — бүләктәр, Ғилми ҡулында — бала.

Вафа *(Вәлигә)*. Балдыҙ табылманымы?

Вәли. Юҡ әле, ҙәнәкәй.

Ғилми *(Хөснөтдингә)*. Ни эшләп ултыраһығыҙ, тапманығыҙмы?

Хөснөтдин. Ҙәләп ултырабыҙ, тапманыҡ.

Сәрби инә.

Сәрби. Йөрөй-йөрөй арып бөттөм. Ни эшләп ултыраһығыҙ, күренмәйме?

Бөтәһе бергә *(Сәрбигә ҡарап)*. Юҡ, күренмәй.

Сәрби *(илап)*. Ҡайҙа китеп юғалды һуң, балаҡайым? Әйҙәгеҙ, эҙләйек әле.

Музыка «Башмағым» көйөн уйнай. Йырлайҙар.

Сәрби. Киттек Сәрүәрҙе эҙләргә.

Маһруй. Хөсни. } Артынан төшөп күҙләргә.

Вафа. Ғилми. } Ниндәй хурлыҡ был беҙҙәргә.

Хөснөтдин. Әгәр ҡасып сыҡҡан булһа!

Сығалар, музыка туҡтай. Кәрим, Хәйрүш инәләр.

Кәрим. Эй иҫерек баш, һин нимә буталып йөрөйһөң инде, ҡайҙа һуң улар?

Хәйрүш. Валлаһи, бына яңы ғына ошонда инеләр, Кәрим ағай, әйҙәгеҙ әле, теге яҡҡа барып ҡарайыҡ.

Сығалар.

Музыка «Башмағым» көйөн уйнай. Сәрүәр менән Фәлимьян инеп, икеһе ике яҡҡа беренсе планға килеп баҫалар. Сәрүәр йырлай башлай.

Сәрүәр.

Бөтә өй эсе шаулайҙыр,
Атай башмаҡты даулайҙыр,
Әсәй ҙә шуны ҡаулайҙыр,
Бирсе, егет, башмағымды.

Фәлимьян.

Зинһар бәйләнмәгеҙ миңә,
Алғаным юҡ башмағыңды.

Сәрүәр.

Йә күҙемә тура ҡара,
Алғанһың бит, йөҙөң ҡара,
Күрәһең төн етеп бара,
Бирсе, егет, башмағымды.

Фәлимьян.

Ышанмаһаң тентеп ҡара,
Алғаным юҡ башмағыңды.

(Сәрүәргә яҡын килеп, юхалап.)

Сәрүәр йәнем, миңә килһәң,
Фүмерлеккә ингәш булһаң,
Ярар, тип, вәғәҙә бирһәң,
Табып бирәм башмағынды.
Йәнем, вәғәҙә, тиген инде.
Хәҙер табам башмағыңды.

Сәрүәр.

Ал атыма ал кәрәкмәй,
Ҡуры атыма ял кәрәкмәй,
Һейгәнем бар, ят кәрәкмәй,
Зинһар бирсе башмағымды.

Фәлимьян.

Улай һәйгәндәрен булғас,
Табып бирһен башмағыңды.

Сәрүәр *(ялынып).*

Зинһар, егет, интектермә,
Күҙ йәштәремде түктермә.
Атайҙан һүҙ ишеттермә,
Биреп ебәр башмағымды.

Ғәлимьян.

Миңә булһаң, табып бирәм,
Тип әйтәм бит башмағыңды.

Сәрүәр *(ситкә ҡарап).*

Ни эшләйем һуң һорауыңа,
Әллә күнәйемме икән ни?
Ярай мин күнәмен, егет,
Тик бир генә башмағымды.

(Ситкә ҡарап.)

Шул башмаҡ хаҡында ғына
Юғалтамын башҡынамды...

Ғәлимьян.

Шыбыр-шыбыр ямғыр яуһа,
Яр ситтәре еүеш була.
Тартынмайсы үбер булһаң,
Шунда бирәм башмағыңды.

Сәрүәр.

Мамыҡ түшәктәр һалырмын,
Аҫыл юрғандар ябырмын,
Наҙларым, егет, һөйөрмөн,
Тик бир генә башмағымды.

Ғәлимьян.

Вәғәҙәләреңде боҙмаһаң,
Бирәм, йәнем, башмағыңды.

(Күйынынан башмаҡты сығарып Сәрүәргә бирә. Сәрүәр, шатланып, башмаҡты ҡулына алып, күкрәгенә ҡыҫып йырлай.)

Сәрүәр.

Эй хоҙайым, насип иттең
Башмаҡтарымды күрергә.

Ғәлимьян.

Инде, йәнем, ҡыялмаҫһың
Егеттәрҙән һин көлөргә.

Сәрүәр.

Көлмәм инде, сөнки оҙаҡ
Тура килде интегергә.

Фәлимьян.

Йәсе, йәнем, башмағыңды
Кейеп ебәр аяғыңа,
Төндө үткәрербеҙ китеп
Баҡсаның аулаҡ яғына.

Сәрүәр.

Юҡ, йәнем, мин ҡайтайым инде.
Һин дә ҡайтып йоҡла ғына.

Фәлимьян.

Ул ни тигән һүҙ һуң, Сәрүәр.
Оноттоңмо вәғәҙәң бар.

Сәрүәр.

Онотмам, йәнем, сабыр ит,
Бөгөнгә бит ваҡыт бик тар.
Ниңә бик сабырһыҙландың,
Иртәгә тағы ла көн бар.

Фәлимьян.

Мин йөрәгемә түҙә алмайым.

Сәрүәр.

Мин вәғәҙәмде боҙа алмайым.
(Ҡосағын йәйеп.)
Килсе, әйҙә ҡосағыма.
Һүҙең тапап уҙа алмайым.

Фәлимьян.

Вәғәҙәләр иман бит, йәнем,
Мин дә тәҡдирҙән уҙа алмайым.

(Сәрүәрҙе ҡосаҡлай. Үбешәләр.)

Музыка туҡтай. Фәлимьян менән Сәрүәр үбешкәндә, сәхнәгә Хәйрүш килеп инә.

Хәйрүш *(Фәлимьянды күреп)*. Әһә, бына улар ҡайҙа икән? Хәҙер Кәрим байға барып әйтәм. Бөтөнләктең осо күренә. *(Сығып китә.)*

Сәрүәр. Әйҙә инде, йәнем, мине оҙатып ҡуй. Йыһан әбей ҙә көтөп тора торғандыр.

Фәлимьян. Әйҙә, бәгерем, оҙатам. Ә иртәгә ҡайҙа күрешербеҙ һуң?

С ә р ү ә р. Бөгөнгә ҡайтайыҡ әле, иртәгә күҙ күрер.

Ғ ә л и м ь я н. Ярай улай булғас, киттек. *(Китә башлайҙар.)* Туҡта әле, юл аяғына. *(Үбешәләр ҙә сығып китәләр.)*

Шул ваҡыт, һаҡлыҡ менән баҫып, Х ә й р ү ш, уның артынан К ә р и м инә.

К ә р и м. Ҡайҙа һуң улар, күренмәй бит?

Х ә й р ү ш. Ошонда инде, ҡыҫҡырма, ҡасырырһың. *(Аҡрын ғына беренсе планға уҡ килеп етәләр.)*

К ә р и м *(сыщикты күреп)*. Әһә, әләктеңме, булдыҡһыҙ? *(Сыщикты бер яҡҡа алып ыргыта.)*

С ы щ и к. Ни булды һеҙгә, Кәрим Хисаметдинович?

Х ә й р ү ш *(яҡ-ягына ҡаранып)*. Валлаһи, бына ошо ерҙә үбешеп кенә торалар ине, әллә ер йоттомо үҙҙәрен?

К ә р и м. Тфү, иҫерек шайтан, һин иҫерек баш һүҙенә ҡарап йөрөгән мин дурак. Ҡайҙа инде күргән кешеләрең?

Х ә й р ү ш. Валлаһи бына, Кәрим ағай! Ер йотһон, ошонда ғына үбешеп торалар ине. Үҙ күҙем менән күрҙем.

К ә р и м. Күргәнһеңдер атаң башын, күрһәң, күргән кешеләрең ҡайҙа?

Х ә й р ү ш. Кәрим ағай, улар, моғайын, ошо тирәләгенә йөрәй торғандарҙыр. Алыҫ китмәҫтәр, әйҙә әле, теге яҡҡа барып ҡарайыҡ.

К ә р и м. Һин иҫерек башҡа тағылып йөрөп, арып бөттөм инде. Әйҙә, булмаһа, тағы бер тапҡыр ҡарап киләйек.

Х ә й р ү ш. Ну, ҡулыңа төшөрә алһаң, Кәрим ағай...

К ә р и м. Һин телеңде бик оҙайтма, иҫерек баш.

Х ә й р ү ш. Бөттө, бөттө, әйҙә киттек.

К ә р и м. Һеҙ инде, господин Иванов... Бына был иҫерек баштың һүҙенә ҡарап, һеҙҙе бер аҙ йөберләнем бугай! Һеҙҙең хәлдәр нисек һуң, господин Иванов?

С ы щ и к. Иң күбе — бер ярты сәғәттән беҙҙең ҡулда буласаҡ, тыныс булығыҙ.

К ә р и м. Белмәйем инде, берегеҙ күрә, берегеҙ ишетә, берегеҙ хәҙер тотоп бирәм, ти... Ҡайһығыҙға ышанырға аптыраным. Булмаһа, Хәйрүш, әйҙә тағы бер тапҡыр ҡарап сығайыҡ.

С ы щ и к. Кәрим Хисаметдинович. *(Ҡулы менән күрһәтеп.)* Һеҙ был яҡҡа, ә мин был яҡҡа, ләкин һаҡ булырға кәрәк, шауларға ярамай. *(Сығалар.)*

Музыка «Башмағым» көйөн уйнай.

Сәрби *(илап керә).*

Бөтә баҡса буйын йөрөнөк.

Маһруй.
Хөсни. } Аулаҡ ерҙәргә лә индек.

Вафа.
Вәли. } Ҡайҙа китеп юғалды икән?

Музыка туҡтай. Шул ваҡыт Кәрим ашығып сәхнәгә инә лә халыҡты күреп, уртала туҡтала.

Кәрим. Һеҙ ҡайҙан килеп сыҡтығыҙ, тапманығыҙмы?

Барыһы ла. Юҡ.

Музыка «Башмағым» көйөн уйнай. Сәхнә артынан Сәрүәр йырлай. Башҡалар, Сәрүәрҙең тауышын ишеткәс, төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасалар.

Сәрүәр *(сәхнә артынан).*

Әйҙә, йәнем, оҙат мине,
Уйһыу ерҙәргә еткәнсе.

(Сәхнәгә Фәлимьян менән инәләр ҙә урталыҡта туҡталып.)

Таңдар атыр сулпан ҡалҡыр,
Беҙ айырылышып киткәнсе.

Фәлимьян. Кил, йәнем, тағы үбәйем, баҡсанан сығып киткәнсе. *(Үбешәләр.)*

Музыка туҡтай. Халыҡ, бөтәһе лә сығып, Сәрүәр менән Фәлимьяндың үбешкән ваҡыттарында әйләндереп ала.

Сәрүәр *(халыҡты күреп).* Аһ, хоҙайым, мин ни күрәм, тотолдом бит. *(Һушһыҙ булып Фәлимьяндың ҡулына ауа.)*

Сәрби. Һай, балаҡайым, ни эшләне, үләме әллә? *(Илай. Сәрүәрҙе Фәлимьяндың ҡулында көйөнсә изәнгә ятҡыра.)*

Кәрим *(асыуланып).* Бер нәмә лә булмаҫ. *(Фәлимьянға йоҙроҡ болғап.)* Әләктеңме, ҡасҡын, һин әле ҡыҙҙар аҙҙырып йөрөйһөң икән. Мин һинең ауыҙыңды ватып, тештәреңде берәм-берәм һурырмын, каналья, мальчишка. *(Һуҡмаҡсы булып барғанда башҡалар туҡтаталар.)* Ебәрегеҙ мине, мин ул шайтан аяҡтың тештәрен һындырам.

Фәлимьян *(көслө тауыш менән).* Кәрим ағай, һин юҡҡа ғына ҡыҙаһың, барыбер ҡыҙып эш сығара алмаҫһың.

Кәрим *(ярһып).* Ах, һин, мальчишка. Минме эш сығара алмам?

Кәримде тоталар.

Вафа. Зинһар һөйләп бирһәнә, әфәнде, эш нисек булды?

Фәлимьян. Мин Сәрүәргә башмағын табып бирҙем. Ул миңә үҙен мәңгегә бирҙе. Беҙҙе айыра алмаҫһығыҙ инде. Юҡҡа ярһымағыҙ. *(Сәрүәрҙең башын күтәреп ҡул өҫтөнә һала.)*

Кәрим. Был ниндәй эш был! Мин быға ышанмайым, хурлыҡ бит был. *(Уйға ҡала.)*

Йыһан инә.

Йыһан *(Сәрүәрҙе күреп.)* Ни булды, ни эшләнегеҙ? *(Сәрүәр янына теҙләнә.)* Илаһи, рәхмәтең менән ҡотҡар.

Сәрүәр башын күтәрә. Бөтә халыҡ ситкә тартыла. Фәлимьян Сәрүәрҙе ҡосаҡлап торғоҙа ла йөҙөнә ҡарап тора. Музыка «Башмағым» көйөн уйнай.

Сәрби *(иламһырап).* Беҙҙе ҡурҡыттың бит, балам.

Ҡыҙҙар.

Шул башмаҡта бөтә бәлә,

Вафа.

Әгәр башмаҡтар булмаһа,

Вәли.

Был бәләләр булмаҫ ине,

Хөсни.

Әгәр башмаҡтар булмаһа,
Был бәләләр булмаҫ ине.

Хәйрүш *(кереп).*

Кәрим абзыҡай, һин ҡайҙа,
Ниңә ташлап киттең мине,
Мин унда эҙләйем һине,
Тутый ҡошто тоттоңомо ни?

Йыһан.

Нихәл, Хәйрүш, туй яһарға,
Һин дә килеп еттеңме ни?

Ғәлимьян.

Әйҙә, Сәрүәр, йәнем, киттек,
Мораттарыбыҙға еттек.

Сәрби.

Һеҙҙең арттан йөрөй-йөрөй
Беҙ ҙә инде арып бөттөк.

Хор менән.

Башмаҡ та, ҡыҙ ҙа табылды,
Киттек, туй яһарға киттек.

Барыһы ла китә башлайҙар.

Кәрим *(яңғыҙ ҡалып)*. Хурлыҡ бит был, хурлыҡ. Был хурлыҡҡа нисек түҙергә? *(Ҡысҡыра.)* Әй, һеҙ, туҡтағыҙ!

Шул ваҡыт сыщик инә.

Сыщик. Кәрим Хисаметдинович, тегеләрҙең эҙҙәренә төштөк.

Кәрим. Эҙҙәре һыуынып бөткәсме? *(Башын тотоп ултыра.)*

Алыҫта бер туҡтауһыҙ «Башмаҡ та ҡыҙ ҙа табылды» тигән йырҙар ишетелеп тора. Шул ваҡыт ҡулына һепертке тотҡан аҡ алъяпҡыстан баҡса һепереүсе сыға.

Баҡса һепереүсе. Әфәнделәр, баҡса ябылды. *(Һеперә башлай.)*

Шаршау

Афзал Таһиров

(1890—1938)

Афзал Мәхәтдин улы Таһиров 1890 йылдың 25 октябрендә Самар губернаһы Бөгөлмә өйәҙе Әлмәт волосындағы Абдрахман ауылында (хәҙер Татар АССР-ы) ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Тәүҙә ул Ҡазан мәҙрәсәһендә, һуңынан Ырымбурҙағы «Хөсәиниә» мәҙрәсәһендә уҡый.

1911 йылдан алып 1917 йылға тиклем ул батша армияһында хеҙмәт итә, империалистик һуғышта ҡатнаша. 1913 йылда, Россияла яңы революцион күтәрелеш осоронда, Афзал Таһиров Киев ҡалаһында Коммунистар партияһы сафына инә.

1918 йылдан алып 1920 йылға тиклем ул граждандар һуғышында була. Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, индустриализация һәм ауылдарҙы коллективлаштырыу осоронда Афзал Таһиров совет, партия һәм матбуғат органдарында яуаплы эштәр башҡара.

1925—1927 йылдарҙа Мәскәүҙә Коммунистик академияла уҡый. Академияны тамамлағас, А. Таһиров КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетына партколлегия секретары итеп ебәрелә, ә 1931 йылда ул БашЦИК председателе посына үрләтелә һәм 1937 йылға тиклем шул урында эшләй. Бер ҡаҡытта Башҡортостан яҙыусылары союзы етәксеһе булараҡ ҙур эштәр башҡара.

А. Таһиров Октябрь революцияһына тиклем үк әҫәрҙәр яҙа башлай. Уның тәүге «Бисура» комедияһы 1907 йылда яҙыла, аҙаҡ «Һатылған ҡыҙҙар», «Әтрәгәләмдәр», «Йәмәлкә тауы» кеүек проза әҫәрҙәре баҫылып сыға. Совет власы шарттарында уның ижады айырыуса активлаша. «Һалдаттар», «Ҡыҙыл гвардеецтар», «Ҡыҙыл армеецтар» романдарын, «Иген фабрикы», «Машиналар ҡаны», «Тәүге көндәр», «Комсомол», «Штурвалсы» кеүек повестарын һәм бик күп һандағы хикәйә һәм очерктарын ижад итте.

А. Таһиров проза жанры менән параллель рәүештә драма жанрында актив эшләне. Уның бөтәһе егермәләп сәхнә әҫәрҙәре бар. Айырыуса «Алатау», «17—30», «Үрнәк», «Завод», «Ҡалдыҡтар», «Себерәк Гилман» кеүек драма әҫәрҙәре театрҙар сәхнәһендә йыш ҡуйылдылар.

Күренекле яҙыусының байтаҡ прозаик, драматургик әҫәрҙәре рус һәм башҡа телдәргә лә тәржемә ителгән.

ҮРНӘК

Драма

Биш шаршауҙа

Катнашалар

Сәләх Исхаков — колхоз председателе, 30 йәштәрҙә.
Ғәлим Мортазин — идарала секретарь һәм бухгалтер, 32 йәштәрҙә.
Гөлсөм — актив колхозсы.
Осҡон — Гөлсөмдөң ҡыҙы, комсомолка.
Алма — комсомолка.
Сәлихә — комсомолка.
Ҡәйүм — комсомолец.
Ғәйнулла — колхоз идараһы ағзаһы, 50 йәштәрҙә.
Миңлебай — актив колхозсы, 42 йәштәрҙә.
Әптерәй — комсомолец.
Сәлимә — мөғәллимә, комсомолка.
Тимерәй — йәш актив, колхозсы.
Мәрфуға — ясле тәрбиәсеһе.
Мансур Галин — эшсе.
Ғәйниямал — ауыл ҡатыны.
Шәкүрә — тол ҡатын, колхозсы.
Шәрип — колхозсы.
Хәйрулла — кулактар һүҙенә бирелеүсән.
Гәрәй — бер аҙ уҡымышлы.
Ғази — кулак.
Ғәйшә — Ғазиҙың ҡатыны.
Абил — совхоз директоры.
Гөлсирә — ирҙән айырылған ҡатын.
Әкбәр — колхозсы.
Хәлим — кулак.
Ғариф — колхозсы.
Мәхмүт — йәш егет.
Иван — ауылда электән үк тимерсе булып эшләй.
Мәзин.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Шаршау күтәрелмәс борон музыка уйнай. Сәхнәлә клубтың эске күренеше. Клуб матур йыйыштырылған. Төрлө плакаттар. Шунда уҡ ячейка йыйылышына өҫтәл әҙерләнгән. Ҡәйүм, Әптерәй, Осҡон, Алма музыка көйөнә физкультура яһап инәләр. Уларҙың физкультура уйнағандарын клубтың зур тәҙрәһенән Фази бай, Хәлим бай, мәзин, Әкбәр хайран ҡалып үртәп торалар.

Бер, ике, һул — бер, ике, һул.
Төҙөү эшендә — эшсе, батыр бул.
Бер, ике, өс — бер, ике, өс,
Беҙ өслөгә өс — беҙҙә күмәк көс.
Бер, ике, һул — бер, ике, һул,
Һуңғы еңеүгә — эшсе, әҙер бул.
Бер, ике, өс — бер, ике, өс,
Беҙ өслөгә өс — беҙҙә һымаҡ көс.

Кулактар, физкультура яһағанда, бөтә хәрәкәткә төрлө ҡыланыштар яһайҙар. Ахырҙа Әкбәрҙе саҡырып алып, ҡотортоп индереп ебәрәләр. Әкбәр инеп ҡыҙының ҡулынан тота.

Әкбәр. Оятһыҙ! Һиңә шулай ҡыҫҡа ыштан кейеп, боттарыңды күрһәтеп, егеттәр менән бергә ырғандап йөрөргә, еткән башың менән оят түгелме.

Осҡон. Атай, бәйләнмә, *(тәҙрәгә күрһәтеп)* бар. Йөрөй бир үҙ юлың менән.

Ҡәйүм. Физкультура тән сәләмәтлеге өсөн кәрәк. Һин, үҙең төшөнмәгәс, екеренмә.

Әкбәр. Һин, энем, тән сәләмәтлеген ҡыҙҙар менән уйнамайынса ғына яһа, йәме.

Әптерәй. Һин, колхоз ағзаһы булған көйгә, кулак һүҙен һөйләп, улар менән йөрөйһөң, кит.

Барыһы ла. Сыҡ бынан! Кит! *(Төрткөләп сығаралар.)*

Мәрфуға. Әйҙәгеҙ, теге декламацияны әҙерләйек.

Барыһы ла теҙеләләр.

Ҡәйүм. Дошмандарҙан илде һаҡлайым, килһәләр кире ҡаплайым.

Әптерәй. Беҙҙә көс.

Алма. Беҙҙә үс.

Осҡон. Удар темплы беҙҙең эш.

Барыһы ла. Европаны ҡыуып етеп, беҙ уҙырбыҙ был килеш.

Ҡәйүм. Беҙҙең колхоз ударный.

Б а р ы һ ы л а. Иҫкелеккә ударник.
С ә л и х ә. Уңға бер.
А л м а. Һулға бер.
Б а р ы һ ы л а. Ярыш менән алға бар.
О с ҡ о н. Ҡаршы килгән синфи дошман.
Б а р ы һ ы л а. Килһен бөгөн зыр-зөбәр.
Ҡ ә й ү м. Ҡара көстәр ит серетә.
Ә п т е р ә й. Имеш, советтар бөтә.
О с ҡ о н. Көлмәгеҙ.
А л м а. Үлмәнек.
Ҡ ә й ү м. Һүнмәнек беҙ, көсәйҙек.
Б а р ы һ ы л а. Дошмандарҙы тар-мар иттек, йөҙ бәрәһен, ун бәреп.

Йүгереп әйләнәләр, Ф а р и ф килеп инә. Күрәләр.

Б а р ы һ ы л а. Ә-ә, Фариф ағай.
Т и м е р ә й. Батрак Фариф.

Әйләндереп алалар.

Ф а р и ф. Һаумыһығыҙ. Эйе шул, батрак Фариф ағағыҙ.
А л м а. Бик иҫәнбеҙ, үҙең иҫәнме?
Ҡ ә й ү м. Фариф ағай, ни эш бөтөрөп йөрөйһөң?
Ф а р и ф. Колхоз председателе коммун Сәләхте йәки Фәлимде күрергә ине.
О с ҡ о н. Улар Иманғол ауылына йыйылышҡа киттеләр. Унда бөгөн ҙур йыйылыш.
Ф а р и ф. Эй эттәгенәһе, шулай күрәһең. *(Сыға башлай.)*
А л м а. Әйҙә, беҙҙең менән аҙыраҡ уйнап ал.

Фарифты уратып алып, хор менән йырлайҙар.

Ҡара тупраҡтарға батып. теҙҙән алып*
Аяҡтары ҡатҡан, ҡарайған.
Яҙғы елдәр киҫкән ирендәрен,
Ҡояш ашап бите ҡарайған.
Сирәм йырған аяҡ табандары
Һөйәк булып ҡатҡан, һарғайған.
Нисә йылдар, көнөн төнгә ҡушып,
Бураҙнанан аяҡ алмаған.
Иген иккән тынмай, ғүмергә
Туҡырамайса, меҫкен, талмайса.

* Дауыт Юлтыйҙан.

Ғ а р и ф. Һай, йырлап булмаҫ бит, ҡарт күкрәгем ҡыҫыла.

Ҡаты эш ватҡан минең тәнемде.
Зәғифләткән ул был күкрәгемде.
Һүнә яҙған инде йәшлек дәрттәрем.
Һанһыҙ эштә үткән барлыҡ ғүмерем.
Байҙар, байғуралар эшендә.
Ҡорбан булған шулар кәйефе өсөн
Ташып торған йәшлек көнөм дә.

Ғариф йырлағанда төрлө йөҙ алалар. Мәрфуға йырлай башлағас, төрлөһө төрлө яҡҡа таралып ултыралар. Төрлө тауыш менән хорға ҡушылалар.

М ә р ф у ғ а *(йырлай).*

Туҡ булырһың һин дә, туғанҡай.
Колхозлаш, шундай яй.
Яңғыҙ ҡалма һин улай.
Күрмәйһеңме, беҙҙә колхоз
Сәскә ата, алға бара.
Ҡалма, туған, артҡа ҡалма.

Ҡ ә й ү м *(Фариф эргәһенә барып).* Һин, Ғариф ағай, ниңә колхозға инмәйһең?

Ғ а р и ф *(аптырап).* Ә... мин... туғандар, беләһегеҙме? Батша заманында, ана теге Дауытов байҙа егерме йыл күсер булып хеҙмәт иттем. Бына шул саҡта ул сплавта управляющий ине.

Кулактар ҡоткоһона бирелеп, Э к б ә р инә.

Э к б ә р *(Ғарифтың ҡулынан һөйрәп).* Эй, һин, әйҙә. Нәмә бында тораһың, тегендә һине көтәләр бит. Әйҙә, әйҙә. *(Ғарифты ситкә алып һөйләй.)*

Ғ а р и ф. Туҡта әле, мин бер аҙ һөйләшеп танышмаҡсы булам.

Э к б ә р. Эй, йолҡош, бар инде, унда һине көтәләр бит. *(Һөйрәп алып сығып китә.)*

Тәҙрәнән Ғази менән Хәлим байҙар саҡыралар. Алып китәләр. Йәштәр тәҙрәгә барып, кулактарҙы оҙатҡас, тәҙрәнән Ғәйнуллаларҙы күрәләр.

Ҡ ә й ү м. Ана, правление ағзаһы Ғәйнулла ағай менән актив Миңлебай ағай килә.

Э п т е р ә й. Завхозыбыҙ Тимерәй ҙә килә.

О с ҡ о н. Ни эшләп йөрөйҙәр һуң былар.

А л м а. Бәй, ячейка бюроһының йыйылышы булды бит. Иҫке Иманғол ауылында тотош колхозлашыу эше бара бит. Шунда барырға йөрөй торғандарҙыр.

Ҡ ә й ү м. Унда йәштәр йыйылышы ла була.

Ә п т е р ә й. Беҙ ҙә шунда барып комсомол ячейкаһы йыйылышы яһарбыҙ. Сәләх менән секретарь Ғәлим дә шунда киттеләр.

О с ҡ о н. Беҙ ҡатын-ҡыҙҙар йыйылышы уҙҙырырбыҙ. Әйҙә, Мәрфуға, Шәкүрә менән әсәйемде алып киләйек.

Былар сығыуға ҙур дәрт менән Т и м е р ә й, Ғ ә й н у л л а, М и ң л е б а й инәләр. Өҫтәл эргәһенә ултыралар. Ә к б ә р ҙ е тәҙрә аҡһыры саҡыралар.

М и ң л е б а й. Әкбәр, кил әле, яҡыныраҡ, ниңә гөнаһлы кеше һымаҡ ҡасып йөрөйһөң.

Ғ ә й н у л л а *(Әкбәргә уҫал ҡарап)*. Һин, Әкбәр, колхоз ағзаһы була тороп, ниңә Ғази байҙар менән бергә йөрөйһөң?

Ә к б ә р. Ниңә, Ғази бай менән йөрөргә ярамаймы ни?

Ғ ә й н у л л а. Кешеһенә ҡарап ҡатышалар уны. Улар беҙҙең ауылда ни эшләп йөрөйҙәр.

Ә к б ә р. Иҫке ауылдың ярлы Ғариф беҙгә килгән. Шуны ғына һоранылар. Мин Ғарифтың ҡайҙалығын әйттем.

М и ң л е б а й. Уларға Ғариф ниңә кәрәк булған?

Ә к б ә р. Әллә тағы. Унда минең ни эшем бар.

Т и м е р ә й. Юҡ, Әкбәр ағай, һин колхоз кешеһе булғанға күрә лә, ундай кулактар менән аҫтыртын ғына йөрөүеңдә сер булырға кәрәк.

Ә к б ә р. Юҡты һөйләмә, мин һинең ундай сер-мерҙәреңде белмәйем.

Ғ ә й н у л л а. Шулай булһа ла ни эшләп йөрөгәндәрен һиҙмәнеңме?

Ә к б ә р. Юҡ.

Т и м е р ә й. Хәтерең ҡалмаһын. Хәҙер тирә-яҡ ауылдарҙа тотош колхозға күсеү тураһында эш бара. Ә һин һүлпән генә әллә кемдәр менән йөрөйһөң. Һин колхозсы кеше бит, был эш тураһында янып йөрөргә кәрәк ине.

Ә к б ә р. Тукта әле, энем. Башың йәш әле һинең. Эйе, башың йәш. Крәҫтиәндәр тотош колхоз түгел, артелгә инергә лә ашыҡмайҙар. Дөрөҫөн әйткәндә, мин был турала шикләнәм. Ул уйын түгел.

Т и м е р ә й. Ҡуй, кулактар һүҙен һөйләмә беҙгә.

Ә к б ә р. Ана Абил, райондан килгән — коммунист. Ул сәйәсәтте һинең тиклем генә белә. Ул да был эшкә шикләнеп ҡарай. Ул бит нисә йыл кооперативта эшләне.

М и ң л е б а й. Беләбеҙ, беләбеҙ Абилығыҙҙы. Ул теге Ғази кулактың ҡатынында ашай булырға кәрәк.

Әкбәр. Ашаһа ни, ярамаймы ни? Ғази ҡарт кеше үлтермәгән дә баһа.

Миңлебай. Юҡ, улай түгел, Әкбәр ағай. Байҙар эргәһендә йөрөгәс, бай йырын йырлай башлай инде ул.

Тимерәй. Йә, юҡҡа һүҙ көрәштермәгеҙ, Иманғолға колхоз төҙөү тураһындағы йыйылышҡа барабыҙмы? Әйтегеҙ.

Ғәйнулла. Эйе, правление ағзаларының барыһы ла барырға тейеш.

Ҡәйүм. Барабыҙ, ниңә бармай ти. Комсомолдарҙан беҙ дүрт кеше булдыҡ.

Гөлсөм, Шәкүрә инәләр.

Гөлсөм. Йә, Иманғолға барырға йыйылып бөттөгөҙмө? Беҙ әҙер.

Миңлебай. Барабыҙ. Әҙерләндек. Йыйылыш ҙур буласаҡ. Бөгөн беҙ еңергә тейешбеҙ.

Әкбәр. Өй эшен йүнләп ҡарау юҡ, был ҡатындарға ни бар һуң инде.

Тимерәй. Әкбәр ағай, был ни тигән һүҙ. Ҡатын-ҡыҙ бармайынса, активтар бит улар.

Гөлсөм. Бына бынан һуң, әйҙә, һеҙ ҙә ултырып ҡарағыҙ.

Әкбәр. Эшкә тиһәң, береһе лә күренмәй, йыйылышҡа тиһәң, әҙер торалар. Мин уның ире, мин әйтмәй кем әйтһен.

Ғәйнулла. Юҡ, Әкбәр, һин улай ҡатын-ҡыҙҙарға юҡ һүҙҙәр менән бәйләнмә. Ул турала беҙ үҙебеҙ ғәйепле. Бына беҙ уларҙың эшенән көлөргә әҙер торабыҙ. Уларға ярҙам итмәйбеҙ, өйрәтмәйбеҙ.

Тимерәй. Колхозды дөрөҫ юлға ҡуйыр өсөн, Әкбәр ағай, ҡатын-ҡыҙҙарҙы эшкә тартырға кәрәк.

Ҡәйүм. Синфи һыҙыҡты тура үткәрергә партияның тура юлын уларға аңлатырға кәрәк.

Әкбәр. Эйе, ҡыйратаһығыҙ. Аяҡ кейемдәре бөттө. Өҫкә-башҡа ҡалманы. Байыныҡ инде, етмәһә, тотош колхоз тигән булалар тағы.

Гөлсөм. Юҡҡа аптырарға ярамай. Яңы ғына эш башлаған колхоздан барыһын да бер юлы көтөү урынһыҙ. Ас-яланғас булғаныбыҙ юҡ әле. Беҙ бынан да ауырыраҡ, етешмәгәнерәк йылдарҙы үткәрҙек. Хәҙер алдыбыҙға алған ҙур эште тейешенсә башҡарһаҡ, барыһын да еңеп сығырбыҙ.

Әкбәр сыға.

Әптерәй. Дөрөç. Эй апаһы ла апаһы. Йәшә.

Миңлебай. Йә, ярай. Бына нәмә, иптәштәр. Ауылға барғас...

Ҡәйүм *(бүлеп)*. Ячейка бюроһында ҡарар ителгән эштәрҙе тормошҡа үткәрергә кәрәк. Иманғол ауыл ячейкаһы ла шулай итә.

Ғәйнулла. Эйе шул. Теге кулактар тураһында ныҡ торорға кәрәк. Барғас, собранией тиклем, ярлылар һәм актив йыйылышы яһап алырға кәрәк.

Шәкүрә. Инде үҙебеҙҙең эште юлға һалырға торғанда, был тотош колхозды ҡайҙан килтереп сығарҙылар.

Тимерәй. Үҙебеҙ төҙөнөк бит. Тирә-яҡҡа ла төҙөшөп бирергә кәрәк.

Әптерәй. Шунһыҙ кулактан ҡотолоп булмай.

Комсомолдар инәләр.

Миңлебай. Әле һеҙ китмәгәнһегеҙ икән. Һеҙ йәйәү барырһығыҙ. Ике арбаға һыя алмабыҙ.

Осҡон. Ярар, ярар. Йәйәү барырбыҙ. Беҙгә ячейканың установкаһын Сәләх ағай әйтте. Беҙ шуны элек ундағы комсомолдар араһында үҙҙырабыҙ.

Алма. Күмәкләшеп, йырлашып барабыҙ, башла әйҙә, Әптерәй.

Әптерәй. Була ул.

Йырлай башлайҙар, тышҡа сығып, тәҙрәнән үҙып киткәнсе йырлап китәләр.

Яңғыҙлыҡты һалып арт яҡҡа,
Колхоз булдыҡ күптән ауылда;
Ҡара ерҙең һығып уңыш майын
Центнер-центнер орлоҡ алырға,—
Тирә-яҡ колхозсылар —
Күмәкләшеп эшкә барғанда.
Ә машина алдан йырлап бара,
Колхозсы итеп уны алғандар.

Ут һүнә.

Икенсе күренеш

Иманғол ауылы, матур ғына йыйылған бер өй. Бай өйөнөң йыйылған матур залы күренә. Уртала өҫтәл. Коммунист Абил, Ғази ҡатыны Ғәйшәнең битенән уң ҡулы менән уратып алып үбә, Ғәйшә сығып китә. Абил яңғыҙ ҡала.

Абил. Был ауыл ячейкаларына, һис бер нәмә белмәгән ярлыларға былай ирек ҡуйырға ярамай. Былар-

ҙың хәҙер күҙен ҡан баҫҡан. Көнө-төнө йыйылыш та йыйылыш. Колхоз төҙөү тураһында барыһы ла шаулай. Ячейкалары, етмәһә, тотош колхозға ынтыла. Быларҙы бер аҙ артҡа сигерергә кәрәк. Булмаһа, тотош колхоз төҙәбеҙ тип восстание сығарырҙар. Ана шул колхоз төҙөү ҡыҙыуы менән йөрөп, минең эшкә лә ҡамасаулайҙар. Ә халыҡ өҫтөндәге бурыстарҙы йыйырға кәрәк.

Ғәйшә *(башын тығып)*. Абил, һин әле ашарға килдеңме? Сәй бирәйемме? Әллә бер юлы ашын да көтөп ашап ҡайтырһыңмы? Йәки ҡарт ҡайтҡанды көтөп бергә ашарбыҙмы?

Абил. Бөгөн бына шул колхоз тураһында дүрт ауылдың берләшкән собраниеһы була, ти. Мин дә шунда барырға мәжбүр. Шуға ашап барырмын тип килгәйнем.

Ғәйшә *(инеп)*. Ҡара әле, Абил йәнем. Һин колхоз тураһында һөйләп, минең ҡартымды ҡурҡыта күрмә.

Абил. Юҡ, мин ҡурҡытмайым. Әле ул колхоз эштәре минең үҙемә лә бер көлкө булып ҡына күренә. Йыйылышта ҡысҡырыуҙан башҡаны белмәгән наҙан халыҡ менән ниндәй колхоз төҙөү булһын ул.

Ғәйшә. Абил, ысынлап та, әйт әле. Ул колхоз тигән нәмәне кем уйлап сығарған һуң? Ул ҡайҙан килеп сыҡҡан нәмә?

Абил. Улмы? Ул шулай инде. Ул колхоздың төҙөлөүе кәрәк. Ләкин хәҙер түгел, ҡасан беҙ крәҫтиәндәрҙе байытып бөтөрәбеҙ. Ана шул саҡта крәҫтиәндәр үҙҙәре колхоз булып бөтәсәктәр.

Ғәйшә. Мин дә шулайҙыр тим шул.

Көлөп, Абилды үбеп торғанда, ишектән бер нисә кеше һөйләшкән тауыш ишетелә.

Абил. Туҡта, булманы инде. Мин ашҡа яңынан килермен. *(Сығып китә.)*

Хәлим *(инеп)*. Бына беҙҙә лә колхозға инәбеҙ тип кенә йөрөйҙәр. Теге коммун Сәләхтәр хәҙер үк коммунаға күсәбеҙ тип әйтәләр, ти. Етмәһә, был беҙҙең ауылға килеп тотош колхоз тиҙәр. Донъя ҡоротҡостар...

Фази. Уның иң ҡурҡынысы ла ошо коммуна инде. Уларҙың унда ячейкаһы ла, комсомолдары ла бөтә крәҫтиәндәрҙе аҡрын булһа ла, үҙҙәренә ҡараталар. Аҙ ғына бер нәмә булһа, крәҫтиәндәр шунда сабалар.

Хәлим. Теге Әкбәр ниңә һуң нығыраҡ аяҡ салмай. Әле был барыуҙа йыйылышта тауыш сығарырға вәғәҙә бирҙе бит.

Ғ а з и. Әле бына политика өсөн, хи-хи-хи, минең бит бик матур бер балдыҙ бар. Әкбәрҙе шуның менән таныштырҙым әле. Хәҙер Әкбәр беҙгә йыш килә.

Х ә л и м. Бик шәп булған. Сәйәсәт өсөн бик ярай торған эш ул. Ҡатын-ҡыҙ арҡыры бик ҙур эштәр бөтөрөргә мөмкин.

Ғ а з и. Ул кемде генә булһа ла утҡа баҫтыра ала. Хабаровскиҙан уратып ҡайтҡан бит. Ә үҙе теләгән кешене һоҡландырырлыҡ, мыймылдап тора.

Х ә л и м. Мыймылдап тора тиген. Улай булғас, бик үткерҙер инде ул.

Ғ а з и. Бына силкур тигәндәре бик теңкәгә тейә бит әле. Үҙҙәре ямғыр артынан күбәйгән бәшмәк һымаҡ күбәйәләр. Былтыр теге Сәхип ваҡиғаһынан һуң бер аҙ баҫылғандар ине. Быйыл тағы ла күтәрелә башланылар.

Х ә л и м. Теге «Күреүсе» тип яҙыусы кем икән, белмәйһеңме? Бына шул машиниктыҡулға төшөрөргә кәрәк.

Ғ а з и. Белмәйем шул. Белһәм инде, мин әллә ҡасан күрмәүсе итер инем инде уны.

Х ә л и м. Шулай ҙа һаҡ булырға кәрәк. Сәхиптеке һиҙелмәне һиҙелеүен. Хәҙер бит улар тураһында судтарҙа бик ҡаты тоталар.

Ғ а з и. Беҙ ҙә йомшаҡ тотмаҫ инек тә, ҡулға ғына эләкмәйҙәр.

Ғ ә й ш ә *(инеп)*. Ай ҡарт, һин ҡайтҡанһың икән. Ҡунаҡтар ҙа бар икән. Мәхзүм ҡайнаға ни хәл? Өй эстәрегеҙ һауҙармы?

Х ә л и м. Бик шәптәр әле, килен, үҙегеҙ һаумыһығыҙ? Алъяпмалар быуып, әллә ниҙәр һиммәтләп йөрөйһөң?

Ғ ә й ш ә. Юҡ, бына әле һөт ҡайнаттым. Теге беҙҙә ашап йөрөгән коммунисҡа сәй әҙерләйем тигәйнем дә, бергә эсерһегеҙ инде.

Ғ а з и. Гөлсирә өйҙә юҡмы әллә? Күренмәй. Ниңә балдыҙҙы бер ҙә өйҙә тотмайһың?

Ғ ә й ш ә. Ә ул күрше ветеринарҙарҙа ултыра шикелле. Уның менән Дидувка баҙарына төшкәндәр ине. Ҡара әле, ҡарт, ошо Абил, колхоздарға барыбыҙҙы ла күсерәләр, ти ҙә баһа.

Ғ а з и. Халыҡты ҡаршы ҡотортоп ҡуйып, бөгөн йыйылышта шул эштәргә юл бирмәҫкә ине.

Х ә л и м. Минеңсә, шул коммун Сәләхте нисек кенә булһа ла, ҡулға алырға ине. Гөлсирә ҡоҙасаны шул эшкә ҡушырға ине.

Ғәйшә. Ул да өйләнмәгән егет булырға кәрәк. Әллә ҡарт шуны сәйгә алайыҡмы?

Ғази. Эйе, алмай ни, алырһың, ул үҙенә күрә түгел. Теге Әкбәр беҙгә ингәйне, шуны күргән дә бер көн дөйөм йыйылышта бөтә халыҡ алдында: «Әкбәр кулактарға сәйгә инә икән, уны ауыҙлыҡларға кәрәк», — тип әйтә, ти.

Ғәйшә. Ай алла, беҙ һуң кемде үлтергән дә, кемдекен урлаған? Ай-һай был саҡтағы йәштәрҙе әйтәм.

Тышта йырлаған тауыш килә, Гөлсирә йырлап инә.

Гөлсирә *(күрешә)*. Ә беҙҙә ҡунаҡ бар икән дә баһа. Хәлим ҡоҙа килгән. Һаумыһығыҙ?

Хәлим уны күреү менән яйланған булып, матурайған булып, һаҡал-мыйыҡтарын һыйпап ҡуя.

Ғази. Һин, балдыҙ, ҡайҙа йөрөйһөң? Беҙҙе һағындырҙың һин. Һиндә аҙыраҡ йомоштар бар ине әле.

Ғәйшә. Шул ветеринар менән ҡурҡмайынса баҙарға нисек барып йөрөйһөң?

Гөлсирә. Ниңә ҡурҡырға? Ул айыумы ни? Мин донъяла бер кешегән дә ҡурҡмайым. Мин Хабаровск тиклем ерҙән бер үҙем йөрөп ҡайтҡан кеше!

Хәлим *(көлөп)*. Шулай, ҡоҙаса, шулай кәрәк. Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер тигәндәр боронғо ҡарттар.

Ғази. Ярай, ярай. Ҡара әле һин, Ғәйшә, кухняға сығып тор әле, беҙҙең Гөлсирәгә һөйләй торған бер планыбыҙ бар, ни шунда ашарға берәй нәмә әҙерлә.

Ғәйшә. Ай алла. Ниңә, минең алда һөйләргә ярамаймы ни уны? *(Сыға.)*

Гөлсирә *(төҙәнеп, биҙәнеп йөрөп)*. Эй ҙнә, һин мине бер сәйәси агент итеп бөтөрҙөң инде былай булһа. Ләкин күпме жалование билдәләнең һуң?

Хәлим. Дөрөҫ, ҡоҙаса, жалование тигән нәмә ҡасмаҫ, уны билдәләрбеҙ. Эш барып сыҡһа, уныһы булыр...

Ғази. Ярай, ярай. Барыһы ла булыр. Бына нәмә, балдыҙ. Үҙең дә яҡшы беләһең, донъя насарлана бара. Беҙҙең хәл көндән-көн насарлана. Әле бергә-бергә көн күрә инек.

Гөлсирә. Йә, һүҙҙе оҙайтма, бер сәйәси авантюра ғына ҡорайыҡ тиген дә ҡуй инде.

Ғази. Юҡ, нисек авантюра булһын ул. Мин әле бер төрлө хәллерәк халыҡҡа насар була бара, тим.

Х ә л и м. Йәғни мәҫәләң, тотош колхоз ҡорабыҙ тип ҡысҡыралар бит әле.

Г ө л с и р ә. Ҡорһалар миңә барыбер. Мин бына заведующийға кейәүгә сығам да типтерәм. Минең дүрт яғым ҡибла. *(Барып ултыра.)*

Ғ а з и. Һин шулай ҙа бит. Беҙ ни эшләрбеҙ һуң? Һин беҙҙе лә онотоп ебәрмә. Балдыҙ, ҡуй әле, шаярма. Эш бик кәрәкле, тыңла әле.

Х ә л и м. Ҡоҙаса, ысынлап та, һин беҙҙе ҡызғаң. *(Эргәһенә барып.)* Ҡоҙаса, улай һөйләнмә. Беҙҙең менән бергә бул, юғиһә беҙ харап булабыҙ. Шаярма әле, ейнәңдең һүҙҙәрен тыңла.

Г ө л с и р ә. Йә, хуш, нәмә бар? Һөйләгеҙ. Тыңлайым. Кемде үлтерәбеҙ ҙә, кемде һыуға батырабыҙ.

Ғ а з и. Юҡ, балдыҙ, эш ул тиклем түгел. Теге өс малайҙы иҫкә алма әле һин. Ул ваҡиға булған да уҙған. Бына бынығы улай түгел.

Г ө л с и р ә. Ярай, ярай, була ул. Һеҙ тигәндә баш өҫтө. Бер нисәһен эшләгәс инде, аҙағында тайпылырға ярамай. Ләкин бына был яғы бар: эш улай-былай була ҡалһа, мине заграницаға сығарып ебәреү яғын ҡарағыҙ.

Ғ а з и. Уныһы була ул. Үҙең беләһең бит. Аҡса тиһәң, ул бар.

Г ө л с и р ә. Бына Максимич әйтә: заграницала Советҡа ҡаршы эш алып баралар, ти. Ах ул ҡыҙыҡ итеп һөйләй.

Ғ а з и. Бына, балдыҙ, беҙ бер нисә кеше бында ойошып, йәғни Әкбәр, Кәрәмәт һәм башҡаларҙы үҙ яғыбыҙға ауҙарып, колхозлашыу эшен һәм коммунаны булдырмаҫҡа кәрәк.

Г ө л с и р ә. Һуң миңә ни эшләргә ҡушаһығыҙ. Йырларғамы? *(Бер матур көйгә йырлай.)*

Көләләр.

Ғ а з и. Балдыҙ, туҡта әле. Әлеге Әкбәр менән Кәрәмәттә үҙ яғыбыҙға ауҙарыу өсөн һин беҙгә ярҙам ит.

Х ә л и м. Йәғни мәҫәләң, был инде сәйәсәтте алып барыу өсөн була инде, ҡоҙаса. Ундай эш өсөн ни эшләһәң дә ярай, гөнаһы юҡ.

Г ө л с и р ә. Шулаймы ни, ҡоҙа. Эш ҡайҙа ғына икән. Шулай икән. Ха-ха-ха, эй, ҡоҙа, ул шәриғәтте күптән әйтмәйенсә.

Ғ а з и. Балдыҙ, үҙең дә беләһең, беҙ бит инде, ошо көһәр Совет сыҡҡандан бирле, көрәшеп арыныҡ. Һин беҙҙе ташлаһаң, беҙгә үлергә генә ҡала.

Х ә л и м. Беҙҙең бөтөү ул — һеҙҙең кеүек матур туташтарҙың да бөтөүе...

Г ө л с и р ә. Ярай, ҡарармын, Әкбәр, Кәрәмәт нәмә ул, бына һеҙ коммун Сәләхте ҡулға төшөрөргә тиһәгеҙ, исмаһам, ул эш булыр ине.

Ф а з и. Инде, балдыҙ, барыһы менән дә эш итә алмаҫһың, хәҙергә алдыбыҙҙағылары ла етеп торор. Унан һуң тегеләрен ҡарарһың.

Х ә л и м. Улай булғас, ҡоҙаса, һин риза инде, Фази, ҡайҙа, нисек план ҡорабыҙ?

Г ө л с и р ә. План?

Ф ә й ш ә *(йүгереп инеп)*. Ҡарт, һиңә әйтәм. Бик һаҡ булығыҙ. Беҙҙең ауылға Сәләх, Фәлим тағы бер нисә Үрнәк ауылы кешеләре килде. Ячейкалары йыйыла торған Совет йортона киттеләр.

Ф а з и. Ярай. Яҡшы белдерҙең әле уны.

Х ә л и м. Беҙ шуларҙы барып тыңлайыҡ әле. *(Тәҙрәгә барып ҡарайҙар.)*

Г ө л с и р ә *(биҙәнеп)*. Коммун Сәләх тә бында тиһеҙме? *(Ауыҙ эсенән йырлап ала.)* Ну ярай, еҙнә, мин кәрәк-фәлән булһам, күрше врачта булырмын. Мин автомобиль менән...

Ф а з и *(бүлеп)*. Тс! Шулай, балдыҙ...

Ҡулы менән бөтәһенә лә ишара итә. Өсөһө лә сәхнә уртаһына килеп, аҡрын ғына һөйләшәләр.

Шаршау

Өсөнсө күренеш

Ауыл Советы бүлмәһе. Унда С ә л ә х, Ф ә л и м, был ауылдың активы М ә х м ү т, А б и л һөйләшеп ултыралар.

С ә л ә х. Юҡ, Абил иптәш. Бында һин үҙең ғәйепле. Ауылда коллективлашыу бара, иҫке тормош емерелә. Синфи дошман көсәйә бара. Һин шундай ваҡытта ла беҙгә ярҙам итмәйһең. Үҙең райондан килгән партийный эшсеһең.

А б и л. Мин һеҙгә ярҙам итергә һеҙҙең ҡарамаҡтағы кеше түгел. Ә округтан килгән уполномоченный. Минең үҙ эшем бар. Аҡса, кредит эштәре. Мин халыҡты колхозға былай тиҙ индерергә ышана алмайым. Әле уға иртә.

Ф ә л и м. Юҡ, иптәш Абил. Ваҡыт бик етди. Мәсьәләгә улай ҡарарға ярамай.

Сәләх *(сәсен һыпырып)*. Тәк-тәк, значит, һеҙ белә-һегеҙ, беҙҙең задача — капитал элементтарына бөтә фронт буйынса һөжүм итеү. Бына ошо юлда ауылдың ярлы һәм урта хәллеләрен ойоштороу мәсьәләһе лә тора.

Фәлим. Беҙ һиңә аптырашта ҡалдыҡ. Ауылда ҙур эштәр бара, ә һин беҙҙән ситтә йөрөйһөң.

Сәләх. Тәк-тәк, значит. Һеҙгә билдәле. Беҙ бына ошо көндәрҙә райкомдан колхоз төҙөлөшөн көсәйтеү тураһында директива алдыҡ.

Абил *(көлөп)*. Райкомдан да директива булғас ни, әйҙә, ҡуй шуны тормошҡа.

Сәләх. Беҙ алдан ярлы, урта хәллеләр менән аңлашып эш итәбеҙ. Минеңсә, директива менән...

Абил *(бүлеп)*. Эйе, беләм. Һеҙ әйткән мәсьәлә — ҙур эш. Шуның менән бергә, крәҫтиәндәр өсөн колхоз — хәҙер күтәрә алмаҫлыҡ бер эш. Колхозға, раскулаченныйҙарға бөтә крәҫтиән теше-тырнағы менән ҡаршы торасаҡ.

Фәлим. Һеҙ инде аҙыраҡ арттыра төшәһегеҙ. Крәҫтиәндәрҙең дә төрлөһө бар бит. Бар кулагы, урта хәллеһе, ярлыһы. Дөрөҫ, кулак ҡаршы. Ул Октябрь революцияһына ла ҡаршы ине. Тик кулак ҡаршы килеү менән революция булмай ҡалманы. Ә урта хәлле, ярлы крәҫтиәнгә мәсьәләне төрлө яғынан аңлатҡанда, һүҙһеҙ, ҡушыласаҡ.

Сәләх. Конечна, контрҙар ҡаршы килә тип пролетариат диктатураһын тормошҡа ашырмай ҡалмабыҙ.

Фәлим. Пролетариат беҙгә был эштә етәкселек итер.

Сәләх. Һеҙ улай уҡ паникаға ҡалмағыҙ. Партияның юлбашсылығынан һеҙ юҡҡа ҡурҡаһығыҙ. Партияның Үҙәк Комитеты Ленин юлынан бара. Партияның генераль юлын тормошҡа ашырырға тейешбеҙ. Кулактан ҡурҡырға ярамай.

Абил. Юҡ, иптәштәр. Эш минең ҡурҡыу, ҡурҡмауымда йөрөмәй. Фәлим иптәштең әйткәнен аңлайым. Дөрөҫ, крәҫтиәндәрҙең төрлөһө бар. Мин кулагын алмайым. Беҙ әгәр ҙә хәҙер уҡ колхозға күсһәк, урта хәлле крәҫтиән был эшкә ҡаршы киләсәк. Эшселәр менән урта хәллеләр араһы боҙоласаҡ. Именно, бынан революция зарар күрәсәк.

Фәлим. Мин һеҙҙе аңламайым. Колхозға күсеүҙән нисек революция зарар күрһен. Киреһенсә, колхоз эш-төре ни тиклем алға барһа, шул тиклем революциянан күҙәтелгән теләк, социализм теләге тиҙерәк барлыҡҡа киләсәк.

Сәләх. Иптәштәр! Һеҙ һүҙ көрәштереүҙе ҡуйып торорғоҙ әле. Ауыл активтары һеҙ нисек ҡарайһығыҙ? Мәхмүт, һин?

Фәлим. Уларҙың активтарының ҡарары бар. Ярлылар, урта хәлле активтар шуның менән ризалар.

Мәхмүт. Абил иптәш оппортунистар һүҙен һөйләй.

Абил. Как то есть?

Мәхмүт. Очень просто, значит, һин үҙең дә...

Сәләх. Ярай, ҡуйығыҙ әле уны. Эшкә керешергә кәрәк.

Абил. На самом деле, был колхоз мәсьәләһе — серьезный эш. Теләһәгеҙ ни тип әйтегеҙ, мин хәҙер был эште бер төрлө лә башыма һыйҙыра алмайым. Имеш, иген әҙерләү, кооператив эшенә лә яҡшы төшөнмәгән башҡорттарҙы нисек итеп колхозға индерергә кәрәк.

Тәҙрәнән Миңлебай, Ғәйнулла күренә.

Сәләх. Ана, беҙҙең арттан килеп еттеләр. Как раз настоящий средняк хужалар.

Крәҫтиәндәр инеп ултыралар.

Йә, иптәштәр, бик яҡшы килдегеҙ. Үҙегеҙ беләһегеҙ. Бөтә тирә-яҡта колхоздар төҙөү мәсьәләһе тора. Общий йыйылышҡа аңлашып барайыҡ.

Ғәйнулла. Был эш хаҡында ярлылар менән һөйләштек, тотош колхозға күсеү нигеҙендә, кулактарҙы бөтөрөү тураһында.

Крәҫтиәндәр, баш һелкеп, ризалыҡ белдерәләр.

Мәхмүт. Бик ваҡыт, күптән кәрәк ине. Быны аҡыллы ирҙәр бер-ике йыл элек әйткәндәр ине.

Был хәбәр Абилға ныҡ тәьҫир итә.

Абил. Иптәштәр! Һеҙ был эшегеҙ менән һулдар тирмәненә һыу ҡояһығыҙ.

Сәләх *(бүлеп)*. Ҡуйсы әле, Абил. Коммунист башың менән гел киреғә һаплайһың. Беҙ хәҙер синфи көрәштең ҡырҡыулашҡан бер миҙгелен уҙғарабыҙ.

Мәхмүт. Дөрөҫ әйтәһең. Хәҙерге социализмға ҙур көс менән ынтыла торған сәғәт һуҡты. Күп ыҙғышып, талашып, шулай уҡ ҡурҡып тороуҙа мәғәнә юҡ.

Абил. Крәҫтиәндәр колхозға үҙ алдына ла барып инерҙәр ине.

Мәхмүт. Оппортунист һүҙе был. Был һүҙеңде ана теге Сәхип, Гәрәй, Сафиҙарға һөйләргә ярай.

М и ң л е б а й. Миңә бер-ике һүз әйтергә яраймы?

С ә л ә х. Йә, йә, Миңлебай ағай, һөйлә!

М и ң л е б а й. Мин тыңлап торам, торам да, берегеҙ, тотош колхозға иртә, ти, берегеҙ, һуң, ти. Минеңсә, һеҙ улай бер фекергә лә килә алмаҫһығыҙ. Беҙҙең ярлылар ҙа, урталар ҙа тотош колхозға күсергә риза булдылар.

Гөлсөм, Фариф инә.

Ф а р и ф. Сәләх, Фәлим. Өсөнсө көн беҙҙең ауыл байҙары эске мәжлесе яһап, байтаҡ халыҡҡа аҡса таратып, бөгөнгө йыйылышты һүндерергә, тауыш сығарырға план ҡорғандар.

С ә л ә х. Хуш, шунан. Һин үҙең бар инеңме?

Ф а р и ф. Миңә шул мәжлестә булған Хисмәт ағай һөйләне.

М ә х м ү т. Тағы кемдәр булған?

Ф а р и ф. Фәмөрҙәҡ тирмәнгә барған икән. Максим ҡарттың улы Иван уны ла алып ҡайтҡан. Шул әйтә, мине лә алып инделәр, ти. Бик оҙаҡ эстек, аҡса биргеләнеләр. Нисек тә колхозды булдырмаҫҡа тип һөйләнеләр, ти.

М ә х м ү т. Нисек, һин быға тиклем әйтмәй йөрөнөң?

Ф а р и ф. Нисек тип әйтәйем... Мине ҡурҡыттылар. Һис бер ҡайҙа ебәрмәнеләр. Һаман һаҡлап йөрөнөләр.

С ә л ә х. Кулактарҙан кемдәр улар, барыһын да әйтеп сық.

Ф ә л и м *(ҡағыҙ алып яҙа башлай)*. Шул Ғази байҙарҙыр инде.

Ф а р и ф. Уныһы унда булмаған булыуын. Минеңсә, уның да ҡатышы барҙыр. Бигерәк Сәхипгәрәй әҙ биргән. Сәләхи, ҡалмаҡ Фәли, Хәйбулла Әхмәровтар.

М ә х м ү т. Ах, мөртәттәр. Шуларҙы күптән ауылдан ҡыуырға кәрәк ине.

Г ө л с ө м. Аҙ биргән, ниңә мануфактур бирмәйһегеҙ, ниңә сәй, шәкәрҙе хөкүмәт бирмәй тип, тауыш сығарығыҙ, тип өйрәтә, ти.

Ғ ә й н у л л а. Шуға баш була алманығыҙ инде. Ул бит Зәки хөкүмәте ваҡытында партком комиссары ине. Үҙе коммунист ине. Хәҙер инде байып алды ла ниҙәр ҡылана.

С ә л ә х. Уларҙың уҫалы Ғази менән Хәлим байҙар.

А б и л. Ниңә һеҙ улай шул ҡартҡа бәйләнәһегеҙ? Ул хеҙмәт кешеһе.

М ә х м ү т. Ниндәй хеҙмәт кешеһе тағы. Таптың һүҙ. Беҙҙең кеүек ярлы башҡортто әҙ иҙҙеме ни ул.

А б и л. Ниңә ул һаман ағас сплав эш эшләгән. Улы ҡыҙыл гвардеец булып йөрөгән.

Т и м е р ә й. Улы бит, үҙе түгел. Һинең шул Фази ҡартты яҡлауыңды аңлап булмай. Әллә үҙеңде тәмле ашатамы?

А б и л. Ниңә һин личноҫка тейәһең?

Шаулашып к о м с о м о л д а р инә.

Ҡ ә й ү м. Ә һеҙ бында икән әле. Халыҡ йыйыла башланы. Әйҙәгеҙ, йыйылышҡа.

Ә п т е р ә й. Беҙ инде комсомол ячейкаһын да үткәрҙек.

О с ҡ о н. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла.

А л м а. Кулактар ҡатын-ҡыҙҙарҙы бик ҡоторталар икән. Бер ҡатын бар. Оҫтабикә ти буғай. Колхозға ниндәй ҡаршы һөйләй.

С ә л ә х. Йыйылыш башланыу менән шул эштәрҙе халыҡҡа асып һалып разоблачать итеп, бөтәһен белдерергә кәрәк.

Ғ ә л и м. Советҡа һәм партияға ҡаршы булған кеше беҙҙең арала булмаһын.

М ә х м ү т. Кулактарҙың береһен дә йыйылышҡа индермәҫкә кәрәк.

А б и л. Как так? Нисек ебәрмәйһең? Тәүҙә тикшереп белергә кәрәк. Ыны бит бер Ғариф һөйләй. Дөрөҫ һөйләйме, әллә ялғанмы.

М ә х м ү т. Һин, Абил, танауыңа һуҡҡан сүкешкә ҡарап тормаҡсы булаһың.

Ғ а р и ф. Мин дөрөҫ һөйләнем. Бөтә ярлылар исемендән һөйләнем. Минең үҙемде лә һатып алмаҡсы булғандар ине лә, мин инде бер нисә аҙналар уларҙан ҡурҡып йөрөнөм. Хәҙер инде дөрөҫөн әйтәм. Һинән, һинең Фазийыңдан ҡурҡмайым. Сәләх, Ғәлим үҙ колхозығыҙға алырһың бит.

Ҡ ә й ү м. Шулай, шулай, Ғариф ағай. Бер ҙә ҡурҡма. Һин үҙебеҙҙең кеше.

М и ң л е б а й. Һүҙҙән эшкә, колхоз өсөн көрәшкә.

С ә л ә х. Барығыҙ ҙа актив ҡатнашығыҙ.

Ҡ ә й ү м. Йә, комсомолдар, бөтә фронт буйлап.

О с ҡ о н. Йәштәр, әҙер булығыҙ.

Ҡ а л ғ а н д а р. Беҙ әҙербеҙ. *(Ҡулдарына флагтар алалар.)*

Ш а р ш а у

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Дүртенсе күренеш

Шаршау күтәрелгәндә Ғази байҙың өйөндә Хәлим бай, Әкбәр, мәзин бергәләшеп буфет эргәһендә тораҙар ҙа таралышып һүҙ башлайҙар.

Ғази. Коммунала ниҙәр бар? Хәбәрҙәр нисек бара?

Әкбәр *(көлә)*. Һаман алға барабыҙ, тиҙәр. Әле беҙ быға тиклем айырым өйҙәрҙә тороп, айырым ашап, әсә инек. Хәҙер, һалдаттар кеүек, ҡаҙнаға ғына эшләп йөрөүселәр булып ҡалабыҙ инде.

Ғази. Тимәк, настоящий коммуна була инде ул.

Әкбәр. Тел төптәре шуға бара.

Көләҙәр.

Ғази. Мин һиңә әллә ҡасан әйттем инде. Һиңә лә ошо ячейкаларына инергә кәрәк ине. Унан һуң беҙ һинең менән эшләгән булыр инек.

Мәзин. Эйе шул. Коммунист булып алырға кәрәк.

Әкбәр. Индерерҙәр унда һине, инмәй ни! Улар һинең кем икәненде күҙ ҡарашыңдан уҡ белеп торалар. Мин ҡайһы саҡта ҡатындан да ячейка эштәрен һораштырып ҡарайым да, юҡ, тешләп тартһаң да бер һүҙ сыҡмаҫ.

Хәлим. Һин Әкбәр эште икенсе төрлө тот. Ундағыларҙы үҙеңә ҡаратырға тырыш.

Ғази. Һеҙ унда үгеҙ урынына эшләйһегеҙ, шул эштәрегеҙҙең рәхәтен үҙегеҙ күрмәйһегеҙ. Барыһы ла ошо Сәләх менән Ғәлим ҡулында. Улар һеҙҙең аҡсаға гулять итәләр.

Әкбәр. Беҙ уны беләбеҙ. Коммун Сәләх, бигерәк тә Ғәлим халыҡты ҡаты тота башланы.

Ғази. Беҙ һалдат түгел бит. Һеҙ бара-бара ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла уртаҡлаша башларһығыҙ, тип әйт.

Хәлим. Шулай шул. Һис тик торорға ярамай.

Мәзин. Һуғыш сығарырға кәрәк унда.

Әкбәр. Мин бик тырышам да, эш барып сыҡмай шул. Бөтә эш ошо ячейкаларынан шул. Бына әле бер көндө ҡыҙҙы бер аҙ ороштом. Әллә нәмә өсөн дә түгел. Малайҙар менән ҡыҫҡа ыштан кейеп, футбол уйнаған өсөн. Бынан һуң ирдәүкәләнеп йөрөмә, тигәйнем, шунда бер кисә комсомол бар ине. Ана, кисә газеталарына яҙып сығарғандар. Етмәһә, ҡулға оҙон ыштан тотороп, ҡыҙыма кейҙереп, һүрәтте лә төшөрөп ҡуйғандар. Бер ваҡыт ҡатын тотондо үҙемә. Һинең ни эшең бар, йәштәргә бәйләнеү тип кенә ебәрә.

Ғ а з и. Мин һинең кеүек булһам, бик шәп тал сыбығы алыр инем дә, ҡыҙҙың шәрә ерен ҡайыҙлар инем. Һинең бит үҙ ҡыҙың. Уның өсөн әллә ни булмаҫ ине.

Ә к б ә р. Юҡ шул, улай булмай. Улар унан уҙған.

Х ә л и м. Юҡ инде, Ғази ағай. Улай ярамай. Бүтән сараһын табырға кәрәк. Йәштәрҙе бүтән нәмә менән ҡыҙыҡтырырға кәрәк уны. Кил әле, Әкбәр.

Бер ситкәрәк алып барып, стаканға һалып бирә. Мәзин йүгереп барып ете. Уға ла бер стакан эсерә.

М ә з и н. Әкбәр, һин минән ғибрәт ал. Бына мин моселманлыҡ өсөн барыһын да эшләргә әҙер торам.

Ә к б ә р. Әле һинең мәзинлегеңде ташларға йөрөй, тип ишеттем.

М ә з и н. Минме? Мин, туған, коммунистарҙың күҙәренә буяр өсөн генә.

Эсерәләр, һыйлайҙар.

Ғ а з и *(мәзингә)*. Йә, һеҙ ҡайҙа, ни эшләйһегеҙ?

М ә з и н. Ғәбделғази ағай, миңә бер егерме, утыҙ һум бирең тор әле. Расходтар бар бит. Теге Мөхәммәҙигә аҙыраҡ аҡса бирең, эшкә ҡушырға кәрәк. Ашлыҡтар етешеп килә, ҡыҙыл әтәс ебәрергә кәрәк ине.

Ғ а з и *(үҙенә)*. Әле утыҙ һум биргәнгә өс көн юҡ. *(Ҡысҡырып.)* Уныһында эш тормаҫ. Теге күрә торған кешеләрҙе лә күреп ҡуй.

М ә з и н. Ярай, ярай. Күрербеҙ. Унан һуң бер нисә кешене ашҡа саҡырмаҡсы инем. Йыйылышҡа инде, үҙең беләһең.

Ғ а з и *(бирең)*. Ярай, бына һин дә ныҡ тор, күршетирәне ҡулыңдан ысҡындырма. Бына хәҙер контрактация бара. Шуға бик ҡаршы торорға кәрәк.

М ә з и н. Ярай, ярай. Һәр көндө мин шул эштә. Була ул, була.

Ғ а з и. Йәгеҙ әле, эш хаҡында һөйләшәйек. Әкбәр, инде ни эшләйбеҙ, йә?

Ә к б ә р. Сәләхтәр, Ғәлимдәр хатта хәҙер эште коммунаға әйләндереп ебәрҙеләр.

Х ә л и м. Сталин хаты килеп сыҡмаганда, уларҙың эше бөтөнләй емерелеп бөткән була ине.

Ғ а з и. Әле лә Абилға рәхмәт. Хоҡуғымды ҡайтарып бирҙе. Үрнәк коммунаһын нисек таратырға, шуның эштәрен нисек тар-мар килтерергә, әгәр ҙә ул емерелһә, тирә-яҡтағы ваҡ колхоздар үҙ алдарына таралып бөтөрҙәр ине.

Мәзин. Минеңсә, уларҙың ошо Сәләх тигәндәрен, тағы ла бер нисә актив булып йөрөгәндәрен ултерергә кәрәк.

Әкбәр. Ни һөйләйһең, ултерергә? Нисек инде ул?

Фази. Бына шул турала бик ныҡ һөйләшәйек әле.

Хәлим. Иң яҡшыһы — әлеге активтарын ултереү. Унан һуң ҡыҙыл әтәс ебәреү.

Мәзин. Унан һуң машиналарының винттарын юҡ итеп бөтөрөргә кәрәк.

Гөлсирә менән Фәйшә инәләр.

Гөлсирә. Ай, ҡәҙерле ҡунаҡтар бар икән. Әкбәр, һиңе нисек былай ел ташланы.

Фази. Бында ҡунаҡтар бар. Ә һеҙ әллә ҡайҙа йөрөйһөгөҙ.

Фәйшә. Мин һеҙҙе эш менән ултыраһығыҙҙыр тип инмәй торҙом. Гөлсирә, кисәнән бирле ауырыҡһынып торам, ти.

Әкбәр. Гөлсирә ханым, ул беҙҙе хисапҡа ла алмай инде. Ә мин бына инә, бына инә тип, түҙә алмай ашҡынып ултырам.

Фази, Хәлим, мәзин аҡса тураһында һөйләшәләр.

Гөлсирә. Юҡ, улай тимә, йәнем. Минең әле һиңә үпкәм бар. Бер көн беҙҙә йоҡлаған көндө иртән үк тороп киткәнһең дә, мин һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Уянып китһәм, эргәмдә һин юҡ. Шундай яйһыҙ булды...

Әкбәр. Ә мин ул көндө артығыраҡ иҫереп киткәнмен. Һуңға ҡала яҙғанмын. Ярай әле халыҡ ҡуҙғалғансы ҡайтып еттем.

Фәйшә *(тиҙ генә поднос менән стакандар килтерә)*. Йәгеҙ әле. Ҡунаҡтарҙы аҙыраҡ ҡунаҡ ит.

Әсәләр, иҫерәләр. Аҡрынлап таралышалар, Гөлсирә менән Әкбәр яңғыҙ ғына ҡала.

Әкбәр. Һинең һаулыҡҡа. Һине күреп туйыр көн булырмы икән.

Гөлсирә. Ҡара әле, Әкбәр йәнем.

Әкбәр. Ниндәй матур. Йомшаҡ ебәк ҡулдары. *(Үбә.)*

Гөлсирә. Әкбәр йәнем. Етер. Ҡара әле күрәләр. *(Үҙе һаман һыйына.)*

Әкбәр. Бына рәхмәт. Бына рәхмәт. Йөрәгемдең яныуы бер аҙ баҫылып китте. Бөтә донъя ҡайғыһы онотолдо. *(Күкрәген, битен, ҡулын үбә.)*

Гөлсирә. Әкбәр йәнем, ошо коммуна тигән нәмәңде ҡасан таратаһың инде.

Әкбәр. Теләһәң, бөгөн үк. Барыһын да булдырам.

Гөлсирә. Шулаймы, йәнем. Булдыраһыңмы? Улай булһа *(күкрәгенән ҡағыҙ алып)* мин ҡушҡандарҙы эшләргә ант итеп, ошо ҡағыҙға ҡул ҡуй. *(Үбә, Әкбәр ҡаушай, ҡарай.)*

Әкбәр. Унда нәмә яҙылған, әйт әле. Мин һиңә ышанам.

Гөлсирә. Һин ошо коммунаны таратыу, уға төрлө яҡтан бөлгөнлөккә килтереү хаҡында һүҙ бирәһең. Был серҙе ситкә таратмаҫҡа вәғәҙә бирәһең.

Әкбәр. Нисек, Гөлсирә, был ни эш?

Гөлсирә *(килеп тубығына ултырып)*. Юҡ, ҡуҙғалма. *(Үбә. Араҡы бирә.)*

Әкбәр эсә.

Мин ҡушам һиңә. Ошо ҡағыҙға ҡул ҡуй! Ҡурҡма!

Әкбәр. Ах! Һинең ҡулыңдан эскән араҡы — ожмах ниғмәте.

Гөлсирә. Йә, йәнем. Бына күрәһең бит. Был — минең ҡулым, ҙә ҡул ҡуйғандар. Тиҙерәк ҡулыңды ҡуй инде.

Әкбәр. Була ул. Һин тигәндә йәнем дә аяулы түгел.

Гөлсирә. Бына рәхмәт. Шулай кәрәк.

Күкрәгенә ҡағыҙҙы йәшерә. Ҡарап торған халыҡтар аҡрынлап бер нәмә лә белмәгәнгә һалышып инәләр. Ике йөҙләнеп торалар. Әкбәрҙе әйләндереп алалар. Әкбәр мактанып, тауышын күтәреп һөйләй.

Гази. Бәй, ҡунаҡты яңғыҙ ҡалдырғандар ҙа баһа.

Фәйшә. Мин ҡаҙан аҫтын ҡарарға сыҡҡайным.

Мәзин. Әкбәр туған егет кеше ул. Ҡалғандарын үҙем эшләйем, ҡурҡма.

Хәлим. Минең дә бер нисә кешем бар.

Әкбәр. Ҡарағыҙ әле, һеҙ ҙә эште нисек алып барыу тураһында берҙәм булығыҙ.

Гази. Тыныс бул. Әкбәр, беҙҙең планыбыҙ бар. Раскулачивать ителгән бер нисә кеше бында урман араһында ҡасып йөрөй. Беҙ шулар менән бергәләшеп эшләйбеҙ, һин булыш ҡына.

Әкбәр. Ҡарағыҙ, мин харап булмам. Минең ҡыҙым — комсомолка, ҡатыным — партийный. Мине ҡыуып сығара алмайҙар. Миңә ышаныс ҙур. Мин теләһәм ни эшләйем.

Ҡулдарын болғай, Әкбәр йығыла.

Шаршау

Бишенсе күренеш

Бер сменаның эшкә барыр вәкыты. Артҡы планда — үҫеп ултырған ашлыҡ. Һул ҡулда — ҡыҙыл өҫтәл. Төрлө газеталар, журналдар уҡыш, уның эргәһендә шахмат уйнап ултырыусылар ҙа бар. Шунда уҡ стена газетаһы эленгән. Һул ҡулда столовой аҙ ғына күренә.

Ашлыҡ эргәһендә Ғәйнуллә, Миңлебай косилка салғыһы ҡайрайҙар. Шунан алыҫ түгел, Әптерәй, Ҡәүмдәр тимерлек һымаҡ бер станокта тимер һәнәк осон үткерләйҙәр. Аҡрын ғына тауыш менән йырлайҙар. Дүрт-биш ҡатын газета уҡып ултыралар. Ғәлим, Ғариф, тағы бер нисә кеше — ашлыҡ эргәһендә. Ҡыҫҡаһы, бесән бөтөп, арышҡа төшөргә торған зур дәүер, ҡыҙыу эш өҫтө. Халыҡ гөр килеп эшкә ҡуҙғала.

Ҡәйүм. Йә, ударниктар, бирешмәгеҙ.

Әптерәй *(ҡул болғап)*. Тиҙерәк, тиҙерәк, иптәштәр.

Иван тимерсе столовойға вывеска ҡаҙаҡлай, аттарҙы егә башлайҙар.

Алма. Әйҙәгеҙ тиҙерәк, Әптерәй эш һағынған.

Гөлсөм. Ҡабаланмағыҙ. Ниңә тартҡылашаһығыҙ, әллә ҡулдарығыҙ ҡысытамы?

Осҡон. Йоҡоң туйманымы әллә, әсәй? Ҡулдар ҡысытмай, улар эш һорай.

Ғәйнуллә. Эй, коммунар Иван. Машиналарҙы бер ҡарап сыҡтыңмы?

Иван. Барыһын да тикшереп сыҡтым. Барығыҙ, аттарҙы егегеҙ. Минән тотҡар булмаҫ.

Миңлебай. Иван — молодец ул. Шундай уңған егет булғанға беҙҙең коммунаға килеп инде лә ул.

Ашығып, һуңға ҡалған Ғәйниямал инә. Унан көләләр.

Ҡәйүм. Эй һин, Ғәйниямал, коммунарка булдым тигәс тә, бигерәк арттырып ебәргәнһең, ирең Ғариф менән иҫәнләшмәйһең дә.

Ғәйниямал. Беҙ уның менән көндөҙ — эш эргәһендә, кис — аш эргәһендә.

Әптерәй. Төндә — түшәктә, һи-һи-һи...

Ғәйниямал. Ярай, телеңә һалынма. *(Ҡабырғаһына төртә.)*

Әптерәй. Аҡрын, ҡабырғаны һындырырһың.

Алма. Быяланан ҡойолмаганһыңдыр әле.

Әптерәй. Ана, беҙҙең Әкбәр, аҡыллы баш, бик ашығып килә.

Ҡәйүм. Ниңә ул бик аҡрын килә. Әллә хәтерен ҡалдырғандармы?

Гөлсөм. Әле мин уның былай килеүенә лә аптырайым. Ул, мин киткәндә, урынынан тормайынса, мыңгырлап ятып ҡалғайны.

Алма. Бына күрерһегеҙ әле. Ул килеү менән аҡыл һатырға керешер.

Әптерәй. Киләсәк һайлауҙа уны председатель итергә кәрәк.

Алма. Унан һуң ике көндән Ғази кулак — секретарь, муллаһы казначей булыр.

Әкбәр *(килеп етеп)*. Ниңә былай йыйылышып көн үткәрәһегеҙ тағы. *(Барыһына ла ҡарай, береһе лә өндәшмәй.)*

Гөлсөм. Һине көттөк.

Әкбәр. Һинән һорамайҙар бит! Ниңә адвокат булаһың?

Гөлсөм. Мин, аңра, һорайҙар икән, тип белдем тағы. Ғәфү ит!

Ғәйнулла. Наряд яҙылған, ти бит. Эшкә китергә кәрәк.

Ҡәйүм. Кисәге белдереүҙе уҡыманыңмы? Әкбәр ағай, унда бит ап-асыҡ әйтелгән.

Әкбәр. Ут кеүек ҡыҙыу эш ваҡытында белдереү уҡып ултырыу — эшле кешенең эше түгел ул. Эш ваҡытында эш эшләргә кәрәк.

Гөлсөм. Ә һуңға ҡалып килеү кем эше? Ҡайҙан килгән был эшсән кеше!

Әптерәй сығып, Сәләх менән килеп инә.

Әптерәй. Сеүегеҙ әле, унда бер нәмә белдерәләр.

Сәләх. Беҙҙең колхоздың коммуна уставына күсеп йәшәй башлауы тураһында беҙҙең йыйылыш сығарған ҡарар райколхозсоюзда тасдиҡ ителгән.

Ҡул сабалар.

Унан дөйөм йыйылыштың сығарған ҡарары буйынса, кисәге көндән башлап, айырым ашауҙар бөтөрөлә. Дөйөм столовойҙан ашала. Ашау ваҡыттары иртәнге 7-нән башлана, өс тапҡыр ашала. Кухняла Мәрйәм менән Ямал эшләйәсәк. Хәйретдин уларға ярҙам итәсәк.

Әптерәй. Даешь дөйөм столовой!

Ғәйниямал. Социализмға нигеҙ ташы һалынды. Ур-а, у-ра!

Сәләх. Һайырмыш йылғаһындағы тирмән туҡтап тора ине. Шуны ҡорабыҙ. Унда хәҙер электр станцияһы

яһайбыҙ. Бөтә коммунаны Ильич лампаһы менән яҡтыртабыҙ.

А л м а. Даешь Ильич лампаһын!

Т и м е р ә й *(тороп)*. Кисә кистән бирле аҙыраҡ үҙгәрештәр бар.

О с ҡ о н.
А л м а. } Нәмә бар! Нәмә, тиҙерәк.

Т и м е р ә й. Парня һөрөргә Рамазан бара. Кисә бесәнгә билдәләнгән Фатих, Ҡадир, Ҡасим жнейка менән еткән арышты урырға баралар. Агроном, кисектерергә ярамай, тип хәбәр килтерҙе. Осҡон, Гөлсөм — бесән сабырға, Маһи, Хәҙисә, Фәйниямал, Әхмәт, Фәләүи, Хәжәр күбә тарттырырға баралар. Косилкаға билдәләнгән Әкбәр өйҙә ҡала.

Ә к б ә р. Сәбәш?

С ә л ә х. Һинең менән һөйләшә торған һүҙҙәр бар әле.

Үҙ-ара һөйләшәләр.

Т и м е р ә й. Башҡа нәмә юҡ, иптәштәр.

Ҡатын-ҡыҙҙар барыһы ла йырға ҡушылалар.

Ҡош-ҡорт тауыштарына ҡушылып,
Беҙ йырлайбыҙ матур эш көйөн.
Машиналар менән ер тетрәтеп
Берҙәм эшләгәндә эш — уйын.
Бергә уйнап-көлөп эшләгәндә
Онотола донъя яфаһы.
Рәхәтләнеп иркен һулыш алһаң
Йөҙәтә алмай донъя хафаһы.
Бергә эшләп, бергә хәл йыябыҙ.
Донъяһында үрнәк булабыҙ.
Ҡыҙыл байраҡтарҙың елберләүен
Һәр ерҙә лә күрмәк булабыҙ.

Ә п т е р ә й. Ячейка ҡарары буйынса, партияның һыҙған юлы менән уның ҡарарын урынына еткереү — беҙҙең өҫкә төшкән бурыс.

Ҡ ә й ү м. Йыл шулай яҡшы торғанда, еренә еткерербеҙ уны. Коммунаны киләһе йыл тағы ла арттырырға кәрәк.

Ә п т е р ә й. Беҙҙең башҡа яҡтар барыһы ла тура килә. Хәҙер күп көстө иген орлоғо етештереүгә тоторға кәрәк.

Ҡ ә й ү м. Эйе, эйе! Иген яҡшы буласаҡ. Ана, күрәһең бит, бойҙайҙар, арыштар ниндәй тулҡынланып ултыралар.

Сығып китәләр.

Ғәлим. Сәлимә, һин тиҙ генә стена газетаһы әҙерләп сығар. Мәрфуға, һин балаларҙы бөгөн Һайырмыш йылғаһында һыу индереп алып ҡайт.

Сәлимә. Беҙ газетаның эшен Ғәфифә менән икәүләп бөтөрәбеҙ. Мин киткәнсе, аллаһыҙҙар һәм тиҙ ярҙам кружоктарын төҙөп китергә ине.

Мәрфуға. Балаларҙы өйҙәренән ваҡытында ебәрмәйенсә аптыраталар. Ата-әсәләре булышлыҡ итһә, эш еңелерәк булыр ине.

Сәлимә. Дөрөҫ, беҙгә бер йыйылыш яһап, балаларҙы тәрбиә баҡсаһына ебәреү тураһында берәй сараһын күргә кәрәк. Был мәсьәләне комсомол ячейкаһына ҡуйырбыҙ.

Ғәлим. Ярай. Уныһын эшләрбеҙ. Ҡана һөтсөлөктөң кисәге сводкалары, күпме һөт булған?

Сәләх. Ҡайҙа китте әле Тимерәй. Һуғыу машинаһын алыу-алмау, унан һуң контрактовать ителгән малдар тураһында ла һөйләшергә кәрәк ине. Баҫым хәҙер етә бит инде.

Ғәлим. Был һуң игенде баҫырға Зернотрестан ярҙам булмаҫмы икән ни? Комбайн менән эшләгәндә эш еңелерәк булыр ине. Совхоз бик күп ярҙам итә ине бит.

Сәләх. Совхоз ярҙамы менән ошо хәлгә ирештек тә бит инде. Тик бына Абилдан бер ҙә уңманыҡ. Зернотреҫка шул директор булғандан бирле, улар менән аңлаша алмай башланыҡ бит.

Ғәлим. Шулар хаҡында ысынлап та бер һүҙ ҡуҙғатмай булмаҫ ахыры. Райкомда һөйләшеп ҡарарға кәрәк булмаһа.

Сәләх. Беҙгә ячейкала ул Абилды тикшереп, материалын райкомға ебәрергә кәрәк. Был Әкбәр тамам боҙолдо бит. Шуны нисек төҙәтәбеҙ инде. Уны тикшереп торорға ине. Ул ҡайҙа эшләһә, шунда машина ята. Үҙе һаман дин-фәлән тип тә ысҡындыра.

Ғәлим. Аллаһыҙҙар түңәрәге һәм сәйәси түңәрәктәр төҙөп ебәрергә кәрәк ине. Беҙҙең шул ҙур эш эшләнмәйенсә тора.

Гариф *(килеп)*. Сәләх, һин саҡырҙыңмы? Мин барыһын да ҡарашып ебәрҙем.

Сәләх. Ярай. Бар әле Тимерәйҙе саҡырып кил.

Автомобиль тауышы.

Гариф. Хәҙер була. Ниндәй автомобиль тағы. *(Китә.)*

Ғәлим. Шул Зернотрест кешеләрелер әле. Улар ни эшләп йөрөйҙәр икән?

С ә л ә х. Унда халык йыйылган. Кемдәр нәмә күтәргәндәр. Киләләр. Автомобиль туктаган. Карагыз әле, Зернотрест директоры эргәһендә бер катын күренә.

Т и м е р ә й *(инеп)*. Сәләх, һин сакырганыңмы? Һай шайтан алгыры! Берәй хәбәр барҙыр ахыры.

Ғ ә л и м. Бәй, был Оскон бит, эргәһендә әсәһе.

Ҡ ә й ү м *(артта)*. Ипләп тот, кайҙа тиҙерәк бәйләргә кәрәк.

С ә л ә х. Бында бер нәмә бар. Тиҙерәк булығыҙ, һыу кәрәк. Кайҙа урын яйларға, бәйләргә сепрәк?

Ғ ә л и м. Бәй, бәй, Оскон, Гөлсөм апай ни булды?

С ә л ә х. Был ниндәй хәл! Нисек һаҡһыҙ маташтың?

Ғ ә й н у л л а. Әйтмәгеҙ инде, жнейка менән боролған сакта, автомобиль якынлашып, бик каты кыскыртып ебәрҙе лә, аттар дулап китеп, Оскон башы менән машина аҫтына төштө.

Ҡ ә й ү м. Гөлсөм апай аяғын ауырттырған. Оскон бик ныҡ төштө. Бая бөтөнләй иҫһеҙ ине. Хәҙер аҙыраҡ иҫкә килде булырға кәрәк. *(Ары-бире ни эшләргә белмәй йөрөй.)*

С ә л и м ә. Бына тиҙ ярҙам түңәрәге кәрәк. Шуны әллә касандан бирле булдырырға, тибеҙ. Һаман етешә алмайбыҙ.

Артта автомобиль килеп туктай.

О с к о н. Артык каушамағыҙ. Мин аҙыраҡ ятып торайым. Бик башым әйләнә. *(Ята.)*

А б и л инә, эргәһендә Г ө л с и р ә лә бар. Үҙен танытмай.

С ә л ә х. Һеҙ, Абил иптәш, ниңә улай бик һаҡһыҙ йөрөйһөгөҙ. Ауыл аттары автомобилгә өйрәнмәгән икәнен күреп тораһығыҙ. Караңкырап йөрөргә була бит.

Ғ ә й н у л л а. Һеҙгә эш өҫтөнән уҙғанда һағыраҡ йөрөргә мөмкин ине. Етмәһә, юрый кыскыртҡан һымаҡ.

А б и л. Был ханым рулде тотоп килә ине. Автомобиль кыскыртыуға аттар дулап алып киттеләр.

С ә л ә х. Бына бит ни тиклем эш ваҡытын калдырҙығыҙ. Етмәһә, ниндәй ҙур бәлә.

Г ө л с ө м. Күҙҙәре аҡайып, абайламағанда кыскыртты ла ебәрҙе бит.

Ғ ә л и м. Улай тота белмәгән кешегә автомобиль управлять итергә бирергә ярамай.

Ғ ә й н у л л а. Ну ярай, барығыҙ эш туктамаһын. Аттарҙы карағыҙ, бында карарҙар.

С ә л ә х. Эйе, туғандар. Һеҙ барығыҙ, эш калмаһын.

Тимерәй. Улай булһа былар машинаһына мин ултырырмын. Әйҙә, Фариф, һин минең менән. Фәйнулла, әйҙә, һин аттарҙы йөрөтөрһөң. Эш туҡтамаһын.

Әкбәр ауырыуҙар яныңда, Сәләх менән Абил бер яҡ ситкәрәк китеп эш тураһында һөйләшәләр. Гөлсирә ҡыҙыл өҫтәл эргәһенә барып, журналдар ҡарап торған була. Үҙе Әкбәрҙе ҡарай, Әкбәр, ҡыҙын ҡараған булып, теге ҡатындан күҙен алмай.

Сәләх. Әле ҡайҙа китеп барыу һуң һеҙҙең?

Абил. Бына нәмә, туғанҡай. Мин бик ҙур йомош менән килдем. Миңә эшселәр кәрәк. Һеҙ ҡырҡ кеше бирергегеҙ бит.

Сәләх. Нисек инде? Был ни тигән һүҙ? Бына хәҙер арыштар етте. Унан һуң бесән дә өҫтөлөп бөтмәгән әле. Бер аҙналыҡ бар. Ә һин беҙҙән ҡырҡ кеше һорайһың.

Абил. Теләһәгеҙ ни эшләгеҙ. Мин бит, Сәләх, эшселәрҙе Американан килтерә алмайым, һеҙ нисек кенә булһа ла беҙгә эшселәр бирергә тейешһегеҙ. Әгәр ҙә беҙгә эшселәрегеҙҙе бирмәһәгеҙ, беҙ һеҙгә машиналар менән ярҙам итә алмайбыҙ.

Сәләх. Уныһы, конечно, шулай. Ләкин бит хәҙер мәсьәләне яңылыш ҡуяһығыҙ. План буйынса эшләп, күпме кеше кәрәк буласағын иҫәпләп ҡуйырға кәрәк. Көнө килеп терәлгәс, һеҙ кеше һорайһығыҙ. Улай ярамай ул.

Абил. Яҙ көнө беҙ һеҙгә ярҙам иттек. Тракторҙар эшләне.

Һөйләшеп сығып китәләр. Әкбәр менән Гөлсирә, бер-беренә ымлашып, яҡынлашалар, һөйләшәләр. Фәлим, ҡағыҙ тотоп, палаткаға инеп китә.

Гөлсирә. Аҡрын! Мин юрый күргә килдем. Ошо арала һиңә бер хат булыр. Шул хатта кемдәрҙең нисек эшләргә кәрәклеге тураһында план төҙөлгән булыр.

Оскон быларҙың һөйләшкәндәрен тыңлай.

Әкбәр. Мин бында үҙ эштәремде эшләйем. Көн һайын ике-өс машиналарын ватам. Мин икәнде белмәйҙәр. Унан һуң унлап ағай-энене тауыш сығарырға ҡоторттом.

Гөлсирә. Ошо арала Ҡәйүм менән Әптерәйҙе юҡ итергә. Унан һуң Сәләх менән тағы бер активтарын йоморға булдылар әле.

Әкбәр. Ярай, ярай. Мин барыһына ла әҙер.

Гөлсирә. Һайырмыш урманында раскулачивать ителгән кешеләр йөрөйҙәр. Улар Себерҙән ҡасып килгән

кешеләр, ти. Улар кәрәк вакытта һинең эргәңә килеп китерҙәр. Кыҙыл этәс уларға тапшырылған.

Әкбәр. Ярай, булды. Мин китәм. Һиҙерҙәр.

Гөлсирә Әкбәр эргәһенән китә.

Гөлсирә. Абил Абилич, скоро что ли?

Абил *(сәхнә артынан)*. Хәҙер, хәҙер. Сейчас.

Сәләх. Беҙ, значит, һеҙгә ҡулдан килгән ярҙамды аямабыҙ. Тик бер план буйынса, алдан хәбәр итеп эшләргә генә кәрәк ине.

Фәлим. Бәлки, һеҙ беҙҙең арышҡа комбайндарығыҙҙы бирерһегеҙ, беҙ ул сакта бер машинаны туҡтата алырбыҙ.

Абил. Бына был ярай. Ысынлап та, шулай эшләп булмаймы?

Сәләх. Договор яҙышып, һүҙегеҙҙә тора алһағыҙ, был фекергә мин ҡаршы килмәйем. Ләкин беҙ был көйөнә өҙөп әйтә алмайбыҙ. Актив менән аңлашып яуап бирербеҙ.

Гөлсирә. Ну, Абил, что значит?

Абил. Ну, ярай. Мин ханымды ла оноттом. Хәҙергә ғәфү үтенәм. До свиданья, мин комбайн хаҡында иртәгә яуап бирермен.

Автомобиль ҡысҡыртып сығып китәләр.

Сәләх. Быныңаҡылы алтын, малай.

Фәлим. Улар ҙа шул нисек көн үткәрергә генә йөрөйҙәр. Эргәһендә ниндәй ҡатын һуң?

Сәләх. А черт его знает. Мин уныһына күҙ ҙә һалманым.

Әкбәр. Ҡатыны бит, бер көн дә шуның менән ине.

Аяғын бәйләп, Гөлсөм инә, Осҡон эргәһенә бара.

Гөлсөм. Ҡыҙым, хәлең нисек? Фу, ҡурҡытты! Аттары ла ҡайҙан тура килгән тағы.

Сәләх. Кайһы аттар?

Гөлсөм. Теге Хөсәйендең сөнтөгө менән Кәримдең туры байталы. Өсөнсөһө Хәләф айғыры ине.

Фәлим. Ай-һай, үҙегеҙ ҙә аттарҙың ниндәйҙәренә ултыра белгәнһегеҙ икән.

Әкбәр. Йөрөмәһендәр, ирдәүкәләнеп. Ул Осҡон һәр ваҡыт та артыҡ ҡылана инде. Ирҙәр тота алмаған аттарға ултыра. Имеш, машина йөрөтә.

Гөлсөм. Бына һинең һымаҡ ирҙәр саботаж яһап йөрөгәс, беҙгә нығыраҡ эшләргә тура килә шул. Һин

ҡайҙа ғына барып, нәмә генә эшләмәйһең, шунда ватаһың да емерәһең.

Сәләх. Мин бик аҙ ғына ваҡытҡа ауылға ҡайтып киләм. Унда кооперативта һиҙиәтте күреп, Ғәйнетдин ағайға аҡса биреп, баҙарға кәрәсингә ебәрәйем. Әкбәр ағай менән һин яҡшылап һөйләш. Бер эшкә ҡуш.

Ғәлим. Улай булғас, һин теге ҡыяр, ҡарбуз баҡсаларына ла күҙ ташла. Унан һуң тауыҡ ҡараусылар ниңәлер һуңғы йоморткаға хисап бирмәйҙәр, һорашып сыҡ.

Сәләх. Ярай. Дөрөҫ, уларҙы ҡарарға кәрәк булыр.

Сәләх сыға. Әкбәр ҡатыны менән ҡыҫҡырыша.

Ғәлим. Йә, ҡалдырығыҙ әле бәйләнешеүегеҙҙе!

Әкбәр. Һәр ваҡыт минән кер соҡомағыҙ. Балаларҙы эштән сығарҙығыҙ. Шул Осҡон бит...

Гөлсөм. Нәмә булған? Ниңә бөгөн Осҡон өсөн бик ҡайғыртҡан булаһың?

Әкбәр. Теләһә кемдең өҫтөнә атланырға йөрөй.

Осҡон. Ниңә эсең боша уның өсөн?

Ғәлим. Әкбәр ағай ҡыҙына нисек донъяла торорға аҡыл өйрәтә бит.

Әкбәр. Бында ауыҙ йырып көлөрлөк бер нәмә лә юҡ. Яҡшымы, яманмы, мин уның атаһы.

Гөлсөм. Һин уның атаһы, атаһы булһаң, бына мин уның әсәһе. Ҡурҡма, комсомолдар һинең менән минән дә насар булмаҫтар әле.

Әкбәр. Һиңә ни етмәй тағы? Ниңә сәпсейһең?

Гөлсөм. Онотҡан булһаң, һанап биреүселәр табылыр, ҡурҡма.

Ғәлим. Әкбәр, ташла инде шул юҡ-бар һүҙҙәренде, көпә-көндөҙ.

Әкбәр. Ташла тиһең, ғәҙәттә, ярамай торған нәмәләрҙе эшләйҙәр бит.

Гөлсөм. Ай-һай, харап булған икән. Уның ҡыҙы көпә-көндөҙ бер комсомол менән уйнаған. Бик ҙур насарлыҡ эшләгән. Ә һинең төн уртаһында Ғази кулакка барып, уның балдыҙы Гөлсирә менән эсеп иҫереп йөрөүең төндә, кеше күрмәгәндә булғас, ярайҙыр шул.

Әкбәр. Йөрөгән, йөрөмәй ни?

Әкбәрҙең ҡотортҡан кешеләре тауыш сығарып инәләр.

Гәрәй. Бына, мә, үҙең эшлә! *(Камытын алып ташлай.)* Үҙ елкәбеҙҙе кимерергә баярҙар етештерәбеҙ. Ҡайҙа һуң коммун Сәләх үҙе. Үҙенә әйтәйек.

Әкбәр. Ни бар, нәмә тиһең?

Шәрип. Ат егәм, сруй юҡ, тышаулайым тиһәң, тышауы юҡ. Етмәһә, өлгөрә алмайҙар, һөйрәлеп йөрөйҙәр, тип ҡара таҡтаға яҙғандар.

Әкбәр. Ҡатын-ҡыҙ баш булып китте, бер нәмә эшләп булмай.

Хәйрулла. Был правлениены өҫтөнә төкөрөргәме? Былар беҙҙе һаман алдайҙар. Минең эшләгән сәғәтемде һаман кәм яҙалар.

Әкбәр нығыраҡ шаулағыҙ тигән ишара яһай.

Гөлсөм. Әй, иптәштәр, эш ваҡытында ниңә улай гелән күңелһеҙ яҡты һөйләйһегеҙ. Коммунаның бер йыл эсендә булған уңыштарына күҙ һалығыҙ.

Гәрәй. Дөйөм йыйылыш яһарға кәрәк.

Шәрип. Нисә йома инде бер ҡабым ит ҡапҡаныбыҙ юҡ.

Хәйрулла. Сәғәтте дөрөҫ яҙмайҙар.

Шәрип. Һөттө һатыуҙары — бер ҙә ыраған эш түгел.

Гәрәй. Йосоп ҡарт бал ҡараны, ниңә уны бирмәйҙәр.

Хәйрулла. Көтөүселәргә сәғәт билдәләргә кәрәк.

Осҡон. Оят кәрәк, ағайҙар. Ҡатын-ҡыҙҙар бер һүҙ өндәшмәй, ә һеҙ тауыш сығараһығыҙ.

Фәлим керә. Уларҙың шаулашып бөтөүҙәрен шым ғына көтә.

Гәрәй. Бер яры барам тиһәң, ат табалмайһың. Инде ағай-эне, дуҫ-иш ҡунаҡҡа китергә лә батырлыҡ итә алмайҙар.

Хәйрулла. Бына һаман, машина-трактор бирәләр, тип алдап йөрөтәләр, ә машиналары һаман да юҡ.

Шау.

Фәлим. Был ниндәй хәл, иптәштәр, ана, смена ат тугара. Һеҙ бер ҙә юҡ менән йөрөйһөгөҙ.

Хәйрулла. Юҡ тип кенә ҡуймағыҙ. Яуап биреген. Баяр булмағыҙ.

Гәрәй. Йә, тауыҡтарҙы дөйөмләштерҙегеҙ, ни файҙа иттегеҙ. 250 тауыҡтан, көнөнә бөтәһе 40 йомортҡа. Шулмы эш?

Фәлим. Ниңә икәнлеген һин барыһынан да артыҡ белергә тейеш. Шундай мәсьәләләрҙе шулай ғына сисмәйҙәр. Дөйөм йыйылыш яһарһығыҙ. Шунда барыһын да бөтә актив менән хәл ҡылырһығыҙ. Бригадирығыҙ ҡайҙа? Артта ҡалаһығыҙ бит.

Ш ә р и п. Мәсьәләне беҙ генә күтәрмәйбеҙ. Ана, барыһы ла шунда.

Г ө л с ө м. Ана, бригадир Мотиғ һеҙҙе жнейка эргәһендә көтөп тора.

С ә л ә х күренә.

О с ҡ о н *(үҙенә)*. Туҡта, бында бер эш бар. Сәләх ағай менән һөйләшергә кәрәк булыр.

С ә л ә х. Был ниндәй митинг? Быларҙың бригадирҙары ҡайҙа? Ғәлим, Мотиғ, Тимерәй, нәмә бар?

Ә к б ә р. Бына икенсе смена эшкә бармай, хәл итә торған мәсьәләләр бар, тиҙәр. Бер көн үлеп барған һарыҡты һуйып ашаттығыҙ, тиҙәр.

С ә л ә х. Әкбәр ағай, юҡҡа тауыш ҡуҙғатаһың. Оят кәрәк. Көн аралаш кеше башына өс сирек ҡаҙаҡ ит бирелә. Икенсегә бутҡаға ярма тараталар. Шулай булғас, насар тип булмай инде. Әллә бер юлы барыһын һуйып әшәр инеңме?

Г ә р ә й. Ниңә көн һайын булмаған?

С ә л ә х. Беҙҙең малдарҙы үрсетеү тигән планыбыҙ бар. Улар алдағы көн өсөн кәрәк.

Тәүге с м е н а ҡайтып, кейем алыштырғанды былар һиҙмәй ҡалалар.

Ә к б ә р. Тотош колхоз булғас, күрше ауылдарға малдарын ҡушып ҡуйырҙар әле. Унан һуң мал үрсетерһең. Ҡош-ҡорттарҙан да ҡолаҡ ҡағырбыҙ әле.

Йәштәр Осҡондо уратып алалар, иркәләйҙәр.

С ә л ә х. Ярай. Беҙҙең малдарға тейәләрме, юҡмы, уныһы алдағы эш. Уны һуңынан тикшерербеҙ, хәҙер эшкә китергә ваҡыт. Улай ярамай, ағайҙар. Һәр ауырлыҡты һалҡын ҡан менән сисергә кәрәк.

Артта ҡыҙыллыҡ күренә. Тауыш.

Ҡ ә й ү м. Оят кәрәк, иптәштәр. Хурлыҡ был. Бына был һеҙҙең өҫкә бер-ике сәғәт яҙып ҡуйҙыҡ әле. Һеҙҙең соревнованиеғыҙ ҡайҙа?

Ә п т е р ә й. Был ни... пожар!

Ҡ ә й ү м. Ах сволочтар! Был — кулактар эше.

С ә л ә х. Тиҙ булығыҙ! Хәҙер ауылға йүгерегеҙ. Көрәк-һәнәк, һыу алып утты һүндерергә ашығығыҙ.

Коммуна х а л ҡ ы, икегә айырылып, ҡоралдарын алырға сығып китәләр. Ашлыҡ араһынан Х ә л и м б а й менән м ә з и н сығып, үрмәләп алға ынҡылаша. Ә к б ә р сәхнә арҡыры йүгереп сыға.

Хәлим. Беҙҙе ҡотҡар. Бына һиңә ҡорал. Ҡалғанын һин башҡар инде. Шул пожар ҡыҙыу барғанда, Сәләхте ат. Унан һуң Ҡәйүм менән комсомолкаларҙың бер нисәһен ҡултер.

Мәзин. Беҙгә тапшырылғайны ла, беҙҙе танырҙар.

Әкбәр. Юҡ, мин булдыра алмайым. Мин үҙ баламды, Сәләхте нисек атайым.

Мәзин. Алйот. Һинең вәғәҙәң ҡайҙа? Юғиһә беҙ теге ҡағыҙҙы фаш итәбеҙ. *(Ҡағыҙҙы күрһәтә.)*

Әкбәр. Киләләр ахыры, ятығыҙ ергә! Юғиһә... *(Тоҡтар менән күмеп ҡуя.)*

Тауыш. Халыҡ, ҡоралдарын күтәреп, утҡа ҡаршы йүгерә. Әкбәр аптырай. Ҡыҙы эргәһенә барып, уны алып китергә теләй.

Тимерәй. Ғәйнулла ағай, ут эргәһенә барғас та, тәртип ҡуйырға кәрәк.

Миңлебай. Бесәнде бер уҡ туҙҙырмаһындар. Ут эргәһенән балсыҡ, һыу менән күмә барһындар. Хәҙер һыу ебәрәбеҙ.

Тимерәй менән Әптерәй Хәлим бай менән мәзингә һөрөнөп ҡолайҙар. Тегеләр торғас аптырап ҡалалар.

Әптерәй. Был ни хәл? Былар кемдәр?

Тимерәй. Ә бына ҡайҙалар икән был геройҙар! Аяҡ аҫтындалар икән!

Әптерәй. Бына нисек көрәшкә сыҡҡандар былар!

Мәзин Әптерәйҙе атырға итә, Осҡон араларына инә. Револьверҙы тота. Атылып китә. Әптерәй, Хәлим ҡурҡыуынан ни эшләргә белмәй.

Ғәлим *(килеп)*. Әһә, епте̩ҫ осо сиселә башланы. *(Әкбәргә.)* Һин быларҙы алып барып, Вәли ағай менән Садиҡҡа тапшыр, кеҫәләрен тентегеҙ.

Төрлө хаттар, пландар сығара. Әкбәр йүгереп барып, Осҡон ҡулынан револьверҙы ала.

Әкбәр. Әйҙә, атлағыҙ!

Тимерәй. Йә, дөрөҫөн әйтегеҙ! Кем менән эш йөрөтәһегеҙ?

Мәзин *(теҙләнеп, ялған тауыш менән)*. Бер кем менән дә түгел, икебеҙ генә.

Тимерәй. Ярай! Һуңынан...

Ғәлим. Әкбәр ағай, ҡара, һаҡ бул. Алып китегеҙ!

Алып сығып китәләр.

Тимерәй. Был ут һаман көсәйә бит.

Шаршау

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Алтынсы күренеш

Машина гөрләп әйләнә. Хәсән менән Миңлебай ашлыҡ һалып торалар. Фәйнулла бойҙай үлсәүсе эргәһендә тоҡтар ҡарап йөрөй. Машина өҫтөндә Ҡәйүм төрлө ерен ҡарап, тикшереп йөрөй. Машина гөрләп эшләгәндә, динамика ҡушыла.

Ҡәйүм. Гөрлә, машина! Тирмәндәрҙә ремонт бөтә. 30-сы августҡа пионерҙар көнөнә баҫымды бөтөрөп, тирмәнде ходҡа ебәрербеҙ.

Миңлебай. Бригадир Ҡәйүм, ниңә башыңды сайҡайһың?

Ҡәйүм. Ах сволочтар, нәмә уйлап сығарғандар. Бәлеш төбө ашап, ғүмер буйы байҙар тәрилкәһен ялап көн күргән мәзин нәмәләр эшләмәксе булған.

Миңлебай. Теге Хәлим байын әйт әле. Ахун улы, ҙур баяр. Башҡа эшкә ярамағас, ни эшләһен тағы.

Шәрип *(баҫҡыстан төшөп)*. Тегеләре әле һаман яталамы?

Хәйрулла. Әйҙә, әҙерәк әсе икмәк ашаһындар әле.

Миңлебай. Ҡаланан килеп, янған бесәнгә акт яһанылар.

Фәйнулла. Был эштә Әкбәрҙең ҡатнашы булырмы икән һуң?

Хәйрулла. Бер кемдең дә ҡатышы юҡ, тип әйтәләр ти.

Фәйнулла. Берәү ҙә ҡатышмағас, улар кем менән эш алып барған була? Әкбәрҙең унан башҡа ла эштәре аҙ булманы.

Ҡәйүм. Уға иң яҡшыһы — күргәҙмә суд, бер аҙ ғибрәт булыр. Бигерәк илтифатһыҙ маташа.

Миңлебай. Тикшереү комиссияһына егеттәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да бына тигәндәре һайланған.

Фәйнулла *(һалам өйөмөн күреп)*. Ҡара һаламыңды, эҫкертеңде ослайһың бит. Йыя төш.

Барыһы ла ҡыҙыу эшкә сумып эшләйҙәр.

Оҫкон *(уйланып, сәхнә уртаһында)*. Был эштә минең атайымдың ҡатышы бармы икән, мин бер көн уларҙың теге ҡатын менән һөйләшкәндәрен тыңлап торҙом. Ни эшләргә, юҡ, быны былай ҡалдырырға ярамай. *(Ҡәйүм эргәһенә барып.)* Ҡара әле, Ҡәйүм ағай, һуңғы ваҡыттарҙа беҙҙең коммунаға булған һөжүмдәргә һин нисек ҡарайһың?

Кәйүм. Эй Осҡон! Донъяла ҡаты көрәшһеҙ бер нәмә лә бирелмәй. Былар бик тәбиғи. Мин береһенә лә аптырамайым. Был бөтәсәк синыфтың үлеп барған үгеҙ кеүек тыбырсыныуынан башҡа бер ни түгел.

Осҡон. Ул ниндәй синыф булһын. Улар бөттө бит инде.

Кәйүм. Бына бөтә бәлә лә шунда шул. Ул бөтөп етмәгән әле, улар беҙҙең арала ла бар. Бына мине шул ҡыҙыҡһындыра. Улар беҙҙең арала кемдәр менән бәйләнеш тоталар. Шуны белһәң ине.

Осҡон. Юҡ, Кәйүм ағай. *(Тын.)* Кәйүм ағай, әгәр ул кешене белһәң, ни эшләтер инең.

Кәйүм. Мин ошо янған ут эсенә ташлар инем.

Осҡон. Юҡ, туҡта, Кәйүм ағай. Ул булмаҫ. *(Йүгереп сығып китә.)*

Кәйүм. Йә, һин бер ҙә борсолма. Мин шаярҙым, Осҡон. *(Аптырап ҡала.)* Был Осҡонға ни булған? Бында ни булһа ла бер хәл бар. Мин был эште йәшерергә тейеш. Тик кемгә... ҡайҙа һуң был? *(Артынан ҡарап ҡала.)*

Ғариф барып колоҡол ҡаға... Халыҡ шаулашып эштән туҡтаған арала, оркестр уйнай.

Ут һүнә

БИШЕНСЕ ШАРШАУ

Етенсе күренеш

Сәхнә алдында тикшереү комиссияһы ултыра. Гөлсөм, Ғәлим, Тимерәй, Гәрәй, Әптерәй, Ғариф, Сәлимә, Ғәлим тоҡтар өҫтөндә ултыра. Тимерәй аяҡ үрә тора. Гөлсөм һәм ҡалғандары ерҙә ултыралар.

Тимерәй. Урнәк коммуна ағзаһы Әкбәр Хәйретдиновтың кулактар менән эш йәрәткәнлеге тураһында дөйөм йыйылыш тарафынан тикшереү комиссияһы төҙөлөп, комиссияға түбәндәге ептәштәр һайландылар: Ғәлим Мөхәмәдьяров, Тимерәй Ғәлимов, Гөлсөм Хәйретдинова, Ғариф Саттаров, Сәлимә Тәйешова һәм Әптерәй ептәштәр билдәләнделәр. Рәис Тимерәй Ғәлимов, секретарь Ғәлим Мөхәмәдьяров. Әкбәр Хәйретдиновты саҡырығыҙ.

Ғариф тиҙ генә Әкбәрҙе алып инә.

Тикшереү ҡарары дөйөм йыйылыш ҡарары һуңында тормошҡа ҡуйыласаҡ. *(Уҡып.)* Беҙҙең хужалыҡтың алға

барышына, уның тирә-яҡҡа ла йоғонто яһауына кулактар, муллалар һалҡын ҡан менән генә ҡарап ҡала алманылар. Улар был эшкә нисек булһа ла аяҡ салырға тырыштылар.

Эптерәй. Коммуна балаларын туҡмауы, игенде таратыу, айырым ағзаларҙы ҡотортоу. Барыһын да эшләне.

Тимерәй. Беҙҙең Әкбәр Хәйретдинов Ғази, Хәлим бай ҡотҡоһона төштө. Уның бер нисә тапҡыр кулактар менән иҫереп йөрөгәнлеге һиҙелеп, бер нисә тапҡыр уға шелтә яһалһа ла, ул илтифатһыҙ ғына ҡалдырҙы. Шуның өҫтөнә бер нисә тапҡыр машина ватылды. Был турала Әкбәрҙән шикләнергә урын бар. Уның хәлҡо, ҡылanышы шулай уйларға юл бирә. Бына юғарылағы ғәйептәре өсөн...

Әкбәр. Миңә лә һүҙ биреген әле. Дөрөҫ, мин эстем, хәҙер ҙә эскеләйем. Мин үҙем генә эсәм.

Сәлимә. Ә бына нәмә менән маҡтана ул.

Гөлсөм. Башҡаларҙы ла өйрәтергә кәрәк ине.

Әкбәр. Һеҙ миңә һөйләп бөтөрөргә ирек биреген.

Тимерәй. Бүлмәгеҙ, һөйләһен.

Әкбәр. Мин эсһәм, коммуна аҡсаһын эсмәнем.

Эптерәй. Ғази кулак аҡсаһын эскән бит ул.

Әкбәр. Шулай булғас, минең эсеүем тураһында һүҙ булмаһын. Мин коммунист түгел бит.

Гөлсөм. Коммунисҡа ғына эсмәҫкәме ни?

Ғариф. Әкбәр баштан уҡ шуларҙың ҡулдарын тотоп килде. Мин үҙем дә саҡ ҡына шуларҙың тоҙағына эләкмәнем. Уларға мине Әкбәр алып бара ине.

Әкбәр. Минең ғәйебем булһа, ул да эсеү генә. Башҡа минең ғәйебем юҡ. Мин тырышып эшләнем. Инде мине сығарып ебәрергә тырышмағыҙ, юҡ. Ҡатыным, ҡыҙым менән эшләнем, мине сығара алмаҫһығыҙ. Минең хаҡым бар.

Тимерәй. Был мәсьәлә тураһында кем һөйләй.

Эптерәй. Мин Әкбәр эшләмәне тип әйтә алмайым, ул эшләне. Ләкин ул беҙҙең комсомолдарға һәр ваҡыт аяҡ салып килде. Үҙенең иҫке ғәҙәтен ташлай алманы. Унан теге Гәрәй, Хәйруллалар, Шәриптәрҙе ҡотортоусы ул булып сыҡты.

Әкбәр *(Гөлсөмгә)*. Беҙ бында тора алмайбыҙ. Мин хаҡымды алырға юл табырмын. Әйҙә, ҡатын, китәбеҙ. *(Кулынан һөйрәй башлай.)*

Гөлсөм *(Әкбәрҙән ысҡынып)*. Коммуна тормошо бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙы яңы яһаны. Боронғо тормош ҡоллоғонан сығарып, беҙҙе ирекле кеше яһаны. Әкбәр

боронго тормош буйынса беҙҙе үҙенә эйәртергә, алып сығырға теләй. Юҡ инде, Әкбәр гражданин. Ул ваҡыттар үткән. Дөрөҫ, әгәр ҙә һин коммуна тормошона яраҡланһаң, беҙ һинең менән бергә булыр инек. Һин коммунаны яратмай тип, эйәрә алмайбыҙ. Һин, кулактарға эйәреп, коммунаға ҡаршы китәһең икән, беҙ коммунаны ташлап китә алмайбыҙ. Бар, һин Гөлсирәнең эргәһенә кит.

Ҡул сабалар.

Әптерәй. Йәшәһен коммуна, йәшәһен Гөлсөм апай һәм яңы тормош!

Әкбәр сығырға барғанда, Оҫкон, тыны бөтөп, йүгереп суд эргәһенә инә.

Оҫкон. Тукта, сабыр ит!

Барыһы ла аптырайҙар.

Әкбәр. Ҡыҙым, исмаһам, һин мине ташлама. Әйҙә, минең менән.

Атаһына асыулы ҡарап алға сыға.

Оҫкон. Иптәштәр, бында сиселә торған төйөн бар. Мин эштең дөрөҫөн һөйләп бирергә тейеш.

Барыһы ла аптырап ҡарайҙар.

Минең атайым коммунаға хыянат итә.

Халыҡ йәнә аптырай төшә.

Бер көн автомобилдә килгән ҡатын менән ни тураһындалыр һөйләште. Мин янғында ла, комсомолды үлтереүҙә лә атайымдың ҡатнашы бар тип шикләнәм.

Тимерәй. Нисек ҡатнашы бар?

Барыһы ла бер-береһенә ҡарашалар.

Әкбәр. Ҡыҙым, һин ни һөйләйһең?

Оҫкон. Минең комсомол выжданым эштең дөрөҫөн һөйләргә ҡуша.

Тимерәй. Был эш ҙурайҙы. Быны яңынан дәйәм йыйылышҡа ҡуйырбыҙ. Хәҙергә предложение өсөн Фәлимгә һүҙ бирелә.

Фәлим. Коммунаға ҡаршы көрәшеүсе, кулактар һүҙенә ҡолаҡ һалыусы, эскесе Әкбәр Хәйретдинов коммунанан сығарылырға тейеш.

Әкбәр. Осҡон менән Гөлсөм?

Тимерәй. Улар коммунаның эшлекле ағзалары, улар сыҡмаҫтар. Улар һиңә тиң түгелдәр. Ғәлим иптәштең предложениеһына риза булғандар ҡул күтәрәләр.

Барыһы ла ҡул күтәрә.

Әкбәр. Ярай, ҡарарбыҙ әле. Мин бөгөн үк атағыҙҙы танытырмын әле. *(Сығып китә.)*

Барыһы ла ҡарашып ҡалалар.

Тимерәй. Был эште тағы ла дөйөм собранием ҡарап, тиҙҙән бер сараһын күрергә кәрәк.

Шаршау

Һигеҙенсе күренеш

Эш. Машина эшләй, бер аҙ эшләгәс, колоҡол ҡағыла. Эштән туҡтайҙар. Ҡайһыһы йыуына, һөртөнә. Барыһы ла тәрилкә менән аш, бутҡа алып ашарға ултыралар.

Миңлебай. Түрәләр ниңә юҡ? Сәләх ҡайтҡайны.

Ҡәйүм. Иптәштәр, һеҙҙе башҡа ваҡытта йыя алмайым. Ошо ашаған ваҡытта эш хаҡында ҡыҫҡа ғына һөйләшеп алайыҡ әле, — тигәйне Ғәлим.

Ғәйнулла. Ярай, ярай. Уның өсөн тағы ҡасан йыйылаһың?

Ғәйниямал. Көн былай матур булып торһа, йыйылыш булмаҫ та шул.

Алма. Эйе, бында кәрәгенә лә етешеп булмай.

Шәкүрә. Бер көн доктор, барыһын да ҡарап сығам, тигәйне, халыҡты эштән ҡайтара алмай аптырап бөттө.

Ғәлим, Әптерәй, Гөлсөм, Осҡон, Сәлимә, Ғариф инә.

Ғәлим. Иптәштәр! Бер ҡыҫҡа ғына информация.

Ғәйнулла. Ҡайҙа, тиҙерәк бул. Юғиһә ял итергә кәрәк бит.

Әптерәй. Былар бөгөп тә ултыралар.

Ғариф. Мине лә аштан ҡалдырмағыҙ.

Гөлсөм. Ҡана, ҡыҙым, беҙ хәҙер һинең менән үҙе-беҙ генә бит. Беҙ хәҙер хөр кешеләр.

Ҡәйүм. Шулаймы ни? Тәбрик итәм!

Барыһы ла барып ҡулдарын ҡыҫалар. Шул ваҡыт ярым гәскәри кейемдә эшсе ҡиәфәтендә бер кеше һәм Мәхмүт инә.

Эптерәй. Һаумы, Мәхмүт. Колхозсылар иҫәндәрме?

Мәхмүт. Бик шәп, үҙегеҙ һаумы? Бына әле ярыш ҡабул итергә килдем. Һеҙҙе лә күреп ҡайтырға кәрәк ине.

Фәлим *(ҡағыҙ сығарып)*. Коммунаның эше тураһында һөйләгәнгә тиклем бер хәбәр белдереүҙе ячейка бюроһы миңә тапшырҙы.

Тауыш. Ниндәй хәбәр ул?

Фәлим. Совхоз директоры Абил хаҡындағы беҙҙең ячейка ебәргән материалдарҙы контроль комиссияла тикшереп, уның совхозда колхоз тураһында уң сәйәсәт тотоуы дөрөҫләнеп, партиянан сығарылып, урынынан алынған.

Оҙаҡ ҡул сабыуҙар.

Эптерәй. Күптән күренеп тора ине бит уның ҡайҙа барғаны, оппортунист. Ҡойрогона баҫа башлағас, ҡасырға уйланы.

Мәхмүт. Беҙҙең ячейка бюро йыйылышында уны партиянан сығарырға ҡарар ҡабул иткәйне.

Фәлим. Бына ундай бәндәләргә беҙҙең яуап. Коммунаның быйылғы доходы: барлыҡ игендән 47 мең 643 һум. Мал, ит, һөт, бал, йомортҡаларҙан 12 мең 537 һум, выставканан бирелгән бүләк, тирә-яҡ крәҫтиәндәрҙең орлоғон таҙартыу, йөк ташыуҙан 1 мең 415 һум. Бөтәһе 61 мең 600 һум була. Инде расходтарына килһәк, эш былай тора.

Тимерәй *(шылтыратып)*. Шауламағыҙ.

Эптерәй. Кәмерәк булһын.

Фәлим. Ҡурҡмағыҙ, кәм була. Беренсенән: яңы һалдырған ясле йорттары һәм тирмән расходтары 4 мең 318 һум.

Икенсенән, налог, ер яҡшыртыу һәм киттән ялланған көнләксәләрҙә 1 мең 909 һум. Үлгән, урланған малдар зыяны 656 һум. Кампания ваҡыттарында коммуна суммаһынан төрлө ярҙамдар, төрлө расходтар 622 һум. Барыһы 6 мең 760 һум була. Шулай итеп, беҙҙең килем былтырғыға ҡарағанда 308 һум кәмегән.

Кәйүм. Былтыр өйҙәр, клуб, мунса һалынған.

Фәлим. Дөрөҫ, үткән йыл нәмә һалынғайны. Бына быйылдан ҡалған файҙа ла эште тағы ла киңәйтә төшөргә ирек бирә. Игенде быйыл хөкүмәткә өс өлөш артыҡ бирәбеҙ.

Фәлим. Бына шулай инде, иптәштәр.

Тимерәй. Һорауҙар бармы?

Кәйүм. Нәмә һорарға? Барыбыҙ ҙа бергә эшләнек. Тик теләк шул: ошо юл менән алға барырға кәрәк.

Әптерәй. Коммунаны киңәйтергә, машиналарҙы күбәйтергә кәрәк. Трактор ниңә алмайбыҙ?

Сәләх. Ә машина бер һүҙ... Бына бөҙҙә әле ҡунаҡ бар. Танышығыҙ. Мансур Галин. Йомоштары бар икән был яҡта. Ҡыҙыҡһынып беҙгә туҡтаны.

Барыһы ла ултырған ерҙәренән баш эйеп иҫәнләштеләр.

Машина хаҡында эштәр шәп түгел. Тракторҙарҙы машина станцияларына еткерә алмайҙар икән. Мин, инде беҙҙең коммунаға күптән бирле вәғәҙә бирәһегеҙ, тип ҡараным. Һеҙ беренсе урында тораһығыҙ, тинеләр.

Гәрәй. Ошо һүҙме инде.

Хәйруллә. Беҙ инде ике йылдан бирле беренсе киҫәктә, задатка алып, беренсе киҫәктә тип көттөрәләр. Машина һаман юҡ.

Сәләх. Был турала ҡайғырырға ярамай. Тракторҙы машина-трактор станциялары ебәрәсәк.

Миңлебай. Һейләшә белмәйһегеҙме. Шунда бер нәмә бар инде. Хөкүмәт бирмәй булмаҫ инде.

Сәләх. Хөкүмәт бирмәй түгел ул, Миңлебай ағай, тик етешмәй тиген.

Кәйүм. Ярыш договорына барыбыҙ ҙа ҡул ҡуйырға кәрәк.

Ғәлим. Унан һуң ҡышҡы уҡыуға беҙҙән 40 кеше китә. Уларҙы ебәрәбеҙме, юҡмы?

Сәләх. Мин улар тураһында район вәкиле менән һөйләштем. Эшсе ҡулы етмәй, улар китһә, тинем. Ул уҡымай ҙа булмай, ти.

Сәлимә. Эшсе етмәй тип, балаларҙы уҡытмай ҡалдырып булмаҫ, Сәләх ағай. Культурный революция осорон кисергәндә, уҡымай ярамай.

Ғәлим. Уныһы шулай, ләкин эш ҡулы кәмей бит.

Сәлимә. Эш көсөн машиналаштырырға кәрәк. Шуның өсөн даешь машина тибеҙ.

Әптерәй. Әйҙә бара бирһендәр. Улар китә тип, эш туҡтап ҡалмаҫ әле.

Кәйүм. Уныһы шулай инде. Тик бына беҙҙең балалар барыһы ла педагогика юлы менән уҡыйҙар. Төрлөһөн төрлө специалиста өйрәтергә кәрәк. Уҡып йөрөйҙәр ҙә тирә-яҡҡа таралалар ҙа бөтәләр. Улар ҡайтып, беҙгә эш күрһәтһендәр ине.

Гөлсөм. Уҡыусылар ҡайтып эшкә юлбашсылыҡ итһендәр ине.

Осҡон. Бына үҙем инженерлыҡҡа уҡырға китәм.

Фарип. Була ул. Ҡара, Осҡон, һин осоп китмә.

Фәйниямал. Һыйыр һауыусыларҙың аяҡ кейемдәре бер ҙә ҡалманы. Уны ла ҡайғыртырға кәрәк.

Сәләх. Кейем-һалым беҙҙә барыбыҙҙа ла...

Тимерәй. Ҡайҙа, тиҙерәк ярыш договорына ҡул ҡуйырға кәрәк.

Фәлим *(уҡый)*. Бына баҫым тураһындағы пунктар. 31 августҡа бөтөрөргә яҙылған. Әле 12 көн эшләнек, ярты баҫым бар. Айырым тырышлыҡ менән эшләһәк, 5 көн алдан бөтөрә алырбыҙ. 2-се пункт. Ун меҡ бот ашлыҡты хөкүмәткә тапшырырға.

Әптерәй. Дүрт колхозды ярышҡа саҡырабыҙ. Береһе Иманғол, Тулҡын, Шишмәләр. Шуны үтәгәс, даешь тотош колхоз!

Фәлим. Әгәр дөйөм йыйылыш ҡарар бирһә, договорға ҡул ҡуйырбыҙ.

Фәйнулла. Йәмәғәт! Беҙҙең эштәр хәҙер осланып бара. Тик был саҡырыуға тирә-яҡ колхоздар риза булмаҫтар. Ҡайһы береһенә уйларға ярарлыҡ шарттар ҡуйырға кәрәк.

Мәхмүт. Иптәштәр! Беҙ был шарттарҙы уҡып тикшерҙек. Һеҙ беҙгә ҡарағанда күп алда тораһығыҙ. Шулай ҙа беҙ ҡабул итәбеҙ.

Сәләх. Бына нәмә, туғандар! Значит, нисек тә хөкүмәткә ашлыҡты башлап тапшырайыҡ. Был эш, конечно, беҙҙең беренсе бурысыбыҙ. Шуны эшләп, тирә-яҡҡа үрнәк булайыҡ.

Фәлим. Барығыҙ ҙа ризаһығыҙмы?

Барыһы ла. Ризабыҙ, риза.

Ғәйнулла, Миңлебай, Мәхмүт ҡул ҡуялар.

Осҡон. Даешь соревнование! Үҙебеҙҙе ударниктар тип иғлан итәбеҙ.

Ҡәйүм. Бына быныһы ярай, Осҡон, бөгөндән беҙ ударниктар.

Гөлсөм. Ай ҡыҙым, һинең шатлығың ҙур!

Сәләх. Галин ипташ һүҙ һорағайны.

Барыһы ла. Үтенәбеҙ.

Галин. Һеҙҙең үрнәк булып эшләүегеҙ беҙҙе ҡыуандыра. Шуны ла хәтерегеҙҙән сығарырға ярамай. Хәҙер беҙ ударный кампания ваҡытын кисерәбеҙ. Әле беҙҙең дошман теше-тырнағы менән пландарыбыҙҙы емерергә

маташа. Күҙ алдыбыҙҙа нисә мең ботло бесән эҫкертен яндырҙылар. Төрлөсә һөжүм яһанылар. Беҙгә ныҡ торорға кәрәк. Күп тырышлыҡ, көс сарыф итергә кәрәк. Бына, мин һеҙҙе тыңлап торҙом да машина кәрәклеген аңланым. Быға асыҡ һүҙ менән яуап бирергә тура килә. Күп ярҙамды, ситтән көтмәйенсә, үҙ көсөбөҙ менән төҙөргә тырышырға кәрәк.

Ҡул сабалар.

Сәләх. Ярай! Шуның менән таралығыҙ. Бер аҙ хәл йыйып алығыҙ ҙа, ударниктарса эшкә башларбыҙ.

Йыйылыш бөтөү менән, төрлө группаға айырылалар, үҙ-ара һөйләшеү.

Миңлебай. Ай-һай, ҡартайтты ла. Аяҡтар ҡорошоп киткән.

Фәйнулла. Әйт әле, беҙҙе ҡартайғас ни эшләтерҙәр икән. Былар эшләнеләр тип, беҙгә коммуна аҙ ғына ярҙам күрһәтерме икән?

Сәләх. Ҡарттар өйөнә ебәрерҙәр. Шуның менән бөттө.

Барыһы ла көләләр.

Миңлебай. Шуны һорарға онотҡанмын. Крәҫтиән берәй ваҡыт профсоюз ағзаһы булырмы икән?

Гәрәй. Ярай. Крәҫтиәндәр тигеҙләнде. Һуң ҡалалағы бай малайҙарын йорт-ерҙәренән ҡасан ҡыуырҙар икән?

Ҡәйүм *(килеп)*. Йә, етер, ҡарттар, теге смена баҫымды башларға ваҡыт.

Галин, Сәләх араһында һүҙ башлана.

Галин. Иптәштәр! Һеҙ һуң нисек коммунаға берҙәм күсә алдығыҙ?

Сәләх. Дөрөҫ, конечно, беҙ хәҙергә үҙ ауылыбыҙ өсөн генә эшләнек. Тиҙҙән был эште бөтә тирә-яҡ крәҫтиәндәренә йоҡторасаҡбыҙ. Улар беҙҙең үрнәкте күреп, тотош колхозға тиҙҙән күсәсәктәр.

Мәхмүт. Был айырым хужалыҡтар колхозға тиҙерәк керһендәр ине. Мин уны ярыш договорына ла тәҡдим иттем.

Сәләх. Крәҫтиәндәр коммуна хужалығының яҡшылығына хәҙер үк ҡыҙыға башлағандар. Әйҙәгеҙ, иптәштәр. Әйҙәгеҙ, ял итәйек.

Миңлебай. Был Галин һуң ни эшләп йөрөй икән?

Кәйүм. Юк, теге эштең осона сығырға, кулактарҙың эше тапшырылған. Бында ҙур эш бар икән.

Ут һүнә

Туғызынсы күренеш

Тоҡ эргәһендә Миңлебай, Ғәйнулла, Фариф, тағы бер нисә крәҫтиән һуҙылып ята. Һөйләшәләр. Ҡараңғы. Галиндар үтә. Әкбәр күренә. Ҡарап тикшереп сығҡас, ҡул болғай. Ҡулында фонарь. Ғази, Гөлсирә фонарҙар яҡтыһында күренәләр. Гөлсирә машинаға ҡараған була. Машина артына нәмәләр ҡуя. Гөлсирә казачка кейемендә.

Әкбәр. Улар унда бик ҡыҙыу һөйләшәләр.

Ғази. Машина аҫтына ҡуй!

Гөлсирә. Ләкин шундай итеп ҡуйырға кәрәк. Машина бер аҙ әйләнеп китеү менән...

Әкбәр. Һине күрә ҡалһалар, тап казачка булған да ҡуйғанһың. Ҡайһығыҙ ҡуя белә.

Гөлсирә. Мин нисек ҡуйырға өйрәндем.

Әкбәр. Мин ошо ваҡытта Сәләхте юҡ итә алһам.

Ғази. Уның менән генә ҡалмабыҙ.

Ятҡан халыҡ араһында йүткерәләр. Тауыш килә. Ҡасалар.

Фариф *(колокол ҡаға)*. Эшкә, эйй, эшкә.

Халыҡ инә.

Кәйүм. Ударниктар! Эште нығыраҡ тотоғоҙ, баҫҡан ерҙән ут сығарып йөрөгөҙ.

Шәкүрә, Гөлсөм, Фариф, Осҡон, Әптерәй 2-се сменаға эшкә баралар. Әптерәй машинаны ебәрә. Машина эшләп китә. Сәләх инә. Машина эргәһенә барып нәмәләр күрһәтеп торғанда, теге кулактар ҡуйып киткән динамит шартлай. Бер мылтыҡтан аталар, Сәләхкә тейә. Ул һиҙмәй ҡала. Машина эргәһенән атылып барып төшә. Халыҡ йыйыла. Ҡайһыһы — машина тирәһендә, ҡайһыһы ҡайҙа.

Кәйүм. Әптерәй, һыу бирегеҙ. Ут көсәйеп китмәһен.

Миңлебай. Ах! Эште туҡтаталар. Сәләх туған, һин нисек?

Сәләх. Зарар юҡ. Мин йәрәхәтләндем генә. Машинала ныҡ шартлау булды шикелле.

Галин, Мәхмүт йүгерешеп инәләр.

Мәхмүт. Ни бар, был ни эш? Сәләх һин ни эшләнең?

Сәләх. Иптәш Галин, мине аттылар. Машина ныҡ ватылды. Ҡарағыҙ.

Халыҡ шаулаша.

Галин. Һеҙ бик паникаға бирелмәгеҙ, тыныслыҡ һаҡлағыҙ.

Мәхмүт. Был кулактар шайкаһының эше, тиҙерәк арттарына төшәйек, бына эште нисек йөрөтәләр.

Галин. Фәлим, Мәхмүт, әйҙәгеҙ, бөтә тирә-яҡты урап алайыҡ.

Фәлим. Ярай. Инде хәҙер беҙ атҡанды ла ҡарап торһондар.

Барыһы ла йүгереп сығалар.

Ҡәйүм. Галин туған, Сәләх ағайҙы ни эшләтәбеҙ?

Галин. Яйлап алып барып һалығыҙ. Хәҙер үк докторға китһендәр. Беҙ был тирәне әҙләйек.

Әптерәй. Тимерәй, Хафиз ағай ҡайҙа? Тиҙерәк ат егегеҙ ҙә, докторҙы килтерегеҙ. Бына һиңә соревнование!

Фарид. Ах, һоро ҡорттар! Бөтә эште харап итәләр бит.

Сәләх. Ах, машинаны харап иттеләр. Фәйнулла, Миңлебай ағай, Галин иптәш — слесарь, ул машинаны ҡараһын. Бәлки, төҙәтә алыр. Барығыҙ.

Фәйнулла. Улай булғас, ҡараһын әле, ҡайҙа беҙҙең Иван.

Миңлебай. Ҡайҙа колхоздың тимерлегендәге тимерсе? Галин менән бергә эшкә ҡушырға кәрәк.

Артта «тотоғоҙ!..» тигән тауыш. Ике тапҡыр мылтыҡ атыла.

Сәләх. Бәй, бәй. Бөгөн ниндәй көн?

Сәхнәлә халыҡ аптырашып ҡала.

Миңлебай. Был ни хәл, ни бар тағы?

Шаршау

Унынсы күренеш

Барыһы ла эштә. Галин тимерсе менән тәгәрмәс тирәһендә винт бора.

Фарид. Бына был шестерняны әҙерләнем, урынына ҡуйырға кәрәк.

Миңлебай. Ғөбәй ағай, һин ҡанатты ҡаҙаҡлап бөтһәң, был яҡтан йәбештереп ҡуй. Ярай әле, егеттәр, көн-төн эшләп булһа ла, яйларбыҙ әле.

Галин машина эсенән сыға. Һырып алалар.

Барыһы ла. Йә, нисек, төҙәтеп буламы?

Оҫкон. Йә, нисек, яйланырлыҡмы, Галин ағай?

Галин. Бына беҙ тимерсе Иван менән тимерлеккә барып, валдың имгәнгән ерен эшләп алып килә алһаҡ, машина яйланыр тип уйлайым.

Ҡәйүм, Әптерәй машинаны һөртә-һөртә сығалар.

Иван. Галин иптәш, әйҙәгеҙ, үҙегеҙ күрһәтеп бирмәһәгеҙ, мин эшләй алмам бит.

Галин. Әйҙәгеҙ, барам, барам, как же, һеҙгә булышам.

Тимерсе Иван менән Галин тимерлеккә китәләр.

Барыһы ла. Бына был эш ярай!

Әптерәй. Даёшь машина!

Барыһы ла ултыралар, бер аҙ тыныҡ, ярым өмөтлө генә уйҙалар. Бер аҙ паузанан һуң.

Оҫкон. Ах ҡәбәхәттәр! Эштең иң ҡыҙыу ерендә бүлделәр бит!

Ҡәйүм. Ну сволочтар! Ваҡытты һайлай белгәндәр.

Алма. Бына бригаданың 12 сәғәт ваҡыты ҡалды бит.

Мәрфуға. Ваттырмабыҙ!

Шәкүрә. Эште яптырмабыҙ!

Алма. Дошмандан көлдөрмәбеҙ!..

Ҡәйүм. Галин иптәш менән Иван килгәс тә, машина яйға һалынасаҡ. Әйҙә, шуға тиклем бер уйын-көлкө яһап алайыҡ әле. Ниңә бойоғоп торорға?

Ғәйнулла. Ҡана әле, Тимерәй, булмаһа, бер ҡурайыңды тарт әле. *(Үҙе гармун тарта.)*

Ҡушылып йырлайҙар.

Һыҙылып ҡына ал таң атҡан саҡта,
Беҙ сығырбыҙ ҡырға эш менән,
Яңғыратабыҙ ҡырҙы, йылға буйын,
Беҙ эшләйбеҙ ҙур йәш көс менән.

Бергә эшләп, бергә хәл йыябыҙ,
Донъяһына үрнәк булабыҙ.
Ҡыҙыл байраҡтарҙың елберләүен
Һәр ерҙә лә күрмәк булабыҙ.

Гармунсы таҡмаҡ көйән уйнай. Барыһы ла дәртләнеп китәләр.

Әптерәй *(гармунға ҡушылып)*.

Ғази кулак план ҡора
Колхоздарға зарарға,
Ғәйшәкәйе тырышып йөрәй
Кулактарға ярарға.

Тимерәй. Ғази кулак Гөлсирәне
Һатлыҡ итеп эш күрә,
Колхоздар бөткән имеш тип,
Хәлим байы төш күрә.

Шәкүрә. Иҙән аҫтында эш күрә
Колчактың ҡалдыҡтары,
Бандиттарға үҙен һата
Гөлсирәләй юҡ-бары.

Алма. Әйҙә уйна, әйҙә йырла!
Беҙҙә көс барыһы ла бар,
Кулак, нэпман, муллаларға
Инде хәҙер донъя тар.

Әптерәй. Беҙ ҡорабыҙ колхоздарҙы,
Беҙ эштә, беҙҙә көс,
Синфи дошман бөтһөн әйҙә,
Ҡалһын инде ҡанлы көс.

Шәкүрә. Бөтә эшсе берләшәбеҙ,
Тотош колхоз ҡорабыҙ.
Дошман синыф емерелә,
Туғандарса торабыҙ.

Миңлебай *(эшен ташлап)*. Һай егеттәре лә ҡыҙҙары! Һай йәштәр! Бына шулай! Ҡайғырырға ярамай! Бейеп тә ебәрегеҙ. Тимерәй, Мәрфуға!

Гармунсы бейеү көйө уйнай. Бейейҙәр.

Ғәйнулла. Ниңә ҡайғырырға? Бына хәҙер тимерсе машинаның валын яһай алһа, машина ла ходҡа китер, бәлки?..

Ҡәйүм. Карағыҙ әле, Мәхмүт, Сәләх ағайҙар йүгереп бында киләләр. Ни бар икән?

Сәләх менән Мәхмүт, бер милиция инә.

Сәләх. Иптәштәр, ҡоротҡос кулактар барыһы ла ҡулға алынды. Бар, Ҡәйүм, Әкбәрҙе лә алып китегеҙ. Барыһын бергә алып китһендәр. *(Тимерәйҙән ҡағыҙ алып.)* Галин иптәш, бына ҡағыҙ!

Галин. Бына, иптәш милиционер, уларҙың делолары. Бында уларҙың акттары. Кисәге идара йыйылышының протоколдары. Һеҙгә бынан өс атлы кеше бирелә. Ҡарғалынан дүрт-биш милиционер алырһығыҙ. Барыһын да ҡалаға алып барып тапшырығыҙ. Барыһын да алып сығығыҙ.

Сәләх. Беҙ Галин иптәш менән машинаны ходҡа ебәргәс тә, артығыҙҙан сығырбыҙ. Ҡалаға беҙ ҙә барабыҙ.

Халыҡ, ҡайһыһы биҙрә төбө ҡаға, ҡайһыһы гармун бырҡылдатып йырлай. Ҡайһыһы һыҙғыра.

Милиционер. Ну, ҡуҙғалығыҙ!

Алып китәләр.

Әптерәй. Бына, малай, һабанға егергә малдар!

Фариф. Ниңә уларҙы һабанға егергә? Кәрәктәре юҡ. Улар хажға баралар. Китһендәр шунда. Тик улар беҙҙең яңы тормошобоҙға ҡамасауламаһындар.

Барыһы ла. Дөрөҫ, бына беҙ уларға яуап итеп, ауылыбыҙ менән партияға инәбеҙ.

Иван *(ике малай менән валды күтәреп сығалар. Ҡулдарында сүкеш).* Галин иптәш, бына һеҙ ҡушҡанды эшләнек. Валдың кендеген төҙәтә алдыҡ. Яҡшы сыҡты булырға кәрәк.

Галин. Шулаймы, ҡайҙа, улай булғас, урынына ҡуйып ҡарайыҡ.

Ҡоралар. Машина эсенә инәләр. Йәштәр ҡулдарына көрәк, һәнәк алып, эшкә әҙерләнәләр.

Алма. Беҙ дошманбыҙ наҙанлыҡҡа.
Әптерәй. Хәйләр булып ҡаҙалдыҡ.
Мәрфуға. Көрьәнен.
Сәлимә. Ҡорбанын.
Шәкүрә. Һепереп аттыҡ беҙ барын.
Алма. Диндәр өсөн мулла, кулак
Сәнселһендәр һыҙланып.
Осҡон. Беҙҙең теләк бында.
Бергә. Биш йыллыҡты дүрт йылда.
Әптерәй. Үтәрбеҙ.
Фәйнулла. Үтәрбеҙ.

Кәйүм. Теләктәргә етербеҙ.
Шәкүрә. Рвачтарҙы һепереп атһаҡ,
Бергә. Тағы алға китербеҙ.
Әптерәй. Сигнал бөгөн Баймаҡҡа.
Мәрфуға. Эштә артта ҡалмаҫҡа.
Алма. Әйҙәгеҙ,
Фәлим. Һәммәбеҙ.
Бергә. Тултырырға планды.
Шәкүрә. Прорыв тигән йыланды.
Мәрфуға. Ударлыҡҡа быуып бил.
Алма. Беҙ төҙөрбөҙ яңы ил.
Сәлимә. Яңынан.
Фәйнияма л. Яңыны.
Шәкүрә. Унан килеп ҡара әле.
Тимерәй. Кәртәләрҙе емерә-емерә,
Көн дә алға барабыҙ.

Машина астынан килеп сығалар.

Сәләх. Йә, ағайҙар. Инде темпты ҡыҙыу алығыҙ. Машина яйлана булырға кәрәк.
Галин. Йә, яйланыҡ шикелле.

Кәйүм колокол һуға, барыһы ла эшкә, урындарына килеп баҫалар.

Иван. Ярай әле һин булдың, юғиһә эш насарлана ине.
Фариф. Беҙгә эш сыҙаймы һуң? Бынан һуң машинаның эшен күрһендәр.

Машинаны электрға тоташтыралар. Машина гөрләп эшләп китә. Оркестр марш уйнай.

Кәйүм. Даёшь биш йыллыҡты дүрт йылда!
Әптерәй. Даешь промфинпланды тултырыу!
Барыһы ла. Ура, ура!..
Сәләх. Йәшәһен «Үрнәк» коммунаһы!

Шаршау

Сәғит Мифтахов

(1907—1942)

Сәғит Мифтах улы Мифтахов 1907 йылдың 10 ғинуарында Нуриман районы Ҡызыльяр ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Үҙ ауылында башланғыс белем ала һәм 1919 йылда Өфөләге уҡытыусылар курсында уҡый.

1922 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында Өлкә совет-партия мәктәбен тамамлай. 1923 йылда Мәскәүҙәге Көнсығыш хеҙмәтсәндәре коммунистик университетына (КУТВ) уҡырға ебәрелә. Бер ни тиклем ваҡыт Ульяновск өлкәһе Мәләкәс ҡалаһында ВЛКСМ-дың өйәҙ комитеты секретары булып эшләй. Шунда 1925 йылда КПСС ағзалығына алына.

Университетты уңышлы тамамлағандан һуң Өфөләге В. И. Ленин исемендәге урта мәктәптә һәм комвуздда ижтимағи фәндәр уҡыта. 1930 йылда КПСС-тың Баймаҡ районы культура һәм пропаганда бүлеге мөдире итеп һайлана. Бында ул тәү башлап «Ҡызыл Баймаҡ» тигән район газетаһын сығарыуҙы юлға һала.

1935 йылдан С. Мифтахов Өфө ҡалаһы берләштерелгән дәүләт театрҙарының (Башҡорт академия һәм рус драма театрҙары) директоры булып эшләй.

Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көнөндә үк үҙе теләп һуғышҡа китә һәм 1942 йылдың февраль айында батальон комиссары С. Мифтахов батырҙарса һәләк була.

Уның тәүге «Пандар иленда» тигән драмаһы 1929 йылда сәхнәлә ҡуйыла. «Һаҡмар», «Урал ҡаны», «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт», «Зимагорҙар», «Ялан ҡыҙы» драмалары, «Күктән төшкән Хөрәйрә» комедияһы, «Һаҡмар» һәм «Аҡбуҙат» либреттолары әле булһа театрҙар сәхнәһендә зур уңыш менән ҡуйылалар.

Яҙыусы тамамлаған «Блюхер рейды», «Бөйөк шквал» кеүек драмалары сәхнәлә күрһәтелеүгә насип булманы.

ЗИМАГОРҘАР

Драма

4 шаршауҙа

Ҡатнашалар

Ҡараһаҡал — Файса — 35 йәштә, прииск эшсеһе, забойщик.
Фәсхи — эшсе, уның дуҫы, 27—28 йәштәрҙә.
Кинйәбай — ҡарт забойщик.
Текәһуҡҡыс Зәйни — прииск эшсеһе, урта йәштәрҙә.
Тимаҡ — сезонлы эшсе булыуҙан бигерәк, аңһат табыш һөйә торған берәү.
Күдрәш — сезонлы эшсе, ысын исеме Аскар.
Баййегет — йәш эшсе.
Маруся — шахтала эшсе ҡатын.
Фёдор — ҡушаматы — Ҡунаҡ, революционер, шахтала машинист.
Гөльямал — Зәйнизең бисәһе.
Заһит Мамаев — прииск управляющийы, фактик хәлдә хужа.
Харис — уның хеҙмәтсеһе, доверенный.
Фәрифә — Заһиттың бисәһе.
Фәрхиямал — уларҙың аҫрауҙары.
Шаһиғәли (Шағәли) — лавкасы.
Вәли — лавкасының улы.
Гәүһәр — Шағәлизең бисәһе.
Һандуғас — Шағәлизең аҫрап үҫтергән етем туғаны.
Шәйхи — һуғыштан ҡайтҡан инвалид.
Хәҙрәт.
Фәғилә — зимагорҙарҙы ашатып тороусы ҡарсыҡ.
Никифорыч — полиция башлығы.
Халыҡ: прииск эшселәре, ике стражник.

Ваҡиға 1915—1916 йылдарҙа бара.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Эшселәр барағы. Барак буйына озон һике һуҙылған. Емерелеп бөткән урындыҡтар. Һикелә эшселәрҙең алам-һалам нәмәләре туҙылып ята. Шаршау асылғанда Кинйәбай менән Күдрәш инәләр.

Кинйәбай. Әйҙүк, ҡустым, уҙ юғары, килгәнең юҡ ине. Бында ятҡаның таҡта, тапҡаның аҡса булыр. *(Сисенә.)*

Күдрәш. Аҡсаһы мул булһа, етә, беҙ — ҡаҡҡа ла күнгән халыҡ.

Кинйәбай. Аҡсаһы шулайыраҡ инде: ер аҫтында, һуҡыр сысҡан һымаҡ, көнө буйы соконаһың да —85 тин алаһың. Билбауыңды ҡыҫыбыраҡ быумаһаң, көнлөк тапҡаның эсте ыумас менән тултырырға ла етмәй...

Күдрәш. Бының бик үк шәптән түгел икән.

Кинйәбай. Шулайыраҡ шул, ҡустым. Хәйер, минең һүҙҙәргә ҡарап, күңелең төшмәһен. Бөгөн беҙ һине ҡунаҡ итербеҙ: получка алдыҡ. Әле егеттәр лавкаға инеп ҡалдылар. Мин Фәғилә ҡортҡаға тамаҡ әҙерләргә әйтәйем. *(Икенсе яҡ бүлмәгә сыға.)*

Күдрәш *(яңғыҙ)*. Эштәр шәптән түгел икән шул... Хоҙай биреп атайым әйткән ерҙә алтын табылһа, мин, бәлки, бәхетле булып та китермен әле. Их, ҡапыл ғына ҡулға мең һум аҡса төшһә? Унанмы? Унан иң тәүҙә йорт һалам, шунан һуң бик шәп ат алам, шунан һыйыр. Юҡ, юҡ, иң тәүҙә бик һылыу кәләш алам! Бая ғына байҙар йортона инеп киткән ҡыҙ кеүек һылыуҙы алам!..

Шаулашып эшселәр ҡайтып керәләр.

Кинйәбай. Бына беҙҙең шахтёрҙар ҡайттылар. Егеттәр, беҙҙә ҡунаҡ бар.

Файса. Беҙгә килгән ҡунаҡ артмаҫ, мәжлестең уртаһында булыр.

Тимак. Бына һый ҙа алып ҡайттыҡ! *(Ашамлыҡтарҙы, шешәләрҙе өҫтәлгә ҡуя.)*

Файса. Ҡайһы яҡтан, ҡустым?

Күдрәш. Ирәндек аръяғынан.

Тимак. Бәхет эҙләп килгәнһеңдер инде?

Зәйни. Бәхетеңде, үҙең тыумаҫ эле ҡарғалар суҡымаған булһа, табаһың да табаһың инде, ҡустым.

Файса. Забойҙа эшләгәнең бармы?

Күдрәш. Бар әҙерәк.

Файса. Улай булғас, эшкә тиҙ төшөнөрһөң. *(Уның өҫ-башын ҡарап.)* Ай-вай, ҡустым, өҫ-башың бик хөрт

икән. *(Сөйҙән алып.)* Мә, һиңә кәзәкей, салбар, кей. Беҙ ашағанды аша, беҙ эскәнде эс, беҙ кейгәнде кей.

Тимак. Ғайса ағайың барҙа кәм-хур булмаҫһың, ҡустым. Ағайың егеҙ кеше ул!

Ғайса. Прииск эшсеһе булһаң, ошо биш нәмәне иҫеңдән сығарма: эште ярат, эшләһәң — ашап-эсергә рәтең булыр; булған саҡта — аша ла эс, уйна ла көл, барыбер байый алмаҫһың; өсөнсөнән, урлама. Урлашыу — байҙар эше. Унан — уҫал бул. Юҡһа башҡалар беҙҙән дә уҫалыраҡтар. Тура һүҙле, йомарт күңелле бул. Бына шул саҡта һинән ысын кеше сығыр!

Тимак. Бына һиңә, ҡустым, баш зимагор васыяты. Быны, русса әйтһәң, благославление тиҙәр. Был ағайыңдың исеме: береһе — Ҡараһаҡал, икенсеһе — Ғайса, зимагорҙарҙың даны, байҙарҙың дошманы.

Күдрәш. Ә зимагор тигәне нимә һуң?

Тимак. Улмы? Ул — йәй эшләй ҙә шатлана, ҡышын аҫҡа ҡаҡлана тигән һүҙ.

Күдрәш. Ай, бик үк һәйбәт нәмә түгел икән.

Ғайса. Дөрөҫ түгел, ҡустым. Зимагор ул — буржуйҙарҙың эшселәргә мыҫҡыл итеп таҡҡан ҡушаматы, сезонниктарға әйтелгән. Ә беҙ — эшсе, потомственный пролетариат!

Кинйәбай. Дөрөҫ! Унан, Тимак менән кәрт уйнарға ултырһаң, салбарыңды нығыраҡ ҡаптырып ултыр, юҡһа һалдырып алыр.

Егеттәр көлөшәләр.

Ғайса *(Кинйәбайҙы саҡырып алып).* Кинйәбай ағай, оҙаҡламай беҙгә машинист Фёдор киләсәк. Тиҙҙән прискыла ҙур эштәр көтөлә... Уның ни өсөн килгәнлеген оҙон ҡолаҡтарға һиҙҙермәҫкә кәрәк. Артыҡ һүҙ ысҡындырмағыҙ, ғәҙәттәгесә ултырыу булһын. Шуның өсөн мин һыйҙы ла күберәк алырға ҡушҡайным. Фёдор — ҡунаҡ, аңланығыҙмы?

Фәсхи.
Кинйәбай. } Ярай, Ғайса, аңланыҡ.

Зәйни. Егеттәр, күҙҙәр ялтыраһын, шешәләр шылтыраһын, эшкә күсәйек. *(Ишеккә табан.)* Маруська, Фәғилә ҡарсыҡ, ҡана өҫтәл әҙерләгеҙ! Әйттерәйек әле булмаһа.

Маруська *(инеп).* Ә, йөрәккәйҙәрем, асығып ҡайттығыҙмы?

Зәйни. Зимак асыҡһа ла сер бирмәй ул.

Фәсхи. Бөгөн получка бит, Маруська ҡоҙаса.

Маруська. Мин һиңә ниндәй ҡоҙаса булайым ти?

Фәсхи. Ну, еңгә, улай булһа.

Маруська. Уныһы тағы нимә тигән һүҙ була?

Фәсхи. Ниңә, еңгә булғың килмәйме әллә?

Тимак. Еңгәң, ҡустым, ҡайһы ағайыңдыҡы булырға белмәй йөрәй әле.

Маруська. Ә һин прииск хужаһына ҡайһылай оҡшарға, эсерлек аҡса усларға белмәй йөрәйһеңмө?

Егеттәр. Ха-ха-ха, бына әйтте!

Тимак. Ах, һин!.. Минең менән ҡунғандарыңды оноттоңмо ни?

Маруська. Онотманым, әле булһа, иҫемә төшөрөп, үкенәм: ниңә шул саҡта быуып үлтермәнем икән үҙеңде, исмаһам, донъяла бер шаҡшы кәмер ине!

Тимак *(ырғып тороп, уға ташлана)*. Маруська!

Маруська. Алартма күҙеңде, сүпкә лә һуҡмайым үҙеңде!

Горур итеп, Ғайсаға һыйына. Тимак, ҡуркыу аралаш гәрләнеп, тына. Көлөштәр.

Фәғилә ашарға сығара.

Зәйни *(ашты болғап ҡарап)*. Егеттәр, билмән! Әй әбейе лә әбейе, юҡ бит арыу ғына бер бабайы...

Фәғилә. Ярай, ярай, күп теленә һалышма, алдыңа килгәнде аша. Балалар, бөгөн получка алғанһығыҙ икән, бурыстарығыҙҙы түләү яғын ҡарағыҙ.

Ғайса. Әй, Фәғилә әбей, ҡайғырма, беҙҙә бурыс ҡалмаҫ.

Фёдор килеп инә.

Фёдор. Һаумыһығыҙ, егеттәр?

Барыһы ла. Әйҙүк, Ҡунаҡ!

Кинйәбай. Әйҙүк, түргә уҙ! Табында һый ҙа мул, бик уңай килдең әле.

Фәғилә. Билмән, ул, һанап яһала, самалап ашала. Ҡунаҡтар күбәйеп китеп, үҙегеҙгә етмәй тормаһын. Ҡунағығыҙҙың ауыҙы, көрәк менән тишкән һымаҡ, дыуамал.

Фёдор. Ҡуркма, инәкәй, табағынды йотмам.

Фәғилә. Атаҡ-атаҡ, был урыҫығыҙҙың түбәһен һалам менән япҡан икән дә баһа... Юҡ, юҡ, балам, ҡунаҡтан тарһынған юҡ ул, былай ғына әйтәм. Ашағыҙ.

Ғайса. Эшеңде бел, ҡарсыҡ: һый һинән, аҡса минән. Бар, тағы әҙерлә.

Фәгилә. Була, балакайым, була! *(Сыға.)*

Гайса. Кунак та булгас, Фәгилә карсыктың һыйы гына етмәҫ тә шул. Зәйни ағай, Тимак, барыгыҙ әле тағы алып килегеҙ. Хәйер, Тимак, һин бармаһаң да ярай. *(Бер егеткә.)* Кустым, булмаһа, Зәйни ағайың менән һин бар. Бына акса. *(Акса бирә.)*

Зәйни. Аракы ла алайыммы?

Гайса. Уныһын үҙең белерһең инде.

Зәйни. Аракы тирәһен, пажалый, минән якшы белеүсе кеше булмаҫ. Әйҙә, кустым. *(Сыгып китә башлагас, кире боролоп.)* Юлга берҙе һелтәп китергә кәрәк әле. *(Һалып эсә.)* Бына булды, әйҙә, кустым. *(Сыгып китәләр.)*

Фёдор. Кәрәкмәҫ ине, Гайса.

Гайса. Зарар юк. Артык колактарҙың булмаганы якшы...

Фёдор *(Күдрәшкә күрһәтеп).* Ә һуң был ышаныслы егетме?

Гайса. Ул бөгөн генә килгән егет, уны-быны белмәй әле. *(Тимак, Фәсхи, Кинйәбайҙарҙы сакырып.)* Әйҙәгеҙ, табынга якыныраҡ килегеҙ.

Табын тирәһенә ултырышалар.

Кинйәбай. Кунак, йә, күргән-белгәндәреңде һөйләштерә ултыр.

Фёдор. Күрелгән — һөйләп бөтөрөрлөк түгел, белгәндәр аҙ.

Кинйәбай. Фронтта хәлдәр ни корло? Еңәбеҙме ярманды?

Фёдор. Ай, һугыш — һугыш инде ул: байҙарга — файҙага, ярлыларга — кайгыга.

Кинйәбай. Әйтмә лә, һугыш купканы бирле билде ныгыраҡ бөгәбеҙ, алтынды бейегерәк өйәбеҙ, ә үҙебеҙ аскa кибәбеҙ.

Фәсхи. Шул-шул, берәүҙәр кан коя, башкалар мал йыя.

Кинйәбай. Оҙаҡ барырмы икән һуң был һугыш?

Фёдор. Был иптәштәр, империалистик һугыш, ул батша хөкүмәтенең еңелеүе менән тамамланганда гына, беҙҙең еңеү, революцияның еңеүе булып әйләнәсәк. Беҙгә, иптәштәр, крәҫтиәндәр менән бергәләп, һугышка каршы революцион сығыштар ойоштороргa кәрәк. Ул сығыштар батша хөкүмәтенә каршы дөйөм восстанигa әйләнергә тейеш.

Гайса. Дөрөҫ!

Ф ё д о р. Революция яҡынлай, иптәштәр. Фронттарҙа батша Россияһы аҙым һайын уңышһыҙлыҡҡа осрай, һалдаттар һөжүмгә барыуҙан баш тарталар, немец һалдаттары менән туғанлашалар... Был һуғыш империалистарҙы байытҡа, беҙгә, хеҙмәт халҡына, тик бөлгөнлөк, яфалар ғына килтерә.

Әкрен генә ишек асыла, барыһы ла ишеккә ҡарайҙар. Уңда яурынына һалдат тоғо аҫҡан, ҡултыҡ таяҡлы Ш ә й х и күренә.

Б а р ы һ ы. Шәйхи?!

Ф ё д о р. Бына шул — һуғыштан беҙгә килгән файҙа!

Ш ә й х и. Һаумыһығыҙ, егеттәр?

Барыһы, уға ҡаршы барып, күрешә. Шәйхи ултыра, тәмәке төрә башлай.

К и н й ә б а й. Һине танырлыҡ та түгел, Шәйхи.

Ш ә й х и. Да, танымаҫлыҡ булыр ҙа шул: нужаны күп күрелде.

Ф а й с а. Ни хәлле ҡайттың? Күптәнме фронттан? Ҡуҙғалма, ултыр, туған, ултыр.

Ш ә й х и. Ни хәлле тип ни, күреп тораһығыҙ, аяҡтарҙы ярмандар һындырҙылар. Өс ай лазаретта яттым. Бына һөйрәлеп ҡайттым. Ҡайҙа барырға белмәгәс, аптырап, беҙгә килергә булдым. Бисә бармы-юҡмы, белмәйем, бер йыл хат алғаным юҡ. Ике бала ла ҡалғайны, улар ни хәлдәлер инде? Бәлки, уларҙы һеҙ белә̀негеҙҙер?

К и н й ә б а й. Беләбеҙ ҙә, Шәйхи ҡустым, һиңә бер ҙә күңелле хәбәр әйтә алмайбыҙ шул.

Ш ә й х и. Нимә, әллә үлеп бөттөләрме?

К и н й ә б а й. Эйе, ҡустым, балаларың үлделәр.

Ш ә й х и. Балаларым!.. *(Илай.)* Ә һуң бисә ҡайҙа?

К и н й ә б а й. Бисәң бик яфаланды, ваҡ-төйәгеңде Шағәлигә һатҡылап торҙо ла, балаларың үлгәс, ҡайҙалыр, әсәләренәме, китте.

Ш ә й х и. Аяҡтар ҙа һыныҡ, инергә өй ҙә, балалар ҙа юҡ... Ни өсөн? Кем өсөн? Шул тиклем ҡаза!

Ауыр тынлыҡ.

Ф а й с а *(уға араҡы биреп)*. Илама, Шәйхи, ир бул. Мә, эс, ҡайғыңды баҫыр, күңеленде асыр.

Ф ё д о р. Беҙҙең күргән әсе ҡайғыларҙы араҡы ғына ала алмаҫ шул: фронтта инвалид яһайҙар, ҡыралар, бында байҙар муйынды һығалар.

Ш ә й х и *(яһып)*. Күпмегә барып был?!

Г а й с а *(Фёдорға күҙ ҡыҫып).* Уныһын, донъя күргән һалдат, һин белəһеңдер инде. Ə беҙ, сыҫкан һымаҡ, ер аҫтынан сыҡҡан юҡ, белмəйбеҙ.

Ш ə й х и. Мин мылтыҡты ғына беләм.

Ф ё д о р. Ə мылтыҡтың нисə осо бар?

Ш ə й х и. Ике: штык та приклад. Шуны ҡулыңа тотторалар ҙа артыңдан ҡыуалар: вперед та вперед. Ур-а-а!..

Г а й с а. Ə приклад менəн артыңдан ҡыуыусының томшоғона бирһəң булмаймы?

Ш ə й х и. Бик ярап ҡалыр ине лə, ҡурҡыта шул.

Уны ашарға ултырталар.

Ф ё д о р. Бүренəн ҡурҡҡан урманға бармай. Əллə 1905 йылды оноттоғоҙмо? Батшалыҡтың нигеҙен дер һелкеттек бит! Болоттар ҡуйыра, егеттəр, ҙур дауыл булыр. Ə ул дауыл күтəрелһə, иҫке йорттоң нигеҙен генə дер һелкетеп ҡалмаҫ, аҫтын-өҫкə килтерер! *(Тауышын түбəнəйтеп.)* Беҙгə үҙ бəхетебеҙ өсөн үҙебеҙгə көрəшкə сығырға кəрəк, егеттəр. Бəхет үҙенəн-үҙе килмəй...

Ф ə с х и. Дөрөҫ, Ҡунаҡ!

Ф ё д о р. Фронтта эштəр хана: һалдаттар арығандар, ҡорал насар, батша һарайының нигеҙе ҡаҡшай, ул емереләсəк. Ə ниҙə беҙ миллионер Мамаевтан ҡаныбыҙҙы эсертəбеҙ һуң, ə?

К и н и э б а й. Ҡара һөлөк бит ул, эше шул — эсə инде.

Ф ё д о р. Юҡ, юл ҡуймаҫҡа кəрəк! Эш көнөн ҡыҫҡартһын, хеҙмəт хаҡын арттырһын! Беҙҙең шахта эшселəре ошондай талап ҡуйып, иртəнəн һуңға эш ташларға əҙерлəнəлəр.

Г а й с а. Бик яҡшы итəлəр!

Ф ё д о р. Ə һеҙҙең забойщиктар беҙгə ҡушылырҙармы, булышырҙармы?

К и н и э б а й. Булышмай ни, шундай изге эшкə.

Г а й с а. Забойщиктарҙың күбеһе риза. Улар менəн мин ныҡ һүҙ беркеттем. Көнөн генə кəтəлəр. Арала ныҡышҡандары ла бар барын, хəйер, улар əллə ҡайҙа бара алмаҫтар.

К и н и э б а й. Эш хаҡын арттырмаһа, шахталарҙы һыуҙан баҫтырабыҙ ҙа, икенсе приискыға китəбеҙ ҙə барабыҙ!

Ф ё д о р *(көлəп).* Башҡа урында əллə яҡшыраҡ булыр тип беләһеңме? Көтəп тор, Агиҙелдең аръяғында бер эҙəгə — бер һыйыр.

К и н й ә б а й. Беҙҙең өсөн ҡайҙа ла бер ҡояш.

Ф ё д о р. Бына шуның өсөн дә Мамаевты беҙҙең талаптар менән иҫәпләшергә мәжбүр итергә кәрәк. Бер ҡайҙа китмәйбеҙ. Ул Мөхәммәт булһа, беҙ — тау. Тау Мөхәммәткә бармай, ә Мөхәммәт тауға үҙе килә. Иртәнән һуңға приискыла дәйәм забастовка!

Т и м а к. Ярай ҙа эш барып сыҡһа, егеттәр...

Ф ә с х и. Ниңә сыҡмаһын?

Т и м а к. Казактар килтерһәләр?..

Ф а й с а. Килтерһә, казактарын — ҡаҙыҡҡа, унан — эттәргә аҙыҡҡа!

З ә й н и менән т е г е е г е т керә.

З ә й н и. Булды, егеттәр, булды! Эсәбеҙ, типтерәбеҙ, түгәбеҙ, киптерәбеҙ. Забой тар, әлдә араҡы бар, ул да булмаһа, бөтөр ине зимактар. Бына атаһы, бына инәһе, бына балаһы. *(Берәм-берәм шешәләрҙе өҫтәлгә тезә.)* Ә ҡоҙа менән ҡоҙағыйҙар Шағәли лавкаһында ғына ҡалдылар, бараһың да алаһың. И-их!..

К и н й ә б а й. Дөрөҫ, Текәһуҡҡыс, типтерәйек! Кем белһен, бәлки, был приискыла һуңғы тапҡыр бергәләшеп ултырабыҙҙыр. *(Көйләп.)* Зимак башы бөгөн бында, иртәгә әллә ҡайҙарҙа...

Стакандар күтәрәләр. Исем өсөн Фёдор ҙа эскән була. Зәйни тағы араҡы ҡойоп күтәргә теләй, ләкин берәү ҙә тотонмағас, стакандар менән сәкәштереп, үҙе генә эсә. Маруська, тәҙрә төбөндә, бойоҡ баҫып тора.

Ф а й с а. Маруська! Әй, Маруська, ниңә һин ултырмайһың? *(Уның янына бара.)*

М а р у с ь к а *(әрнеп)*. Эсмә, Файса, ниңә үҙеңде ағыулайһың һин?

Ф а й с а. Ниңә, барыһы ла эсә бит, әллә мин башҡаларҙан кәмме?

М а р у с ь к а. Кәм түгел, күп тапҡыр яҡшы һин уларҙан, шуға күрә үҙеңде һаҡла.

Ф а й с а. Кем өсөн, ни өсөн һаҡларға?

М а р у с ь к а. Их, Файса, Файса... мин яратам һине!

Ф а й с а. Ә-ә, значит, һинең өсөн үҙемде һаҡларға? Ул саҡта — була, кеше өсөн үҙеңде һаҡларға була. Ә мин үҙем өсөн ни почем: араҡы мине еңмәһә, шахта баҫыр, йәки стражник атыр. Барыбер один конец.

М а р у с ь к а. Ауылға китәйек, Файса. Бында башыңды ашарҙар һинең.

Ф а й с а. Кемдәр ашарҙар? Төкөрәм мин уларға!

М а р у с ь к а. Алтындың аяғы юҡ, ә донъя ҡыҙыра; ҡулы юҡ, шулай ҙа бар ергә тығыла. Миллионер Мамаев, уның доверенныйы Харистар харап итерҙәр һине.

Ғ а й с а. Пустяк! Минең әле бер кем алдында ла баш эйгәнем юҡ. Ә һине яратам, яратам, Маруська. Күҙҙәреңә матур булған өсөн түгел, йөрәгең өсөн яратам. Шундай алтындан саф йөрәкте бысраҡҡа батырыусыларға асыу итеп яратам һине. Ҡурҡма, алтыным, ҡабат улар ҡулына бирмәм мин һине!

М а р у с ь к а. Ох, ысынмы?!

Ғ а й с а. Забойщиктың һүҙе бер — сапҡан ерҙән өҙә. Әйҙә, эсмәһәң дә ултыр, минең өсөн!

Маруська ултыра, Зәйни уға араҡы һала, ләкин ул эсмәй, кире ҡуя. Зәйни, Кинйәбай, Тимак эсәләр.

Ә беҙҙең ҡунаҡ ниңә ситтә генә ултыра? Ниңә табында түгел? Әйҙә, ҡустым, ултыр!

К и н й ә б а й. Кил, ҡустым!

К ү д р ә ш *(ултырған еренән)*. Рәхмәт, мин эсмәйем.

З ә й н и *(иҫерә төшә, урынынан тороп, Күдрәшкә бара)*. Ул ни тигән һүҙ? Зимак эсмәй тормай ул. Әйҙә, әйҙә, тор! Һыйлағанда һыу эс, әтү балдан да ҡоро ҡалырһың.

Күдрәште етәкләп килтереп ултырта, араҡы һалып бирә. Ғайса менән Федор әкрен генә нимәлер һөйләшәләр, Маруська борсолоу менән уларға ҡарай. Ф ә ғ и л ә ҡ а р с ы ҡ инә.

К и н й ә б а й. Баййегет ҡустым, ниңә һинең тауышың сыҡмай әле? Ҡана, тарт «Зимагорҙарҙы».

З ә й н и. Әйттер шуны!

Т и м а к. Күтәрелһен күңелдәр!

Баййегет гармун тарта, Ф ә ғ и л ә ҡ а р с ы ҡ сығып китә. Ғайса менән Фёдор ситкәрәк китеп һөйләшергә теләй, ләкин ишектән килеп кергән В ә л и ҙ е күргәс, шым булалар.

К и н й ә б а й. Ә-ә, шәкерт килде, Вәли!

З ә й н и. Сос шәкерттең мороно: араҡы менән кәрт еҫен әллә ҡайҙан һиҙеп тора.

Ф ә с х и. Ниңә һуң әле, шәкерт, һин һаман уҡырға китмәйһең?

З ә й н и. Ул бит Тимактан кәрт ғилеме уҡый.

Е г е т т ә р. Ха-ха-ха!

Ғ а й с а. «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә һалдат казармаһы яҡын шул: йоҡлап ятҡанда карауатыңды күсерҙе ҡуйҙылар. Унан, әйҙә, шәкерт, атла шарт-шорт, айтдва!

В ә л и. Дөрөç, Ғайса, казарма яҡын шул. Ә минең һалдат булғым килмәй. Мин һуғышты күрә алмайым, ҡан ҡойоуға ҡаршымын. Мин хисле кеше, юғары зат, ә һуғыш ул — йыртҡыслыҡ.

Т и м а к. Юғары зат, мә әле, берҙе һелтәп ебәр. *(Араҡы бирә.)*

В ә л и. Ах-х! *(Төп күтәрә әсә.)*

З ә й н и. Шәкерт, ә араҡыны ҡырын ҡаҡмай.

К и н й ә б а й. Ул араҡыға ла ҡаршы — күрә алмай, тап килгән бер ерҙә эсеп бөтөрә.

Ф ё д о р. Йә, егеттәр, хәҙергә хушығыҙ! Мин китәйем инде, һыйығыҙ өсөн рәхмәт.

К и н й ә б а й. Ултыр әле, Ҡунаҡ, ҡайҙа ашығаһың?

З ә й н и. Мин Ҡунаҡты һыйларға һый алып ҡайттым, ә ул китә. Ул ни тигән эш, зимактарса түгел.

Ф ё д о р. Рәхмәт, егеттәр, ултырҙым. Мине оҙатаһыңмы, Ғайса?

Ғ а й с а. А как же?

Фёдор артынан сығып китә. Маруська борсолоп уның күҙҙәренә ҡарай. Байҙегет гармун тарта, егеттәр шаулашып йырлайҙар.

Е г е т т ә р. Тартып уйна гармуныңды,
Йырлаусыға ход булһын,
Йыр тыңлаған йәш ҡыҙҙарҙың
Ике күҙе ут булһын!
Иха, иха, иха, иха,
Иха, иха,иха -хай!..

Беҙ эсәбеҙ балдарҙы,
Бал бөтөрмәй малдарҙы,
Ашап-эсеп, уйнап-көлөп,
Сығарайыҡ дандарҙы...
Иха, иха, иха-хай!..

Һ а н д уғ а с инә.

Һ а н д уғ а с. Фәсхи, кил әле.

Т и м а к. О, һандуғастар ҙа төнәр ваҡыт етте, ахыры...

Ф ә с х и. Ә һин, Тимак, күпте күрмә!

Т и м а к. Ҡара, ҡустым, һандуғасың осоп китмәһен...

З ә й н и. Был — һандуғастың балаһы ғына бит әле, иртәрәк түгелме?

Һ а н д уғ а с. Ошо, һеҙгә килһәң, гел мәҙәкләү булыр инде.

Т и м а к. Абай бул, һандуғас балаһының ҡанаты ҡатмаҫ элек уны төйләгән тибә торған.

Фәсхи. Типһә лә бөҙәкен типмәҫ.

Тимак. Ҡара төйләгән күргәнсе, сыбары алып осмаһын.

Фәсхи. Тимак, был шаяртыуыңмы, әллә ысыныңмы?

Тимак. Телəһəң нисек аңла.

Фәсхи. Ярай, аҙаҡ һөйләшербеҙ!

Сығып китәләр.

Тимак. Аҙаҡмы, һуңмы, Һандуғас барыбер һиңә булаһы ҡыҙ түгел. *(Шәйхи янына килеп.)* Их, инвалид, бер эсәйек әле.

Шәйхи. Булмай, булмай... иҫерҙем. Тыным тарлыға минең, тыным! Ә теге Ҡунаҡ мылтыҡ тураһында дөрөҫ әйтә, правда.

Вәли. Ниндәй мылтыҡ ул?

Байегет. Ә һин, шәкерт, күпте белмә, тиҙ ҡартайырһың. *(Гармун уйнап, үҙе йырлай башлай.)*

Ҡайтыр инем илемә,
Зимагор тиҙәр инде,
Бар тапҡанын ашап-эсеп
Бөтөргән тиҙәр инде.

Егеттәр. Иха-иха-иха-иха!..

Кинйәбай *(Күдрәшкә)*. Бына һин, ҡустым, донъяның эсе һурпаһын аҙ татығанһың әле. Күрәм, эсмәй ултыраһың. Зимагор эсмәй тора алмай ул. Торон ҡара. Донъяла барыһы ла эсә. Бай ҙа эсә, ярлы ла эсә. Бай барлыҡтан, ярлы юҡлыҡтан эсә. *(Күдрәш урынынан ҡуҙғалырға телəй.)* Туҡта әле, туҡта, ултыр. Бына һин йәш егет, бəхет эҙләйһең. Мин дə эҙлəнем уны, 40 йыл буйы эҙлəнем. Тайгаһын да, Уралын да, Себерен дə ҡалдырманым. Юҡ бəхет. Табыш булманы.

Күдрәш. Хоҙай бирһə, табылыр әле.

Кинйәбай. Хоҙай бирһə бит ул. Ә бирмәһə?.. Шул, шул. Юҡ, табылмай. Ҡайҙа һуң ул? Алтын сығарам, ə бəхет юҡ. Шабаш! Мамаев бай менəн Шағəли алтын сығармай, ə бəхетлелəр.

Тимак менəн көрт уйнап ултырған Вəли һағайып, Кинйəбайҙың һүҙҙəренə ҡолаҡ һала.

Вəли. Эй-йəй, ҡартлас, атайға тел тейҙермə!

Кинйəбай. Тел генə тейҙерəм шул, ə бына был туҡмаҡ менəн берҙе тамыҙһам яҡшыраҡ булыр ине.

(Көслә кулын йоҙроҡлап, янай.) Әйт әле, шәкерт, бәхет нәмә?

Вәли. Бәхет — бәхет инде ул.

Кинйәбай. Ә-ә, әйтә алмайһыңмы? Бына мин һинең атайың Шағәли менән миллионер Мамаевҡа ун йыл алтын сығарам, бәхетле булғаным юҡ.

Вәли. Тырышырға кәрәк. Тырышмаусылар өсөн, ерҙең өҫтөндә йөрөүгә ҡарағанда, ерҙең аҫты яҡшыраҡтыр.

Зәйни. Беҙме тырышмайбыҙ, ә? Беҙме? Әлдә ер аҫтынан сыҡҡан юҡ, тереләй ҡәберҙә.

Кинйәбай. Ҡуй, һөйләшмә шуның менән. Эх-х... *(Иҫерә төшә, илай.)*

Файса инә.

Маруська. Нәмә булды? Кем рәнйетте ҡартты?

Кинйәбай. Тормош рәнйетте, эт тормошо.

Файса кейенә башлай, Фәсхи инә.

Маруська *(Файса янына бара)*. Файса, һин ҡайҙа бараһың? Ниңә ултырмайһың? Үҙең миңә ултыр тинең, ә үҙең китәһең.

Файса. Барыр ерем бар.

Маруська. Тағы шул Фёдор артынанмы?

Файса. Борсолма, оҙаҡламай ҡайтырмын.

Фәсхи *(көлөп)*. Ниңә күҙҙәреңде мөлдерәттең, Тимаҡ? Әллә ҡош ҡулыңдан ысҡынамы?

Тимаҡ. Үҙеңдеке ысҡынмаһын!

Файса *(Фәсхиҙе сағырып алып)*. Мин киттем, Фәсхи. Бер аҙҙан һин дә бар, әммә һиҙҙермә. *(Сығып китә.)*

Фәсхи. Ярай.

Зәйни *(шешәләр алып)*. Кинйәбай ағай, Кинйәбай ағай, бында рәт бөткән.

Кинйәбай. Бөтһә, бар, тағы алып кил. Аҡсаң бармы?

Зәйни. Бар кеүек ине. *(Кеҫәләрен бутай, әммә аҡса тапмай.)* Бына кәзәкейҙе осорам. Шағәли бер-ике шешә бирер әле.

Кинйәбай *(аҡса сығарып)*. Ҡуй, һиндә булмаһа, миндә бар. Кәзәкейең хәҙергә ҡалып торһон әле.

Зәйни. Уныһы ла була. *(Аҡсаны ала, сығырға бара.)*

Кинйәбай. Әй, Текәһуҡҡыс, бында алып килмә, бер көнгә урынға алып бар. Бында билмән дә, йәм дә

бөттө. Беҙ шунда барырбыҙ. Барабыҙмы, егеттәр? Ә? *(Зәйнигә.)* Йә, кит. Барабыҙ.

З ә й н и. Ярай. *(Сығып китә.)*

К и н и й ә б а й. Йә, егеттәр, ниңә аптырап ҡалдыҡ? Баййегет, ал гармуныңды! *(Күдрәшкә.)* Ҡунаҡ егет, һин дә беҙҙең менән бар.

К ү д р ә ш. Мин әсмәйем бит, ағай.

К и н и й ә б а й. Ә һин әсмәһәң дә бар. Әсмәһәң, йырларһың. Әйҙәгеҙ, егеттәр!

Барыһы ла ҡуҙғалалар. Баййегет гармун тарта, башҡалар ҡушылып йырлап сығып китәләр.

Беҙ алай ҙа итмәгән,
Беҙ былай ҙа итмәгән,
Нашту беҙгә ҡайғырырға,
Урлап Себер китмәгән.
Иха, иха, иха!..

Фәсхи кейенә лә сығырға бара.

М а р у с ь к а. Фәсхи, һин ҡайҙа китәһең?

Ф ә с х и. Сығам әле, бараһы ерем бар.

М а р у с ь к а. Ғайса янынамы?

Ф ә с х и. Эйе.

М а р у с ь к а. Берүк күҙ-ҡолаҡ була күр уға... *(Тағы нәмәлер әйтергә теләп ынтыла, ләкин өлгөрмәй.)*

Ф ә с х и ашығып сығып китә. Урамда гармун тауышы алыҫлашҡандан-алыҫлаша. Тынлыҡ.

Әсәләр меҫкендәр... Нәмә эшләһендәр һуң инде, ҡайҙа барһындар?.. Ярты ғүмерҙәре ҡараңғы забойҙа, төндәре бысраҡ бараҡта үтә. Яҡтыны ла туя күрә алмайҙар бит. Ә мин үҙем ошо ҡыҫҡа ғүмеремдә ни рәхәт күрҙем һуң? Юҡ, күргәнем юҡ. Атайымды шахта баҫып үлтерҙе. Әсәйем ауырыу. Ашарға юҡ, кейергә юҡ, туңа инек. Шул саҡта ошо убырлы Фәғилә ҡарсыҡ аҫрап, эшкә урынлаштырам тигән булып, приискыға алып китте. Дөрөҫ, эшкә урынлаштырҙы ул, ләкин бысраҡ эшкә: ун дүрт йәшемдә мин Харис приказчиктың түшәгенә әйләндем. Шунан һуң, иҙеп бөткәс, урамға сығарып ташланылар. Тағы аслыҡ, туңыу, интегеү... Мин ҡулдан-ҡулға күстем, эсергә һабыштым. Нәмә эшләйһең, сара юҡ, батып барыусы һаламға йәбешә: зимагор Тимаҡ мине тормоштоң иң төбөнә һөйрәй ине, әммә, бәхетемә ҡаршы, Ғайса, дуҫлыҡ ҡулын һуҙып, тартып алды, күкрәгенә

ҡыҫты, туңып барған йөрәгемде йылытты. Хәҙер инде ошо бәләкәй генә бәхетемде лә минән күпһенәләр, тартып алырға итәләр. Их, тормош! Ниңә һин былай? *(Илай.)*

Тимак килеп инә.

Тимак. Маруська, йәнем!

Маруська *(һиҫкәнеп)*. Уф, кешегә иркенләп ларға ла ирек бирмәйҙәр.

Тимак. Ниңә иларға? *(Яурынына ҡулын һала.)*

Маруська *(уның ҡулын алып ташлап, тороп китә)*. Илағым килгәнгә.

Тимак. Маруська, ниңә һин минең йөрәгемде аңламайһың? Ниңә һаман шул Ғайса тирәһенә һыйынаһың?

Маруська. Яратам.

Тимак *(асыулы)*. Маруська!

Маруська. Яратам шул, яратам! Нәмә эшләтерһең, яратам! Көнләшәһеңме? Мә, йөрәгемде соҡоп ал. Яратам!..

Тимак. Их, Маруська, шул Ғайсаның ҡайһы еренә ҡыҙығаһың һин?

Маруська. Уның, исмаһам, йөрәге бар, ә һинең?

Тимак. Мин һине яратам, Маруся.

Маруська. Яратаһың?.. Ха-ха-ха! Харис та мине яратты, унан һуң һин... Минең матурлығым барҙа, күңелем шат, тәнем таҙа саҡта яраттығыҙ. Ә унан һуң? Унан һуң... мәктәп бөткән һәйәк кеүек, урамға сығарып ташланығыҙ. Шуның өсөн яратмайым мин һине! Хәҙер, ул көндәр иҫемә төшһә, үҙемдән үҙем ерәнәм.

Тимак. Маруська, мин һине ысын күңелдән яратам. Теләһәң, әйҙә, икәү китәйек бынан, бергә торорбоҙ. Барыһы ла онотолор.

Маруська. Бер һүҙеңә лә ышанмайым, Тимак. Беләм бит, йөрәгең ҡара, күңелең керле, башың тулы этлек һинең. Хатта һинең йылмайыуың да — эт йылмайыуы. Кит! Кит, зинһар, кит күҙ алдымдан, Тимак! Ерәнәм мин һинән, кит!

Тимак. Ах, һин, кейәңке! *(Бысаҡ сығарып Маруськаға ташлана.)*

Маруська *(күкрәген киреп)*. Мә, сәнс!

Тимактың йөрәге етмәй, бысаҡты күкрәгенә терәгән килеш тора, сәнсә алмай. Ишектән Харис килеп инә.

Харис. Ни эшләйһең, Тимак? *(Яҡын килә. Тимак менән ҡарашып торалар. Тимак боролоп китә.)*

М а р у с ь к а *(Тимакка)*. Ниңә сәнсмәнең? Их, ҡуркаҡ әт!

Х а р и с *(Тимакка)*. Ир була тороп, шуға ҡул бысратамы кеше?

М а р у с ь к а *(Харистың битенә төкөрөп)*. Ҡара йөҙ, һин дә яҡшы әт! Сволочь! *(Сығып китә.)*

Х а р и с. Минең ҡулда алтын, ә һинең баҙарың төштө инде. Беҙ яҡшыраҡтарын да табырбыҙ... *(Тимакка.)* Ҡайҙа китте теге һуҡыр сыскандар?

Т и м а к. Эсергә.

Х а р и с. Ә һин ниңә уларҙан ҡалдың? Мин һиңә нәмә ҡуштым? Һандуғас бында индеме?

Тимак өндәшмәй.

Т и м а к. Инеп сыҡты.

Х а р и с. Эм... Йә тағы нәмә бар?

Т и м а к. Иртәнән һуңға эш ташларға уйлайҙар.

Х а р и с. Бына һиңә кәрәк булһа! Кемдәр башланы?

Т и м а к. Ғайса менән Фәсхи, машинист Фёдор.

Х а р и с. Шул Ғайсаны юҡ итергә ине: күҙе асыла башлаған. Ул һинең Маруськаңды тартып ала, ә һин ауыҙ шалпайтып йөрөйһөң, күҙле бүкән!

Т и м а к. Мин ни эшләргә белермен әле! *(Аҡса һорай.)* Ҡана, әҙерәк кәрәк ине.

Х а р и с. Иртәгә алырһың.

Ғәғилә инә. Тимак уға асыулы ҡарап, сығып китә.

Ғ ә ғ и л ә. Һаумы, Харис?

Х а р и с. Һау булмаһам, һин доктор түгелһеңдер әле.

Ғ ә ғ и л ә. Атаҡ-атаҡ, ни эшләп ул тиклем асыулы һин, Харис?

Х а р и с. Ә һин, убырлы ҡарсыҡ, ниңә өйөңдә ҡыҙ менән егет ҡушып ятаһың?

Ғ ә ғ и л ә. Ҡасан? Кемде?

Х а р и с. Һандуғас менән Фәсхиҙе.

Ғ ә ғ и л ә. Юҡсы, күргәнем дә юҡ.

Х а р и с. Алдашма! Ҡара уны, бынан һуң тағы ла ишетһәм, өйөңдөң көлөн күккә осорормон!

Ғ ә ғ и л ә. Ниңә ул тиклем асыуланаһың, Харис? Минең һиңә ниндәй файҙаларым теймәне? Ҡандай ҡылыу ҡыҙҙар менән ҡауыштырҙым үҙеңде.

Х а р и с. Уның өсөн мин аҡса түләнем, булған да бөткән. Инде Һандуғасты миңә ҡуш, унан асыуым бөтөр.

Фәгилә. Инде, Харис туганҡай, ҡулдан килгән ярҙамды итермен. Итмәгән ҡайҙа, тик үҙең мәрхәмәттән ташлама.

Күдрәш килеп инә, ҡарсыҡ аптырап, һүҙҙән туҡтай.

Ә-ә, бына был беҙҙең йәш зимак. Бөгөн генә килде.

Харис. Шулаймы? Һаумы, ҡустым?

Күдрәш. Һауғынамы, ағай?

Фәгилә. Был, балам, Харис ағайың — Заһит байҙың уң ҡулы, дәверһәй, ошо приискының башлығы була.

Харис *(ентекләп ҡарап)*. Былай йүнле генә егет күренәһең. Эшкә килдеңме?

Күдрәш. Шулай ине иҫәп, эш булһа.

Харис. Бындай егеткә лә эш тапмағас, ул нәмәгә ярай? Ә һалдат яғың нисек һуң?

Күдрәш. Кабановта эшләгәндә аҡ билетҡа ҡалдырғайнылар, хәҙер ни эшләр.

Харис. Шулаймы? Ярай, иртәгә эшкә төшөрһөң. *(Китергә була.)*

Күдрәш *(үҙ алдына)*. Әйтәйемме икән?.. Ағай, туҡта әле?

Харис. Нәмә бар?

Күдрәш *(йәшерен)*. Мин был приискыла бай алтын ятҡан ерҙе беләм. Рөхсәт булһа, мин шунда эшләп ҡарар инем.

Харис. Рөхсәт, рөхсәт, ҡустым. Тапһаң, бай үҙеңә ҙур һөйөнсө бирер.

Күдрәш *(шатланып)*. Шулаймы, ағай?

Харис. Шулай булмай ни, Заһит бай йомарт кеше ул. Тик һин кешегә шаулама, алтынды тапҡас, үҙемә генә күрһәтерһең.

Күдрәш. Ярай, ағай.

Харис *(ситкә)*. Был егет шымармағандыр, ахыры, ҡулға алғанда ла зарар итмәҫ.

Тыштан гармун тауышы ишетелә.

Ярай, ҡустым, мин киттем, тегеләр ҡайтып киләләр. Шулай, иртәгә үҙем менән барырһың. Бер кемгә лә шаулама. Ундай эштә сер тоторға кәрәк. Аңланыңмы? *(Сығып китә.)*

Күдрәш *(шатланып)*. Их, былай булғас, донъя бәхете асыла!

Гармун уйнап шахтёрҙар керәләр. Күбеһе иҫерек. Кинйәбай менән Зәйнизең өҫтөндә туҙып бөткән кәзәкейҙәр.

К и н и й ә б а й. Әй, беҙҙең ҡунаҡ бында ҡайтып та ултырған бит. Егеттәр, ниңә беҙҙең Күдрәште яңғыҙ ҡалдырҙығыҙ?

З ә й н и. Бына һиңә, ҡустым, яңы исем!

К и н и й ә б а й. Һин, ҡустым, үпкәләмә. Сәсең дә бөҙрә икән, исемеңде лә әйтмәнең. Күдрәш тип атайыҡ та ҡуяйыҡ инде.

Б а й и е г е т. Ҡушабыҙ! Күдрәш, матур исем бит.

Б а р ы һ ы л а. Күдрәш! Күдрәш! Беҙҙең ҡунаҡ!

Ултырышалар, береүҙәре ҡырын ята, тәмәке тарталар. Байиегет аҡрын ғына гармун уйнай башлай.

З ә й н и *(Күдрәш янына барып)*. Ултыраһыңмы, ҡустым? Ултыр, ултыр. Мин дә элек шулай ултыра торғайным. Хәҙер бына, күрәһең, пинжәк тә китте. Донъя шулай итә ул, ҡустым. Тапҡан алтын — Заһитҡа, алған аҡса — Шағәлигә. Уға беҙҙең өҫтәге кейемдәр ҙә һыя ла бөтә. Ана Кинйәбай ағайымдыҡы ла китте. Китһен, барыбер беҙҙеке бөтмәҫ, юҡ нәмә бөтмәй ул.

Гармун көсәйә, башҡалар иха-ихайлап, көйгә ҡушылалар.

К и н и й ә б а й *(тора, өҫтәлгә ҡаты һуға)*. Етер! Туҡтатығыҙ шул гармуныгыҙҙы! Эй, Текәһүҡҡыс Зәйни, ал ҡурайыңды.

З ә й н и. Була ул, Кинйәбай ағай. *(Ҡурайҙы алып, һуҙыҡҡырап ҡарай)*. Ниндәй көй уйнайым, Кинйәбай ағай?

К и н и й ә б а й. Уйна, бына нәмәне... *(Ҡулын һелтәп.)* Нәмә булһа ла ярай.

Зәйни «Сибай» көйөн уйнай, тынлыҡ.

Их, арыҫландай ирҙәрҙең ғүмере бына шулай, йомғаҡтай ғына тәгәрәп, үтә заяға...

Шаршау

Икенсе күренеш

Шағәлизең лавка алды. Ҡойма буйында бүрәнәләр. Лавка асыҡ. Т и м а ҡ, З ә й н и, В ә л и көртле уйнайҙар. Б а й и е г е т гармун тарта.

З ә й н и. Ә һин хәрәмләшмә, ә һин хәрәмләшмә!..

В ә л и *(үҙе йыш-йыш лавка яғына ҡарай)*. Кәрткә гәҙеллек кәрәкме ни. Ул үҙе — хәрәм уйын.

З ә й н и. Хәрәм булғас, уйнама.

К и н й ә б а й. Ул доға ҡыла ла ғөнаһтарын бөтөрә, ә һин намаҙ рәтен дә белмәйһең.

В ә л и. Ах, атайым!

Шағәлиҙең лавканан сығыуын күреп, тиҙ генә ситкә китә. Фәғилә ҡарсыҡ килә, ҡулында төйөнсөк.

Ш а ғ ә л и. Әйҙүк, Фәғилә ҡарсыҡ.

Ф ә ғ и л ә. Һауғынамы, Шағәли?

Ш а ғ ә л и. Беҙҙең һаулыҡ ҡайҙа китер тиһең?

Ф ә ғ и л ә. Һаулыҡ бөгөн бар, иртәгә юҡ. Хоҙай һаулыҡтан айырмаһын.

К и н й ә б а й *(ултырған ерҙән)*. Шағәли үлгәс тә, хоҙай тәғәләне иҫертеп, яңынан терелеп сығыр әле ул.

Ш а ғ ә л и *(асыуланып)*. Ҡарт мөртәт!

К и н й ә б а й. Мин мөртәт булһам, һин суҡынмыш.

Е г е т т ә р. Ха-ха-ха!

Ш а ғ ә л и. Көфөр һүҙгә былары тағы ыржайып көлөп ултыралар бит әле.

К и н й ә б а й. Илаһындармы әллә? Барыбер сауаплы була алмаҫтар. Беҙҙең бурыстарҙы һин яҙып барған кеүек, унда ла беҙҙең ғөнаһтарҙы хоҙай карманный кенәгәһенә яҙып бара, ти. Беҙҙең кеүек кешеләрҙең ғөнаһ менән сауабын үлсәй торған бизмәндең дә бер табағына, һин кәнфит үлсәгәндәге кеүек, ҡамыр йәбештерәләр ти.

Е г е т т ә р. Ха-ха-ха!

Ш а ғ ә л и *(ҡыҙып)*. Минең бизмән табағына ҡамыр йәбештергәнде ҡайҙан күргәнең бар? Әйт әле, ҡасан?

К и н й ә б а й. Бурҙың бүрке яна, егеттәр, ҡарағыҙ әле!

Ш а ғ ә л и. Ҡарт шайтан! Хәләл көсөм менән көн күреп, ғибәҙәт ҡылып, тейешле саҙаҡаһын биреп торам, аллаһы тәғәлә үҙе ҡабул итһен!

Ф ә ғ и л ә. Әйтерең бармы.

К и н й ә б а й. Ҡурҡма, ҡурҡма, Шағәли. Мин әйткәнгә тамуҡҡа инмәҫһең. Полиция башлығы менән хәҙрәткә биргән саҙаҡаларың гүрҙә лә һине ҡотҡарырҙар әле.

Ш а ғ ә л и. Тфү, һине һүҙ менән еңә алмаҫһың инде.

К и н й ә б а й. Ана Фәғилә ҡарсыҡ менән һөйләш инде, беҙҙең кәңәштәр берҙәр, кәсептәрегеҙ ҙә бер.

Ф ә ғ и л ә. Кинйәбай, инде миңә ҡалдымы? Минең һиңә ни зыяным тейгәне бар?

К и н й ә б а й. Файҙаң да шул тиклем генә инде.

Т и м а к. Ну, Зәйни ағай, сират һиңә, күпмегә китәһең?

З ә й н и *(тағы бер кәрт алғас, артында ултырған Кинйәбайға күрһәтә)*. Ни эшләйем икән, Кинйәбай ағай?

К и н й ә б а й. Ихтыярың. Иллә мәгәр, Тимакты уйнап ота алмаҫһың.

З ә й н и *(уйланып торғас)*. Бир бөтәһенә лә!

Т и м а к. Аҡсаңды сығарып һөйләш, мин ағаҫҡа уйнамайым.

Ф ә ғ и л ә *(йәшерен генә)*. Әҙерәк алтыным бар ине, алаһыңмы?

Ш а ғ ә л и. Алам. Күпменән?

Ф ә ғ и л ә. Хаҡына килешербеҙ. Алһаң, бер кейем аламаһы ла бар.

Ш а ғ ә л и. Арыумы һуң? Ҡана, күрһәт.

Ф ә ғ и л ә. Бында ярамаҫ, эскә инәйек, әйтер һүҙем дә бар... *(Ҡарана-ҡарана инеп китәләр.)*

З ә й н и. Бир тағы бер кәрт.

К и н й ә б а й. Алма! *(Үрелеп-үрелеп кәртте ҡарай.)*

Е г е т т ә р. Алма, Зәйни ағай!

З ә й н и. Бир!

Т и м а к *(кәрт биреп)*. Инде етһә лә — еткәндер.

З ә й н и *(бик әкрен генә кәртте асып ҡарай. Башҡалар көтәләр, ул, төҫөн боҙоп, кәртте ташлай)*. Перебор!

К и н й ә б а й. Алма тип әйттем бит мин һиңә.

З ә й н и. Сволочь, тәки туз менән десятка араһына валетты килтереп ҡыҫтырған бит.

Т и м а к. Мин ҡыҫтырғандыр шул уны, үҙе ҡыҫылған. *(Аҡсаларҙы йыйып ала.)*

З ә й н и. Фәҙел уйнамайһың һин! *(Тора.)*

В ә л и. Кәрт — хәрәм уйын ул, унда ғәҙеллек булмай.

Т и м а к. Ниңә тораһың, тағы уйнамайбыҙмы ни?

З ә й н и. Аҡсаны ҡырып алды ла, тағы уйнамайбыҙмы ни?

Т и м а к. Аҡсаң бөттө ләме ни? Ха-ха-ха!

К и н й ә б а й. Көлә бит әле.

Т и м а к. Ә һинең ни эшең бар унда?

К и н й ә б а й. Ниңә эшем булмаһын, уйнағас, ғәҙел уйна һин.

Т и м а к. Мин һинең аҡсаңды отманым, ҡыҫылмаһаң да ярар.

К и н й ә б а й. Жулик... һалып йығырмын!

Т и м а к. Әтәсләнмә, әтәсләнмә, һалғысың һынмаһын. Уйнап ота алмағанды, йоҙроҡ менән алдыра алмаҫһың, ҡарт шайтан.

К и н й ә б а й. Әле шулаймы? Бына һиңә!

Һуғып йыға. Тимак тороп Кинйәбайҙы яғаһынан бороп алып, инде һуҡтым тигәндә генә Зәйни тота, буталыш, шау-шыу. Зәйни, Күдрәш, Бәйгәгет аралап йөрөйҙәр. Ғ а й с а менән Ф ё д о р килә.

Ғайса. Әй, ни эшләйһегеҙ? *(Төрлөһөн төрлө яҡҡа этеп, Тимакты елкәһенән тотоп, айырып ала.)* Ниңә ҡартҡа тейәһең һин?

Тимак. Үҙе башланы бит.

Кинйәбай. Жулничать итмә!

Тимак. Ул үҙе башлап һуғып йыҡты бит мине. Әйтерһең, мин уның аҡсаһын оҡкан.

Ғайса. Шул кәрәк һиңә! *(Тимакты һуғып йыға.)*

Федор аптырап ҡала.

Баййегет. Бына һиңә тағы оло ағайыңдан да өлөш, ха-ха-ха!

Тимак *(тороп, яңағын тотоп)*. Ни өсөн, Ғайса? Үҙҙәре уйнарға саҡырҙылар бит.

Зәйни. Минең бөтә аҡсамды отоп алдың, ә ул һине бер һуғып ҡына йыҡты. Күпме ни ул?. Мин әле һуҡмай ҙа ҡалдым.

Тимак. Мин...

Ғайса. Был ғына аҙ әле һиңә!

Тимак. Мин һине атайымдан да артыҡ яратып, дуҫ күреп йөрөйөм, ә һин...

Ғайса. Ҡара йылан! *(Барып яғаһынан бороп ала, ситкә алып китә.)* Заһит байға һин еткерҙеңме серҙе, ә? *(Быуа.)*

Тимак. Валлаһи, тим, бына ер йотһон! Әгәр мин булһам, хәҙер үк сәнсеп үлтер. Ундай хурлыҡты эшләгәнсе, һинең ҡулыңдан үлгәнем артыҡ. Валлаһи тим, быуып үлтер.

Ғайса. Юғал!

Тимак *(китергә боролоп)*. Ғәйепһеҙгә, Ғайса.

Зәйни *(туҡтатып)*. Ҡасма әле, ҡасма, отоштан фытыр саҙаҡаһын сығарып кит. Юҡһа тамуҡта янырһың.

Кинйәбай. Телөнмә шунан.

Тимак *(аҡса сығарып ырғыта)*. Мә, тығын! Әйтерһең, мин урлап алған уны. *(Сығып китә.)*

Зәйни. Нисек еңеләйҙе егетең. Ғайса ағайыңдың ҡулы шулай шифалы ул, ха-ха-ха!

Фәсхи килеп инә.

Фәсхи. Ниңә көләһең, Зәйни ағай?

Зәйни. Туй булды, ә һин дөмбөргә генә килеп еттең.

Фёдор. Был эшең миңә оҡшамай, Ғайса.

Ғайса. Шул жулик беҙҙең кисә һөйләшкән серҙе асҡан бит.

Фәсхи. Серҙе асҡан? Кем?

Ғайса. Кем булһын, Тимак. Заһит байға илтеп еткергән.

Фёдор. Шуның өсөн уның менән һуғышырға кәрәк инеме?

Ғайса. Асыуым ҡабарҙы. Түҙә алмайым шундай саҡта. Нисек үҙен һуғып үлтермәнем әле?

Фёдор. Шул ғына етмәгән ине. Имеш, көрәшсе... Революционер булыу өсөн, ҡорос кеүек, ныҡ, түҙем булырға, кәрәк урынында уттай ҡыҙыу булырға кәрәк. Э ул бер шалапайға ҡул бысрата. Көсөңдө ҙурыраҡ һуғышҡа һаҡла һин.

Ғайса *(эсенән үҙ ғәйебен аңлап, уңайһыҙлана)*. Ярар, Фёдор, асыуланма инде, бынан һуң ҡабатламам. Хәҙер нәмә эшләйбеҙ һуң инде?

Фәсхи. Заһит бай нәмә эшләй алыр тип беләһегеҙ?

Фёдор. Улай еңел генә уйларға ярамай, Фәсхи, эш мөһим. Заһит бай ҙа, беҙҙең эш ташлағанды көтөп, йоҡлап ятмаҫ: отряд саҡыртырҙар, бөтәбеҙҙе ҡулға алырға тырышыр. Уйлашып, хәҙер үк ниндәйҙер сара күрергә кәрәк. Миңә барһаҡ, күҙәтәләр инде.... Бына нәмә, ана теге таш артына барып ултырайыҡ әле. Фәсхи, һин егеттәргә әйт: алыҫ китмәһендәр, бәлки, бөгөн киске сменала үк көрәште башларбыҙ.

Лавканан Фәғилә ҡарсыҡ сыға. Зәйни лавкаға табан бара, Федор менән Ғайса сығып китәләр.

Фәғилә *(йәшерен)*. Эй-й, балалар, үҙемә генә барып эсһәгеҙ булмайҙыр шул, балым да бар, араҡыһы ла табылыр ине.

Зәйни. Араҡы, һиңә барғас, ҡиммәткә төшә... ә бында фытыр саҙаҡаһы ғына.

Байегет менән Фәсхи Ғайсалар киткән яҡҡа китә, Фәғилә ҡарсыҡта сыға. Зәйни бисәһе Гөльямал лавкаға килә. Ире уны күреп, лавкаға инмәксе була, ләкин өлгөрмәй, Шағәли баҫҡыҫҡа сығып, көнбағыш яра башлай.

Гөльямал. Һауғынамы, Шағәли ағай?

Шағәли. Бик һәйбәт әле. Бурысыңды килтерҙеңме әллә?

Гөльямал. Юҡ шул, Шағәли ағай, аҡсам юҡ. Тағы бер ярты бот он биреп тормаҫһыңмы тип килгәйнем.

Шағәли. Алғаныңды түләгәнең юҡ, тағы ла бурыҫҡамы? Миндә Әндрәй ҡаҙнаһы бар тип беләһеңме әллә?

Гөльямал. Ҡасмаҫ ине әле. Хәҙер генә аҡсабыҙ юҡ шул. Балаларҙың ашарына бөттө.

Шағәли. Алғас, ваҡытында түләргә кәрәк. Кисә генә получка алдығыҙ бит.

Гөльямал. Шулай ҙа бит. Заһит байҙан көтөргә алып торғайныҡ, Зәйниҙең получкаһын шуға тотоп ҡалғандар. Бер илле тинме генә ҡалғайны, үҙе алып сығып китте. *(Зәйниҙе күреп.)* Ҡана, аҡса бир, балалар ас ултыралар.

Зәйни *(ғәйепле).* Гөльямалҡайым, аҡса бөттө.

Гөльямал. Ҡайҙа ҡуйҙың?

Зәйни. Бөттө, Гөльямалҡайым.

Гөльямал. Тағы ла эсеп бөттөңмө? Эй хоҙайым, инде ни эшләйем икән? *(Китергә була, ләкин кире борола.)* Шағәли ағай, әллә биреп тораһыңмы?

Шағәли. Юҡ, юҡ, һорама ла, бирмәйем дә. *(Көнбағыш яра.)*

Гөльямал. Инде ни эшләйем, кемдән генә һорайым икән?

Зәйни. Гөльямалҡайым, миндә бер ун ҡаҙаҡлыҡ ҡына бар.

Гөльямал. Булғас, ниңә әйтмәйһең уны?

Зәйни. Шағәли ағай, миндә ун ҡаҙаҡлыҡ ҡына бар, ярты бот итеп биреп ебәр инде, ҡалғанын бер көнгө бурыс менән бергә түләрмен.

Шағәли. Юҡ, юҡ, бирмәйем тип әйттем бит инде. Аласаҡтар бик күбәйеп китте. Бурысыңды түлә, шунан һуң бирермен. *(Кеҫәһенән кенәгәһен сығарып.)* Бына бында барыһы ла яҙылған: бер бот он, ҡаҙаҡ ярым шәкәр, бер әсмүхә сәй, ике ҡаҙаҡ ярма.

Гөльямал. Барыһы ла яҙылғандыр инде, яҙылмай ҡайҙа китһен.

Шағәли. Яҙылған шул.

Гөльямал. Булһа түләмәҫ инекме ни һуң инде, юҡ бит.

Шағәли. Булмаһа, ашамай торорһоғоҙ!

Зәйни. Шағәли, булмаһа, бына пинжәгемде закладҡа һалып ҡалдырайым, биреп ебәр.

Шағәли. Ул сағында әле һүҙ башҡа. Ҡана, пинжәгең арыумы һуң?

Зәйни. Бына ҡара.

Шағәли *(пинжәкте әйләндереп, әйләндереп ҡарай).* Быныңмы нәмәһен алаһың, бик өтөлгән бит. Ҡуй, кәрәкмәй. *(Кире һүҙа.)*

Гөльямал. Эй хоҙайым!

Кинйәбай *(түҙмәй, асыуы ҡабарып, урынынан һикереп тора).* Ҡоҙғон һин, Шағәли! Беләһеңме, валлаһи тип әйтәм, күҙемде лә йоммай быуып ултерер инем, һи-

иең өсөн төрмәлә ултырыуы әрәм. «Бик өтөлгән бит...», имеш. Ҡабыҡҡан тауарҙы арзан хаҡҡа алып, бында килтереп биш хаҡына һатыуын белмәй, ишу — өтөлгән, сволочь! *(Кеҫәһенән аҡса сығарып, Гөльямалға бирә.)* Мә, Гөльямал килен, үҙем биреп торайым, түлә шуға, тамағы тығылһын!

Ш а ғ ә л и *(мыҫҡыллы)*. Ай-вай, Кинйәбай байып киткән дә баһа.

Г ө л ь я м а л. Рәхмәт, Кинйәбай ағай, балаҡайҙарымды шатландырҙың. *(Шағәлигә аҡса һуҙып.)* Үлсәп кенә биреп ебәр инде, Шағәли ағай?

Ш а ғ ә л и *(аҡсаны һанай ҙа, әле булһа борсоулы ҡарап торған Зәйнизең кулынан пинжәген тартып алып)*. Ҡана, пинжәгең дә ҡалып торһон, бурысыңды түләп бөткәс, килеп алырһың. *(Инеп китә.)*

Уның артынан Г о л ь я м а л эйәрә. Зәйни, йыртыҡ күлдәктән килеш, баҫҡан ерендә ҡатып ҡала.

К и н й ә б а й. Сволочь! *(Ситкә барып ултырып, асыулана-асыулана төрәпкәһенә тәмәке тултыра.)*

З ә й н и *(шахтёрҙарҙың барыһына ла берәм-берәм ҡарай)*. Их, тормош...

Улар, Зәйнизең күҙе текәлеү менән, уңайһызланып, ситкә боролалар.

Әрнеп ултыра-ултыра ла ҡулдары менән йөҙөн ҡаплап илай. Барыһы ла уңайһызланалар. Бәйгегет аҡрын ғына гармун тарта. Г о л ь я м а л лавканан сыға ла, төрлө яҡҡа ҡаранып, Зәйнизе эҙләй һәм, уның илап ултырыуын күргәс, кәйефе китә. Янына бара.

Г ө л ь я м а л. Зәйни, Зәйни, ни булды һиңә?

З ә й н и. Их Гөльямалкайым, ниңә генә таптың шул балаларҙы?

Г ө л ь я м а л. Ҡуйсы, Зәйни, ҡуйсы, ул ни тигән һүҙең тағы? Әйҙә, ҡайтайыҡ. Ыумас ыуырмын. Тамаҡ туйҙырып, эшкә китерһең.

З ә й н и. Йөрәк әрней, араҡы ла юҡ бит, исмаһам.

Г ө л ь я м а л. Әйҙә ҡайтайыҡ, Зәйни.

З ә й н и. Бар. Ҡайта тор, ашынды әҙерлә. Балаларҙы туйҙыр. Мин оҙаҡламам.

Г о л ь я м а л сығып китә. К ү д р ә ш килә, ул эштән ҡайтып бара.

Б а й й е г е т. Нихәл, Күдрәш? Ат башындай алтын табылдымы?

К ү д р ә ш *(ултыра, тәмәке төрә башлай)*. Мин ат башындай алтын эҙләгәнем юҡ, йоҙроҡтайы табылһа ла риза булыр инем әле.

Кинйәбай. Алтын үҙеңә әләкһә, бармаҡ башындайына ла риза булыр инең дә бит, әләкмәҫ шул.

Күдрәш. Уныһын, табылғас, күҙ күрер ине әле.

Кинйәбай. Күптәр ҡаҙып ҡаранылар, хатта тапҡандары ла булды, тик бына тапҡан алтындары ҡулдарынан шыуа ла сығып китә. Алтын бик шыма ул. Абай бул, һинеке лә шулай булмаһын.

Күдрәш. Табылһа, таймаҫ... *(Тәмәке тоҡандыра.)*

Кинйәбай. Тартмай инең, бына хәҙер тәмәке тарта башлағанһың, аҙыраҡ арта ла башларһың шунан.

Башҡалар шаулашып көләләр, Күдрәш уңайһыҙлана.

Фәсхи *(кереп)*. Кинйәбай ағай, әйҙә, һин кәрәк.

Шунда уҡ сығып китәләр.

Зәйни. Шағәли лавкаһы алдында ла йәм бөттө, егеттәр, ҡайтырға кәрәк.

Байегет гармун тарта, бер нисә егет әкрен генә ҡушылалар. Фәрхиямал лавкаға килә, ҡойма башынан Һандуғас йыр тыңлап тора.

Күдрәш. Гармуныңды тартып уйна,
Йырлаусыға ход булһын,
Йыр тыңлаған йәш ҡыҙҙарҙың
Ике күҙе ут булһын!

(Фәрхиямалға.) Шулай бит, һылыуҡай?

Фәрхиямал. Ниндәй шәп йырлайһың икән.

Күдрәш. Күңеленә ятамы әллә?

Фәрхиямал. Иҫәбе юҡ түгел. Ха-ха-ха... *(Лавкаға инеп китә.)*

Күдрәш. Ниндәй һылыу ҡыҙ! Кем ҡыҙы шул, егеттәр?

Һандуғас *(ҡойма башынан)*. Күҙең төштөмө әллә?

Күдрәш. Бәй, бында ла берәүһе бар икән.

Байегет. Уныһы һинең өсөн түгел.

Күдрәш. Бәй, ниңә?

Байегет. Эйәһе бар.

Күдрәш. Шулаймы ни?

Һандуғас *(йырлап)*.

Зимагор булһа, мут булһын,
Ике күҙе ут булһын,
Ике күҙе ут булмаһа,
Бар булғансы, юҡ булһын. *(Үҙе юҡ була.)*

Күдрәш. Әй кызыкай, тукта әле.

Байегет. Әйттем бит инде, эйәһе бар, нәфсеңдә һуҙма. Карагаң, ана Фәрхиямалга кара.

Күдрәш. Уның исеме Фәрхиямалмы ни? Ул да бик һылыу кыҙ. Бер көн дә күреп хайран булғайным.

Лавканан Фәрхиямал сығып, уҙа башлай.

Фәрхиямал!

Фәрхиямал. Бик үткер егет икәнһең тағы, исемемде лә белеп алған.

Күдрәш. Беләм шул. *(Уңайһыҙланыбыраҡ.)* Кискә күрешәйек әле.

Фәрхиямал. Атаҡ-атаҡ.

Күдрәш. Ниңә, күңелеңә оҡшамайыммы әллә?

Фәрхиямал. Әлләсе... Бер күреүҙән ни тип әйтәйем?

Күдрәш. Мин һине бер көн күреп тә һоҡланып, тағы нисек тап килтерергә белмәй йөрөй инем әле. Осрашайыҡ, Фәрхиямал. Әйтер серем дә бар ине.

Фәрхиямал. Ярай, улай булғас. *(Оялып йүгереп сыға.)*

Федор, Кинйәбай, Фәсхи, Гайса керәләр. Шәйхи ҙә эйәргән.

Шәйхи *(кыҙған)*. Бөтөрәм мин уны, барыбер бөтөрәм...

Гайса. Артыҡ кыҙма, Шәйхи, ипләп һөйләш, ҡайтарыр нәмәләреңде.

Кинйәбай *(һыҙғырып)*. Алырһың Шағәлиҙән.

Шәйхи. Бирмәһә, бынауҙар нәмә ҡарайҙар? *(Култыҡ таяҡтарын күрһәтә.)*

Шағәли *(лавканан сығып)*. Таралышығыҙ, егеттәр, лавканы ябам, һатыу бөттө.

Шәйхи. Ә беҙҙең алаһы нәмә бар әле, япма! *(Ишеккә табан кыйыу атлай.)*

Шағәли свисток һыҙғырта, йүгереп стражник килеп етә.

Стражник. Ни бар? Кем тәртип боҙа? Таралығыҙ!

Шәйхи. Тәртип боҙған кеше юҡ.

Фёдор. Күрәһегеҙ бит, господин стражник, кеше фронттан ҡайтҡан.

Стражник. Кем ҡайтҡан? Ниңә ҡайтҡан? Дезертир түгелме?

Фёдор. Күрәһең, ҡайтарырлыҡ булғандыр, юҡһа ҡайтармаҫтар ине.

Стражник *(Шәйхиҙе күреп).* А-а, инвалид... Әй, һалдат, һин ни эшләп бында халыҡ йыйнап ултыраһың? Агитация таратаһыңмы? *(Шахтёрҙарға.)* Бар, бар, таралығыҙ!

Фёдор. Кеше фронттан ҡайтып инәштәре менән һөйләшә, э һеҙ ҡыуаһығыҙ. Яҡшыраҡ итеп өндәшергә булмаймы ни?

Стражник. Мине өйрәтмә! Кем һин ул тиклем? Мин һине был ерҙә бер ҙә күргәнем юҡ. Ҡайҙан һин?

Фёдор. Күрәһең, господин стражник, һеҙҙең күҙегеҙ бөтәһен дә әләктереп бөтөрә алмайҙыр шул.

Гайса. Ул бында өсөнсө ай эшләй инде.

Стражник. Тик тор, һинән һорамайҙар! Ҡайҙа эшләйһең, кем булып?

Фёдор. Заһит бай шахтаһында, машинист.

Стражник. Машинист? Мин бер ҙә хәтерләмәйем. Паспортың бармы?

Фёдор. Рәхим итегеҙ.

Стражник. Белмәҫһең, бәлки, һин әллә ниндәй жулик йәки дезертирһыңдыр әле. Хәҙер һуғыш ваҡыты, һинең кеүектәр бик күп.

Фёдор. Мине мыҫҡыл итмәүегеҙҙе үтенер инем.

Стражник *(паспортын биреп).* Подумаешь... Ярай, все в порядке, китергә мөмкин. Подумаешь, мыҫҡыл итмә, имеш, ер ҡорто!

Фёдор. Киттем. Бында миңә күп һерәйергә ярамай. Онотмағыҙ, бая һөйләшкәнсә, әҙер булығыҙ, һүҙҙә ныҡ торорғоҙ.

Фёдор менән Гайса китәләр.

Шағәли. Кеше түгелдәр. Рәхим итегеҙ, әфәндем. *(Койма аша ҡарап торған һандуғасты күреп.)* Нәмә аҡайып ҡарап тораһың, инеп кит!

Кинйәбай. Шәйхи ҡустым, әйҙә беҙгә, башҡа барыр ерең дә юҡ.

Шәйхи. Да... башҡа барыр ер юҡ. Аяҡты өҙөп алып ҡалдылар, балалар үлгән, бисәне талап ебәргәндәр...

Шағәли *(капыл).* Ҡустым, нәмә һөйләнәһең? Кемде талағандар? Ҡайҙа талағандар?

Шәйхи *(асыулы).* Ул да һорап тора бит әле... Һин талаған-һың!

Шағәли. Мин? Кемде?

Шәйхи. Беҙ һеҙҙең өсөн ҡан түгәбеҙ, э һеҙ бында талап ятаһығыҙ, э?!.

Шағәли. Был һүҙҙәреңде кемгә әйтәһең һин, ҡустым?

Ш ә й х и. Кемгәме?

Ш а ғ ә л и. Эйе, кемгә? Кемдәр улар талаусылар? Кемдәр улар кеше өсөн ҡан түгеүселәр? Инде һин һуғышта аяғыңды һындырып ҡайтҡанһың икән, бер ҙә кеше өсөн түгел, батша хәҙрәттәре хаҡына.

Ш ә й х и. Аҡыл һатып тора бит әле. Төкөрәм мин һинең аҡылыңа. Ниңә һин минең бисәмде таланың? Ҡайҙа минең нәмәләрем, яуап бир?! *(Йүгереп килә, стражник араға төшә, Шағәли уның артына йәшеренә.)*

С т р а ж н и к. Әкрен, һалдат, үҙеңде тота бел.

Ш ә й х и. Ә һинең эшең булмаһын! *(Шағәлигә.)* Ҡайҙа минең нәмәләрем? Сығар хәҙер!

Ш а ғ ә л и. Сығар?.. Ни эшләп сығарайым, ти? Мин һинең нәмәләреңде бушлай алмаҫным. *(Кеҫәһенән кенәгә сығарып.)* Бына бында барыһы ла яҙыла барған, ышанмаһаң, үҙең ҡара.

Ш ә й х и *(Шағәлиҙең кенәгәһен тартып алып, йыртып ташлай).* Төкөрәм мин һинең кенәгәңә! Сығар минең нәмәләремде! Юҡһа, инеп, лавкаңдың аҫтын-өҫкә килтерәм!..

Ш а ғ ә л и. Инеп ҡара, икенсе ботоңдо һуғып һындырырмын!

Ш ә й х и. Ә-ә-ә, шулаймы?.. Бына һиңә! *(Ҡултыҡ таяғы менән киҙәнә, ләкин Шағәлигә тейҙерә алмай.)*

Стражник свисток бирә. Шағәли сәбәләнә.

Ш а ғ ә л и. Разбой, ултерәләр!..

Һалдат ҡултыҡ таяғы менән лавканың тәҙрәһен ҡыра, ш а х т ё р ҙ а р йыйылалар. Ҡарап торалар, һалдат һаман ҡыра. Стражник свисток бирә. Полиция башлығы Н и к и ф о р ы ч керә, Шәйхи һалдатты тоталар.

Ш ә й х и *(сәбәләнеп).* Их, һеҙ, ҡан эскестәр!

Н и к и ф о р ы ч. Алып китегеҙ!

С т р а ж н и к *(честь биреп).* Тыңлайым!

К и н й ә б а й. Теймәгеҙ һалдатҡа!

Е г е т т ә р. Теймәгеҙ! Бирмәйек!

Ф ә с х и. Егеттәр, инвалидты әллә ҡайҙа алып китә алмаҫтар, ҡуй, тауыш күтәрмәгеҙ. Хәҙергә ярамай. Көнө килер, беҙ уларға көсөбөҙҙө күрһәтербеҙ әле.

Ш ә й х и. Ебәрегеҙ!..

С т р а ж н и к. Әйҙә, әйҙә! Торор ерең юҡ тинең бит, беҙ һиңә урын табырбыҙ...

Шәйхиҙе төрткәләп алып сығып китәләр, б а ш ҡ а л а р ҙ а улар артынан сыға. Сәхнәлә Никифорыч менән Шағәли генә ҡала.

Ш а ғ ə л и. Бына донъялар ни эшләне, полицейский офәнде: көпә-көндөҙ тәҙрәләрҙе разбивал бит, ə? *(Ҡырылған тәҙрәләргә ҡарап.)* Зачим батша хəҙрәттәре такой хулигандарҙы бында ҡайтара. Стрилять надо уларҙы.

Н и к и ф о р ы ч *(мыйығын боропо).* У-у-у, барыһын да атырбыҙ, ҡалдырмабыҙ!

Шағəли уның усына аҡса йомдора.

Ш а р ш а у

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Миллионер Заһит Мəмаевтың ҡунаҡтар ҡабул итеү залы. Урамға сыҡҡан ҙур тəҙрəлəр. Ике яҡҡа ике бүлмə ишеге, бер яҡҡа коридор ишеге сыға. Яҡшы мебелдəр, келəмдəр. Уртала түңəрəк өстəл. Шаршау асылғанда, Ф ə р х и я м а л ой йыйыштырып йөрөй.

Ф ə р х и я м а л *(тышта Күдрəште күреп, ымлап иҫəнləшə).* Күдрəш... Ул ниндəй һөйкөмлө, йөрөшө ҡулайлыҡ ысын егеттəрсə. *(Ҡул һелтəп, хушлашып.)* Бик һоҡланырлыҡ шул. *(Өҫтəлдəрҙе һөртə.)*

Ғ ə р и ф ə инə.

Ғ ə р и ф ə. Етеҙерəк тотон, Фəрхиямал, хəҙер Заһит ағайың был яҡҡа сығыр: уға кешеләр киләсəк. *(Тəҙрəнəн ҡарап.)* Ай, алланың ҡəһəре төшкөрө. Бына эттəн тыуған! *(Кемгəлер ҡысҡырып.)* Əй һин, Зəйни бисəһе! Беҙҙең ҡапҡа төбөнəн үтмəһəң, һиңə башҡа ер юҡмы ни?! *(Сəрелдəп.)* Тағы теләнеп йөрөйһөңмө? *(Фəрхиямалға.)* Бар, Фəрхиямал, ҡыу шуны, йөрөмəһен теләнеп.

Ф ə р х и я м а л сығып китə.

Ф ə р х и я м а л *(шунда уҡ кереп).* Ҡыуҙым, байбикə.

Ғ ə р и ф ə. Яҡшы. Эшеңде тиҙерəк бөтөр.

Ф ə р х и я м а л *(тағы эшенə тотона. Бер креслоны урынынан ҡуҙғатканда эсен тотоп бөгəрлəнеп төшə.)* Уф... *(Ғазапланып.)* Мин нəмə эшлəнем?

Пауза. З а һ и т керə.

З а һ и т. Хəҙрəт килмəнеме? *(Тəҙрəнəн ҡарай.)*

Ғ ə р и ф ə. Шағəли бай килгəйне.

З а һ и т. Кайҙа китте? *(Фəрхиямалға ҡарап һоҡланып тора.)*

Ғәрифә. Әҙерәк торғас килермен, тип китте. *(Фәрхиямалға.)* Ниңә һин ағайың алдында оҙаҡ ҡыйшаңлайһың?

Заһит. Ниңә аҫрауға ырылдайһың һин?

Ғәрифә. Шул ялҡау ҡыҙҙан туйҙым.

Заһит. Ә минең һинән туйғаныма биш былтыр инде. Бар, эшең булмаһа, сығып кит бынан.

Ғәрифә *(үҙ алдына һөйләнеп, ишеккә атыла).* Ай алла, үҙ башыма ғына бәлә алдым бит. *(Уҙып барышлай, Фәрхиямалды семтеп.)* Ағайың алдында күп ҡыйшаңлама, икенсе бүлмәләрҙе йыйыштыр! *(Сыға.)*

Фәрхиямал. Хәҙер, байбикә. *(Тиҙ генә йыйып сығырға ашыға.)*

Заһит. Туҡта әле, Фәрхиямал, ҡайҙа ашығаһың.

Фәрхиямал. Эшем бар. Байбикә асыулана бит.

Заһит. Байбикәң, үлгәс, ҡәберҙә лә мығырлап ятыр әле ул. Яҡыныраҡ кил. Был арала үҙеңде аулаҡта осратҡаным да юҡ. Ниңәлер бойоғоп йөрөйһөң булһа кәрәк.

Фәрхиямал. Мыҫҡыл иттегеҙ ҙә инде көләһегеҙ.

Заһит *(юхалап).* Юҡ, юҡ, Фәрхиямал, ниңә көләйем, ти. Мин бит һиңне яратам. *(Ҡулынан тартып.)* Кил әле, кил.

Фәрхиямал. Мыҫҡыл итмәгеҙ, Заһит ағай, унан башҡа ла йөрәгем әрней.

Заһит *(юхалап).* Бәй, бәй, ниңә улай?.. Ҡуй, эш булған да — бөткән.

Фәрхиямал *(ояла, алдына йығыла. Илай).* Мин... мин... ауырлы.

Заһит. Ауырлы? Буш һүҙҙер?

Фәрхиямал *(илап).* Харап ҡына иттең, Заһит ағай, әҙәм мәсхәрәһе.

Заһит *(ҡаушап, йыуатырға тырыша).* Илама, илама. Эм-м, берәй сараһын күрербеҙ. *(Ситкә ҡарап.)* Бына һиңә тағы бер бәлә! Күптәнме?

Фәрхиямал. Ай ярым. Инде ни эшләйем?

Заһит. Кеше беләме?

Фәрхиямал. Хәҙергә бер кем белмәй.

Заһит. Берүк, белдермә! *(Юғалап.)* Берәй сараһын күрербеҙ...

Хәҙрәт инә.

Хәҙрәт. Ярайҙыр, бәрәкалла.

Заһит *(уңайһыҙланып).* Ярай. Түргә уҙ, хәҙрәт.

Фәрхиямал сығып китә.

Хәҙрәт *(Фәрхиямалға һоҡланып ҡарап).* Хи-хи, ҡамасауланым, ахыры, Заһит бай. Әссәләмәғәләйкүм.

Заһит. Вәғәләйкүмәссәләм. Зарар юҡ, хәҙрәт!

Хәҙрәт. Собханалла, күҙ теймәһен, ошо ҡыҙың бик арыу күренә.

Заһит. Арыуын арыу ине лә, ауырайыбыраҡ бара шул әле: ауырға ҡалған.

Хәҙрәт. Бәрәкалла.

Заһит. Ха-ха-ха... кеше уға аҫрау ауырға ҡалған, ти, ә ул — бәрәкалла.

Хәҙрәт. Бәй, бәй... Бәрәкалла, хоҙаның биргәненә шөкөр.

Заһит. Бындай бәләне бирмәһә лә арыу булыр ине, хәҙрәт. Был бәләнән нисек ҡотолорға инде?

Хәҙрәт *(уйланып).* Кейәүгә бир һин уны, Заһит әфәнде.

Заһит. Кейәүгә? Кемгә?

Хәҙрәт. Эй-й, кем, Заһит әфәнде, әҙ тиһеңме бисә алырға аптырап йөрөгән ярлы-ябаға.

Заһит. Ярай ҙа алыусы булһа?

Хәҙрәт. Эй-й, алмаған ҡайҙа ул! Байлығың бар, шөкөр. Ҡыҙҙың өҫтөн-башын бөтәйт, донъя кәрәк-ярағын бир, бер аҙ аҡса тоттор. Шунан ни кейәүгә бата ла ҡуя ул. Маллы кәләш, өҫтәүенә — балаһы ла була, бәрәкалла. Хи-хи-хи.

Заһит. Был аҡыл... Аҡыл был, хәҙрәт!

Кондәлек почта пакеттары һәм эш ҡағыҙҙары тотоп, Харис керә.

Харис. Мөмкинме, Заһит әфәнде?

Заһит. Рәхим ит, Харис әфәнде.

Харис. Оренбург губернаторынан хат бар.

Заһит. Нәмә, тағы хәйер һораймы?

Харис. Шулайыраҡ...

Заһит *(тыныҡсылып).* Килтер әле шул зәм-зәм һыуын.

Харис буфеттан графин менән араҡы һәм бокал килтерә.

Хәҙрәт *(Заһит эскән арала, үҙ алдына һөйләнгәндәй).* Ай-һай, Заһит әфәнде, шул шайтан төкөрөгөн күберәк ҡуллана башланың.

Заһит. Булмай, хәҙрәт, әгәр әсмәһәм, күңел күтәрелмәй, шатлығым юҡ, төндәрен йоҡлай алмайым, борсолам. *(Эсә.)*

Хәҙрәт. Байлыҡ сире ул, Заһит әфәнде, байлыҡ сире. Хәжәттән артыҡ байлыҡ — әҙәм балаһы өсөн сир ул.

З а һ и т. Ҡуй, хәҙрәт, дәрүиш Закир Рәмиевтең «Шура» журналында яҙған сүп-сарҙарын һөйләмә һин миңә, буш хәбәр ул. Байлыҡ юҡ ул, ысын байлыҡ юҡ. Ә губернатор һаман алтын промышленниктарын йолҡорға тырыша. Таларға, бөлдөрөргә? Юҡ! Булмаҫ бынһы! Яҙ, минән бер тин аҡса юҡ. Әгәр ҡала банкыһының балансын тигеҙләргә бик теләй икән: һаулыҡ һаҡлау, мәғариф эштәре расходтарын кәметһен, ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһын япһын!

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, бик мәғҡул. Ҡатын-ҡыҙға мәғлүмәт биреү — шайтанға ҡанат ҡуйыу ул. Унан улар ирҙәрен риғайә итмәй башлайҙар.

З а һ и т. Эшселәрҙе ҡаты тот. Ҡара уны, әгәр приискыла бола күтәрелһә, ул минең кеҫәгә генә һуғыу түгел, ә батшалыҡтың тамырына балта сабыу. Юл ҡуймаҫҡа! Әгәр ул-был була ҡалһа, минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ!

Х а р и с. Тыңлайым. *(Сыға.)*

З а һ и т. Бына ошо хәлдәр борсой мине, хәҙрәт, ә һин артыҡ байлыҡ тигән булаһың. Байлыҡ юҡ ул. Ер ҡуйынында ятҡан алтын — байлыҡ түгел әле, уны тартып алырға кәрәк башта.

Х ә ҙ р ә т. Алла бирһә, алырһың әле, барыһы һинеке булыр.

З а һ и т. Ах, ул алтындар барыһы ҡулыма керһәләр, мин кешеләр менән һөйләшмәҫ тә, ә баштарына баҫып йөрөр инем!

Ш а ғ ә л и керә.

Ш а ғ ә л и. Әссәләмәғәләйкүм.

Х ә ҙ р ә т. Вәғәләйкүмәссәләм.

Күрешәләр.

З а һ и т. Бик, бик оҙаҡ килмәй торҙоң, Шағәли.

Ш а ғ ә л и. Мәшәҡәт күп бит. Мәшәҡәтле осорҙар килде беҙгә.

Х ә ҙ р ә т. Донъя мәшәҡәтле инде.

Ш а ғ ә л и. Артығы менән мәшәҡәтләнеп китте. Халыҡ тыныслыҙланды, һуғышы ла оҙағыраҡ һуҙылып китте.

З а һ и т. Хикмәт унда ғына түгел, һуғыштың һуҙылыуы — беҙҙең файҙаға ғына ул. Ләкин беҙҙең батша еңелә. Бына ҡайҙа ул уның хикмәте.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, өмөттө өҙөргә ярамай. Өмөтһеҙ шайтан тигән китап. Белмәҫһең, бәлки, беҙҙең батша

хәйлә менән сигенә торғандыр. Тыныслан, Заһит әфәнде, сабырлыҡ кәрәк.

З а һ и т. Эх хәҙрәт, белмәйһең һин, тормош ҡорьәнсә генә бармай, дауыл яҡынлашҡанын, 1905 йылдан да ҡурҡыныс дауыл яҡынлашҡанын тоям мин. *(Шағәлигә ҡарап, ҡырҡа.)* Ер тураһында башҡорттар менән һөйләштеңме?

Ш а ғ ә л и. Эйе, Заһит әфәнде, мәсьәлә хәл ителде, тип әйтерлек. Тик эш... хаҡына килешеүҙә генә ҡала.

З а һ и т *(ҡыҙып)*. Әлеге аҡса! Әлеге хаҡ! Әйттем бит инде, дүрт йөҙ һум бирәм.

Ш а ғ ә л и. Халыҡ биш йөҙ һорай. Әҙерәк сәй-шәкәр ҙә булһа икән, тиҙәр. Кабанов алты йөҙҙө бирәм тип әйтә, ти.

З а һ и т *(асыулы)*. Нәмә, Кабанов халыҡ һорағанды бирәме? Ике йөҙ һум аҡсаға ҡыҙығып, ерҙәрен тәреле Кабановҡа бирергә уйлайҙармы?

Ш а ғ ә л и. Ҡыҙма әле, Заһит әфәнде, бирәләр тигән кеше юҡ, тик, былай, халыҡ һүҙен генә әйтәм.

Х ә ҙ р ә т. Улай ҡыланмаһындар, Шағәли. Хаҡ үҙ мосолманыбыҙ бар саҡта, кәфергә ер һатмай кеше.

З а һ и т. Булыр, хәҙрәт, булыр ул башҡорттарҙан. Улар минең Ғәҙелша участкамды ла шулай Кабановҡа һатып ебәрҙеләр. Ни тиклем бай алтын китте! Белмәй бит халыҡ ҡәҙерҙе: мәсет һалдырып бирәм, үлә-нитә ҡалһалар, күмешергә үҙем булышам, мулла ҡуям. Тағы ла нәмә кәрәктер инде?

Х ә ҙ р ә т. Әйтерең бармы! Бәрәкалла.

Ш а ғ ә л и. Уныһы шулай инде, бик шөкөр итергә кәрәк. Ләкин, Заһит әфәнде, Ғәҙелша участкаһы өсөн көймәгеҙ, уның урынына беҙ алтындың тағы ла байыраҡ ятҡан ерен алырға торабыҙ бит.

З а һ и т. Ул ерҙә күпме алтын ятҡанын мин үҙем беләм. Мине өйрәтмә һин! *(Асыулы йөрөй.)* Кабанов алты йөҙ бирә тиген, ә? *(Шағәлигә.)* Десәтинәгә күсергәндә күпме булыр инде уның барлығы?

Ш а ғ ә л и. Бер мең ярым десәтинә самаһы булырҙыр. Уны кем үлсәгән.

З а һ и т. Тимәк, десәтинәһе — 30 тиндән тура килә. Ҡыйбатыраҡ.

Ш а ғ ә л и. Заводчик Иван Твердышевтың башҡорттарҙан унар тиндән өс йөҙ мең десәтинә ер әләктергән ваҡыттары уҙған шул инде.

З а һ и т *(аяҡ тибеп)*. Молчать! Ана үҙ лавкаңдың килерен генә яҡшы иҫәпләй бел һин, башҡаларҙа эшең

булмаһын. Ә Ҡомлокүл буйындағы ерҙәр һатыуға керәләрме?

Шағәли. Керәләр.

Заһит. Ярай, улай булғас. дүрт йөҙ илле һум аҡса, егерме ҡаҙаҡ сәй, ике бот шәкәр. Алтын күберәк сыҡһа, бәлки, бер мәсет тә һалдырып бирермен.

Хәҙрәт. Бәрәкалла! Бына мосолман ни эшләтә! Күңеле иркен шул алла бәндәһенең.

Заһит. Халыҡҡа шулай тип әйтерһең.

Хәҙрәт. Эйе, аҡса нәмә ул? Донъя малы — бөтөр ҙә китер, мәсеттә, исмаһам, ғибәҙәт ҡылырҙар, ғөнаһтары бөтөр.

Шағәли. Ярай, улай булғас, мин халыҡты шуға күндерермен, һүҙемдән сыҡмаҫтар.

Хәҙрәт. Бәрәкалла.

Заһит. Ярай, килештек. Договорҙы Харис менән төҙөгөҙ.

Шағәли. Ярай, Заһит әфәнде. *(Сығып китергә ашыҡмай, бер урында тапана.)*

Заһит *(уның сығып китмәүенең сәбәбен аңлап).* Ә-ә, бик ҙур рәхмәт, Шағәли туған, был һиммәтең өсөн. *(Күлын ҡыҫа.)* Онотмам яҡшылығыңды.

Шағәли. Беҙ ни ағай-энегә яҡшылыҡ итергә һәр ваҡыт әҙер инде. Иншалла, күҙгә сүп һалмаҫһығыҙ әле.

Заһит *(ҡапыл).* Тағы аҡса? Күпме һорайһың?

Шағәли. Юҡ, алла һаҡлаһын, һорамайым. Шайтан ярлы, тфү-тфү, ул һораһын.

Заһит. Шулай ҙа?

Шағәли. Миңә ни, шул яңы алтын приискығыҙҙа бер лавка асырға рөхсәт итһәгеҙ, бик еткән инде.

Заһит. Ха-ха-ха, тағы халыҡты талай торган бер ҡапҡан ҡоморға икән.

Шағәли. Ниңә таларға, ти, юҡ, хәләл кәсеп итергә генә.

Заһит. Ярай, рөхсәт бирәм. Ләкин унда кемең һатыу итер һуң?

Шағәли. Улым бар минең, улым, тәүге йәмәғәтемдән. «Хөсәиниә» шәкерте ине, тик...

Заһит. Нимәһе «тик»?

Шағәли. «Хөсәиниәне», үҙегеҙгә мәғлүм, һалдат казармаһына әйләндерҙеләр бит.

Заһит. Ә һинең шәкертеңде — һалдатҡа әйләндерҙеләрме?

Шағәли. Әйләндереп үк бөтмәнеләр, әммә саҡырыу бар. Шуны, берҙән-бер бахыр баламды, һалдаттан ҡалдырырға ине.

З а һ и т. Уныһын ҡарап ҡарарбыҙ. Улыҡ бындамы?

Ш а ғ ә л и. Бында ине.

З а һ и т. Алып кер.

Ш а ғ ә л и. Хәҙер, Заһит әфәнде! *(Сыға.)*

З а һ и т. Рәтле нәмәме һуң был лавкасының малайы, хәҙрәт?

Х ә ҙ р ә т *(көлөп)*. Ноҡот, алланан йәйәү ҡасҡан ялҡау. Ике йыл инде «Хөсәиниә» тупһаһын тапай, әммә ләкин ҡата туҙҙырыуҙан артмай. Ә тәмәке менән кәрткә, хәмергә — шайтан кеүек — шәп, тфү-тфү.

З а һ и т. Улай булғас, шәп купец сығыр — атаһын бөлдөрөп, таш ҡапсыҡҡа тығыр, ха-ха-ха! *(Араҡы эсә, кәйефләнеберәк ала.)*

Ш а ғ ә л и *(Вәлиҙе етәкләп кереп)*. Бына, Заһит әфәнде, минең күҙ терәгем.

З а һ и т *(иғтибар бирмәй генә)*. Ә-ә, яҡшы. Исемең кем, ҡустым?

В ә л и. Вәли.

Х ә ҙ р ә т. Уй, шәкерт, улай ғына булмаҫ, берәй кәлимәтен төшөрөп ҡалдыраһыңдыр.

Ш а ғ ә л и *(ашығыс)*. Ғәптелвәли, хәҙрәт, Ғәптелвәли. Бар күҙ терәгән балам, берҙән-бер вариҫым шул инде.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, шөкөр итергә кәрәк. Бына минең малайҙан бер ҙә бәхет булманы. Оҫтабикәләрем икәүләшеп ҡыҙ табалар ҙа ҡыҙ табалар. Ғәжәп бисәләр. Алты ҡыҙым бар.

З а һ и т. Ярай, ҡустым Ғәптелвәли, һуғышҡа барғың килмәйме?

В ә л и. Бер ҙә барғым килмәй ине шул, Заһит әфәнде.

З а һ и т. Ярар, ебәрмәбеҙ. Полиция башлығы минең һүҙҙән сыҡмаҫ. *(Тағы эсә.)* Ә һин, кем, Ғәптелвәли ҡустым, хисапты яҡшы беләһеңме?

В ә л и. Дүрт гәмәл үттек.

З а һ и т. Әһә.

Х ә ҙ р ә т. Имтихан ҡылып ҡарағыҙ һеҙ уны, Заһит әфәнде, имтихан.

З а һ и т. Була ул. Әйт әле, ҡустым, кем...

Ш а ғ ә л и. Ғәптелвәли.

З а һ и т. Ғәптелме, мәптелме, миңә барыбер. Бына ул әйтһен әле: икегә икене ҡушһаң, нисә була?

Вәли уйлана, ояла.

Ш а ғ ә л и. Әйт, улым, әйт!

В ә л и *(ҡыйыуһыҙ)*. Дүрт була, Заһит әфәнде.

З а һ и т *(быуылып көлөп)*. Ха-ха-ха, дүрт була, дүрт... Ха-ха-ха!

В ә л и. Дүрт бит инде, әфәндем.

З а һ и т. Ха-ха-ха, дурак. Икене икегә ҡушып биш итә белмәгәс, ниндәй сауҙагәр сыҡһын һинән, ахмаҡ.

Ш а ғ ә л и. Ул йәш бит әле, Заһит әфәнде, өйрәнер.

З а һ и т. Уф, әсем шартлай инде. *(Көлөүҙән туҡтап.)* Ярар, барығыҙ, бар. Милләтебеҙҙең буласаҡ бөйөк коммерсантына уңыш теләйем. Ха-ха-ха...

Ш а ғ ә л и. Рәхмәт, Заһит әфәнде.

В ә л и. Рәхмәт, миллионер әфәнде.

Сығып китәләр.

З а һ и т. Ҡара һин уны, үҙ балаһы алйот булһа ла — аяулы, һуғышҡа ебәргеһе килмәй. Ә башҡа егеттәрҙе һуғышҡа оҙатҡан саҡта: «Әгәр һуғыш майҙанында йән бирһәгеҙ, шәһит китерһегеҙ, урыныгыҙ йәннәттә булыр...» — тип күҙҙәрен йәшкәҙәтеп, хуплап йөрөнө.

Х ә ҙ р ә т. Шулай итәһең инде ул, халыҡты рухландырырға кәрәк тә баһа. Эйе, һуғыш — изге эш.

З а һ и т. Дөрөҫ, хәҙрәт, һуғыш — изге эш. Халыҡ бик күбәйеп китһә, ҡотора башлай ул. Зимагорҙар араһында тынысһыҙлыҡ була башлағаны бирле зиһенем тарала, йөрәгем яна. Төндәрен тыныс йоҡлай алмайым. Хатта, иртәнән һуңға эш ташлаясаҡтарын белгәс, Верх-Уралдан отряд саҡырттым.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла. Казактар ҡамсыһы төшһә, үҙҙәре үк баҫылырҙар. Ҡамсы кәрәк уларға, ҡамсы.

Ф ә р и ф ә инә.

Ф ә р и ф ә. Атаһы, сәй әҙерләнгән, әсәһегеҙме?

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла.

Ф ә р и ф ә. Иҫәнме, хәҙрәт? Оҫтабикәләрең таҙалармы?

Х ә ҙ р ә т. Бик таҙалар. Ул хәшәптәргә, бәрәкалла, нәмә булыр тиһең.

З а һ и т. Ярай, беҙ сығырбыҙ.

Ф ә р и ф ә сығып китә.

Булмаһа, хәҙрәт, әйҙә, сәй эсәйек.

Х ә ҙ р ә т *(шуны ғына көткән шикелле, һикереп тора)*. Бәрәкалла. Әйҙә, кем, Заһит туған.

Ишеккә табан бараләр. Тышта гудок тауышы. Бик оҙаҡ туҡтауһыҙ ҡысҡыралар.

З а һ и т *(ғәжәпләнеп, кире борола).* Бәй-бәй, был ни хәл? *(Сәғәткә ҡарай.)* Ваҡытһыҙ гудок ҡысҡырталар. *(Тәҙрәгә ҡарай.)* Әллә башланыуы шул булдымы?

Гудок туҡтауһыҙ ҡысҡыра. Заһит борсола, ишеккә йүгерә.

Ҡана, кем бар унда? Фәрхиямал, бар, Харис ағайыңдан белеп кил: ниңә ваҡытһыҙ гудок ҡысҡырталар. *(Тәҙрәгә бара.)* Был ни эш?

Йүгереп Х а р и с керә.

Х а р и с *(төҫө ҡасҡан, ныҡ ҡурҡып).* Заһит ағай...

З а һ и т. Нәмә булды? Ниңә ваҡытһыҙ гудок? Был ниндәй тәртипһеҙлек?..

Х а р и с. Заһит әфәнде, зимактар эш ташланылар.

З а һ и т. Нәмә?! Эш ташланылар?..

Х а р и с. Эйе, эш ташланылар.

Х ә ҙ р ә т. Я хоҙам, афәттәреңдән имен әйлә.

З а һ и т *(асыуы ҡабарып).* Ә һин нәмә ҡараның? Ҡайҙа полицейский? Уның кешеләре ҡайҙа? Ниңә юл ҡуйҙығыҙ? *(Арлы-бирле йөрөй.)*

Харис һүҙ өндәшмәй.

Әйт, доверенный, нәмә ҡарап торҙоң, ә? *(Яғаһынан быуып ала.)* Бына һиңә! Бына һиңә! Бына, бына... *(Уның битенә сапҡылай. Быуа.)*

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, бәрәкалла!.. *(Үҙе ҡаса.)*

Х а р и с. Заһит әфәнде...

З а һ и т. Өндәшмә! *(Ебәреп.)* Уф... *(Йөрәген һәм башын тотоп, борсолоп.)* Ҡайҙа полиция башлығы?

Х а р и с. Ул шунда, ләкин уның кешеләре көсһеҙ.

З а һ и т. Бар, хәҙер үҙен бында саҡыр!

Х ә ҙ р ә т *(тәҙрәнән ҡарап).* Ана, ул үҙе бында килә.

Х а р и с *(тәҙрәнән ҡарай).* Килә?

З а һ и т. Былай булһа, булдыҡһыҙҙар, һеҙ мине бөлдәрәһегеҙ. Уф!..

П о л и ц и я б а ш л ы ғ ы керә.

Был ниндәй эш, господин полицмейстер? Ниңә допускать иттегеҙ?

Н и к и ф о р ы ч. Мин ғәйепле түгел, господин Мамаев. Мин ҡаршы тороп ҡараным, улар минең кешеләремде туҡмап сығарҙылар.

З а һ и т. Ә һинең отрядың ҡайҙа?

Н и к и ф о р ы ч. Улар иртәгә генә юлға сығалар. Хәбәр шулай алдым.

З а һ и т *(асыуы ҡабарып)*. Нисек, иртәгә генә юлға сығалар?! Ни эшләп һеҙ эште шулай әкрен йәрәтәһегеҙ? Былай булһа, мин һеҙҙең өҫтән губернаторҙың үҙенә яҙырмын!

Н и к и ф о р ы ч. Ғәфү итә күрегеҙ, господин Мамаев, мин бөтә сараларҙы күрәм.

Х а р и с *(тәҙрәнән ҡарап)*. Заһит әфәнде, халыҡ бында килә!

Барыһы ла тәҙрәгә ҡарайҙар.

Ни эшләйбеҙ?

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, киләләр! *(Ишеккә таба боролоп.)* Ярай, мин китәйем әле.

З а һ и т. Хәҙрәт, туҡта әле, бында кәрәк булырһың.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, ярай... *(Ҡурҡа-ҡурҡа ғына кире килә. Үҙ алдына)*. Бына һиңә гөнаһ шомлоғо. *(Ултыра.)*

З а һ и т. Харис, бар, хәҙер сығып әйт: Заһит бай үҙе һөйләшергә теләй, тиген. Вәкил һайлап индерһендәр.

Х а р и с сығып китә.

Господин полицейский, һеҙ хәҙер үк Верх-Уралға кеше ебәрегеҙ.

Н и к и ф о р ы ч. Ебәрелгән, господин Мамаев.

З а һ и т. Ярай, улай булһа, бында ҡалығыҙ. Анау бүлмәгә инеп, беҙ һөйләшкәнде тыңлап торорғоҙ.

Н и к и ф о р ы ч. Тыңлайым һеҙҙе! *(Бүлмәгә инеп китә.)*

Х а р и с *(инеп)*. Хәҙер киләләр.

З а һ и т. Хәҙрәт, һин бында кил. Харис, һин дә.

Ҡ а р а һ а ҡ а л — Ғ а й с а, К и н й ә б а й, Ф ә с х и инәләр. Ҡара-ҡаршы байтаҡ ҡарап торалар.

Х ә ҙ р ә т *(ҡысҡырыбыраҡ)*. Вәғәләйкүмәссәләм! Бәрәкалла.

К и н й ә б а й *(ҡырын ҡарап)*. Беҙ, хәҙрәт, ашҡа килмәнек.

З а һ и т. Ашҡа килмәһәгеҙ ҙә, мосолман өйөнә ингәндә, сәләм биреп инһәгеҙ, арыуыраҡ булыр ине. Ләкин зарар юҡ. Ашығыс ваҡытта онотолоп та китә ул... Ултырығыҙ.

Ғ а й с а. Ултырып торорға беҙҙең ваҡыт юҡ, Заһит бай. Беҙҙе эшселәр һеҙҙең менән һөйләшергә һайлап ебәрҙеләр.

З а һ и т. Бик һәйбәт. Ултырығыҙ. Тыңлайыҡ.

Ғ а й с а. Рәхмәт. Ҡыҫҡаһы шул: эшселәр хәҙерге хеҙмәт хаҡы менән риза түгелдәр, арттырыуҙы талап итәләр. Шуға күрә бөгөн эш ташланыҡ.

З а һ и т. Бына бынығы килешеп етмәй инде. Башта уҡ белдерергә мөмкин ине, һөйләшер инек. Бәлки, мин дә арттырған булыр инем. Ниңә инде уның өсөн эш ташларға?

Х ә ҙ р ә т. Эйе. Байығыҙ үҙегеҙҙең мөьмин-мосолман, бәрәкалла.

К и н и ә б а й. Мосолманы мосолман да, ә һин бында нисек килеп ҡыҫылғанһың әле?

Х ә ҙ р ә т. Был ни тигән һүҙең, Кинйәбай? Бәрәкалла...

К и н и ә б а й. Эйе, бәрәкалла... Һинең ни ҡыҫылышың бар беҙҙең эшкә, тим.

З а һ и т. Бәй-бәй, тауышланмағыҙ. Хәҙрәт бик дөрөҫ әйтә. Йә, күпме арттырырға һорайһығыҙ?

Ғ а й с а. Забойҙа эшләүселәргә 20 тин, ҡалғандарына 15 тин.

З а һ и т. Ай-ай, нәфсегеҙ бик ҙур икән.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, ул бик күп була бит.

Ф ә с х и. Хәҙрәт, ҡыҫылма тигәндәр бит һиңә.

З а һ и т. Юҡ, улай булмай. Алтынды хөкүмәткә бирәм, хаҡы бик түбән.

К и н и ә б а й. Хөкүмәткә түгел, аллаға бирһәң дә беҙҙең өсөн барыбер, Заһит бай. Беҙҙең хаҡты һораған-са арттыр.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла, Кинйәбай, ҡандай көфөр һүҙ әйттең...

К и н и ә б а й *(асыуланып)*. Ҡыҫылма тигәндәр бит һиңә! *(Тәмәкеһен төкөрөп.)* Тфү! *(Изәнгә ташлай, тапай.)*

З а һ и т. Ҡуй, Кинйәбай, улай ташлама. *(Өҫтәлдәге һауытты алып һуҙып.)* Мә, бында һал.

К и н и ә б а й *(төпсөктө алып, ғәфү үтенгән төҫлө, һауытҡа һала)*. Ярай.

Ғ а й с а. Йә, Заһит бай, әйтер һүҙеңде әйт, беҙҙе халыҡ көтә.

З а һ и т. Әйтәһе һүҙем шул: беҙҙең һорауығыҙға риза түгелмен. Арттырһам да шул... кругом бишәр тин арттырыу тураһында уйлап ҡарармын.

Ғ а й с а. Улай биттән көлмәгеҙ әле, Заһит бай.

Ф ә с х и. Көлөү генә түгел, мыҫкыл итеү был!

З а һ и т. Риза түгелһегеҙ икән, ихтыярығыҙ.

Х ә ҙ р ә т. Биргәненә шөкөр итергә кәрәк, егеттәр. Бай арттырам тип тора бит. Мосолмандың күңеле киң.

Ғ а й с а. Һин, хәҙрәт, саҙаҡаны аҙ бирһәң дә һуҡраныш ҡына алаһың бит. Ә беҙ эш өсөн һорайбыҙ. *(Заһитҡа.)* Тимәк, һеҙҙең ҡырҡа һүҙегеҙ шул?

З а һ и т. Эйе, шулай. Ҡарармын, бәлки, кругом бишәр тин...

Ғ а й с а. Юҡ, булмай!

К и н й э б а й. Яҡын да килмәй!

Ф э с х и. Киттек!

Ғ а й с а. Киттек! *(Заһитҡа.)* Аҙаҡ үкенмәгеҙ, бай әфәнде.

Сығып китәләр.

З а һ и т. Ҡара һин уларҙы, егермешәр тин тиген, ә? Күп, күп. Мөмкин түгел! *(Полиция башлығына.)* Ишеттеңме?

Н и к и ф о р ы ч. Ишеттем.

Х а р и с. Заһит әфәнде, бәлки, бер унар тин арттырғанда ла булыр ине.

З а һ и т. Юҡ, юҡ!

Х а р и с. Артығыраҡ юғалтып ҡуймайыҡ: бөтә шахталар улар ҡулында бит.

З а һ и т. *(асыулы).* Их, һеҙ, ябалаҡтар! Ниңә шулар ҡулына шахтаны бирҙегеҙ!

Н и к и ф о р ы ч. Шулай булды инде.

Т и м а к йүгереп керә.

Т и м а к. Заһит әфәнде! Харис ағай! Насостарҙы туҡтаттылар, котелдарҙан парҙы сығаралар. Шахталарҙы һыу баҫа башланы!

З а һ и т. Ах, шахталарҙы һыу баҫа!

Х а р и с. Заһит әфәнде, риза булайыҡ. Отряд та юҡ. Башҡа һис бер сарабыҙ ҡалманы...

З а һ и т. Уф, йөрәгем... Ах, эттән тыуғандар!.. *(Харисҡа.)* Бар, Харис, әйт: Заһит бай риза, тиген. *(Харис сығырға бара.)* Шахталарҙы ҡотҡарығыҙ! Туҡта, туҡта, бөгөн үк бөтә магазиндарға әмер бир: һәр бер һум башына егермешәр тингә тауар хаҡын арттырһындар. Мин ул эттән тыуғандарға киткән аҡсаны кире алырға тейешмен. Юҡ, юҡ, бушҡа бирмәм!

Харис сыға башлай.

Х ә ҙ р ә т. Бәрәкалла.

З а һ и т *(Харисты туҡтатып).* Ә был хәлдәр өсөн Ҡараһаҡал—Ғайса башы менән яуап бирергә тейеш. Ул йә-

шәргә тейеш түгел! Эткә — эт үлеме. Ах, эттән тыуғандар! *(Харисҡа.)* Бар, бар, тиҙерәк бул!

Харис сығып китә.

Шаршау

Икенсе күренеш

Шағәлизең лавка алды. Төн. Алыҫтан гармун тауышы ишетелә. Шағәлизең тәҙрәһендә ут балҡый. Файса менән Маруська керәләр. Ул ҡайҙалыр бара, Маруська уны оҙата сығҡан.

Файса. Йә, Маруська, мин хәҙер был яҡҡа китәм. Бар, һин ҡайт инде. Әгәр һуңламаһам, мин һиңә инеп йоҡлармын.

Маруська. Файса... туҡта әле.

Файса. Нәмә?

Маруська. Бәлки, минән туйганһыңдыр? Икенсе берәүгә бараһыңдыр?

Файса. Ул ни тигән һүҙ тағы?

Маруська. Китәһең дә юғалаһың, ә үҙең ҡайҙа барғанынды һорамам, миңә әйтмәйһең. Ҡайҙа бараһың һин? Әллә бүтән һөйгәнең бармы?

Файса. Юҡ, Маруська, шикләнмә: мин тик бер һинә генә һөйәм. *(Иркәләй.)*

Маруська.. Ниңә һуң ҡайҙа барғанынды әйтмәйһең?

Файса. Маруся, һорама. Ул кешегә барыуымды бер кем белергә тейеш түгел.

Маруська. Кем һуң ул? Әллә Фёдормы?!

Файса. Шаулама, Маруся.

Маруська. Тимәк, шул! Ул әле булһа бындамы ни?

Файса. Шаулама, тим...

Маруська *(йәшерен тауыш менән, тынысһыҙ).* Уны бит полиция эҙләй, тиҙәр. Нисек ҡурҡмайһың, Файса? Харап итерҙәр бит үҙеңде...

Файса. Бына нәмә, Маруся: күп һорау биргән кешене яратмайым мин. Был бер. Икенсенән, әгәр Фёдор тураһында кешегә ауыҙыңдан һүҙ сыға торған булһа, минән яҡшылыҡ көтмә.

Маруська. Юҡ, бер ваҡытта ла сыҡмаҫ. Ләкин, Файса, мин һинең өсөн дә, үҙем өсөн дә ҡурҡам.

Файса. Ниңә, кемдән ҡурҡырға? Бушҡа борсолаһың һин, Маруся.

М а р у с ь к а. Ғайса, һин минең берҙән-бер өмөтөм. Бары һин минең йөрәгемдә кешелегемде уяттың. Мин тормоштан өмөтөмдө өҙөп, үлем эҙләп кенә йөрөй инем бит. Бына хәҙер йәшәге, һинең менән оҙаҡ йәшәге килә, Ғайса! Тик бына һин... Һинең өсөн ҡурҡам. Шул Фёдор менән ниңә бәйләндең һуң? Уның менән бергә һине лә һәләк итерҙәр. Китәйек бынан, һиңә лә, миңә лә бында барыбер тынғы бирмәҫтәр. Китәйек, Ғайса.

Ғ а й с а. Ҡайҙа?

М а р у с ь к а. Икенсе берәй приискыға.

Ғ а й с а. Беҙҙең өсөн ҡайҙа ла бер ҡояш. Мин дә, Маруся, элгәре һинең кеүек уйлай инем. Был приискыла насар булһа, икенсеһенә китәм, икенсеһенән — өсөнсөһөнә. Ләкин бар ерҙә лә шул уҡ бер хәл. Был тормоштан бер ҡайҙа ҡасып ҡотолоп булмай.

М а р у с ь к а. Бәхетең булмағас, ни эшләйһең бит. Яҙғанды күрмәй сараң юҡ.

Ғ а й с а. Мин дә элек шулай уйлай инем, Маруся. Бик ҡыйын булһа, эсә инем. Тормош әрнеүҙәрен араҡы менән оноторға тырыша инем. Бөгөн бар, иртәгә — юҡ, миңә барыбер ине. Ләкин, юҡ, хәҙер миндә икенсе Ғайса йәшәй.

М а р у с ь к а. Был уйҙарың мине тағы ла ҡурҡыта, Ғайса. Шул Фёдор ҡоторта һине.

Ғ а й с а. Эйе, эйе, Маруся, ул, ул өйрәтте мине тормошҡа айныҡ күҙ менән ҡарарға. Ул күҙемде асты минең! Ул минең йөрәктә ниндәйҙер ҙур өмөт, ышаныс уты тоҡандырҙы. Ғүмергә өмөтһеҙ, әрнеүҙән башҡаны белмәгән күңелдә ниндәйҙер шатлыҡ тыуҙы. Мин хәҙер шул өмөт менән йәшәйем. Бына тағы ла һин... Мин һинән тик шуны һорайым: әгәр мине яратһаң, тыйма һин мине. Минең өсөн борсолма, тыныс бул.

М а р у с ь к а *(тотлоғоп)*. Әгәр һине ҡулға алһалар? Алыҫҡа, Себергә оҙатһалар? Юҡ, юҡ, ул ваҡытта ла мин һинән ҡалмам. Йәһәннәм артына ебәрһәләр ҙә һинең менән бергә булырмын, Ғайсам!

Ғ а й с а. Рәхмәт. Әммә ул ҡурҡыныстар хәҙергә юҡ әле. Беләм, Мамаев беҙҙе кисермәҫ. Ләкин ул ҡурҡыныс түгел. Күрҙеңме, шахтёрҙар үҙҙәрендә ниндәй ҙур көс тоялар хәҙер. Йә, бар, ҡайт инде, мине көтәләрҙер.

М а р у с ь к а. Килерһеңме?

Ғ а й с а. Мин бөгөн һиңә ғүмерлеккә килермен, Маруся. *(Ныҡ һөйә.)* Хәҙергә хуш. *(Үбә лә, сығып китә.)*

М а р у с ь к а. Тиҙ ҡайт, бәгерем! *(Әкрен генә сығып китә.)*

Тимак менән Вәли керәләр.

Тимак. Ярай, Маруся, Гайсаң менән һуңғы хушлашыуың был.

Вәли. Тимак, мин ҡурҡа башланым әле.

Тимак *(асыулы)*. Ҡуян йөрәк! Заһит бай һиңә бушҡа алтын бирәме ни? Ҡурҡма, эшләргә кәрәк.

Гармун тауышы яҡыная.

Әйҙә киттек, Гайсаны күҙҙән юғалтмайыҡ.

Китәләр. Гармун, йыр тауышы ишетелә...

Алтын ауыр, алтын ауыр,
Табыуы — тауҙан ауыр.
Алтын ҡаҙыған егеттәрҙең
Йөрәгенән ҡан тамыр...

Күдрәш, Байегет һәм башҡа йәш егеттәр йырлап килеп керәләр. Фәсхи һыҙғыра.

Фәсхи. Егеттәр, мин бында ҡалайым, ә һеҙ барығыҙ, урамды бер урап килегеҙ.

Күдрәш. Ә-һә, һандуғас янына төнәргәләр инде.

Байегет. Кис матур һайрай бит ул һандуғас.

Фәсхи. Шауламағыҙ, егеттәр. Эх...

Егеттәр сығып китәләр.

Әллә сыҡмаҫҡа уйланымы? *(Ҡойма аша, йәшерен.)* Фю, һандуғас, һандуғас!..

Һандуғас *(ҡойма арҡығынан күренә)*. Фәсхи, һинме?

Фәсхи. Эйе, мин, һандуғас.

Һандуғас. Көскә ҡотолоп сыҡтым. Беҙҙә Харис ултыра.

Фәсхи. Ни эшләп йөрөй ул Харис? Әйҙә, сыҡ бында. *(Ҡойма аша күтәреп ала.)*

Һандуғас. Әллә, эсеп, һөйләшеп ултыралар шунда.

Фәсхи. Харис юҡҡа ғына йөрөмәҫ. Имеш, ул һине яусылата, тиҙәр.

Һандуғас. Яусылатһа, мин уға барамдыр шул?

Фәсхи *(шаяртып)*. Ниңә, мин ябай шахтёр, ә Харис — байҙың доверенныйы. Приказчик. Алтынға күмер үҙеңде.

Һандуғас. Миңә, Фәсхи, һин булғас, бер кем кәрәкмәй.

Фәсхи *(уны һөйөп).* Их, бына ошо минутта уҡ һине үҙемдеке итер инем! Ҡасан һуң туй яһайбыҙ, Һандуғас?

Һандуғас. Байрам етһен инде, күңеллерәк булыр.

Фәсхи. Уға тиклем һине Харис алып ҡуйһа?

Һандуғас. Ә һин нәмә ҡарап торорһоң икән?

Фәсхи. Минме? Мин һине алырмын да ҡасырмын!

Һандуғас. Әкрен... Ишетмәһендәр. Йә, мин инәйем, Фәсхи. Ҡуй, оҙаҡ торһам, һүҙ тейер.

Гармун тауышы.

Иптәштәрең киләләр. Хуш.

Гармун тауышы килгән яҡҡа Фәсхи ҙә китә. Шағәли, Харис, Гәүһәр өйҙән сығалар.

Харис. Мин, үҙемдең күңелемә оҡшаганды алырға булһам, күп һатыулашмайым ул: йөҙ һум аҡса, ҡалған яғы һеҙ әйткәнсә булыр.

Шағәли. Эйе, йөҙ һум. Аҙыраҡ булмаҫмы, Гәүһәр?

Гәүһәр. Миңә ни, үҙең ҡара, аҙыраҡ аҙырағын да.

Шағәли. Ярай килешәйек. Туйҙы ҡасан яһарбыҙ?

Харис. Байрамда инде. Әммә был вәғәҙә тураһында Һандуғастың үҙенә хәбәргә әйтмәй тор, оятҡа ҡалып ҡуймайыҡ. Уның тирәһендә теге Фәсхи бик урала, тиҙәр. Ҡара уны, Шағәли ағай!

Гәүһәр. Ярай, ярай, беҙҙән үтеп, ҡайҙа бара алыр тиһең. Ул яҡтан тыныс бул, Харис кейәү, тыныс бул!

Харис китә.

Шағәли. Хуш. Хи-хи-хи, һиҙҙеңме, бисә? Бер тыу бейә, бер һыйыр, буҫтау тышлы тун, елән, салбар! Ә һиңә бәрхәт бишмәт менән камзул! Тағы йөҙ һум аҡса, хи-хи-хи. Былай булғас, эштәр ходҡа китте. Харисты кейәү итеп, йөҙ һумды алып, лавканы ла киңәйтеп ебәрһәк, унан китеп ултырыр беҙҙең донъя, бисәкәй. Хи-хи-хи.

Инеп китәләр. Тимак менән Вәли йүгереп килеп керә.

Тимак. Уф, йөрәгем... Күҙемә күренәме, арттан йүгергән кеүек. Беҙ ни эшләнек, Вәли?

Вәли. Ғайсаның йәнен йәһәннәмгә ебәрҙек.

Тимак. Да-а... Саҡ үҙемде быуып үлтермәне, ен. *(Тыныслаиып.)* Инде тороп боғаҙыма йәбешә алмаҫ. *(Муйыиын һыйпап.)* Ҡара әле, Вәли, әҙе ҡалмағанмы?

Вәли. Бар, тырнаҡ әҙҙәре бар.

Тимак. Әгәр һин, артынан килеп, башына һуҡмаһаң, быуып ҙлтерә ине.

Вәли. Әйҙә ҡайтайыҡ.

Тимак. Юҡ, ҡайтмайбыҙ. Атайыңа инеп мин бер ярты алып сығам. Юҡһа аҡылдан шашырмын. Ә һин йәшенеп тор, күрмәһендәр. *(Инеп китә.)*

Вәли лавка артына йәшенә. Гармун тартып, егеттәр килеп керәләр. Тимак килеп сыға, ҡулында бер шешә араҡы.

Баййегет. Ҡарағыҙ әле, егеттәр: Тимак Шағәлиҙең бисәһен ҡосаҡлап, өҫтәүенә, бер һауыт араҡы алып сыҡҡан! *(Күдрәшкә.)* Ә беҙ, һинең менән, хыялланып ҡына йөрөйбөҙ шунда. *(Вәлиҙе күреп.)* Ә һин, Шағәли бай улы, Тимак үгәй әсәйеңде үпкәнгә, иренеңде ялап йөрөйһөңмө?

Тимак *(ни әйтергә белмәй).* Әсәбеҙме, егеттәр?

Баййегет. Ә кем һаулығына эсергә?

Тимак. Белмәйем... Бәлки, берәй мәрхүмде иҫкә алып эсербеҙ. Киттек!

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Зимагорҙар ятағы. Беренсе күренештәге сәхнә. Фәгилә өй йыйыштырып йөрөй. Тимак йоҡлап ята.

Фәгилә *(ерәнеп).* Фу, һаҫыҡтар. Былар ҙа үҙҙәрен әҙәмгә һанап йөрөйҙәр бит әле.

Харис инә.

Харис. Нәмә һин, өй эйәһе кеүек, бер үҙең һөйләнеп йөрөйһөң? Бөгөн бында Һандуғас килгәне юҡмы?

Фәгилә. Юҡ. *(Юхаланып.)* Ә һинең эштәр нисек әле?

Харис. Эштәр бик уңай: һөйләшелгән, мәһәр бирелгән, туй көнө билдәләнгән.

Фәгилә. Бик һәйбәт булған. Иллә, кем, үҙеңдекен иттең. Туй ҡасан?

Харис. Байрамдың икенсе көнөндә.

Фәгилә. Бик тиҙ икән.

Харис. Тиҙлеккә тиҙ ҙә, бына ошо арала күҙ-ҡолаҡ булырға кәрәк: ҡыҙҙы Фәсхи харап итеп ҡуйма-

һын. Ҡара уны, әгәр һандуғас менән бер-бер хәл була ҡалһа, минән яҡшылыҡ көтмә!

Фәғилә. Эй-й, Харис, нимә һөйләйһең һин?

Харис. Унан һиңә тағы бер эш бар, Заһит бай йомошо. Уның теге аҫрауы Фәрхиямал менән... эштәре булған икән.

Фәғилә. Ниндәй эштәре?

Харис. Ярар, ярар, белмәгәнгә һалышма. Бай менән йәш аҫрау араһында тағы ниндәй эш булыуы мөмкин.

Фәғилә. Эм-мм, аңланым. Бына һиңә кәрәк булһа: был инде нисәнсе аҫрауҙы ҡорһаҡҡа ҡалдыруы бит.

Харис. Көлмә, унда һинең эшең юҡ! Заһит байҙы шул бәләнән ҡотҡарырға кәрәк. Аңланыңмы? Күпме алырһың?

Фәғилә. Заһит бай хаҡына тормаҫ инде. Ә һуң ҡыҙ үҙе ризамы?

Харис. Уныһын үҙебеҙ һөйләшербеҙ.

Фәғилә. Ярай.

Харис *(йоҡлап ятҡан Тимаҡҡа ҡарап).* Был кисә ни ваҡытта ҡайтты?

Фәғилә. Вәли менән бик һуңлап, эсеп ҡайттылар. Бөгөн, эскәс, тағы йоҡланы. Эшкә лә төшмәне. Гел һаташа, ыңғыраша, белмәйем, ни булғандыр.

Харис. Эм-м. Ярай, Фәрхиямал үҙе килер. Ҡара уны, был хаҡта кеше белмәһен. *(Сығып китә.)*

Фәғилә. Ярай, ярай. Хуш. *(Үҙ алдына.)* Бына тағы кәсеп сығып тора. Кеше үлһә, хәҙрәткә — саҙаҡа, аҫрауҙар ҡорһаҡҡа ҡалһа, миңә — эш.

Һандуғас килеп инә.

Һандуғас. Фәғилә әбей, Фәсхиҙәр ҡайтманымы ни әле?

Фәғилә. Юҡ. Ә унда ни йомошоң бар?

Һандуғас. Бар ине шул.

Фәғилә. Кейәүгә бирелгән ҡыҙҙың егеттәрҙә ниндәй йомошо булһын? Харисҡа биргәндәр бит һине. Ҡызым, һин юҡҡа шул Фәсхи менән башыңды әйләндерәһең. Аҡылы бар ҡыҙ, Харис кеүек кешенән баш тартып, шул зимаккамы ҡыҙығамы?

Һандуғас. Мин был тормошҡа бала сағымдан уҡ күнгәнмен инде.

Фәсхи, Кинйәбай, Күдрәш, Баййегет, Зәйни, Вәли инәләр.

Фәсхи!

Ф ә с х и. Бында ни эшләп йөрөйһөң! Төҫөң борсоу, ҡайғылы.

Һ а н д ы ғ а с. Әйҙә әле, сығайыҡ, һөйләшәһе һүҙем бар. Бик ашығыс.

Сығалар. Фәғилә улар артынан сыҡмаҡсы була.

К и н й ә б а й. Фәғилә ҡарсыҡ, ҡайҙа бараһың?! Ҡана, ашарға бир әле, бик асығылды.

Ф ә ғ и л ә *(кире борола)*. Дөмөккөрҙәре, тыңларға ла ирек бирмәйҙәр...

Шахтерҙар сисенәләр. Ф ә ғ и л ә ҡ а р с ы ҡ сәй алып керә.

К и н й ә б а й. Ай-һай, Фәғилә ҡарсыҡ, эштәр бөгөн дә бик шыйыҡмы ни? Был ни эшең: ҡоро икмәк тә сәй, сәй ҙә ҡоро икмәк. Аш булһа, итһеҙ, ит булһа — үпкә лә эсәк менән тултыраһың. Ниңә былай?

Ф ә ғ и л ә. Әле быныһына көскә-көскә аҡса еткерәм. Заманалар ауырлашты — һуғыш, нәмә юҡ, ҡиммәт. Бынан һуң миңә лә һеҙгә нахлеб хаҡын арттырырға тура килер, ахыры.

К и н й ә б а й. Әһә, беҙҙең эш хаҡын арттырҡанды тойоп алып, тирене һыҙырмаҡ булаһыңмы?

Б а й й е г е т. Был ҡарсыҡ та беҙҙең кеҫәгә тәрәнерәк инергә самалай, ха-ха-ха.

Ашарға ултыралар.

Ә беҙ байҙың үҙ алтын тоғон ҡаҡтырҙыҡ әле.

К и н й ә б а й. Көсөбөҙ артҡанын тойҙом мин, егеттәр. Эй, ирмәк тә булды: бай үҙенекен һөйләй, етмәһә, хәҙрәте килеп ҡыҫылған, ә Гайса яра ла яра, ҡапланы ауыҙҙарын...

К ү д р ә ш *(Тимаҡ яғына ымлап)*. Беҙҙең теге Себер байы ашарға тормаймы ни?

К и н й ә б а й. Ул өлгөргәндер әле. Бына беҙҙең Ҡараһаҡал ҡайҙа йөрөй икән, эшкә лә сыҡманы.

Ф ә с х и ҡайта.

Т и м а к *(һаташа)*. Эх, Вәли!.. Быуа!..

Барыһы ла Тимакка ҡарайҙар.

Башына һуҡ!

В ә л и *(тиҙ генә барып)*. Нәмә булды һиңә, Тимак? Уян, һаташаһың бит.

Тимак *(үзенә-үзе гәжәпләнеп. Муйынын тота).* Фу, һаташтым. *(Әкрен.)* Төшөмдә теге алҡымымдан быуҙы. Уф, күҙ алдымдан китмәй, аҡылдан шашам инде.

Вәли *(йәшерен).* Ташла, һиҙҙерәһең бит.

Тимак. Әллә һөйләндемме?

Вәли *(икенсегә бороп).* Муйыныңды яулыҡ менән урап ятҡанһың да, бына шуға һаташаһың.

Маруська килеп керә. Тыны бөткән. Һушһыҙ, ярты үлек. Шахтерҙар уға ҡарайҙар.

Тимак. Ә Маруська ла бында икән. Ҡараһаҡалды күргә килгәнһеңдер?..

Маруська. Зимактар... Ҡараһаҡалды үлтергәндәр.

Барыһы. Ғайсаны үлтергәндәр?

Фәсхи. Ҡайҙа, кем үлтергән?

Маруська. Үлтереп, тиреҫлеккә күмгәндәр. Эттәр соҡоп сығарған.

Фәсхи. Ах!.. Кем, кем үлтерҙе беҙҙең Ғайсаны?! Мамаев, башҡа ниндәй ерәнгес ҡул уны үлтерергә батырсылыҡ итер. Зимактар, шулар, шулар ғына Ғайсаны беҙҙең аранан тартып алдылар! Ҡанға — ҡан, башҡа — баш, зимактар!

Ҡунаҡ инә.

Мамаевтың башы беҙҙең ҡул менән алынырға тейеш!

Фёдор. Бының кәрәге юҡ, Фәсхи.

Барыһы Ҡунаҡҡа боролоп ҡарайҙар.

Мамаевтар аҙ түгел: береһе үлһә, икенсеһе тыуа.

Вәли. Ҡунаҡ, һин, һин Ғайсаның башын ашаның! Полицияға тотоп бирергә кәрәк һине!

Фәсхи. Эй, Вәли, ауыҙыңды самалап ас, ҡара уны!

Зәйни. Юҡҡа ғына халыҡтың башын бутаның һин, Ҡунаҡ.

Тимак. Эйе, эйе, Ҡунаҡ. Әгәр һин булмаһаң, Ғайса үлмәгән булыр ине. Ах, ниндәй ауыр юғалтыу. Әгәр уны үлтерергә батырсылыҡ иткән дошманды белһәм, үҙ ҡулым менән быуып үлтерер инем!

Зәйни. Башың иҫән саҡта кит һин, Ҡунаҡ, беҙҙе бутап йөрөмә.

Кинйәбай. Буш булды, Фёдор, беҙҙең эштәр. Даулашып арттырған хаҡ юҡҡа сыҡты: Ғайсаны юғалттыҡ.

Фёдор. Бына бөтә бәләһе лә шунда шул: Заһит байҙы эш хаҡын арттырыуға мәжбүр иттек. Икенсе көндә үк ул юҡҡа сыҡты. Уның өсөн иптәшебеҙҙе лә үл-

терҙеләр. Аңлағыҙ, иптәштәр: беҙҙең был эрнеүҙәр Заһит байҙы үлтереү менән генә түгел, ә тотош капитализм донъяһын тар-мар килтергәндә генә бөтәсәк. Уянығыҙ, иптәштәр, асығыҙ күҙегеҙҙе! Ә һин, Фәсхи, көсөңдө, гәйрәтеңде шул көрәшкә бир. *(Барыһына ла берәм-берәм ҡарап сыға.)* Ошо минутта үлек ятҡан Ғайса шул көрәштең серен аңлағайны. Уны хөрмәт менән күмәйек. Был күмеү — шахтёрҙарҙың берҙәмлек, туғанлыҡ демонстрацияһына — революцион демонстрацияға әйләнергә тейеш.

М а р у с ь к а. Дөрөҫ, Фёдор, һин хаҡлы, хаҡлы! Туғандар, бәхет табыу өсөн беҙгә лә шул юлдан барырға кәрәк. Бәхет өсөн үҙең көрәшмәһәң, бер кем дә уны беҙгә килтереп бирмәҫ.

Ф ё д о р. Эйе, иптәштәр, ҡанлы көрәш, еңеү көндәре тау артында түгел. Барлыҡ Россия пролетариаты баһадирҙарса кәүҙәһен турайта. Оҙаҡ үтмәҫ, ул үҙенең бығауҙарын өҙөр!

К и н и э б а й. Ҡунаҡ бит дөрөҫ әйтә, егеттәр. Ғайсаны күмеү — беҙҙең көрәштең дауамы, еңеү даулауыбыҙ булып әйләнһен! *(Фёдорҙың ҡулын ҡыҫа.)*

Шаршау

Икенсе күренеш

Заһит бай йорто. Икенсе шаршауҙағы декорация. М и л л и о н е р бойоҡ уйланып, тәҙрә төбөндә тора.

З а һ и т. Юҡ, күңел тыныслығы юҡ, һаман өҙгәләнәм, май шәм һымаҡ, эстән һыҙам. Эйе, Ғайсаны донъянан юҡ иттем, ә ул үлек килеш тә тынғы бирмәй: приискыларымда восстаниелар туҡтамай, һаман эш хаҡын күтәреүҙе даулайҙар. Етмәһә, Кабанов миңә ара төшә... Кабанов әле бер хәл. Уның үҙенең дә аяҡ аҫты тайғаҡ: унда ла эшселәр баш күтәрәләр. Бына бәлә ҡайҙа. Революция болоттары ҡуйыра, революция. Их, нәмә эшләргә? Аҡылымдан шашам инде. Бөләм мин, бөтәм мин! Ә нисек һәләкәттән ҡотолорға?.. Белмәйем.

Пауза. Х а р и с менән Ғ э р и ф ә керәләр. Харис шат, уның ҡулында зур самородок.

Х а р и с. Заһит бай, һөйөнсө! Яңы алтын үҙәге табылды! Бына самородок.

З а һ и т. Бирһен хоҙай! *(Алтынға ҡулын һуҙа.)*

Харис. Әфәндем, башта һөйөнсөңдө әйт.

Заһит *(йөҙө үҙгәреп).* Тағы аҡса? Был кеше тигәнең һис тә барына ҡәнәғәт була белмәй. Ярай, йөҙ һум бирәм.

Харис. Әҙерәк булыр.

Заһит. Тфү, ул да әҙ. Ярай, йөҙ илле һум.

Харис. Мә, Заһит бай, игелеген күр. Теп-теүәл һигеҙ ҡаҙаҡлы самородок.

Заһит. Бәрәкалла, бирһен хоҙай. У-у, алтын, һары шайтан, әләктеңме ҡулға? Бына һиңә, бына, юғалып ятҡаның өсөн! *(Алтынды сәбәкләй.)*

Харис. Урыны бик һәйбәт: бер йөк ҡомдан өс мыҫҡал алтын сыға.

Заһит. Кем тапты?

Харис. Теге йәш зимагор, Күдрәш.

Заһит. Ниңә һуң әле мин, йомартланып, һиңә йөҙ илле һум бирергә булдым?

Харис. Һөйөнсөгә, Заһит бай. Теләһәгеҙ, мин Күдрәште лә алып киләм. *(Ишеккә барып.)* Ин әле, ҡустым. Бай үҙеңде һөйөнсөләргә саҡыра.

Күдрәш инә. Оялыбыраҡ тора.

Күдрәш. Әссәләмәғәләйкүм.

Заһит. Вәғәләйкүмәссәләм. Әйҙүк, ҡустым. Шатлыҡлы хәбәр менән килгәнһең икән. Хеҙмәтеңде буш итмәм. Нисек был урынды таптың?

Күдрәш. Элек атайым был яҡта эшләгәйне. Үлгән сағында, ошо урынды ҡара, тип әйткәйне. Урыны бик һәйбәт, алтыны күп сығырға оҡшай.

Заһит. Уныһын һуңынан күрербеҙ, ҡустым. Бынығына һөйөнсө кәрәктер инде?

Фәрифә. Бир-бир, атаһы, һөйөнсө бир.

Заһит. Күпме бирәйем, ҡустым?

Күдрәш. Әллә, үҙең белерһең әле.

Заһит. Үҙең башҡорт егете, үҙең йәшһең әле, бына илле һум һөйөнсө һиңә.

Күдрәш *(уңайһыҙланыбыраҡ).* Әҙерәк... булмаҫмы?

Заһит. Етер, ҡустым. Илле һум бик күп аҡса ул. Ул тиклем аҡсаны минең приискыла ҡай берәүҙәр йыл буйы эшләп тә таба алмайҙар. Кәҙерен бел. Мәшәҡәтһеҙ килгән рәхәт — тоҙһоҙ аш ул. Тырыш, барына ҡәнәғәт бул.

Күдрәш. Бай ағай, минең тағы бер теләгем бар ине. Уңайһыҙыраҡ бит әле... Минең, һеҙ риза булһағыҙ, өйләнергә тигән ниәтем бар ине.

Ғ ә р и ф ә. Беҙгә тиһә, туғыҙ бисә ал.

З а һ и т *(көлөп)*. Ҡыҙымды һорамайһыңдыр бит? Ҡустым, һинең кеүек егеткә ҡыҙҙың урта бармаҡтайын табып була. Теләһең, Фәрхиямалды димләргә мөмкин.

Ғ ә р и ф ә. Ни һөйләйһең, атаһы?

З а һ и т. Тик тор һин!

К ү д р ә ш *(уңайһыҙланып)*. Мин үҙем дә уны яратып йөрөйөм. Минең әйтергә теләгәнем дә шул ине.

З а һ и т. Бына, бына, күҙең ҡыҙҙың арыуына төшкән тағы! Ә һуң Фәрхиямал һине яратамы?

К ү д р ә ш *(уңайһыҙланып)*. Ярата, буғай.

З а һ и т *(шатланып, Харисҡа күҙ ҡыса)*. Бик яҡшы. Алаһың да ҡуяһың. Әйҙә, баш-аяғы менән булһын, изгелеген күр. Матур ҡыҙ. Эшкә шәп. Ундай изге уйың булғас, илле һумдан тыш, донъя кәрәк-ярағын бушлай үҙем бирермен.

Ғ ә р и ф ә. Ҡуй, атаһы, аҫрауыңды үҙ ҡыҙыңдай итеп бирмәһәң.

З а һ и т. Унда һинең эшең юҡ. Нәмәгә ҡыҫылып ултыраһың? Эсең бошһа, бар, сығып кит.

Ғ ә р и ф ә *(асыулы)*. Ярай, бик күпһенһәң, сығып та китермен шул! *(Сығып китә.)*

Х а р и с. Бына һиңә бәхет, ҡустым.

К ү д р ә ш. Рәхмәт һеҙгә, Заһит бай. Күктән көткән бәхетем ерҙән табылды.

З а һ и т. Байлыҡ ҡына бәхет түгел, ҡустым. Тырышып эшлә, байыңа изгелек ит. Бел, әҙәмдәрҙең иң бәхетле ваҡыты — башҡаларға изгелек иткән сәғәтелер. Бына мин һиңә ҡыҙ биреп изгелек иттем һәм үҙемде алтын тапҡандан да бәхетле һанайым... Конторағa әйт, Харис, илле һум аҡса бирһендәр. Магазиндан үҙенә кәрәк-яраҡтарҙы алһын. *(Күдрәшкә.)* Ярай, ҡустым, бәхетле ғүмер ит.

К ү д р ә ш. Рәхмәт, хушығыҙ. *(Сығып китә.)*

З а һ и т. Хуш... Ха-ха-ха!

Х а р и с. Ха-ха-ха, алтын да булды, ҡыҙға кейәү ҙә табылды.

З а һ и т. Ярай, бынығы булды. Инде эште аҙаҡҡа тиклем алып барып сығарырға кәрәк. Ә һин, Харис, был үҙәккә нығыраҡ күҙ һал: алтындың бай ерендә халыҡ урлаша торған.

Х а р и с. Тейешле сараһы күрелгән, Заһит әфәнде.

З а һ и т. Ирәндек буйында эштәр ни ҡорло бара?

Х а р и с. Яҡшы. Бик бай урындары бар. Был Күсәй башҡорттарын ултырттың һин, Заһит бай: ерҙәрен бушлай тип әйтерлек әләктерҙең.

З а һ и т. Арҙыҡ шаулама. Белəһең бит, ул халыҡ аҙаҡ даулашырға, кире уйларға ярата. Етмəһə, Кабанов та һаман шул ергə нəфсеһен һуҙып йөрөй. Ə иң ҙуры — минең прискымдағы шахтерҙарҙың болаларына ул мужиктар ҙа ҡушылһа, эштəр хəйерле булмаҫ.

Х а р и с. Аңлайым. Хушығыҙ! *(Сығып китə.)*

Фəрхиямал кереп, өҫтəлдəн нимəлер ала ла сығырға телəй.

З а һ и т. Фəрхиямал!

Бер-береһенə ҡарашып, оҙаҡ торалар.

Ах, хəйləкəр, һинең яратҡан егетең бар икəн бит. Кисə үлгəн булһам, белмəй ҡалған булыр инем.

Ф ə р х и я м а л *(борсоу)*. Бар шул.

З а һ и т. Ул һине алам, ти. Бик һəйбəт егет, үҙе бəхетле. Белəһеңме, ул ҙур алтын табып бирҙе. Мин уға һөйөнсə бирҙем. Өйləнергə тигəс, хатта донъя кəрəк-ярағын бүləк итергə булдым.

Ф ə р х и я м а л *(мыҫҡыллы)*. Ай, ниндəй изге кеше!

З а һ и т *(аңламай)*. Барыһы, Фəрхиямал, һинең өсөн.

Ф ə р х и я м а л. Рəхмəт шəфҡəтегеҙгə. Ləкин һуң инде...

З а һ и т. Ниңə улай, һин кемдəн кəм?

Ф ə р х и я м а л. Кəм түгел инем. Ləкин һеҙ, бысраҡ аяҡтарығыҙ менəн тапап, мине һələкəт соҡорона төшөрҙөгөҙ. Хəҙер: «Бына, Күдрəш, һинең һөйгəн сəскəң, һинең бəхет сəскəң, һаҡла!» — тип уның ҡулына тоторорға уйлайһығызмы? Намыҫ, оят ҡайҙа? *(Илай.)*

З а һ и т. Фəрхиямал, ауырыңды төшөрəргə кəрəк. Фəғилə ҡарсыҡ менəн һəйləшелгəн. Аҡсаһын үҙем түləрмен.

Ф ə р х и я м а л. Ə минең намыҫым ҡайҙа?

З а һ и т. Булған да бөткəн. Ниңə уның өсөн ҡайғырырға? Мин ул егетте бер минут эсендə бай яһаным. Ə байлыҡ, минеңсə, намыҫтан күп юғарыраҡ.

Ф ə р х и я м а л. Дөрөҫ түгел! Донъяла намыҫтан да ҡыйбат нəмə юҡ.

З а һ и т. Ул башҡа нəмələре булмаған ярлы кешеləр өсөн генə шулай. Ə һеҙ бай, рəхəт йəшəрһегеҙ. Фəрхиямал, бар шул егеткə. Атаһыҙ бала менəн ҡайҙа барырһың? Уйлап ҡара.

Ф ə р х и я м а л *(капыл)*. Ярай, тыныс булығыҙ, мин һеҙҙең муйыныгызға тағылмам: төшөртəм баланы. Бəлки, был минең өсөн үлемдер. Хəйер, донъяла тороуҙың да ни ҡыҙығы бар? *(Китергə була.)*

Заһит. Фәрхиямал...

Фәрифә керә. Бер Заһитҡа, бер Фәрхиямалға ҡарай.

Фәрифә *(асыулы)*. Нисәмә ҡарама, ағайың янында, был ниндәй оятһыҙлыҡ, Фәрхиямал? Ә һин, атаһы, ҡуян һаҡлаған ҡарсыға кеүек, уның менән аулаҡ ҡалыуҙы ғына эҙләп йөрөйһөң.

Заһит. Тфу, тағы башланы... Мин Фәрхиямалды Күдрәшкә димләп торам, ә ул үҙенекен һөйләй.

Фәрифә. Ул, кейәүгә биреү тураһында ҡайғыртырға, үҙ ҡыҙыңдыр шул? Үҙ ҡыҙыңдың йәше еткән. Шуны ҡайғырт, исмаһам.

Заһит. Әй-й, һинең ҡартайып бөткән, етмәһә, мыйыҡлы ҡыҙыңа кейәү сыҡмағанға мин ғәйеплелер шул. Малай таптың — диуана булды, ҡыҙ таптың — ни ҡыҙ түгел, ни малай түгел: үҙе мыйыҡлы, үҙе йәмһеҙ.

Фәрифә. Ярай, аҫрау бисәндән тыуған балаларың һәйбәт булырҙар.

Заһит. Етер, ташла!

Фәрифә. Барҙыр, барҙыр бер хәл: тағы аҫрау менән исемең сығыуҙан ҡурҡаһыңдыр.

Заһит *(шаша башлап)*. Туҡтат теленде! Юғал күҙ алдымдан! *(Аяҡ тибеп екерә. Ярһып, үҙен үҙе онотоп, араҡыға тотона.)*

Фәрхиямал сығып китә.

Фәрифә *(үпкәләп, йомшаҡ)*. Заһитым, ниңә һин шул тиклем йөҙөмдө йыртаһың, етмәһә, аҫрау алдында... Ә бит һин мине ҡасандыр ярата инең.

Заһит. Юҡ, мин һине бер ҡасан да яратманым.

Фәрифә. Ә ниңә һуң өйләндең?

Заһит. Мин һиңә түгел, атайыңдың миллиондарына, алтын приискыларына өйләндем. Хәҙер ул дөмөктө, приискыға мин үҙем хужа.

Фәрифә *(ғәрләнеп, ләкин ғорур)*. Бик хужа булып бөтмә әле: атайым үлһә, Закир ағайым тере, приискыға уның да хаҡы бар.

Заһит. Ха-ха-ха, ағаһы... Закир Рәмиев... Белəһеңме, һинең ағайың дәрүиш бит ул, дәрүиш. Ана ул ни эшләй: «Хөсәиниә» шәкерттәренə иғана итеп егерме биш һум аҡса биргән. Егерме биш һум — егерме биш һум бит ул: уның менән мин бер ай буйы ике эшсе тотам, алтын сығарам. Ә ул шәкерттәргә... Дәрүиш, дәрүиш, беләме ни ул миллиондың да бер тиндән кәмей башлағанын.

Фәрифә. Уның ҡарауы, ул күп уҡыған кеше, зыялый.

З а һ и т. Зыялый түгел, хыялый ул. Минең приискыларымда уның эше юк. Әйҙә, шунда үҙенең «Ваҡыт» газетаһын ваҡытында сығарып, «Шура» журналын мишуралап ята бирһен.

Ғ ә р и ф ә. Ҡара әсле, ҡанһыҙ кеше һин, Заһит. Ярай, мин сығам, ана бер юлбаҫарың килде. *(Сығып китә.)*

Ишек төбөндә Тимак.

Т и м а к. Мөмкинме?

З а һ и т. Ни бар, ин әйҙә.

Т и м а к. Эштәр хана, бай: зимактар Ҡараһаҡалды күмеүҙе көслө протест демонстрацияһына әйләндерергә булдылар.

З а һ и т. Демонстрацияға? Кем башланы?

Т и м а к. Фәсхи, Заһит бай, Фәсхи. Хатта ул һеҙҙе үлтерергә ҡаныға.

З а һ и т *(ҡурҡып)*. Мине үлтерергә?.. Фәсхи?..

Т и м а к. Эйе. Улар араһында теге машинист Фёдор ҙа йөрөй. Демонстрация тураһында шул башланы.

З а һ и т. Ҡасҡын Фёдор? Ҡасан күрҙең һин уны?

Т и м а к. Кисә кис килгәйне.

З а һ и т. Кисә?.. Эттән тыуған, ниңә һин уны шунда уҡ килеп әйтмәнең, ә? *(Тимакты һуғып йыға.)* Бына ниңә!

Т и м а к. Заһит бай, ул бит шунда уҡ ҡасты.

З а һ и т. Ә-ә, ҡастымы ни? Бына ниңә! *(Тағы һуғып йыға. Асыулы, арлы-бирле йөрөй.)*

Т и м а к. Заһит бай, рәхмәт урынына, мине туҡмайһың.

З а һ и т. Аҙ әле ул һиңә.

Т и м а к. Әлдә инде күҙҙән уттар күренде.

З а һ и т. Шулаймы? Уттар күрендеме? Ха-ха-ха... *(Кеҫәһенән аҡса сығарып биреп.)* Мә һиңә шуның өсөн аҡса. Бар, хәҙер үҡ миңә полиция башлығы менән Харис ағайың килеп етһен. Йүгер!

Т и м а к. Ярай! *(Сығып китә.)*

З а һ и т. Ҡара һин ул эттән тыуғандар, мине үлтерергә? Булыр, булыр! Эт һимерһә, эйәһен тешләй, ти. Юҡ, шаяраһығыҙ, Заһит бай айыу менән һуғышҡан кеше әле ул! *(Ирәйеп, иҙән буйлап йөрөй. Ишек төбөндәге Харисты күреп.)* Кер, кер, Харис, ниңә ҡурҡаһың? Теге зимак дуңғыҙҙар политик демонстрация ойошторорға йөрөйҙәр, ти.

Х а р и с *(ғәжәпләнеп)*. Мин бер нәмә белмәйем, Заһит әфәнде.

З а һ и т *(кыҙып).* Белмәйһең шул һин, белмәйһең! Морон аҫтындағын күрмәйһең!

Полиция башлығы инә.

Бына тағы был ике күҙле түмәр башы йөрөй.

Н и к и ф о р ы ч. Ни бойораһығыҙ, господин Мамаев?

З а һ и т *(мыҫкыллап).* Ни бойораһығыҙ... Ябалаҡ, бына ни бойорам! *(Асыулы, арлы-бирле йөрөй.)*

Н и к и ф о р ы ч *(ғәжәпләнеп).* Господин Мамаев, ябалаҡ түгел, полиция башлығы Никифорыч мин.

З а һ и т *(асыулы).* Ә бына мин әйтәм: ябалаҡ!

Полиция башлығы аптыран, бер Заһитҡа, бер Харисҡа ҡарай.

Ябалаҡ булмаһаң, приискыла нәмә булғанын, кемдең нәмә эшләп йөрөгәнен белер инең һин. *(Харисҡа.)* Ишетәһеңме, мине зимактар үлтерергә йыйыналар.

Н и к и ф о р ы ч *(ҡурҡып, ғәжәпләнеп).* Нәмә, һеҙҙе үлтерергә?!

З а һ и т. Эйе, эйе, мине!

Н и к и ф о р ы ч. Булмаҫ, господин Мамаев. Мин бер нәмә белмәйем.

З а һ и т. Белмәйһең шул һин! Никифорычтан һорап тормағандар. *(Асыулы.)* Ҡасҡын Фёдор ҡайҙа? Ул ни эшләп ошо көнгә тиклем ҡулға алынмаған!?

Н и к и ф о р ы ч. Ул күптән бынан осҡан инде. Мин уның тураһында Ғайсанан допрос алырға тейеш инем, ә уны үлтереп ташлағандар. Хәҙер ни эшләргә инде, начальствоға ни тип яуап бирергә?

З а һ и т. Ғайса үлгән дә — бөткән, уның өсөн тағы ниндәй яуап кәрәк?

Н и к и ф о р ы ч. Как же, как же, господин Мамаев. Кешенән мин допрос алырға тейеш инем, начальство требовать итә, ә уны үлтергәндәр. Допрос алғас булһа тағы бер хәл ине, бит алынмаған. Допрос алмаҫ борон кешене үлтереп китергә кемдең хаҡы бар?

З а һ и т *(ҡапыл көлөп ебәрә.)* Ха-ха-ха...

Н и к и ф о р ы ч. Көлмәгеҙ, господин Мамаев, уйын түгел... Между прочим, уның үлтерелеүендә һеҙҙең дә ҡатнашығыҙ бар, тип телгә алалар.

З а һ и т. Нәмә? Ни һөйләгәнеңде белəһеңме һин?

Н и к и ф о р ы ч. Да, господин Мамаев, минең сведениеларым буйынса, бик күп зимактар үлтереүҙә һеҙҙе ғәйепләйҙәр.

Х а р и с. Юҡ, ышанмағыҙ һеҙ ул һүҙҙәргә. Ялған улар.

З а һ и т *(яһалма ғорурлыҡ менән).* Эйе, Никифорыч, минең кешеләрем, һинең бешмәгән агенттарыңа ҡарағанда, яҡшыраҡ эшләй: шулар йыйыштырҙылар Ғайсаны. Бының өсөн миңә рәхмәт әйтергә кәрәк. Заһит ағайың булдыра ул.

Н и к и ф о р ы ч *(ғәжәпләнеп).* Ә-ә? Уны һеҙ үлтерттегеҙ?..

З а һ и т. Эйе. Ә һеҙ ул эште тейешенсә тикшерегеҙ, йәтешле ғәйепләне табығыҙ.

Н и к и ф о р ы ч. Уныһы шулай инде, господин Мамаев, эҙләрбеҙ.

З а һ и т. Ғайсаны, беләһеңме, машинист Фёдор үлтергән.

Н и к и ф о р ы ч. Булмаҫ, ул бынан ҡасҡан.

З а һ и т. Юҡ, ҡасмаған. Табырға, тоторға кәрәк. Ул — үлтереүсе!

Н и к и ф о р ы ч. Ә бит доказательство юҡ.

З а һ и т. Булыр. Уныһын бына Харис Алдарыч табыр.

Х а р и с. Бик мөмкин эш, Заһит әфәнде.

З а һ и т. Бына эш тә бөттө: үлтереүсене таптыҡ, дәлил дә бар, ха-ха-ха. Был бит — ике ҡуянды бер юлы атыу: Фёдорҙың прииск эшселәренә йоғонтоһо арта башлағайны, хәҙер уны күрә алмай, артҡа әйләнерҙәр; икенсенән, төп боласының башын юҡ итергә законлы нигеҙлектәр була. Ха-ха-ха...

Н и к и ф о р ы ч. Ну баш та һуң үҙегеҙҙә, господин Мамаев!

З а һ и т *(ирәйеп).* А как же, миллионер, прииск хужаһы! Аҡылың булмаһа, бер тин дә табып булмай ул. Ә хәҙер эшкә, әфәнделәр. Ғайсаны күмеүҙе демонстрацияға әйләндереүгә юл ҡуймаҫҡа! Харис, һин хәйлә ептәреңде үрергә кереш, ә һеҙ, Никифорыч, тиҙерәк Фёдорҙы ҡаптырығыҙ.

Н и к и ф о р ы ч. Слушаюсь.

З а һ и т. Бына һеҙгә әмер шул. Ғайсаны, эт һымаҡ, күмһендәр, бер ниндәй телмәрҙәр булмаһын. *(Эре йөрәй.)* Шулай уҡ Фәсхиҙе тотоп ябырға кәрәк. Ғайса урынына ул ҡалған.

Н и к и ф о р ы ч. Ну? Вот как! Мин уларға күрһәтермен нисек тауыш күтәрергә. Тик бына Фәсхиҙе нисек ҡулға алырбыҙ? Минең ҡулда бер материал да юҡ бит.

З а һ и т. Уныһын да Харис табыр, ауыр эш түгел.

Н и к и ф о р ы ч. Слушаюсь, господин Мамаев.

Шаршау

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Шағәли лавкаһы алды. Маруська менән Күдрәш Ғайсаны күмеп ҡайтып киләләр. Лавка ябыҡ.

Маруська. Уф, саҡ ҡына ултырайым әле... Шулай итеп, иң яҡын кешемде күмдек, мәңгегә китте Ғайсам.

Күдрәш. Эйе... Мин Ғайса ағайҙы ғүмерҙә онотмам: ул мине эшкә өйрәтте, ауыр саҡтарҙа атайым һымаҡ йыуатты. Уның арҡаһында мин тормошта күп нәмәгә төшөнә башланым.

Маруська. Мин дә уның арҡаһында тормошто аңланым, ерҙә бәхет табыу мөмкинлеген күрҙем. Ләкин ул бәхет өсөн көрәшергә кәрәк.

Күдрәш. Эйе. Мин бәхет эҙләп приискыға килдем, бәхет алтындалыр тип уйланым. Алтын таптым, ә бәхет табылманы... Шулай ҙа мин риза: тормош эсеһен татыным, беренсе тапҡыр һылыу ҡыҙ һөйҙөм.

Маруська. Бына һинең һөйгәнең үтеп бара. Туҡтат уны, вәғәҙәһен ал. Унан, өйләнеп, шат йәшәрһегеҙ.

Күдрәш. Фәрхиямал!.. *(Уға ҡаршы йүгерә.)* Ah, йөрәгем, әйтсе бер йылы һүҙеңде: ризамы һин миңә килергә?

Яҡын алып килә. Фәрхиямал элек үҙҙәре тәү осрашҡан урынға оҙаҡ текләп ҡарай.

Фәрхиямал. Юҡ, Күдрәш, мин вәғәҙә бирә алмайым шул.

Күдрәш. Бик оҙаҡ көттөм бит инде, Фәрхиямал.

Маруська. Интектермә инде егетте. Ана ул нисек яна бит. Фәсхи менән һандуғас та ҡушылалар.

Фәрхиямал. Ниндәй бәхетле һандуғас!

Маруська. Ә һин? Ярата бит егет, ризалыҡ бир, һеҙ ҙә бәхетле булырһығыҙ. Их, йәштәр... *(Ҡайғылы сығып китә.)*

Фәрхиямал *(аптырап)*. Ни тип әйтергә лә белмәйем...

Күдрәш. Әйт инде, Фәрхиямал?

Фәрхиямал. Их, ниндәй һөйөклө һин, Күдрәш! Яҡты, өмөтлө һинең күҙҙәрең. Ләкин...

Күдрәш. Илама, Фәрхиямал. Ниңә?

Фәрхиямал. Их, Күдрәш, мин бәхет күрмәмдер инде ул... Ярай, хуш, мин киттем, өйҙә асыуланырҙар.

Күдрәш. Шулай ҙа, Фәрхиямал, мин өмөтөмдө өҙмәйем.

Фәрхиямал. Бер нәмә лә әйтә алмайым, Күдрәш.

Фәгилә ҡарсыҡ күренә. Ул Фәрхиямалды саҡыра.

Булмай! *(Йүгереп сығып китә.)*

Зәйни, Кинйәбай киләләр.

Кинйәбай. Ну күмеү булды был, күпме халыҡ йыйылғайны!

Зәйни. Ә стражниктар бер нәмә лә эшләй алманылар.

Кинйәбай. Егет, ниңә уйға баттың?

Зәйни. Бына — дурак: ул Заһит байға ярты бот алтын табып биргән, ә бай уға бары илле һум аҡса! Бына ҡаҙға турғай алмашыу. Ярлының итәгенә бойҙай һалһаң... турғай сүплəп бөтөрөр тигəндəре ошо булалыр инде. Юҡ бит, ағай, тура килмәй беҙҙең бəхеткə. Был, мин əйтəм, Кинйəбай ағай, хоҙай бəхетте йыйын дуракка бирəлер, ахыры.

Кинйәбай. Әрләмә егетте, ул ғәйеплеме ни. Заһит бай таланы уны, бына кемде ҡәһәрләргә кәрәк.

Күдрәш. Уның ҡарауы, ағайҙар, һөйгән ҡыҙымды алһам, бəхетле булам бит мин.

Зәйни. Ала алһаң ярай ҙа. Эттән һөйəк артырмы икəн?

Күдрәш *(уңайһыҙлана, нəмə əйтергə белмəй)*. Əйҙəгеҙ, ағайҙар, күстəнəс алғандай итəйек: Фəсхи менəн Һандуғастың туйы бит.

Лавкаға инə башлайҙар. Тимак менəн Гəүһəр өйҙəн ҡосаҡлашып килеп сыға. Кинйəбай уларҙы күреп ҡала.

Кинйәбай. Шағəли, сыҡ əле, тауар килтергəндəр!

Шағəли *(лавканан сыға)*. Ҡайҙа, кем?

Тимак. Ҡурҡма, Шағəли, мин бисəңде урлап ҡасмам.

Шағəли. Зимагорҙан бисə урлатҡан кешенең исеме Шағəли булмаҫ. Ə шулай ҙа минең бисəмдəн алыҫыраҡ йөрө һин.

Гəүһəр. Нимə һөйлəйһең, мөхəббəтһеҙ! Мине кемгə һанайһың?

Шағəли. Кемгə һанаһам да минең эш, тик тор!

Зəйни. Бисəңде ныгыраҡ һаҡла, Шағəли, ҡолаҡ ҡағып ҡуйма.

Тимак. Һандуғастан ҡолаҡ ҡаҡҡаны етер, аҡтыҡ бисәһен дә алып китмәҫтәр.

Шағәли. Ниңә? Нисек мин Һандуғастан ҡолаҡ ҡаҡҡанмын? *(Тимаккә бара.)*

Кинйәбай *(Зәйнигә йәшерен)*. Серҙе аса бит был дуңғыҙ.

Тимак. Уныһын Фәсхи менән Һандуғастың үҙҙәренән һора.

Шағәли. Туҡта, туҡта, һин нәмә һөйләйһең?! *(Тимак туҡтамағас, Гәүһәргә.)* Гәүһәр, ул нәмә һөйләй? Һандуғас ҡайҙа?

Гәүһәр. Кисә әхирәттәренә ҡуна киткәйне, ҡайтҡаны юҡ.

Шағәли. Ниңә ебәрҙең? Ҡайҙа? Тап хәҙер!

Кинйәбай менән Зәйни шаҡылдап көлөшәләр.

Шағәли. Ә һеҙ нәмәгә ыржайып көләһегеҙ?

Кинйәбай. Кискә беҙгә туйға кил.

Шағәли. Булмаҫ!

Зәйни *(мыҫҡыллап)*. Аллаһы әкбәр тиген дә ҡуй инде, Шағәли ҡоҙа.

Шағәли *(ҡапыл сәбәләнеп)*. Ах, ер ҡорттары! Таланылар! Таланылар! Ҡарауыл! Ҡарауыл! Ҡарауыл! Таланылар! Гәүһәр! Никифорыч! Хәҙрәт! Таланылар! *(Башын тотоп сәбәләнеп йөрөй.)* Гәүһәр, дуңғыҙ бисәһе, йүгер полицияға! Ҡарауыл! Таланылар!..

Гәүһәр. Таланылар, ҡарауыл! *(Сығып йүгерә.)*

Кинйәбай. Эште боҙҙоҡ, Текәһуҡҡыс.

Зәйни. Эйе, туҡмас түгелмәһә ярар ине.

Хәҙрәт *(йүгереп килеп керә)*. Бәрәкалла, Шағәли, ни булды?

Шағәли. Ҡарауыл, хәҙрәт, таланылар!

Хәҙрәт. Бәрәкалла, һуң нисек таланылар? Кемдәр таланылар? *(Зәйни менән Кинйәбайға ҡарап.)* Әллә ошолармы?

Шағәли. Юҡ. Һандуғасты алып киткәндәр, хәҙрәт!

Хәҙрәт. Бәрәкалла.

Шағәли. Бер ҙә бәрәкалла түгел, хәҙрәт. Таланылар, ҡарауыл! *(Ҡысҡыра, сәбәләнеп йөрөй.)*

Бер стражник менән Харис, Гәүһәр киләләр.

Ах, Харис, харап булдыҡ, таланылар!

Харис. Ни булды?

Стражник *(ғәжәпләнеп)*. Что случилось?

Шағәли. Таланылар, господин стражник! Грабил мая. Зимагорҙар грабил: дифка варавал. Дифка Хариска

давал, Харис динга давал. Тәпир дифка ла нет, динга ла нет. Зимагорҙар сто рублә грабил, вот мая карауыл кричал!

Хәҙрәт. Нашим шәригәт законым так нильзя бит. Дивка Хариска давал, ява должен бит. Бәрәкалла.

Шағәли. Чту дилат тәпир?

Харис *(асыулы)*. Чту дилат... Ҡарға! Биргәс, ҡыҙҙы һаҡлай беләләр уны! Бына хәҙер теләһәң ҡайҙан табып бир!

Хәҙрәт. Эйе, табырға кәрәк.

Стражник. Искать надо.

Хәҙрәт. Әйҙәгеҙ, ашығайыҡ! Бәлки, әле һуң түгелдер, бәрәкалла...

Шағәли *(Гәүһәргә)*. Гәүһәр! Дуңғыҙ бисәһе, лавканы яп! Әйҙәгеҙ!

Сығып китәләр. Тимак кире килә.

Тимак. Ҡана, Гәүһәр, бер шешә араҡы бир әле. Туй алдынан кәйефте килтереп алырға кәрәк.

Гәүһәр. Шул булыр инде һинең...

Тимак. Шул да, һин дә. *(Ҡосаҡларға итә.)*

Гәүһәр. Ҡуй, кеше күрер. Әйҙә өйгә ин. Мин лавканы яптым инде.

Инә башлайҙар. Харис килә.

Харис. Тимак!..

Тимак *(һиҫкәнеп)*. Нәмә бар?

Харис. Бер эш бар. *(Гәүһәргә күп мәғәнәле ҡарай.)*

Гәүһәр инеп китә.

Тимак. Булмай инде.

Харис. Бәләкәй генә эш. Илле һум.

Тимак *(уйланып тора)*. Илле һум?.. Әҙерәк бит. Ну, ниндәй эш һуң?

Харис. Фәсхиҙе алтын урлаған итеп күрһәтергә кәрәк. Заһит бай шулай ҡушты. Ишеткәнһеңдер, Ғайсаны күмгәндә нисек ант иткән ул? Күрәһең, ул икенсе Ғайса булырға теләй. Ә быға юл ҡуйырға ярамай, юҡ итергә.

Тимак. Ә ҡайһылай?

Харис. Уның һандығына алтын һалырға. Шуны һин башҡараһың.

Тимак. Ә һуң алтын ҡайҙа?

Харис. Бына. *(Бәләкәй тоҡсай менән алтын бирә.)* Был алтын кассанан. Шуны һал, ә мин алтын кассаһын

ватҡандар тип полицияға заявит итәм. Бөгөн үк тентеү була. Иртәгә Фәсхиҙең башы, ана, китеп ултырыр.

Тимак *(уйланып тора)*. Ярай. Оҫта, оҫта. Тимәк, һандуғасты ла тартып алаһың, үҙен дә таш ҡапсыҡҡа һалаһың!

Харис. Ләкин хәҙер ошо тауыш эсендә эшләп ҡалырға кәрәк.

Тимак. Ярай. Мин бында инеп кенә сығам. *(Инеп китә.)*

Харис. Бына нисек уның эше. Тәмле ергә эйәләгән. Әйтәм, бер эш ҡушһаң һатыулаша башлай, ул Шағәли елкәһен кимерә икән. Ярай, ҡустым, хәҙергә кәрәкһең. Кәрәгең бөткәс, үҙеңде юҡ итергә тура килер: бик күпте белә башланың...

Тауыш. Шау-шыу.

Ах, киләләр. Тапҡандар, ахыры. Инде ҡулдан ысҡына алмаҫһың!

Шағәли, хәҙрәт, стражник керәләр.

Шағәли. Юҡ ҡыҙыҡай.

Харис. Баракторҙа булдығыҙмы?

Шағәли. Аҡтармаған ерен ҡалдырманыҡ.

Харис. Насар эҙләйһегеҙ икән... Бына улар үҙҙәре киләләр.

Етәкләшеп Фәсхи менән һандуғас керә. Улар артынан Маруська менән Күдрәш эйәргән.

Шағәли *(һандуғасҡа ташланып)*. Минең битемдән көләһеңме, оятһыҙ?!

Һандуғас *(тыныс)*. Нәмә булған, ағай?

Шағәли. Атаңдың башы булған!

Һандуғас *(шулай уҡ тыныс)*. Бер нәмә аңламайым.

Хәҙрәт. Бәрәкалла, һин хәҙер кейәүгә бирелгән ҡыҙ бит. Шулай, шәриғәт боҙоп, икенсе егет менән йөрөргә яраймы ни?

Һандуғас. Ул икенсе егет түгел.

Хәҙрәт. Бәрәкалла, һин ни һөйләйһең, ҡыҙым?

Шағәли. Ауыҙыңды ла асма!

Харис. Юҡ инде, һандуғасҡай, беҙҙә алынған малды кире ҡайтармайҙар...

Һандуғас. Бәлки, һеҙҙә шулайҙыр, әммә кеше тауар түгел, уның йөрәген, намыҫын һатып ала алмаҫһығыҙ!

Капканан Тимак йәшерен генә сығып, урам буйлап китә. Шағәли уны күреп ҡала.

Шағәли. Ах, дуңғыҙ! Ни эшләп йөрөй унда?

Хәҙрәт *(эштең нәмәлә икәнен аңламай).* Бәрәкалла, ни булды, Шағәли?

Шағәли *(асыулы).* Куйсы эле, хәҙрәт. *(Көнсөл асыулы, бер Тимак киткән яҡҡа, бер өйгә ҡарай.)*

Гәүһәр сыға. Бер-береһенә асыулы ҡарап торалар.

Дуңғыҙ бисәһе!

Гәүһәр. Йә, ни эшләп эт көтөүе кеүек йыйылдығыҙ бында? *(Һандуғасҡа.)* Ниңә инмәйһең, тәтәй ҡыҙ?

Шағәли. Әйҙә өйгә ин! Ни эшләп тораһың тағы, ин тиҙәр бит һиңә!

Гәүһәр. Бысрак казарма килене булғас, ағаһының өйөндә йәм тапмайҙыр.

Һандуғас. Эйе, эйе, еңгә. Был мөхәббәтһеҙ өйгә ингем килмәй. Мин нәмәләремде ала ғына килдем. Хәҙер китәм.

Шағәли. Ҡайҙа бараһың? *(Тота, эткәләй.)*

Фәсхи *(Шағәлигә).* Теймә Һандуғасҡа!

Һандуғас *(шатланып).* Фәсхи, һөйөклөм, әйт шуларға. *(Фәсхигә һыйына.)*

Шағәли *(тештәрен ыржайтып).* Э, ҡараҡ? Бына бур. Тотоғоҙ! Кит Һандуғас янынан, ас бет!

Фәсхи. Ул — минеке.

Харис. Нисек һинеке?

Хәҙрәт. Шәриғәт буйынса кейәүгә бирелгән ҡыҙ бит ул, бәрәкалла.

Кинйәбай. Бар, хәҙрәт, һин бер яҡтараҡ тор, күп шәриғәтләнең инде. Әйҙә киттек, Фәсхи ҡустым.

Шағәли *(стражникка).* Мин һеҙҙән пумыс һорайым.

Стражник. Фәсхи, ебәр ҡыҙҙы!

Фәсхи. Э һеҙ тик тороғоҙ!

Стражник. Как тик торорға? *(Фәсхигә йәбешә.)*

Кинйәбай. Ягылма уға, шаҡшы! *(Фәсхиҙе аралай.)*

Стражник. Э һиңә нәмә етмәй? Мә, бик кәрәкһә! *(Кинйәбайҙы йыға һуға.)*

Шағәли. Мин ҡыҙҙы бирмәйем, был бит көпә-көндөҙ талау! Тотоғоҙ!

Фәсхи. Талау түгел, Шағәли ҡарт, яратып ҡыҙ алыу.

Хәҙрәт. Ялған! Минең никах уҡығаным юҡ.

Фәсхи. Ә беҙгә никахтың кәрәге шул тиклем.

Хәҙрәт. Мосолмандар! Мосолмандар, ишеттегеҙме, бына икенсе көфөр! Әле ул Ғайса ҡәберенә тәре лә ултыртҡандыр.

Фәсхи. Ә һин Ғайсаға тел яҡма. Ул — ыласын ине, хаҡлыҡ өсөн ҡорбан булды, ә һин шул хаҡлыҡты изге һүҙҙәр менән буяп, халыҡтан йәшерәһең.

Хәҙрәт. Бәрәкалла, мосолмандар, ул нәмә һөйләй? Тфу, тфу.

Һандуғас. Эйе, беҙ Фәсхи менән ҡушылдыҡ инде!

Шағәли. Бына һиңә туй, йөҙ һум мәһәр... Таланылар! Ҡарауыл!..

Харис. Эх, ҡарға, ҡарға... Тамағың ярылғансы ҡарҡылда инде хәҙер, миңә һинең зимактан ҡалған һеңлең кәрәкмәй! Бар, уларҙың һаҫыҡ казармаһында туй итегеҙ. Киттек, хәҙрәт.

Вәли *(йүгереп керә)*. Харис ағай! Хәҙрәт бабай! Заһит әфәнденең хәле насар: быумаһы тота, буғай, урам буйынса һаташып йөрөй.

Хәҙрәт. Бәрәкалла.

Харис. Әйҙә, хәҙрәт, тиҙерәк булайыҡ!

Сығып китәләр.

Һандуғас *(өйҙән төйөнсөк алып сығып)*. Хуш, ҡәһәрле өй! Әйҙә, йәнем, киттек бынан. Миңә һинең йылы ҡуйының, иҫке барағың уларҙың ҡәһәрле өйөнән мең ҡат ҡәҙерлерәк.

Сығып китәләр. Башҡа эшселәр ҙә, уларҙы ҡәҙерләп, арттарынан эйәрә.

Шағәли. Уй, господин стражник, динға ла, дифка ла пропал! Грабили! Карауыл!

Стражник. Да, Шагалика, пропал, все пропал.

Шағәли. Дин юғалды, өмөт бөттө, ахыр заман етә, бына ул юғалтыу.

Заһит Мамаевтың килгәне күренә. Уның йөҙө ҡара янған, баш кейеме юҡ.

Заһит. Күмделәр... Бер зимагор өсөн ниндәй хөрмәт, ҡәҙер! Ә мин... миңә һаман көн юҡ. Прискылар

хужаһымы мин? Миллионермы мин?.. *(Шашып һыҡтай.)* Юҡ, минең даным бөтә, ҡулымда көсөм ҡалмай хәҙер. Эйе, эйе, зимагорҙар миңә үҙ ихтыярҙарын тағырға самалайҙар. Ниңә казактар килтерелмәгән? Ниңә атманылар уларға, Никифорыч!?

Никифорыч. Тыныслан, господин Мамаев, ҡайтығыҙ, ял итегеҙ.

Заһит. Ҡайҙа атлы казактар?

Никифорыч. Ә-ә-ә... Верх-Уралда ла восстание: бәйләнеш өҙөлгән, казактар саҡыртып булманы.

Заһит. Бәйләнеш өҙөлгән, бәйләнеш өҙөлгән... Ә беләһеңме һин, минең донъя менән, алтын приискыларым менән бәйләнешем өҙөлөп бара, уйҙарым буталдылар? Атырға, барыһын ҡырырға ул зимагорҙарҙың!.. Атырға-а-а!

Хәҙрәт. Бәрәкалла, Заһит бай, ул тиклем бөтөрөнмәгеҙ, насип булһа, барыһы яйланыр.

Заһит *(уға ныҡ теклəп)*. Кем һин?

Хәҙрәт. Юҡ, Заһит әфәнде, мин үҙ хәҙрәтең. Танымайһыңмы әллә, бәрәкалла.

Заһит Бер нәмә ишетмәйем, бер нәмә танымайым. *(Шашып көлə.)* Ха-ха-ха, бәрәкалла, бәрәкалла!..

Хәҙрәт. Бәрәкалла, бәрәкалла, нәмә эшләйбеҙ инде? Я хоҙа!..

Шаршау

Икенсе күренеш

Землянка. Кинйәбай йоҡлап ята, ул ауырыу. Тимак һаҡ ҡына килеп керə.

Тимак. Әһə, берəү ҙə юҡ, бик уңай ваҡыт! *(Кинйəбай янына барып.)* Ята, йоҡлай. Был ҡартҡа кисə ныҡ əлəккəн, ахыры, күтəрелə лə алмай. *(Шахтер һандыҡтарын ҡаранып.)* Ҡайһыһы əле бының Фəсхи һандығы? Әһə, бына. *(Кеҫəһенəн тоҡсай менəн алтын сығарып.)* Ниңə əле быны тотош һалырға, Фəсхиҙең башын Себер ебəреү өсөн яртыһы ла етə бит. *(Алтындың бер өлөшөн һандыҡҡа, икенсеһен үҙ кеҫəһенə һала.)* Булды. Алтын, алтын... Бына нəмə ул мине бəхетле итəсəк! Тик бында күп сыуалырға ярамай, һаҫый башланым: Харистан илле һумды элəктерергə лə тайырға кəрəк.

Вəли килеп инə.

Вәли. Нихәл?

Тимак. Эштәр — майлаган кеүек.

Вәли. Күрәм, майлаган кеүектер шул. Их, зимак...

Тимак. Ә нәмә булган?

Вәли. Мин белмәй тиһеңме әллә? Файсаны йыйыштырганда — бергә, алтынды үҙләштергәндә — башка икән...

Тимак. Ниндәй алтын?

Вәли. Уныһын кеҫәңдән һора.

Тимак. Ярар, шаулама, уртаҡ булыр.

Вәли. Шулай тиген.

Баййегет керә. Ул Тимак менән Вәлигә шикләнеп, оҙаҡ ҡарай.

Тимак. Нәмә һин күҙеңде аҡайттың?

Баййегет. Танырга итәм.

Тимак. Туй шартланымы әллә?

Баййегет. Туйҙы ҡуша яһарға һинең дә кәләш алганыңды көтәләр.

Тимак. Кем менән шаярганыңды белеп шаяр һин, малай!

Баййегет урынына барып ултыра ла гармун тарта башлай. Маруська, Һандуғас, Фәсхи килеп инәләр.

Тимак. Ана кейәү менән йәш килен дә ҡайттылар. Туй буламы?

Фәсхи. Берәү түгел, икәү!

Тимак. Ә һуң икенсе пар ҡайҙа?

Фәсхи. Хәҙер киләләр. Ә һин, Тимак, Ҡараһаҡалды күмгәндә ниңә юҡ инең?

Тимак. Мин белмәй ҡалдым, Фәсхи.

Фәсхи. Шулай инде: һин һәр ваҡыт белмәй ҡалаһың... Шулай уҡ мин Һандуғасты тартып алғанда ла килмәнең.

Кинйәбай. Ә миңә аҙыраҡ өлөш тейҙе стражниктан.

Тимак. Кинйәбай ағайҙың туҡмалыуы бер бөгөн түгел инде.

Кинйәбай. Эйе, мин ғүмер буйына туҡмалдым.

Фәсхи. Ә һин, Баййегет, ниңә бойоҡ ултыраһың?

Баййегет. Эсем боша. Кил әле, Фәсхи. *(Фәсхиҙе ситкәрәк алып китеп, Тимакка ымлап күрһәтеп.)* Бынау ҡоҙғон миңә оҡшамай. Вәли менән нәмәлер бышы-бышы һөйләнәләр. Ҡара, итәк-еңеңде йыйыбыраҡ йөрө, башыңды ослап ҡуймаһындар.

Фәсхи. Минеме? Төкөрәм мин уларга!

Б а й й е г е т. Ғайса ла шулай ти торғайны.

Ф ә с х и. Бошма, дуҫ, Ғайса үҙ эшен башлап үлде, ә беҙ уның эшен тамамларбыҙ. *(Икенсе бүлмәгә инеп китә.)*

Зәйни менән Г ө л ь я м а л инәләр.

Т и м а к. Ә Күдрәш менән йәш килен ҡайҙа?

З ә й н и. Килен йоҡоһонан тормаған ти әле.

Г ө л ь я м а л. Күдрәш хәҙер алып килә.

З ә й н и. Тимак, түҙә алмай, һинең тамағың ғолт-ғолт итеп кенә торалыр инде, ә?

Т и м а к. Ә һинең?

З ә й н и. Минеке лә.

Г ө л ь я м а л. Эй-й, араҡы мискәләре! *(Икенсе яҡҡа инеп китә.)*

Шул ишектән үк Ф ә с х и, М а р у с ь к а сығалар.

Ф ә с х и. Бар, Маруська, булмаһа, үҙең тиҙерәк алып кил.

М а р у с ь к а. Хәҙер.

Т и м а к. Әллә кейәү егете булдыңмы, Маруська? Ха-ха-ха...

М а р у с ь к а. Булырмын да шул, минең ҡай ерем кәм? *(Фәсхигә.)* Беҙ хәҙер килербеҙ. Ултыра башлағыҙ. *(Сыға.)*

Ф ә с х и *(эске бүлмә ишеген асып)*. Һандуғас, Гөльямал еңгә, әҙерләгеҙ.

Гөльямал, Һандуғас нәмәләр сығарып, өҫтәл әҙерләйҙәр.

Ултырыша башлағыҙ, егеттәр. Кинйәбай ағай, һин әсә алаһыңмы?

К и н й ә б а й. Туй хөрмәтенә эсәбеҙ инде уны.

Ф ә с х и *(Зәйнигә)*. Һала башла, Зәйни ағай.

З ә й н и. Миңә ҡушһағыҙ, булдырам да булдырам инде. *(Араҡы һала.)*

Башҡалар ултырышалар.

Г ө л ь я м а л *(сығып)*. Атаҡ-атаҡ, Күдрәштәрҙе көтмәйһегеҙме ни?

З ә й н и. Ҡуй әле, бисә, Күдрәштә һый ҡайғыһымы бөгөн. Ул кәләш ҡуйынында йоҡлауҙы уйлап ҡына йөрөй.

Бокал күтәрәләр.

Тот, Фәсхи. Йәгеҙ, тартып алған ҡыҙ туйын сәкәшеп башлайыҡ әле!

Зәйни тәҡмәҡ башлай, барыһы ла уға ҡушылалар.

Барыһы. Һай, егете, егете лә —
Таҙа алтын үҙәге,
Ҡуш яурын сал бөркөттәй,
Янып тора күҙҙәре!
Ә ҡыҙы һуң, ҡыҙы һуң —
Күҙ өҫтөндә ҡаш ҡына,
Һайрар ҡоштар хайран ҡала
Уның моңло тауышына.
Берәй йырлап ебәр, һылыу,
Туй үтһен күңеллерәк,
Шахтер өсөн бындай шат көн
Килә бит ул бик һирәк...

Һандуғас, уларҙың һүҙен йығмай, йырлай.

Һандуғас. Толомдарым билемә етһәләр ҙә,
Аҡыҡ тағып, ярып үрмәнем.
Ҡыҙ балаҡай булып буй етһәм дә,
Донъяла бер рәхәт күрмәнем.
Тартып алды мине ул упҡындан
Йән һөйгәнем — егет аҫылы,
Бәхет уты менән йылындырҙы
Көслө күкрәгенең ялҡыны.
Инде беҙҙе бер кем айыра алмаҫ,
Барыһын, барыһын бергә татырбыҙ,
Ҡулға ҡул тотошоп, юлдар ярып,
Алтын бәхет тауына ашырбыҙ!..

Торлосә хуплау тауыштары. Күдрәш менән Маруська керә. Егет бик бойоҡ.

Фәсхи. Бәй, ҡайҙа Фәрхиямал?

Күдрәш. Их, һорамасы, Фәсхи дуҫ, юҡ инде ул: Фәрхиямал ағыу эсеп үлгән!

Барыһы. Аһ, ағыу эсеп үлгән!?

Күдрәш. Эйе. Ул бары: «Минең намыҫымды Заһит бай урланы. Минең йөрәгем саф, таҙа. Хуш, Күдрәшем. Мин һине генә һөйҙөм», — тип әйтеп ҡала ғына алды... Ниндәй хурлыҡ, ниндәй бәхетһеҙлек, дуҫтар! Мин бәхет эҙләнем, төндәрен тороп, хоҙайҙан теләнем. Ә бәхет тигәнем иҫ киткес яуызлыҡ, бысраҡлыҡ булып сыҡты. Эх, юҡтырһың һин, алла! Әгәр булһаң, кешеләрҙе был тик-

лем кәмһетеп, алтын-көмөшкә табындырып, уларҙың бәхетен ҡан менән аралаштырып ағыуламаҫ инең!..

Ҡурай. Ишек төбөндә Ф ё д о р күренә.

Т и м а к *(Вәлигә, экрен)*. Йүгер, Харис ағайға хәбәрҙе тиш.

В ә л и. Остом! *(Сығып китә.)*

Ф ё д о р *(аптырап)*. Нәмә был: туймы әллә ҡайғымы?

К и н й ә б а й. Шахтёр меҫкендең шатлығы ла, ҡайғыһы ла бергә йөрөй инде: Фәрхиямал ағыуланып үлгән.

К ү д р ә ш. Ҡайҙа хаҡлыҡ?!

Ф ё д о р. Эйе, ауыр ҡайғы, Күдрәш ҡустым.

К ү д р ә ш. Ауыр шул, ағай, ауыр!

Ф ё д о р. Ләкин, ир бул, үҙеңде юғалтма. Ә мин һеҙгә ҡыуаныслы хәбәр алып килгәйнем.

Ф ә с х и. Ҡыуаныслы хәбәр?

Ф ё д о р. Эйе. Иптәштәр, беләһегеҙме, Петроград, Мәскәү эшселәре тотош восстание башлағандар. Хәҙер был хәрәкәт бөтә Россияға йәйелә.

К и н й ә б а й. Сталбыт, тиҙҙән батшаға капут?

Ф ә с х и. Эйе, Кинйәбай ағай, батшаға ғына түгел, ҡан эскес миллионер Мамаевтарға, барлыҡ буржуйҙарға капут буласаҡ!

М а р у с ь к а. Ишетәһеңме, Күдрәш, бына ҡасан ысын хаҡлыҡ, ысын бәхет табыласаҡ?

К ү д р ә ш. Эйе, апай, мин төшөнә башланым инде: хаҡлы булған Ҡараһаҡал — Гайса ағай: бәхетте һуғышып алырға кәрәк икән.

Ф ё д о р. Дөрөҫ, ҡустым! Иптәштәр, инде беҙгә лә ҡыйыуыраҡ хәрәкәт итергә ваҡыт. Пролетариаттың бөйөк юлбашсыһы Владимир Ильич Ленин беҙҙе, эшселәр синыфын, «Бөтһөн һуғыш!», «Долой самодержавие!», «Йәшәһен азатлыҡ!» — тигән лозунг аҫтында берҙәм көрәшкә күтәрелергә саҡыра.

Б а р ы һ ы. Бөтһөн һуғыш! Йәшәһен азатлыҡ!..

М а р у с ь к а *(ишеккә ҡолаҡ һалып)*. Экрен, иптәштәр, ҡоҙғондар еҫ тойҙолар, ахыры, һағыраҡ булайыҡ.

Федорҙы күрше бүлмәгә ҡасыралар. Н и к и ф о р ы ч, Х а р и с, и к е с т р а ж н и к килеп керә.

Н и к и ф о р ы ч. Урындарығыҙҙан ҡуҙғалмағыҙ!

Ф ә с х и. Ул ниндәй приказ? Ни булған?

Н и к и ф о р ы ч. Ашыҡмағыҙ, хәҙер айышын төшөндөрөрмөн!

Х а р и с. Бына һеҙ нисек икән!

К ү д р э ш *(уға ҡаршы барып).* Эйе, беҙ шулай, э һеҙ нисек? Ҡайҙа мин тапҡан алтын? Ҡайҙа минең Фәрхиямалым? Яуап бир, Заһит бай ялсыһы?! *(Яғаһынан бороп ала.)*

Х а р и с. Ах, ярҙам!

Полицейский, стражниктар Күдрәште айырып алалар.

Алтын урлағандары етмәгән, инде кеше быуырға йәбештегеҙме, ҡараҡтар?!

Ф ә с х и. Кем ҡараҡ?

Х а р и с. Бына һин!

Ф ә с х и. Минме ҡараҡ? *(Ыжғырып килә.)*

Н и к и ф о р ы ч. Заһит байҙың алтын кассаһы таланған, һин шунда ғәйепләнәһең. Унан башҡа ла ғәйептәрең бар... *(Башҡаларға.)* Ә һеҙ ҡуҙғалмағыҙ!

Һ а н д у ғ а с. Ах, Фәсхи йәнем! *(Илай.)*

Ф ә с х и. Ялған был! Тентегеҙ.

Н и к и ф о р ы ч. Тентергә!

Тентеү башлана. Бер кескәй һандыҡ һөйрәп сығаралар. Ул бикле.

Кем һандығы был?

Ф ә с х и. Минеке.

Н и к и ф о р ы ч. Ас!

Фәсхи һандығын аса. Барыһы ла борсолоп көтәләр. Ләкин ул тыныс. Никифорыч бәләкәй тоҡсай менән алтын сығара.

Н и к и ф о р ы ч. Ә был нәмә?

Ф ә с х и. Алтын.

Н и к и ф о р ы ч. Ҡайҙан алдың?

Ф ә с х и. Әллә, белмәйем. Минең бер ҡайҙан алтын алғаным юҡ.

Х а р и с. Күрәһең, үҙе аяҡланып килеп кергәндер... Беҙҙең касса алтыны. Бына келәймәһе: «Мамаевтар алтын приискыһы». Тик бында бөтәһе лә түгел... *(Тимакка күрһәтеп.)* Тентегеҙ шуны!

Т и м а к. Ҡағылмағыҙ! Алтынды һин үҙең бирҙең миңә, Фәсхи һандығына һалырға ҡуштың.

Х а р и с. Алдай, жулик!

Т и м а к. Ә-һә, хәҙер мине лә юлыңдан алып ташларға итәһеңме? Юҡ, буйың етмәҫ!

Х а р и с. Алырға!

Т и м а к. Ҡағылмағыҙ!

Бысаҡ менән үҙенә юл ярып, тышҡа ташлана. Ишектән сығып киткәс, стражник уны артынан атып үлтерә. В ә л и кереп, Харистың ҡолағына: «Мин һеҙҙе эҙләнем, ағай», — тип бышылдай.

М а р у с ь к а. Их, әҙәм аҡтыҡтары, нисек халыҡтан оялмайһығыҙ һеҙ?! Минең ирем Ғайсаны үлтергәнегеҙ етмәгән, хәҙер, подлог яһап, ғәйепһеҙ кешенең башын ашарға итәһегеҙме? Барып сыҡмаҫ!

Н и к и ф о р ы ч. Ә һин теленде тый! *(Фәсхиҙән ҡул һелтәп.)* Бында батшалыҡтың һәм ватандың яуыз дошманы Ҡунаҡ ҡушаматлы Фёдор ҡасҡан. Тентеүҙе дауам итегеҙ!

В ә л и *(Фәғилә бүлмәһен күрһәтеп).* Бында ул, господин полицейский, бер ҡайҙа китмәгәндер.

Н и к и ф о р ы ч *(Фәғилә бүлмәһен асып, шаҡ ҡатып ҡала).* Ҡасҡан! Тәҙрәнән сығып ҡасҡан!.. Ну, киттек, ә һеҙҙең менән аҙаҡ иҫәпләшермен әле мин! *(Шахтерҙарға йоҙроҡ күрһәтә.)* Тоторға! Артынан ҡыуғын төшөрөргә!..

Никифорыч, Харис, Вәли, стражниктар йүгерешеп сығып китәләр.

Ф ә с х и. Тотоп ҡуймаһындар ине, егеттәр, әйҙәгеҙ, ҡамасаулайыҡ.

М а р у с ь к а. Борсолмағыҙ, ул яңғыҙ түгел ине, тышта иптәштәре һаҡлап торҙолар, әләкмәҫ. Бына ул һеҙгә Владимир Ильич Ленин һүҙҙәрен тапшырып ҡалдырҙы. *(Күйынынан «Правда» газетаһы, листовкалар сығара.)*

Барыһы йыйылып, ентекләп ҡарайҙар.

Ф ә с х и. «Правда»! Беҙҙең землянкаға ла яҡтылыҡ килеп етте, туғандар!

М а р у с ь к а. Эйе, был яҡтылыҡ мәңге һүнмәҫ, халыҡты ҡараңғылыҡта, бәлғәнләктә тотоп, изеп килеүсе байҙарҙы, капиталистарҙы яндырып үлтерер.

К и н й ә б а й. Бына беҙгә ысын бәхет ҡасан тыуасаҡ!

К ү д р ә ш. Их, ул бәхетте Ғайса ағай, минең Фәрхиямалым ғына күрә алмай инде...

Йүгереп Фәғилә ҡарсыҡ инә.

Ф ә ғ и л ә. Балалар, балалар, ҙур бәхетһеҙлек: Заһит бай шашып, шахтаға ҡолап төшөп үлгән!..

Ф ә с х и. Юҡ, Фәғилә ҡарсыҡ, был бәхетһеҙлек түгел, ә ҙур бәхеттең башланыуы ғына!

Шаршау

Баязит Бикбай

(1909—1968)

Баязит Ғаяз улы Бикбаев Башҡортостандың Күмертау районы Ҡалта ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуа. 1921—1922 йылдарҙа Ташлы профессиональ-техник мәктәбендә уҡый. 1923—1928 йылдарҙа Ырымбурҙағы Башҡорт педтехникумында уҡый. 1929 йылда Өфө педтехникумын тамамлай.

1930—1931 йылдарҙа Туймазы районы газетаһының яуаплы секретары, 1931—1935 йылдарҙа «Башҡортостан» газетаһында бүлек мөдире, «Октябрь» (хәҙерге «Аҡиҙел») журналының яуаплы секретары, Башҡорт дәүләт академия театрының әҙәбиәт бүлеге мөдире вазифаларын үтәй. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһы председателе булып эшләй.

1932 йылда «Үтеп барған көндәр» тигән тәүге китабы сыға. Баязит Бикбай ҡырҡҡа яҡын шиғыр, поэма, очерк, хикәйә, повесть, роман, либретто, пьесалар китаптары авторы. Художестволы тәржемә өлкәһендә лә актив эшләне.

1937 йылдан алып ул драма жанрына ҙур өлөш индерҙе. «Ҡарлуғас», «Салауат», «Ҡаһым түрә» — Башҡорт дәүләт академия театрында, уның либреттоларына яҙылған «Азат» (Р. Мортазин музыкаһы), «Замандаштар» (Х. Әхмәтов музыкаһы), «Салауат Юлаев» опералары, «Шәүрә» трагедияһы һәм «Ҡоҙаса» музыкаль комедиялары (Заһир Исмәғилев музыкаһы) Башҡорт опера һәм балет театрында ҙур уңыш менән ҡуйылалар.

Ул «Почет Билдәһе» һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән наградланған. 1957 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була.

1970 йылда үҙе үлгәндән һуң «Һайланма әҫәрҙәр»енең I томы өсөн уға Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы бирелде.

ҠАҺЫМ ТҮРӘ

Пьеса

4 шаршауҙа

Ҡатнашалар

Ҡаһым түрә — атлы полк командиры, полковник.
Сафия — уның ҡатыны.
Семенов — корпус командиры, генерал.
Аҡназар — Ҡаһымдың ярҙамсыһы.
Ҡобора — уның ҡатыны.
Әүбәкер — уларҙың улдары.
Байыҡ — сотник, сәсән.
Аҫылбикә — мәргән ҡыҙ.
Садыҡай, Аҡйегет, Бикәт, Ҡолтүбә — сотниктар.
Фольгнер — штаб начальниғы, майор.
Ядкәр — Ҡаһымдың ординарецы.
Егор — гусар.
Иван, Архип — крәҫтиәндәр.
Ғөлнур — ҡыҙыҡай.
Сабырғол — ауыл кешеһе.
Мәрҙән — ауыл кешеһе, бай.
Иркәбай — рядовой.
Капрал — француз.
Гренадер — ҡарт француз.
Һалдаттар, крәҫтиәндәр, адъютанттар.

Ваҡиға 1812—1813 йылдарҙа бара.

Лагерь. Иртәнсәк. Ҡалҡыулыҡта Ҡаһым сатыры. Август аҙаҡтары. Түбәндә, һыу буйында, һалдаттар йыуыналар. Аш әҙерләйҙәр. Ядкәр ҡаҙы турай, ҡорот ҡуя, тирһыҡтан ҙур ике туҫтаҡҡа ҡымыҙ һала. Ситтәрәк, һыу кереүселәр араһында, тауыштар: «Әй, әй, сылғауың аға бит!» «Аҡһа ни, яңыһы бөтмәгән...» «Ҡобора еңгә, ҡазаның таша!» «Уй, ҡороғоро!» Ядкәр, туҫтаҡҡа һалып, Егорға ҡымыҙ тоттора.

Егор *(ҡымыҙ эсеп).* Эх!..

Ядкәр. Инде етеш.

Егор. Колбаса что ли?

Ядкәр. Эйе, колбаса, ә беҙҙеңсә — ҡаҙы.

Егор. Мин бит, Ядкәр, ат ите ашамай.

Ядкәр. Бына хәбәр! Кем дуҫ һыйлауынан баш тарта?

Егор. И-га-га бит, лошадка.

Ядкәр. Ха-ха-ха... Булһа һуң? Мин бит, һине яҡын күргәнлектән, ҡайсаҡ махоркаңды ла бик шәп төтәтәм. Әйҙә, ашауыңды бел, аш айырма.

Егор. Давай, улай булғас.

Тәмләп ашарға керешәләр. Ҡалҡыулыҡта, сатыр эргәһендәрәк, Фольгнер менән Ҡолтубә күренә. Улар ҡыҙып-ҡыҙып нимәлер һөйләшәләр, ләкин һүҙҙәре ишетелмәй. Тик, сатырҙы ҡарап киреп киткән саҡта, Фольгнерҙың ҡысҡырып әйткән асыулы һүҙе генә ишетелә: «Дер шварц Тейфель!» Ядкәр менән Егор ҡашыл боролоп ҡарайҙар.

Ядкәр. Нәмә ти ул?

Егор. Әллә, һүгенә, буғай... Ҡара шайтан тигәндәй булды.

Ядкәр. Барҙыр инде, аңламаҫһың уны...

Егор. Беҙҙә лә күп ундай пруссактар. Юҡтан-барҙан ғәйеп таба һинән, әрләй, таяҡ һуҡтыра. Уларға беҙҙең брат нәмә лә, Россияң нәмә, — ҡаҙалһындар, тик чиндары артһын үҙҙәренең, байыһындар...

Ядкәр. Хранцуздан да ямандар!

Егор. Хранцуз түгел, Ядкәр, фран-цуз.

Ядкәр. Ярар, француз булһын... Улар, француздар, әле асыҡ һуғышта ҡаршы килә, таныу ҡыйын түгел, ә был килмешәктәр арабыҙҙа йөрөп донъя бутай!

Егор. Ну, Кутузов уларҙы бик буйлатмай.

Ядкәр. Кутузов бит — Кутузов ул, беҙҙең олатай! *(Таҡмаҡлай.)*

Кутуз — ҡашҡа ир бит ул,
Киң Рәсәйҙә бер бит ул,
Дошманды ҡуйҙай айҡаған,

Телдән телгә маҡталған,
Ҡуш йөрәкле ир бит ул!

Улар яныңа б а ш ҡ а л а р ҙ а йыйыла башлайҙар.

Е г о р. Дөрөҫ! Теге ваҡыт, Бородино һуғышы алдынан, ошондай бер хәл булып алды: йоҡлап булмай ҙа булмай, шабаш. Төнө буйы йөрөп сыҡтым. Таң беленә башланы. Бер заман, ҡараһам, генералдарын эйәртеп, эргәмә генә был... фельдмаршал үҙе килеп сыҡты.

Я д к ә р. Кит бынан!

Й ә ш һ а л д а т. Шыттыра ул, ышанма...

Е г о р. Икмәктер бына, ысын!

Я д к ә р. Шунан, шунан?

Е г о р. Мин ни баҫҡан урынымда ҡаттым да ҡалдым. «Нәмә, балаҡайым, йоҡлап булмаймы?» — ти теге. Ә мин ыҡ-мыҡ, бер һүҙ әйтә алмайым, вышвыс, вашси..., тел әйләнмәй. Теге яҡын уҡ килде. «Шулай инде, балаҡай, һуғыш алдынан йоҡо алмай ул», — ти. Шунан хәйләкәр генә йылмайып алды ла: «Әйт әле, балаҡайым, һин ҡайһылай уйлайһың, французды еңербеҙме?» — тип һорай. Еңербеҙ, ваше сиятельство, мин әйтәм.

Й ә ш һ а л д а т. Ә ул һуң, ә ул?

Е г о р. «Ай-һай, маһаймайһыңмы, балам?» — ти. Мин: никак нет, ваше сиятельство, маһаймайым. «Ә беләһеңме? — ти ул, — Наполеон беҙҙән айыуҙар, сабаталы мужиктар тип көлә икән...» Башта көлгән — аҙаҡ бөлгән, мин әйтәм.

Я д к ә р. Дөрөҫ! Көлгәнгә көлә етә, артынан һөрә етә.

Е г о р. Мин әйтәм, ваше сиятельство, һин ҡайыш менән йүкә нисек бәхәсләшкәнде беләһеңме? «Юҡ, — ти теге, — йә әле һөйләп бир». Батырайып киттем, һөйләй башланым. Ул былай булған, мин әйтәм: бер ваҡыт йүкә менән ҡайыш бәхәсләшкән: мин ныҡ та, мин көслө! Әйҙә тартышып ҡарайыҡ! Йүкә риза булмай башта. Ә ҡайыш бының ай-вайына ҡуймай, өҫтөнә менеп бара. Ну, нишләмәк кәрәк, йүкә лә сәмләнгән, көс һынашып ҡарарға булған. Тартыша башлағандар былар. Йүкә шытыр-шытыр килә.

Я д к ә р. Өҙөлөп китмәгәнме?

Е г о р. Көтөп тор, тиҙ генә өҙөрһөң! Тартышҡандар, тартышҡандар... Шунан, йүкә әйтә, ти: минең тамаҡ кибеп китте, аҙ ғына һыу эсеп алайым әле. Эс, ти быға ҡайыш. Йүкә, һыуға сумып, бер аҙ ятып алған.

Я д к ә р. Әһә! Бына хәйләкәр!..

Е г о р. Шунан һуң былар йәнә тартыша башлағандар. Йүкә ни хәҙер бүртеп, бешеләнеп киткән, шытырлау

ҡайҙа!.. Әй тырышалар былар, әй тырышалар. Бер заман, ҡараһаң, ҡайыш шарт өҙөлгән! Бына шулай ҙа була ул, мин әйтәм, ваше сиятельство!

Б а р ы һ ы. Ха-ха-ха.

Е г о р. Ул да шарҡылдап көлдө шул. «Бына һиңә сабата, бына йүкә, — ти. — Дөрөҫ, балаҡайым һалдат, беҙ ҙә, һыуға бешенгән йүкә һымаҡ, халҡыбыҙҙан кәс алып, сыныҡтыҡ инде. Бөтә Россиябыҙ аяҡҡа баҫты. Хәҙер еңелеү юҡ ул!» — ти.

Я д к ә р. Шәп әйткән!

Е г о р. Шунан, олатайыбыҙҙың күҙенән йәш килде, бахыр. Мине ҡосаҡлап үпте.

Й ә ш һ а л д а т *(ышанмай).* Үпте?!

Я д к ә р. Бына бит ул ниндәй үҙ итә!

Е г о р. Шунан һуң ул кеҫәһенән бер һумлыҡ аҡса сығарып миңә бирҙе: «Мә, балаҡайым, минең һаулыҡҡа эсерһең», — ти. Бына ул! *(Кеҫәһенән аҡса алып, сөйөп күрһәтә.)* Эсә буламмы һуң мин? Балаларымдың балаларына память итеп ҡалдырасаҡмын был аҡсаны.

Я д к ә р. Әтү! Медаль урынына һаҡла.

Е г о р. А как же?

Я д к ә р. Бына мин дә дошмандан бер мылтыҡ төшөрҙөм әле, француз яуы ҡомартҡыһы итеп һаҡлаясаҡмын. Шәп нәмә бит?

Е г о р. Ну-ка, күрһәт әле.

Мылтыҡты ентекләп ҡарайҙар.

Я д к ә р *(шәпләнеп).* Бынауында дары менән друбтар һалаһың, булды бит, ә бында саҡма таш, шунан...

Е г о р. Әй, әй, һағыраҡ ҡылан, ул һиңә ҡурай түгел.

Я д к ә р. Бүстәк, мин уның рәтен беләм инде. Шунан, бынау еренән...

Ҡапыл мылтыҡ атылып китә. Йүгереп А ҡ н а з а р, Б и к ә т, А ҡ й е г е т килеп етәләр.

А ҡ н а з а р. Кем атты? Нәмә булды?

Й ә ш һ а л д а т. Былай ғына... яңылыш... Бына Ядкәр ағай...

А ҡ н а з а р. Их Ядкәр, уны һин уҡ-һаҙаҡ тип белдеңме әллә?

Я д к ә р. Мин ни бына Ягур дуҫҡа күрһәтәм тигән генә инем...

А ҡ н а з а р. Мылтыҡ һинең эшең түгел, мырҙа.

Е г о р. Ну, Ядкарка брат, хуш, мин киттем. *(Сыға.)*

Аҡназар. Егеттәр, аттарығыҙҙы һуғарығыҙ!

Егеттәр таралышалар. Ядкәр бер ситкәрәк барып ултырып, ҡурай уйнарға керешә. Әкрен-әкрен көй үҙенә тарта, ҡайһы берәүҙәр йырлай башлайҙар.

Яҡшы ла атын менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡ та тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын!..

Аҡйегет *(ныҡ тулҡынланып)*. Эх, булған да ирҙәр!..

Аҡназар. Әйтерең бармы!..
Борон халыҡ булған арыҫлан:
Яуҙа ҡарамаған алдын, артын,
Аҡтыҡ ҡан ҡалғансы, алышҡан!..

Аҡйегет. Ә беҙ ҙә бит, ҡулға ҡылыс алып,
Йөрәкһенеп атҡа менгәйнек,
«Француз яуын сыр-сыу ҡырып һалып,
Шат ҡайтырбыҙ илгә!» — тигәйнек...

Нәмә ҡырҙыҡ?

Аҡназар. Мырҙам, өмөт өҙмә, танытырбыҙ әле!..

Аҫылбикә *(мыҫҡыллы)*. Килмәй ышанғы...
Әгәр ир булһағыҙ, тыуған ергә
Баҫтырмаҫ инегеҙ дошманды!
Бөгөн Мәскәү ана дөрләп яна,
Халыҡ намыҫынан көләләр...
Ишетеү ауыр ыны! Йәне барҙа
Ирҙәрме ни шуға түҙгәндәр?!
Юҡ!

Аҡназар. Аҫылбикә, ипләп!

Аҫылбикә. Ха-ха, ауыр, ахыры, хаҡ һүҙ тыңлауы?!.
Әйтеп бөтәм, ағай, ҡаршы килмә,
Һеҙҙә намыҫ, ирлек юғалды!
Ир түгел һеҙ, бары — иргәнәктәр,
Һаҡал-мыйыҡ аҫҡан ҡатындар,
Яу сапҡанда ундайҙар кәрәкмәй,
Ботон һуҙып өйҙә ятһындар!

Аҡйегет. Етер һиңә!

Бикәт. Ҡуй, Аҡйегет, тик тор.
Аҫылбикә, һөйләп бөттөңмө?

Аҫылбикә. Бөттөм, Бикәт.

Бикәт. Эх, һүҙҙәрең матур.
Әллә бытбылдыҡтан оттоңмо?

Аҡйегет. Әй, һин уйынсыға борма һүҙҙе.
Бикәт. Ҡаһым тирә эште белеп йөрөтә.
Көнө килер әле, күрһәтер...
Аҡйегет. Бер белгән кешегеҙ — Ҡаһым, Ҡаһым...
Әллә шунан башҡа ир юҡмы?
Аптырайым, күпме күтәрербеҙ тағын
Башҡа төшкән ошо хурлыҡты?..
Бикәт. Әй, самалап! Ҡаһымға тел яҡма,
Ундай дыуамаллыҡ ярамаҫ:
Тотош фронт тынып торған саҡта,
Яңғыҙ батыр бер ни ҡыра алмаҫ...
Аҡйегет. Ҡурҡаҡ бүрене гел һугалар ул.
Ҡурҡағыраҡ беҙҙең Ҡаһым да...
Бикәт. Нәмә?
Аҡйегет *(уны ишетмәй)*.
Яңғыҙ үҙе генә хур булмай ул,
Беҙҙе лә оятҡа ҡалдыра!
Бикәт. Ә шулаймы!? Түрәне хурлайһыңмы?

Ҡылысын алып, Аҡйегеткә ташлана. Икәү ҡара-ҡаршы һуғыша башлайҙар.

Аҡназар. Болашмағыҙ, әтәстәр!

Уларҙың араларына инеп: икеһен ике яҡҡа сәйеп ебәрә. Аҡйегет менән Бикәт ярһып, ни эшләргә белмәй, үҙҙәрен үҙҙәре йолҡҡолайҙар. Аҫылбикә ҡысҡырып көлә.

Аҡназар. Муйыныгыҙҙы өҙә сабыр инем,
Батырлыҡ хаҡына ҡалдырам,
Ишетегеҙ уны, бындай ҡылыҡ
Ҡабатланыр булһа яңынан,
Аяп тормам!
Бикәт. Бөттө, командир!
Аҡйегет *(ауыҙ эсенән ризаһыҙ)*. Ярай...

Сәхнә артында шау-шыу.

Аҡназар. Унда ниндәй тауыш? Әйҙәгеҙ!

Аҡназар, Бикәт, Ядкәр һәм башҡалар сығып китәләр. Сығырға ынтылған Аҫылбикәне Аҡйегет беләгенән тотоп алып ҡала.

Аҫылбикә. Тотма мине!
Аҡйегет. Туҡта, бер генә һүҙ...
Бик эс боша. Тик ятып еләтте.
Тамағыма бармай ҡапҡаным...
Исмаһам, һин йылытсы йөрәкте,
Ҡанат булсы миңә, аппағым!

А ç ы л б и к ә. Тағы нәмә?
А ҡ й е г е т. Мине һөйә инең түгелме һуң элек?
А ç ы л б и к ә. Мин, йәш ҡыҙыҡай, иҫәр булғанмын.
А ҡ й е г е т. Ә хәҙер?

Аҫылбикә өндәшмәй.

Әллә һыуындыңмы минән хәҙер,
Мин юҡмы әллә һиңә доньяла?
Нәмә менән ҡалдырҙым һуң хәтер?
Ниндәй гөнаһ өсөн был яза?
Әллә ишеттеңме ауыр һүҙҙәр,
Әллә яттар күңелең ауланы?..
Ниңә һалҡын ҡараш, йәнһеҙ күҙҙәр?..
Ҡыйын миңә һине аңлауы!

А ç ы л б и к ә. Илгә ауыр көндәр килгән саҡта,
Башҡорт ҡыҙы борон заманда,
Ҡулына ҡорал алып, меңгән атҡа,
Ирҙәрҙән бер тотам ҡалмаған.
Мин — яу ҡыҙы!

А ҡ й е г е т. Яу ҡыҙына һөйөү яҙыҡ түгел,
Ул матурлыҡ бирә тағы ла.

А ç ы л б и к ә. Уныһын беләм!

А ҡ й е г е т. Риза булһаң, һине бөгөндән үк
Мин әҙермен үҙемә алырға...

Кереп килгән Ҡ о л т ү б ә, уларҙың һүҙен ишетеп, туҡтап ҡала.

А ç ы л б и к ә *(көлә)*. Кит, дыуамал!
Мин, һиңә барғансы,
Бер батырҙың толо булырмын,
Исмаһам, хурланмай, бер ҡанғансы
Рәхәт илармын да тынырмын!..

Сығып китә. Был һүҙҙәр Ақйегеткә йәшен һуҡҡандай тәьҫир итә.

А ҡ й е г е т. О-о... Күрмәйем бер ни! Күҙҙәр, күҙҙәр...
Аяҡ баҫҡан ерем убыла...
Дошман ҡылысынан үткер һүҙҙәр
Йөрәк иттәремә уйыла!
Ниңә мине һаҡлап килде яҙмыш?
Ниңә яу ҡырында үлмәнем?..
Әсәм, байғош, тапҡанһыңдыр яңылыш,
Ҡабул булмағандыр теләгең!..

Ҡ о л т ү б ә, ҡуләгә һымаҡ, шыпырт ҡына керә.

Ҡ о л т ү б ә. Их Ақйегет мырҙа...
Ни йөҙ менән

Күренерһең кеше йөҙөнә?..
Ҡыҙың һинән бөтөнләйгә биҙгән,
Ә ышанмай инең һүҙемә.
Бына уны береһе тартып алыр,
Ә һин ауыҙ асып ҡалырһың!

А ҡ й е г е т. А-а... был һүҙҙәрҙә, ахыры, хаҡлыҡ барҙыр...

К о л т ү б ә. Эйе, эйе! Ә һин борсолма...

А ҡ й е г е т. Борсолмаҫҡа?

К о л т ү б ә. Мин үҙем бер яйын табырмын!.. Әйҙә ситкә, яйлап һөйләшәйек.

А ҡ й е г е т. Әйҙә!

Сығып китәләр. Байтаҡ ваҡыт сәхнә буш. Тышта шау-шыу килгән тауыштар яҡынлаша. А ҡ н а з а р, Б и к ә т, Я д ҡ ә р, С а д ы ҡ а й, Ҡ о б о р а һәм һ а л д а т т а р керәләр. Араларында пленный и к е ф р а н ц у з һ а л д а т ы бар.

А ҡ н а з а р. Ҡайһылай ҡулға ҡапты һуң был пардондар?

С а д ы ҡ а й. Бик аңһат. Мәскәү юлына сығып, тирәк араһында, аңдып торабыҙ. Шылт иткән тауыш юҡ. Бер заман, ҡараһаҡ, юлдан алты ылау килә. Ә был «пардондар» бишәү ине. Улар беҙгә килеп тапҡырлашҡас ҡына, ҡапыл атылып сыҡтыҡ! Атышалар. Өсәүһен шунда уҡ өҙә саптыҡ, был икәүһе ҡулын күтәрҙе...

А ҡ н а з а р. Молодец! Шәп булған! Мәскәүгә бер йөк иген уҙғарырға ярамай, әйҙә, Наполеон асҡа ҡаҙалһын!

Я д ҡ ә р. Шунан, Садыҡай ағай, шунан?

С а д ы ҡ а й. Барыһын кире бороп алып ҡайттыҡ. Был «пардондар» юл буйы әллә нәмә тәтелдәп бөттөләр. Аңлап булмай.

Я д ҡ ә р. Пустяк, шулар телен аңламаныңмы? Бына хәҙер, күреп тор, үҙем шатырлатып һөйләшәм!

С а д ы ҡ а й. Әллә беләһеңме? Вәт, әй.

Я д ҡ ә р. Белмәҫкә ни! Аҙыраҡ ауыҙҙы ҡыйшайтыбыраҡ һөйләнең — уларса була ла ҡуя ул. *(Барыһы ла көлә.)*

С а д ы ҡ а й. Вәт, әй, бигерәк аңһат икән!.. Улай булғас, әйт һин берәр һүҙ, әйт.

Я д ҡ ә р. Хәҙер. Әй, пардон, парле-марле?

Французҙар аңламай, бер-береһенә ҡарашалар.

Мине беләһеңме?

Тағы тыплыҡ.

Мин... Мин — башҡортмон, Уралдан.

К а п р а л. А-а... башҡорт, Урал, Урал...

С а д ы ҡ а й. Аңланы бит, вәт, әй!

К а п р а л. Аму дью Нор... Аму дью Нор!

С а д ы ҡ а й. Нәмә ти ул, нәмә ти?

Я д к ә р. Төньяҡ Амуры, ти.

С а д ы ҡ а й. Уныһы нәмә тигән һүҙ була тағы?

Я д к ә р. Улар башҡорттарҙы Төньяҡ Амуры тип атайҙар. Уларҙа Амур тигән әкиәт батыры бар, мәргән. Беҙҙең Кәртәй мәргән һымағыраҡ инде... Башҡорттарҙы ла, мәргән уҡсы булған өсөн, улар Амурҙар тип атаған.

С а д ы ҡ а й. Ә-һә, бына нәмә икән ул Амур! Вәт, әй. Тағы һөйләш әле, Ядкәр, тағы һөйләш, ҡыҙыҡ бит.

Я д к ә р. Мин уларға команда бирәйем әле: ан аван! *(Пленныйҙар алға атлайҙар.)* Алға атланылар, күрҙеңме? Бына хәҙер улар артҡа китәләр. Ан арръер! *(Пленныйҙар кире боролалар. Ул ошо команданы бер нисә тапҡыр ҡабатлай.)* Ха-ха, күрҙегеҙме?!

Ҡ о б о р а *(ҡырҡа)*. Ҡуй, ҡатырма шуларҙың баштарын! Күрмәйһеңме, асҡа интегеп, ҡаҡ һөйәккә ҡалғандар. Исмаһам, тамаҡ ялғатайыҡ үҙҙәрен. Килегеҙ, балаҡайҙар.

Пленныйҙар бер нәмә аңламай, тик торалар. Ҡобора уларҙы етәкләп ситкә алып китә башлай.

Ашарға, ашарға...

Я д к ә р. Ҡобора апай, рәхим ит тиген: силь ву пле, силь ву пле.

К а п р а л. Мерси! *(Иптәшенә.)* Был башҡорттар ярайһы ғына егеттәр икән апароль доннёр!

Ҡ о б о р а уларҙы алып сығып китә. Б а ш ҡ а л а р таралышалар. Сәхнәлә Аҫылбикә генә ҡала. Ул уйланып тора ла тын ғына йырлай башлай.

А ҫ ы л б и к ә. Һарыла ғына сәскә ал булмаҫ,
Бал ҡорттары ҡунып бал йыймаҫ,
Ҡайҙа ла һайрай һары һандуғас?
Һыу буйҡайында, таң тыуғас.
Күбәләктәй күңелем бер ҡуҙғалғас,
Ҡушылмай ҙа тороп ял булмаҫ.
Ҡайҙа ла һайрай һары һандуғас?
Һыу буйҡайҙарында, таң тыуғас...

Сотник К о л т ү б ә керә.

Ҡ о л т ү б ә. О, матур ҡыҙ, ниңә моңланаһың,
Әллә әсең иҫеңә төштөмө?
Ташла барыһын, ҡайғың утҡа яныһын,
Шатлыҡ ҡартайтмаҫ, ти, кешене.

Ал йөҙөңдө һары алһа иртә,
Яратмаҫ үҙеңде егеттәр.
Аң бул!

А ҫ ы л б и к ә. Уның ҡайғыһы юҡ әле һис тә.

Ҡ о л т ү б ә. Беләм инде, һинең кеүектәр:
Эстән яна, сер бирмәйҙәр тыштан,
Үҙ йөрәген үҙе кимерә...
Ярай, ярай, ҡайтҡас та һуғыштан,
Йәш бисә булырһың үҙемә!

А ҫ ы л б и к ә. Кемгә бисә булаһын мин белермен.

Ҡ о л т ү б ә. Әллә Ҡаһымғамы?

А ҫ ы л б и к ә. Уныһы минең эш! *(Сығып китә.)*

Ҡ о л т ү б ә. Әһ-һә, Аҫылбикә һылыу, был һүҙҙе мыйыҡҡа урайыҡ, берәй кәрәге булыр...

Бер адъютантын эйәртеп, майор Ф о л ь г н е р керә.

Ф о л ь г н е р. Ҡаһым түрә һаман ҡайтманымы?

Ҡ о л т ү б ә. Юҡ шул әле, майор әфәнде.

Ф о л ь г н е р. Оҙаҡланы.

Ҡ о л т ү б ә. Ҡунаҡ булалыр...

Ф о л ь г н е р. Белмәйем шул... туҡмаҡ ашамаймы!

Ҡ о л т ү б ә. Ә ни өсөн, майор әфәнде?

Ф о л ь г н е р. Сәбәптәр күп. Полк — полк түгел.
Парад марштары өйрәнергә
Кәрәк ине, улар ял яһай,
Береһе белмәй рәтләп һөйләшергә,
Шулмы һалдат?

Ҡ о л т ү б ә. Эйе, ярамай.

Ф о л ь г н е р. Выправка юҡ. Барыһы ала-ҡола.
Шунда буталалар ҡатындар...
Бында нәмә ҡалған уларына,
Өйҙә ятһын, бала тапһындар.

Ҡ о л т ү б ә. Әйтерең бармы!

Ф о л ь г н е р. Ҡаһым мужиктарға ҡорал бирә,
Пленный француздарҙы ҡәҙерләй.

Ҡ о л т ү б ә. Эйе, эйе!

Ф о л ь г н е р. Гел үҙ белдегенсә эш күрә,
Ниҙер мәкерле эш эҙерләй...

Ҡ о л т ү б ә. Булыр, булыр!..

Ф о л ь г н е р. Бының өсөн баштан һыйпамайҙар...
Уны эшенән аласаҡтар!

Ҡ о л т ү б ә. Китсе!?

Ф о л ь г н е р. Эйе, эйе!
Унан инде полкка һин хужа,
Илгә ҡайтҡас кантон булырһың...
Ләкин күҙ-ҡолаҡ бул Ҡаһымға!

К о л т ү б ә. Ярай, булдырабыҙ уныһын!

Ф о л ьг н е р. Батшалыҡ Емельян Пугачевтың фетнәһен хәтерҙән сығарғаны юҡ әле. Ул фетнәлә һеҙҙең Салауатка ла аҙ яуызлыҡ эшләмәгән... Ә Ҡаһымдың, хәтереңдә тот, икенсе Салауат булыуы бик мөмкин. Сөнки ул — азатлыҡ һөйә, ҡара халыҡҡа рәхимле, авторитеты ҙур.

К о л т ү б ә. Эйе, эйе!

Ф о л ьг н е р. Шулай булғас, беҙ уның һәр аҙымын күҙәтергә, артыҡ ҡолас киреүенә юл ҡуймаҫҡа тейешбеҙ. Ә ул-был эш боҙа ҡалһа, шунда уҡ ҡанаттарын киҫергә! Был турала юғарынан йәшерен бойороҡ бар.

К о л т ү б ә. Әһә!

Ф о л ьг н е р. Ошоно онотма һин. Ярай, ауфедерзайден! *(Сыға башлай.)*

К о л т ү б ә! Иҫән-һау бул, майор әфәнде!
Әй хоҙайым, шундай ҙур шатлыҡты
Булыр микән күрер замандар?..
Ҡаһымдың шул даны күберәк сыҡты,
Тиҙерәк уны кантон яһарҙар...
Юҡ, юл ҡуймам! Бутармын донъяһын!
Хәйлә, алдау иҫән сағында,
Әллә ҡайҙа бара алмаҫ Ҡаһым,
Мин ашырмын бәхет тауына!..
Ярай, бөгөндән үк сара күрә башларға кәрәк!

Шаулашып Б а й ы ҡ һәм б а ш ҡ а л а р керәләр. К о л т ү б ә юҡ була.

А ҡ н а з а р. Ҡаһым түрә ҡайтманымы ни, Байыҡ олатай?

Б а й ы ҡ. Ул хәҙер ҡайтып етәсәк: күрше башҡорт полкына — Тимеревкә генә һуғылды.

А ҡ н а з а р. Ай-һай, оҙаҡ ҡунаҡ булдығыҙ һеҙ фельдмаршалда. Беҙ ни көтә-көтә көтөк булып бөттөк.

Байыҡты ололап, келәмгә ултырталар, ҡымыҙ бирәләр.

Б а й ы ҡ. Ебәрмәй бит, яман һыйлай Ҡотдос.

Я д к э р. Ҡотдос түгел, сәсән, Кутузов!

Б а й ы ҡ. Ә һин күпте белмә, тиҙ ҡартайырһың. Миңә, ҡарт кешегә, ҡайһылай әйтһәм дә ярай. Ул — ҡорҙашым минең. Шулай:

«Тороғоҙ әле, күргәндәй булайым,
Һеҙҙең кеүек ҡунаҡ һирәк», — ти.
Бик оҡшаны, ахыры, беҙҙең Ҡаһым,
Маңлай яҙып, оҙаҡ һөйләште.

Б и к э т. Китсе?

Б а й ы ҡ. Улар таныш булып сыҡтылар: теге саҡта, төрөктәрҙе туҡмағанда, икәү бергә булғандар икән.

С а д ы ҡ а й. Вәт, әй!

А ҡ н а з а р. Кутуз үҙе ниндәй, сәсән, һөйлә әле шуныһын?

Я д к ә р. Аҡһаҡалмы?

Б а й ы ҡ. Ошо йәшкә етеп
Күргәнем юҡ ундай кешене:
Самауыр ҡуйҙырған, беҙ килә тип,
Үпкә йөҙгәнсе сәй эсерҙе.

А ҡ н а з а р. Һәллә!

С а д ы ҡ а й. Вәт, әй!

Б и к ә т. Бик уҫалмы?

Б а й ы ҡ. Түгел.
Сәй эскәстен, ҡурай уйнатты.
Донъя күргән кеше, булды күңел.
Унан һеҙҙең хаҡта һорашты.

Я д к ә р. Урыҫса һораймы?

Б а й ы ҡ. Юҡ, башҡортса:
Ҡотдос белә бөтә телдәрҙе!

Я д к ә р. Китсе?!

С а д ы ҡ а й. Вәт, әй!

Б а й ы ҡ. Мин дә беләмен бит урыҫса,
Күрһәттем үҙенә һөнәрҙе...
Дватсат тыща башҡорт — батыр, тим,
Страна любит, тебя любит:
Ружья взял, лошадка седлал,
Рәсәй враг — мая враг, сказал,
Суда, на война скакал!
Башкир — батыр, знамо,
Богатство искать не прешул,
Незамай, народ мирна жил,
Свой день сам видел, сказал,
Нас Урал-атай послал!
Ҡотдос, ты большой батыр ведь,
Тебя равнай в Рәсәй нет,
Тебя весь народ любит,
У тебя большой сертса ведь,
Тебя рус, башкир знает,
Много жизнь жалает!
Аполеон только себя любит,
У его сертса, знамо, нет,
Отбирать жалает он мир,
Мы не даем барыбер!
Аполеон будет — шабаш,
Ты крепко ему моклашка даш!.. —

Тигән генә инем, Ҡотдос түрә
Ҡоланы ла китте, ҡараһам,
Эсен тырнап көлә!

Б а р ы һ ы. Ха-ха-ха!..

Я д к ә р. Ниңә көлә икән?

Б а й ы ҡ. Бәй, һалдым бит хәбәрҙе, яратҡан!

Дөйөм көлөш. Ҡ о б о р а һәм п л е н н ы й ф р а н ц у з д а р керәләр. Капралға башҡорт бүрке кейҙерелгән, икенсеһе сәкмәнгә төрөлгән.

К а п р а л. Гранд мерси, мадам!

Ҡ о б о р а. Ah-hah, әллә туйып етмәне инде был байғош, тағы бер аҙ бирсе ти түгелме һуң?

Я д к ә р. Юҡ, юҡ, ҙур рәхмәт ти, апай.

Ҡ о б о р а. Шулаймы ни? Күрмәҫтәй булып бер туйынды меҫкендәр.

А ҡ н а з а р. Уларға шул Мәскәүҙә тамаҡ әләкмәй, эт менән бесәйҙе ҡалдырмай ашап бөтөп баралар.

Б а й ы ҡ. Аслыҡ үҙәктәренә үтһә, үксәләрен тиҙерәк күтәрерҙәр.

Ҡ о л т ү б ә керә. Ул француздарҙы күреп, сикәләренә һуҡҡылай.

Ҡ о л т ү б ә. Атам иркәләреме ни, ниңә шул тиклем ҡәҙерләйһегеҙ уларҙы?! Атырға кәрәк!..

Пленныйҙарға ҡылыс янап, өҫтәренә менеп бара. Аңламаҫтан Ҡ а һ ы м йүгереп керә, уның ҡылысын ҡулынан һуғып төшөрә.

Ҡ а һ ы м. Туҡта, йүнһеҙ!..

С а д ы ҡ а й. Ҡаһым түрә!

Смирно баҫалар. Шулай уҡ пленныйҙар ҙа төҙ ҡата.

Ҡ а һ ы м. Был ни эшең, сотник Ҡолтүбә?

Ҡ о л т ү б ә. Дошмандар бит... асыу килде... түҙә алманым...

Ҡ а һ ы м. Улар, шәфҡәт һорап, плен төшкән,
Ә һин сапҡыларға теләйһең...
Их Ҡолтүбә, башҡорт һаналһаң да,
Таштандыр, ахыры, йөрәгең!
Ҡылысы ҡайҙа был капралдың?

С а д ы ҡ а й. Бына, полковник ағай!

Ҡаһымға шпага бирә. Ул башта уны һәлмәкләп ҡарай, унан капралға тапшыра.

К а п р а л *(шатланып)*. О-о, мерси!

Ҡ а һ ы м. Бар, хәҙер быларҙы корпус штабына илтегеҙ.

С а д ы ҡ а й. Була, полковник! Әйҙәгеҙ, әйҙә! Аллен!

Француздарҙы еңдәренән етәкләп алып сыға башлай. Капрал, артҡа боролоп, Ядкәргә ҡул болғай.

К а п р а л. Адьё!

Я д к ә р. Юҡ, «прощай» түгел, о ревуар! — Хәҙергә хуш, тағы ла күрешербеҙ!

К а п р а л *(көлөп)*. О ревуар, о ревуар!..

Я д к ә р. Әһә, ана шулай тиген!

Сығып китәләр. Тынлыҡ.

Ҡ а һ ы м. Хәҙер үк штаб начальнигы майор Фольгнер миңә килһен.

А ҡ н а з а р. Тыңлайым! Йүгер, адъютантым!

Я д к ә р. Остом ғына!

Сығып китә. Ҡ а һ ы м сатырға керә, А ҡ н а з а р менән Б и к ә т уның артынан эйәрәләр.

А ҡ й е г е т. Бер һүҙ әйтмәне Ҡаһым түрә. Ахыры, һаман ошонда тапанып ятырбыҙҙыр...

Ҡ о л т ү б ә. Эйе.

А ҫ ы л б и к ә. Юҡ, түрәнең күҙендә ниндәйҙер осҡон сағылды: ул берәй ҙур эш тураһында уйлайҙыр.

А ҡ й е г е т. Белмәйем шул...

А ҫ ы л б и к ә. Бына майор килә. Ҡаһым түрә уны тиктәҫкә саҡырмағандыр.

Ф о л ь г н е р сатырға үтә.

Б а й ы ҡ. Йыртҡысына күрә ҡапҡаны бар.
Яйын беләһең бит һунарҙың:
Мәскәү дошмандарға ҡапҡан булыр,
Ҡулдан ебәрмәбеҙ уларҙы!

А ҡ й е г е т. Тик ятыпмы?

Б а й ы ҡ. Уныһын ваҡыт үҙе күрһәтер.

Ҡ о л т ү б ә. Төндә баҫып инергә лә, барыһын ҡылыстан үткәреп сығырға ғына ине!

Б а й ы ҡ. Ай-бай, сотник, ипләберәк киҙән,
Күҙ аҫҡыһыҙ ҡойон ҡуптарҙың,
Тик торғанда тел дауылың менән
Осороп ҡуйма хранцуз туптарын!..

Сатырҙан йүгереп Б и к ә т сыға ла труба ҡыҫҡыртырға тотона. Төрлө яҡтан ашығып һ а л д а т т а р, бүлек к о м а н д и р ҙ а р ы керәләр. Сәхнә артында ла тревога борғолары яңғырай. Ҡ а һ ы м, Ф о л ь г н е р, А ҡ н а з а р сыға. Ҡаһым поход кейемендә.

Ҡаһым. Тыңлағыҙ приказымды: хәҙер үк һыбайланырға, поход башлайбыҙ!

Тауыштар. Поход! Поход! Ур-а!..

Аҡйегет. Мәскәүгәме, түрә?

Ҡаһым. Юҡ, Коломна юлына табан!

Шаршау

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе күренеш

Урманлыҡ. Яҡында ғына оло юл ята. Ҡаһым түрә егеттәре һуғышҡа әҙерләнә: ҡылыс ҡайрай, ян тарталар, мылтыҡ таҙарталар, эйәр төҙәтәләр. Көслө йыр яңғырай.

Хор. Билен быуып, ат биреп,
Өрлөк кеүек ирҙәрҙе,
Француз яуын ҡырырға
Урал тауы ебәрҙе.
Любизники — любизарь,
Молодец, молодец!
Молодец та булдыҡ беҙ,
Любизнай ҙа булдыҡ беҙ,
Ил ағаһы Кутузовтан
Рәхмәт һүҙе алдыҡ беҙ!
Любизники — любизарь,
Молодец, молодец!

Садыҡай *(кереш тартып бөтөп)*. Мәле, Аҫылбикә, янды самалап ҡара, кереше ҡаты тартылғанмы?

Аҫылбикә. Ҡана, ҡарап ҡарайыҡ. *(Янды алып һауаға уҡ сойорғотоп ебәрә)*.

Ядкәр. Вәт мәргән ҡыҙ: һауалап йөрөгән ала ҡаргаға тейгеҙҙе!

Аҫылбикә. Йүгер, Ядкәр, ал да шуны француздарға илтеп бир, исмаһам, бер йылы һурпа эсерҙәр.

Садыҡай. Ха-ха-ха! Ярарлыҡмы ян?

Аҫылбикә. Баҙыҡ! Иң йыуан француздың да күкрәген умыра атырлыҡ!

Байыҡ. Уныһын һуғыш күрһәтер, һылыу, алдан шапырынырға ярамай.

Аҫылбикә. Урыҫ әйтмешләй, нисауа, дошман менән тәү тапҡыр осрашмайбыҙ бит инде!

Ҡолтүбә. Их, ҡыҙы! Ҡасан ошо ялбырбашты берәй кейәүгә бирер, туйын ашайбыҙ инде...

Аҫылбикә. Ашыҡма, тамағына һөйәк ҡаҙалып ҡуйыр.

Ҡолтүбә. Уныһын күҙ күрер ине әле. Бынау Аҡйегете лә йөрөй шунда ҡолағын һалпайтып, алыр ҙа ҡуйыр ине ошо ҡыҙҙы.

Ядкәр. Ҡошҡай бейек осалыр шул, уҡ алмайҙыр...

Ҡолтүбә. Аҫыл ҡош аяғынан эләгә.

Аҫылбикә. Ә һин, тартай, телеңдән табып ҡуйма! *(Уға йоҙроҡ янай. Көлөүҙәр.)*

Садыҡай. Әһә, әйттеме? Вәт, әй!

Ҡолтүбә. Ул һайлана әле. Ярай, күрербеҙ, һайланған — һаҙға, осраған — таҙға, тигәндәр.

Аҡйегет *(ҡырҡа)*. Ташла, бәйләнмә ҡыҙға!

Ҡолтүбә. Әлә-лә-лә, яҡлаусы ла табылды!.. Мин шаярып ҡына бит... Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, беҙгә ҡунаҡтар килә!

Барыһы ырғышып тораҙар.

Садыҡай. Бәй, был беҙҙең Аҡназар аҫай бит, әллә кемдәр менән килә ята.

Сабып килеп аттар туҡтай. Аҡназар, Сабырғол, аҫыл кейемле Мәрҙән керәләр.

Әүбәкер. Атайым, атайым! *(Йүгереп барып, Аҡназарҙың ҡосағына һыйына.)*

Аҡназар. Минең улым, Әүбәкер! *(Уны күкрәгенә ҡыҫа. Башҡаларға.)* Бына, туғандар, беҙгә ҡунаҡтар килде.

Ядкәр. Яҡташтар килгәндәр!..

Садыҡай. Бәй, Сабырғол ҡайнаға!.. Бына ҡайҙа килеп күрештек, вәт әй! *(Ҡосаҡлап ала.)*

Сабырғол. Садыҡай кейәү!..

Башҡалар ҙа күрешеп сығалар.

Байыҡ. Әйҙүк, яҡташтар!

Мәрҙән. Туғандар, барығыҙға Уралдан ҡайнар сәләм!

Байыҡ. Вәғәләйкемәссәләм! Ҡайһылай был яҡтарға ел ташланы?

Аҡназар. Тимерев полкында тап иттем. Урал вәкилдәре, улар күмәк килгәндәр.

Мәрҙән. Беҙҙе ил ебәрҙе. Ватан ҡаһармандарына бүләк итеп 4139 баш менер ат килтерҙек.

Садыҡай. Аттар? Вәт, әй, бына бынығы яҡшы булған: дошмандарҙы ҡыуып елергә иң елгер толпарҙар кәрәк!

Ядкәр. Ә беҙгә һуң, беҙҙең полкка аттар бармы?

Аҡназар. Башҡаларға 150—200 булһа, дан алған Ҡаһым түрә полкына бер юлы 500 баш ат бирелде!

Байыҡ. Рәхмәт!

Сабырғол. Ил бүләге — халыҡтан йыйҙыҡ. Хатта аҡтыҡ атын биреүселәр булды.

Мәрҙән. Әй, әй, кантон ағайым киткән саҡта һиңә ни әйтте! Аҡтыҡ ат, имеш...

Сабырғол. Бәй, ысыны шулай булғас... Ә бына һинең атайың, Шаһи тархан, өйөр-өйөр йылҡылары булһа ла, өс тай ғына бирҙе.

Ҡолтүбә. Тай мал түгелме ни? Уны һуйып бер ашауың ни тора!

Сабырғол. Берәүгә аш, икенсегә баш ҡайғыһы...

Садыҡай. Ҡуйсы әле, ҡайнаға, шуларҙы... *(Уны ситкәрәк алып китә.)* Йә, минең көләшкәйем — Сәрбикамалым ни хәлдә?

Ядкәр. Игеҙ ул тапҡан, ти, һине исем туйына көтә. Булдырған бисәң. Ишәй менән Ҡушай.

Көләүҙәр.

Садыҡай. Вәт, әй, һин ауыҙыңды самалап ас, уҡ йотоп ҡуйма!..

Мәрҙәнде табынға ултыртып, Ҡолтүбә һыйлай, башлай.

Сабырғол. Ул шәп, сәләм әйтте. Бына һиңә хат.

Садыҡай. Вәғәләйкемәссәләм!

Хатты алып, ситкәрәк китеп уҡый башлай.

Байыҡ. Именлекме, улым, йорт-ерҙә?

Сабырғол. Аллаға шөкөр әле, именлек. Дошман Мәскәүҙе алғас, халыҡ: «Был ҡәһәр һуҡҡырҙар бөтә Рәсәйҙе баҫындырыр инде...» — тип бик ҡурҡышҡайны. Ярай, бында килгәс ишетеп шатландыҡ, һырт биреп ҡаса башлағандар икән.

Байыҡ. Рәсәйҙе баҫындырыу — була торған эш түгел. Уға юл ҡуйылһа, башҡорт та, башҡалар ҙа бөтә тигән һүҙ. Унан инде тағы ҡырҡ ханлыҡҡа бүлеп, яттар талай башларҙар ине...

Сабырғол. Халыҡ та шулай уйлай шул. Еңеү теләп, һәр ваҡыт доғала торабыҙ. Хатта ҡарт-ҡоролар нәҙер ураҙаһы тота.

Байыҡ. Рәхмәт инде. Иле берҙәмдең — көнө берҙәм.

Ядкәр. Сәй-шәкәргә ҡытлыҡ түгелме?

Аҫылбикә *(көлөп)*. Берәүгә атай-әсәй, уға шәкәр-сәй...

Ядкәр. Көлмә, сәй булмаһа, бер ни эшләп булмай ул. Үҙең бер генә көн сәйһеҙ тороп ҡара!..

Сабырғол. Мәтрүшкә үҫеүҙән туҡтамаһа, башҡорт сәйгә аптырамай ҙа ул. Әммә көн күреү бик еңелдән түгел: ирҙәр һуғышта, түрәләрҙең күңел хушта...

Мәрҙән. Әй, әй, тағы кантон ағайҙы онотаһыңмы? Самалап!

Ҡолтүбә. Тый шуны, Аҡназар!

Сабырғол. Бәй, бәй, мин нәмә әйттем әле?.. Көн күреү ауырыраҡ ҡына, тим. Бына егеттәребеҙ яуҙа ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, ил алдында үҙҙәрен аҡлаһалар, батшабыҙ беҙгә мәрхәмәтен һалыр ине, көнөбөҙҙә көн итер ине генә тим дә баһа.

Аҡназар. Ул дөрөҫ әйтә бит.

Байыҡ. Бик дөрөҫ!

Ил өмөтөн аҡламай,
Ир намыҫын пакламай,
Уралға кире ҡайтмабыҙ,
Ағиҙелдән эсмәбеҙ:
Ата-баба көн күргән,
Аҡ һөйәге күмелгән
Ергә аяҡ баҫмабыҙ!..

Сабырғол. Амин!

Аҫылбикә. Шулай ҙа Урал һағындыра... Ҡош булып осоп ҡайтып, исмаһам, бер генә күҙ һалып китке килгән саҡтар була!

Сабырғол. Булмай һуң: оя бит, тыуып үҫкән донъя бит.

Аҫылбикә. Ағай,

Бер йәйләү бар Уралтау буйында,
Ҡайталмаһам, шунда барығыҙ,
Минең әсәм, бахыр, тора унда,
Шул ҡарсыҡты эҙләп табығыҙ;
Табығыҙ ҙа сәләм тапшырығыҙ,
Минең өсөн артыҡ бөтмәһен...
Яу ҡырында егеттәрсә үлһәм,
Сер бирмәһен, күҙ йәш түкмәһен!

Сабырғол. Улай тимә, һылыу, иҫән-һау әйләнеп ҡайт.

Аҡназар. Түҙ, Аҫылбикә, әйләнеп ҡайтыр саҡтарға күп ҡалмай инде. Ҡайтырбыҙ!

Байыҡ. Алла бойорһа, тиген.

Ике крәҫтиән керә.

Архип *(бил тигентен эйелеп).* Арыумы, һалдаттар?

Аҡназар. Яҡшы әле, оло кешеләр.

Иван. Беҙгә һеҙҙең иң ҙур начальник кәрәк ине.

Аҡназар. Ә-ә... Полк командиры корпусҡа киткән, уның урынына мин булам.

Иван. Беҙ, мужиктар, тотош ауыл менән ополченға яҙылғайныҡ.

Аҡназар. Бик яҡшы булған!

Архип. Әммә ҡоралыбыҙ юҡ шул, эш шәп түгел.

Аҡназар *(көлөп).* Ә балта, һәнәккә нәмә булған!

Балта ағас ҡына юнмай ул,
Әгәр ҡулда тота белһәң, туған,
Алйот баштарҙы ла турай ул...

Иван *(шулай уҡ көлөп).* Әйе, уныһы хаҡ:

Балта менән эштәр күргән бар,
Әммә хранцуздар ҙа түгел ахмаҡ,
Уларҙа туп, яҡшы ҡоралдар.
Беҙгә мылтыҡ кәрәк.

Аҡназар. Ә һеҙ ҙҙәренән тартып алығыҙ!

Архип. Тартып алырғамы? Йәй килһә, уныһын инде ҡарап тормабыҙ.

Аҡназар. Мин һеҙгә утыҙ мылтыҡ бирҙертәм, хәҙергә эш башлап ебәрергә ярар.

Иван. Эй-й, ярар ғына тиһеңме, бик яҡшы булыр!

Аҡназар. Ядкәр, бар, был оло кешеләргә мылтыҡ алып бир.

Ядкәр. Ярар, ағай.

Иван. Бик ҙур рәхмәт һеҙгә, балаҡайҙар. Ауылдаштарыбыҙ шатланышып бөтә алмаҫтар инде. Иҫән-һау булығыҙ. Хушығыҙ!

Аҡназар. Иҫән булығыҙ, оло кешеләр.

Мужиктар менән Ядкәр сығып китә.

Байыҡ. Бына көс арта!
Тик бер һүҙем бар, ауыр алма, ҡустым.
Яңылышамдыр... Кисер ҡартыңды,
Һин бик артыҡ ҡыйыу ҡыланаһың,
Харап итеп ҡуйма башыңды...

Аҡназар. Тураһын әйт, ауырһынма бер ҙә,
Мин һүҙеңде бер ҙә йыҡманым.
Күп яуҙар, һуғыштар үттек бергә,
Әйткән кәңәшеңдән сыҡманым.

Байыҡ. Уйла, ҡустым, былай оҡшар микән мужиктарға ҡорал өләшеү? Батшаның әле Йәмәлкә яуы тураһында онотканы юҡ...

Аҡназар. Борсолма, һин, ҡартым. Яҡшы белəм:
Эштəрем хаҡ, миңə һуҙ теймəҫ,
Бөтə халыҡ сыҡмай ҡорал менəн,
Илдең хас дошманы еңелмəҫ!
Белəһең бит, Урал яу сапҡанда,
Ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, балалар,
Ҡорал алған, атҡа атланған да,
Бер кешелəй, ҡаршы барғандар.
Халыҡ — тиңһеҙ батыр, сикһеҙ көслө,
Тау, таштарҙы вата юлында...
Дөрләп ҡабып китһə уның үсе,
Дошман булдыралмаҫ быуырға!

Ҡолтубə. Ай-һай...

Аҡназар. Нəмəһе — ай-һай? Мин Ҡаһым түрə ҡушҡанса эш ҡылам!

Йүгереп Бикəт керə.

Бикəт. Ағай-эне, оло юл буйында йөҙлəп һыбай француз күренде! Нəмə эшлəйбеҙ?

Аҡйегет. Бында оҙаҡ уйлап тораһы юҡ, торорға ла ҡырып һалырға!

Ҡолтубə. Билдəле!

Аҡназар. Ашыҡмағыҙ, Ҡаһым түрə ундай приказ бирмəне.

Ҡолтубə. Бындай саҡта ҡылыс үҙе приказ яҙа.

Аҡйегет. Эйе лə баһа!

Аҡназар. Юҡ, үҙебеҙҙе һиҙҙермəй, уларҙы үткəреп ебəргə лə, арттарынан тағы башҡа частар килмəһə, һырттарынан төшөп һуғырға!

Байыҡ. Аҡыллы уй.

Ҡолтубə. Ҡуркаҡтар аҡылы... Юҡ, егеттəр менəн үҙем башлап ташланам!

Аҡназар. Минме ҡуркаҡ?

Ҡолтубə. Бер бөгөн түгел инде. Артыҡ һаҡһың, ə үтə һаҡлыҡ — үҙе ҡуркаҡлыҡ!

Аҡназар *(ырғып тора)*. Юҡ! Мин күпме яуҙар сабып, ундай насар исем үҙемə таҡманым! *(Бүркен атып бəрə.)* Килтерегеҙ минең атымды!

Ҡолтубə. Мин үҙем алдан ташланам!

Аҡназар. Юҡ, һин резервта ҡалаһың. Дүрт йөҙ һыбайлы менəн үҙем барам! Əҙерлəнегеҙ, дуҫтарым!

Трəвога борғолары яңғырай. Кешелəр ашығыс йүгерешəлəр.

Ҡобора. Аҡназарым, миңə шул һынлы ярһыйһың, аҡыл менəн эш ит.

Аҡназар. Ир намыҫыма тейҙе, сыҙай алмайым! Их Ҡобора, Ҡаһым түрә менән беҙ күпме һуғыштар күрҙек, ә ундай ҡушамат таҡҡаным юҡ ине. Досатна.

Ҡобора. Ундай ауыр һүҙҙе берәү әйтә бит, халыҡмы ни? Шуның үҙе ни ҙә, һүҙе ни?..

Аҡназар. Ҡуйсы әле, Ҡобора, юҡҡа борсолма. Мин кемлегемде күрһәтермен!

Ҡобора. Мин ышанам, йәнем. Әммә һаҡ бул.

Аҡназар *(көлөп)*. Ҡурҡма, бынауындай ул үҫтергән кешегә үлем тейә буламы? *(Әүбәкерҙе ҡосаҡлай.)* Шулай бит, улым?

Әүбәкер. Эйе, атай. Мин дә ҡурҡмайым. Ҡуян ғына ҡурҡа бит ул, әйеме?

Аҡназар. Дөрөҫ, улым! Яҡташтар, иҫән булығыҙ.

Сабырғол. Хәйерле юл, ир арыҫланы.

Ядкәр *(кереп)*. Ағай, ат әҙер!

Аҡназар. Егеттәр!

Ҡолтүбә. Мин дә барам!

Аҡназар. Юҡ. Кәрәк булһаң, приказ булыр, әҙер тор!

Ҡолтүбә. Тыңлайым!

Аҡназар. Улым, Ҡобора, борсолмағыҙ... Киттек, егеттәр!

Барыһы сығып китәләр. Сәхнәлә Ҡолтүбә менән Мәрҙән, Сабырғол ғына ҡала. Ат тояҡтары, ҡылыстар сыңлаған тауыштар алыҫлаша.

Ҡолтүбә. Бына шулай инде беҙҙең тормош — бер тынғы юҡ — һуғыш, һуғыш. Йүнләп һине күргәндәй ҙә булманыҡ, бына саптылар ҙа киттеләр.

Сабырғол. Ярай инде, еңеп ҡайтҡас, маңлай яҙып туя һөйләшербеҙ.

Ҡолтүбә. Ул көндәргә оҙаҡ ҡалманы инде! Мин әйтәм:

Ҡотдос ҡашҡа ир бит ул,
Киң Рәсәйҙә бер бит ул,
Телдән телгә маҡталған,
Үҙенә тиңдәш тапмаған
Ҡуш йөрәкле ир бит ул!

Мәрҙән. Ҡайһылай шәп әйткәнһең! Сәсәнлек бар икән үҙеңдә...

Ҡолтүбә. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә етмәй. Әле мин...

Ул һүҙен әйтеп бөтә алмай, оран һалып Егор килеп керә.

Егор. Ядкарка! Ядкарка, һеҙҙә ниндәй тревога был?!

Колтүбә. Ядкәр юк, китте. Аҙыраҡ туҙан ҡағабыҙ: юлда француз күренгән шунда. Бүстәк!..

Егор. Нәмә, француздар?! Төплө разведка яһалдымы? Улар йөҙләп кенә йөрөмәҫ...

Колтүбә. Ҡылыстар, уҡтар эшкә тотонғас, разведканың нәмәгә кәрәге бар? Бүстәк. Беҙ былай ҙа...

Егор. Насар, насар!..

Егор килгән тиҙлеге менән сығып китә.

Сабырғол. Был ниндәй егет?

Колтүбә. Гусар шунда, күрше полктан... Йөрәй инде...

Сәхнә артында доға тауыштары. Мужиктарҙы эйәртеп Архип менән Иван юлдан үтә башлай. Мужиктар барынса ҡоралланып алғандар.

Мужиктар. Тәңре, һаҡла беҙҙе! Мәҙәт бир! Илаһи, изге еребеҙҙе бысратҡан басурмандар ергә һеңһендәр! Хоҙа беҙҙең менән, православныйҙар! О Иисуси — Христи, беҙҙе мәрхәмәттән ташлама!

Мужиктар юлдан үтеп бөтәләр.

Мәрҙән. Былар ҡайҙа баралар?

Колтүбә. Бәй, һуғышҡа. Эшемде ҡырырҙар инде, сабаталар...

Сабырғол. Улай тимә. Ир хурлама — боҫторор... халыҡ бит ул — көс!

Колтүбәнең егеттәре берәм-берәм йүгерешеп керә башлайҙар.

Беренсе һалдат. Колтүбә ағай, ярҙамға ташлана һалайыҡ!

Колтүбә. Сапсыма һин, үҙем беләм мин!

Икенсе һалдат. Беҙҙең егеттәргә ҡыҫтауыраҡ, ахыры... Ағай, тиҙерәк ярҙам итәйек!

Колтүбә. Улар әле ярҙам һорамайҙар...

Бер төркөм егеттәр керә

Барыһы. Ағай, тиҙерәк атҡа менәйек, ваҡыт етте!

Колтүбә. Юҡҡа ҡыҫылмағыҙ, мин эшемде үҙем беләм! Аҡназарҙан приказ булыр, атҡа менербеҙ. Әле ҡуркырлыҡ бер нәмә юҡ... Иркәбай, килтер әле турһыҡты!

Иркәбай. Мә, ағай! *(Итеккә оҡшатып тегелгән тире турһыҡ бирә.)*

Ҡолтүбә. Ә мөйөҙ ҡайҙа? Ҡой берҙе!

Иркәбай. Бына, ағай! *(Мөйөҙгә турһыҡтан ҡойоп ниндәйҙер шыйыҡса бирә.)*

Ҡолтүбә *(эсеп)*. Эх, шәп араҡы!

Сабырғол. Араҡы... Эсәһегеҙ?..

Ҡолтүбә. Унан ниндәй ғәйеп? Бата ул беҙгә, һалдатҡа...

Иркәбай тағы бер нисә егеткә ҡойып бирә.

Иркәбай. Күгәрсен һөтө был, яҡташ, күгәрсен һөтө! Мә, тот әле.

Сабырғол. Ауыҙыма алған нәмә түгел.

Ҡолтүбә. Эсмәй икән, үҙ эше. Бына Мәрҙән ҡорҙашҡа бир.

Мәрҙән. Яҡшы аҙыҡ ҡалғансы, яман ҡорһаҡ ярылһын. *(Эсә.)*

Ҡолтүбә. Эйе лә!.. *(Тағы эсә. Ҡыҙмаса булып ала, маҡтана башлай.)* Минең егеттәр — арыҫландар! Ә мин... мин...

Бер һуғышта төшөп алдым башлап,
Былар бер тотам да ҡалмайҙар.
Һыу кисәләрме ни ҡолас ташлап,
Уңлы-һуңлы кирелеп сабалар!..
Ә мин еләм... былар артта ҡалды...
Урманлыҡҡа барып кергәнмен...
Ун, әй юҡ, йөҙ француз мине һырып алды,
Әй аталар... бер ни күрмәйем...
Тотондом урырға! Сыҙа ғына!
Баштар, кәбеҫтәләй, турала...

Сабырғол. Булмаҫтыр ҙа...

Иркәбай. Эйе, эйе!

Ҡолтүбә. Барлыҡ француздар, быны күргәс,
Ҡурҡышынан... телдән яҙҙылар...
Тау ярырҙай итеп мин екергәс,
Барыһы ла ҡоралын һалдылар...

Колош. Был көлөүҙәр араһында ышанмай мыҫҡыллауҙар ҙа сағылып ҡала.

Иркәбай. Ҡолтүбә ағай ҡырһа ҡыра инде ул!..

Сабырғол. Ай-һай...

Мәрҙән. Бына бит ул беҙҙең тарихи тоҡомо ни эшләтә!

Колтубә. А как же! Кана, тағы берҙе ҡой ҙа йырлап ебәр әле, Иркәбай.

Иркәбай. Була, ағай! *(Араҡы ҡойоп бирә лә йыр башлай.)*

Һай-й...
Ҡаһым түрә менгән кир юрғаның, вай кем,
Маңлайында булыр урайы.
Ҡаһым түрә яуап алған саҡта, вай кем,
Уң ҡулында булыр ҡурайы...

Сабырғол. Ниндәй дан көй. Быны, отоп алып ҡайтып, халыҡ араһына таратырға кәрәк. Ҡаһым көйә!

Иркәбай. Беҙҙә күптән йырлайҙар уны...

Колтубә. Куйсы әле, минең, минең яратҡан көйҙө һуҙ!

Иркәбай. Булды ғына, ағай, онотоп ебәргәнмен...

Әрмеләрҙә йөрөп сәс үҫтерҙем,
Сәскенәйем етте үрмәгә.
Ризыҡ яҙған булһа, бер ҡайтырбыҙ
Тыуған еркәйҙәрҙе күрмәгә.

Колтубә *(сигенән сығып)*. Вәй-вәй-вәй!.. *(Шашып бейей башлай.)* Эх, эх!..

Ярһып Асылбикә керә.

Асылбикә. Оятһыҙҙар, кешеләр унда ҡан ҡоялар, былар бында тамаҡ йыуалар... Тфу! Унда дошман меңләп булып сыҡты... Ярҙамға!

Колтубә. Приказ юҡ бит, пр-пр...

Асылбикә. Аҡназар ағай ҡушты!

Колтубә. Ҡайҙа яҙыу.. Мин бисә-сәсә һүҙенә ышанмайым!

Асылбикә. Ах, иҫерек баш! Бая ғына: «Ҡылыс— үҙе приказ!» — тигән кем ине?

Колтубә. Кит! Ҡыҙған саҡта кеше ни әйтмәй!

Асылбикә. Ә-ә... мин дә ҡыҙғанмын: мә приказ!

Колтубәгә ҡамсы менән тарта.

Колтубә. У-у-у!..

Асылбикә. Егеттәр, нәмә тораһығыҙ, аттарға!

Ҡаһым менән Фольгнер ашығып килеп керә.

Ҡаһым. Тағы ниндәй шау-шыу? Нәмә сыҡһа, Колтубәнән сығыр, саҡ бер яры китер хәл юҡ...

Колтубә. Ҡаһым түрә, ҡунаҡтар бар: яҡташтар килделәр.

Ҡаһым. Мин улар менән күрештем.

Аҫылбикә *(алдына текә баҫып)*. Ҡаһым ағай, рөхсәт ит?

Ҡаһым. Һөйлә.

Аҫылбикә. Юлда йөҙ һыбайлы дошман күреп һөжүм башлағайныҡ, улар меңләп булып сыҡтылар. Хәл ауыр: Аҡназар яраланып, атынан ҡоланы!

Ҡаһым. Нәмә?!

Аҫылбикә. Ә Ҡолтүбә, яҙма приказ юҡ тип, яр-ҙамға ташланмай..

Ҡаһым. Их, һеҙ... Хәҙер үк Денис Давыдов отрядына сап, яр-ҙамға килеп етерҙәр...

Аҫылбикә. Тыңлайым! *(Сығып китә.)*

Ҡаһым *(Ҡолтүбәнең погондарын өҙөп ташлай)*. Бөгөндән һин йөҙ башы түгел!.. Яҡташтар, кисерегеҙ, аҙаҡ һөйләшербеҙ. Майор Фольгнер, уларҙы ҡурҡынысһыҙыраҡ ергә алып кит.

Фольгнер. Тыңлайым!

Ҡаһым. Әйҙәгеҙ, егеттәр!

Егеттәр-ҙе эйәртеп сығып китә. Ат тояҡтары оҙаҡ шаҡылдай.

Фольгнер. Их сотник, сотник... Ниңә дошман һанын белмәйенсә, яуға ташландығыҙ?

Колтүбә. Минме ни, Аҡназар үҙе шашынды бит: егетлек күрһәтә, йәнәһе, миҙал алғыһы килгәндер...

Фольгнер. Бар, рядовой һалдат булып, үҙеңде яуҙа күрһәт: әле һуң түгел, бәлки, хәленде яҡшыртып булыр...

Колтүбә. Тыңлайым! *(Сығып китә.)*

Фольгнер. Ду һлáубст цу шáбен унд ду вирст нешóбен...* Дурак!

Сабырғол. Нәмә һөйләй был, Мәрҙән? Әллә мине әрләй инде?..

Мәрҙән. Юҡ, Ҡолтүбәне тетә, буғай...

Сабырғол *(Фольгнерға)*. Эйе, эйе, Ҡолтүбә — дүрәк. Аҡназарҙы ул сәмләндерҙе.

Фольгнер. Ә һин, дала ҡарғаһы, ҡарҡылдама: бында хәрби кешеләрҙең һүҙе генә һүҙ!

Сабырғол. Шулай икән... Бына хөрмәт күрһәтә башланы был!..

Шаршау

* «Ул үҙен эш ҡылам тип уйлай торғандыр инде, ә уның үҙен төрткәләп йөрөтәләр» мәғәнәһендә *(немецса)*.

Таң атып килә. Кисә һуғыш барған ер. Юлда ватық сана, туп, ат мәйеттәре аунап ята. Артҡы планда ҡәберҙәр. Уларҙы әле ҡар ҙа ҡаплап өлгөрмәгән. Ҡаһым яңғыҙ. Ул төн буйы йөрөп сыҡҡан, йонсоу. Ҡар ҡатыш ваҡ ямғыр һибәләй.

Ҡаһым. Барыһы йоҡлай, егеттәр арығандар:
Ҡаты булды һуғыш, бик ҡаты,
Беҙҙән күптәр үлде, ә дошмандар
Икеләтә артыҡ юғалтты.
Аҡназар ҙа үлде... Эх, Аҡназар,
Уң ҡанатым минең, ҡанатым,
Алдында ҡалтырай ине яуҙар,
Әрәм булдың, һаҡлай алманым.
Бына таң да ата, ә мин һаман,
Балаһын юғалтҡан аталай,
Керпек тә ҡаҡмайым, уйланам...

Әкрен генә мөйөҙ ҡысҡырҙҡан тауыш. Ҡаһым шул яҡҡа табан сығып китә. Иртәнге йәнлелек башлана. Колтүбә менән Иркәбай керә.

Колтүбә *(бойоҡ)*. Ахыры, Ҡаһым түрә кисәге алабарманлыҡ өсөн ҡыҙҙырырға самалай торғандыр, бик иртә саҡыртҡан.

Иркәбай. Барҙыр инде...

Колтүбә. Минең турала тағы нимәләр әйтте ул?

Иркәбай. Бик ҡыҙған. Бәхете, яҡташтар булды, юғиһә мин ул тарханды шунда уҡ атыр инем, ти!

Колтүбә. Булыр унан... Иманы юҡ! *(Фольгнер килә яҡҡанын күреп.)* Хәйерле иртә, майор әфәнде!..

Фольгнер *(иғтибарһыҙ)*. Ә-ә... Гутен таг...

Колтүбә. Иртә, майор әфәнде.

Фольгнер. Ә һин һуңға ҡалаһың!

Колтүбә. Аңламайым, майор әфәнде.

Фольгнер. Бына хәҙер Ҡаһым аңлатыр, мунса кертергә саҡырта бит!

Колтүбә. Ә-ә... Ул үҙе лә әллә ҡайҙа бармаҫ: кисә уның ҡушыуы буйынса, Аҡназар мужиктарға тағы утыҙ мылтыҡ бирҙе.

Фольгнер. Әһә. Шунан, шунан?

Колтүбә. Ҡаһым әйткән: әйҙә ҡоралланһындар, француздарҙы еңгәс, улар был ҡоралды батшаға ҡаршы күтәрерҙәр...

Фольгнер. Тимәк, тағы Салауатка булырға теләй?! Так, так... Ләкин, Аҡназар үлгән бит, мәйеттәр шаһит була алмайҙар.

Ҡолтубә. Ул үлһә, бына мин бар!

Фольгнер. Был һүҙҙәрҙе миңә яҙып бир. Мин уны корпус штабына ебәрәһе рапортыма беркетермен.

Ҡолтубә. Ике ҡуллап, майор әфәнде! Унан Ҡаһым...

Фольгнер. Шаулама!..

Ҡаһым артынан китәләр. Аҡланлыҡ. Яралы бер егет мәйәҙ ҡысҡыртып ултыра. Яу ҡырынан яралылар берәм-берәм үрмәләп киләләр. Араларында Аҡйегет тә бар. Ҡаһым әкрен атлап улар янына килә.

Ҡаһым. О Аҡйегет! Яраң ҡатымы?

Аҡйегет *(көсәнеп көлөп)*. Туйыма саҡлы төҙәлер...

Ҡаһым. Их, дыуамаллыҡ бына нәмәгә еткерҙе. Бер егеҙ — аҡһаҡ, икенсегеҙ — туҡмаҡ... Мин һеҙҙең менән нәмә эшләрмен инде, егеттәр?

Аҡйегет. Аҡһаҡ булһаҡ, атта дүрт тояҡ бар. Ә беҙҙең ҡулдар иҫән, бирешмәбеҙ!

Ҡаһым. Молодец! Мин һине, ҡустым, Аҡназар урынына үҙемә ярҙамсы итеп алам.

Аҡйегет. Миңә ул эш әле иртәрәк...

Ҡаһым. Иртә түгел, ҡустым, беләм һине!
Тик үҙеңде бер аҙ ҡулға ал:
Күкрәк киреп һуғышыр саҡтар килде,
Элеккеләй булма дыуамал!

Аҡйегет. Аңланым!

Ҡаһым. Барығыҙ, егеттәр, ярағыҙҙы бәйләтегеҙ, дауаланығыҙ.

Аҡйегет. Тик, түрә, егеттәрҙе лазаретҡа ебәртмә?

Йәш һалдат. Беҙ һә тигәнсе һауығырбыҙ!..

Ҡаһым. Уныһын лекарь үҙе әйтер. Барығыҙ.

Егеттәр сығалар. Әсе ҡысҡырып илаған бала тауышы. Әүбәкерҙе етәкләп, Ҡобора керә.

Әүбәкер. А-тай-й!..

Ҡобора. Ҡуй, илама, хранцуз бапаҡ әйтер. Иртә әле. Аҙыраҡ ят, улым. Торғас, атайың ат бирер...

Әүбәкер. Ә мин хрансузды атамын!

Ҡобора. Ярай, улым.

Ҡаһым яҡын килеп, Ҡобораны яурындарынан ҡағып йыуата.

Ҡаһым. Ҡуйсы, Ҡобора, баланы алдама,
Йәштән дөрөҫлөккә өйрәнһен...
Атайың шул ҡорбан булды, бала,
Йәҙрә тиште уның йөрәген.

Ошо кендән ҡаныңа нәфрәт һеңдер,
Дошмандарыңды бел танырға,
Бәлки, үҫкәс, һиңә тура килер,
Беҙҙең һымаҡ, яуҙар сабырға...
Ә хәҙер ят, илама.

Әүбәкер. Беләм, һалдат
Яуҙа батыр үлә, беләм мин!
Әйтмәй йөрөгән булаларсы, алдап,
Шуға ғәрләнеп йәш түгәм мин!
Мин бала түгел дә... Юҡ, ағай, юҡ,
Уңды-һулды бер аҙ таныймын,
Миңә, Ҡаһым ағай, бирегеҙ уҡ,
Атайымдың ҡонон алырмын!

Ҡаһым. Вот молодец! Тере Аҡназар был,
Батыр булыр, уның шикелле!

Кобора. Эйе, берҙән-бер йыуанысым шул...
Тик тапмам атаһы ишене...

Ҡаһым. Ни эшләйһең, гүмерең булмағас,
Көсләп йәшәп булмай, күрәһең,
Әҙәләндән ҡасып булмай, тыуғас,
Өйҙә ятһаң да ул үләһең.

Кобора. Уныһы шулай инде. Әммә ҡыҙғаныс бит, еләк кеүек сағында әрәм булды.

Ҡаһым. Ҡуй, баланың күңелен китмә, Кобора. Мин уға уҡ-һаҙаҡ бирәм.

Әүбәкер. Ағай, миңә ат та бирерһең?

Ҡаһым. Уралда дан бер толпар тыуыр,
Ҙур үҫкәс, һин шуны менерһең!
Һин булырһың бына тигән казак,
Елде лә еткермәҫ толпарың,
Дошман илгә ташланырға баҙмаҫ,
Барыһын тоторһоң да туҡмарһың!

Әүбәкер *(үтә шатланып)*. Мин атлы казак булам, мин атлы казак булам! Илама, әсәй, мин хәҙер ҙур бит инде!..

Кобора. Эйе, балам, һин... ҙур шул инде...

Сығалар.

Ҡаһым. Бала... бала, артыҡ йәш шул әле, бер нәмә лә аңламай... Ә гүмер үтә, яҙмыш ауыр... *(Әкрен көйләй.)*

Аппаҡай ҙа ап-аҡ, аҡ күренә, вай кем,
Кереп баҡһаң, эсе быу кеүек.
Уҙғанда ғына гүмер юҡ иҫәбе, вай кем,

Ергә лә генә һеңгән һыу кеүек...
Аҡназар, Аҡназар...

Уның күҙҙәренә йәш эркелә, һыҡтай. Аҫылбикә, уның янына килеп, ҡулбашына ҡулын һала.

Аҫылбикә. Түрә, ҡуйсы, шул тиклем бөтөрмә үҙеңде.

Ҡаһым. Ә-ә, Аҫылбикә!.. Эс боша шул, түҙә алмайым.

Аҫылбикә. Ир бул, һалдат кешегә улай килешмәй.

Ҡаһым. Ир булырға? Ярай, бөттө, батыр ҡыҙ!

Аҫылбикә. Бына шулай, бынығы килешә! Белә-неңме, ағай, һин яуҙан ҡайтҡан һайын Урал буйындағы бер йәйләүгә килә торғайның?

Ҡаһым. Хәтеремдә, мин Йәнтүрә дуҫыма ҡунаҡҡа бара торғайным.

Аҫылбикә. Уның тирмәһендә ҡымыҙ эсеп, ҡурай уйнатып, йырлаша торғайнығыҙ.

Ҡаһым. Эйе.

Аҫылбикә. Иң күп йырланған йыр ошолай ине:

Урал ғына буйы, һай, ҡаялыҡ,
Аша ғына төшһәң — Таналыҡ.
Яуға ғына сығыу, һай, ҡыйыулыҡ,
Ҡыйыу ирҙе тыйыу — яманлыҡ...

Ҡаһым. Эйе, «Һанаҡа» көйө был.

Аҫылбикә. Шул тирмәнең төнлөгөнән һине ҡара күҙле бер ҡыҙ һоҡланып күҙәтә торғайны.

Ҡаһым. Китсе?

Аҫылбикә. Шунан, бер йылды, һин Сафия һылыуҙы алып килдең.

Ҡаһым. Эйе, хәтеремдә.

Аҫылбикә. Шунан һуң ул ҡара күҙле ҡыҙ төнлөктән ҡарамаҫ булды.

Ҡаһым. Кем ине ул, кем ине?!

Аҫылбикә. Белмәйем... Аҙаҡ мин уны тау шишмәһе эргәһендә тап иттем: ул көнө буйы үләндә тәгәрәп ятып илап, буҫығып бөткәйне. Эх, меҫкен, донъяны аңламаған йәш ҡыҙ!.. Ул бит һинең менән бергә яуҙар сабырға, иң ауыр ҡурҡыныстарҙы тиң уртаҡлашырға әҙер булған. Ул, әгәр һин үлһәң, үҙе үлеүҙән дә баш тартмаҫ ине. Ул һөйгән, өҙөлөп һөйгән һине!

Ҡаһым *(ныҡ ашҡынып)*. Кем, кем ине ул ҡыҙ?

Аҫылбикә. Ҡайҙан беләйем мин, үҙең күрәләр уны... *(Аңғармаҫтан Ҡаһымды һурып үбә лә йүгереп сығып китә.)*

Ҡ а һ ы м *(уянып киткәндәй).* Бына ул ҡара күҙле ҡыҙыҡай кем булған икән!.. Ул, ул!..

С а д ы ҡ а й, Б и к ә т, Б а й ы ҡ, Я д ҡ ә р һәм б а ш ҡ а л а р Аҡназарҙың мәйетен күтәреп керәләр.

Б а й ы ҡ. Һай, уландар, уландар...
Улар батыр инеләр,
Улар алтын инеләр,
Илкәйем ил булһын тип,
Еркәйем гөл булһын тип,
Ажарланып, яу сабып,
Шаулап торған дан табып,
Аҡтыҡ ҡанын бирҙеләр!
Ил онотмаҫ уларҙы,
Яңрар олпат йырҙары,
Быуындарҙан быуынға,
Барлыҡ ғүмер буйына,
Күңелдәрҙә һаҡланып,
Телдән телгә маҡталып,
Таң ҡалдырыр донъяны
Илдең батыр улдары!..

С а д ы ҡ а й. Дөрөҫ, Байыҡ сәсән!

Б и к ә т. Батырҙарға үлем юҡ!

С а д ы ҡ а й. Улар Ватан өсөн ҡорбан булдылар!..

Б и к ә т. Мәңге онотмабыҙ!..

Ҡ а һ ы м *(әкрен).* Туғандарым, рәхмәт, антығыҙҙы ишеттем. Эйе, беҙ уларҙы мәңге онотмабыҙ!

Тыңлағыҙ приказды:

Кисәге һуғышта батырлыҡ күрһәткән сотник Аҡйегет Уразбаев, Садыҡай Арсланов, Бикәт Биктимерев, мәргән Аҫылбикә Янтурина, рядовой Ядкәр Аҡъюловтарға командование исеменән рәхмәт белдерәм!

Т а у ы ш т а р. Дан батырҙарға!

Ҡ а һ ы м. Сотник Аҡйегет Уразбаевты һәләк булған Аҡназар Солтанов урынына үҙемә ярҙамсы итеп билдәләйем.

Т а у ы ш т а р. Ҡулай егет! Батыр йөрәкле ул! Беҙ уға ышанабыҙ!..

Ҡ а һ ы м *(ҡулы менән тауышты тыйып).* Дыуамал һуғышҡа керергә, шулай уҡ ваҡытында ярҙам күрһәтмәй, йөҙләгән егеттең һәләкәтенә сәбәпсе булған ҡурҡаҡ Ҡолтүбә Шамғуловты, йөҙ башлығынан алып, рядовой һыбайлы итеп ҡалдырырға!

Т а у ы ш т а р. Дөрөҫ! Хурлыҡ ҡурҡаҡ йәнгә! Батыр башҡорт һыбайҙарына тап төшөрә ул!

Шаршау

Лагерь. Ҡыш башы. Ҡаһым эргәһендә Байыҡ, Аҡйегет, Бикәт баҫып торалар.

Ҡ а һ ы м. ...Шулай итеп, уҙамандар, дошманды тармар итер көндәр килде! Корпус штабынан приказ бар: беҙ, Селавин, Давыдов, Ожеровскийҙарҙың партизандары менән берҙәм хәрәкәт итеп, дошманды флангыларҙан борсорға тейешбеҙ. Сигенеүсе дошман армияһы Толчин — Лсщинца — Черя ауылдары араһында ҡамап алынасаҡ.

Б а й ы ҡ. Бер ҡолас киреп юлбаҫарҙарҙы урасаҡбыҙ икән! Молодец, минең Ҡотдос ҡорҙаш эште шәп алып бара!

Ҡ а һ ы м. Эйе. Ҡуҙғалыу тураһында приказ көтөгөҙ. Ә хәҙер егеттәрҙе әҙер тоторға кәрәк. Разведканан ҡайтмаҡтармы әле? Эх, оҙаҡланылар... Байыҡ сәсән, һинең егеттәр ни хәлдә?

Б а й ы ҡ. Улар ни, «һайт!» тигәндә, һыбайланырға торалар. Ҡылыстар ҡайралған, һөңгөләр осланған, уҡһаҙаҡ тартылған.

Ҡ а һ ы м. Яҡшы. Ә һиндә хәлдәр нисек, сотник Бикәт?

Б и к ә т. Оран ғына һал, полкауник ағай, арыҫландай атлығырбыҙ! Яңы кейемдәр алдыҡ. Яралылар урынына алтмыш егет килде. Шуларҙы һуғышҡа өйрәтәм.

Ҡ а һ ы м. Ярар, хәҙер үҙем барлап сығырмын.

Садыҡай керә.

Ә, юғалған мал, ҡайттыңмы?

С а д ы ҡ а й. Ҡайттым, полковник. Разведка уңышлы үтте.

Ҡ а һ ы м. Яҡшы. Ниңә ул тиклем оҙаҡланығыҙ?

С а д ы ҡ а й. Төндә бер ауылды баҫтыҡ. Ҡаты һуғыш булды. Ядкәр яраланды.

Ҡ а һ ы м. Яраланды? Ниңә шул дыуамалды йөрөтәһегеҙ, ә?

А ҡ й е г е т. «Мин французса беләм дә беләм, ағай, разведкаға ебәр әле!» — тип теңкәгә тейгәс, ҡаршы килмәгәйнем шул.

Ҡ а һ ы м. Ул күп белдекле дыуамалды йүгәнләрмен мин! Ҡайҙа, килтерегеҙ әле үҙен.

С а д ы ҡ а й. Ул бында. Хәҙер! *(Сыға.)*

Ҡ а һ ы м. Бөгөн миңә һәр бер һалдат ҡыйбат. Яҡшы белеп ҡуйығыҙ, мөмкин булған тиклем ҡорбанды аҙ бирергә.

Ядкәр менән Садыҡай керә.

Нәмә һин, парли-марле, эш боҙоп йөрөйһөң?

Ядкәр. Аҙыраҡ ҡулды тешләнеләр ҙә. Уныһы ғына була инде ул. А ля гер комм а ля гер: эйе, тимәк, һуғышта булғас, һуғышса эш күрелә...

Кәһым. Күп телеңә һалыш әле һин! Аҡйегет, был парли-марлеға биш тәүлек наряд бир!

Аҡйегет. Тыңлайым.

Ядкәр. Ағай, күберәк була түгелме һуң, ҡул ауырта бит әле...

Кәһым. Ҡабат ауыртмаҫҡа яҡшы булыр!

Садыҡай. Полковник ағай, ул наградҡа хаҡлы.

Кәһым. Шул биш тәүлек үҙе — ҙур наград була. Был турала һүҙ бөттө.

Садыҡай. Шулай ҙа, полковник ағай, ҡатыраҡ... Ядкәр, тегене күрһәт инде.

Ядкәр. Мин, ағай, бынау шаршауҙы алам тип кенә бәләгә ҡаптым да ул...

Ҡуйынынан француз флагы сығара.

Кәһым. Әһә, француз байрағы! Молодец! Бынығы өсөн наградаға ҡуйырмын.

Ядкәр. Ә нәрәт?

Кәһым *(көлөп)*. Ярай, ҡалһын инде, парли-марле... Батырҙар — тик данға хаҡлылар.

Ядкәр. Силь ву пле. Мерси. Ки с'экскиóз, с'экскиóз!

Садыҡай. Вәт, әй, ҡалай шәп белә! Нәмә ти ул, ағай, нәмә ти?

Кәһым *(йылы көлөп)*. Кем аҡланып маташһа, ул үҙен генә ғәйепләй, ти.

Садыҡай. Вәт, әй! Шулай дөрөҫ тәтелдәйме?

Кәһым. Тере француз! Дошманды еңгәнгә тиклем Наполеондан да уҙҙырыр әле ул...

Садыҡай. Вәт, әй!

Ядкәр. Уҙҙырам! Валлаһи — пáроль, доннёр — уҙҙырам, тик һуғыш ҡына оҙағыраҡ барһын...

Кәһым. Кит, алйот, оҙағыраҡ барһын... Кеше бында нисек тиҙерәк бөтөрөргә белмәй йөрөй.

Ядкәр. Башланған эш — бөткән эш. Улар көлөп башланылар, илап туҡтарҙар. Рирá бьен, ки рирá де лерньé. Аңлашыламы?

Садыҡай. Аңлашылмай.

Ядкәр. Ул, беҙҙеңсә әйтһәң: тәүҙә көлгән — бөлгән, уңғаны — аҙаҡ көлгән була.

Садыҡай. Дөрөҫ бит! Вәт, әй!..

Кәһым *(көлөп)*. Их ҡустым, улар һинең һымаҡтар тураһында: кү де тет тип тә әйтәләр, белəһеңме?

Ядкәр. Юк, ул тиклем тәрәнәнә бара алмайым.

Кәһым. Белмәһәң, бел: кыйыу, әммә уйламай эш итә тигән һүҙ була.

Ядкәр. Ә-ә.

Иван керә. Ул якшы коралланған, күңеле күтәренке.

Иван. Сәләм, полковник Кәһым!

Кәһым. Әйҙүк, атаман!

Иван *(көлөп)*. Мин ниндәй атаман?.. Кол мин. Бына беҙҙең помещик атаман тиһәң дә атаман: ул алтмыш мең крәстиәнде камсы аҫтында бейетә...

Кәһым *(канығып)*. Юк, халык елкәһен кимереүсе атаман түгел, һөлөк — кан эсеүсе була ул! Ә ил азатлығы өсөн көрәшеүсе — ысын хужа, атаман була.

Иван. Дөрөҫтөр ҙә... Кеше уйлап сығара инде шунда: байлык, дәрәжә. Ә бит тыуған сакта барыбыҙ ҙа бер төрлө булабыҙ — яланғас. Бары шул — бай балалары йомшак урында, мужик балалары көлтә кырында тыуалар. Аңламайым, ниңә был тигеҙһеҙлек? Кояш бит бар кешегә лә тигеҙ карай. Үлем, ваҡыты етеү менән, кемдең кем булыуына карамай килә бирә...

Кәһым. Уныһы тигеҙһеҙлек, яҙмыш хөкөмө, кеше көсһөҙ *(уйлана)*. Күп һөйләйһең, карт... Әллә шул турала аңлашырға килдеңме? Ваҡыт юк.

Иван. Алла менән бай хөкөмөнә тығылып буламы ни, юк. Эш бар, үҙ эшебеҙ, шул турала кәңәшкә килдем. Беҙ кисә йөҙ француз плен алдык, шулар араһында бер рус бар....

Кәһым. Кит, ышанмайым, рус булмаҫ!

Иван. Рус тип әйтеүе лә кыйын инде... Беҙҙең помещиктың улы, барчук ул.

Кәһым. Уныһы икенсе хәл. Шунан?

Иван. Шул барчук һуғыш башынан бирле Наполеонда хеҙмәт иткән. Бик интектергән халыкты. Ул ашарға таптырһынмы, ул кейем, ул башкалар. Приказ артынан приказ. Әгәр буйһонмаһаң, рус язаһы — армай һуктырыу, каҙаҡка ултыртыу...

Кәһым. Тап йыртҡыс икән!

Иван. Шулай шул! Бына шул барчукты, офицер йоратын, ошо тирә мужиктары: «Беҙҙең кулға биреген, уны үҙебеҙ хөкөм итәбеҙ», — тиҙәр. Шуны нимә эшләргә икән? Мужиктар уны аҫасаҡтар бит!

Кәһым. Тимәк, олаталары эргәһенә ебәрәсәктәр. Якшы. Юлы таҡыр. Кулдарына бир.

Иван. Эйе. Тик... Бының өсөн аҙаҡ миңә әләкмәҫме?

Ҡ а һ ы м. Ә һин үҙең ҡыҫылма, эште мужиктар үҙәре ослаһындар. Аҙаҡ, күмәк бүре талағас, ҡайһы башлап тешләгәнен кем айыра ала?..

И в а н. Булды, шулай эшләнек!

Ҡ а һ ы м. Әммә һаҡ эшлә, һиҙмәһендәр.

И в а н. Атҡан, сапҡан — һыуға батҡан, эт тә тоймаҫ.

Ҡ а һ ы м. Дөрөҫ! Әйҙәгеҙ, сотниктар, полкты ҡарап сығайыҡ. Ядкәр, һин хәҙергә ял ит.

Сығалар. Ядкәр яңғыҙ ҡала.

Я д к ә р. Анау капрал: «Ла шермент, ла шермент — һөйөкләм», — тигән булды. Бирҙе бында Ҡаһым ағай миңә һөйөкләмдә...

Сатырҙан Г ө л н у р сыға.

Г ө л н у р. Бәй, Ядкәр, ҡайтҡанһың да баһа.

Я д к ә р. Ҡайттым шул.

Г ө л н у р. Әйҙә, тамаҡ ялғап ал.

Я д к ә р. Мин туҡ: түрә... биш тәүлек нәрәт һоғондора яҙҙы әле.

Г ө л н у р. Көйөнмә, егет бул, биш тәүлек күпме ни ул? Мин һинең бер ҡыйып әйтер һүҙеңде ике йыл көтәм.

Я д к ә р. Ниндәй һүҙ ул, Гөлнур?

Г ө л н у р. Белмәмеш кеше булып торма инде, ул һүҙ — яратам була.

Я д к ә р. Ә-ә... ул икән. Яратам, Гөлнур, яратам! *(Бүләк бирә.)* Мә, француз көҙгөһө. Теге дуҫ капрал биргәйне.

С а ф и я *(сатырҙан тауыш итә)*. Гөлнур!

Г ө л н у р. Хәҙер, еңгә! Рәхмәт, Ядкәрем.

Ядкәргә ҡул болғап хушлаша ла сатырға уҙа. Я д к ә р китә. Ҡ о л т ү б ә менән Ф о л ь г н е р керәләр.

Ф о л ь г н е р. Бына шулай, Ҡолтүбә тархан, мине штабҡа күсерәләр. Беләм, Ҡаһым үҙенән алыҫлаштырырға тырыша, әҙен йәшерә... Ләкин минән аңһат ҡотола алмаҫ, һүҙемде — һүҙ итермен. Бына ағыу. Нисек булһа ла Ҡаһымға эсер. Унан һин — полк командиры. Башы юйылһын, ә ҡалған ягы еңел эш. *(Ниндәйҙер ҡағыҙ төргәге бирә.)*

Ҡ о л т ү б ә. Аңлашыла... Мин үс алмайынса ҡалмай торғайным!

Ф о л ь г н е р. Ләкин шыма эшлә.

Ҡ о л т ү б ә. Себен дә тоймаҫ.

Ф о л ь г н е р сыға. Ҡолтүбә сатыр ягына ҡолаҡ һалып тыңлай.

С а ф и я. Ҡаһым ағайың тағы киттеме? Шул һуғыш тип, арыу-талыу белмәй, харап була инде.

Г ө л н у р. Китсе еңгә.
Мөхәббәткә шундай бай йөрәгең,
Ниңә ярлы икән түҙемгә?
Ерле юҡҡа гел генә көймә һин,
Һары һабыштырып йөҙөңә.
Түрәбеҙҙе яҙмыш һаҡлап килде,
Әлдә һаҡлар, еңгә, көймә бик,
Даны менән шаулата бар илде, —
Югалырлыҡ юлда йөрөмәй бит!

С а ф и я. Шулай ҙа бит, һуғыш хәлен белеп булмай. Төштәрем дә буталып тора...

Г ө л н у р. Кит, кит, юҡты һөйләмә. Мә, ҡара әле, Ядкәр миңә ниндәй көҙгө бирҙе.

С а ф и я *(көҙгөгә ҡарап)*. Матур көҙгө икән. Тик мин һурылдым: яңаҡтарым ни ҡорло төпкә батҡандар.

Г ө л н у р *(көлөп)*. Гел илаулап, үҙеңде үҙең ашап йөрөһәң, һурылыу түгел, ҡаҡ һөйәккә лә ҡалырһың әле. Ана, Аҫылбикә ниндәй янып тора!

С а ф и я. Ул бит — батыр ҡыҙ.

Г ө л н у р. Ә һин батыр ҡатыны, сапсан бул, мышҡылдама. Әтеү үҙеңде ағайым яратмаҫ...

С а ф и я. Тәүбә, тәүбә! Ауыҙыңдан ел алһын!

Г ө л н у р *(ҡысҡырып көлә)*. Бына тағы ысынға алды, мин шаярып ҡына әйтәм бит!

Ишек артында аяҡ тауыштары.

С а ф и я *(шат)*. Ҡаһым ҡайтты, буғай!

Г ө л н у р. Ә һин көйә инең юҡҡа...

Ҡолтүбә килеп керә. Уның ҡулында ниндәйҙер төргәк.

Ҡ о л т ү б ә. Шәпме, Сафия?

С а ф и я *(аптырап)*. Ә-ә, Ҡолтүбә икән...

Ҡ о л т ү б ә. Бүлдем, ахыры, татлы уйығыҙҙы... Сорһоҙ килдем.

С а ф и я. Ниңә сорһоҙ булһын, бик ваҡытлы,
Күренмәйһең күҙгә-башҡа ла,
Элек ҡайһылай йөрөшә инек яҡшы...
Беҙҙе лә онотоп ташлама.

Ҡ о л т ү б ә. Алла һуғыр, Сафия, әйтмә улай,
Оноторға яраймы дуҫтарҙы?..
Белəһең бит — һуғыш, бушап булмай,
Кисәбеҙ һыуҙарҙы, уттарҙы.

Бөгөн һинең сәскә байрамың бит,
Ҡотларға килдем.

С а ф и я. Рәхмәт.

Ҡ о л т ү б ә *(төргәген тағатып)*. Ҡабул ит, Сафия, бүләк.

С а ф и я. Рәхмәт.

Ҡ о л т ү б ә. Эҫе тәнегеҙҙә туҙһын!
Бүләктән дә ҙуры — изге теләк —
Тигеҙ ғүмер, бәхетең булһын!
(Сафияның иңенә аҫыл елән һала.)

Г ө л н у р. Ниндәй матур! Их, килешә!..

С а ф и я. Ҡунаҡты буш ебәрмәйек, ҙурланы, ҙурланы. Бар, Гөлнур, сәй әҙерлә.

Ҡ о л т ү б ә. Ҡуй, кәрәкмәҫ...

Г ө л н у р. Ул ни хәбәр? Хәҙер, еңгә, барыһын булдырам! *(Йүгереп сығып китә.)*

Тынлыҡ.

Ҡ о л т ү б ә. Сафия, ни ҡорлоҡ көн күрәһең,
Дуҫым бик ҡаҡмаймы үҙеңде?

С а ф и я. Ниңә ҡаҡһын?

Ҡ о л т ү б ә. Артыҡ үҙгәргәнһең:
Ҡайғы һөрөмө баҫҡан йөҙөңдө.

С а ф и я. Шулаймы ни?.. Ҡаһым өсөн бошам...

Ҡ о л т ү б ә. Ул уйында йөрөмәй, эше күптер,
Һуғыш хәлен үҙең беләһең...

С а ф и я. Ҡаһым — ҡыйыу, һүҙгә артыҡ тура,
Ҡай саҡ кеше хәтерен һаҡламай...

Ҡ о л т ү б ә. Еына, бына шуныһы ла ярамай!
Ҡай берәүҙәр аңлап етмәй быны,
Асыу итеп эскә һалалар,
Шунан, берәй яйы килгәс, уның
Үҙенә аяҡ салалар!

С а ф и я. Шулайҙыр шул...

Ҡ о л т ү б ә. Мине лә ҡаға ул:
Йөҙ ҙашынан алды, ниңәлер.
Мин уға һәр ваҡыт ҡуямын юл,
Ниндәй яманлығым тейгәндер...

С а ф и я. Йөҙ башынан алды, ни өсөн?

Ҡ о л т ү б ә. Юҡтан ғына сыҡты.
Миндә ғәйеп күберәк:
Ҡай саҡ самаламай асам ауыҙ,
Шуға хәтере ҡалды әҙерәк...

С а ф и я. Ни әйттең һуң?

Ҡ о л т ү б ә. Әй, шунда... бер ҡыҙ менән урала ул...

С а ф и я. Шаяртаһың! Юрый, хөсөт ҡылып,
Миңе көнләштермәк булаһың.
Көнләшмәйем! Ул — иң түбән ҡылыҡ,
Мин унан юғары торамын!
Унан, мин Ҡаһымды яҡшы беләм:
Ул бер ваҡыт кеше алдамаҫ,
Уның өлкән йөрәгендә минән
Башҡа берәү урын алалмаҫ.

Ҡ о л т ү б ә. Мәйлең, ышанмаһаң, ныҡышмайым,
Тик шик булған өсөн күңелдә
Әйттем генә...

С а ф и я. Кем ул ҡыҙыҡай?

Ҡ о л т ү б ә. Аҫылбикә!

С а ф и я. Булмаҫ, булмаҫ!

Ҡ о л т ү б ә. Минең ҡолаҡтарым
Белмәй ине әле алдаша,
Күҙҙәрем дә таҙа... Бер төн Ҡаһым
Уның менән булды таңғаса!

С а ф и я. Китсе?!

Ҡ о л т ү б ә. Валлаһи хаҡ! Икмәк тимен,
Әйтерһең дә, ирле-ҡатынлы...

С а ф и я. Ah, хоҙайым, нәмә ишетәм мин?!
Ташҡа бәрәйемме башымды!? *(Мендәргә ҡаплана. Илай.)*

Ҡ о л т ү б ә *(әкрен, үҙ алдына)*. Ih-hи...
Хәйләр йөрәгенә тура килде!
Күпме кәрәк бисә кешегә:
Бер бүләккә башы күккә тейҙе,
Ғәйбәт һалды уттар эсенә!..

С а ф и я *(тора)*. Ah!..

Ҡ о л т ү б ә. Ҡуй, илама; тархан ҡыҙы бит һин, һауалы бул. Бына бер әмәл бирәйем әле мин һиңә: өшкөргән тоҙ. Шуны эскән кеше башҡаларға күҙ һалмаҫ булыр.

С а ф и я. Бир, ағай.

Ҡ о л т ү б ә. Тик был турала бер кем белмәһен, юҡһа шифаһы юғала уның.

С а ф и я. Ярар, ағай.

Ҡ о л т ү б ә. Бохара дарыуы, хажи өшкөргән. Хәҙергә хуш.

С а ф и я. Тор әле, сәй эҙерләттем бит. Был ярҙамың өсөн ни рәхмәттәр генә әйтермен икән?

Ҡ о л т ү б ә. Күп рәхмәт кәрәкмәй. Булдыра алһаң, һора, Ҡаһым мине ҡабат йөҙ башлығы итһен.

С а ф и я. Ярар.

Ҡ о л т ү б ә сыға башлай. Ғ ө л н у р инә.

Гөлнур. Бәй, ағай, ниңә китәһең?.. Сәй өлгөрттөм.

Колтүбә. Рәхмәт. *(Сыға.)*

Гөлнур. Был ни тигән эш инде: сәй әҙерләтте, ә үҙе ултырмайсы... Еңгә, ниңә күңелең кителде, әллә берәй яман хәбәр килтергәнме?

Сафия. Юк... Бар, тиҙ генә Аҫылбикәне сақыр, мин әйтте тиген.

Гөлнур. Ярар! *(Сыға.)*

Сафия. Мөхәббәт ул ҡурсаҡ уйыны түгел,
Тойғоно кәмһетеү ярамай.
Ҡаһым, ниңә ятҡа һалдың күңел,
Алдатаһың мине балалай?!
Йөрәгемдә тик һиңә урын бар,
Һин биләйһең барлыҡ күңелемде,
Һиңә арнап мин йырлайым йырҙар,
Һиңә бағышланым ғүремемде.
Ә һин, Ҡаһым?! Юҡ, юҡ, ышанмайым,
Ул йөрәген шулай ваҡламаҫ,
Биргән һүҙенән бер ҙә тайшанмай ул,
Мөхәббәтем аша атламаҫ!..
Аҫылбикә?.. Хәйер, йәш әле ул,
Еңелһеү булаһың ҡыҙ саҡта,
Тойғоға таянып йәшәйһең гел,
Әүрәп ҡуйыуы бар ысынлап та...
Аһ, шикләнеү — күҙгә күренмәҫ ут —
Ниндәй аҙап менән яндырҙы!
Яҡындарҙан янда бер кем дә юҡ,
Уртаҡлашыр өсөн ҡайғымды...
Ни эшләйем һуң? Әллә барын-барын
Ярып һалайыммы үҙенә?
Әгәр хаҡ булмаһа?.. Көлөр Ҡаһым,
Унан ҡарай алмам күҙенә...

Аҫылбикә менән Гөлнур көлөшә-көлөшә килеп керәләр.

Аҫылбикә. Шәпме, Сафия еңгә? Ниңә сақырҙың, әллә тағы эсең бошамы?

Гөлнур. Еңгәмдең көймәгән көнө юҡ инде ул!

Сафия. Көлмә, Гөлнур, беҙҙе яңғыҙ ҡалдыр.

Гөлнур *(үпкәләп)*. Аһа, мин артыҡ башмы әллә? Харап икән, ярай, сығамын. *(Тиҙ генә сығып китә.)*

Аҫылбикә. Юҡҡа ҡыҙҙың күңелен китәһең, еңгә, тора бирһен ине.

Сафия. Кәрәкмәй. Икәүҙән-икәү генә һөйләшкем килә минең. Ултыр.

А ç ы л б и к ə. Ярай, улай булһа...

С а ф и я *(оҙаҡ ҡарап торғас)*. Дөрөҫ әйттең, Аҫылбикə, әсем боша шул: аҙналар буйы Ҡаһымды күрə алмайым; ə ул элек улай булмай торғайны.

А ç ы л б и к ə. Хəҙер, еңгə, эштəр ҡыҙыу шул: дошманды ҡыуабыҙ!

С а ф и я. Шул ғынамы икəн?.. Ни өсөндөр ул минəн һыуынды кеүек тойола.

А ç ы л б и к ə. Шулай тип əйтергə нисек телең бара, Сафия еңгə?

С а ф и я. Шикләнəм шул, күңел бит...

А ç ы л б и к ə. Шикләнеү түгел, саф йөрəкле кешегə тап төшөрөү был! Мин, шундайын ирем булһа, ғорурланыр инем əле!

С а ф и я. Ғорурланыр инең?

А ç ы л б и к ə. Эйе! Бəхетле ҡатын һин, Сафия еңгə.

С а ф и я. Мин дə үҙемде шулай тоя инем элек...

А ç ы л б и к ə. Əле лə шулай ул! Уны яратырға кəрəк, ə һин көнләшəһең... Ниндəй иҫəрлек!

С а ф и я. Ни эшләйем, ныҡ, бик ныҡ яратам бит мин уны!

А ç ы л б и к ə. Ҡаһым түрəне барыбыҙ ҙа ярата. Беҙҙең даныбыҙ ул! Их, еңгə, еңгə, нисə йылдар буйы бергə тороп та уны əҙ белəһең икəн əле һин...

С а ф и я. Бөттө. Кисер мине, Аҫылбикə.

А ç ы л б и к ə. Нəмəһен кисерергə? Минең алдымда һинең ғəйеп эшләгəнең юҡ.

С а ф и я. Бушты һөйләнем дə баһа.

А ç ы л б и к ə. Уныһы өсөн хоҙа кисерер...

С а ф и я. Əйт əле, Аҫылбикə, һинең ҡасан да булһа берəйһен янып һөйгəнең бармы?

А ç ы л б и к ə *(көлөп)*. Бына хəбəр! Уныһы тағы нəмə тигəн һүҙ?

С а ф и я. Юҡ, əгəр һөйһəң, һин дə шулай көнләшер инеңме тип һорамаҡсы ғына итəм.

А ç ы л б и к ə. Юҡ. Əгəр мин һөйһəм, ул кеше утҡа инһə, утҡа инеп, ул шат булһа, шат булып, ул көйөнһə көйөнөп, гел бергə кисерер инем. Əммə донъяла һиңə оҡшаған кешеләр əҙ булған кеүек, уларҙың ҡауышҡан саҡтары ла һирəк була.

С а ф и я. Аңламайым, һинең һүҙең — йомаҡ һымаҡ...

А ç ы л б и к ə. Шулайҙыр, мин һөйләшə белмəйем шул... Əммə шуны əйтке килə: мөхəббəт ул — нескə, һоҡланғыс гүзəл, шул уҡ саҡ бик ҡатмарлы нəмəлер. Уны аңлауы ҡыйын, табыуы унан да ҡыйыныраҡ, ə юғалтыуы... бик еңел — тоймай ҙа ҡалаһың!

Сафия. Ә үҙең бик күпте беләһең.

Аҫылбикә *(көлөп)*. Юҡ... Мин бары әсәйем һүҙҙәрен генә ҡабатлайым.

Сафия. Аҡыллы кешелер әсәйең?

Аҫылбикә. Белмәйем... Ул атайым менән бергә бар ауырлыҡты тиң күтәргән, тиң көйгән, тиң шатланған. Тик бергә үлә генә алмаған. Шуға ғына ҡайғыра ине ул.

Сафия. Тимәк, һөйгән кешең менән бергә үлеү — бәхет?

Аҫылбикә. Юҡ, уларҙың бергә йәшәүҙәре — тағы ла ҙурыраҡ бәхет. Ҡаһым түрә менән һеҙҙең дә оҙаҡ ғүмер итеүегеҙҙе, бәхетле булыуығыҙҙы теләйем мин.

Сафия. Рәхмәт.

Аҫылбикә. Хуш бул, еңгә, мин киттем. *(Сафияны күкрәгенә ныҡ ҡыҫып иркәләй ҙә етеҙ сығып китә.)*

Сафия. Болан кеүек йылғыр ҡыҙ. Мин уның һүҙҙәренән ҙары бер нәмәне яҡшы аңланым: һөйгәнеңә тиң булырға кәрәк икән... Эйе, эйе!

Аҫылбикә, Ҡолтүбәнең тирәктәр араһында торған атын тоҫмаллап, туҡтай, тирә-яғына ҡараштырғылай. Шул ваҡыт Ҡаһымдың килгәнен күреп, бер яры йәшеренә. Ҡаһым уны тоймай, сатырға уҙа.

Ҡаһым. Сафия, бөгөн поход сығабыҙ, тиҙ генә кейемдәрҙе әҙерләштер.

Сафия *(һалҡын)*. Хәҙер.

Ҡаһым. Ниңәлер күңелһеҙ һин, Сафия.

Сафия. Юҡсы.

Ҡаһым. Тураһын әйт, мин бит һине үтә күрәм.

Сафия. Ай-һай, шулаймы икән?

Ҡаһым. Әллә һаулығың юҡмы?

Сафия. Былай ғына... Ниңә һин минән ҡасаһың? Ә үҙең яратам тигән булаһың... Шулмы яратыуың?! *(Иламһырай.)*

Ҡаһым. Мөхәббәт ул — бәхеттең ҡанаты,
Түбәнһетмә уны юҡ менән.
Мин яратам һине. Әммә, ҡатын,
Бер нәмәне иҫтән сығарма:
Мин — һалдатмын, ҡыйбат биргән антым,
Юл ҡуймамын уны боҙорға!

Сафия уға поход кейемдәре бирә.

Сафия. Ярар, йәнем, ҡабат бер нәмә лә һорамам... Ҡолтүбәне ниңә йөҙ башынан алдың?

Ҡаһым *(йомшаҡ көлөп)*. Шулмы ҡабат һорамау?

Сафия. Бөттө, бөттө...

Ҡаһым. Их Сафия, һиңә лә ауырҙыр бында...

Сафия. Ни эшләйһең бит, мин һалдат ҡатыны, уның ҡайғыһын да, шатлығын да уртаҡлашырға тейешмен.

Ҡаһым. Дөрөҫ, Сафия. *(Уны йылы ҡосаҡлай.)*

Сафия. Бәлки, үкендерер
Тынғыһыҙ был төндәр, яныуҙар...
Ләкин кире ҡайтмаҫ был ғүмерҙәр,
Әкиәт төҫлө, алыҫ ҡалырҙар.
Бәлки, улар татлы ла тойолор,
Күргән аҙаптарҙан әҙ ҡалмаҫ,
Ҡайғы, хәсрәттәр ҙә онотолор,
Хәтерләгәс, күңел һыҙланмаҫ.

Ҡаһым. Эйе, Сафиям, ауыр көндәр уҙыр,
Ҡанлы ерҙә атыр сәскәләр,
Был аҙаптар әкиәт булып ҡалыр,
Кешеләр иркен, һөйөнөп йәшәрҙәр...

Сафия. Кешеләр һөйөнөр... Бөгөн миңә — ҡайғы,
Ут эсендә янам, һиҙмәйһең.

Ҡаһым. Нәмә булды тағы?

Сафия. Мине бит һин һөймәйһең!

Ҡаһым *(рәнйеп)*. Иҫәр! Миңә кәрәк был балалыҡ?
Мин һиңә мәңге һүҙ биргәнмен:
Миңә бер нәмә юҡ һинән артыҡ,
Утҡа, һыуға хатта керәмен!

Сафия. Кисер, Ҡаһым! Мин ышанам һиңә...

Ҡаһым. Рәхмәт. Ҡана, һыуһын бир ҙә, мин китәйем инде.

Сафия. Хәҙер бирәм.

Туҫтаҡ менән һыуһын әҙерләй. Ҡолтубә биргән порошокты туҫтаҡҡа һалып, иренә бирергә бара.

Ҡолтубә *(тыштан, быны күреп шатлана)*. Ә-һә!..

Сафия *(тауышҡа һиҫкәнеп, һауытын түгеп ебәрә)*. Ah, аҡ түгелде! Насар фал... Ни яҙғандыр яҙмыш?

Ҡаһым. Ҡуй, борсолма. Миңә бер ни булмаҫ.
Юҡ, яҙмыштан ҡурҡмам,
Хатта уға ҡаршы барырмын.
Үлем, аҙап вәғәҙә итһен алда,
Әммә үҙ юлымда ҡалырмын!
Ә һин, ҡурҡһаң, ҡайтып тор Уралға.

Сафия. Юҡ, ҡайтмайым, миңә һинән башҡа,
Бел, Ҡаһымым, йәм юҡ донъяла!
Ни күрһәк тә бергә...

Ҡаһым. Бергә, ғүмергә!.. *(Ныҡ ҡосаҡлай.)*

Ҡ о л т ү б ә. Эх, булманы! *(Ҡырҡа ҡул һелтәп китә башлай.)*

А ҫ ы л б и к ә *(уның ҡаршыһына сыға).* Нәмә булманы, ағай?

Ҡ о л т ү б ә. Атып — мәргән булманым, теләк теләп — уңманым... Сотниклыҡтан да алдылар. Бик ҡайғырам.

А ҫ ы л б и к ә. Уйы ҡыйыҡтың — уғы ҡыйыҡ; эш теләктә түгел, беләктә. Сәйер кеше һин, Ҡолтүбә, сәйер! Теләгең дә тиктәҫ түгелдер...

Ҡ о л т ү б ә. Китсе әле, бәйләнмә! Бик телең ҡысыһа, бар, ҡайраҡҡа өйкә, баҫылыр.

А ҫ ы л б и к ә. Минең ҡылысым да үткер, уғым да мәргән, һаҡ бул, тап килә күрмә!

Ш а р ш а у

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Березина яры, 28 ноябрь. Төн. Ҡыйратылған француз армияһының ҡалдыҡтары усаҡ тирәһендә ултыра. Араларында ҡ а р т г р е н а д е р, б е р к а п р а л бар. Улар, ныҡ талсыҡҡан булыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡурҡыштарынан, төндө йоҡоһоҙ үткәрәләр.

Г р е н а д е р. Таң яҡынлаша, малайҙар, тиҙерәк шылыу яғын ҡарарға кәрәк.

К а п р а л. Таң яҡынлаша, ә беҙгә төн килде: бөттөк, бөттөк! Ниңә император күперҙе яндыртты? Ун меңләгән кеше һәләк булды бит! Ун мең кеше!

Г р е н а д е р. Император өсөн ун мең кеше нәмә? Әгәр күпер яндырылмаһа, рустар Березина аша сығып, уның үҙен һәләк итәләр ине бит.

К а п р а л. Ҡасты, һалдаттарын ташлап, ҡурлыҡлы ҡасты! Ниңә гвардияһын һуғышҡа ҡушманы ул?

Г р е н а д е р. Ха! Гвардияны ҡырҙырырғамы? Юҡ, император дурак түгел: ул һуғышты отторҙо, ләкин тәхетте юғалтырға теләмәй. Әгәр гвардияһыҙ ҡайтһа, Парижға индерәләрме ни уны? Ҡыҫҡаһы, уйын бөттө, малайҙар.

К а п р а л. Эйе, шул ғына ҡалды инде беҙгә: бер нәмә эшләр хәл юҡ, кем булдыра ала, бер нигә ҡарамаҫтан, ҡотолорға тырышһын...

Г р е н а д е р. Киттек, малайҙар!

К а п р а л. У-у, минең аяҡтарым туңғандар, атлай алмайым!

Гренадер. Ә һин, улым, шуны бел: аҡылһыҙ, аяҡтары булмаған кешенең башы тыныс.

Бер һалдат. Дөрөҫ.

Капрал. Тимәк, мине ташлап китәһегеҙ, ә? Их, һеҙ... һеҙҙә ни фуә́, ни люә́!..

Гренадер. Эйе, закон да, намыҫ та ҡалманы шул беҙҙә. Киттек, малайҙар!

Капрал. Ләғнәт һеҙгә! Мине ҡыраҡай башҡорттар аяны, үҙ пленныйына алыштырып алып, кире часыма ҡайтарҙылар. Һеҙ... кешелекле французлар, имеш!..

Илай. Башҡалар, уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмай, сығып китәләр. Озаҡ тынлыҡ, тик ҡарлыҡҡан тауыш менән үкһегән капралдың ыңғырашыуы ғына яңғырап тора. Әсе һыҙланыу.

Шуның артынса уҡ яҡынлашып килгән марш ишетәлә.

Полководец батыр ир Кутузов,
Уттар, һыуҙар кисте, ҡурҡманы.
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов!
Наполеондың баҫҡынсы яуҙарын,
Көтөү кеүек әйҙәп, туҡманы!
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов!
Рәсәйҙә генә иле, һай, ил икән,
Донъяла иң гүзәл ер икән!
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов!
Ирҙәре лә батыр, һай, ир икән:
Ил дошманын яуҙа еңә икән!
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов!..

Бер яҡтан — Егор, икенсе яҡтан — Иван, өсөнсө яҡтан Ядкәр килеп керәләр.

Иван *(бүркен атып бәреп)*. Аллаға шөкөр, был көндө лә күрҙек, еребеҙҙә ҡораллы бер дошман һалдаты ла ҡалманы! *(Ятып ерҙе үбә.)* Эх, тыуған ерҙең ҡары ла йылы!.. Егеттәр, инде бер иркен тын алырға була.

Өсәүләп ҡосаҡлашалар. Иван суҡынып та ала.

Егор *(капралды күреп)*. Ҡарағыҙ әле, был ниндәй туңған әтәс?

Ядкәр. Бәй-бәй, был теге беҙгә бер эләккән ҡош — капрал да баһа. Салю, мон шер! Эйе, сәләм, һөйөклөм! Әйттем бит мин һиңә — о ревуар тип, бына тағы осраштыҡ.

К а п р а л. Атығыҙ мине, сыҙар хәлем ҡалманы!

И в а н. А, юҡ, беҙ — христиандар — йығылғанды түпәләмәйбеҙ. Тор, санитарға алып барайым үҙеңде.

К а п р а л. Санитар... Санитар...

И в а н. Әйҙә, әйҙә, күп тәтелдәмә, мсн шер. *(Капралды яурыныңа күтәреп алып сыға.)*

Егор менән Ядкәр генә ҡалалар.

Е г о р *(ергә ҡырын төшөп ята)*. Иҫеңдәме, Ядкарка, Һаҡмар буйында бесән сапҡас, ошолай һуҙылып төшөп ята торғайныҡ.

Я д к ә р. Эйе. Элек һуғышта йөрөүселәр: «Ерҙең ситенә етеп, аяҡ һалындырып ултырҙыҡ», — тип һөйләй торғайнылар. Беҙ тап шулай булдыҡ инде.

Е г о р. Шулай ҙа тыуған яҡтар бик ныҡ һағындырҙы. Уйлап ҡараһаң, Уралдан өс-дүрт меңҡаҡрымлап ер үттек бит!

Я д к ә р. Саҡрымын кем һанаған инде уның. Ә бына һуғыш буйына өс ат сәсәттем. Ул ғынамы, теге ваҡыт, Бородино һуғышында, һин күтәреп алып сыҡмаһаң, ҡанһырап, шунда үҙем дә бөткән булыр инем.

Е г о р. Как же? Земляк бит, ҡайһылай ташлап ҡалдыраһың? Унан мин, Һаҡмар буйына ҡайтҡас, атайыңа — Исхаҡ белешкә — нәмә тип әйтер инем?..

Я д к ә р. Ә французлар үҙ французларын ташлайҙар.

Е г о р. Улар бит — кеше еренә баҫып кереүселәр, ә беҙ тыуған тупрағыбыҙ өсөн көрәшәбеҙ.

Я д к ә р. Правда, земляк, һинеке дөрөҫ!

Ҡулын ҡыҫа. Шаулашып Ҡаһым, Аҡйегет, Байыҡ, Садыҡай һәм башҡалар керәләр.

Ҡ а һ ы м. Батырға ла ял кәрәк, тиҙәр. Уҙамандар, туҡтарға!

Кешеләр төрлөсә ултырышалар.

Ф о л ь г н е р. Ялды, полковник, Парижда шәпләп яһарбыҙ инде.

Ҡ а һ ы м. Ә бүренән көтөү араланғас,
Кеше тыныслана түгелме?..
Париж алыҫ ҡала...
Уға төрлө яҡтан баралар.
Лондондымы, хәтерем алдамаһа,
Ул ҡалаға яҡын һанайҙар.
Ә беҙ данға еттек. Ары һуғыш —
Ситтәр файҙаһына буласаҡ,

Россия ҡотолдо. Инде тыныс.
Үҙ ерендә үҙе торасаҡ...

Ф о л ь г н е р. Ул — фельдмаршал Кутузов фекере, полковник. Ә государь-император хәҙрәттәре бөтөнләй башҡа фекерҙә...

Ҡ а һ ы м. Бәхәсләшмәйем, майор. Ләкин һалдат, барынан элек, командующийға буйһона... Ярай, егеттәр, ни шымып ҡалдығыҙ? Әйҙә, ҡылыс менән оҫта эш иткән һымаҡ, шатлыҡты ла күрһәтә белегеҙ!

С а д ы ҡ а й. Була, ағай! Байыҡ олатай, тарт ҡурайыңды.

Ул ҡурай уйнай. Күмәк йыр башлайҙар.

Й ы р: Атлы ғәскәр сыға күперҙән,
Сығыр еркәйҙәре һүтелгән.
Француздарҙың ғәскәрен
Кутузов та ҡырып бөтөргән!..

Фольгнер ситкәрәк китә, ул Кутузовты данлау йырынан, күрәһең, риза түгел.

Ф о л ь г н е р *(үҙ алдына)*. Ярай,
Ҡаһым үлер бөгөндән үк,
Етәр, әлдә бик күп һикерҙе!
Яҡшы аттың хәҙер кәрәге юҡ,
Асыуҙы ла байтаҡ килтерҙе...
Ул тарыған Кутузов сиренә,
Беҙҙә ундай сиргә сара бар:
Серек тешкә дарыу әрәм генә,
Тамырынан һурып алалар!

Ҡолтүбәне ым менән янына саҡыра.

Ҡ о л т ү б ә. Нәмә булды, майор әфәнде?

Ф о л ь г н е р. Мин биргән дарыуҙың көсө ҡайҙа?

Ҡ о л т ү б ә. Мин уны Ҡаһымдың ҡатынына биргәйнем.

Ф о л ь г н е р. Их, ҡырған баш, бүтәнсә аҡыл тапманыңмы ни?.. Ярар, ул артабан һуғышыуға ҡаршы тора. Бының өсөн уны эшенән аласаҡтар... Ләкин беҙгә лә тик ятмаҫҡа кәрәк: ул эш әгәр барып сыҡмаһа, мә, ағыу һоғондор.

Ҡ о л т ү б ә. Тыңлайым!

А ҫ ы л б и к ә үтеп барышлай, уларҙың нәмә эшләгәнен күреп ҡалып, башын сайҡай.
Уйын барған ерҙә тауыштар көсәйә.

Кобора. Атайың, бахыр, был шатлыҡлы көндәрҙе күрә алманы. Улым, Әүбәкер, йә, булмаһа, һин бер бейеп күрһәт, атайыңды иҫкә алһындар.

Әүбәкер. Әй, оялам да...

Ядкәр. Ярамай, ярамай, бейеп ташла, бер нәмәгә ҡарамай. Мин әле һинең кеүек саҡта, биҙрә ҡаҡҡанға ла бейей торғайным. Ә бында ҡурай, Байыҡ олатайың тарта.

Әүбәкер. Ярай, әтү. *(Бейергә төшә. Ул балаларға ғына хас ихласлыҡ менән бейей.)*

Төрлө хуплау тауыштары.

Ядкәр. Тап атаһы — һуйған да ҡаплаған!

Аҡйегет. Булыр бала биләүҙән!..

Аҫылбикә. Һай, январың, ата балаһы шул!..

Иван. Нығыраҡ баҫ, нығыраҡ!
Иван һуҡҡан ергә һуҡ!..

Кобора. Минең улым бейер ул,
Дошман яуын еңер ул!

Малай бейеп бөтә. Егеттәр бейергә төшәләр.

Ядкәр. Егеттәрҙең һөләгә,
Урта бармаҡ кеүеге,
Ун дошманға ла бирешмәй,
Ҡаршы сыҡһа, бер үҙе!

Аҡйегет. Баҫҡан ерҙә аттары
Онтап үтә таштарҙы,
Сапҡан саҡта, ҡылысы
Өҙә яуыз баштарҙы!

Садыҡай. Уҡтары мәргән тейер,
Дошман йөрәген телер,
Ҡурҡыу белмәҫтәр яуҙа,
Елдәй елерҙәр алда!
Һай-һай-һай!..

Ядкәр. Ҡаһым ағай, ниндәйҙер һыбайлылар сабышып киләләр!

Ҡаһым. Корпус командиры генерал Яков Семенов, буғай... Тәртип, егеттәр! Яҡшы ҡаршылайыҡ. Табын әҙерләргә!

Егеттәр тиҙ-тиҙ үҙҙәрен тәртипкә килтерә һалалар. Берәүҙәр табын әҙерләргә тотона. Тоҡ тауыштары яҡынлаша.

Ҡаһым. Смирно!

Аҡйегет. Смирно!

Барлыҡ йөҙ баштары һәм рядовойҙар смирно баҫалар. Адъютант-тарын эйәртеп Семенов керә.

Ҡаһым. Генерал Семеновҡа — ур-а-а! *(Ура яңғырай.)*

Семенов. Еңеү менән, батырҙар! Сәләмәтлек телә-йем!

Барыһы. Еңеү менән, беҙҙең данлыҡлы генерал!

Семенов менән Ҡаһым ҡосаҡлашып үбешәләр. Ура, шатлыҡ ауаздары яңғырай.

Семенов. Вольно!
Ҡаһым. Вольно!
Аҡйегет. Вольно!

Строй таралыша.

Семенов *(арҡаһынан ҡағып)*. Ну, ҡартлас, Наполеонды туҡманыҡмы?

Байыҡ. Больно хараша моклашка дал, Ополеон губсим пропал! *(Көлөп таҡмаҡлай.)*

Француздар килеп кергән
Мәскәү тигән ҡалаға,
Рус ғәскәре өҙә һуҡҡас,
Ҡасты улар далаға!
Любизники-любизарь,
Молодец, молодец!

Семенов. Дөрөҫ, ҡартлас! *(Ҡаһымға.)* Ҡайҙа әле һеҙҙең теге ялбырбаш?

Ҡаһым. Аҫылбикә Янтурина!

Аҫылбикә. Мин бында! *(Семенов алдына килеп төҙ баҫа.)*

Семенов. Эх батыр ҡыҙ, барлыҡ һуғыш буйы
Полкка ҙур ярҙам килтерҙең.
Мә, медаль таҡ. Оҙаҡ йылдар уны
Минең төҫөм итеп йөрөтөрһөң.

Түшенән миҙалын алып, Аҫылбикәгә тағa.

Аҫылбикә *(уңайһыҙланып)*.
Ҡуй, генерал, ул һинең миҙалың,
Күркәм булып йөрөһөн түшеңдә...

Семенов. Батырҙарҙың даны — минең даным,
Йәл түгел йән һиндәй кешегә.
Минең өсөн наград — еңеү үҙе.
Рәхмәт, һынатманыҡ, туғандар.
Ил снотмаҫ, киләсәктә беҙҙе
Ғорур йырға ҡушып йырларҙар...

А ç ы л б и к ә. Рәхмәт инде, улай булғас.

Аçылбикә ситкәрәк китә. Башҡалар һырып алып, уны ҡотлайҙар.

Ҡ а һ ы м. Илдән дошман ҡыуылып бөттө. Артабан нәмә эшләйбеҙ, генерал?

С е м е н о в. Бонапарт — яҙмыш тарафынан иркәләнгән кеше. Уның көтөлмәгән хәлдә яңы күтәрелеш яһарға һәләте бар. Уны тәхетенән бәреп төшөрмәй тороп, Европаға ла, беҙгә лә тыныслыҡ юҡ. Шулай булғас, һуғыш бөтмәй әле.

Ҡ а һ ы м. Ә бит батшабыҙ: «Рус ерендә ҡораллы бер дошман һалдаты ҡалмаһа, һуғыш бөтөр», — тигән.

С е м е н о в. Эйе. Ләкин ваҡыт тарихҡа үҙ ихтыярын бәйләй бара. Хәҙер батшабыҙҙың ҡарары ла башҡаса... Ә беҙ — һалдат, приказға буйһонабыҙ.

Ҡ а һ ы м. Эйе, һалдат... Ярай, поход дауам итәсәк икән. Беҙ әҙер! Әйҙәгеҙ, табынға рәхим итегеҙ.

С е м е н о в. Әйҙәгеҙ.

Ҡаһым уны ҡултыҡлап табынға алып китә.

Ф о л ь г н е р. Ишеттеңме, Ҡаһым ҡарарын үҙгәртте. Тимәк, ул урынында ҡаласаҡ. Беҙгә бер юл ғына ҡалды: ҡыйыу хәрәкәт итергә. Бая һөйләшкәнде һуҙма, бөгөн үк эшлә!

К о л т ү б ә. Була, майор әфәнде!

Табын яныңа китәләр.

Ҡ а һ ы м *(бокал тотоп)*. Еңеү өсөн, рус ҡоралының даны өсөн, уҙамандар!

Ура тауышы аҫтында бокал күтәрәләр.

А ç ы л б и к ә. Ай, был шампандары ҡымыҙ һымаҡ,
Семерләтеп алды тамырҙы!..

Ҡ а һ ы м. Ха-ха, Аçылбикә, эс һағыраҡ,
Ҡолап ҡуйма, уйла артыңды...

Еңелсә көлөшәләр.

С е м е н о в. Бокалдар тултырыуығыҙҙы һорайым! *(Тост тота.)*

Беҙҙең Ҡаһым түрә, уттар ярып,
Еңеү менән данлы юл үтте,
Ил күҙәтте уны, таңға ҡалып,
Баҫҡан саҡта ул ер һелкетте!
Рустар менән бергә һуғышты ул,

Һис тап төшөрмәне исеменә,
Наполеонды илдән ҡыуышты ул, —
Ватан һаҡлар уны иҫендә.
Башҡорт халҡы уны мәңге һөйөр,
Үҙ халҡын күтәрҙе ул данға,
Онотолмаҫлыҡ легендаға инер,
Ул һаҡланыр үлмәҫ йырҙарҙа!
Уның һаулығына!

Бокал күтәрәләр.

Ҡ а һ ы м. Рәхмәт! Байыҡ сәсән, дуҫтар хөрмәтенә әйтеп бирсе бер бай һүҙеңде?

Б а й ы ҡ. Бәй, әйтһәк ни, ярып һалабыҙ ҙа ҡуябыҙ инде уны! *(Ҡулына думбыра ала.)*

Әйт тиһәгеҙ, әйтәйем —
Заманымдың хаҡлығын,
Күңелемдең сафлығын,
Ир һүҙенең алтынын:
Ил-ил булмай, ир булмай,
Ир булмаһа, ер булмай,
Ере юҡтың — көнө юҡ,
Көнө юҡтың — йүне юҡ!
Шөкөр, барҙыр илебеҙ,
Бына тигән көнөбөҙ.
Урыҫ менән бер булып,
Ат атланып, бил быуып,
Яуҙарға ҡаршы саптыҡ,
Дошманды баш эйҙереп,
Илгә яҡты көн бирep,
Уртаҡ бәхетте таптыҡ!
Бергә аҡты ҡаныбыҙ,
Мәңге китер даныбыҙ,
Ағыр һыуҙар — аҡналар,
Сабыр аттар — сапҡалар,
Ай тонйорап, көн булһа,
Әсәләрҙән ул тыуһа,
Иҫкән елдәр тынмаһа,
Ер йомроһо үҙенең
Барыр юлын бормаһа,
Йәшәү бөтмәҫ донъяла,
Беҙ дуҫ булып ҡалырбыҙ!..

А ҡ й е г е т. Һай, алтын бит, олатай, һүҙҙәрең!.. Афарин!..

С е м е н о в. Молодец, һөйөклө ҡартым!

Ядкәр *(Акйегеткә)*. Ағай, ағай, сәсәндең һүҙәрен генерал ағайым аңламаны, буғай, әллә үҙем төшөндөрөп бирәйемме?

Акйегет. Тик ултыр, аңлай ул.

Ядкәр. Ошоларҙың инде! Как шәплегемде күрһәтәйем тиниһәм, аяҡ салалар ҙа ҡуялар... Гөлнур, кил, үҙеңә әйтеп бирәйем, яныма ултыр!

Садыҡай. Вәт, вәт, төшөндөрөп бир шуға.

Ядкәр. Белмәһә, уның ҡарауы, мин үҙем шәп! *(Гөлнурҙы янынараҡ тартып ултырта.)* Ах, хараша... Бына шулай яҡшы.

Акйегет. Ҡаһым ағай, сәсән һүҙенән һуң әсмәнек бит.

Аҫылбикә. Эйе лә!

Ҡаһым. Етеп торор. Ҡурайсылар, бейеү көйө!

Бер нисә ҡурайсы «Байыҡ» көйән башлай.

Ядкәр *(әкрен)*. Гөлнур, эш бейеүгә китте, тағы мине ситләп уҙырҙар инде. Их, ошо самай уңайы килгән саҡта ирек бирмәйҙәр бит...

Гөлнур. Тик кенә ултыр, һиңә әйтелде бит.

Ядкәр. Их, белмәйһең йөрәкте!.. *(Ҡысҡырып.)* Ҡаһым ағай, әллә үҙең бер әйләнеп алаһыңмы?

Уның һүҙен башҡалар шунда уҡ күтәреп алалар.

Акйегет. Дөрөҫ, түрә, үҙең төш!

Садыҡай. Эйе лә!

Иван. Давай, давай, бер өҙҙөрөп ал, түрә!

Садыҡай. Ағай, йыҡма инде һүҙҙе.

Ядкәр. Их, көйө әрәм була ла һуң...

Ҡаһым. Ҡана, булмаһа, бер урайым.

Семенов. Биш ура, полковник. Аяғың сыҙаһа, ер елкәһе түҙер ул, ҡурҡма.

Байыҡ. Шулай шул!

Сафия. Уның бер ҙә бейегәне юҡ та баһа, хур булмаһа ярар ине.

Ҡобора. Бейей белмәгән башҡорт булмай ул!

Аҫылбикә. Көймә, еңгә, ергә берәү ҙә бейеүсе булып тыумаған: бейей-бейей өйрәнә.

Ядкәр. Эйе лә! Шулай уҡ һөйә-һөйә өйләнә...

Гөлнур. Тик ултыр, тынмаҫ тел!

Ҡаһым. Башланыҡ. *(Бейергә төшә.)*

Семенов. Молодец, полковник!

Акйегет. Дан түрәгә!..

Ядкәр. Кара, кара, тап минең һымаҡ бейеп бирҙе лә баһа!

Колтүбә. Дан! Дан, дан... *(Каты кысҡыра ла, тауыштар тынғанын тойоп, туҡтай.)*

Семенов. Ярай, дуҫтар, миңә китергә ваҡыт, рөхсәт итегеҙ.

Кәһым. Ул ни хәбәр, тора бирегеҙ әле.

Семенов. Юҡ, юҡ. Иртәгә тағы эш.

Фольгнер. Яков Семенович, тағы берәр бокал. Башҡортта йола бар икән: оҙатыуға — «хуш аяҡ» эсәләр. Аҫаба башҡорттан ишетеп беләм. Ярамай, берәр бокал күтәрергә кәрәк.

Семенов. Шулаймы? Мин йолаға ҡаршы килмәйем, рәхим итегеҙ.

Фольгнер. Бокалдар!

Колтүбә тиҙ генә Семенов, Кәһым һәм Фольгнер алдына тулы бокалдар килтерә.

Семенов. Дуҫлыҡ өсөн!

Кәһым. Мәңге дуҫлыҡ өсөн!

Фольгнер. Сәләмәтлеккә!

Эсәләр.

Семенов. Рәхмәт, дуҫтар, миңә ваҡыт.

Барыһы менән тип әйтерлек күрешеп сыға.

Байыҡ. Досведанье.

Ядкәр. О ревуар!

Семенов *(көлөп)*. О ревуар, мон шер!

Кәһым. Ха-ха-ха... Был беҙҙең — доморошный француз инде, теге ваҡыт флаг алған егет.

Семенов. Әһә, молодец егет! Наградаң менән ҡотлайым. *(Кулын ҡыҫа. Сыға башлай.)*

Кәһым ҡапыл йөрәген тота.

Кәһым. Ah!..

Семенов. Нәмә булды һеҙгә, полковник?!

Кәһым. Былай ғына, буғай... Лекарь!

Семенов. Тукта, тукта, йөҙөң ағара...

Кәһым. Ах, лекарь тиҙерәк киләме?..
Хәлгенәйем минең бөтөп бара,
Ысҡындырығыҙ көмөш төймәмде...

Барыһы ла уға ташланалар, түшен ысҡындыралар. Лекарь йүгереп керә.

С а ф и я. Ҡаһым, йәнем!
Ҡ а һ ы м. Ағыу... ағыу!.. *(Ҡолай.)*
С е м е н о в. Кем эше был?!

Ҡаһымды иплəп һалалар.

А ҫ ы л б и к ə. Бынау ҡара йылан! *(Ҡолтубəне тотоп ала.)*
Ҡ о л т ү б ə. Алдай, ышанмағыҙ бисə һүҙенə!
А ҫ ы л б и к ə. Ə был ҡағыҙ нəмə?
А ҡ й е г е т. Хəҙер алҡымыңды сəйнəп өҙəм, яуыз! Ниңə ағыу бирҙең түрəгə?!
Ҡ а һ ы м *(аңына килеп)*. Куй, Аҡйегет, килсе минең эргəмə...

Сафия һəм башҡалар илай. Ҡолтубəнең ҡулын ҡайырып артҡа бəйлəп, эргəһенə ике һалдат баҫа.

Сафия, Сафия... күк түшле күгəрсен,
Өҙгөлəнмə, түкмə йəшеңде?
Илем алыр үсен минең өсөн...
Килсе, бер һыйпайым сəсеңде. *(Сəсенəн һыйпай.)*

А ҡ й е г е т. Был һатлыҡты нəмə эшлəтəбеҙ, генерал?
С е м е н о в. Эт шикелле атырға!
Ҡ о л т ү б ə. Ah, кисерегеҙ?! Мин... мин... *(теҙлəнə.)* Майор Фольгнер ҡушҡанды ғына үтəнем.
Ф о л ь г н е р. Алдай башҡорт, швайен!
С е м е н о в. A-ha, йəле, майор, күҙемə тура ҡара! *(Ныҡ теклəй.)*
Ф о л ь г н е р. Юҡ, юҡ...
С е м е н о в. Их, мундирлы кəнтəй! Күҙҙəрең үк алдап торалар. Атырға!

Ҡ о л т ү б ə менəн Ф о л ь г н е р ҙы алып сығып китəләр. Тəүгеһе өҫлəкһеҙ илай, икенсеһе таш кеүек ҡатып ҡалған.

Ҡ а һ ы м. Уҙамандар, үлəм... Хуш, генерал!
С е м е н о в. Ah, ниндəйен кеше əрəм була!..
С а ф и я. Ағыу... ағыу!.. Юҡмы ни һуң дарыу?
Ҡ а һ ы м. Туғандарым, рус менəн беҙҙең дуҫлыҡты боҙор өсөн ағыу йөрөтөүселəр киləсəктə лə күп булыр əле ул... Юҡ, юҡ, ундай мəкерҙəргə бирелмəгеҙ, аң булығыҙ!..

Башҡорттарым!.. Аҡйегет, һин ҡайҙа?
Минəн тороп ҡалған кир юрғаны
Ҡаңғыртмағыҙ. йүгəн кейҙермəй,
Олатайҙарҙан килгəн батыр данды
Изге һаҡлағыҙ, кер тейҙермəй!..

Б а р ы һ ы. Көмеш кенә һаплы булат ҡылыс, вайкем,
Ҡаһым түрә таҡҡан биленә,
Булат ҡына ҡылысын теҫө итеп, вайкем,
Алып ҡайтайыҡсы иленә.

Ҡ а һ ы м *(ул инде күрмәй, ләкин кешеләрҙең тауышын ишеткәһе килә)*. Уҙамандар, дуҫтарым! Ниңә тындығыҙ? Ярамай, йырлағыҙ яу йырҙарын. Батыр үлә, ләкин иле ҡала.

Б а р ы һ ы. Ҡаһым түрә менгән һор юрғаҡай, вайкем,
Түбән эйеп тора башҡайын,
Ун алты ла йәшлек Сафия һылыу, вайкем,
Түгер инде ҡайнар йәштәрен...

Шаршау

1942—1957

Рәшит Ниғмәти

(1909—1959)

Рәшит Ниғмәтулла улы Ниғмәтуллин Самар губернаһының (хәҙерге Куйбышев өлкәһе Больше-Черниговский районына ҡараған) Диңгеҙбай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. 1930 йылда Өфөлә рабфакты тамамлағас, Туймазы район газетаһында, 1936—1953 йылдарҙа Өфөлә республика газеталары редакцияларында, Башҡортостан яҙыусылар союзында эшләй. 1933—1935 йылдарҙа Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә.

Рәшит Ниғмәтизең беренсе шиғырҙары матбуғатта 1926 йылда күренә башлай, «Кереш» исемендәге тәүге китабы 1933 йылда баҫылып сыға. Уның утыҙ йылдан ашыуыраҡ ижад ғүмерендә башҡорт, рус һәм татар телдәрендә утыҙҙан артыҡ шиғыр һәм поэма китаптары баҫылып сыға.

Рәшит Ниғмәти — танылған драматург та. Уның «Врач Ғимранов», «Урман шаулай», «Аҡизел ярында», «Һинең йондоҙоң», «Уның һөйгән ҡыҙы», «Онотолмаҫ йыр» кеүек пьесалары театрҙар сәхнәһендә ҡуйылды. Яҙыусы художестволы тәржемә өлкәһенә лә күп көс һалды. Ул 1944 йылдан КПСС ағзаһы.

Башҡорт совет әҙәбиәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн Рәшит Ниғмәти Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены һәм ике тапҡыр «Почет Билдәһе» ордендары менән наградланды, 1959 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде.

УРМАН ШАУЛАЙ

Өс шаршаулы пьеса

Катнашалар

Василий — партизандар отряды командиры.
Моразым — Кызыл Армия воины.
Налывайко — партизан.
Шугай — партизан.
Мария — уҡытыусы ҡатын.
Партизан.
2-се партизан.
3-сө партизан.
Шульга — ауыл ҡарты.
Анка — Шульганың ҡыҙы.
Маринка — колхозсы ҡатын.
Колхозсы.
2-се колхозсы.
Шпан — немец армияһы офицеры.
Подлис — обер-ефрейтор.
Мейер — немец һалдаты.
Һалдат.
Гнида — хаин.

Кызыл Армия һалдаттары, колхозсылар, партизандар.

ПРОЛОГ

Ҡараңғы төн. Тынлыҡ. Хәрәкәт — асылмаған шаршау алдында бара. Муйынына автомат аҫҡан немец һалдаты һаҡта тора: ул арыбире йәрәй. Ҡапыл кемделер күрә.

Һалдат. Һальт! Һальт! *(Автоматын тоҫҡап, алға бара.)*

Шпан менән Мейер инәләр.

Шпан. Һанс, һәр ваҡыттағы кеүек, уяу. Мейер, һин ишетәһеңме, поста торғанда Һанстың йоҡлап ҡалғаны юҡ. Сөнки Германия, үҙе лә йоҡларға яратмаған кеүек, йоҡлаусыларҙы ла яратмай. Һанс быны белә. Мейер, Һанстың хеҙмәт кенәгәһенә лейтенант Шпандың рәхмәтен яҙып ҡуй. Мин һиңә, ҡәҙерле Һанс, яҡты киләсәк вәғәҙә итәм. Бөгөн һин бына был ерҙә винтовка тотоп һаҡта тораһың. Нык һаҡла был ерҙе, Һанс. Иртәгә һин был ерҙә хужа буласаҡһың. Һәм просто рядовой Һанс түгел, ә Һанс фон Келлерман. Был һиңә нисегерәк оҡшай, Һанс?

Һалдат. Һайль Һитлер, майн һерр!

Шпан. Мо-ло-дез! Яҡшы хеҙмәт иткән һалдатҡа рустар шулай әйтәләр: мо-ло-дез! Ләкин һин, Һанс, уяуыраҡ бул. Беҙҙең гарнизон торған урынға рустарҙың разведка группаһы үткән. Аңлашыламы?

Һалдат. Аңлашыла, майн һерр.

Шпан. Мейер, сәғәт нисә?

Мейер. Рус сәғәте менән — төнгө ике.

Шпан. Ә немец сәғәте менән?

Мейер. Немец сәғәте менән — ун ике.

Шпан. Төнгө ике һәм ун ике. Айырма 2 сәғәт. Әйт әле, Мейер, Берлиндан ошо ергә ҡәҙәр нисә километр?

Мейер. Берлиндан ошо ергә ҡәҙәрле?.. Белмәйем, господин лейтенант... Бер мең, ике мең була торғандыр...

Шпан. Дур-рак! Мейеһеҙ һалдатҡа рустар шулай әйтәләр: дур-рак. Ләкин һин миңә быны иҫәпләп сығар. Дрезденға һөйгән ҡыҙыңа хат яҙырһың: беҙ рус еренә шул хәтле километр керҙек, тиерһең. Тиҙҙәнме таң ата?

Мейер. Өс сәғәттән.

Шпан. Әле төн оҙон. Рустарҙың ике нәмәләре бар: ҡараңғы төндәре һәм һыуыҡ ҡыштары. Ҡараңғы төндәре партизандар менән тулы, ә һыуыҡ ҡыштары... нәмә менән тулы, Мейер?

Мейер. Ут менән, господин лейтенант.

Шпан. Дөрөҫ, һин башлы егет, Мейер. Йыраҡ китерһең... Әгәр рустар үлтермәһә.

Мейер, Шпан сығалар. Һалдат ары-бире йөрөй башлай. Тынлыҡты боҙоп, аяҡ тауыштары ишетелә.

Һалдат. Һальт! Һальт!

Арт яҡтан һаҡсы өҫтөнә бер колхозсы ташлана, көрмәкләшәләр. Тағы бер колхозсы инә. Икәүләп һаҡсыны үлтерәләр.

Колхозсы. Булдымы, Хома?

2-се колхозсы. Булды, кум Трохим. Үлмәҫкә тырыша, эт балаһы... Фон Келлерман... пс-ме-щик! Тот аяҡтарынан, Трофим. Үҙенә мәңгелек имение бирәйек.

Мәйеттә сығаралар.

Колхозсы. Хома, мин бер ҙә башҡа һыйҙыра алмайым. Хәҙер ҡайҙа барабыҙ инде?

2-се колхозсы. Бына был нәмәне ал. *(Аунап яткан немец автоматын күрһәтә.)* Эт һимерһә, әйәһен тешләй, тиҙәр. Ә автомат, трофейға әйләнһә, хужаһына ата. Киттек. Урманға, Василий янына киттек.

Сығалар. Аҡрын ғына атлап, Мария керә. Ҡурҡып ҡарана, һиҫкәнә, кире сигенә, тағы алға бара.

Мария. Владимир! Владимир! Йөрәгем минең! Һин минең күҙ алдымдан бер ҙә китмәйһең... Һин шулай минең менән бергә мәңге йөрөрһөң инде... Владимир! Улым! Валсығым минең!.. Ҡайҙа һин? Ҡайһы соҡорға ырғыттылар икән һине йыртҡыстар?.. Ҡайҙа һин, Вова!

Ҡапыл мылтыҡ атыла. Башта берәм-һәрәм атыуҙар, ә һуңыраҡ автомат очередтары көсәйә.

Ах, мин ҡурҡам. Бынан, был ҡот осҡос хәлдәрҙән алыҫыраҡ китергә, был хәлде бер аҙға ғына булһа ла онотоп торорға ине. *(Иүгереп сыға.)*

Бер төркөм кызылармеецтар, атыша-атыша, сигенеп керәләр.

Командир. Иптәштәр, ошонда туҡтарға. Беҙ һәр яҡтан ҡамалғанбыҙ. Ләкин Ватан беҙҙе онотмаҫ. Иванов, бында кил.

Иванов командир янына килә.

Бына һиңә минең полевой сумка. Разведканың бөтә эше шунда. Беҙ һиңә йырып сығырға ярҙам итербеҙ. Тере

ҡайтырға тырыш. Командирға әйт: яҡшы һуғыштылар, тиген. Хуш!

Үбешәләр. Иванов шыуып китә. Атыш көсәйә. Алдағы бер боец һикереп тора.

Бер боец. Егеттәр! Харап булдыҡ! Немецтар! Немецтар килә! Ай!.. *(Мылтығын ташлап ҡаса.)*

Командир. Мораҙым, ҡара! Кем ул һиңә: дуҫмы, дошманмы? Әйт, кем ул?

Мораҙым, боролоп, ҡурҡаҡ боец ҡасҡан яҡҡа ата. Сәхнә артында: «Ай!..» — тигән тауыш.

Мораҙым. Айыуҙан ҡасҡанға — бүре, дошмандан ҡасҡанға — үлем.

Командир. Туғандар, минең арттан, алға! Ватан өсөн! Ура!

Боецтар, ура ҡысҡырып, атакаға ташланалар. Сәхнә артында рукопашный һуғыш бара. Бер аҙҙан тирә-яҡ тәрән тынлыҡҡа сума. Мария килеп инә.

Мария *(тирә-яғына ҡарана. Ниҙер тыңлай).* Тир менән, күҙ йәше менән, ҡан менән һуғарылған рус ере! Атайҙарығыҙ, ағайҙарығыҙ яулап алған ошо гүзәл ер менән бергәләп өшөгән, бергәләп асыҡҡан һәм бергәләп шатлыҡ күргән рус егеттәре! Мин һеҙҙән һорайым: был нәмә? Нәмә был? Еңелеүме? Хурлыҡмы? Бөтә ер өҫтөнә ябырылып килгән ҡара төн эсендә, тыуған еребеҙҙең мәңге һыҙланыуға ҡалыуымы был? Юҡ! Юҡ! Рус ере еңелмәйәсәк. Рус халҡы хурлыҡҡа ҡаласаҡ түгел. Улай булганы юҡ та, булмаҫ та...

Ыңғырашҡан тауыш. Мария ҡолаҡ һалып тыңлай.

Тауыш. А-пай!..

Мария. Әү, кем һин, ҡайҙа һин?

Тауыш. Апа-й!..

Мария. Улым! Улым, кил бында. Ҡайҙа һуң һин, улым? *(Ары-бире йөрөй, эҙләнә.)*

Тауыш тына.

Ой, мин үлектәр араһында йөрөйөм... Кем белә, бәлки, ҡайһы берәүҙәре әле үлеп тә бөтмәгәндер... Бына бер ус батырҙар ята. Тыуған ерҙәрен һаҡланылар. Тыуған ерҙәре өсөн үлделәр. Сигенмәнеләр. Юҡ, рус еренән рус халҡын төртөп төшөрөү мөмкин түгел...

Т а у ы ш. Апай!..

Каты яраланған М о р а ҙ ы м Марияға табан шыуып килә.

М а р и я. Ой, кем был? Немецмы, әллә... Юк, немец түгел. *(Мораҙымға ташлана, уның хәлһеҙ башын беләге өҫтөнә һала.)* Туғаным һин минең. Кайһы яктарҙан килдең икән һин бында? Бәлки, һинең атаң-әсәң барҙыр. Бәлки, кәләшең һинән хат көтә торғандыр. Ала алырмы икән һуң ул һинән хат?

М о р а ҙ ы м. Һыу...

М а р и я. Һыу?! Кайҙан ғына алырға икән һуң ул һыуҙы? *(Мораҙымдың башын йомшаҡ ҡына итеп ергә һала ла бер ситкә ҡабаланып китә. Ләкин тиҙҙән кире килә.)*

М о р а ҙ ы м. Һыу. Бер генә йотом һыу!..

М а р и я *(Мораҙымдың башын беләгенә һала)*. Кайҙан алайым һуң мин һиңә һыу?.. Юк бит һыу!.. *(Бер аҙ уйланып.)* Туҡта. Бәлки, бер йотом һыу һине үлемдән ҡотҡара торғандыр. *(Мораҙымдың флягаһын сисеп ала, бер яҡ ситкәрәк китә лә флягаға имсәген һауа. Кире килә, Мораҙымдың башын беләге өҫтөнә һала.)* Бына һиңә һөт. Әсә һөтө йәшәү көсө бирә ул... Эс, туғанҡай.

Мораҙым, бик оҙаҡ итеп, фляганан һөт һемерә.

Утыҙ һигеҙ йәшемә еткәс, бер бала тапҡайным. Владимир ине уның исеме. Кәбәхәт йыртҡыс уны штыкка ҡаҙап күтәрҙе лә алып китте. Кайҙа ташлағандарын да белмәйем. Исмаһам, ҡанға батҡан кескәй кәүҙәһен генә лә таба алманым. Атаһы партизандар менән китте. Шуның өсөн Владимирҙы ултерҙеләр.

Мораҙым, хәлһеҙләнеп, фляганан айырыла.

Ә һин эс. Эс, минең туғаным. Был мин түгел, ә һинең туған әсәң — һинең һөйөклө ерең — үҙ күкрәгенең шифалы һөтө менән дауалай ине. Эс... *(Тора. Мораҙымды жулдарынан ала.)* Әйҙә. Беҙ бынан китәйек. Һиңә йәшәргә кәрәк. Фашисты ултереү өсөн йәшәргә кәрәк һиңә.

У т һ ү н ә

Шульганың өйө. Өй бөтә ҡыйығы менән күренә. Кәрәк саҡта ҡыйыҡтың тамашасылар яғы алына. Фронтондағы тәҙрәгә ағас баҫҡыс ҡуйылған. Кескәй ишек алды, ситән ҡойма, ҡойма артында яҡын урман күренә. Шульга мейес алдында бешкән картуфты табаҡҡа тултырып ултыра.

Шульга *(оҙаҡ тынлыҡтан һуң).*

Ой, не шуми, луже, зелений байраче,
Не плачь, не журися, молодий казаче...

Ҡәһәр һуҡҡан фашист. Килде, таланы, үлтерҙе, утта яндырҙы. Балаларҙы ата-әсәһеҙ, ата-әсәләрҙе балаһыҙ ҡалдырҙы. Ҡан менән ҡатыш күҙ йәшен йылға итеп ағыҙҙы. Балаларға, әсәләргә ҡушылып, ер илай. Тауҙар, урмандар илайҙар. Мәңгелек ләғнәт һиңә, яуыз!..

Пауза.

Ой, Днипро!.. Мария Федоровна әйтә, Днипро ярҙарына баҫып, Тарас Шевченко йөрөгән, ти. Днипроның көмөштәй саф һыуын, Украинаның алтын яландарын, буласаҡ яҡты, матур тормошто йырлаған, ти, бөйөк Кобзарь. Тарас йырлаған ошо тормошто фашист тапап үтерме икән ни?! Мәңгелек ләғнәт һиңә, яуыз!..

Ә егеттең ҡорһағы асҡандыр. Мин бөгөн һуңға ҡалдым. Ашарға алып менергә кәрәк. *(Сығып барғанда, Мариягә осрай.)*

Мария. Һин ҡайҙа бараһың? Юғарыгамы?

Шульга. Эйе, ашарға алып барам.

Мария. Аҙыраҡ сабыр ит, Шульга бабай.

Шульга. Мария Федоровна, ул бөгөн ашамаған, ас ул.

Мария. Сабыр ит. Урамда еҫкәнеп йөрөйҙәр. Уны йыртҡыстарға йолҡҡоларға биргәнсе, аҙыраҡ ас тотоу хәйерлерәк.

Шульга. Хаҡ һуҙ, Мария Федоровна. Дөрөҫ. Ике ай күҙ ҡараһы кеүек һаҡлап әҙәм иткәс, үлтерергә биреү — ирлек түгел.

Мария. Шульга бабай, ошо ике-өс көн эсендә кемдәр нәмә алып килделәр?

Шульга. Ике-өс көн эсендәме? Ике-өс көн эсендә Петроның Марфаһы бер биҙрә картуф килтерҙе, Тарастың Маринкаһы бер әтәс алып килде. Гришканың Татьянаһы... бер сусҡа балаһы.

Мария. Ә Анка ҡасан ҡайтырға тейеш?

Шульга. Ул кискә табаныраҡ ҡайтыр.

Мария. Ә Матвей?

Шульга. Ҡайһы Матвей ул?

Мария. Һинең үҙеңдең Матвейың.

Шульга. Ә-ә, Матвей? Матвей ул бында, ауылда... Мин уның ысын исемен онотоп та бөтөргәнмен инде. Уны бөтә ауыл, хатта тирә-яҡ ауылдар ҙа Гнида тип йөрөтәләр. Гнида. Ҡәбәхәт, әшәке кеше тигән һүҙ ул. Ул немецтарға кеше һата. Үҙебеҙҙең ауылда кеше бөткәс, күрше ауылдың кешеләрен тотоп бирә башланы...

Пауза.

Ә бит миңә еңел түгел. Миңә бик ауыр. Мин уның атаһы бит. Ҡыҙылдар килер, әйтерҙәр: «Эх, Шульга ҡарт, кемде генә үҫтергәнһең!» — тиерҙәр. Биткә төкөрһәләр ҙә хаҡтары бар. Ох, миңә ҡыйын...

Мария. Минең хәтеремдә: ул бала сағында мәктәптә тырышып уҡый торғайны. Ләкин тәртипһеҙ, буйһонмаусан, үҙ һүҙле була торғайны ул. Мин үҙ ғүмеремдә аҙмы кеше уҡытып сығарҙым. Улар араһында хәҙер лейтенанттар, полковниктар бар. Хатта бер генералым да бар минең. Ә Матвей кеүектәр юҡ. Ул берәү генә. Ә һин борсолма. Дөрөҫ, һин уның атаһы, һиңә, әлбиттә, еңел түгел. Уның ҡарауы, һинең бына тигән Гришаң бар, Анкаң бар. Шуларҙы уйла.

Шульга. Матвей ул минең бөтә нәҫелемдә берәү генә.

Мария. Ә уны тәрбиәләп була ине. Тик минең ҡулдан ысҡынып өлгөрҙө.

Шульга. Юҡ, хәҙер уны тәрбиәләп булмай. Кәрәкмәй ҙә. Уның выжданында хәҙер аҙмы кешенең ҡыйылған тормошо ята. Уның ҡулдары иң әшәке немец ҡулдарынан да бысраҡ. Ул, кеше үлтереп, төрмәлә һигеҙ йыл ятып сыҡты. Төҙәлмәне. Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтә, тиҙәр.

Мария. Һин унан ҡурҡ, Шульга бабай. Ул үҙ атаһын да фашисҡа һатыр.

Шульга. Юҡ. Мин унан ҡурҡмайым. Миңә нәмә? Мин инде йәшәрен йәшәгән кеше. Анка өсөн дә, Гриша өсөн дә ҡурҡмайым. Улар урманда. Уларҙы фашист та ҡурҡыта алмай. Тик бына был егетте генә терелтеп оҙатырға ине. Тиҙерәк оҙатырға кәрәк, Мария Федоровна. Юҡһа Гниданың ҡулы уға ла барып етер.

Таҫтамалға төргән бер таба икмәк менән Маринка килеп керә лә аптырап туҡтап тора.

Маринка. Мин... Мин... Һаумы, Шульга бабай, һаумыһығыҙ, Мария Федоровна.

М а р и я. Һаумыһығыҙ, Маринка, әйҙә ултырығыҙ. Серҙәш булырбыҙ. Былай ҡайҙа бараһығыҙ?

М а р и н к а. Мин... Юҡ, мин бармайым. Мин... Бына Шульга бабай икмәк бешереп бирергә һорағайны. Шуны алып килдем. Мә, бабай.

Ш у л ь г а. Рәхмәт, ҡыҙым. Ултыр, ҡайҙа ашығаһың?

М а р и н к а. Миңә юл таҙартырға әйттеләр. Барырға кәрәк. Юҡһа староста тағы килеп етер. *(Ҡабаланып сығып китә.)*

М а р и я. Бына алтын йөрәкле кешеләр. Икмәк алып килгән, ә миңә белдерергә лә теләмәй.

Ш у л ь г а. Шулай кәрәк. Мин бит егетте Мария Федоровна алып килде, тимәнем уларға. Үҙем алып ҡайттым, тинем.

М а р и я. Ҡана. *(Икмәкте алып ҡарай.)* Һәйбәт бешерә икмәкте. *(Ҙур телем ҡырҡып алып картуфлы табаҡҡа һала.)* Мин ашарға алып менәйем, ә һин урамға сыҡ, ҡарабыраҡ тор.

Ш у л ь г а. Ярай, мин урамға сығайым. *(Сығып китә.)*

М а р и я, табаҡты күтәреп, баҫҡыстан ҡыйыҡҡа менә башлай. Ут һүнә. Ҡыйыҡтың тамашасылар яғы алына. Унда һалам өҫтөндә ятҡан М о р а ҙ ы м радиоаппаратура менән булаша. М а р и я ҡыйыҡҡа менә.

М о р а ҙ ы м. Мария Федоровна, йәшәйбеҙ!

М а р и я. Тс-с-с! Ҡысҡырып һөйләшергә ярамай; бында дошман бар бит, аҡыллым. Йә, ни бар?

М о р а ҙ ы м. Йәшәйбеҙ, Мария Федоровна. Бөгөн мин, оҙаҡ перерывтан һуң, тәүге ҡат эшкә сығам.

М а р и я. Нисек эшкә сығаһың? Ә аяғың?

М о р а ҙ ы м. Бында беҙҙең частың командиры әле яңы ғына партизандарға күрһәтмә бирҙе. Мин ул шифрҙы бик яҡшы аңлайым. Объект итеп тап ошо ауыл күрһәтелә. Тимәк, миңә оҙаҡ йөрөргә түгел. Ә аяҡ ул, Мария Федоровна, аяҡ инде. Хәҙер кеше тормошо менән иҫәпләшмәй, ә аяҡ... Етте, шул аяҡҡа була ике ай тик яттым бит.

М а р и я. Ә ниндәй эш ул, Мораҙым? Ҡурҡыныслы эш түгелме?

М о р а ҙ ы м. Һин, Мария Федоровна, зинһар, асыуланма: мин ул эште һиңә әйтмәйем. Хәрби сер.

М а р и я. Хәрби сер булһа, Мораҙым, мин әйтеүеңде талап итмәйем. Тик ҡурҡыныслы эш түгелме? Һине һәләк итерҙәр тип ҡурҡам мин.

М о р а ҙ ы м. Быны нисек әйтергә... Әлбиттә, ҡурҡыныслы эш. Һуғыш бит, Мария Федоровна.

М а р и я. Бәлки, ул эште партизандар үҙҙәре эшләрҙәр?

М о р а ҙ ы м. Юҡ, партизандар быны эшләй алмайҙар. Хәйер, улар эшләй алалар, тик уға күп ваҡыт кәрәк. Ә командование эште тиҙ үтәүҙе һорай.

М а р и я. Ләкин һаҡ бул, Мораҙым. Мин үтенәм — һаҡ бул. Бына ашап ал.

Мораҙым ашай.

Мораҙым, күрәһең, һин беҙҙән китерһең, ахыры. Ә мин һинең турала бер нәмә лә белмәйем тип әйтерлек. Һин ҡаты яралы инең. Төрлө һорауҙар менән һине борсомаҫҡа теләп, мин һинең ҡайҙан икәненде лә һораманым. Мин һинең боец һәм Мораҙым булыуыңдан башҡа бер ни ҙә белмәйем бит.

М о р а ҙ ы м. Мин, Мария Федоровна, Уралдан. Урал егетемен мин. Бынан алыҫта, ҡояш сыҡҡан яҡта, арҡаһы менән болоттарға терәлеп, ҙур Урал тауы тора. Шул Урал тауы аҫтында, алтын япраҡлы ҡарағай ағастарын елберләтеп, терегөмөш кеүек саф йылғаларын йылтылдатып, балалар күҙ йәше кеүек саф тұңәрәк күлдәрен мөлдөрәтеп, бер оло ер ята. Салауат батырҙың ҡылысы һымаҡ ялтырап, йәмле Ағиҙелде алҡына, башҡорт халҡының дәртле йыры кеүек булып, Ирәндеге күккә ҡалҡына, ашҡынған Ашҡаҙар, һылыу Һаҡмар һыуҙары, иреккә сығырға теләгән тотҡон бөркөт кеүек, ярҙарынан ашырға теләгәндәй талпына. Тауҙары — алтынкөмөшкә, һыуҙары — балыҡҡа, ҡырҙары — игенгә, урмандары — һылыу ағастарға бай ул ерҙең. Ҡарттары аҡылға бай, йәштәре ялҡынлы дәрткә бай ундағы халыҡтың. Шул ергә Башҡортостан тиҙәр. Мин ана шунан. Һәм унда, Урал тауынан да бейеккә күтәрелеп, халыҡ бәхете, халыҡ шатлығы ҡояштай балҡып тора. Ләкин яуыз дошман оло ватаныбыҙ еренә аяҡ баҫҡас, Башҡортостандың ҡобаһы үҙгәрҙе. Уның йөрәге асыу-нәфрәт менән тулды. Һәм ул үҙенең улдарын саҡырып алды, уларға булат ҡылыс тоттороҙо, уларҙы елдәй елә торған арғымаҡтарға атландырҙы ла фашистарҙы ҡырырға оҙатты. «Үлтер, улым, фашисты!» — тине ул миңә, фронтҡа киткән саҡта. Һәм мин халҡымдың ошо боевой приказын үтәп йөрөйөм... Бына шул, Мария Федоровна.

М а р и я. Ниндәй матур һөйләйһең. Юҡ, бындай халыҡты, үҙ илен ошолай ҡайнар итеп һөйә торған халыҡты, еңеү мөмкин түгел.

М о р а ҙ ы м. Ә һиңә, Мария Федоровна, рәхмәт! Һин мине үлемдән ҡотҡарҙың, тимәк, һин тағы ла бик күп дошманға үлем әҙерләнең. Мин һинең ышанысыңды аҡлармын. Һин штыкка ҡаҙап күтәрелгән улыңа тейеш булған күкрәк һөтөң менән мине үлем ҡулынан йолҡоп алдың. Уның өсөн мин үс алырмын. Тағы ни әйтәйем? Рәхмәттән дә оло бүләгем юҡ. Мин тағы ла бик күп фашисты үлтерермен. Һиңә минең бүләгем шул булһын. Дошманды үлтергән һайын: «Мария Федоровна тағы бер фашисты үлтерҙе», — тиермен мин. Сөнки бөгөндән башлап һин үлтерәһең. Ул ҡулдар — һинең ҡулдар, әсә.

М а р и я. Рәхмәт... Мораҙым... *(Күҙҙәрен һөртә.)* Дошмандан үс ал. Дошманға рәхимһеҙ бул. Батыр йөрәгеңдә иленә ҡайнар мөхәббәт уты, дошманға көйҙөргөс нәфрәт ялҡыны янып торһон.

Ут һүнә. Ҡыйыҡ ябыла. М а р и я баҫҡыстан төшөп килгәндә, ситән аша Г н и д а һикереп инә. Улар бер-береһенә ҙаҡ ҡарашып торалар. Гнида иҫерек, ул Шульга өйөнә килеп инә.

Г н и д а. Бына был эш. Һеҙ нәмә, ҡәҙерле уҡытыусы, кеше өйөнөң түбәһенә менеп йөрөйһөгөҙ, э? Әллә улығыҙҙы ҡарайһығызмы? Ул өй түбәһенән генә күренмәҫ. Улығыҙ хәҙер ожмахта инде. Ул бит тамуҡ газаптарын бында уҡ, ерҙә үк, үткәрҙе. Хәҙер уға ожмахта дача бирелергә тейеш... Йә, төшөгөҙ әле, ҡәҙерле уҡытыусы. Бында ни нәмә ҡарап йөрөйһөгөҙ? Йә?

Мария төшә.

Нәмә ҡарайһығыҙ, тием?

М а р и я. Юғарыға менеп ҡараным, Матвей. Үҙебеҙҙекеләр, ҡыҙыл боецтар, күренмәйме икән тигәйнем.

Г н и д а. Ха-ха-ха! Ҡыҙыл боецтар. Улар күренмәҫтәр инде... Йә, барығыҙ. Мин атайҙың хәлен белергә килдем. *(Өйгә инә.)*

Мария ситән аша һикереп төшә.

М а р и я. Эт. Эт кеүек еҫкәнеп йөрөй.

Г н и д а. Һаумы, Шульга ҡарт.

Ш у л ь г а. Һаумы, Матвей.

Г н и д а. Кем Матвей? Ҡайҙа Матвей? Мин Матвей түгел. Мин — Гнида. Ә фашистар улар алйоттар. Улар минең Гнида икәнде белмәйҙәр. Белһәләр ҙә зыян юҡ. Уларға тап Гнида кәрәк тә.

Ш у л ь г а. Оят һиңә, Матвей. Ҡулдарыңда туғандарың ҡаны бар. Хурлыҡ!

Гнида. Ә һин хурланма. Донъяла минең туғандар ҡалманы хәҙер.

Шульга. Ә немецтар?

Гнида. Немецтар? Немецтар алйот. Улар миңә ышаналар. Ә бына әгәр ҡыҙылдар килеп сыҡһа, немецтар мине лә атып китәсәктәр. Шулай. Миңә барыбер. Мин немецты ла ҡоторған эт һымаҡ үлтереп ташлай алам.

Шульга. Ә үлтергәнең юҡ. Әгәр үлтерһәң, бәлки, хыянаттарыңды кисерерҙәр ине.

Гнида. Юҡ, мин немецты үлтермәйем. Улар миңә кәрәктәр әле. Улар миңә тормоштоң әсеһен онотоп торорға ярҙам итәләр... Ә хыянаттарымды минең кисерергә кәрәкмәй. Мине араҡы арҡаһында боҙолоп йөрөй тип һөйләйҙәр. Алдайҙар. Ул һүҙҙәргә ышанма һин, ҡарт. Ләкин миңә араҡы кәрәк. Миңә ер ҙә, һыу ҙа, хатта туғандар ҙа кәрәкмәй. Миңә араҡы кәрәк. Араҡы мине оноттора! Араҡы мине үлтерә лә, ҡотҡара ла. Мин ҡайһы бер саҡтарҙа, айныраҡ ваҡыттарҙа, үҙемде үҙем күргем килмәй, үҙемдән үҙем ерәнәм. Ниндәй эшәке йыртҡысмын мин! Минең йәш сағым ағыуланған. Ул ҡуйы һәм тонсоҡторғос еҫ эсендә, ҡором эсендә үтте. Минең егет сағым төрмәлә үҙҙы. Бар, ҡара. Төрмә стеналарында һин бына ошо бармаҡтарҙың ҡалын эҙҙәрен күрерһең. Ә һин кисерерҙәр, тиһең. Юҡ, мин үҙем кисермәйем. Аңлайһыңмы, ҡарт: кисермәйем. Мин үҙем килгән юлдарҙағы бөтә күперҙәрҙе яндырып үттем. Кире ҡайтыу мөмкин дә түгел, кәрәкмәй ҙә. *(Тәрән тынлыҡта уның ауыр һулыш алыуы ишетелә.)* Һин, ҡарт, уйлама: был атаһын иҫенә төшөрөп килә икән тип уйлама. Ул хистәр күптән инде араҡы эсеһендә сереп бөткәндәр...

Шульга. Матвей, бар һин кит. Был яҡтан бөтөнләй кит. Йәки һыуға ташлан, атыл, дарға аҫылынып һәләк бул. Ләкин минең өҫтөмә ташлаған хурлыҡтарыңды юй. Бар, Матвей. Нисек итеп мин һиңә хәҙер «улым» тигән изге һүҙҙе әйтәйем?

Өйҙә тынлыҡ. Ишек алдына һаҡ ҡына Анка керә.

Мария *(ситән артынан)*. Анка! Анка!

Анка *(ситәнгә табан йүгерә)*. Мария Федоровна, ни бар? Әллә берәй хәл булдымы?

Мария. Гнида бында. Ул минең баҫҡыстан төшкәнде күрҙе. Мораҙымды бөгөн үк бынан алып китергә кәрәк.

Анка. Ярай. Алырбыҙ. *(Ишек эргәһенә килә, тыңлай.)*

Гнида. Мин һинән был һүҙҙәрҙе күптән көткәйнем. Ләкин минән баш тартыу һиңә лә, башҡаларға ла еңеллек килтермәҫ... Атай. Ҡайҙа ул атай? Мин ата иркәләүен, әсә һөйөүен күрҙемме һуң? Юҡ!

Анка Марияға ҡул һелкә. Мария юғала. Анка өйгә инә.

Анка. Һаумыһығыҙ! Һин нәмә, Матвей, әллә доға алырға килдеңме?

Гнида. Ә-ә, һаумы, урман ҡошо. Кәкүк. Ләкин онстма: берҙән, мин Матвей түгел, икенсенән, доға алыу өсөн мин Шульга ҡартҡа ла, партизандарға ла бармам.

Анка. Яҡшы эшләйһең. Сөнки уларҙың береһе лә һиңә доға бирмәҫ: Шульга ҡарт һиңә ләғнәт кенә уҡыр, ә партизандарға барһаң, улар һине имән ағасына киптерергә элеп ҡуйырҙар.

Гнида. Йә, йә. Һин кем менән улай һөйләшәһең? Беҙ ҡарарбыҙ әле: имән ағасына киптерергә кемде элерҙәр. Һеҙҙе ағас янына һөйрәп алып барырға ла кәрәкмәй, — һеҙ үҙегеҙ урманда. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: урманда ағас күп, ә һеҙ аҙһығыҙ. Ағас һайын берегеҙ эленеп торһа, матур күренеш булыр ине.

Анка. Һин нәмә, әллә туған һеңлеңде лә ағасҡа элеп ҡуйырға йыйынаһыңмы?

Гнида. Юҡ. Һин ағасҡа элерлек эре ҡош түгелһең. Әгәр инде башҡаларҙы боғалаҡлап күтәргәндә, улар араһында һин дә булһаң, миңә, ҡәҙерле һеңлекәш, үпкәләмә.

Анка. Эх, һин, хаин. Мин һине хәҙер үк атып китер инем, ләкин... урыны түгел.

Гнида. Бына бығыһы матур. Мин бығы яратам. Бына, исмаһам, минең һеңлем үҙенең туғанлыҡ хистәрен күрһәтә башланы.

Шульга. Һеҙгә, балалар, етер. Был һуғыш яланы түгел, ә минең өйөм. Һуғышырға, әлбиттә, ярай. Ләкин һеҙ бынан ситтәрәк һуғышығыҙ.

Гнида. Шулаймы? Ярай. Һау бул, Шульга ҡарт. Ләкин бер саҡ аунап үҫкән ояма бейектән бер күҙ һалырға рөхсәт итегеҙ. *(Атылып сыға, баҫҡыстан менеп, ҡыйыҡ тәҙрәһенән ҡарай.)*

Анка менән Шульга, ишек алдына сығып, Гнидаға ҡарап торалар. Анка Гнидаға пистолет тоҫкай.

Анка. Нәмә, еткерәһеңме?

Гнида. Йәшер һин, Анка, ул уйынсығынды. *(Баҫҡыстан төшә.)* Юҡ. Еткермәйем. Хушығыҙ, тиҙҙән тағы күрешербеҙ. *(Ситән аша һикереп юғала.)*

Анка. Күрешербеҙ, ләкин ул саҡта һин подсудимый, ә мин судья булырмын.

Шульга. Шаҡшы. Әҙәм ерәндергес нәмә. Бындай ҡәбәхәтлектәргә нисек ер түҙә, нисек ер йотмай уларҙы?

Ситән аша Мария инә.

Мария. Анка, Мораҙымды ҡотҡарырға кәрәк. Һин уны сейә баҡсаһы аша урманға алып китерһең. *(Кабаланып баҫҡыҫҡа менә, яҡ-яғына ҡарана. Ҡапыл ашығып төшә.)* Анка, немецтар! *(Анканы һөйрәп, ситән аша сығып юғалалар.)*

Ике немец керә.

Һалдат *(Шульгаға)*. Йә, һин нәмә?

Шульга. Мин нәмә түгел, — кеше. Шульга.

Һалдат. Һанс, ҡара әле, — кеше. Кеше!

Ҡыҫҡырып көләләр.

Шульга. Шуны әйтәм: бына һин дә кеше булаһыңмы инде?

Һалдат. Молчать! Ниңә өйҙә ултыраһың?

Шульга. Ҡайҙа барайым? Тышҡа сыҡһам, күҙгә һеҙ күренәһегеҙ. Ә һеҙгә ҡарау бик үк күңелле түгел.

Һалдат. Молчать! Ниңә эшкә сыҡманың?

Шульга. Мин үҙемде көскә һөйрәп йөрөтәм. Ә һин — эшкә...

Һалдат. Һанс, ал үҙен. Беҙ уға нисек һөйрәлеп йөрөргә өйрәтербеҙ. *(Автомат көбәге менән төртә.)*

Шульганы алып сығып китәләр, Шпан, Гнида һәм Һалдат килеп керәләр.

Гнида. Ошонда, офицер.

Шпан. Тентергә!

Һалдат өйгә инеп китә. Гнида ҡыйыҡҡа йүгереп менә. Һалдат өйҙө аҡтарып ҡарап сыға.

Һалдат. Юҡ, господин лейтенант.

Шпан. Ә һин нәмә унда батып ҡалдың?

Гнида ҡыйыҡта күренә.

Гнида. Ҡасҡан. Ҡасырғандар.

Шпан. Алдайһың, иҫерек хайуан. Ул булмаған бында. Һин просто тағы бер өлөш араҡы эсергә теләгәнһең... Эт. Эткә — эт үлеме. *(Кобураһын ҡапшай.)*

Гнида *(йүгереп төшөп, Шпан алдына тезләнә).* Господин сфицер, господин офицер!.. Ул ҡаҫҡан, уны ҡасырғандар. Ләкин мин уны табам. Мин уны табырмын, господин офицер.

Шпан *(Гнидаға нәфрәт менән ҡарап тора).* Ҡәбәхәт. Мәйет. Ә йәшәргә теләй. *(Гниданы тибеп йыға. Һалдатҡа.)* Бар, үҙең ҡарап төш.

Һалдат ҡыйыҡҡа менеп эҙләнеп төшә. Ҡулында батарея һәм ҡағыҙ.

Шпан. Йә, ни бар?

Һалдат. Бында, господин лейтенант, ысынлап та, кеше булған. Уның ятҡан урыны бар. Бына радиоприемник батареяһы һәм ошо ҡағыҙ табылды.

Шпан. Бир әле бында. *(Ҡағыҙҙы ала, уҡый.)* «Бында ошо көнгә ҡәҙәр мин йәшәнем. Мин күҙгә күренмәйем, утта янмайым, һыуға батмайым. Минең исемем Эм». *(Гнидаға.)* Кем ул Эм?

Гнида. Белмәйем, господин сфицер.

Шпан. Ә мин белермен. Мин табырмын һине, күҙгә күренмәй торған Эм!

Шул ваҡыт көслө шартлау яңғырай. Барыһы ла йүгереп сығалар. Сәхнә бер аҙ буш. Шпан, револьвер тотоп, сәхнә аша йүгереп үтә. Уның артынан Мейер йүгерә.

Мейер. Господин лейтенант! Господин лейтенант!

Шпан *(йүгереп инә).* Мейер! Нәмә, тоттоғоҙмо? Нәмә шартлаған? Кем шартлатҡан?

Мейер. Господин лейтенант, билдәһеҙ кеше тарафынан боеприпастар склады шартлатылды.

Шпан. Ә ҡайҙа шартлатыусы? Ни эшләп тотманығыҙ?

Мейер. Шартлатыусы ҡаҫҡан. Бына бер ҡағыҙ ғына төшөп ҡалған.

Шпан *(ҡағыҙҙы ала, уҡый).* «Складты шартлатты Эм». Тағы шул ҡәһәрле Эм! Ләкин мин һине табырмын. Башта утта яндырырмын, ә һөйәктәреңде һыуға батырырмын. *(Ҡыҙыу атлап сыға.)*

Уның артынан Мейер ҙа китә.

Гнида — бер яҡтан, Шульга икенсе яҡтан килеп керәләр, Шульга Гнидаға ҡарамай өйгә табан үтә.

Гнида. Атай. *(Шульга өндәшмәй.)* Атай!

Шульга. Һин кемгә өндәшәһең?

Гнида. Атай!..

Шульга. Ташла. Минең һәйөклө балаларым өсtөнән, минең өсtән, минең илем өсtөнән донос йөрөткән бысраҡ телең менән һин нисек атай тип әйтә алаһың?

Пауза.

Гнида. Һин ҡайҙан киләһең?

Шульга. Немецтың изәнен йыуҙым.

Гнида. Изән йыуҙың? Ә мин бына немец өсөн изән йыумайым. Ул эш ҡолдарға лайыҡлы. Мин, әлбиттә, ҡол түгел.

Шульга. Дөрөҫ, һин ҡол түгел. Ҡолдарҙың азатлыҡҡа сығыу ышаныстары бар. Һин — хаин. Ә хаин өсөн азатлыҡ юҡ. Уға бер генә юл: хурлыҡлы үлем... Йә, бөгөнгө бысраҡлығыңа күпме түләнеләр?

Гнида. Түләмәнеләр. Ҡасҡан.

Шульга. Ҡасҡан?! *(Гниданы төртөп ебәреп, ҡыйыҡҡа менеп китә. Бер аҙҙан кире сыға.)*

Киткән! Осҡан минең ыласыным!

Шаршау

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Беренсе картина

Немец карательный отрядының штабы. Матур болдорло ағас өй. Өйҙә өсtәл һәм ултырғыстар. Өсtәл артында лейтенант Шпан. Уның ҡаршыһында Мейер баҫып тора. Өйҙөң тәҙрәләре асыҡ.
Тышта, тәҙрә эргәһендә, ҡуйы япраҡлы ағас үҫкән. Өсtәл өсtөндә парабеллум менән полевой сумка ята.

Шпан. Тимәк, ҡәҙерле Мейер, һин тағы ла буш ҡайттың?

Мейер. Буш ҡайттым, господин лейтенант.

Шпан. Тимәк, һин шул яңа-яңғыҙ һаташҡан русты, Эм тигән бандитты, тота алмайһың? Тимәк, сшо ваҡ эш артынан да минең үҙемә йөрөргә кәрәк?

Мейер. Был, господин лейтенант, һеҙ уйлағанса уҡ ваҡ эш түгел. Сөнки, кем белә, Эм тигән бер хәреф артында, бәлки, бер бөтөн отряд тора торғандыр.

Шпан. Һинең һүҙҙәреңдә хаҡлыҡ юҡ түгел, Мейер. Ысынлап та, бер кеше, әгәр ул шайтан булмаһа, бер кескәй генә ваҡыт эсендә шундай күп эш эшләй аламы? Әлбиттә, юҡ. Бына уның яҙған яҙыуҙары. *(Берәм-берәм алып уҡып бара.)* «Боеприпастар складын шартлатты — *Эм*». «Гниданы аяҡтарынан аҫып китте — *Эм*». Быныһы,

ярай, үлмәй ҡалды. «Вернерҙы үлтерҙе—*Эм*». «Иген тултырған амбарҙы яндырҙы — *Эм*». «Һигеҙ автомашинаны яндырҙы — *Эм*». Ниндәй эш был, Мейер? Мин быға ышана алмайым. Ышанырлыҡмы һуң? Ниндәйҙер аҡылдан яҙған бер рус, үҙен-үҙе күҙгә күренмәүсе, утта янмаусы тип иғлан итте лә беҙҙең үҙ арабыҙҙа уҡ ни теләһә шуны эшләп тик йөрөй. Юҡ, табырға, Мейер, табырға! Быныңөсөн һиңә өс көн срок. Өс көн эсендә йә һин уны тотоп миңә килтерәһең, йә ул һине лә, мине лә үлтерә. Китергә мөмкин, уңыш теләйем.

Мейер боролоп китә башлай. Уның арҡаһында аҡбур менән зур итеп яҙылған «М» хәрефе күренә. Шпан урынынан һикереп тора.

Мейер, был ниндәй эш? Һине арестовать итеү ҙә аҙ. Һин аяҡ аҫтыңа ҡарап йөрөйһөң, ә артыңа әйләнеп ҡарамайһың. Аллаға рәхмәт уҡы, Эм һинең арҡаңа аҡбур урынына хәнйәр менән яҙып китмәгән.

М е й е р. Мин һеҙҙе аңламайым, майн һерр.

Ш п а н. Мундирыңды һалып ҡара, аңларһың.

Мейер мундирын һалып ҡарай, ҡобараһы оса, хәлһеҙләнеп ултыра. Шульга керә.

Ш у л ь г а. Нәмәгә саҡырҙың, офицер?

Ш п а н. Ә-ә, Шульга бабай! Рәхим ит, Шульга бабай. Ултыр.

Шульга ултыра.

Тәмәке тартаһыңмы? Бына папирос тарт. Яҡшы папирос. Дрезден фабрикаһынан.

Ш у л ь г а. Юҡ, мин папирос тартмайым. Тәмәкенең дә колхоз фабрикаһынан булғанын яратам. *(Махорка төрөп тарта.)*

Ш п а н. Һин ҡарт кеше. Һиңә һуңғы көндәреңде тыныс йәшәп үткәрергә кәрәк. Ә мин һиңә тыныслыҡ вәғәҙә итәм.

Ш у л ь г а. Ләкин был вәғәҙәң һинең бик ҡиммәт тора торғандыр. Мин уны һатып ала алмам.

Ш п а н. Мин вәғәҙәне һатып бирмәйем. Ләкин шул: яҡшылыҡ өсөн яҡшылыҡ менән түләйһең.

Ш у л ь г а. Йә.

Ш п а н. Исеме йә фамилияһы Эм менән башланған кешеләрҙе беләһеңме?

Ш у л ь г а. Эм менән башланған?.. Беләм. Бик күп беләм. Микола, Митрофан, Михайло, Малина, Маринка...

Ш п а н. Ә шуларҙың ҡайһыһы һинең улыңды — Гниданы аяҡтарынан аҫып китте? Беләһеңме?

Шульга. Юк, белмәйем.

Шпан. Белəһең! Сөнки ул һинең өйөңдөң кыйығында йәшәгән.

Шульга. Минең өйөмдөң кыйығында? Минең өйөмдөң кыйығында кеше түгел, сәүкә лә йәшәмәй. Сөнки ул өйҙөң кыйығы ла юк, үҙе лә юк. Һеҙ уны яндырғанға хәҙер дүрт ай тулды, офицер.

Шпан. Һин һөйләшә белмәйһең! Немец офицерына өндәшкәндә, һин, господин, тип өндәшергә тейешһең.

Шульга. Юк.

Шпан. Нәмә юк?

Шульга. Булмай.

Шпан. Нәмә булмай?

Шульга. Господин тип әйтеп булмай. Онотолған. Хәҙер егерме биш йыл инде ул һүҙҙе әйткән юк. Тел дә әйләнмәй.

Шпан. Мин һинең телеңде әйләнергә өйрәтермен. Ә хәҙер — марш юл таҙартырға. Немецтар икмәкте хеҙмәткә генә алыштыралар.

Шульга. Мин немец икмәгенә мохтаж түгелмен.

Шпан. Ә нәмә ашайһың?

Шульга. Минме? Мин... бәрәңге ашайым.

Шпан. Кайҙан алдың ул бәрәңгене?

Шульга. Үҫтерҙем.

Шпан. Кайҙа.

Шульга. Кайҙа — ерҙә.

Шпан. Кем ерендә?

Шульга. Кем ерендә булһын, үҙемдең еремдә. Мин ер эҙләп Германияға барманым. Беҙҙең үҙ еребеҙ үҙебеҙгә етә.

Шпан. Һеҙҙең үҙ ерегеҙ хәҙер юк. Ул немец ере. Немец ерендә үҫкән бәрәңге лә немецтыкы. Мейер!

Мейер һикереп тороп баҫа.

Мейер, бына был картты эшкә куш.

Мейер. Ниндәй эшкә кушырға был ватык арбаны? А-а, ярай. Кара һин, ватык арба. Изәнде йыуырһың. Марш!

Шульга һәм Мейер сығалар. Мейер кулдарына йәш бала күтәргән Маринканы алып керә лә сыға.

Шпан. О-о, матур катын. Ултыр, ултыр. Йә, матурҡай, һөйлә. Минең һине күргәнем юк: һин кайҙа йәшеренеп йәшәйһең?

М а р и н к а. Миңә йәшеренеп йәшәргә кәрәк түгел. Мин үҙ еремдә торам. Кеше еренә баҫып кергән ҡараҡ түгелмен мин.

Ш п а н. О-о, һин әсе һүҙле. Партизан ҡатыны икәнең күренеп тора.

М а р и н к а. Партизандар әсе һүҙ һөйләп маташмайҙар улар. Улар туҡмайҙар!

Ш п а н. Кемде?

М а р и н к а. Һәр хәлдә мине түгел.

Ш п а н. Сөнки улар араһында һинең дә ирең бар. Шулаймы?

М а р и н к а. Белмәйем.

Ш п а н. Ирең ҡайҙа?

М а р и н к а. Белмәйем.

Ш п а н. Ир ул, минеңсә, энә түгел, уны юғалтып булмай.

М а р и н к а. Һеҙҙең арҡала мин уны юғалттым. Ләкин, әгәр ул һеҙҙе туҡмай торған партизандар араһында булһа, мин ирем менән ғорурланыр инем.

Ш п а н. Мейер!

М е й е р керә.

Мейер, ляас фор дем Фенстер фойэр ауф махе!

М е й е р. Мәльде геһерзен, һер лойтнант. *(Сыға.)*

Ш п а н. Рустарҙың «Беҙ ҡапсыҡта ятмай» тигән мәҡәлдәре бар. Ә һин ул беҙҙе йәшерергә теләйһең.

М а р и н к а. Әгәр һүҙҙәрең дөрөҫ булһа, һаҡ бул, лейтенант: ул беҙ бик осло һәм уға ҡаҙалып үлергә мөмкин.

Ш п а н *(тәҙрәгә ҡарап)*. Мейер, әҙерме?

М е й е р *(тыштан)*. Әҙер, господин лейтенант.

Тәҙрә аша төтөн, ялҡын күренә.

Ш п а н. Кил әле, Шугай бисәһе. Рус урмандарының ҡайыны ниндәй күңелле яна.

Шпан да, Маринка ла тәҙрә янына киләләр. Маринка һиҫкәнеп китә.

Партизандар һалҡын төндәрҙә бына ошондай костер эргәһенә ултырып йылыналар, ҡаҙерле һәм һинең кеүек һылыу ҡатындарын иҫкә алалар, бына ошондай кескәй балаларын...

Ҡапыл Маринка ҡулындағы баланы йолҡоп ала ла көс менән утҡа ырғыта. Баланың үҙәк өҙгөс әсе тауышы ишетелә. Маринка: «Светлана! Светлана!..» — тип ҡысҡырып, тәҙрәгә ташлана. Ләкин, тәҙрәнән, тыштан төҙәлгән штыктарҙы күреп, кире сигенә, һуштан яҙып изәнгә йығыла. Шпан шарҡылдап бик оҙаҡ көлә. Маринка тора, аҡрын ғына атлап тәҙрәгә табан бара.

Бәлки, һин хәҙер был баланың атаһы ҡайҙа икәнен әйтерһең?

Маринка. Хәҙер әйтәм. Минең ирем урманда, партизандар араһында. Немец үтә торған һәр бер урманда, немец туҡтай торған һәр бер ағас төбөндә, немец килә торған һәр бер юл ситендә — минең ирем. Ул, асыуы ҡабарған халыҡтың үс алыусыһы булып, уның яндырғыс нәфрәте булып, һәр бер немецтың башы өҫтөндә тора. Мин беләм: һин, ҡәбәхәт, төндәр буйы тыныс йоҡлай алмайһың, — ҡурҡаһың, һин, ҡәбәхәт, ҡояш яҡтыһында ла, ярғанат һымаҡ, өйҙән сыҡмайһың, — ҡурҡаһың. Һин ярҙамһыҙ балаларҙы, әсәләрҙе утҡа ырғытаһың. Сөнки һин — ҡурҡаҡ. Ҡалтыран, уҫаҡ япрағы һымаҡ ҡалтыран, йыртҡыс! Улар килерҙәр. Килерҙәр улар! Минең яндырылған ҡыҙым өсөн, бысраҡ аяҡтарың менән тапаған рус ере өсөн үс алырҙар. Шугай, ишетәһең ме, Шугай! Үс ал!

Шпан. Мейер!

Мейер *(йүгереп инә)*. Тыңлайым, господин лейтенант.

Шпан. Ал бына был матур партизан ҡатынын. Һалдаттарға бир. Һалдаттарҙың батырҙарын һайла. Сөнки был ҡалъя насар ҡалъя түгел. Аңланыңмы?

Мейер. Аңланым, господин лейтенант. Һалдаттар һеҙгә бының өсөн рәхмәт уҡырҙар. Атлағыҙ, матур ҡатын. Һеҙҙе немец һалдаттары өҙөлөп һағынғандар.

Сыға башлайҙар. Маринка тупһала туҡтай, Шпанға бөтмәҫ нәфрәт менән ҡарай.

Маринка. Йылан!

Сығалар.
Тышта шау-шыу. Мейер керә.

Мейер. Партизанды алып киләләр, господин лейтенант.

Шпан менән Мейер ашығып сығалар. Мораҙым тәҙрә үтә сигә инә, өҫтәл тартмаларын аҡтара, тәҙрәнән ҡабат тышҡа сыға, күмерләнгән баланы күтәреп инә, карауаттағы простыняны алып, баланы төрә, өҫтәлдәге полевой сумканы, парабеллумды ала һәм, ҡағыҙ яҙып, тәҙрәнән сығып юғала. Ишек алдына үлгән Гришаны алып керәләр.
Шпан бер колхозсыны саҡырып ала.

Шпан. Йә, таныйһыңмы?

Колхозсы. Юҡ, танымайым. Был кешене минең күргәнем юҡ.

Шпан *(икенсе колхозсыға)*. Ә һин? Һин дә үҙ ауылдашыңды танымайһыңмы?

2-се колхозсы. Минме? Мин — юҡ. Мин танымайым. Был минең ауылдашым түгел. Күрәһең, яҡшы кеше булған. Юҡһа партизан булып китмәгән булыр ине. Урыны ожмахта булһын... Ләкин мин был кешене танымайым.

Шпан. Мейер!

Мейер йүгереп керә.

Ҡартты алып кил.

Мейер сыға. Шпан Гришаның битенә сәптә яба.

Мейер Шульганы алып керә.

Кил әле, ҡарт. Һин бына был матур егетте таныйһыңмы? *(Гришаның йөҙөнә ябылған сәптәне асып ебәрә. Шульга һиҫкәнеп китә.)* Йә, таныйһыңмы?

Шульга. Юҡ, танымайым. Мин ҡарт кеше, ә йәштәр үҫә баралар. Уларҙы ҡайҙан танып бөтөрәһең.

Шпан. Алдайһың, был һинең улың!

Шульга. Минең улым? Юҡ, был минең улым түгел, был бөтә рус халҡының улы. Урыны ожмахта булһын. Ә минең улым, Гнида, һеҙгә хеҙмәт итә. Ләғнәт һәм нәфрәт уға.

Гнида йүгереп килеп керә һәм, Гриша янында туҡтап, башын һала.

Гнида. Яңылыш юлдан киттең һин, ағай. Урман һеҙҙең барығыҙҙы ла упҡынға йоттороп бөтәсәк.

Шпан. Кем был?

Гнида. Был минең ағайым.

Шпан. Ә был?

Гнида. Ә был... Элек ул минең атай ине.

Шпан. Ә хәҙер?

Гнида. Хәҙер минең атай түгел. Бына был мәйеттең атаһы.

Шпан Шульгаға килеп һуға, Шульга йығыла.

Шпан. Мейер, бөтә ауыл халҡын йыйырға.

Мейер йүгереп сыға. Ишек алдына халыҡ йыйыла башлай. Мейер керә.

Мейер. Господин лейтенант, бөтә халыҡ ошо. Ҡалғандары эштә.

Шпан. Тыңлағыҙ! Бына күрәһегеҙме? Бөтә партизандар ошо яҙмышты уртаҡлашасаҡтар. Кисә мин һеҙҙең бөтә малдарығыҙҙы тартып алдым. Ул мал көтөүҙәре

хәҙер Германияныңкылар. Ә һеҙҙең яҡлаусыларығыҙ бер нәмә лә эшләй алманылар. Бөгөн мин һеҙҙең бөтә келәттәрегеҙҙе таҙартам. Яҡлаусыларығыҙ бер нәмә лә эшләй алмаясаҡтар.

Бер һалдат йүгереп килеп керә.

Һалдат. Господин лейтенант, Мюллерҙың кәүҙәһе өҫтөнән табылды. *(Ҡағыҙ һуҙа.)*

Шпан. Мейер, уҡы.

Мейер *(ҡағыҙҙы ала, уҡый)*. «Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта. *Эм»*.

Шпан. Бер нәмә лә аңламайым. Был ни тигән һүҙ?

Һалдат. Теге күҙгә күренмәй торған Эм, Мюллерҙы үлтереп, көтөүҙе урманға ҡыуып алып киткән һәм ошо яҙыуҙы ҡалдырған.

Шульга *(ҡалҡып)*. Рәхмәт һиңә, минең ыласыным!

Шпан. Был ҡартты подвалға ябырға. Ул миңә урманға барырға юл күрһәтер.

Шаршау

Икенсе картина

Шул уҡ карательный отряд штабы. Ашығып, Шпан инә һәм ишек уртаһында туҡтай.

Шпан. Мин аңламайым: ниндәй кешеләр былар? Үлгән партизан артынан үҙҙәре үлергә ризалар, ә танымайҙар. Ҡайҙан алалар һуң рус кешеләре бындай көстө? Нәмә һуң уларға аҙыҡ бирә, нәмә рухландыра? Рустар намыҫ, азатлыҡ, мөхәббәт тураһында күп һөйләйҙәр. Ләкин былар минең башҡа һыймай. Ҡайҙа һуң ул ваҡытта рустарҙың личный тормоштары? Ни нәмә хаҡына һуң улар үлемгә баралар?.. *(Буш өҫтәлгә ҡарап ҡатып ҡала.)* Мейер!

Мейер керә.

Мейер! Был тағы ниндәй трюк? Ҡайҙа полевой сумка? Ҡайҙа парабеллум? *(Өҫтәл тартмаларын аҡтара.)* Ҡайҙа карталар? Документтар? Хаттар?

Мейер *(өҫтәлгә ҡарап)*. Тағы ла шул уҡ Эм...

Шпан. Нәмә?! Тағы ла шул уҡ Эм?!

Мейер. Тағы ла шул уҡ Эм, господин лейтенант. Бына уның сихырлы билдәһе. *(Өҫтәлдәге яҙыуҙы алып Шпанға бирә.)*

Ш п а н. Мейер! Мин һиңә бер генә көн срок бирәм: бөгөн үк, — үлеме, тереме, — миңә был аҡылынан шашҡан бандит Эмды тотоп килтер. Ауылды әйләндереп ҡамап алһындар, кеше түгел, себен дә ауылдан сыҡмаһын. Ул ошо ауылдан бер ҡайҙа ла китеп өлгөрмәгән. Уның күҙгә күренмәүе мөмкин түгел дә баһа.

Мейер сыға.

(Өҫтәл артына ултыра, ҡулындағы ҡағыҙҙы ҡараштыра, уҡый.) «Һин мине эҙләмә, таба алмаҫһың. Тиҙҙән мин үҙем килермен — һиңә бирелергә түгел, һинең йәнеңде алырға. Эм».

Мейер керә.

М е й е р. Господин лейтенант, һеҙҙең приказығыҙ буйынса ауыл уратып алына. Эмды эҙләү өсөн ҡораллы һалдаттар ебәрелде.

Ш п а н. Мейер, минең башҡа ғәжәп матур бер уй килде. Минеңсә, хатта дошман да бөйөк Германия өсөн хеҙмәт итергә тейеш. Нисек, яҡшы әйтелгәнме?

М е й е р. Һейне Һенрихтан насар әйтмәнегеҙ, господин лейтенант.

Ш п а н. Һейне? Һин, Мейер, аҡылдан яҙғанһыңмы? Онотма. Һейне ул немец түгел — еврей.

М е й е р. Ғәфү итегеҙ, господин лейтенант. Мин Иоһан Гете тип әйтергә теләгәйнем.

Ш п а н. Гете? Гете — шулай уҡ еврей.

М е й е р. Һеҙ еврейҙарҙы артыҡ байытаһығыҙ түгелме, господин лейтенант?

Ш п а н. Байый торһондар. Яҙыусылар кәрәкһә, беҙ уларҙы бик тиҙ кире тартып алырбыҙ. Ә хәҙергә һуғыш бара, һәм яҙыусыларҙың һуғыш өсөн кәрәктәре юҡ. Ә кәрәкһәләр, уларҙы немец итеп иғлан итеү ҡыйын түгел. Бына миндә батырҙар үлеме менән һәләк булған немец һалдатының көндәлек дәфтәре бар. *(Өҫтәл тартмаһынан дәфтәр ала.)* Ул бына былай тип яҙған, тыңла: «Фельдфебель Карл Шмультке әйтә: Рафаэль бөйөк художник булған, ти. Әгәр Рафаэль ысынлап та бөйөк художник булһа, ул, һис шикһеҙ, немец булған». Быны, Мейер, рядовой һалдат яҙған. Ләкин был дөрөҫ. Барлыҡ бөйөк кеше — немец... Тик улар бөгөн беҙгә кәрәк түгелдәр. Минең һөйөклө Гретхенымдың яҙмышы, Һейне йәки Рафаэлгә ҡарағанда, мине күберәк борсой. Ни эшләй икән хәҙер һылыу Гретхен?

М е й е р. Мин — һалдат. Мин уйламайым.

Шпан. Молодец. Уйлау — һалдат эше түгел.

Мейер. Ә минең, господин лейтенант, кескәй генә Кларам бар. Әгәр һеҙ уны күрһәгеҙ, шунда уҡ ғашиҡ булыр инегеҙ. Бөгөн мин уға 36-сы номер туфли булдырҙым. Хәҙер күрһәтәм. *(Сыға һәм туфли алып керә.)* Бына.

Шпан *(алып, ҡараштыра)*. Яҡшы туфлиҙар... Ләкин һин онотма: минең Гретхеным бар, минең ике ҡыҙым бар, минең әсәй бар. Улар ҙа туфли көтәләр. *(Туфлиҙы үҙенә алып ҡуя.)*

Мейер. Господин лейтенант, мин уйлайым...

Шпан. Нисек? Һин — һалдат. Һин уйламаҫҡа тейешһең.

Мейер. Ғәфү итегеҙ, мин уйламайым, ләкин...

Шпан. Мейер!

Мейер. Тыңлайым, господин лейтенант.

Шпан. Мейер, мин һиңә хатта дошман да бейөк Германияға хеҙмәт итергә тейеш тигәйнем. Миңә уҡытыусы ҡатынды алып керһендәр.

Мейер. Ул эле, господин лейтенант, тәртипкә инеп бөтмәгән.

Шпан. Тәртипте беҙ уға үҙебеҙ индерербеҙ.

Мейер сыға.

Мин бөтә ғүмерем буйына быға оҡшаған бер нәмә лә күргәнем юҡ. Был — ҡатын түгел, ә ен! Уның ҡулдарын ҡайыралар, бармаҡтарын һындыралар, ә ул ирендәрен тешләгән дә ҡатып ҡалған. Тешләгән ирендәренән ҡан атлығып сыға, ә теленән һүҙ ысҡынмай. Юҡ, был кеше түгел! Кешенең шундай булыуы мөмкинме һуң? Бәлки, мин рустарҙы белмәй торғанмындыр. Ләкин мин шуны беләм: рустарҙы үлтерергә кәрәк.

Сәстәре туҙған Мария Федоровна һәм Мейер керәләр.

Шпан. Рәхим итегеҙ, ҡәҙерле уҡытыусы. Ултырығыҙ.

Мария. Мин баҫҡан килеш тә, ултырып та һинең һорауҙарыңа яуап бирмәйәсәкмен. Язалауығыҙҙы башлағыҙ.

Шпан. Юҡ, мин һеҙҙе язаларға түгел, ә һөйләшергә саҡырҙым.

Мария. Һөйләшергә? Баҫып кергән ҡараҡ менән йорт хужаһы араһында ниндәй һөйләшеүҙең булыуы мөмкин?

Шпан. Бына һеҙ рус ҡатыны. Рус уҡытыусыһы. Культуралы кеше. Ә мин алыҫ Германиянан. Рейн йыл-

ғаһы артынан. Мин рустарҙы белмәйем. Ә белге килә, һеҙ миңә шуны әйтегеҙ: ни өсөн рустар үлемдән ҡурҡмайҙар?

М а р и я. Быны һин бер ҡасан да аңламаҫһың. Сөнки улар йәшәргә теләйҙәр, уларҙа йәшәргә теләү көслө. Һәм шул йәшәү өсөн улар үлемгә баралар. Рустарҙа мөхәббәт көслө. Улар үҙ Ватанын бөтә йөрәктәре менән һөйәләр. Улар Ватанһыҙ йәшәүҙе уйҙарына ла һыйҙыра алмайҙар. Рустар азатлыҡ һөйәләр. Азатлыҡтың нәмә икәнен белеү өсөн, азат йәшәп ҡарарға кәрәк. Рустар ҡоллоҡта йәшәүҙе уйҙарына ла һыйҙыра алмайҙар. Улар бөйөк намыҫ кешеләре. Һәм улар бер ҡасан да, бер кемдән дә намыҫтарын тапатҡандары юҡ. Тапатмаҫтар ҙа. Эх, һиңәме һуң рус кешеһендәге рух бөйөкләргән аңларға! Һин бына мине үлтерерһең. Ләкин һин белеп тор: мин үлмәм. Мин бер ҡасан да үлмәм. Мин, һеҙҙе яндыра торған көслө нәфрәт булып, бөтә совет кешеләренең йөрәгендә йәшәрмен. Тыуыр бер көн, һәм ул көн алыҫ түгел, һинән бөтә йыртҡыслыҡтарың өсөн яуап һораҙҙар. Ябай рус ҡатыны Мария Федоровнаның һындырылған ошо бармаҡтары өсөн, йолҡонған ошо сәстәре өсөн һинән яуап һораҙҙар. Нисек яуап бирерһең һин, йыртҡыс? Һин мине, әлбиттә, үлтерә алаһың, ләкин мин намыҫымды һинән тапатмам. Юҡ, тапатмам! Мин Гнида түгел. Мин рус ҡатыны. Мин рус әсәһе...

Ш п а н. Һөйлә. Һөйләп бөтөр, рус әсәһе. Күрәһең, мин ниндәй мәрхәмәтле.

М а р и я. Мин әйтергә теләгәнемде әйттем. Ләкин минең һуңғы һүҙемде партизандар әйтер.

Ш п а н. Мейер, ал был аҡылдан яҙған бисәне.

М е й е р. Атла... уҡытыусы.

М а р и я Мейерға уҫал ҡараш ташлай, аҡрын атлап сыға.

Ш п а н. Ниндәй ҡараш! Гүйә, ул үлемгә түгел, ә шул үлемдең үҙен үлтерергә бара.

Тышта ике ҡат атыу тауышы ишетелә. М е й е р, кобураһына ҡоралын тыға-тыға, килеп керә.

М е й е р. Баштараҡ мин совет кешеләрен ниндәйҙер бер эске тәм менән, рәхәтлек менән үлтерә торғайным. Ә хәҙер улай түгел. Хәҙер нисектер ҡурҡыныс. Мин күрәм: кешеләр үлмәйҙәр, ә подвиг яһайҙар. Һәм шунлыҡтан ҡурҡыныс булып китә.

Ш п а н. Һин, Мейер, арыганһың. Һиңә ял итергә кәрәк. Ошо урмандағы партизандарҙы бөтөргәс, мин һиңә

отпуск юллап алып бирермен. Дрезденга ҡайтырһың. Гүзәл немкалар менән күңел асырһың. Ә шунан һуң бында кире килерһең. Ул саҡта мин, әлбиттә, капитан булырмын, ә һин — лейтенант. Лейтенант Карл Мейер. Һәм һин уларҙы үлтергән саҡта тағы ла рәхәтлек хис итә башларһың... Ә теге подвалдағы ҡарт үҙен нисек хис итә?

Мейер. Господин лейтенант, ниңә беҙ ул ҡарт менән артыҡ иркә ҡыланабыҙ?

Шпан. Ул ҡарт миңә кәрәк. Ни өсөн икәнен хәҙер күрерһең. Ә кәрәге бөткәс, беҙ уның менән ҡыҫҡа һөйләшербеҙ. Килтерһендәр әле бында ул ҡартты.

Мейер сыға.

(Ары-бире йөрөй, ниндәйҙер мелодия һыҙғыра.) Миңә ҡарт кәрәкмәй, ә урман кәрәк. Урмандағы юлбаҫарҙар ояһын табырға кәрәк. Ә ҡарт... Аҙмы ни бындай ҡарт минең табаным аҫтында аунап ҡалды?!

Шульга, Мейер керәләр.

Шульга. Һуғыша торған булһа, Шульга ҡарт ташҡа әйләнә. Бер ауыҙ һүҙ түгел, хатта «әһ» тип тә ыңғырашмам. Бына шулай.

Шпан. Әйт әле, ҡарт, һин урманды яҡшы белә-һеңме?

Шульга. Урмандымы? Урманды, уны, ниңә белмәҫкә? Мин урман кешеһе. Ундағы һәр бер ағасты ғына түгел, шул ағаста нисә япраҡ барлығын да беләм.

Шпан. Бик яҡшы. Әгәр мин һине урманға ебәрһәм, партизандарҙы таба алыр инеңме?

Шульга. Партизандарҙымы? Партизандарҙы, уларҙы, ниңә тапмаҫҡа? Тик минең партизандарҙа бер йомошом да юҡ. Бармайым мин унда.

Шпан. Бик яҡшы. Мейер! *(Шульгаға ымлай.)*

Мейер Шульганы алып сыға башлай.

Шульга *(кире килә)*. Туҡта әле, туҡта. Минең урманды белеүемдә һинең ни эшең булды әле, офицер?

Шпан. Кәрәк, миңә урманға барырға кәрәк. Һунарға.

Шульга. Һунарға? Һунар — яҡшы эш. Бар, бар. Тик шуныһын ҡара: унда тоҙаҡҡа үҙеңдең әләгеүең мөмкин. Немец тигән йәнлеккә һалған тоҙаҡтар урманда бик күп. Абай бул.

Шпан. Бына һин мине шул тоҙаҡтарға төшөрмәй йөрөтөрһөң.

Шульга. Тоҙаҡтарға төшөрмәй, тиһең, ә?

Шпан. Эйе, тоҙаҡҡа төшөрмәй йөрөтөрһөң.

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Беренсе картина

Урман. Бында партизандар. Ҡайһы берәүҙәре — мылтыҡ, пулемет таҙарта, ҡайһы берәүҙәр немец автоматынан атырға өйрәнә, кейем ямай, — һәр кем үҙ эшендә.

Партизан. Һин нәмә, әллә уны Трохим ҡарттың көрәге тип беләһеңме? Был, туғанҡай, көрәк түгел, ә автомат. Немец автоматы.

2-се партизан. Һин, өйрәтһәң, яҡшылап өйрәт, өйрәтмәһәң... беләһеңме, мин һине ҡайҙа ебәрермен? Көрәк тә көрәк, имеш. Көрәк ул, ҡустым, тоже ҡорал. Көрәкте лә тота белергә кәрәк.

Партизан. Көрәкте тота белергә кәрәк, ә автоматты? Ҡалай тотһаң да яраймы?

2-се партизан. Йә, өйрәт.

Партизан. Ә мин ни эшләйем? Өйрәтмәйеммени? Мин һиңә өйрәтәм: бына был әкәмәтте былай табан бор ҙа уң яҡ яурыныңа терә. Шунан бына был әкәмәтен...

3-сө партизан. Эй, һин... Автоматта әкәмәттәр булмай. Уларҙың исемдәре бар.

Партизан. Немец ул әкәмәткә нәмә тип әйтә торғандыр, шайтан беләме ни уны? Ә, минеңсә, ул шулай — әкәмәт.

2-се партизан. Һин ҡыҫылма. Немецса әйтеп тел боҙғанса, үҙебеҙҙең әкәмәт яҡшыраҡ ул... Әйҙә, өйрәт, туған.

Партизан. Теге әкәмәтте яурыныңа терәнеңме? Шулай. Дөрөҫ. Ә хәҙер бына был әкәмәтте...

Ситтәрәк ултырған бер төркөм кеше ҡапыл ҡысҡырып көлөп ебәрә.

Тауыштар. Бына һиңә көрәкһә майлы бутҡа!

— Бутҡа түгел — бутерброд.

— Шунан, шунан?

Һөйләүсе. Шунан нәмә. Шунан Гитлерҙың главный палачы Гиммлер килеп керә. «Нәмә һин ризаһыҙ

кешеләрҙе һаман ултыртып бөтөрә алмайһың?» — ти уға Гитлер. Гиммлер уға: «Эшселәрҙе ултырттым, крәҫтиәндәрҙе ултырттым, интеллигенцияны ултырттым, ассенизаторҙарҙы ултырттым, хатта фәхишәләрҙең дә ҡайһы берәүҙәрен ултырттым. Тағы кемде ултыртайым һуң, мейн фюрер?» — ти. Ә Гитлер: «Һуң, тағы ла ризаһыҙҙар бармы?» — тип һорай. «Ризаһыҙҙар бар, — ти Гиммлер. — Тик шул ризаһыҙлыҡты тыуҙырып торған тағы өс кеше бар». Гитлер һикереп тора ла: «Ни эшләп һин уларҙы белә тороп һаман ултыртмайһың? Хәҙер үк йүгер, кем булыуҙарына ҡарамаҫтан, тотоп ал да ултырт!» — тип ҡысҡыра. «Уның өсөн, мейн фюрер, сығып йүгерергә кәрәкмәй, улар бында», — ти Гиммлер. «Бында? Һин уларҙы алып үк килдеңме ни? Улайһа, һин мине ғәфү ит инде, мин аҙыраҡ ҡыҙып киттем. Ҡайҙа, алып кер әле үҙҙәрен, мин уларҙы үҙ ҡулым менән атып ултерәйем», — ти Гитлер. Гиммлер әйтә: «Әгәр атырға булһаң, мин иң элек Геббельсты алып киләйем. Эште шунан башлайбыҙ», — ти. Гитлер, бер нәмә лә аңламай, аптырап ҡала. «Һин аптырама, мейн фюрер, ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуҙа ғәйепле булған өс кешенең береһе Геббельс», — ти Гиммлер. «Геббельс? Булмаҫ! — ти Гитлер, үҙе тағы ла нығыраҡ аптырауға ҡала. — Ә тағы икеһе кем?» — тип һорай. Гиммлер әйтә: «Тағы икеһе — һин дә мин, — ти. — Ошо өсәүҙе бөтөрһәк, Германияла ризаһыҙлыҡ ҡалһа ла бик аҙ ҡалыр», — ти.

Дәйөм көлөү.

Партизан. Был — яҡшы әкиәт. Башлы кеше уйлаған. Ә бына быныһы тағы ла яҡшыраҡ. Берлинда китап, газета һата торған киоскыға бер ҡатын килгән, ти. «Һеҙҙә Гитлер тураһында берәй нәмә юҡмы?» — тип һорай икән теге ҡатын. Газета һатыусы: «Миндә фюрер тураһында китаптар бар, һеҙгә, мадам, ниндәйерәге кәрәк?» — тигәс, теге ҡатын: «Мин үлем тураһындағы белдереүҙәрҙе күберәк яратам, шуны бирегеҙ»,—тип әйтте, ти.

Көлөүҙәр.

3-сө партизан. Ә бына бер ваҡыт Гитлер, кешегә белдермәйенсә генә, киноға барған, ти. Кинола кинохроника журналы күрһәтәләр икән. Бер саҡ экранда Гитлер күренгән. Гитлер күренгәс үк, барлыҡ тамашасылар урындарынан торғандар ҙа фашистарса салют биргәндәр, ти. Гитлер, әлбиттә, бик риза булған. «Халыҡ

мине ярата, хөрмәтләй», — тип уйлаған. Ә Гитлер үзе кешене хөрмәтләп аяҡ үрә баҫып өйрәнмәгән бит. Шуға күрә ул, башҡалар кеүек, урынынан да тормаған, салют та бирмәгән. Ә капельдинер Гитлерҙы танымай икән. Ул Гитлер янына килгән дә: «Тор, егет, аяҡтарыңа баҫ! — ти икән. — Беҙ ҙә һинең кеүек уйлайбыҙ, ләкин ошо хәшәрәт арҡаһында концлагерға эләгергә ярамай бит инде», — тип әйткән, ти.

Дөйөм көлөү.

Партизан. Эй, һеҙ, ташлағыҙ әле шул әкиәттәрегеҙҙе. Исмаһам, берәй файҙалы эш эшләгеҙ. Юҡһа әкиәт тә әкиәт. Гитлерҙы әкиәт менән үлтереп булмай, бына быныҡ менән үлтерергә кәрәк. *(Автоматты күрһәтә.)*

Василий керә. Барыһы ла хөрмәт менән тораҙар.

Василий. Һаумыһығыҙ, иптәштәр!

Барыһы ла. Һаумы, иптәш Василий!

Василий *(бер партизанға)*. Йә, ниндәй уңыштар? Немец машинаһын башына һыйҙыра аламы?

Партизан. Уңыштар яҡшы, иптәш Василий. Өйрәнә башлағанға бер-ике сәғәт тә юҡ, ә ул хәҙер барыһын да белә.

Василий *(2-се партизанға)*. Тимәк, фашисты үлтерә алаһың?

2-се партизан. Үлтерәм, иптәш Василий. Һәм берҙе генә түгел.

Василий. Молодец! *(Өнһеҙ-тынһыҙ һуҙылып ятҡан Шугай эргәһенә ултыра. Уға өндәшмәй оҙаҡ ҡарай.)* Һин, Шугай, үҙеңде-үҙең бөтөрмә. Беҙҙең бындай ваҡыттар — бындай ял итеү күп булмай, үҙең беләһең. Ял итергә, көс йыйырға кәрәк.

Шугай. Ә мин ни эшләйем? Ял итәм.

Василий. Юҡ, һин ял итмәйһең. Һин ҡоройһоң, кибәһең! Ә һин беҙгә кәрәк. Эш өсөн, үс алыу өсөн кәрәкһең һин беҙгә. Ауыр. Һүҙ юҡ. Бына миңә лә бик ауыр. Мин бер көн эсендә һөйөклө ҡатынымды, ике ҡыҙымды юғалттым. Ауыл кешеләре уларҙың ҡара күмергә әйләнгән кәүҙәләрен күмгәндәр. Бында йәш түгергә ярамай. Дөрөҫ, аҙыраҡ йәш ҡойолһа, йөрәккә еңелерәк булып ҡала. Бындай саҡтарҙа һин, Шугай туған, йыр йырла. Йыр ярҙам итә ул.

Шугай. Ә бит барыбер Маринканы кире ҡайтарып булмай. Ә йөрәк яна.

В а с и л и й. Тыңла. Мин һиңә бер йыр йырлайым.
Ш у г а й. Йырла... Тыңлайым.

Василий йыр башлай. Ҡалғандары тыңлайҙар, аҡрынлап барыһы ла йырға ҡушылалар.

Тауҙың арҡаһында,
Таңдың атҡанында
Моңло йырҙар йырлай аҡ ҡайын.
Аҡ ҡайын янында,
Тап ҡояш алдында
Яңғыҙ ҡәбер ята һарғайып.

Шул ҡайын тауынан,
Шул ҡәбер янынан
Һалҡын шишмә аға сылтырап.
Шишмә тауышына,
Моңо-һағышына
Һоҡланалар икән йырсылар.

Шунда булған яуҙа
Ҡарт партизан ауған,
Күкрәк ҡаны ергә ҡойолған.
Ҡояш ҡайнар булған,
Ҡарт партизан шыуған
Йырлап аҡҡан шишмә буйына.

Һыу эскән һуҙылып,
Ҡан аҡҡан һыҙылып,
Һалҡын шишмә һыуын ҡыҙартып.
Ауыҙлығын ҡабып,
Ҡайғыларға ҡалып,
Ҡарап торған юрға тур(ы)аты.

Иптәштәре еңгән,
Ҡарт партизан үлгән,
Тау буйында ҡәбер ҡаҙылған.
Әкертен ел иҫкән,
Йыр йырлаған шишмә,
Залп бирелгән ҡайын тауында.

Таңдың атҡанында,
Ҡояш батҡанында
Моңло йырҙар йырлай аҡ ҡайын.
Аҡ ҡайын янында,
Тап ҡояш алдында
Яңғыҙ ҡәбер ҡалған һарғайып...

Шугай. Рәхмәт, Василий. Василий, һин мине разведкаға ебәр йә берәй задание бир.

Василий. Разведкаға? Разведкаға ебәрергә була. Тик бына яраң төҙәлһен һәм Анка ҡайтһын. Ә Анка һаман юҡ. Мин уны дүрт көнгә ебәрҙем, ә ул хәҙер ана нисә көн йөрәй. Тимәк, берәй хәл булған. Анканың һуңлап ҡайтҡаны юҡ ине.

Сәхнә артында: «Атла, атла, мәйн һерр. Юҡһа эске тормошоңа ҡораллы ҡысҡылыш яһап ҡуйыуым бар», — тигән тауыш.
Немец обер-ефрейторы ҡыуып. Налывайко керә.

Налывайко. Бына, Василий, һиңә бер обер.

Василий. Ҡайҙан?

Налывайко. Икәүҙәр ине. Береһенең эске тормошона ҡораллы ҡысҡылыш яһаным, бынығы ҡулдарын күтәрҙе — һинде һоһ. Бынығына ла ҡораллы ҡысҡылыш яһарға ине, ҡараһам — обер. Ә обер күберәк белә: командирға кәрәк. Бына алып килдем.

Партизан. Ғәжәп.

Василий. Нәмә ғәжәп?

2-се партизан. Минең бер дуҫ бар ине: араҡы күрҙеме, эсмәй түҙә алмай. Кешелә күрһә, һорап эсә. Налывайко ла минең шул дуҫ кеүек: немец күрҙеме, үлтерә.

Көлөшөү.

Партизан. Түгел, үлтермәй, — эске тормошона ҡораллы ҡысҡылыш яһай.

Налывайко. Ә, һеҙҙеңсә, нисек — миңә немец менән ҡосаҡлашырға что ли?

Василий. Һораштырҙыңмы?

Налывайко. Һораштырҙым. Һөйләшмәй. Йәнәһе, идейный фашист. Тәмәке биргәйнем, алманы.

Василий. Комен зи, ефрейтор. Фамилияғыҙ?

Подлис. Кемдең? Минеңме?

Василий. Эйе, һеҙҙең.

Подлис. Подлис. Эрих Подлис.

Василий. Нисә йәштәһегеҙ?

Подлис. Кем? Минме?

Василий. Эйе, һеҙ.

Подлис. Ах, мин! Мин 27 йәштә. Минең сәләмәтлегем насар...

Василий. Беләбеҙ, һөйләгеҙ әле, пленға нисек эләктегеҙ?

Подлис. Кем?.. Мин пленға эләкмәнем.

В а с и л и й. Аңлайым. Һеҙ пленға эләкмәнегеҙ, һеҙҙе эләктерҙеләр. Шулаймы?

П о д л и с. Шулай... Юк, юк. Мин үҙем теләп пленға бирелдем. Һеҙҙең партизандарығыҙ ҡамап алып, мылтыҡтарын миңә төҙәгәс тә, мин, күп уйлап тормайынса, үҙем теләп пленға бирелдем. Ә Һанс пленға төшөргә теләмәне. Уны һеҙҙең партизандарығыҙ аттылар. Ә мин үҙем теләп бирелдем.

В а с и л и й. Аңлайым. Партизандар мылтыҡтарын һеҙгә төҙәгәс тә, һеҙ, үҙегеҙ теләп, пленға бирелгәнһегеҙ.

П о д л и с. Шулай, шулай. Мин үҙем теләп...

В а с и л и й. Ярай. Атайығыҙ кем? Ни менән шөғөлләнә?

П о д л и с. Кемдең? Минеңме?

В а с и л и й. Эйе, һеҙҙең.

П о д л и с. Ах, минең! Минең атайым — эшсе.

В а с и л и й. Ниндәй эшсе?

П о д л и с. Текстильщик.

В а с и л и й. Ә ул ни нәмә эшләй ине?

П о д л и с. Кем? Минең атайыммы?

В а с и л и й. Эйе, һеҙҙең атайығыҙ.

П о д л и с. Ах, минең атайым! Уның тегеүле кейемдәр һата торған магазины бар ине.

В а с и л и й. Аңлашыла. Ниндәй партияла тораһығыҙ?

П о д л и с. Кем? Минме?

В а с и л и й. Эйе, һеҙ.

П о д л и с. Ах, мин! Мин бер партияла ла тормайым. Ләкин коммунистарға теләктәшлегем бар. Мөмкинме һорау бирергә?

В а с и л и й. Бирегеҙ.

П о д л и с. Мине коммунистар партияһына алып, өйгә ҡайтарып ебәрмәҫһегеҙме? Бының өсөн миңә ни эшләргә кәрәк?

В а с и л и й. Һеҙ, Эрих Подлис түгел, ә Эрих Подлец! Налывайко!

Н а л ы в а й к о. Нәмә, иптәш Василий? Әллә эске тормошона ҡараллы ҡыҫылыш яһаргамы?

В а с и л и й. Юк. Бабай отрядына алып бар. Штабҡа тапшырһындар. Кәрәге тейеүе бар.

Н а л ы в а й к о. Йөрөтмәҫкә ине шуны совет ере өҫтөнән. Ерҙе сиркәндерә... Йә, әйҙә, Эрих... Подлец. *(Алып сығып китә.)*

Бер партизан: «Анка ҡайтты!» — тип ҡыскырып килеп керә.

В а с и л и й. Анка?! *(Йүгереп сыға, Анканы ҡосаҡлап килеп инә.)* Ә һин, Анка, оҙаҡ көттөрөргә ярата башланың. Йә, нисек? Әйҙә һөйлә, туғанҡай.

Анка аҡ простыняға төргән нәмәне һаҡлыҡ менән генә ергә һала, үҙе уның янына ултыра.

А н к а. Хәҙер һөйләйем, Василий ағай. Ләкин бына нәмә. Мин үҙем күрһәтмәйенсә бер нәмәгә лә теймәҫкә. Буламы?

В а с и л и й. Була, Анка, була. Тик тиҙерәк һөйлә: нәмә, нисек, күптәрме, ҡоралдары ниндәй?

А н к а. Бөтәһе лә бар. Мин уларҙың үҙҙәрен дә, ҡоралдарын да һанап алдым, әйтермен. Иң элек бына нәмә: трофей. Был лейтенант Шпандың полевой сумкаһы. *(Василийға бирә.)*

В а с и л и й. Ҡарайыҡ. Ниҙәр яҙа икән лейтенант Шпан. *(Сумканы аса, бер ҡағыҙ тартып сығара, уҡый.)* «Приказ. Яҡын-тирәләге урмандарҙа йөрөүсе партизандар отрядының командиры Василийға бер аҙна срок эсендә миңә бирелергә ҡушам. Бирелһә — үлемдән ҡотҡарыуҙы вәғәҙә итәм, бирелмәһә — бөтә партизан отряды бөтә урманы, ере, һыуы менән юҡ ителәсәк. Был ваҡиғала Василийҙы тотоп биреүсе кешегә илле мең һум бүләк бирәсәкмен. *Гарнизон начальнигы лейтенант Шпан».*

Т а у ы ш т а р. Илле мең, тиме? Күрәһең, Василий теңкәһенә тейгән, ҡыйбат түләй.

— Ә ауылда, ауылда нисек ҡарайҙар, Анка?

А н к а. Нисек булһын? Приказдың аҫтына берәү: «Василий һыйыр түгел, беҙ уны ла һатмайбыҙ, үҙебеҙ ҙә һатылмайбыҙ», — тип яҙып киткән.

В а с и л и й *(тағы бер ҡағыҙ сығара).* Хат. Бына бынһы ҡыҙығыраҡ. Уҡып ҡарайыҡ. «Ҡәҙерле Фриц! Был хатты күҙ йәштәрем менән яҙам. Ҡәһәр һуҡҡан англичандар тағы налет яһанылар. Ҡала өҫтөндә, ҡарға туйы кеүек, самолеттар осоп йөрөнө. Ташлаған бомбаларҙан емерелмәгән йорт юҡ тиһәм, хата булмаҫ. Бомбежка ваҡытында һинең һөйөклө Луизаң һәләк булды. Һин ебәргән туфлиҙы мин әле уға кисә генә кейҙергәйнем. Ул шундай шатланғайны, меҫкен. Хәҙер ул туфли юҡ инде. Ҡәҙерле Фриц! Беҙгә ике украинка бирҙеләр: береһе — Катя, икенсеһе — Маня. Төндә шул Маня аҫылынып үлгән. Ҡағыҙға: «Минең өсөн үс алырҙар!» — тип яҙып күкрәгенә ҡаҙап ҡуйған. Улар беҙҙе яратмайҙар. Ниндәй көслө уларҙа нәфрәт. Ә Катя бына өсөнсө көн инде...»

2-се партизан. Уҡы, уҡы, Василий. Был хаттың һүҙҙәре йөрәкте яндыра, асыуҙы, нәфрәтте көсәйтә. Уҡы.

Василий. Хаттың был яғы йыртылған. Ләкин беҙ Катяның яҙмышын беләбеҙ. Ул йә үҙен-үҙе һәләк иткән, йә — ҡасҡан. Ләкин ҡайҙа ҡаса ул? Фашистан ҡасып ҡотолоп булмай, уны үлтерергә кәрәк.

Тәрәң тынлыҡ. Гүйә, партизандар тауышһыҙ ант итәләр. Шул тынлыҡ эсендә Анка аҡрын ғына тора, простынялағы төйөнсөктө уртаға һала ла аҡрын ғына асып ебәрә.

Шугай. Бала!.. *(Һикереп тора.)* Янған бала...

Василий. Шугай, һин бар, врач янына бар. Ял ит.

Шугай, аҡрын ғына атлап, сығып китә.

Василий. Кем балаһы был, Анка?

Анка. Был Маринканың ҡыҙы, Шугай ҡыҙы. Светлана. Шпан уны янып торған утҡа ырғытты.

Пауза.

Василий. Анка, был баланы һәм документтарҙы нисек әләктерә алдың?

Анка. Мин уларҙы әләктермәнем. Урман араһынан үҙем генә белгән һуҡмаҡтан ҡайтып киләм. Теге «Үлем яры»н үткәйнем, ҡараһам, юлда аҡ сепрәккә төргән бер нәмә ята. Был нәмә икән тип аптырап ҡалдым. Аҙыраҡ ҡурҡтым да... Шулай ҙа барып ҡарарға булдым. Ҡараһам, аҡ простыня өҫтөндә бына ошо яҙыу ята. *(Ҡуйынынан ҡағыҙ алып бирә.)*

Василий *(ҡағыҙ ала, уҡый)*. «Партизан дуҫтар! Был төргәкте асҡас күргән нәмәләрегеҙ һеҙҙең асыуҙы һәм көстә арттырһын. Дошманды тағы ла рәхимһеҙерәк туҡмағыҙ. Тиҙҙән осрашырбыҙ. *Һеҙҙең таныш булмаған дуҫығыҙ Эм»*.

Тауыштар. Эм?!

— Тағы шул уҡ Эм!

— Енме был, фәрештәмелер, белмәйем. Ләкин простой кеше түгел.

— Кешелеген ул, әлбиттә, кеше. Ләкин нисек ул барыһына ла өлгөрә. Складтар шартлата, немецты үлтерә, автомашиналарҙы яндыра. Просто ғәжәп. Ниндәй көс йөрөтә һуң уны!

— Беҙҙе ниндәй көс йөрөтә һуң? Уны ла шул уҡ көс йөрөтә.

Василий. Дөрөҫ. Мөхәббәт һәм нәфрәт йөрөтә кешене. Был иптәш беҙгә килер. Уның алдында оятҡа ҡал-

майык, туғандар. Дөрөç, немецтарға беҙҙең ҡылған ҡылыҡтар ҙа аҙ түгел. Ләкин мин һеҙҙе тағы ла ҡатыраҡ эшләргә саҡырам, интәштәр.

Анка баланы простыняға төрә, алып сыға башлай.

Партизан. Күмергәме, Анка? Әйҙә икәү.

Сығалар.

Шунда уҡ: «Ҡана, күрһәт, мин дә уны күрергә тейешмен!» — тигән тауыш ишетелә. Барыһы ла тауыш килгән яҡҡа ҡарайҙар. Налывайко керә.

Налывайко. Бала! Вася, Василий! Беҙ нәмә көтөп ятабыҙ, ә? Унда аталар, яндыралар. Ә беҙ... ятабыҙ.

Василий. Нәмә көткәнде мин үҙем белəм — мин командир. Ә һин бына ни өсөн приказды үтәмәйенсә ҡайттың?

Налывайко. Мин приказды үтәнем.

Василий. Ә теге Подлис ҡайҙа?

Налывайко. Теге подлецмы? Ҡалды.

Василий. Ҡайҙа ҡалды?

Налывайко. Урманда.

Василий. Нәмә, аттыңмы?

Налывайко. Юҡ, атманым.

Василий. Налывайко, һин шаярма, ваҡыты ул түгел.

Налывайко. Мин уның эске тормошона ҡоралды ҡыҫылыш яһаным.

2-се партизан. Әйттем бит: минең күрше араҡы күрһә, эсмәй түҙə алмай, ə Налывайко фашисты күрһə, үлтермəй түҙə алмай.

Василий. Һиңə, Налывайко, бер юлға — выговор.

Налывайко. Выговор?! Ни өсөн? Кем өсөн? Немец өсөнмө? Юҡ. Мин ул выговорҙы алмайым. Кəрəкмəй. Һеҙ бында задание үтəргə əҙерлəнəһегеҙ, ə мин урманда немецты оҙатып йөрөйөммө ни? Юҡ. Бынауы яндырылған, күмергə əйлəнгəн бала өсөн мин тағы егерме немец үлтерер инем. Һəм үлтерермен. Ə һин — выговор. Юҡ. Мин немец өсөн выговор алмайым, Василий. Телəһəң ни эшлə.

Василий. Немец өсөн түгел, ə приказды еренə еткермəгəн өсөн. Һиңə мин кем булам?

Налывайко. Һин миңə командир.

Василий. Командир. Дөрөç. Ə командирҙың һүҙе, приказы һинең өсөн законмы?

Налывайко. Закон. Əлбиттə, закон.

В а с и л и й. Законды үтәмәгән өсөн һине атырға кәрәк ине. Ә мин һиңә выговор ғына бирәм.

Н а л ы в а й к о. Закон өсөн булһа, выговор алырға ярай. Ә немец өсөн... Юк.

Яҡынайып килгән самолет тауышы ишетелә.

В а с и л и й. Иптәштәр, урындарығыҙға!

Б а р ы һ ы л а сығалар. Василий һәм Анка тороп ҡалалар, һауаға ҡарайҙар.

В а с и л и й. Йә, Анка.

А н к а. Йә, Василий.

В а с и л и й. Отрядта, әгәр һин булмаһаң, нәмәлер, кемдер етмәгән кеүек була ла тора. Һин ике-өс көнгә генә китһәң дә, мин һағынып өлгөрәм. Ә һин?

А н к а. Мин дә... Юк, мин улай түгел. Мин һағынмайым.

В а с и л и й. Алдайһың, Анка. Алдағанлығыңды күҙҙәрең әйтеп тора. Йә, ҡара әле миңә...

Самолет тауышы яҡына. Икеһе лә юғары ҡарайҙар. Көслө шартлау. Ергә яталар.

А н к а. Бер генә бомба ташланы. Тимәк, фриц һынап ҡына йөрөй.

В а с и л и й. Анка, ана Шугай килә, һин уны йыуат. Ауыр уға. *(Сыға.)*

Ш у г а й керә. Анка яныша ағас ботағына ултыра. Оҙаҡ өндәшмәй ултыралар.

Ш у г а й. Һәйбәт ҡыҙ һин, Анка. Ҡайһы ерең менәндер һин миңә Маринканы хәтерләтәһең.

А н к а. Нисек, әллә яратаһыңмы?

Ш у г а й. Һине яратырға була. Тик бына... Василий бар. Василий булмаһа, мин һине яратыр ҙа инем. Ә барыбер Маринканы онотоп булмаҫ ине.. Эх, Маринка!..

А н к а. Шугай, мин Маринка тураһында кешенән ишетеп кенә беләм. Һөйлә әле үҙең.

Ш у г а й. Һиңә, Анка, һөйләргә була... Һин аңлай беләһең... Шулай. Кис булып, ҡараңғы төшөп килә. Беҙ дүрт кеше заданиены үтәп ҡайтып киләбеҙ. Тирә-яҡта немец. Уларға һис күренергә ярамай: күрендеңме — бөттө, биш көн буйы эшләгән эш юҡҡа сыға. Сөнки беҙ дүртәү генә, ә улар — һәр ерҙә, күптәр. Шулай беҙ бер һай ғына йыраҡа буйлап барабыҙ. Ҡапыл яҡында ғына әсе тауыш ишетелде. Ҡатын-ҡыҙ тауышы. Был тауыш

йөрәкте бысаҡ менән ҡырҡҡан кеүек әсеттереп ебәрҙе. «Туҡтайығ әле, туғанҡайҙар, был тауышты мин таныйым», — тинем. Туҡтаныҡ. Мин йыраҡанан аҙ ғына сыға бирҙем дә ҡарап ятам. Ҡараһам, биш-алты һалдат бер йәш ҡатынды көсләйҙәр. Ҡатын тулай, тыбырсына. Ҡыҫҡырырға теләй. Ҡайһы саҡта әсе тауышы ла ишетелеп ҡала. Ишетелгән һайын был тауыш минең үҙәкте өҙә. «Туғанҡайҙар, ҡатынды харап итәләр, ҡотҡарайыҡ», — тием. «Ярамай», — тиҙәр. Һәм ярамай ҙа шул. Дөрөҫ. Ә тауыш һаман йөрәкте яндыра. Таныш тауыш. Шунан ҡапыл: «Шугай!.. Кәҙерле Шугай!.. Харап итәләр... Ҡотҡар, Шугай!..» — тип ҡысҡыра теге ҡатын. Һәм мин ҡатынды таныным. Маринка ине ул... «Иптәштәр, был минең Маринкам бит, ҡотҡарырға кәрәк Маринкамды»,— тинем мин иптәштәргә. Матвей риза булды. Икебеҙ донесение менән штабҡа китте. Ә беҙ Матвей менән икәүләп немецтар өҫтөнә ташландыҡ. Мин утҡа-һыуға ҡарамайынса алға йүгерҙем: унда йәлҡҡоланған Маринка ята ине. Матвей шул көрәштә һәләк булды. Маринканы ҡотҡарып булманы. Мине немец пуляһы аяҡтан йыҡты. Немецтар мине үлгән тип иҫәпләп ҡалдырып киткәндәр... Мине лә, Матвей менән Маринка кәүҙәһен дә килеп өлгөргән иптәштәр алып ҡайтҡандар. Маринка шулай һәләк булды, ә тауыш һаман йөрәктә яңғырай, ләкин ул хәҙер: «Шугай, ҡотҡар», — тип түгел, ә «Шугай, үс ал!» — тип ыҡтыла миңә. Һәм мин үс алам. Шул көндән һуң мин ун ике немецты үлтерҙем. Ләкин Маринканың үсе ҡанманы әле. Мин әле ул ҡәбәхәттәрҙе күп үлтерәсәкмен. Тик бына яра ғына тиҙерәк төҙәлһен.

Анка Шугайҙы ҡосаҡлап ҡапыл үбә.

Анка, кәҙерле Анка! Һин мине йәшәүгә алып ҡайтаһың. Рәхмәт, Анка! Ниндәй яҡшылар был беҙҙең ҡыҙҙар!

Шаршау

Икенсе картина

Урман. Кис. Тынлыҡ. Гнида керә, ҡарана, эҙләнә, ағастар артына йәшеренгән текә ярға барып сыға, ағастарға йәбешеп, түбән ҡарай.

Гнида. «Үлем яры»... Был яр аҫтына ҡарарға хатта алла үҙе лә ҡурҡа торғандыр. Ниндәй ҡот осҡос яр! Немецтар был ярҙы «Үлем яры» тип юҡҡа ғына атамағандар шул. Шульга ҡарт әйтә: һин бынан кит, йә һыу-

ға ташлан, йә аҫылынып үл, ти. Бына хәҙер ошо ағастан ҡулды ғына ысҡындырырға... Кәрпек ҡаҡҡансы көлгә әйләнәһең, һөйәк тултырылған ҡапсыҡҡа әйләнәһең... Рәхәт үлем. Ләкин миңә үлергә кәрәкмәй, ярамай. Мин Трохименконан, Григорий Трохименконан, үс алырға тейешмен. Ул үҙен хәҙер Василий тип атап йөрөтә. Ләкин ул исемен үҙгәртеү менән үткән тормошон үҙгәртә алманы. Василий һалған яра минең йөрәкте әле һаман һыҙлата. Ул минең ҡара күҙле Катеринамды тартып алды. Ә мин ул саҡта Трохименко икән тип башҡа берәүҙе үлтереп ташлағанмын. Хәҙер мин яңылышмам. Мин, Трохименко, һине танырмын.

Т а у ы ш. Гнида, һин нәмә, оҙаҡмы көттөрәһең?

М е й е р керә.

М е й е р. Господин лейтенант һиңә тиҙерәк йөрөргә ҡушты, ә һин...

Г н и д а. Тиҙерәк йөрөргә? Бына һин бында ҡара ла тиҙерәк йөрө.

Мейер яр аҫтына ҡарай.

М е й е р. Ниндәй ҡот осҡос яр!

Г н и д а. «Үлем яры».

М е й е р. Нисек «Үлем яры»?

Г н и д а. Бында һеҙ килгәнгә ҡәҙәр ауылда торған бөтә немецтар ошо яр аҫтында серейҙәр ине. Улар был ярҙы «Үлем яры» тип атанылар.

М е й е р. Ә ниңә һуң беҙ бында килдек? Ниңә?

Г н и д а. Уныһын Шульга ҡарттан һорағыҙ, ниңә ул һеҙҙе был ярға алып килгәндер, үҙе әйтер.

Ҡабаланып, М е й е р кире сыға. Уның артынан Г н и д а ла йүтерә. Бер аҙҙан н е м е ц о т р я д ы керә. Иң алда таяҡҡа таянған Ш у л ь г а. Ул ҡалҡыулыҡҡа менә лә туҡтай.

Ш п а н. Ниңә туҡтаның?

Ш у л ь г а. Ошонда.

Ш п а н. Нәмә ошонда?

Ш у л ь г а. Ошонда юл бөттө.

Ш п а н. Нисек юл бөттө? Ә партизандар ҡайҙа?

Ш у л ь г а. Мин ошонан ары юлды белмәйем.

Ш п а н. Тимәк, һин мине «Үлем яры»на алып килгәнһең.

Ш у л ь г а. Дөрөҫ. Мин һеҙҙе шул ярға алып килдем. Алып бармаҫ... Ҡайҙа ғына бармағыҙ, ҡайҙа ғына аяҡ атламағыҙ, һеҙҙең алда ошо үлем яры торасаҡ. Совет

еренә баҫып кергән һәр бер немецтың бысраҡ ғүмере ошо яр аҫтында өҙөләсәк...

Ш п а н. Ах, йәшен һуҡҡыр! *(Шульгаға ата.)*

Шульга аҡрын ғына йығыла.

Шул ук секундта урман эсендә атыу тауышы яңғырай, Шпандың ҡулындағы револьверы төшөп китә. Ул, ҡулын тотоп, йүгереп сыға. Мейер: «Партизандар!» — тип ҡысҡырып ебәрә. Атыш көсәйә. Н е м е ц т а р төрлө яҡҡа таралышалар. В а с и л и й ағаҫҡа ышыҡланып атырға торғанда, н е м е ц килеп сыға, Василийға тоҫҡай. Ш у г а й йүгереп инә, немецты атып йыға. Ләкин үҙе лә ағас араһына ауа. Атыш, сәхнә аша йүгереш бер нисә минут дауам итә. А н к а йүгереп инә.

А н к а. Шпан! Ҡайҙа ҡасты Шпан?! *(Икенсе яҡҡа йүгерә.)*

Н а л ы в а й к о йүгереп инә.

Н а л ы в а й к о. Бына шайтан! Әле генә ошонда ине, әле генә юҡ булды. Эске тормошоңа ҡораллы ҡыҫылыш яһармын мин һинең, Шпан! Ҡотола алмаҫһың! *(Йүгереп сыға.)*

Атыш туҡтала бара. В а с и л и й һәм п а р т и з а н д а р аҡрынлап йыйылалар.

В а с и л и й. Беҙ, иптәштәр, насар һуғышмайбыҙ. Беҙҙең арала бына тигән батырҙар бар. Ләкин бөгөн беҙ насар һуғыштыҡ. Насар, иптәштәр. Дөрөҫ, беҙ байтаҡ немецты «Үлем яры» аҫтына тәгәрәттек. Был — яҡшы. Ә ҡайҙа Шпан? Ҡайҙа Шпан менән Гнида?.. Улар ҡасып ҡотолдолар. Ләкин Шпанды үлтерергә кәрәк. Юҡһа Шпан беҙҙе үлтерәсәк.

Ағастарҙы йырып, эҙләй башлайҙар. Анка Шугайҙы таба.

А н к а. Иптәштәр, Шугай бында!..

Шугай янына йыйылалар, күкрәгенә ятып тыңлайҙар, күлдәген йыртып ебәрәләр.

Ш у г а й. Иптәштәр!.. Кәрәкмәй... Бәйләмәгеҙ... Мин үләм... Василий... Анка... Мин үләм... Мине ғәфү итегеҙ, кисерегеҙ... Ләкин онотмағыҙ... Мин Маринка өсөн ҙус алып бөтөрә алманым... Минең өсөн дә ҙус алығыҙ, иптәштәр... *(Үлә.)*

Барыһы ла баштарын һалалар.

В а с и л и й. Бәхил бул, боевой иптәш. Ләкин һин тыныс йоҡла. Беҙ Маринка өсөн дә, Светлана өсөн дә, һинең үлемең өсөн дә ҙус алырбыҙ.

Н а л ы в а й к о, Гниданың ҡулдарын күтәртеп, алып керә.

Н а л ы в а й к о. Василий, теге выговорҙы, туғанҡай, һин минең өҫтән ал. Бына был хәшәрәтте үлтермәй алып килдем. Ә үлтерергә кәрәк ине.

П а р т и з а н. Немец булһа, һин уны әллә ҡасан үлтергән булыр инең. Ә был — рус.

Н а л ы в а й к о. Был рус. Ләкин ул немецтан да насарыраҡ. Мин хәҙер үк уның эске тормошона... *(Коралын күтәрә.)*

В а с и л и й. Туҡта. Һин уны атырға өлгөрөрһөң. *(Гнидаға.)* Ҡайҙа Шпан?

Г н и д а. Белмәйем. Белергә лә теләмәйем мин ул Шпанды! Василий, атмағыҙ мине, ҡотҡарығыҙ мине, Василий! Анка! Һеңлем, туғаным Анка! *(Теҙләнеп, Анка алдына бара.)* Беҙ бит ҡандаш туғандар. Ҡыҙғанмайһыңмы ни, Анка, бер туған ағаңды?! Әйт Василийға, һин әйтһәң, ул мине ҡотҡарыр, Анка! Туғаным минең!..

А н к а. Юҡ, мин һинең туғаның түгел. Мин һиңә ләғнәт уҡыйым.

Г н и д а. Анка!..

Анка Гнидаға ата. Шул саҡ сәхнә артында яңғыҙ атыу тауышы яңғырай. Барыһы ла шул яҡҡа боролоп ҡарайҙар. Арты менән, ҡулдарын күтәргән килеш, Ш п а н керә. Уның артынан, биттәре ҡанға батҡан, алға һоноған ҡулына наган тотҡан М о р а ҙ ы м ерҙән шыуып керә. Ләкин уны танып булмай.

М о р а ҙ ы м. Партизан иптәштәр!.. Был — лейтенант Шпан. Минең һуңғы еңеүем ошо... Минең исемем — Эм. *(Башы ергә төшә.)*

А н к а *(ҡысҡырып ебәрә)*. Василий! Василий! Һуң был бит... иптәштәр, был бит башҡорт егете Мораҙым!.. *(Мораҙымға ташлана, уның башын ҡулдарына ала.)* Мораҙым! Мораҙым!..

Василий Мораҙым янына теҙләнә, пульсын ҡарай. Ҡайһы берәүҙәр баш кейемдәрен һала башлайҙар.

В а с и л и й. Тере... Иптәштәр, ул тере!

М о р а ҙ ы м. Мин теремен... Миңә үлергә ярамай... Миңә йәшәргә кәрәк. Мария Федоровна миңә йәшәргә ҡушты... Фашисты үлтереү өсөн йәшәргә кәрәк миңә...

Тәрән тынлыҡ. Урман шаулауы ишетелә.

Ш а р ш а у

1943

Ҡадир Даян

(1910—1975)

Ҡадир Хәким улы Даянов 1910 йылдың 14 февралендә Силәбе өлкәһенең хәҙерге Ҡоншаҡ районы Ҡоншаҡ ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1927 йылда ошо уҡ ауылда урта мәктәпте тамамлағас, Аргаяштә уҡытыусылар әҙерләү курсын үтеп, мәктәптә эшләй. 1930 йылға тиклем уҡытыусы һәм мәктәп директоры була.

1930—1933 йылдарҙа Өфөлә педагогия институтында уҡый. Бер ни тиклем ваҡыт Стәрлетамаҡ педагогия техникумында уҡытҡандан һуң, 1936—1941 йылдарҙа Башҡорт педагогия институтында башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире булып эшләй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа китап нәшриәтендә редактор, Башҡортостан яҙыусылар союзында әҙәби консультант вазифаларын башҡара.

Ҡадир Даян башҡорт әҙәбиәтенә утызынсы йылдарҙа килеп, поэзияға, айырыуса уның йыр жанрына, зур көс һалды. Балалар өсөн проза әҫәрҙәре лә яҙҙы.

Ҡ. Даяндың «Таңсулпан», «Дим буйында», «Тулҡынлана тәрән күл» кеүек пьесалары Башҡорт дәүләт академия драма театрында, Өфөләге рус драма һәм башҡа театрҙарҙа ҡуйылдылар. 1959 йылда уға Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исем бирелә. 1947 йылдан КПСС ағзаһы. «Ҡыҙыл Йондоҙ», «Почет Билдәһе» ордендары менән наградланған.

ТАҢСУЛПАН

Пьеса
4 шаршауҙа

Катнашалар

Юламан — ярлы.
Гөлбаныу — уның ҡатыны.
Таңсулпан — уларҙың ҡыҙы.
Сураҡол — Юламандың бер туған ағаһы.
Айсыуаҡ — Таңсулпандың һөйгән егете.
Йәнбикә — Айсыуаҡтың әсәһе.
Саҡанбай — Айсыуаҡтың атаһының бер туған эненә.
Күсәрбай — бай.
Көҫәпҡол — Күсәрбайҙың дуҫы, бай.
Мортаза — бай.
Бикмырҙа — Күсәрбай яғынан килгән ҡоҙаларҙың береһе.
Байрамғол — ярлы ҡарт.
Ишмай — Айсыуаҡтың дуҫы, ярлы егет.
Ҡаҙаҡҡол — Ишмайҙың хужаһы.
Гөлсирә, Гәүһәр, Шәрифә — Таңсулпандың эхирәттәре (дуҫ ҡыҙҙары).
Мәргүбә — Таңсулпандың ике туған ағаһының бисәһе.
Сәлимә — Көҫәпҡолдоң бисәһе.
Мулла, староста, ике пүнәтәй, ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар, көрәшселәр һәм туйға килеүсе бүтән кешеләр.

Ваҡиға 18-се быуаттың аҙаҡтарында,
Е. Пугачев восстаниеһы баҫтырылғандан һуң, бара

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Урал итәгендә башҡорт йәйләүе. Алғы планда — Айсыуаҡтың һәм Юламандың тирмәһе. Ю л а м а н, үҙенең тирмәһенән сығып, ишек алдындағы өс йәшле ҡаҙыҡта элеүле торған сыбыртҡыһын һәм бер йүгән алып, мал ҡарарға китә. Бүреләр олоуы ишетелә. А й с ы у а ҡ, ашығып, тирмәһенән сыға. Бүреләр олоуын тыңлай.

А й с ы у а ҡ

(Билбауын ашыға-ашыға бәйләгән килеш)

Күк сағылда, әсәй, бүре олой,
Уҡ-һаҙағым менән суҡмарымды
Алып бирсе!..
Тиҙ бул, әсәй, тиҙ бул!..

Й ә н б и к ә сыға. Ул бик иғтибар менән бүреләр олоуын тыңлай.

Й ә н б и к ә

Туҡта, улым, улай йөрәкһемә,
Йөрәкһеүҙең һуңы яҡшы булмай.

А й с ы у а ҡ

Ебәр инде, әсәй, һуңлатаһың,
Улар хәҙер бына бында ғына.
Оҙаҡламам, аҙаҡ табып булмаҫ.

Й ә н б и к ә

Берәү генә түгел, көтөү менән
Олойҙар бит. Ниндәй ҡурҡыныс!

А й с ы у а ҡ

Улар миңә ҡурҡыныслы түгел,
Мин уларға үҙем — ҡурҡыныс.

(Йәһәт кенә тирмәгә инеп, йәйә менән уҡтарын һәм суҡмарын алып сыға.)

Й ә н б и к ә

Күҙ ҡабағым тарта, балаҡайым,
Хәйерлегә булмай торған. Барма!

Айсыуаҡ

Көймә, әсәй, юҡҡа хәүефләнмә.

(Ашығып сығып китә.)

Йәнбикә

Таңсулпанға мәһәр йыям тиеп,
Фәзиз башҡынаһын да аямай.
Айыу, бүре күрһә, өйрәк күргән
Ҡарсығалай, ярһып, талпына.
Һунарҙарға йөрөй, көн-төн эшләй,
Һаман мәһәрлек мал таба алмай.
Төн йоҡоһоҙ, тирләп эшләһәң дә,
Булмай икән бәхет, бер булмаһа.

Күнәк алып, һыйыр һауырға китергә торғанда, Сағанбай инә. Унын һул ҡулы хәрәкәтһеҙ аҫылынып тора. Аҡһай, таяҡ таянған.

Сағанбай

Һаумы, еңгә?

Йәнбикә

Сағанбай түгелме?

Сағанбай

Эйе, еңгә, мин — Сағанбай.

Йәнбикә

Нисә йылдар инде күренмәйһең.

Сағанбай

Хеҙмәт иткән ерем алыҫ булды,
Шуға күрә оҙаҡ күренмәнем.

Йәнбикә

Ҡайҙа хеҙмәт иттең, ниндәй эштә?

Сағанбай

Байҙа көтөү көттөм. Мин зәғифкә
Шунан башҡа тағы ниндәй эш бар!
Хәҙер ул эшкә лә ярап булмай.
Мине әрләп, ҡыуып сығарҙы бай.
Бына хәҙер ҡайттым тыуған яҡҡа.

Йәнбикә

Күләгәнән ҡасып булмағандай,
Яҙмыштан да булмай шул ҡотолоп, —
Ҡайҙа ла ул яҙмыш бергә йөрөй.
Хаҡ тәғалә бирмәгән бәхетте
Эҙләп кенә табып булмай шул ул.

Сағанбай

Айсыуаҡ өйҙәме?

Йәнбикә

Ул һунарға китте әле генә
Күк сағылда бүре оло̆й ине.
Ул һунарға киткән һайын, ҡурҡам.
Ә ул уйламай ҙа, әллә ниндәй...

Сағанбай

Ҡурҡма, еңгә! Батырлыҡтан ҡурҡма!
Ҡурҡаҡлыҡтан кәрәк ҡурҡырға.
Эх, бар ине бит минең дә осҡан саҡтар!
Ҡасып барған йылғыр бүренең мин,
Осҡор атым менән ҡыуып етеп,
Бөркөт һымаҡ, елкәһенә ҡуна инем.
Эх, ҡанатты ҡайырҙылар шул.
Ҡайырҙылар, еңгә, ҡанатты!..

Йәнбикә

Ул үҙеңдән инде. Үҙ һүҙлеһең.
Артыҡ үҙ һүҙлеһең. Шуға бит ул.

Сағанбай

Исмаһам, һин әйтмә шуны, еңгә!

Йәнбикә

Йә әйт, ниндәй файҙа иттең шунан?
Һындырҙылар аяҡ, ҡулыңды... Шул.
Ниңә закондарға ҡаршы бараһың?
Байҙар көслө, закондары ҡаты.

Сағанбай

Йомшартырға кәрәк ул законды!

Йәнбикә

Эйе, йомшартығыҙ инде бына,
Хатта тын алырға ауыр хәҙер.
Ағайыңды аҫтылар. Ә һинең
Тик сыҡмаған йәнең генә ҡалған.
Аҙмы ауылдарҙы яндырҙылар.
Шулмы һеҙҙең ирек тигәнегеҙ?!
Аҙмы яфа күрҙек! Етте инде.
Буйһонорға кәрәк закондарға.

Сағанбай

Буйһонманым ҡара закондарға
Һәм буйһонмам, еңгә, һис ваҡытта!
Ҡанлы закондарға ҡаршы тороп,
Нәфрәт менән ҡарғап үлермен.
Ағайымдың һүҙен мин онотмам!
Иҫеңдәме, еңгә, муйыныма
Элмәк һалған саҡта ул ни әйтте?

Йәнбикә

Ниңә инде ул яраны ҡуҙғатаһың?

Сағанбай

Ул турала Айсыуаҡҡа һөйләнеңме?

Йәнбикә

Юҡ, юҡ, ул турала мин һөйләмәм.
Әйттем: «Яуҙа үлде атайың» тип, —
Күсәрбайҙар аҫтырғанын белмәй.
Һәм белмәһен, уға кәрәк түгел.

Сағанбай

Белһен, еңгә, белһен, атаһының
Дошмандарын белһен. Кәрәк булыр.
Мин һөйләйем уға. Әйҙә белһен.

Йәнбикә

Зинһар, уны ярҡытма, Сағанбай.
Бик үтенәм һинән, әйтмә уға.
Атаһылай, ул да бик намыҫлы.
Ҡыҙып китеп, әллә ниндәй һүҙҙәр
Әйтер. Башын һәләк итерҙәр.

Сағанбай

Дөрөҫлөктән ҡурҡма, еңгә, ҡурҡма!

Йәнбикә

Заманы бит шулай. Эй, Сағанбай...

Сағанбай

Ярай, еңгә, улай бик үтенгәс,
Хәҙергә мин әйтмәм уға. Ярай.
Ләкин кәрәк саҡта, әйтәсәкмен.
Сөнки Күсәрбайҙар, Көҫәпҡолдар
Тураһында ул белергә тейеш.

Йәнбикә
(һаҡлыҡ менән тирә-яғына ҡаранып)

Әйҙә тирмәгә ин.

Сағанбай

Аҙаҡ, еңгә.
Әле Айсыуаҡ та өйҙә юҡ.
(Китә.)

Йәнбикә
(Сағанбай артынан)

Айсыуаҡҡа һөйләй күрмә инде!
(Үҙ алдына.)

Донъя ҡара упҡын кеүек ҡурҡыныс.
Һәр саҡ ҡурҡып йәшәү ниндәй ауыр!

Мал ҡарап, Юламан ҡайта.

Юламан

Һаумы, күрше!

Йәнбикә

Шөкөр, арыу ғына.
(Күнәк алып, һыйыр һауырға китә.)

Юламан

Әй, тор инде, тор, һауын ваҡыты еткән!

Гөлбаныу
(тирмәнән сығып)

Әй тынғыһыҙ, төшөмдө бүлдерҙең.
Һәләк дан төш күреп ята инем.
Нимә етмәй, ни бар һуң таң менән?

Юламан

Иртә түгел, ҡарсыҡ, халыҡ торған.
Малдар көтә унда, бар, һауып ал.

Гөлбаныу

(күнәктән ҡомғанға һыу һалған килеш)

Таңсулпан, Таңсулпан!

Таңсулпан
(тирмәнән сығып)

Ни бар, әсәй?

Гөлбаныу

Һыуға барсы, ҡыҙым.

Таңсулпан

Хәҙер, әсәй.
(Һыуға китә.)

Гөлбаныу

(ҡомған тотоп, Юламанға)

Кил, йыуынаһыңмы? Әйҙә, тиҙ бул.

Юламан
(йыуынған килеш)

Бик яҡшы төш күрҙем тиһеңме һин?
Юрап ҡарайыҡ, йә, һөйлә әле,
Яҡшы булғас, шатлыҡҡа булыр ул.

Гөлбаныу

Күреп бөтмәнем шул, уяттың бит.

Юламан

Ярай инде, хәйерлегә юра.
Ни булһа ла, хәйерлегә булһын.

Гөлбаныу, күнәктәрен алып, һыйыр һауырға китә. Юламан ҡулын һөҙөтөп торғанда, Сурағол килә.

Сурағол

Һиңә байлыҡ, туған, бик ҙур байлыҡ!

Юламан

Байлыҡ?

Сурағол

Эйе, байлыҡ, бик ҙур байлыҡ!

Юламан

Бирһен хоҙа киң рәхмәтен.

Сурағол

Амин...

Юламан

Ҡайҙан, ниндәй байлыҡ һуң ул, ағай?

Сураҕол

Таңсулпанҕа Миһран ауылынан
Яусы килә бөгөн, байлык килә!

Юламан
(һалҡын ғына)

Кем һората икән, белмәнеңме?

Сураҕол

Илгә мәғлүм булған Күсәрбай, ти.

Юламан

Кем? Күсәрбай тиһеңме?.. Ҡайһы улына икән?

Сураҕол

Юҡ, улына түгел, ҙәнә, ти.
Үҙенә йәш бикәлеккә һорай, ти.

Юламан

Үҙенә йәш бикәлеккә тиһеңме?

Сураҕол

Эйе, ниңә уға иҫең китә?

Юламан

Иҫем китмәй, былай ғына әйтәм.

Сураҕол

Яусы килгәс, миңә бала ебәр.
Мин дә киләм, шунда бергә-бергә
Һөйләшербеҙ, йәме? Ярай, мин киттем.

Юламан

Ағай, тукта әле!

Сураҕол

Йә, туҡтаным?

Юламан

Ултыр әле, ағай, һөйләшәйек;
Алдан беләм, һин тағы ла мине
Әрләрһең инде.

Сурағол

Йә, һөйлә, ни бар?

Юламан

Таҡсулпанды быйыл бирмәҫ инем,
Киленең дә шулай тип һөйләнә.

Сурағол

Нисә башҡоҙаны кире ҡаҡтың?
Аңламайым, кем һуң кәрәк һеҙгә?
Батша улынмы әллә көтәһегеҙ?
Ҡыҙым әле йәш тип әйтер инең, —
Йәш түгел. Ҡыҙың ҡартайып килә.
Уйлап ҡара, ун алтыһы тула!
Әллә егермегә етһен тиһеңме?
Урыны оҡшамай тип әйтер инең,
Урыны — алтын. Эҙләп тапҡан кеүек
Тиле һин. Күсәрбай кеүек кеше
Туған булышам тип торған саҡта,
Шатланырға кәрәк ине һиңә.
Өйөр, өйөр йылҡы малдары бар.
Һыйыр, һарығының һаны ла юҡ.
Бындай урын, туған, эҙләһәң дә,
Илаһаң да, ҡабат табылмаҫ.

Юламан

Ағай, Күсәрбайҙы кире ҡағыу
Ауыр түгел миңә. Ҡайғырмайым.
Ауыр миңә бына һинең һүҙҙе
Кире ҡағыу, — һин ағайһың миңә.
Атайым ҡарт урынына ҡалған
Кеше. Беләм, һин әрләрһең мине.
Минең һүҙҙәр һиңә оҡшап етмәҫ,
Ә шулай ҙа, әйтмәйенсә булмай.

Сураҕол

Әйт, йә, ни бар?

Юламан

Таңсулпанды, ағай,
Айсыуаҡҡа бик димләйҙәр.

Сураҕол

Нимә?
Айсыуаҡҡа?! Кемдәр димләй? Йә, кем?

Юламан

Мин үҙем дә уға ҡаршы түгел,
Киленең дә риза.

Сураҕол

Айсыуаҡҡа?!
Бына хәбәр!.. Ҡайҙа һинең башың?

Юламан

Тукта, ағай, улай ҡыҙма әле;
Ниңә, насармы ни шул Айсыуаҡ?

Сураҕол

Һе, Айсыуаҡ имеш, тапҡан кеше!
Нәмәһе бар уның? Малы бармы?
Даны бармы? Йә, әйт, нимәһе бар?
Ҡайҙан алып һиңә мәһәр бирһен?
Үҙе ас бит, күреп тораһың.
Үҙ бәхетеңә үҙең төкөрәһең,
Үҙе эҙләп килгән хазина бит...
Юҡты уйлап, башыңды ҡаңғыртма,
Ташла, уйлама ла ул турала.
Йә, мин киттем. Яусы килеү менән,
Йәһәт кенә миңә бала ебәр.

Юламан, башын эйеп, уйланған килеш, ултырып ҡала. Һыйыр һауып, Гөлбаныу ҡайта.

Гөлбаныу

Ни бар? Ниңә улай уйға баттың?
Әллә берәй бәлә-ҡаза бармы?

Юламан

Таңсулпанға яусы килә икән,
Ҙур ағайым килеп хәбәр итте.

Гөлбаныу

Кем һората икән? Әйтмәнеме?

Юламан

Теге иң бай кеше Күсәрбай, ти.

Гөлбаныу

Ниңә улай ҡайғыраһың?.. Килһен,
Талап алмаҫ әле. Ҙур яу менән
Килмәйҙер бит?.. Һин ҡайғырма юҡҡа.

Юламан

Ағайым бик димләй. «Урыны яҡшы,
Зинһар, кире ҡаға күрмәгеҙ», — ти.
Айсыуаҡты әйткәс, асыуланды;
Мине әрләп, туҙып ҡайтып китте.

Гөлбаныу

Туҙһа туҙыр, атайың түгел әле.
Үҙ ҡыҙыңа үҙең баш бул, алйыма.
Ҡайнағаның бар ғәҙәте шул инде.
Бала кеүек күрә ләһә ул һине.
Йыуашһың шул. Шуға баҫымсаҡ күрә ул.
Ир булһам мин, һөйләшә белер инем.
Һин өҙөп әйт, йөрөмәһендәр юҡҡа.

Юламан

Әйҙә эскә инеп һөйләшәйек.
Кеше-фәлән тыңлап тормаһын, тим.

Тирмәгә уҙалар.
Айсыуаҡ менән Көҫәпҡол ыҙғышып килеп инәләр. Айсыуаҡтың елкәһендә бүре.

Көçәпҡол

Лығырлама, бүре минеке, бир!..

Айсыуаҡ

Кит, Көçәпҡол, кит бар, яҡшы саҡта!

Көçәпҡол

Туҡта, егет, ниңә улай миңә
Күкрәгеңде киреп аҡыраһың?
Һин кем?! Һин бит ҡарт фетнәсе Ҡолбай
Улы. Ниңә шуны онотаһың?
Әллә һин дә тағы, атайыңдай,
Беҙгә ҡаршы уҡ атмаҡсы булаһыңмы?
Юҡ шул инде, булмаҫ, Салауаттар
Шашҡан ваҡыт үтте инде хәҙер...
Улай бик шашынһаң, беләһеңме...

Айсыуаҡ

Һин ҡурҡытма мине. Ҡурҡмайым мин.

Көçәпҡол

Уйлап һөйләш! Беләһеңме, мин кем?
Күр, бел! Был — мин! Баҡый тархан улы
Бай Көçәпҡол Ташназаров!

Айсыуаҡ

Беләм, беләм, мин таныйым һине.

Көçәпҡол

Танымаһаң, тиҙ танырһың! Танытырбыҙ!
Ҡана, бир бүрене!

Айсыуаҡ

Кит, үрелмә!
Һин мин аткас, һуҡтың уны, бына
Күкрәгенә, яраһына ҡара.

Көçәпҡол

Бүре тик бер уҡтан ғына үлмәй.

Айсыуаҡ

Күрәһең бит
Йөрәгенә тейгән, был көйө ул
Ҡайҙа барһын? Әгәр атылмаһа,
Һин һуң уны нисек һуғыр инең?
Яуҙан һуң батырҙар күбәйә, ти.

Көҫәпҡол

Миңә һин әкиәт һөйләмә! Йә,
Бир бүрене, китәм.

Айсыуаҡ

Килмә яҡын!
Бүре кәрәк булһа, урманға бар,
Атмайынса ғына һуғып алырһың.
Улай батыр булғас, һиңә нәмә,
Бараһың да һуғаһың.

Көҫәпҡол

Үртәмә
Мине, йолҡош! Бир бүрене, бир, тим!

(Айсыуаҡҡа суҡмар менән киҙәнә.)

Ишмай килеп инә.

Ишмай

Әй, Көҫәпҡол! Ҡунаҡ килгән һиңә!

Көҫәпҡол

Кем ул, ниндәй ҡунаҡ?

Ишмай

Мин күрмәнем.
Миһран ауылынан Күсәрбай, ти.

Көҫәпҡол

Күсәрбай!..

И ш м а й

Эйе, Күсәрбай, тиҙәр.

К ө ҫ ә п ҡ о л
(ашығып сыҡҡан саҡта, кире боролоп)

Тынысландым тимә, мин барыбер
Был бүрене һинән аласаҡмын!
(Ашығып сығып китә.)

А й с ы у а ҡ

Һөйләнмә, бар, йүгер!

И ш м а й

Нәмә, ни бар?
Бүре һуҡтығыҙмы? Икегеҙме?

А й с ы у а ҡ

Юҡ, ул минең уҡтан яраланып
Ауа-түнә барған был бүрене
Ҡаршы барып һуҡты. Ана шуға
Минең бүре был тип ыҙғыша.

И ш м а й

Байҙар урмандағы кейеккә лә
Хужа булмаҡ булалармы әллә?
Артыҡ шаша башланылар. Артыҡ.
Беҙҙең Бүгәс батша еңелгәс тә,
Һүҙ әйтергә бирмәй башланылар,
Заман ауырайҙы. Тын ҡыҫыла.
(Бүренең йөнөн һыйпап.)
Хәҙер бының тиреһе шәп түгел шул.
Быны көҙ, ҡар төшкәс, һуғыу кәрәк.

А й с ы у а ҡ

Бойорғаны булһа, ҡар төшкәс тә,
Алыҫ китмәҫ минең был суҡмарҙан.
Мәһәрлек мал кәрәк, Ишмай ағай,
Бына көнө-төнө шуға тырышам.

И ш м а й

Ай-һай, туған, кәләш тигән нәмә
Ҡыйбат шул ул.
Беҙҙең кеүектәргә ундай нәмә
Бик тиҙ генә эләкмәй шул.
Бына миңә утыҙ алты тула,
Кәләшем юҡ. Алып булмай, мал юҡ.
Берәүҙәргә өсәр, дүртәр бисә,
Берәүҙәргә берәү ҙә юҡ. Донъямы шул?!
Нисек кенә итеп әйтһәләр ҙә,
Хоҙа белеп яратмаған был донъяны.

А й с ы у а ҡ

Насип булһа, беҙгә лә табылыр.
Һин ҡайғырма, Ишмай ағай.

И ш м а й

Туған,
Насип булһа, булыр ине инде.
Ул насипты, ҡустым, бик күп көттөм;
Юҡ, булманы. Булмаҫ инде насип.
Һин йәш әле, бәлки, табырһың да.

А й с ы у а ҡ

Алтмыш йәшлек ҡарттар ун дүрт йәшлек
Ҡыҙ алалар. Әле һин уларҙың
Балалары кеүек кенә ләһә.

И ш м а й

Малы булғас, туған, алыр инде,
Алыр. Бөтә донъя малдан тора.
Малы булған кеше алтмышта ла,
Етмештә лә — хөрмәтле йәш кейәү.
Ул теләгән ҡыҙын һайлап ала.
Бына бит ул, туған, мал нишләтә...

(Китә башлай.)

А й с ы у а ҡ

Туҡта, һөйләшәйек әле бер аҙ.

И ш м а й

Китәйем, бай асыуланыр, һау бул!
(Китә.)

А й с ы у а ҡ

Донъя көтөр өсөн малдар кәрәк.
Эх, мал, мал, нисек табырға һине?
Әллә ҡара төндә бысаҡ тотоп,
Юл баҫырғамы?.. Юҡ, саф намыҫты
Ҡандар менән буярға ярамай.
Ҡанлы бысаҡ шатлыҡ килтермәҫ;
Малды хәләл күкрәк көсө менән
Табыу кәрәк, эйе, күкрәк көсө менән.

Сағанбай инә.

С а ғ а н б а й

Һаумы, ҡустым?

А й с ы у а ҡ

У... Сағанбай ағай!

Туғандарса күрешәләр.

С а ғ а н б а й

Ҡалай үҫеп, ҙурайып киткәнһең.
(Бүрене күреп.)
Бына яҡшы. Ярай, бик килешкән.
Был — ир-егет эше. Шулай кәрәк.
(Бүрене күтәреп ҡарарға теләй, ләкин көсө етмәй.)
Эх, бар ине минең дә замандар!
Яҙа аткан саҡтар һирәк ине.

А й с ы у а ҡ

Имгәтелгән сал бөркөт һин, ағай.
Мин ҡыҙғанам һине.

С а ғ а н б а й

Юҡ, ҡыҙғанма!
Һин ҡыҙғанма мине, Айсыуаҡ! Юҡ,

Мин ҡыҙғаныс кеше түгел! Юҡ, юҡ!
Минең был ғәриплек — хаҡлыҡ өсөн.
Хаҡлыҡ эше — ҡыҙғаныс эш түгел.
Ҡул, аяҡты минең һындырҙылар,
Ләкин күңелдәге хаҡлыҡ көсөн
Һис һындыра алманылар.

Айсыуаҡ

Кемдәр?

Сағанбай

Ҡара көстәр — батша ялсылары:
Күсәрбайҙар, төрлө Көҫәпҡолдар...
Күп инде ул һанап китһәң эттәр.

Айсыуаҡ

Ни өсөн һуң шулай имгәттеләр?

Сағанбай

Һуҙмай, ҡыҫҡа ғына әйтһәк, былай:
Пугачевтың яуы баҫтырылғас,
Уның яҡындарын берәм-берәм
Сүпләй башланылар. Йә аталар,
Йә аҫалар, йә һөргөнгә оҙаталар.
Пугачевтың дуҫы Иван Макаровты
Мин йәшерҙем тәрән мәғәрәгә.
Күсәрбайҙар быны һиҙеп ҡалып,
Еткергәндәр оло түрәләргә.
«Ҡайҙа Макаров?..» тип, туҡманылар.
Ҡул, аяҡты шунда һындырҙылар.
Ләкин мин әйтмәнем. Теште ҡыҫтым.
Һәм үлһәм дә әйтмәй үлер инем.

Айсыуаҡ

Был — батырлыҡ. Бик ҙур батырлыҡ был.
Ысын дуҫлыҡ ауыр саҡта һынала, ти.
Һинең был эш — намыҫ, яҡты выждан эше.

Сағанбай

Тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙҙәр.
Атайыңа оҡшағанһың, ҡустым.

Ул да шулай үткер, тапҡыр һүҙле,
Бик намыҫлы батыр ир ине.
Батырлығы өсөн Бүгәс батша
Уның маңлайынан үпте бер саҡ.
Хәтерләйем һәм һис бер онотмам
Атайыңдың әйткән һүҙҙәрен.
«Пугачевтың һүҙен онотмағыҙ!
Хаҡлыҡ, ирек өсөн көрәшегеҙ!
Һеҙ ҡурҡмағыҙ, ауыр язаларҙан.
Бөтә илде аҫа алмаҫтар!..» —
Тип әйтте ул үлер алдынан.
Ошо һүҙҙәр минең ҡолағымда
Һаман әле яңғырап торалар.
Улар минең бөтә йөрәгемә,
Ҡандарыма һеңеп ҡалғандар.
Һин дә был һүҙҙәрҙе күңелеңә
Һалып, беркетеп ҡуй. Кәрәк булыр
Хаҡлыҡ өсөн уттан, һыуҙан ҡурҡма!

Айсыуаҡ

Рәхмәт, ағай, яҡшы кәңәшеңә.
Әйҙә тирмәгә ин. Әсәйем дә
Хәҙер ҡайтып етер.

Сағанбай

Ярай, рәхмәт.
Бик арыным, ял итәйем әле.

Сағанбай тирмәгә инә. Таңсулпан һыуҙан ҡайтып килә.

Таңсулпан

Нимә ул, Айсыуаҡ, бүреме был?

Айсыуаҡ

Эйе, бүре.

Таңсулпан

(биҙрәләрен ергә ултыртып, бүрене ҡарай)

Абау, ниндәй ҡурҡыныс!
Ҡара әле тешен, ҡалай үткер!
Һин, Айсыуаҡ, нисек ҡурҡмайһың?
Әле үлгән көйө ҡот осорлоҡ,

Тере саҡта уға, ҡурҡмайынса,
Ни йөрәгең менән бараһың?
Әллә ҡушмы һинең йөрәгең?

Айсыуаҡ

Бүре ҡурҡаҡ була ул, Таңсулпан.

Таңсулпан

Ҡурҡаҡ?

Айсыуаҡ

Эйе, бүре генә түгел,
Бөтә йыртҡыс ҡурҡа һунарсынан.

Таңсулпан

Һин, Айсыуаҡ, ниндәй батыр, көслө!..

Айсыуаҡ

Көстө һинән алам мин, Таңсулпан.
Миңә көс һәм ҡанат биреүсе — һин.
Әгәр мине яратмаһаң, мин ул саҡта,
Ҡанаттары һынған зәғиф ыласындай,
Көсһөҙ һәм ҡыҙғаныс булып ҡаласаҡмын.

Таңсулпан

Ундай һүҙҙәр әйтмә һин, Айсыуаҡ,
Мин һинеке, һинән башҡа миңә
Һис кем кәрәк түгел. Минең керһеҙ
Йөрәгемә һин ҡушылып үҫтең.
Уны хәҙер һис кем айыра алмаҫ...
Их, мәһәрһеҙ генә никах булһасы!
Ниңә шундай йола юҡ икән?

Айсыуаҡ

Урмандарҙа кейектәр бөтмәһә,
Ике ҡулым минең иҫән булһа,
Мәһәрлек мал табырмын, Таңсулпан.
Һин ҡайғырма, бәхетле яҙмыш көт.

Таңсулпан

Их, Айсыуаҡ, тапһаң ине мәһәрлек!
Һәр таң һайын теләк теләйем мин.
Тәҡдир булып, сәскә сәс бәйләнһә,
Аҡ ҡорбандар салыр инем, арнап.

Айсыуаҡ

Бик күп үтһә, тағы бер йыл үтер,
Мәһәрлек мал табырмын, Таңсулпан.
Көнө-төнө эшләрмен, йоҡламам,
Ҡыш һунарға йөрөрмөн, табырмын.

Таңсулпан

Шул шатлыҡлы көндө күрһәк ине.

Айсыуаҡ

Мин шатлыҡтан башҡа һис бер нәмә
Көтмәйем, Таңсулпан. Беҙҙең ғүмер
Иң ҙур шатлыҡ менән үтер кеүек.
Әгәр һин булмаһаң, был донъяның
Миңә һис бер йәме булмаҫ ине.
Бына был күк тауҙар, зәңгәр күлдәр
Һәм бына был ярлы тирмәләр —
Бөтәһе лә яҡын миңә. Улар
Фәҡәт бында һин булғанға ғына
Шулай матур булып күренәләр.

Таңсулпан

Һине атайым да, әсәйем дә
Бик ярата. Улар һине һәр саҡ
Маҡтап һөйләй. Улар һинең хаҡта
Һөйләгәндә, йөрәк әллә нишләй?..
Күңел тула, ярһый, әллә ниндәй
Тулҡын баҫа минең йөрәгемде.

Айсыуаҡ

Минең йөрәк һәр саҡ шулай ярһыу.
Мөхәббәтем, яҙғы йылға төҫлө,
Ярһып таша йөрәгем түрендә.

Таңсулпан

Кемдер килә бында.
(Ашығып тирмәгә инеп китә.)

Айсыуаҡ

Их Таңсулпан!..
(Үҙ тирмәһенә инеп китә.)

Мортаза

Әссәләмәғәләйкүм. Өйҙәләрме?

Юламан сыға.

Һаумы кем, Юламан? Һаумы еңгә?
Һауғынамы һәммәгеҙ ҙә?

Юламан

Шөкөр,
Мең шөкөр хоҙайға, һәр ҡайһыбыҙ
Иҫән-һаубыҙ әле.

Ултыралар.

Мортаза

Улай икән,
Ярай, яҡшы, йә... кем... бер фатиха.

Доға ҡылалар.

Бала-саға, мал-тыуарҙар,
Һәммәһе лә иҫәндәрме?

Юламан

Шөкөр, көллөһө лә иҫән әле.

Мортаза

Хәйере менән булһын, кем... Юламан,
Һиңә бик шат хәбәр алып килдем.

Юламан

Бирһен хоҙа, хуш, йә, ниндәй хәбәр?

Мортаза

Миһран ауылынан, Күсәрбайҙан,
Таңсулпанға яусы булып килдем.
Күсәрбайҙы беләһең бит инде:
Байлығы ҙур, ырыуҙары ябшы.
Таңсулпандан башҡа бер кемде лә
Күңелем тартмай, ти.

Юламан

Улай икән...
Мине ҙурлап, шундай оло ерҙән
Яусы килеүенә мин бик шатмын.
Ләкин быйыл ҡыҙымды бирмәйем.
Хәлем дә юҡ. Ундай оло ерҙән
Булғас, мәшәҡәте бик ҙур булыр.

Мортаза

Һиңә һис бер мәшәҡәте булмаҫ,
«Бөтә килем-китем, туй сығымын —
Һәммәһен дә үҙем күтәрермен», —
Ти Күсәрбай. Шулай булғас, эйе,
Ниндәй мәшәҡәте булһын һиңә?..
Ҡалымды ла йәлләп тормаҫ инде ул.

Юламан

Күсәрбайға әйт: «Юламан, тиген,
Ҡыҙын быйыл бирмәй икән», — тиген.

Мортаза

Ниңә улай бик ҡырт ҡына киҫәһең?
Әллә урынынмы оҡшатмайһың?

Юламан

Оҡшаһа ла, быйыл булмай. Шулай.

Мортаза

Урыны яҡшы булған өсөн килдем.
Әллә һиңә яусы ҡарсыҡмы мин?

Юламан

Үпкәләштән булмаһын, Мортаза,
Быйыл бирмәйем мин Таңсулпанды.

Мортаза

Һине үҙебеҙҙең арабыҙға
Индерәйек тигән булып, шунда,
Килгән булдым. Ярай инде, ҡалһын.

Юламан

Ағай-эне итеп килеүеңә,
Бик ҙур рәхмәт. Эйе, бик ҙур рәхмәт.

Мортаза

Һин, Юламан, үткәнеңде бик тиҙ
Онотаһың. Һин кем?.. Һин бит Бүгәс,
Салауаттар тирәһендә йөрөп,
Беҙгә ҡаршы уҡтар атҡан кеше.
Арҡаңдағы сыбыҡ, ҡамсы эҙе
Уңалғандыр, ахыры. Ҡамсы кәрәктер...

Юламан

Ҡыҙҙың атаһына сыбыҡ, ҡамсы!
Рәхмәт төшкөр, бына ниндәй яусы!
Ярай, ярай, шәбен килтер ҡамсының.

Мортаза

Көлмә, көлмә!..
(Ситкә ҡарап.)
Былай булғас, бында
Сураҡолдо ебәрергә кәрәк.
(Китә.)

Юламан уйланып ултырып ҡала. Тирмәнән шатланып Гөлбаныу сыға.

Гөлбаныу

Ярай, һәйбәт булды, йөрөмәһендәр.

Юламан

Яңылышмайбыҙмы, ҡарсыҡ, нисек?

Гөлбаныу

Юҡ, бик дөрөҫ. Ир булып һөйләштең.

Юламан

Ҡалымды йәлләмәҫ ти бит әле.
Туҡта, уйлашайыҡ әле, ҡарсыҡ.
Ағайым да туҙып ҡайтып китте.
Оҡшармы һуң беҙҙең был ҡарышыу?

Гөлбаныу

Бала кеүек борғаланма инде,
Бер һүҙле бул, әгәр һин ир булһаң.
Берҙән-бер ҡыҙыңды илатмаһаң,
Астан үлермен тип ҡурҡаһыңмы?
Бала күҙ йәшенә килгән малдың
Игелеге булыр тиһеңме һин?
Күсәрбай бит үҙеңдән дә оло,
Сәскә кеүек, шул балаға тиңме һуң?
Йылан кеүек ике бисәһе бар.
Улар уға көн күрһәтәме ни?

Юламан

Дөрөҫ, дөрөҫ, ҡарсыҡ! Унан һуң бит
Ул Күсәрбай бөтә ил алдында
Бик гөнаһлы, ҡара йөҙлө кеше.
Ул бит Бүгәс яуы ваҡытында
Ҡолой Балтачевтар менән бергә
Аҙмы ғәйепһеҙҙең башын киҫте.
Уның ҡулы ҡанлы, малы харам,
Юҡ, бирмәйбеҙ уға, бирмәйбеҙ, юҡ!
Ағайым әрләһә әрләр инде.

Гөлбаныу

Ай алла! Әрләһен. Ул үҫтергән
Баламы ни?! Ҡотоң осҡан икән...

Сурағол менән Байрамғол ҡарт килә. Гөлбаныу тирмәгә инә.

Сурағол

Һин, Юламан, ниңә тилерәһең?
Был ни эшең һинең? Оят таһа...
Шундай бай урынды кире ҡағаһың.
Бына алйот, башы ҡайҙа бының?!

Байрамғол

Ҡара, кем... Һин, туҡта, ҡыҙма әле.
Ҡыҙ биреү — мал һатыу түгел дәһә.
Яйлап һөйләшәйек, аңлашайыҡ.

Юламан

Икегеҙ ҙә оло кешеһегеҙ,
Күңелегеҙгә ауыр алмағыҙ:
Нисек кенә кәңәш бирһәгеҙ ҙә,
Таңсулпанды уға бирмәйем мин.

Сурағол

Бына бит ул нисек, күрәһеңме?
Ҡыҙырһыңмы шуға, ҡызмаҫһыңмы?
Күрәһең бит, оло һүҙе уға
Сүп тә түгел, үҙе оло, үҙе баш!

Байрамғол

Һин, Юламан ҡустым, оло һүҙен
Бик ҡырт ҡына киҫеп ҡуйма әле.
Ағай бит ул һиңә. Улай оҡшамаҫ.
Оло кеше яманлыҡҡа әйтмәҫ.

Юламан

Яҡын күреп кәңәш биргән өсөн,
Рәхмәт һеҙгә, ләкин кисерегеҙ,
Ҡыҙымды мин һеҙ димләгән ергә
Бирә алмайым, юҡ!

Сураҕол

Кемгә бирәһең?
Шул Айсыуаҡҡамы? Йә, әйт әле!

Байрамҕол

Туҡта, килен нисек уйлай икән?
(Тирмә ишегенә барып, ишек аша.)
Кем... Гөлбаныу килен, һин ризамы
Таңсулпанды Күсәрбайға тапшырырға?

Гөлбаныу

Юҡ, кәрәкмәй, мин дә риза түгел.

Байрамҕол

Аңламайым, был ни ғәжәп эш һуң?

Сураҕол

Ғәжәп кенәме ни, иҫ киткес эш!

Юламан
(уйланып)

Ярай, минең һалған мәһәремә
Күнһә, ҡыҙҙы бирәм.

Байрамҕол

Бына шулай!

Сураҕол

Бына, күптән шулай кәрәк ине.

Байрамҕол

Оло һүҙен шулай тыңлау кәрәк.

Сураҕол

Мортазаны хәҙер саҡыртайыҡ.
Килһен. Ипләп кенә һөйләшәйек.

Юламан

Ярай, килһен.

Байрамғол

Хуш, һау булығыҙ.
Шулай... Ипләп кенә һөйләшегеҙ,
Килешегеҙ. Минең кәңәшем шул.

Сурағол

Мин дә китәм, туҡта, хәҙер, бергә...
(Юламанға.)
Мортазаға бала ебәрәм мин.
Хәҙер килер. Алыҫ сығып китмә.
Уның менән мин дә килермен.

Байрамғол менән Сурағол китә. Әрнеүле асыу менән тирмәнән Гөлбаныу сыға.

Гөлбаныу

Һин ни эшләнең?! Ата түгел икәнһең!
Еттең дәһә баланың башына.

Тирмәнән Таңсулпан илап килеп сыға.

Таңсулпан

Атай, ниңә риза булдың?! Атай...

Юламан

Сеү, туҡтағыҙ, туҡта, илашмағыҙ.
Һеҙ бит бер нимә лә белмәйһегеҙ.
Бында хәйлә бар бит.

Гөлбаныу

Ниндәй хәйлә?

Юламан

Хәйлә былай, ҡарсыҡ: күтәрмәҫлек
Мәһәр һалабыҙ. Шул. Бүтән сара юҡ.

Гөлбаныу менән Таңсулпандың йөҙө асылып китә.

Гөлбаныу

Ул мәһәргә күнеп ҡуйһа?

Юламан

Күнмәҫ.
Күнерлек итмәбеҙ, күп һалырбыҙ.

Гөлбаныу

Йә әйт әле, күпме һалырбыҙ һуң?

Сурағол менән Мортаза инә. Гөлбаныу менән Таңсулпан тирмәгә инеп китәләр.

Юламан

Ниңә бик тиҙ, әллә ҡайтманыңмы?

Сурағол

Мортазаны юлда осраттым.
Йә, туғандар, эштең башы изге,
Пак сәғәттә булһын, йә башлайыҡ.

Мортаза

Эйе, шулай булһын, эштең башы
Фәрештәләр ҡанат ҡаҡҡан мәлгә
Тура килһен.

Сурағол

Амин... Хуш, йә, туған,
Һин атай кешеһең, ҡыҙ һинеке.
Әйт мәһәрәңде.

Юламан

Ҡыҙға мәһәр шул:
Ун баш йылҡы, алты һауын һыйыр,
Ун баш һарыҡ. Ун баш һимеҙ тәкә.
Егерме баш умарта.
Ҡыҙҙың үҙенә һәм әсәһенә
Әҙрәс тышлы яңы бәсә тун,
Ҡама бүрек, яҡшы ебәк күлдәк;

Ҙур туй өсөн, өс тыу бейә. Шунан...
Шунан тағы...

Мортаза

Туҡта, туҡта әле,
Кем... Юламан, һин самаһыҙланма!
Юҡ, Күсәрбай был мәһәргә күнмәҫ.

Юламан

Күнмәй икән, уның ихтыяры,
Шул әйткәндән һис тә кәметмәйем.

Сурағол

Нимә һин үлсәүһеҙ ҡыланаһың?
Ниңә кәрәк һиңә шул тиклем мал?

Юламан

Шуға күнә икән, ҡыҙ уныҡы,
Күнмәй икән, уның ихтыяры.

Сурағол

Һиңә, бөгөн ен һуғылған, ахыры, —
Гел киреғә бороп тик тораһың.

Юламан

Кәмет мәһәрҙе тип һүҙ әйтмәгеҙ,
Тыңламайым.

Мортаза

Ярай, мин киттем.
Бындай ҙур мәһәргә һис кем күнмәҫ.
Үкенерһең, Юламан, үкенерһең!
(Китә.)

Сурағол

Ағай тип әйтәһе булма миңә,
Бынан һуң мин аяҡ баҫмам һиңә!
(Китә.)

Юламан

Феү, ҡотолдоҡ, тындыҡ был бәләнән.

Таңсулпан менән Гөлбаныу шатланып тирмәнән сығалар.

Гөлбаныу

Яҡшы булды! Күңел тыныс булыр.

Таңсулпан

Рәхмәт, атай, утҡа ташламаның.

Юламан менән Гөлбаныу тирмәгә инәләр. Шат Таңсулпан, ерҙән ниҙер алып, Айсыуаҡ тирмәһенә бәрә лә, үҙе йәшенә. Йылмайып, Айсыуаҡ сыға, тирә-яғына ҡарана. Үҙҙәренең шартлы билдәләре буйынса сығҡанлығы күренә. Таңсулпанды эҙләй. Таба.

Таңсулпан

Һиңә мин, Айсыуаҡ, бер бик ҡыҙыҡ
Һәм шатлыҡлы хәбәр әйтәм. Тыңла.

Айсыуаҡ

Йә, Таңсулпан, ниндәй хәбәр?

Таңсулпан

Бөгөн
Миңә Күсәрбайҙан яусы килде.

Айсыуаҡ

Күсәрбайҙан?..

Таңсулпан

Эйе, Күсәрбайҙан.
Ә атайым уны ирмәк итте.

Айсыуаҡ

Йә әйт әле, нисек?

Таңсулпан

Күтәрмәçлек
Итеп, бик күп мәһәр һалды уға,
Яусы, күнмәйенсә, ҡайтып китте.
Күнеп ҡуйһа, һәләк булам, тиеп,
Ҡотом осоп, тыңлап торған саҡта,
«Был мәһәргә һис кем күнмәç», — тиеп,
Асыуланып, туҙып ҡайтып китте.
Шуға эй шатландым мин, Айсыуаҡ.

Айсыуаҡ

Их Таңсулпан, был бит беҙҙең бәхет,
Беҙҙең бәхет ул, Таңсулпан.

Таңсулпан

Эйе,
Шулай шул, Айсыуаҡ, беҙҙең бәхет.

Тирмә яғына килгән кешеләр тауышын ишетеп, Айсыуаҡ менән Таңсулпан ашығып сығып китәләр. Сурағол менән Мортаза шатланып, йүгереп килеп инәләр.

Сурағол

Әй, Юламан, сыҡ, сыҡ әле бында!

Тирмәнән Юламан сыға.

Юламан

Ни бар, ағай? Тағы нимә булды?

Мортаза

Эш, Юламан, һин әйткәнсә булды.
Күсәрбай күнде. Күнеү генә түгел,
Арттырҙы ла. Көрәш бәйгеһенә
Тағы бер яҡшы ат вәғәҙә итте.

Сурағол

Егет кеше икән, егет икән.
Бындай кеше өсөн, ҡыҙ йәлме ни?

Мортаза

Бик намыҫлы ир икән!

Сураҕол

Әйтмә инде.

Мортаза

Ирҙең арыҫланы инде, арыҫланы.
Шуның өсөн димләйем дә баһа.

Сураҕол

Әйҙә, хәҙер миңә барайыҡ беҙ.
Ҡымыҙ ҙа бар. Шунда һөйләшербеҙ.
Булъял ҡуйышырбыҙ, йә, әйҙәгеҙ!

Юламан

Ярай, хәҙер барып етермен мин.
Һеҙ барығыҙ, ҡайта тороғоҙ.

Сураҕол менән Мортаза китә.

Әйткән һүҙ, атҡан уҡ. Улар еңде.

Гөлбаныу тирмәнән сыға.

Гөлбаныу

Балабыҙҙы һәләк иттең инде. *(Илай.)*

Юламан

Ниңә мин, йөҙ баш мал, тип әйтмәнем?
Күнмәҫ ине.

Гөлбаныу

Беҙҙең мәһәр уға
Малмы ни ул? Беҙгә генә шулай
Донъя малы кеүек күп күренде.

Юламан

Бала, бала!.. Бәхетһеҙ икәнһең...

Таңсулпандың шатлыҡлы йыры ишетелә. Ата менән әсә ғазаплы киселеш аҫтында тынып ҡалалар.

Йыр

Ниндәй матур тауың, урмандарың,
Уралҡайым минең — тыуып үҫкән
ергенәм.
Шатлыҡ менән шунда үтһен ғүмер,
Беҙ бәхетле, Айсыуағым бәғерем,
бер генәм.

Таңсулпан менән Айсыуаҡ инә. Айсыуаҡ, Юламан менән Гөлбаныуҙы күреп, арттараҡ туҡталып ҡала.

Таңсулпан

Атай, әсәй, нимә булды һеҙгә?

Гөлбаныу

Балаҡайым, бәхетһеҙкәй...

Таңсулпан

Атай, ни булды һуң? Әйтегеҙсе!

Юламан

Мин һине һаттым, ҡыҙым.

Таңсулпан

Һаттың?

Юламан

Эйе, ҡыҙым, һаттым.

Таңсулпан

Нисек, кемгә?

Юламан

Күсәрбайға.

Айсыуаҡ ни эшләргә белмәй.

Таңсулпан

Күсәрбайға!.. Атай!..
(Ике ҡуллап күкрәгенә ҡыҫҡан сәскәләре ергә төшә.)

Шаршау

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Туй майҙаны. Сәхнәнең бер яҡ ситендә бисәләр табыны, икенсе яҡ ситендә ирҙәр табыны. Ҡымыҙ эсәләр. Ике табын араһында, арттараҡ, йәштәр, ялан аяҡ малайҙар. Ҡыҙҙар бейей. Бер аҙҙан ҡыңғырау тауышы ишетелә.

Ҡаҙаҡҡол

Кейәү килә, кейәү!

Байрамғол

Кейәү килә!

Күсәрбай, Мортаза, Көҫәпҡол, Бикмырҙа инә.

Күсәрбай

Һаумыһығыҙ, ҡарттар? Һаумыһығыҙ?
Барығыҙ ҙа?

Байрамғол

Һаубыҙ, кейәү, һаубыҙ.
Әйҙә, кейәү.

Мортаза

Ҡотло булһын туй!

Байрамғол

Шулай булһын, ҡоҙа, ҡотло булһын.
Аяғығыҙ еңел булһын!

Күсәрбай

Аминь.

Көҫәпҡол

Был тирәлә үҙ байлығы менән
Ҙур дан тотоп, ил шаулатҡан
Ир намыҫлы егет Күсәрбайҙы
Һәр берегеҙ яҡшы беләһегеҙ.
Бөгөнгө туй — уның йомартлығы.
Бындай ирҙең кейәү булыуына
Ниндәй генә ырыу шатланмаһын!

Сурағол

Дөрөҫ, беҙҙең ырыу бик шатлана.

Мулла
(Күсәрбайға)

Хоҙа һиңә оҙон ғүмер бирһен,
Мәңге шулай байлыҡ, шатлыҡ менән
Ғүмер кисер. Беҙҙән һиңә теләк шул.

Мортаза

Янып торған ир уртаһы егет.
Бындай иргә тиң булырлыҡ зифа
Ҡыҙ үҫтергән Юламандың ғүмере
Оҙон булһын!

Ишмай

(Үҙ тирәһендәге ярлыларға ҡарап)

Мал йәшәртә инде, туған,
Малың ғына булһын, малың булһа,
Алтмыш түгел, етмештә булһаң да,
Ир уртаһы егет булаһың.

Ярлылар араһынан: «Дөрөҫ...» — тигән тауыштар ишетелә. Байҙар араһында асыулы борсолоу.

Сурағол

Нимә тинең?

Ишмай

Мал йәшәртә, тинем.

Күсәрбай

Кем ул?

Көҫәпҡол

Ҡаҙаҡҡолдоң хеҙмәтсеһе.

Каҙаҡҡол

Теленде һин ниңә оҙайтаһың?
Нимә етмәй, нимә кәрәк һиңә?

Сураҕол

Ҡыуып ҡайтар!

Каҙаҡҡол

Ҡайт бар, өйҙә эш бар.

Мулла

Шулай, һөйләндермә, ҡыуып ҡайтар.

Каҙаҡҡол
(таяҡ менән киҙәнеп)

Кемгә әйтәм, бар ҡайт!

Саҕанбай

Туҡта, туҡта,
Ниңә уны ҡыуаһың, ә? Ниңә?
Ул бит кеше! Этме ни ул?
Ниңә киҙәнәһең таяҡ менән?!
(Таяғын өҫкә күтәреп.)
Кемдә юҡ ул таяҡ?!

Староста

Әй, Саҕанбай,
Һин дыулама! Ҡара, бында кемдәр?

Көҫәпҡол

Уның бар белгәне даулашыу бит.
Шуны эҙләп кенә йөрөй бит ул.

Сағанбай

Хаҡлыҡ өсөн һәр саҡ даулашырмын.

Мулла
(старостаға)

Түрә, шаулатмасы шул алйотто.
Ҡатыраҡ бул шуға. Законлап әйт.

Көҫәпҡол
(старостаға)

Һеҙ ҡарағыҙ, ул ҡурҡыныс кеше.
Губернатор бындай кешеләрҙән
Һаҡ булырға ҡуша. Бойороҡ ҡаты.
Иҫегеҙҙән сығармағыҙ уны.
Сағанбайҙың теле артыҡ оҙон,
Ҡыҫҡартырға кәрәк, ҡыҫҡартырға!
Теге Ишмайға ла күҙ-ҡолаҡ бул.

Староста

Дөрөҫ, уларҙы мин күреп торам.
(Ҡуйын дәфтәрен алып яҙып ҡуя.)
Хәҙер туйҙың йәме китмәһен, тим.
Былай бик шашына башлаһалар,
Күрһәтермен әле мин уларға.
Старшинаға, губернаторға ла
Яҙып бирәсәкмен. Былай ҡалмаҫ.
Салауаттың көсөктәре һаман
Өрә, тип яҙырмын. Яҙам, яҙам!

Ҡыҙҙар йыры ишетелә.

Байрамғол

Ҡыҙҙар килә, ҡоҙасалар килә!

Йыр

Яландағы һоро йыландың
Баҫ башына, саҡмаһын, Таңсулпан.
Ҡайғыларға бул түҙемле,
Күҙ йәштәреңә аҡмаһын, Таңсулпан!
Уралтауҙың буйҙарында
Шаулап үҫә йәш имән, Таңсулпан.

Йәш имәндәй шаулап йәшә,
Ҡайғыларға баш эймә, Таңсулпан!

Ҡыҙҙар йырлап килеп инәләр. Ҡыҙҙар араһында Таңсулпан, Гөлсирә, Гәүһәр, Шәрифә, Мәрғүбә, Сәлимә. Таңсулпандың уйында Айсыуаҡ. Ул туйҙағы халыҡты күрмәй ҙә. Алыҫҡа ҡарап Айсыуаҡты эҙләй.

Байрамғол

Әйҙәгеҙ, балалар, аяғығыҙ
Еңел булһын!

Мулла

Амин. Шулай булһын.

Староста

Йә, Байрамғол ағай, бүтән көтөр
Кешебеҙ юҡ. Ҡыҙ ҙа килде хәҙер.
Уйын-көлкө башлау кәрәк булыр.

Байрамғол

Туйҙың башы күркәм булһын, ҡыҙҙар,
Йәгеҙ, күңел күтәрерлек итеп,
Бер көй йырлап алығыҙсы, йәгеҙ!

Ҡыҙҙар
(Күсәрбайҙан көлөп йырлайҙар)

Уралтауҙың, һай, буйҙары
Йылҡы йәйләр ер икән.
Ҡарт кейәү тигән булалар,
Һоҡланырлыҡ ир икән.
Һай, Уралдың буйҙары,
Һимерә икән ҡуйҙары;
Икеһе лә пар килгәндәр,
Ҡотло булһын туйҙары.
Ҡоштоң ҡунып һайрар ере —
Һыу буйында тирәктер;
Ҡыҙ йөрәген ярһытырлыҡ
Бындай ирҙәр һирәктер.
Һай, Уралдың буйҙары,
Һимерә икән ҡуйҙары.

Икеһе лә пар килгәндәр
Ҡотло булһын туйҙары.

Кыҙҙарҙың Күсәрбайҙан көлөп йырлағанын халыҡ аңлай. Ләкин Күсәрбай тирәһендә ялағайланыусылар уны уға һиҙдермәҫкә тырышалар. Кыҙҙарҙың ысын күңелдән йырламағанлыҡтарын Күсәрбай үҙе лә аңлай, ләкин ул да һиҙдермәҫкә тырыша.

Сурағол

Бына нисек йырлай беҙҙең ҡыҙҙар!

Мортаза

Күсәрбайҙай иргә тиң булырҙай
Ҡыҙ үҫтергән был ырыуға рәхмәт!

Ҡаҙаҡҡол

Ҡоҙа нимә ти, Юламан ағай,
Ишеттеңме?.. Ҡыҙың арҡаһында
Бөтә ырыуыбыҙ рәхмәт ала.

Юламан

Яман һүҙҙәре булмаһа, ярай,
Яҡшы һүҙгә урын күп йөрәктә.

Байҙамғол

Инде, ҡыҙҙар, бейеп тә алһағыҙ,
Күңел була! Йәгеҙ, ҡыҙҙар, йәгеҙ!

Бикмырҙа

Элек еңгәбеҙҙе бейетәйек.

Ҡаҙаҡҡол

Дөрөҫ, дөрөҫ, еңгәбеҙ бейеһен.

Байҙамғол

Кем... Таңсулпан ҡыҙым, башлап ебәр.
Йә, тартынма... Йәгеҙ, ҡурайсылар!

Ҡурай тарталар, Таңсулпан теләр-теләмәҫ кенә бейей. Күсәрбай, Таңсулпанға һоҡланып, үҙе лә һиҙмәҫтән ултырған урынынан ҡуҙғала. Таңсулпан, уны күреп, бейеүенән яңылыша; ҡурҡып, тағы бер уға ҡарай ҙа ҡыҙҙар араһына барып инә.

Сураҕол
(Күсәрбайҙы йыуатып)

Тартына ул, — бик оялсан бала.

Байрамҕол

Әллә кейәүҙе лә бер бейетеп
Алабыҙмы?

Ишмай

Бейетергә кәрәк,
Ир уртаһы егет тиҙәр ҙәһә,
Бейеһен!

Ҡаҙаҡҡол

Һин ниңә ҡыҫылаһың?

Ишмай

Һуң, бейетмәгеҙ тип әйтәйемме?

Ҡаҙаҡҡол

Бер нәмә лә әйтмә, һин ҡыҫылма!
Тик тор! Һинең бында ни эшең бар?!

Староста

Ысын, әйҙә, кейәү, бер бейеп ал.
Йәгеҙ, ҡурайсылар!

Байрамҕол

Әйҙә, кейәү!

Күсәрбай бейергә төшә.

Мортаза

Бейе, кейәү, бейе!.. Әнә шулай...

Сураҕол

Шулай, әнә шулай, шулай кәрәк.

Мортаза

Ниндәй йөрәк!

Көҫәпҡол

Бындай ир бик һирәк.

Мортаза

Тик бейеүе тора бер ҡыҙлыҡ. Һай,
Һай, һай!.. Әнә шулай еткереп,
Үҙ көйөнә килтереп, һай... һай... һай...

Күсәрбай, ҡатыраҡ баҫып, билен ауыртыра. Мортаза менән Сурағол уны ике яҡтан ҡултыҡлап, билен ыуып, урынына ултырталар.

Сурағол

Бик дыуамалланып китәһең, кейәү.

Байрамғол

Йәгеҙ, йәштәр, ҡайҙа һеҙҙең дәртегеҙ?

Ишмай бейергә төшә. Уның ҡоторонҡо дәрт менән бейеүен Күсәрбай яҡлылар яратмайҙар.

Сағанбай

Шулай, ут сәсрәһен табаныңдан.
Һелкет ерҙе! Шулай, ана шулай...

Староста

Етте! Туҡта!

Көҫәпҡол
(Ишмайҙың еңенән тотоп)

Туҡта, тиҙәр һиңә!

Сағанбай

Ниңә туҡтатаһың, ә? Ниңә?

Көҫәпҡол

Бейеү етте! Көрәшергә кәрәк.

Ишмай

Һуң, туй булғас — туй, бейергә кәрәк.

Көҫәпҡол

Үҙ туйында бейерһең. Бар, бар, кит!

Байрамғол

Хәҙер көрәш башлайбыҙ, балалар;
Бәйге бик бай, кейәү, йәлләмәгән.
Эреһе лә, вағы ла бар, бик күп.
Еңеп сыҡҡан бәһлеүәнгә — бер ат,
Аттың иң яҡшыһы. Йүгерек ат.
Ана ҡарағыҙ, ул бәйле тора.
Батыр егет өсөн йылғыр ҡанат,
Ул ат түгел, Урал шоңҡары ул.

Бикмырҙа

Ысын егет икәнһең, Күсәрбай,
Эскенәйең тулы тик дәрт икән.

Сурағол

Былай ололағас, рәхмәт инде.

Мортаза

Юҡ кешегә ҡыҙ димләйемме мин?
Улар ырыуҙары менән шулай.

Мулла

Бәрәкалла, рәхмәт яуһын, кейәү,
Шулай байлыҡ менән ғүмер кисер.
Күңеле изге булған бәндәләрҙән
Хоҙа рәхмәтен сикләмәй, кейәү,
Хоҙа һиңә һәр саҡ байлыҡ бирер.

Бикмырҙа
(Күсәрбайға)

Ырыу йөҙөн яҡтыртаһың, рәхмәт,
Шулай намыҫлы булырға кәрәк.

Староста

Алтын кеше икәнһең, Күсәрбай.

Бикмырҙа

Күкрәк, бәкәлдәрен ҡара аттың!

Ҡаҙаҡҡол

Яҡшы... Бик оҙамға саба был ат.

Көҫәпҡол

Ниңә шулай бик яҡшы ат бирҙең?

Күсәрбай

Ул ат барыбер бит һиңә була.
Бында һине йығырлыҡ кеше юҡ.

Көҫәпҡол

Дөрөҫ әйтәһең, Күсәрбай ағай,
Бында минең менән көрәшерҙәй
Кеше юҡ.

Күсәрбай

Әйтәм дәһә: ат һиңә.

Байрамғол

Йәгеҙ, көрәшселәр!

Бер ярлы егет
(Ишмайға)

Ҡайҙа һуң Айсыуаҡ?

Ишмай

Хәҙер барам,
Тип ҡалғайны. Оҙаҡланы. Бар һин
Йүгер әле. Тиҙ бул, тиген. Осоп килһен.

Егет йүгерә. Ике кеше көрәшкә сыға. Байрамғол йығыусыға бәйге бирә.

Бикмырҙа
(икенсе берәүгә билбау биреп)

Тот билбауҙы, ҡарап тотон, ныҡ тот.

Көрәшәләр.

Шулай, тубыҡҡа ал, тубыҡҡа ал!

Көрәштә бер ярлы егет еңеп сыға.

Байрамғол

Йәгеҙ, көрәшселәр, тағы кем бар?
Булмай икән, атты бирәм хәҙер.

Мортаза

Ә Көҫәпҡол?..

Байрамғол

Эйе шул, Көҫәпҡол
Бар ҙа баһа, йә, Көҫәпҡол ҡустым.

Мортаза
(үҙенең билбауын сисеп)

Бына бик ныҡ билбау. Шуның менән...
Көҫәпҡолға кемдең биле түҙһен?
Ат уныҡы инде, нәмә тағы...

Ишмай
(борсолоп)

Ҡайҙа йөрөй икән был Айсыуаҡ?..

Көҫәпҡол
(эре генә)

Ошо егет менән көрәшергәме?
Ярай, дәрте булғас, көрәшәйек.

Тотоналар. Көҫәпҡол үҙенең көсөнә маһайып, бик эре тотона һәм егетте бик еңел йыға. Бай кешеләр, шатланып, шау итеп ҡалалар.

Мортаза

Бына бит, әйттем бит, Көҫәпҡолға
Кемдең биле түҙһең! Ул бит...

Бикмырҙа

Көҫәпҡолға бында кем сыҙаһын.

Мулла

Хоҙа көстө бирһә, бирә инде.

Байрамғол

Бармы тағы бәһлеүәндәр? Йәгеҙ?

Мортаза

Көҫәпҡолға кем тотонһон, юҡты...
Ат уныҡы инде, нәмә тағы...

Байрамғол аттың йүгәнен Көҫәпҡолға бирергә торғанда, йүгәндең бер осонан Көҫәпҡол тоҡған саҡта теге егет менән Айсыуаҡ килеп инә.

Ишмай

Бабай, сабыр ит, Айсыуаҡ килде.

Байрамғол

Ярай, ярай, әйҙә көрәшһендәр.

Бикмырҙа

Көрәш бөтһөн!

Мортаза

Көрәш бөттө!
Ат Көҫәпҡолдоҡо!

Байрамғол

Юҡ, көрәшһен.
Майҙан бит ул, улай ярамай ул.

Ишмай
(үҙенең билбауын Айсыуаҡҡа сисеп бирә)

Бына тот билбауҙы. Ҡарап көрәш.

Айсыуаҡ

Көрәшәйемме һуң?

Ишмай

Бына тиле!

Сағанбай
(Айсыуаҡҡа күп мәғәнәле итеп)

Аңла, һин тейешһең уның менән
Көрәшергә. Төшөндөңмө? Көрәш!

Мортаза
(Көҫәпҡолға)

Ярай, көрәш, һине кеше түгел,
Дейеү пәрейе лә йыға алмаҫ.

Староста
Уның биле ер күрмәне инде.

Көҫәпҡол менән Айсыуаҡ икеһе лә көрәшкә әҙерләнәләр.

Ишмай
(Айсыуаҡҡа)

Аяҡтары ергә лә теймәһен,
Өйөр, сыбыртҡылай шыйылдаһын.

Айсыуаҡ менән Көҫәпҡол көрәшә башлайҙар.

Бикмырҙа
(Мортазаға)

Көҫәпҡолға кеше биле түҙәме һуң, —
Ҡара, күрәһеңме, нисек йөрөй!

Мортаза

Тотоноуын ҡара, өҙә тота бит.

И ш м а й
(Айсыуаҡҡа)

Әйҙә инде ҡара, тот та елгәр.

Алышалар. Ҡыҙыу алышҡан саҡта, Көҫәпҡол аяҡ салырға маташа.

И ш м а й

Әй, әй, аяҡ салма! Салма аяҡ!
(Көҫәпҡолдоң салған аяғын тартып ала.)
Һе... Хәлендән килмәгәс, көрәшмә!
Ҡара, нисек әләктереп алған!

К ө ҫ ә п ҡ о л

Һиң ҡыҫылма бында, кит бар, кит тим!

Айсыуаҡ Көҫәпҡолдо йыға.

Б и к м ы р ҙ а

Дөрөҫ йыҡманы!

М о р т а з а

Юҡ, дөрөҫ түгел!
Дөрөҫ йыҡманы, юҡ!..

И ш м а й

Дөрөҫ йыҡты,
Дөрөҫ! Һеҙгә тағы нәмә кәрәк!

С у р а ғ о л

Ҡабат көрәшһендәр!

И ш м а й

Юҡ, кәрәкмәй.
Көрәшмә, Айсыуаҡ, бәйге һинеке.

А й с ы у а ҡ

Кил, Көҫәпҡол, әгәр билең һынһа,
Миңә үпкәләмә!
(Ярһыған арыҫлан кеүек, Көҫәпҡолға ташлана.)

Көрәшәләр.

Староста
(Айсыуаҡҡа асыу менән)

Ипләп көрәш!
Ниңә асыу менән көрәшәһең?
Ниңә йыртҡыс кеүек өҙгөләйһең?!

Байрамғол

Ғәҙел көрәшегеҙ, ат өсөн бит...

Көҫәпҡол
(Айсыуаҡ, ныҡ ҡыҫып, күтәреп алғас)

Тукта, тукта, ебәр билде, ебәр!

Бикмырҙа менән Мортаза Көҫәпҡолға килеп аҫылыналар. Айсыуаҡ Көҫәпҡолдоң билен ҡотҡара. Көҫәпкол билбауын асыу менән ташлай.

Мин хәйерсе менән көрәшмәйем!

Байрамғол
(аттың йүгәнен Айсыуаҡҡа биреп)

Мә тот, улым, ир-егеткә ҡанат,
Урал шоңҡарындай, ос ҡыйылып.
(Айсыуаҡтың елкәһенә яңы өс таҫтамал һала.)
Бына һиңә яулыҡ, кәләш алғас,
Уға бүләк итеп бирерһең.

Гөлбаныу
(Айсыуаҡҡа)

Хоҙа һиңә оҙон ғүмер бирһен,
Ҡанатыңды ҡотлап, тәңкә бирәм,
Алтын, көмөш булһын эйәрең.
(Ҡашмауынан тәңкә бороп алып бирә.)

Айсыуаҡ

Рәхмәт.

Мәргүбә
(Айсыуаҡҡа ҡарап)

Ҡарсығаҡай тигән, һай, йылғыр ҡош,
Ҡыйғыр ҡоштоң аҫыл, зирәге.

Бөҙҙең егет үткер ҡарсығанан,
Арыҫландан батыр йөрәге.
(Яғаһынан тәңкә бороп алып бирә.)

Айсыуаҡ

Рәхмәт, еңгә.

Ишмай

Мә, Айсыуаҡ, минең бүтән мал юҡ.

Өҫтөндәге сәкмәнен һалып, Айсыуаҡҡа һуҙғанда, Ҡаҙаҡҡол тотоп ала.

Ҡаҙаҡҡол

Туҡта, уны һиңә кем кейҙерҙе?
Артыҡ булһа, бир үҙемә!
(Сәкмәнде тартып ала.)

Юламан
(билбауын сисеп)

Ир азамат Айсыуаҡ, минән дә
Ал ярлы бер бүләк. Быу биленде,
Ир бул, һәр саҡ көслө, намыҫлы бул.

Сурағол

Был ни эшең һинең?

Юламан
(ҡулын һелтәп)

Инде, ағай...

Морташа
(ҡаш өҫтөнә ҡулын ҡуйып, алыҫҡа ҡарап)

Аттар килә, аттар, әйҙәгеҙ, әй!

Халыҡ аттарҙы ҡаршыларға йүгерә. Айсыуаҡ ҡала.

Айсыуаҡ

Ишмай ағай, туҡта әле!

И ш м а й

Ни бар?

А й с ы у а ҡ

Таңсулпанды күреп һөйләшергә
Ниндәй юл бар? Әйтсе, Ишмай ағай.

И ш м а й

Әйтә алмайым, хәҙер ҡыйын инде,
Анау Гөлсирәгә әйтеп ҡара, —
Ул бик зирәк, бәлки, табыр юлын...
Әйҙә киттек, сапҡан аттар килә.
Аҙаҡ уйлашырбыҙ берәй нәмә.

А й с ы у а ҡ

Һин бар, мин бармайым, Ишмай ағай!

И ш м а й китә.

Ни эшләргә һуң хәҙер? Бармы сара?..
Уҫал яҙмыш хөкөмөнөң һуңғы
Рәхимһеҙ ҡарары шулдыр инде,
Таңсулпан. Һин Күсәрбай ҡоло, ә
Мин бөгөндән ут эсендә ҡалам...
Йөрәктәге ут-ялҡындар һүнерме?
Әллә йөрәк шулай эрней-эрней
Ялҡындарға бер саҡ күнегерме?
О, юҡ, ялҡындарға йөрәк күнекмәҫ
Таңсулпанһыҙ үткән һәр бер минут
Йөрәгемдә мең тамуҡтың уты
Булып яныр. Ул ялҡынды айҙар,
Йылдар ғына баҫа алмаҫ. Юҡ, юҡ,
Уны хатта һалҡын ҡәберемдең
Еүеш тупрағы ла баҫа алмаҫ.
Мөхәббәттең һүнмәҫ уты булып,
Янып торор ҡәберем өҫтөндә.
Туҡта, миндә көс тә, намыҫ та бар.
Һөйгән йәрен яттар алған саҡта,
Намыҫы бар егет нисек түҙһен?!
Юҡ, юҡ, башым Себер китһә китер
Тирмәләрен ватып, айҡап кереп,
Таңсулпанды алып ҡасам бөгөн.
(Аты бәйле торған яҡҡа ҡарап.)

Ерәнсәкәй, бәгән һинең менән
Ҡара төндә ят һуҡмаҡтар менән
Тауҙар аша алыҫ юлға сығабыҙ.
Мин юлбаҫар түгел, Ерәнсәкәй,
Ҡурҡма минән. Мин бер ғашиҡ егет.
Йәрәгемдә минең асы нәфрәт
Һәм һүнмәҫлек утлы мәхәббәт.
Бына шулар мине ярһыталар.

Ишмай Таңсулпанды килтерә лә кире китә.

Таңсулпан

Һуңғы тапҡыр һаубуллашыр өсөн,
Килдем һиңә йолаларҙан уҙып;
Аҙаҡ һағынһам да, һарғайһам да,
Күрә алмам инде үҙеңде.
Бары ла бөттө, бары ла һүнде,
Бары ла осто көл булып,
Мин юғалттым йондоҙомдо,
Юл ҡараңғы, көн болот.
Эйе, бары ла бөттө, һүнде өмөт,
Һүнде йондоҙ, һүнде бар
Ғүмерем минең.

Айсыуаҡ

Юҡ, Таңсулпан, беҙҙең өмөт яна,
Яҡты йондоҙ кеүек, балҡый әле.
Һин ҡайғырма, беҙҙең өмөт һүнмәҫ,
Был упҡындан ҡотолорға юл бар.

Таңсулпан

Нисек ул, Айсыуаҡ?

Айсыуаҡ

Шоңҡар кеүек осҡор атыбыҙ бар.
Беҙ ҡанатлы хәҙер, Таңсулпан.
Китәйек беҙ хәҙер был тамуҡтан.
Аҙаҡ, ғауғалы шау-шыу баҫылғас,
Тағы бында кире ҡайтырбыҙ.

Таңсулпан

Минең атайым — бик ғәрсел кеше,
Кеше күҙенә лә күренә алмаҫ,

Ҡайғыһынан алйып бөтөр меҫкен.
Күсәрбайҙы, бик кенәсел, тиҙәр,
Атайыма һис тә көн күрһәтмәҫ.
Атайымдың йәшен түктергәнсе,
Үҙ күҙ йәшем түгелһен.
Беҙ бәхетһеҙ инде, беҙ илайыҡ.

Айсыуаҡ

Атайыңа ауыр һүҙ әйтмәҫтәр.
Әрләһәләр, тик беҙҙе әрләрҙәр.
Ҡара ҡоҙғон менән һандуғаҫҡай
Бер ояла нисек көн итер?

Таңсулпан өндәшмәй.

Әллә мөхәббәтте Күсәрбайҙың
Малына-байлығына һаттыңмы?
(Үпкәләп ситкә борола.)

Таңсулпан

Алтын-көмөштәргә манылһа ла,
Әллә ниндәй шөһрәтле булһа ла,
Һис бер кемгә һине алыштырмам.
Ышан миңә, минең мөхәббәтем
Бөтә байлыҡтарҙан, шөһрәттәрҙән
Юғары һәм уға тиң нәмә юҡ.
Уны һис кем һатып ала алмаҫ.

Айсыуаҡ

Был һүҙҙәрең дөрөҫ булһа, киттек.
Ҡасайыҡ, Таңсулпан.

Көҫәпҡол күренә. «Ҡасабыҙ» тигән һүҙҙе ишетеү менән кире йүгерә.

Таңсулпан

Ҡасабыҙ, Айсыуаҡ.

Айсыуаҡ

Эх Таңсулпан, Таңсулпанҡай бәгерем,
Хәҙер мине шатлыҡ ярһыта.
Әйҙә, китәйек беҙ, ат та әҙер.

Таңсулпан

Нисек, хәҙер үкме?

Айсыуаҡ

Эйе, хәҙер.

Таңсулпан

Юҡ, Айсыуаҡ, хәҙер мөмкин түгел.
Халыҡ араһынан нисек китәһең?

Айсыуаҡ

Ҡасан, ни ваҡытта китербеҙ һуң?

Таңсулпан

Иң яҡшыһы — кис, ҡушыу алдынан.
Ҡыҙ ҡушҡанда, һәр саҡ бола була.

Айсыуаҡ

Эх Таңсулпан, беҙ бәхетле булырбыҙ.
Бына һиңә кескәй генә бүләк.
(Яулыҡ бирә.)
Мәңге бергә, ҡәбергәсә бергә.

Таңсулпан

Үлгәндә лә бергә үлһәк ине.

Айсыуаҡ Таңсулпанды ҡосаҡлап үбә. Тап ошо ваҡытта Күсәрбай, Мортаза, Көҫәпҡол, Сурағол, Бикмырҙа, Ҡазаҡҡол һәм башҡалар килеп инәләр. Туйға килгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа йыйыла. Сурағол менән Сәлимә Таңсулпанға ташланалар. Сурағол ҡағы асыу менән Таңсулпанды Айсыуаҡ ҡосағынан тартып ала.

Сурағол

Һай, оятһыҙ, битһеҙ!

Күсәрбай

Был ни эш? Әй, ҡарттар! Был ни эш?!
Ниңә минең йөҙҙән көлә улар?!
Мортаза, бар, староста килһен, йүгер!

Мортаза йүгерә.

Бикмырҙа

Күплəп мал алырға, һыйланырға
Белəһегеҙ. Ҡыҙығыҙҙы бына
Күрмəйһегеҙ. Хурлыҡ! Оят һеҙгə!

Сурағол

Мəлғүн, оятһыҙҙар, ырыу йөҙəн
Ҡара ер иттегеҙ. Ниндəй оят!

Бикмырҙа

Был мəсхəрə, был ырыуға хурлыҡ!

Күсəрбай

Был кем улы?

Көçəпҡол

Теге Ҡолбай улы.

Күсəрбай

Ҡолбай улы?.. Шулаймы ни əле?..
Мин төрмəлə серетермен һине!

Айсыуаҡ

Ысын мөхəббəттең ялҡындарын
Еүеш төрмəлəрҙең һалҡыны
Баҫа алмаҫ, һаман көсəйер ул,
Хəҙер айырһағыҙ ҙа беҙҙе,
Йөрəктəрҙе беҙҙең һис ваҡытта,
Һис кем айыра алмаҫ. Беҙҙең
Йөрəктəребеҙ ҡушылып үҫкəн.

Күсəрбай

Əле, шундай һүҙҙəр менəн мине
Фəрləндермəк булаһыңмы, йолҡош!..
Староста килһен, тим бит! Йүгер!

Көçəпҡол йүгереп сығып китə.

Айсыуаҡ

Мөхәббәтте байлыҡ, закон менән
Табып булмай. Мөхәббәт ул
Һатылмай ҙа, баш та эймәй.
Таңсулпанҡай — минеке ул.
Эйе, ул — минеке, мин — уныҡы!..
(Таңсулпанға ташлана.)

Күсәрбай

Хәҙрәт!..

Муллла

Мәлғүн!.. Кит оятһыҙ!.. Кит, тим!..

Айсыуаҡты Таңсулпанға яҡын ебәрмәйҙәр.

Хәҙер йөҙҙәренә ҡара яғып,
Был икәүҙе бөтә урам буйлап,
Мәсхәрәләп йөрөтөргә кәрәк.

Күсәрбай

Хәҙрәт, Таңсулпан бит минең бисә.
Улай итмәйек беҙ. Бына быны,
Был аҙғынды, язаларға кәрәк.
Таңсулпанды үҙем язалармын.

Йүгерә-атлай аҡһаҡлап Сағанбай килә.

Сағанбай
(Айсыуаҡҡа белдерергә теләп)

Әй, староста килә! Староста!

Күсәрбай

Киләме? Һай рәхмәт уға.

Сағанбай Айсыуаҡҡа ҡасырға ымлай. Ашығып Ишмай килә.

Айсыуаҡ

Илама, Таңсулпан, һин — минеке,
Ҡотҡарырмын был йыртҡыс ҡулынан.

Староста, Көҫәпҡол, Мортаза күренә. Айсыуаҡ ҡаса.

И ш м а й
(старостаның юлын ҡаплап, уны һуңлатырға тырыша)
Ҡасты теге, хәҙер генә ҡасты.
Валлаһи, тим, ҡасты. Ышан миңә.

К ү с ә р б а й

Ниңә туҡтатаһың, йолҡош!

И ш м а й

Һуң, Айсыуаҡ ҡасты лаһа, шуны әйтәм.

К ү с ә р б а й

Тотоғоҙ, әй, тотоғоҙ ҡасҡынды!

Староста, Көҫәпҡол һәм Мортазалар Айсыуаҡ киткән яҡҡа йүгерәләр. Аттар сабышын ҡарарға киткән ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, балалар йүгерешеп килеп инәләр.

С т а р о с т а

Туй байрамы бөттө, таралығыҙ!

К ү с ә р б а й

Хәҙер барығыҙ ҙа йүгерегеҙ!
Тотоғоҙ шул уҫал ҡасҡынды!

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Ҡыҙ ҡушыр өсөн әҙерләнгән тирмә. Уның алдында ҡоҙағыйҙар. Улар таҡмаҡ әйтеп бейейҙәр, ҡымыҙ эсеп, бер аҙ ҡыҙа төшкәндәр.

Томбойоҡло күл буйында
Үҫә икән бейек тал.
Ғүмеркәйең үтеп бара,
Әйҙә, еңгә, бейеп ҡал.
Бейе, әйҙә, бейе, әйҙә,
Аяҡтарың талмаһын.
Дәртең булғас, уйна ла көл,
Үкенескә ҡалмаһын.

Ҡоҙағыйҙар янына йәштәр киләләр. Ҡурай уйнайҙар. Ҡурайға ҡушылып таҡмаҡ әйтәләр. Ҡоҙағыйҙар бейей.

Ҡымыҙ эскән ҡоҙағыйҙың
Башы әйләнә икән.
Ике туҫтаҡ ҡымыҙ эсһә,
Теле бәйләнә икән.
Ҡымыҙ эскән ҡоҙағыйҙың
Күңелдәре елкенә.
Тыпырлатып баҫҡан саҡта,
Урал тауы һелкенә.
Ҡоҙағыйҙың ҡашмауында
Талир тәңкә бармы әллә?
Ниңә иркен бейемәйһең,
Урал буйы тармы әллә?

Көҫәпҡол, мулла, староста һәм ике пүнәтәй инә.

Көҫәпҡол

Ҡоҙағыйҙар, һеҙҙе унда ашҡа
Көтәләр. Барығыҙ.

Бер ҡоҙағый

Хәҙер, ҡоҙа.

Ҡоҙағыйҙар, йәштәр китәләр.

Көҫәпҡол

Әйтегеҙсе, түрә, пүнәтәйҙәр,
Ни тип яуап бирерһегеҙ Күсәрбайға?
Күсәрбай бит ул, Күсәрбай, бүтән түгел.
Һеҙ үҙегеҙ яҡшы белəһегеҙ,
Ул бит Ҡолой Балтачевтың уң ҡанаты.
Әгәр һеҙҙең хаҡта әйтһә уға,
Башығыҙҙан һыйпармы ни Ҡолой?

Мулла

Һеҙ, түрәләр, беҙҙең шәриғәтте
Оноторға тейеш түгелһегеҙ.
Быны иҫкәртеү артыҡтыр, бәлки?
Вә ләкин был бөгөнгө әхүәлгә
Бинаән әйтергә жөрьәт итәм:
Дин, шәриғәт, йола буйынса ла
Ҡатын-ҡыҙҙың сит кешеләр менән

Һөйләшеүе беҙҙә ныҡ тыйыла.
Бөгөнгө хәл, һеҙгә мәғлүмдер ки,
Улай ғына түгел. Ҙур ваҡиға.
Бер ят әҙәм никахлы ҡыҙ менән
Ҡасыу тураһында кәңәш иткән.
Был ҙур гөнаһ булыу менән бергә,
Бик ҙур енәйәт тә. Кейәү уға
Аҙ мал түккәнме ни? Алып ҡаса,
Юҡҡа сығыр ине ләһә ул мал.
Быға тиклем ул енәйәтсене
Тапмау — яҡшы түгел, әфәнделәр.
Наҙан халыҡ араһында булған
Бындай баш-баштаҡлыҡ тураһында
Генерал-губернатор хәҙрәттәренең
Махсус ҡаты бойороғо бар.
Шуны онотмағыҙ, әфәнделәр!

Күсәрбай китә.

Күсәрбай

Таптығыҙмы Айсыуаҡты? Ҡайҙа?

Беренсе пүнәтәй

Бөтә урмандарҙы, һыу буйҙарын
Тентеп, эҙләп сыҡтыҡ, таба алманыҡ.

Икенсе пүнәтәй

Эйе, дөрөҫ, күп ерҙе эҙләнек.

Күсәрбай

Эх, әрәм тамаҡтар!..

Староста

Һин, Күсәрбай, юҡҡа борсолаһың.
Һин борсолма юҡҡа. Әгәр бөгөн
Булмай икән, иртәгә табылыр.
Ҡайҙа китер тиһең, ҡулға төшмәй?

Күсәрбай

Мине һаман аңламайҙар. Миңә
Бөгөн кәрәк. Бөгөн тотолмаһа,
Тынғы бирмәйәсәк ул миңә.

Староста

Ярай, тырышырбыҙ. Әйҙә, киттек!

Ике пүнәтәй, староста китә.

Көҫәпҡол

Һин, Күсәрбай ағай, һис ҡайғырма,
Бөгөн кискә тирмә тирәһенә
Ҡарауылдар ҡуям. Бына һиңә
Тирмә. Быны һинең өсөн генә
Бөгөн үҙем килеп ҡороп ҡуйҙым.
Һин тыныс бул, һис кем яҡын килмәҫ.

Күсәрбай

Тегеләргә ышаныуы ҡыйын,
Улар әллә тота, әллә юҡ.
Шулай итә күр, Көҫәпҡол туған,
Ҡарауыл ҡуй. Ҡарауылға яҡшы,
Ышаныслы кешеләрҙе һайла.

Көҫәпҡол

Мин үҙем дә йоҡламаҫҡа булдым,
Ныҡ һаҡларға кәрәк был тирмәне.

Мулла

Дөрөҫ. Әлхасил, һаҡ булыу кәрәк.

Таңсулпанды алып килеүсе ҡыҙҙарҙың йыр тауышы ишетелә.

Йыр

Аҡиҙелкәй, ай, тәрән һыу,
Буйҙарында яманһыу, Таңсулпан.
Яңғыҙ йөрөһәң бик яманһыу,
Бойоҡтора ағын һыу, Таңсулпан.

Көҫәпҡол

Дөрөҫ, хәҙрәт, бик һаҡ булыу кәрәк.
Ҡыҙҙар килә, бынан китәйек беҙ.

Күсәрбай

Доға ҡыл, хәҙрәт, хәйер итеп
Бер башмаҡ бирермен.

Мулла

Башмаҡ?

Күсәрбай

Эйе.
Бер ҡышлаған башмаҡ бирермен.

Мулла

Бәрәкалла, бына был бик ярай.
Ярай, кейәү, ҙур мөхәббәт менән
Шатланышып, ғүмер кисерегеҙ.
Һин, Көҫәпҡол, ҡара, тирә-яҡҡа
Төндә күҙ-ҡолаҡ бул. Йоҡламағыҙ.

Көҫәпҡол

Үҙем йоҡламайым бөгөн.

Мулла

Ярай,
Ярай, шулай кәрәк, йоҡламағыҙ.

Күсәрбай, Көҫәпҡол һәм мулла китәләр. Уларҙан һуң Таңсулпан, Мәрғүбә, Гөлсирә, Шәрифә, Гәүһәр һәм бүтән ҡыҙҙар, әкрен генә атлап, йырлап киләләр. Таңсулпан, Гөлсирә, Мәрғүбә тирмә ишеге алдында ҡалалар. Бүтәндәре, тирмәгә инеп, сымылдыҡ эсен ҡарайҙар. Тирмәне йыйыштырғылайҙар.
Таңсулпан менән Гөлбикә Ҡыраубикәгә һарылалар.

Таңсулпан

Күгәреп тә ятҡан күк Уралдың
Аръяғында ниҙәр бар икән?
Ҡыҙ баланың йәше түгелмәгән
Был донъяла урын бармы икән?
Ҡара әле, еңгә, анау ҡошто,
Тауҙар өҫтөндәге аҡ болоттоң
Нәк ҡырында ғына талпына.
Ҡарағошмо?.. Ниндәй ҡош икән был?

Мәрғүбә

Талпыныуы ҡарағошҡа оҡшай,
Ҡарағоштор...

Гөлсирә

Эйе, ҡарағош был.

Таңсулпан

Был ҡарағош ниндәй бәхетле!
Күңеле тартҡан тауҙың күкрәгендә
Хәлдәр ала, ҡанат ҡағына.
Тау еләтһә, тәкәббер талпынып,
Һауаларға оса тағы ла.
Үҙе һайлап, бейек тау башында
Оя яһай, бала сығара.
Мин дә шундай азат ҡош булһамсы!..
Ерҙәгеләй ҡурҡыныс йолалар,
Дәһшәтле закондар күктә юҡтыр.
Ҡанаттарым булһа, алыҫтағы
Төпһөҙ бушлыҡтарға осор инем.
Был хәсрәтле ергә төшмәҫ инем,
Төшмәҫ инем, еңгә, осор инем.

Мәрғүбә

Болоттарға күмелеп тау өҫтөндә
Талпынып та оса сал бәркөт.
Алғыһыма улай, йөрәкһемә,
Таңсулпанҡай гөлкәй, сабыр ит.

Гөлсирә

Әйҙә инәйек, Таңсулпан. Ваҡыт.

Таңсулпан

Һары күбәләк күргәйнем
Яҙ башында сағылда.
Һарғайырға булған икән
Сәскә кеүек сағымда.

Таңсулпан, Мәрғүбә, Гөлсирә тирмәгә инәләр.

Гәүһәр

Һин, Таңсулпан, һаман ҡайғыраһың.
Йөҙөң бойоҡ, күңелең ярһыу.
Ниңә инде шулай ҡайғыраһың?
Улай күп уйланһаң, үҙ-үҙеңде,
Көҙгө япраҡ кеүек, һарғайтырһың.

Таңсулпан

Тәҡдир шулай булғас, дуҫҡайҙарым,
Һарғайыуҙан башҡа ни кәтәйем?
Ҡырау алған яҙғы сәскә төҫлө,
Ниңә тыуҙым икән ҡыҙ булып?
Янған йөрәккәйем һүнерме икән,
Ағын һыуҙа аҡһам, боҙ булып?

Шәрифә

Ҡайғырма, Таңсулпан, күп уйланма,
Хоҙа шулай ҡушҡас, ни хәл итәһең.

Гәүһәр

Ҡай берәүҙәр йәшкә барһалар ҙа,
Биҡ үк рәхәт күреп тормайҙар.
Йәш бикәне ҡарттар ҡаҡмай, тиҙәр,
Иркә генә ғүмер итерһең.
Ваҡыт үтер, тороп китерһең.
Байлығы ҙур, тиҙәр, шулай булғас,
Һис бер нигә мохтажлығың булмаҫ.

Шәрифә

Көндәштәрең ҡаҡһа, йыуаш булма,
Уларҙан да уҫал, үткер бул.
Бына Сафар ҡарттың йәш бикәһе
Бар донъяһын үҙ ҡулында тота.

Гөлсирә

Күңеле асылһын Таңсулпандың,
Йәгеҙ, ҡыҙҙар, йырлап алайыҡ.
Һәр саҡ хәсрәткә баш эйеп торһаң
Мәңге төшмәҫ ул беҙҙең елкәнән.

Йыр

Һыуһыҙ шиңгән йәш гөл кеүек,
Бойоҡ булма, дуҫҡайым.
Алһыу йөҙөңдө һарғайтма,
Күпте уйлап, дуҫҡайым.
Таңсулпан, бойоҡма, шат йәшә.
Һалҡын елдәр иҫкәндә лә,
Япраҡ яра тал, тирәк.
Һөйгән йәренә барыусы
Был донъяла бик һирәк.
Таңсулпан, бойоҡма, шат йәшә.

Ҡыҙҙар йырлаған саҡта, ашыға-ашыға Сәлимә инә. Ашығыс хәрәкәттәр менән сымылдыҡ эстәрен, тирмәнең йыйыштырылыуын ҡарай.

Сәлимә

Ярай, ҡыҙҙар, етте, хәҙер кейәү килә.

Гөлсирә

Еңгә, ниңә улай бик тиҙ?

Көҫәпҡол инә.

Көҫәпҡол
(Сәлимәгә)
Ҡыҙ әҙерме?

Сәлимә

Бөтә нәмә әҙер.
Хәҙер кейәүҙе килтерәм.

Мәргүбә

Юҡ, ҡайнаға, өлгермәгән әле.

Көҫәпҡол

Тиҙ булығыҙ.
(Китә.)

Сәлимә

Өлгергән дә баһа.
Тағы нәмә кәрәк? Ҡыҙ ҙа әҙер,
Урын да бар, бөтәһе лә әҙер.

Мәрғүбә

Ниңә һин шул тиклем ашығаһың?

Сәлимә

Нәмә етмәй тағы? Нәмә кәрәк?
Булды, бөтә нәмә әҙер, ваҡыт!

Гөлсирә

Еңгә, улай ҡабаланма инде.
Ҡасмаҫ әле ҡушыу. Тағы бер аҙ
Йырлап, күңел асып алайыҡсы?

Мәрғүбә

Ысын, Таңсулпанға еңел булыр,
Тағы бер аҙ ғына уйнап, көлөп,
Йырлап, күңел асып алһындар.

Сәлимә

Етте. Уйын-көлкө күп булмай ул.
Кейәү кәтә. Көттермәйек. Ярай,
Мин кейәүҙе килтерергә киттем.

Мәрғүбә

Туҡта әле, килендәш, ашыҡма!

Сәлимә китә.

Ҡара йылан кеүек шул Сәлимә,
Һәр саҡ уның һүҙе генә һүҙ...
Ярай инде, ҡыҙҙар, һеҙ барығыҙ.

Шәрифә

Хуш, Таңсулпан, һау бул, әхирәткәй!

Гәүһәр

Хуш, Таңсулпан, бәхетле бул!

Таңсулпан

Һау булығыҙ, әхирәттәр.

Ҡыҙҙар китә. Таңсулпан, Мәрғүбә, Гөлсирә ҡала.

Гәүһәр
(ишектән сығыр алдынан)

Йә, Гөлсирә, әйҙә киттек.

Гөлсирә

Хәҙер.

Таңсулпан

Ауыр тәҡдир минуттары етте.
Еңгә, Гөлсирәкәй, мин ни эшләйем?

Гөлсирә

Ишмай ағай ниңә килмәй икән?

Таңсулпан

Икеһен дә тотоп япҡандарҙыр.
Япмаһалар, инде быға тиклем
Икеһенең бере килер ине.

Мәргүбә

Һин, Гөлсирә, бар әле тегендә,
Ишмай ағай шунда түгелме икән?

Гөлсирә китә.

Таңсулпан

Инде булмаҫ, еңгә, өмөт өҙҙөм.
Яман яҙмыш көсө еңде мине.
Мин хәҙер ҡарт йыртҡыс тырнағындағы
Йәрәхәтле көсһеҙ йәнлек төҫлө.

Мәргүбә

Тәҡдиркәйең, гөлкәй, шул күрәһең,
Хаҡ яҙмыштан булмай шул ҡотолоп.
Кеше тыумаҫ борон тәҡдиренә
Бөтә күрәсәге яҙыла, ти.

Таңсулпан

Бәхетһеҙҙе хоҙа был донъяға
Ниңә ярата икән?..

Мәргүбә

Сеү, Таңсулпан,
Тәкдирҙе йәш менән йыуып булмай,
Илама, һылыуым, түҙемле бул.
Күнегергә тырыш был донъяға.
Күнеп китһәң, бер ни булмаҫ. Көймә.

Таңсулпан

Күсәрбайға нисек күнегәйем?
Йөрәгемдә Айсыуаҡтан башҡа
Һис бер кемгә урын юҡ һәм булмаҫ.
Ҡара сәскенәйем аҡарһа ла,
Күңелем әҙләр уны, юҡһынып.
Һөйгән йәре тороп ҡалған саҡта,
Ярһымаған йөрәк бармы икән?
Йөрәктәрҙе өҙөп, ай, ярһытҡан
Йәштән һөйгән тәүге йәр икән.
Ҡунып һайрар өсөн, талдар һайлай,
Һандуғасҡай наҙлы ҡош икән.
Ҡабул була теләк, тиеүҙәре,
Еңгәкәйем, ерле буш икән.
Шомло ҡара ҡанаттарын йәйеп,
Уҫал яҙмыш оса минең өҫтә.
Яҡты яҙмыш, ҡыйыу аҡ шоңҡарҙай,
Килһә ине, еңгә, нурҙар һибеп.
Ҡара яҙмыш ҡанаттары һынһа ине!

Сәпҡан ат тояғының тауышы ишетелә. Таңсулпан өмөтләнеп, йәнләнеп китә. Ләкин бушҡа. Элеүле торған хәйәрҙе алып, Мәргүбәгә һона.

Еңгә, яҙа беләһеңме? Белһәң,
Бына минең беләгемде киҫ тә
Ҡайнар ҡаным менән ошо ташҡа
Беҙҙең исемде яҙ. Йәш ғүмерем
Минең Айсыуаҡҡа! Бына шуға
Мәңге шаһит булһын тау ташлары.
(Яулығына бөркәнеп илай.)

Мәргүбә

Куй, Таңсулпан, улай бик ярһыма.
(Ситкә ҡарап, үҙ алдына.)
Йөрәгендә уның ут ҡына шул.

Ут ул йөрәктәрҙе генә түгел,
Суйын, тимерҙе лә иретә.

Таңсулпандың башынан, арҡаһынан һыйпап, уны йыуатырға тырыша. Тирмә эргәһенә И ш м а й килә. Тирә-яҡҡа бик һаҡлыҡ менән ҡарана. Бер аҙҙан уның янына Г ө л с и р ә килә.

Г ө л с и р ә

Ишмай ағай, ҡайҙа һуң Айсыуаҡ?
Ниңә ул юҡ, әллә яптылармы?

И ш м а й

Юҡ, юҡ. Ул ҡасырға әҙер инде.
Бына хәҙер уңай ваҡыт кәрәк.

Г ө л с и р ә

Хәҙер ҡушалар бит Таңсулпанды.
Нәмә көтәһегеҙ? Тиҙ булығыҙ!

И ш м а й

Кейәү хәҙер килһә, йыртыш менән
Албырғатып, оҙағыраҡ тотоғоҙ.
Үҙең тот йыртышты, бер яғын бир
Мәргүбәгә. Әйҙә алйытығыҙ.
Бар, әйт Таңсулпанға, көтөп торһон.
Хәҙер килә тиген, ҡайгырмаһын.
(Ашығып, сығып китә.)

Г ө л с и р ә тирмәгә инә.

Г ө л с и р ә

Таңсулпан, ҡайғырма, Айсыуағың
Килә! Ишмай ағай килеп әйтте.

Т а ң с у л п а н

Ысынмы, Гөлсирә?

Г ө л с и р ә

Эйе, ысын.

Мәрғүбә

Килһә, шул минутта килһен ине,
Кейәү килер вакыт етте ләһә.

Бер нисә ҡарсыҡ менән Гөлбаныу килә. Гөлсирә китә.

Гөлбаныу

Һиңә, ҡыҙым, шатлыҡ, бәхет теләп,
Доға ҡылып китәйек, тип килдек.

Ҡарсыҡ
Никахың шатлыҡлы булһын, балам.
Ҡайғы-хәсрәт күрмә, бәхетле бул!

Мәрғүбә ҡарсыҡтарға таҫтамал өләшә, ҡарсыҡтар доға ҡылалар.

Гөлбаныу

Һау бул, ҡыҙым, һау бул.

Таңсулпан

Һау булығыҙ!

Ҡарсыҡтар китәләр.

Йыр

Әйҙә, еҙнә, кил әле шул,
Йыртыш өҙөп уҙырға ла,
Еҙнә, һиңә урын йәйҙек,
Бүләк бирһәң, инерһең дә,
Бүләк бирһәң, инерһең.
Бүләк бирмәй ҡарыулашһаң,
Аласыҡта ҡунырһың да,
Аласыҡта ҡунырһың...

Таңсулпан

Еңгә, инде ни хәл итәйек?

Мәрғүбә

Былай булғас, булманы шул, бәхетһеҙкәй.
(Кейәү ҡаршыларға сыға.)

Таңсулпан
(йөрәгенә хәнйәр ҡаҙарға ҡарар итә)

Өмөт һүнде!..

Айсыуаҡ
(Сымылдыҡтан сыға)

Юҡ, һүнмәне, яна!

Таңсулпан

Айсыуағым!..

Ҡулынан хәнйәр изәнгә төшә. Айсыуаҡ Таңсулпанды ҡосаҡлай. Мәргүбә инә.

Мәргүбә

Ай, Айсыуаҡ!.. Нисек индең, ҡайҙан?

Айсыуаҡ изәндәге хәнйәрҙе ала. Ишекте асалар, Мәргүбә ни эшләргә белмәй, Айсыуаҡ Таңсулпанды сымылдыҡ эсенә алып инә. Йыртышты өҙөп, Күсәрбай тирмәгә инә. Уйын-көлкө менән шаулашып, уның артынан ҡыҙҙар инәләр һәм Күсәрбайҙы һырып алалар. Күсәрбай уларға баҡыр аҡса һибә. Ҡыҙҙар көлөшә-көлөшә, шау-гөр килеп, аҡса йыялар.

Гөлсирә

Ниндәй һаран!

Ҡыҙҙар
(бөтәһе лә бергә таҡмаҡлайҙар)

Еҙнә һаран, бик һаран.
Тирмә түгел, еҙнәкәй,
Аласыҡ та йәл һиңә.
Һиңә кәрәк бер аран.

(Көлөшәләр.)

Күсәрбай

Һай, уҫалдар балдыҙҙар!
Ҡайҙа үҫкән был ҡыҙҙар?!

Мәрғүбә

Һине яраталар,
Шуға шаярталар.

Күсәрбай тағы ла баҡыр аҡса һибә. Ҡыҙҙар тағы ла көлөшә-көлөшә йыялар.

Сәлимә

Ҡыҙҙар, инде етте. Йөҙәтмәгеҙ!
Бар китегеҙ!

Шәрифә
(усын йәйеп, бүләген Сәлимәгә күрһәтә)

Ҡара әле, еңгә, бүләкме шул?
Өс тин баҡыр! Еҙнә, имеш, бахыр.

Сәлимә

Ярай, ярай, еткән. Бар китегеҙ!

Ҡыҙҙар
(хор менән таҡмаҡлайҙар)

Беҙҙең еҙнә бай икән,
Менгән аты тай икән.
Бай булһа ла, бүләк өсөн
Кеҫәләре һай икән.
Бүләктәре баҡыр ғына,
Үҙе лә шул бахыр ғына.

Сәлимә

Китегеҙ, тим, шайтан ҡыҙҙары!
(Ҡыҙҙарҙы төрткәләп, ҡыуып сығара.)

Ҡыҙҙар көлөшә-көлөшә китәләр.

Күсәрбай

Һай-һай, ҡыҙҙарығыҙ уҫал икән...
Ярай, рәхмәт һеҙгә, еңгәләрем.
Көткән минут етте. Бына һеҙгә
Минән бүләк.

(Икеһенә лә күлдәклек ситса бүләк итә. Мәрғүбәгә яҡшырағын бирә.)

Сәлимә

Рәхмәт, кейәү.

Мәрғүбә

Рәхмәт.

Сәлимә

Кейәү беҙҙең ауыл егете шул.
Ҡара әле, бүләктәре ниндәй?

Күсәрбай

Ярай, һау булығыҙ, еңгәләрем.

Сәлимә

Һау бул, кейәү, хәйерле кис.
Иң аҫыл ҡыҙ һиндә хәҙер.
Һоҡланырлыҡ кәләш алдың.

Мәрғүбә менән Сәлимә тирмәнән сығалар

Күсәрбай

(Сисенә, кәзәкейенең түш кеҫәһенән хушбуй алып, күлдәктәренә, һаҡалдарына һөртә, сымылдыҡҡа бара.)

Малым китһә, китте,
Көткән минутым етте...
(Сымылдыҡҡа инә.)
Әй, еңгәләр! Килең әле бында!
Ҡайҙа минең бисә, бисә ҡайҙа?!

Сәлимә килә.

Сәлимә

Ни бар, кейәү?

Күсәрбай

Бисә ҡайҙа минең, бисә?

Сәлимә

Сымылдыҡталыр ул, ҡайҙа булһын?

Күсәрбай

Юҡ ул сымылдыҡта.

Сәлимә сымылдыҡты бөтөнләй аса һәм, тирмә кейеҙенең ҡырҡылған урынын күреп, аптырап ҡала.

Сәлимә

Был ни эш, ә?..

Күсәрбай

Ҡайҙа? Нисек?.. Әллә ҡасҡанмы ул?

Сәлимә

Ҡасҡан, ләғнәт, ҡасҡан ҡаҙалғыры!

Күсәрбай

Бар табығыҙ ҡыҙығыҙҙы! Бар, әйт,
Бөтә ырыуҙары килһен бында.

Сәлимә йүгереп сығып китә.

Нисә бисә алып, бындай хурлыҡ
Күргәнем юҡ ине. Ниндәй хурлыҡ!..
Тапмай ғына ҡараһындар, унан
Мин белермен нисек һәйләшергә!

Ашығып, Сураҡол менән Байрамғол килә.

Сураҡол

Нимә, ни бар, кейәү?..

Күсәрбай

Бисә ҡасҡан!

Сураҡол

Ләғнәт төшкән бала! Ҡайҙа, нисек?

Күсәрбай

Ана ҡара, ҡырҡып сығҡан тирмәне.
Бар, табығыҙ бисәне, табығыҙ!
Тапмаһағыҙ, миңә үпкәләмәң!
Бар ырыуығыҙҙан үс алырмын.

Байрамғол

Туҡта, кейәү, ҡыҙма, уйлап һөйләш.
Ниңә улай ырыу менән һөйләшәһең?

Сурағол

Һин ырыуға артыҡ нитмә, кейәү!

Байрамғол

Уйлап һөйләш, кейәү, ҡапыл ғына
Ундай оло һүҙ әйтеү оҡшамаҫ.

Күсәрбай

Ҡыҙығыҙҙы тапһағыҙ, һүҙем юҡ.
Табығыҙ бисәне, барығыҙ, бар!..
Барығыҙ, әҙләгеҙ, тиҙ табығыҙ!

Байрамғол

Йә, әйҙәгеҙ, киттек, әҙләү кәрәк.
Табылыр ул, әллә ҡайҙа китмәҫ.

Сурағол менән Байрамғол китә.

Күсәрбай

Тапмай ғына ҡараһындар, мин уларҙы...

Тирмә эргәһенә һаҡлыҡ менән генә Сағанбай менән Ишмай килә. Күсәрбай ашығып кейенә.

Сағанбай

Хәҙер ин дә, уға юҡ-бар һөйләп,
Башын ҡаңғырт. Оҙағыраҡ торһоң.
Бына сшо көрәгәне индер.

Сағанбай китә, Ишмай, көрәгә күтәреп, тирмәгә инә.

И ш м а й

Бына, кейәү, һиңә ҡымыҙ.

К ү с ә р б а й

Ҡымыҙ?!
Миңә кәрәк ҡыҙ, ҡыҙ!

И ш м а й

Ә, ниндәй ҡыҙ?

К ү с ә р б а й

Ҡайҙа минең бисә?

И ш м а й

Бисә?
Ниндәй бисә?

К ү с ә р б а й

Минең бисә, минең!

И ш м а й

Ҡайһы бисәң?

К ү с ә р б а й

Таңсулпанды әйтәм.

И ш м а й

Нәмә булған Таңсулпанға?

К ү с ә р б а й

Ҡасҡан!

И ш м а й

Ҡасҡан? Ҡайҙа, ниңә ҡасҡан?

Күсәрбай

Бына
Йүнһеҙ. Кайҙан беләйем мин уны.
Һинән һорайым бит шуны. Ахмаҡ!

Ишмай

Белмәйем, Күсәрбай ағай, белмәйем,
Бисә алып өйрәнмәгәс, ҡайҙан
Беләйем мин бисәләр ғәҙәтен.
Йәшем хәҙер ҡырҡҡа етеп килә,
Бисә тигән нәмә күргән юҡ.

Күсәрбай

Һай-һай, ҡустым, бик алйот икәнһең.

Сәхнә артында Көҫәпҡолдоң: «Күсәрбай ағай, Күсәрбай ағай!..»— тип ҡысҡырған тауышы ишетелә.

Күсәрбай

Әнә, тапҡандар бит, килтерәләр.

Көҫәпҡол йүгереп, тыны ҡурылып, аһылдап килеп инә. Тыны ҡурылыуҙан башта һүҙен әйтә алмай тора.

Күсәрбай
(сымылдыҡтағы урынды күрһәтеп)

Килтерегеҙ бында, бында, бында.

Көҫәпҡол

Таңсулпан Айсыуаҡ менән ҡасҡан!
Үҙең биргән ат менән ҡасҡандар.

Ишмай

Эй... Ҡасҡандармы ни?

Күсәрбай

Арттарынан ҡыуғын, ҡыуғын кәрәк
Ебәрергә. Йәйләүҙәге бөтә
Яҡшы аттар менән ҡыуығыҙ, бар!
Ат әйәрләт миңә, тиҙ бул!

К ө ҫ ә п ҡ о л

Хәҙер!
(Йүгереп сығып китә.)

И ш м а й
(Көҫәпҡол артынан ҡысҡырып)

Миңә лә эйәрләһендәр!

К ү с ә р б а й

Нәмә?!

И ш м а й

Миңә лә ат эйәрләһендәр, тим.

К ү с ә р б а й

Ҡайҙан килгән түрә һин, ә? Бына Алйот! Үҙең эйәрләп ал!

И ш м а й

Ярай...
Туҡта, былай итәйек беҙ...

К ү с ә р б а й

Йә, йә?..

И ш м а й

Бына хәҙер атҡа менеп алайыҡ та, Туп-тура сабайыҡ.

К ү с ә р б а й

Ҡайҙа?

И ш м а й

Һуң, ҡайҙа булһа ла сабырға кәрәк. Эҙләргә тейешбеҙ Таңсулпанды.

(Сығырға аҙым атлаған Күсәрбайҙың еңенән тотоп.)

Беҙ, Күсәрбай ағай, бына былай
Итәйек: ашыҡма, тыңла мине.
Таңсулпанды мин бик яҡшы беләм.

Күсәрбай

Беләһеңме?

Ишмай

Беләм. Бына тыңла.

Күсәрбай

Йә, йә, тиҙ бул. Тиҙ әйт!

Ишмай

Таңсулпан ул
Һис ҡасырға тейеш түгел ине.

Күсәрбай

Ҡайҙа Таңсулпан, тим! Һин шуны әйт!

Ишмай

Белмәйем шул, кейәү. Һис белмәйем.

Күсәрбай

Ах һин, алйот, алйот! Мошинник һин!

(Ашығып сығып барғанда, уға Сағанбай ҡаршы була.)

Ә һин бында ни эшләп йөрөйһөң? Ә?

Сағанбай

Таңсулпанды эҙләйбеҙ бит һиңә.

Күсәрбай

Бында юҡҡа ғына уралмайһың,
Һиҙәм. Хәҙер ваҡытым юҡ. Аҙаҡ..
(Китә.)

Сағанбай
(Күсәрбай артынан ҡарап ҡала)

Эйе, аҙаҡ. Мин дә, аҙаҡ, тимен.

(Ишмайға.)

Атҡа мен дә хәҙер, сап тегендә.
Мин дә хәҙер барып етермен.
Уҡ-һаҙаҡты күберәк ал. Бар, йүгер!

Ишмай йүгереп сығып китә.

Шоңҡар ҡулындағы емде
Ҡарт ябалаҡ ала алмаҫ!

Шаршау

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Үрәл тауҙары араһынан аҡҡан ҙур ғына бер йылғаның ҡая ташлы тәкә яры. Ярҙың теге яғында тауҙар күкһелләнә. Шул тауҙар итәгендә яндырылған бер ауылдың харабаһы күренә. Унда янып бөтмәй ҡалған ҡара күмерле бер нисә өй һәм күмерле ҡара баҫаналар ғына һерәйеп күренәләр.

Айсыуаҡ менән Таңсулпан инә.

Айсыуаҡ

Бына ошо инде «Упҡынлы яр».
Ишмай аҫай беҙгә атты ошо
Яр буйына тейеш килтерергә.

Таңсулпан

Ул килтерһә, миңә лә ат була,
Унан беҙгә ҡош та етмәҫ осоп.

Айсыуаҡ

Ошо ерәнсәкәй кеүек булһа,
Ҡоштар түгел, уҡ та етмәҫ беҙгә.

Таңсулпан

Ниндәй тәкә был яр! Ҡара әле,
Һыуы бының әллә ҡайҙа, төптә,

Өйрәлеп, шишмә кеүек ҡайнай,
Ҡурҡыныслы асыу менән аға.

Айсыуаҡ

Шуның өсөн дә бит был урынды
«Упҡынлы яр» тиҙәр.

Таңсулпан

Бик ҡурҡыныс.
(Яндырылған ауыл яғына ҡарап.)
Анау яндырылған ауылмы икән?

Айсыуаҡ

Эйе, быны Ҡолой Балтачевтар,
Теге Күсәрбайҙар яндырғандар.
Быны ғына түгел, был тирәлә
Улар күп ауылды үртәгәндәр.

Таңсулпан

Уйлап торһаң, ниндәй ҙур яуызлыҡ!
Илгә улар ниндәй бәхетһеҙлек,
Ниндәй ауыр ҡайғы килтергәндәр.
Ул Күсәрбай...

Айсыуаҡ

Әйтмә шул исемде.
(Һауала ҡош күреп, уғын тоҫҡай.)

Таңсулпан

Ҡуй, Айсыуаҡ, атма, ҡоштарҙы мин
Бик яратам. Улар иреклеләр.

Айсыуаҡ тоҫҡаған уғын кире ала.

Беҙ ҙә шул ҡоштарҙай булһаҡ ине.
Уларға йола ла, закон да юҡ.
Улар йәш түктергес йолаларҙан
Һәм мәкерле закондарҙан өҫтә
Йөрөйҙәр. Ах, ҡоштар, һеҙ бәхетле!..
Ана Ишмай ағай килә.

Айсыуаҡ

Ҡайҙа?

Таңсулпан

Ана, ҡыуаҡлыҡҡа ышыҡланды.

Айсыуаҡ

Һыбаймы, Таңсулпан?

Таңсулпан

Эйе, һыбай.

Айсыуаҡ

Ошо ерҙән нисек таный алдың?

Таңсулпан

Шулдыр инде, унан башҡа бында
Кем йөрөһөн? Үҙе һыбай. Шулдыр.
Хәҙер икебеҙгә лә ат була.
Ҡара әле, ниңә боролдо был?

Айсыуаҡ

Ишмай ағай булманы был.

Таңсулпан

Кем икән ул?

Айсыуаҡ

Бәлки, ул да шулай, беҙҙең кеүек,
Берәй уҫал яҙмышынан ҡасып,
Ошо урман, тауҙар араһында
Кейек төҫлө ғүмер иткән бер ҡасҡындыр.
Тауҙар тауы Урал ҡуйынында
Кемдәр генә юҡ тиһең, Таңсулпан.
Урал бөйөк. Урал киң күңелле,
Ул тарһынмай кеше бәхетен.
Бәхетһеҙҙе Урал үгәйһетмәй,
Ул йәшерә уҫал күҙҙәрҙән...

Бында бөркөт менән бер ҡаяла
Ҡасҡын төнәй. Эйе, был ерҙәрҙә,
Урал ҡаяларын яҫтыҡ итеп,
Ҡасҡын төнәй серле тынлыҡта.

Таңсулпан

Ҡасҡын?.. Ниндәй ҡасҡын?

Айсыуаҡ

Бында
Ҡасҡындар бар, тиҙәр; унан тағы,
Бүгәс батша яуы баҫтырылғас,
Уның яҡындары — ир-егеттәр,
Ауыр язаларҙан ҡасып, ошо
Ташлы тауҙар, урман араһында
Ғүмер итә, тиҙәр.

Таңсулпан

Әгәр Бүгәс батша менән ир Салауат
Тере булып, тағы улар яу күтәрһә,
Һин, Айсыуаҡ, ни эшләр инең?

Айсыуаҡ

Минме?
Мин бөгөн үк яуға сабыр инем.
Бына ошо оҫкор уҡ-һаҙаҡтар
Дошман күкрәгендә булыр ине.

Таңсулпан

Батыр егеттәрҙе яратам мин...
Килерме икән Ишмай ағай?

Айсыуаҡ

Килер.
Ул һүҙендә тора торған егет.

Таңсулпан

Тирмәләге шомло ауыр уйҙар
Бөттө инде. Беҙ икебеҙ бергә.
Эх, был донъя ниндәй матур! Яҡты!..

Көҫәпҡол, Күсәрбай, ике пүнәтәй, староста, мулла һәм Мортазалар килеп инәләр.

Көҫәпҡол

Бына улар, бына ҡайҙа улар!

Күсәрбай

Бәйләгеҙ ҡулдарын!

Айсыуаҡтың ҡулдарын артҡа ҡайырып бәйләйҙәр.

Ана шулай,
Йә, ҡас инде, ниңә ҡасмайһың? Ҡас!
Юҡ шул, хәҙер инде ҡаса алмаҫһың.
Күсәрбайға килеп ҡаптың. Ярай,
Һин дә атайыңдай дөмөгөрһөң!

Айсыуаҡ

Эй аждаһа, ҡарт аждаһа һин, Күсәрбай!
Кеше бәхетен тапап шатланаһың.
Ниндәй уҫал шатлыҡ! Бүре шатлығы!

Көҫәпҡол

Ҡыҙҙырма Күсәрбай ағайымды,
Ҡыҙҙырма! Ҡыҙҙырһаң, яҡшы булмаҫ!

Айсыуаҡ

Һеҙҙән мин яҡшылыҡ көткәнем юҡ.
Һәм мин уны һеҙҙән һорамам да, —
Дошманға ялыныу — ирлек түгел.

Күсәрбай

Ә, беҙ дошманмы ни әле һиңә?!

Айсыуаҡ

Әллә дуҫ тип әйтер инеңме һин?
Был донъяла иң ҙур дошман миңә —
Һин һәм бына ошо арзан хайуан,
Намыҫһыҙ Көҫәпҡол!

Күсәрбай

Туҡта, мәлғүн!
Туҡтамаһаң, атам хәҙер, атам!

Айсыуаҡ

Һин атырһың, һинең кәсебең шул.

Күсәрбай

Йә, хәҙрәт, һин был эшкә ни әйтерһең?

Мулла

Бында мин, йәмәғәт, шәриғәткә,
Йолаларға хилаф ағын ғына
Һеҙгә бер аҙ әйтеп китмәк булам.
Уғырылыҡ ағын хөкөм ҡарар,
Бына түрәләр бар, улар ҡарар.
Мин — мосолман тигән һәр бер бәндә
Буйһонорға тейеш шәриғәткә.
Быны инде белә һәр мосолман.
Бына күрерһегеҙ, был бәндәләр
Көфрана эштәр ҡылып, йәғни
Зина ҡылып, бөтә ил йөҙөнә
Ҡара ағып, беҙҙе хур иттеләр.
Бындай эштәр булһа, ер, һыу ҡорор,
Илгә афәт килер тигән ҡөрьән.
Шулай булғас инде, беҙ, йәмәғәт,
Был икәүҙе индермәйек илгә.
Бәндәләргә оло ғибрәт булһын.

Күсәрбай

Һин, Мортаза, ни әйтәһең?

Мортаза

Дөрөҫ,
Хәҙрәт дөрөҫ әйтә, шулай кәрәк.

Таңсулпан

Дөрөҫ түгел!

Көҫәпҡол

Тик кенә тор, битһеҙ!

Староста

Кемгә өкшәп былай булған был ҡыҙ?

Көҫәпҡол

Бына ил ҡоротҡос, оятһыҙҙар!

Айсыуаҡ

Мөхәббәтте түбән һүҙҙәр менән
Бысратырға маташмағыҙ юҡҡа.
Мөхәббәт ул һәр нәмәнән өҫтөн.
Унан һеҙ бик түбән тораһығыҙ.

Күсәрбай

Етте, ниңә шуны өрҙөрәбеҙ?
Бығау һалып, оҙатырға кәрәк.

Айсыуаҡты алып китәләр.

Таңсулпан

Айсыуаҡтан мине айырмағыҙ!
Айсыуағым минең — йөрәгем ул.
Йөрәгемде һурып алмағыҙ!
Кеше йәшәй алмай йөрәкһеҙ.
(Айсыуаҡ артынан китергә ташлана.)

Мортаза

Тот бисәңде!

Күсәрбай Таңсулпанды ситкә тартып ала.

Таңсулпан

Хуш, Айсыуаҡ, бәғеркәйем минең!

Таңсулпан, Күсәрбай, мулланан башҡалары китәләр.

Мулла

Был оятты нисек һуң юйырһың?
Кешеләргә нисек күренерһең?
Ер өҫтөндә һин ни йөҙөң менән
Йөрөрһөң? Йә... үлем бит, йә, хоҙа,
Үҙең һаҡла бындай бәләләрҙән.

Таңсулпан

Емерелһен ине ҡарғышлы ер!
Ниңә кәрәк бындай йәшле донъя?

Мулла

Был бөтөнләй яҙған икән юлдан!

Күсәрбай

Һин бар, хәҙрәт, мин был оятһыҙҙы
Үҙем алып ҡайтырмын... Шулай, бар...

Мулла

Кем, Күсәрбай, теге башмаҡты мин
Ҡасан алырмын икән?

Күсәрбай

Ниндәй башмаҡ?

Мулла

Доға ҡылдым бит.

Күсәрбай

Ярай, хәҙрәт, бар әле һин, башмаҡ ҡасмаҫ.

Мулла

Ҡасмаһын тим шул. Йә, ярай, киттем.
(Китә.)

Күсәрбай

Йә, Таңсулпан, бөтһөн, һөрт йәшеңде,
Килешәйек. Һиңә әҙерләгән
Аҫыл-аҫыл бүләктәрем дә бар.

Таңсулпан

Йән һөймәгән кешенең бүләге
Ҡыйбатлы булһа ла, арзан. Миңә

Айсыуаҡтан башҡа һис кем һәм
Һис бер нәмә кәрәк түгел. Миңә
Тик ул ғына ҡыйбат.

Күсәрбай

Һин, Таңсулпан,
Яҡшылыҡты аңла! Әгәр тағы
Шул Айсыуаҡ исемен ҡабат әйтһәң,
Үпкәләмә миңә, яҡшы булмаҫ.

Таңсулпан

Айсыуағым минең йөрәгемдә
Тамыр йәйгән. Уны минән һис кем,
Һис ваҡытта йолҡоп ала алмаҫ!
Йолҡһалар ҙа, минең ғүмерем менән
Бергә йолҡоп алырҙар.

Күсәрбай

Ғүмер буйы һинән үс алырмын,
Тәндәреңдән ҡамсы эҙе китмәҫ!
Әйҙә киттек!

Таңсулпан

Кит, кит, килмә яҡын!

Таңсулпан, Күсәрбайҙан ҡасып, ҡая таш өҫтөнә менеп баҫа. Күсәрбай уны тоторға тырыша, ләкин ҡаяға менә алмай.

Күсәрбай

Төш, Таңсулпан, төш, тим, яҡшы саҡта!

Таңсулпан
(тауҙарға ҡарап)

Кемдәр көслө? Ҡотҡарығыҙ мине!
Ҡотҡарығыҙ! Әй, һеҙ, оло тауҙар,
Ауыр ташлы бейек күк ҡаялар,
Ауығыҙсы Күсәрбай өҫтөнә!

Күсәрбай

Төш, тим, төш, тим, яҡшы саҡта!
Ҡәҙерҙе бел, ҡасма үҙ бәхетеңдән.

Таңсулпан көмөш тәңкәле еләнен, ҡашмауҙарын һалып, берәм-берәм Күсәрбайға ырғыта.

Таңсулпан

Бына һинең бәхет тигәндәрең!
Бына һинең шатлыҡ тигәндәрең!
Улар минең тындарымды ҡура.
Һинең харам көмөш тәңкәләрең
Ҡыҙған тимер кеүек мине яндыра.
(Айсыуаҡ бүләк иткән яулыҡты иңенә һала.)

Күсәрбай

Ғүмер буйы һиңә көн күрһәтмәм,
Тәндәреңде ҡара ҡан итермен.
Төш тиҙерәк, йығыл аяғыма!

Таңсулпан

Мин йығылмам һинең аяғыңа.
Ҡоштар төшмәй ҡоҙғон тырнағына.
Һин шуны бел: мин бер ваҡытта ла
Һиңә булмам. Көтмә. Кит һин бынан!
Кит һин ерҙең ерәнгес хайуаны!

Күсәрбай

Шулаймы ни әле, шулаймы ни!
Улай булһа, бына һиңә, мәлғүн!
(Ҡорал тоҫҡай.)

Таңсулпан

Ат, ат әйҙә, ҡомһоҙ, ҡарт ғазраил!
Әйҙә уҡтар йыртһын йәрәгемде.
Тик ул һиңә, һиңә булмаһын.
Һиңә булһын бөтә ләғнәттәрем,
Йәшле ҡарғыш, асы нәфрәттәрем.
Мөхәббәтем минең бәгерем Айсыуаҡҡа!

Күсәрбай

Бына Айсыуаҡҡа!..
(Ата.)

Таңсулпан
(Упҡынға ауған килеш)

Хуш, Айсыуаҡ!

Иңендәге яулыҡ ҡая өҫтөндәге йәш ҡайын ботағына эленеп ҡала. Йәйә һәм уҡ-һаҙаҡтар тағып, Саған бай килә. Ул был хәлде күреп ҡала.

Саған бай

Ах, һәләк итте Таңсулпанды!
Ниңә, ниңә аттың ул баланы?

Күсәрбай

Ул — минең эш.

Саған бай

Һинең бындай ҡанлы
Эштәрең артыҡ күбәйҙеләр.
Шундай ауыр һинең ғонаһтарың,
Нисек һине ер күтәрә икән?
(Яндырылған ауыл яғын күрһәтеп.)
Ана ҡара, ул да һинең эшең!
Ғүмереңдең ҡара тарихы ул.
Бөтә ғүмер юлың ҡара һинең.
Ниндәй хурлыҡлы, ҡыҙғаныс ғүмер!

Күсәрбай

Теҙлән, мәлғүн, йығыл аяғыма!
Йығыл, Салауаттың ғәрип көсөгө!

Саған бай

Яуызлыҡты хаҡлыҡ хөкөм итә.
Һин тубыҡлан минең алдыма!

Күсәрбай

Ах фетнәсе, эй башыңды! Теҙлән!

Сағанбай

Баш әймәнем һәм әймәм дә.
Баш әйеү ул — үлемдән дә ауыр.
Эх, бына хәҙер инке ҡулым иҫән
Булһа, ошо уҡ-һаҙаҡтар менән
Ҡара йөрәгеңде тишер инем.

Күсәрбай

Улай булһа...
(Билбауына ҡыҫтырған пистолетын ала.)
Бына ҡаҙал, мәлғүн!

Айсыуаҡ менән Ишмай йүгереп килеп инәләр. Айсыуаҡ Күсәрбайҙың ҡоралын ҡайырып ала.

Айсыуаҡ

Ҡайҙа Таңсулпан?

Күсәрбай өндәшмәй.

Ҡайҙа Таңсулпан?

Сағанбай

Үлтерҙе ул уны. Атты.
Ул упҡынға ауҙы ҡая таштан.
Хуш, Айсыуаҡ, тиеп ауҙы упҡынға.

Айсыуаҡ

Ах, аждаһа!..
(Ата.)

Сағанбай

Атайынды аҫтырған кеше — шул.

Айсыуаҡ

Ләғнәт һиңә, ил ҡоротҡос!..

Ишмай

Ниндәй ҡыҙҙы һәләк итте.

Айсыуаҡ
(ботаҡҡа эленеп ҡалған яулыҡты алып)

Таңсулпан юҡ хәҙер был донъяла.
Ниңә тыныс ҡарай быға тәбиғәт?
Был дәһшәттән ниңә ер тетрәмәй?
Ниңә тауҙар, таштар аҡтарылмай?
Ниңә һыуҙар утҡа әйләнмәйҙәр?
Ниңә ҡояш йөҙөн ҡайғы япмай?
Ниңә ер иламай был ҡайғынан?..
(Йөҙөн яулыҡ менән ҡаплай.)

Ишмай

Дәрт һәм намыҫ ҡоло булып тыуған.
Ниңә кәрәк ине шундай ялҡын йөрәк
Малһыҙ, кәмһетелгән ярлы егеткә?

Сағанбай

Изге нәфрәт һәм мөхәббәт уты
Ялҡынлана уның йөрәгендә.
Йәш йөрәккә ялҡын зыян түгел.
Яңһын әйҙә. Ут ул сыныҡтыра.
Тимер ҙә бит көслө ут эсендә
Ҡоросҡа әйләнә. Яңһын әйҙә.
Хаҡлыҡ өсөн ҡыйыу көрәшергә
Ҡорос кеүек ир-егеттәр кәрәк.

Айсыуаҡ
(йөҙөнән яулыҡты алып)

Минең ҡояш һүнде. Көн ҡараңғы.
Ҡайҙа хәҙер минең барыр юлым?
Ҡайҙа тарта мине ҡара яҙмыш?
Упҡынғамы, ялҡынғамы, ҡайҙа?..

Сағанбай

Бына һиңә йәйә, уҡ-һаҙаҡтар.
Күкташ тауҙа, төрөн мәғәрәлә
Беҙ йәшергән төрлө ҡоралдар бар.
«Көрәшергә, фәҡәт көрәшергә!..»
Атайыңдың васыяты шул. Бел!
Йәшәр өсөн һиңә бүтән юл юҡ!

Ишмай, ҡая ташҡа баҫып, ҡаш өҫтөнә ҡулын ҡуйып, тирә-яҡты күҙәтә.

Айсыуаҡ
(Таңсулпан ауған ҡаяны ҡосаҡлап)

Мин ант итәм Урал ташын үбеп,
Хаҡлыҡ өсөн мин йәнемде йәлләмәм!..

Ишмай

Киләләр!

Саҕанбай Ишмай эргәһенә бара. Айсыуаҡ ашығып, уҡтар менән һөжүмгә әҙерләнә.

Саҕанбай

Улар күмәк. Киттек Күкташ тауға.

Айсыуаҡ

Хуш, Таңсулпан, хуш, йондоҙом минең.

Шаршау

1941

Низам Ҡәрипов

(1905—1942)

Низам Ҡәрип улы Ҡәрипов 1905 йылдың 25 июлендә Мәсетле районы Иҫке Хәлил ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Башланғыс белемде ул тыуған ауылында ала. Тиҙҙән уны комсомол ячейкаһы секретары итеп үҫтерәләр. ВЛКСМ-дың Мәсәғүт канткомы янындағы курсты тамамлағандан һуң Низам Ҡәрипов Мәсетле волкомы аппаратына эшкә алына, ә инде 1925 йылда волком секретары итеп һайлана.

1929 йылда Н. Ҡәрипов Ҡазанға рабфакка уҡырға китә. Аҙаҡ Татарстан коммунистик университетының журналистар бүлегендә уҡый. Ләкин университетты тамамларға тура килмәй, III курсынан уҡ Башҡортостандың Зианчура МТС-ына политбүлек начальнигы итеп ебәрелә. Шул уҡ районда ул район ғәзитәһе редакторы вазифаһын да үтәй. Унан һуң — Маҡар районы газетаһы редакторы.

1935 йылда Н. Ҡәрипов «Башҡортостан» газетаһының партия бүлеге мөдире итеп күсерелә.

1939 йылда ул Башҡортостан яҙыусылар союзының беренсе секретары итеп һайлана. 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышына китеп, Сталинград өсөн булған дәһшәтле алыштарҙа ҡатнаша һәм 1942 йылда батальон политругы Н. Ҡәрипов батырҙарса һәләк була.

Низам Ҡәрипов башҡорт әҙәбиәтенә очерктар, хикәйәләр һәм драматургик әҫәрҙәре менән һиҙелерлек өлөш индерҙе. Уның айырыуса «Сәлим ҡарт», «Алма», «Һалдаттар ҡайтҡас», «Алмашсылар» кеүек пьесалары драматургия үҫешендә популярлыҡ яуланылар. Шулай уҡ балалар өсөн яҙылған «Ғәни менән Ғәли», «Ҡуяндар» пьесалары, «Күгәрсендәр» һ. б. хикәйәләре лә уҡыусыларға яҡшы таныш.

АЛМА

Пьеса

4 шаршауҙа

Катнашалар

Алма — 20 йәштәге ҡыҙ.
Моталлап — Алманың атаһы. 60 йәштә.
Сергей — иҫке тәрбиәле ҡарт агроном. 60 йәштә.
Һаҙый — кулак малайы. 20 йәштә.
Әхтәм — гармунсы егет. 20 йәштә.
Иштуған — тракторист. 20 йәштәрҙә.
Биксәнтәй — ҡыҙыу тәбиғәтле партизан.
Мораҙым — колхоз председателе.
Кәримә — Алманың дуҫы. 20 йәштәрҙә.
Маруся.
Зифа.
Ҡараголов.
Студенттар, колхозсылар.

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

Колхоз төҙөлә башлағаң йылдар.
Ауыл янынан аға торған йылға буйы. Тирәктәр, ваҡ ҡыуаҡлыҡтар күренә. Ваҡыт кис.
Шаршау асылғанда, сәхнәлә бер кем дә юҡ. Бер аҙҙан Әхтәм менән Алма һөйләшеп килеп инәләр.

Әхтәм. Шулай, Алма, мин башлағаң һүҙемде осланым.

Алма. Осланым... Осло кәбәндең башын ел ауҙара ул.

Әхтәм. Уның ҡарауы, ямғыр ҙтмәй, серемәй, ә ел ауҙарғанды ҡабаттан өйөп була.

Алма *(шаярып)*. Йә, һинең осоңа сығып булмаҫ, шулай итерһең. Өйөп ҡуйырһың.

Әхтәм. Эйе, өйөп ҡуйырбыҙ, икәүләп өйһәк, ел дә ҙтмәҫ, ямғыр ҙа ҙтмәҫ, дауыл да емермәҫ.

Алма. Әллә...

Әхтәм. Нәмә?

Алма. Әллә, тим, ауҙармаһа ярай ҙа.

Әхтәм. Күп әлләләйһең икән. Әлләләренде тыңлай торғас, арып бөттөм.

Алма. Әйҙә, арыһаң, ултырайыҡ.

Әхтәм. Әйҙә ултырып торайыҡ, төндөң кәртәһе юҡ. Ултырып һөйләшкәндә лә һинең әлләләрең оҙаҡҡа барыр әле.

Ағас төбөнә барып ултыралар.

Алма. Абау, шуны ла күпһенде. Колхоз тип, собрание тип көнө-төнө йөрөһә лә бер нәмә булмағанды, минең менән бер сәғәт йөрөргә лә күпһенә. *(Үпкәләгән була.)*

Әхтәм. Бына кәрәк булһа һүҙ. Тәртәң еректән генә икән дә баһа. *(Яурынына беләген һалып)*. Бөттө, бөттө... Бөгөн төн беҙҙеке.

Алма *(Әхтәмдең ҡулын этеп)*. Ал әле, ҡыйын итәһең.

Әхтәм. Бынығы ла яңы һүҙ. Тик ултырғанда ла ҡыйын була икән.

Пауза.

Бына һин кәнсәләргә барып эшләп ултырғанды әйтһәң дә ярай. Береһе уңдан, береһе һулдан, береһе арттан, береһе алдан...

Алма *(иркәләнеп)*. Бөттө, бөттө... *(Иркәләнеп Әхтәмгә һыйына.)*

Шул ваҡыт һандуғастар һайрай башлай. Оҙаҡ тынлыҡ.

Әхтәм. Матур һайрай бит!

Алма. Эйе, матур шул.

Пауза.

Әхтәм, бөгөнгө кисте һин берәй вакыт оноторһоңмо?

Әхтәм. Ә һин?

Алма. Юк, башлап мин һораным, һин әйт.

Әхтәм. Бына озакламай бесән өçтө етер. Матур туғайлык кеше менән тулыр. Һандуғас һайрар. Туғайҙарҙа машиналар эшләрҙәр, бесән сабырҙар, йыйырҙар... Унан һуң арыш урағы етер. Колхозсылар бөтәһе лә яланда булырҙар... *(Осонап һөйләргә тотона.)* Күңелле, ниндәй күңелле булыр ул колхоз тормошо. Колхоз ерен трактор һөрәр, трактор менән сәсерҙәр, трактор менән тырматырҙар... Сәсеү вакыты гөрләп торор... Күңелле, ысынлап та, күңелле булыр ул сакта. Ошондай матур, тымык кистәрҙе ауыл өçтөндә тракторҙарҙың матур тауыштары яңғырап торор. Ә бит трактор шундай көслө ул, алтмышарлаған ат эшен бер үҙе эшләрлек.

Унан һуң урожай йыйыу башланыр. Был сакта инде комбайн тигән машина эшләр. Бына уныһы инде тағы ла иç киткес булыр. Ул бит үҙе ура, үҙе һуға, үҙе елгәрә, үҙе йөккә тейәп йөрөй торған буласак.

Көҙ етер, игендәрҙе һуға башларҙар... Унда тағы ла машина булыр. Бөтәһен үҙе эшләр. Һуғыр, елгәрер, һаламын үҙе ҡағыр, игендәрҙе сортҡа бүлеп, үҙе тоҡтарға тултырыр... Их, күңелле һуң был колхоз тормошо!

Ауыл шундай үҙгәрер, яландарҙа тракторҙар, иген ташыу өсөн автомашиналар гөрләп тороҙор. Ә бына бында, хәҙерге ҡараңғы урында, Ильич лампочкалары янырҙар, кәнсәләрҙә телефондар шылтырар...

Аңлайһыңмы, Алма, ниндәй күңелле булыр ул сакта... Крәҫтиәндәр инде ул сакта эшкә барғанда бер-беренән ҡасҡандай булып айырым-айырым йөрөмәçтәр. Ә бергә, бөтәһе берҙәй, колхоз эшенә китерҙәр.

Алма *(Әхтәмгә ҡушатыбыраҡ һуҙып).* Шул сакта беҙ ҙә барырбыҙ... *(Әхтәмгә һыйына.)*

Әхтәм *(капыл тауышын үҙгәртеп).* Ә һин колхозды яратаһыңмы?

Алма. Әллә...

Әхтәм. Тағы әллә.

Шул вакыт бер як ситтән һаҙый килеп, уларға күренмәй, тыңлай.

Алма. Абау, яңылыш ҡына әйтелгән һүҙгә лә асыулана. *(Кәүҙәһен ситкәрәк ала.)*

Әхтәм. Әйт әле, ысынлап яратаһыңмы?

Алма. Нисек тип әйтәйем икән. Мин күмәкләп эшләүҙе яратам да, колхоздың нисек булаһын белеп етмәгәс, нисек тип тә әйтә алмайым. Беҙ ни һаман да колхоз түгел бит.

Әхтәм. Ниңә инмәйһегеҙ?

Алма. Атайым ни, ҡаршы тора. Бер һүҙ әйтер хәл юҡ.

Әхтәм. Ә колхозсы булғың киләме һуң?

Алма. Килә.

Әхтәм. Килһә, булды. Колхоз килене булырһың. Туйҙы ла колхозсылар менән яһарбыҙ. Ә унан да бигерәк, икәүләп уҡырға китербеҙ.

Алма. Уҡырбыҙ... Ысынлап әйтәһеңме, Әхтәм? Уҡырбыҙмы?

Әхтәм. Бына тағы ла бер һүҙ. Ни эшләп уҡымабыҙ ти. Ҡайһылайыраҡ уҡырбыҙ әле. Ҡаланың үҙенә барып, агроном булырға уҡырбыҙ.

Алма. Әхтәм, белһәң ине уҡығым килгәнде... Уҡырға тигәндә, мин, теләһәң бөгөн кит, тиһәләр ҙә риза. Тик бына атайымдар ғына ҡаршы булырҙар шул.

Әхтәм. Булмаҫтар, ни эшләп ҡаршы булһындар, ти.

Алма. Булмаһалар ярай ҙа.

Тағы ла һандуғас тауышы.
Пауза.

Был һандуғас ниңә һайрай икән?

Әхтәм. Һинең менән мине ҡотлай. Алмаҡай, ти, һеҙгә матур тормош, ти.

Алма. Теләгең ҡабул булһын, ти.

Әхтәм. Улай булһын, ти. *(Ҡосаҡлап үбә.)*

Шул арала алыҫта гармун, йыр тауышы ишетелә.

Алма. Бында киләләр, Әхтәм. Китәйек.

Әхтәм. Килһендәр, бергә уйнарбыҙ.

Алма. Оят булыр, китәйек,

Әхтәм. Булмаҫ, килһендәр. Уйнарбыҙ. *(Һыҙғыра. Алма уның ауыҙына баҫа.)*

Алма. Исмаһам, һыҙғырма.

Шул арала егеттәр, ҡыҙҙар киске уйынға шаулап килеп инәләр. Улар артынан һаҙый ҙа, килеп сығып, ҡатнашып китә

Иштуған *(гармунды тартып)*. Беҙ тағы, бөтә урамды эйләнеп, һине эҙләп йөрөйбөҙ. Ә һин...

Әхтәм. Мин генә түгел, беҙ.

И ш т у ғ а н. Ә, улай икән. Һеҙ икән дә баһа. Эҙләү урынһыҙыраҡ булды бит әле. Егеттәр, тараҡан булдыҡ бит.

К ә р и м ә. Ҡыҙҙар, Алмаға ҡырау төшөргә иткән, күрәһең.

Шаркылдап көлөшәләр.

Ә х т ә м. Юҡ, уға ҡырау төшмәй, колхозға инмәүселәргә ҡырау төшә.

К ә р и м ә. Алма ла колхозда түгел бит.

Ә х т ә м. Эйе, түгел ине, бына инде иртәгәнән башлап колхозсы була.

Һ а ҙ ы й. Колхоз килене, тиң. *(Көлә.)*

Ә х т ә м. Эйе, колхоз килене, кулак килене түгел.

И ш т у ғ а н. Улай икән. Шулай тип күгәрсен һөтө менән яҙып ҡуйырбыҙ инде.

Пауза.

Ҡара, гармун менән ҡушлап туйға саҡырырға онотма.

К ә р и м ә. Улай тигәнсе, гармун менән маҡтап ҡуйырбыҙ тиһәңсе.

И ш т у ғ а н. Була ул. Эш миндә тормаҫ. Аяҡтарығыҙ арымаһын да телдәрегеҙ талмаһын. *(Үҙе уртаға ултыра, аранан бер ҡыҙҙы янына ала.)*

Башҡалар түңәрәкләнеп, тотоношоп йырларға башлайҙар.

Й ы р:

Баҡса аша сыҡҡан саҡта, күҙем төштө алмаға,

Комсомолдар ышанмайҙар ен-шайтанға, муллаға.
Урамдарҙан уҙабыҙ, гармундарҙы һуҙабыҙ,
Клубтарҙа белем алғас, комсомолка булабыҙ.

Уртала ултырыусылар түңәрәкте туҡтаталар.

У р т а л а у л т ы р ы у с ы ҡ ы ҙ. Кил әле. *(Ҡулы менән берәүҙе саҡыра.)* Нәмә ул трактор?

Е г е т. Трактор тигән нәмә — ул ат.

Т а у ы ш т а р. Ат!..

Көләләр.

Ниндәй һуң ул, көрәнме, ҡарамы, әллә, һеҙҙең бейә кеүек, аламы?

Е г е т. Ат тигәс тә, ул ысын ат түгел, машина, шул трактор инде. Һабан һөрә торған машина.

Тағы ла көләләр.

Т а у ы ш т а р. Ҡайҙа эшләнә ул?

Е г е т. Әмериктә. Хәҙер беҙҙә лә сыға, тиҙәр.

Пауза.

Уны артелдәргә генә бирәләр, ти.

У р т а л а у л т ы р ы у с ы ҡ ы ҙ. Йә, ярай. Әмерик тиклем ерҙә эшләнә торған нәмәне шулай белгәс, етер. Һаҙый. Ул хәҙер беҙҙә лә күп инде. Ана, Йылға ауылының өс байы бер булып алырға йөрөйҙәр, ти. Артель-мәртил дә төҙөмәй, тик үҙҙәре генә алалар, ти.

У р т а л а у л т ы р ғ а н ҡ ы ҙ. Йә, күп «ти»ҙәп торма. «Ти» булһа, тиң дә тик тор. *(Урын бирә, егет ултыра.)*

У р т а л а ғ ы е г е т *(Кәримәне саҡырып)*. Йә әле, һин беҙгә февраль айының утыҙында ниндәй ваҡиға булғанын әйтеп бир. *(Үҙе янында торған бер егеттең колағына ғына нимәлер әйтә.)*

К ә р и м ә. Февралдең утыҙында тиһеңме? *(Уйлай.)* Ә йылы ҡайһы һуң?

У р т а л а ғ ы е г е т *(шаярып)*. Уныһын әйткәс, кем дә таба уны. Йә ярай, әйтәйем. Былтыр икән, ти.

К ә р и м ә *(уйлай)*. Юҡ, белмәйем. *(Үҙе ҡыйынһынғандай була.)* Башҡа берәй мәсьәлә бир.

Башҡалар аҡрын ғына көлөшәләр, ҡолаҡҡа әйтешәләр.

У р т а л а ғ ы е г е т. Актив, шуны ла белмәйһең.

Пауза.

Но улай булғас әйт, заемды ниңә сығаралар? Ә тегенеһе икенсе кешегә ҡалһын.

К ә р и м ә. Заем государствоға бурыҫҡа аҡса биреп тороу тигән һүҙ. Уны социализм ҡоролошона тоталар.

Б е р ә ү. Бынығы дөрөҫ. Ә теге һорау...

Б е р ҡ ы ҙ. Ә тегенеһе... белһәң, үҙең әйт.

Б е р ә ү. Әйтәм бит, һин айҙарҙың нисә көндән бәтәүен белмәйһең. Февралдең 30-ҙан бәтәүен ҡасан күргәнең бар.

Башҡалар көләләр.

К ә р и м ә. Әй, алйот. Мин, ысынлап та, политический мәсьәлә тип торам тағы.

Тағы ла көләләр, уйын башлана.

Й ы р: Бейек тауға менәбеҙ, алыҫ ерҙәр күрәбеҙ.
Ленин бабай юл күрһәтте, шуға уны һөйәбеҙ.

Ана килә, поезд килә, яғып Донбасс күмерен,
Бир ғариза, ин колхозға, рәхәт үтер ғүмерең.

Йыр туктай.

К ә р и м ә. Әхтәм, кил әле.

Ә х т ә м. Хуш, килдем, ти. *(Якын бара.)*

К ә р и м ә. Һине, Әхтәм, политический һорау биреп барыбер тотоп булмаҫ инде. Йә, булмаһа зыңғылдата баҫып, бер бейеп ал әле.

Ә х т ә м. Ниңә, әйҙә, теләгәнеңде ҡуш. Мин ҡурҡмайым.

Һ а ҙ ы й. Эйе, Әхтәм ҡурҡмай ул, асыуы килгәндәрҙе байкотировать итеп тә ҡуя.

Ә х т ә м. Быныңменән нәмә әйтмәксе булаһың?

Һ а ҙ ы й. Эйе, тим, ул бөтәһен дә белә. Артыҡ күпте белә, тим.

Ә х т ә м *(мыҫкыллап)*. Ә, ә, шулаймы ни... Улай икән.

Пауза.

Улай булғас, Иштуған туған, тарт гармуныңды, баҫайым бер зыңҡыта.

Ғармун уйнала. Әхтәм бейей, уға ҡул сабып торалар, туктағас, тағы ла нығыраҡ ҡул сабалар.

У р т а л а ғ ы е г е т. Алма, инде һин кил.

А л м а килә.

А л м а. Мин әле комсомолға инмәгәнмен. Миңә еңел генә мәсьәлә бир.

У р т а л а ғ ы е г е т. Була ул, бер яңғыратып йырлап ебәрһәң, беҙгә шул етә. Айҙың көндәрен һорап йөҙәтмәйем, улай булғас.

Т а у ы ш т а р. Йырлаһын, йырлаһын.

А л м а. Ярай, һайланған һаҙға, һөрөнгән — баҙға, ти. Һайланһам, йә әллә ниндәй мәсьәлә биреп ҡуйырһың.

Й ы р:

Урмандарҙы ярып поезд килә,
Күтәрелә уның төтәне.
Бергәләшеп, берҙәй йәшәгәндә,
Рәхәт кенә үтә лә көнөм.

Йыр бөтә, ҡул сабалар. Шул арала б е р м а л а й инә.

М а л а й. Әхтәм ағай! Мораҙым ағай, һине килһен әле, тип ебәрҙе.

Ә х т ә м. Кемде, мине генәме?

М а л а й. Эйе, башҡаларҙы әйтмәне. Агроном Сергей килгән.

Ә х т ә м. Улай булғас, мин киттем инде. Бейегән өсөн икенсе берәй ваҡыт бушлай ултыртырһығыҙ. *(Китә.)*

И ш т у ғ а н. Мин дә ҡайтам. Гармундың йоҡоһо килә башланы.

К ә р и м ә. Гармунсының, тиң.

Һ а ҙ ы й. Ҡайтһын, ат ҡойрого еҫкәйһе, көл йыяһы барҙыр.

И ш т у ғ а н. Унда һинең эшең булмаһын. Ат ҡойроғона түгел, һеҙҙең ҡойроҡҡа ла тотондоҡ инде.

Һ а ҙ ы й. Тотоноп ҡара. Башыңа тай типмәһен.

И ш т у ғ а н. Байкотта икәнегеҙҙе онотма. Колхозға ла алмаһаҡ, бына шунда булыр ул тай тибеү. *(Мыҫҡыллы рәүештә башын ҡыйшайта һәм, гармунын ҡаты уйнатып, йырлап сығып китә.)*

Й ы р: Улай ҙа бергә-бергә, былай ҙа бергә-бергә,
Бай малайы яңғыҙ ҡалһын, әйҙә китәйек беҙ ҙә.

Бөтәһе лә йырлашып сығып китәләр. Һаҙый бер үҙе үрһәләнеп тороп ҡала.

Һ а ҙ ы й *(үҙ-үҙенә)*. Бына нисек, көл хәйерсеһе. «Ҡойроғоғоҙға баҫырбыҙ». *(Танауы менән асыу ора.)* Шул Әхтәм артынан эйәрәләр. Шул ҡоторта.

Пауза.

Ярар. Ҡарап ҡарарбыҙ. Мин хәҙергә берәү түгел, беҙҙекеләр ҙә барҙар, һеҙҙекеләрҙән дә табылыр.

Пауза.

Туҡта, «колхозға ла алмаһаҡ — шунда булыр ул тай тибеү» ти. Был нисек була һуң әле? Әллә, ысынлап та, беҙ инәйек тип ялынырға мәжбүр булырбыҙмы? Әгәр шулай булырға тура килһә... Алмаһалар... Ул саҡта... Ул саҡта... Эх! Эттәр! Былай ярамай. Оҙаҡҡа һуҙыу урынһыҙ, ҡалған эшкә ҡар яуа. Бөгөндән ҡалһа, һуң булыр. *(Сыға башлай.)*

Ҡаршыһына М о т а л л а п ҡ а р т килеп сыға.

М о т а л л а п. Нихәл, былай ҡабаланып ҡайҙа бара ятаһың?

Һаҙый. Юҡ, улай артыҡ ҡабалан түгел. Бына ауылға Сергей килгән икән дә...

Моталлап. Уныһы тағы нәмә эшләп йөрөй икән. Шул колхоз-совхоз тип йөрөйҙөр инде уның.

Пауза.

Уларға нәмә: колхоз булһа ла ялунья, колхоз булмаһа ла ялунья. Уларға ни, Советы ла, земствоһы ла бер инде. Элек земствоның агрономы булды, хәҙер колхоздыҡы.

Һаҙый *(ҡаранып)*. Моталлап бабай, йә, һүҙеңдә тора алдыңмы? Әллә һин дә колхоз яҡлымы?

Моталлап. Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, тиҙәр, хоҙа хаҡы өсөн ул колхозына инәсәгем юҡ. Был һүҙҙе анауы йыйылышҡа ла әйттем, хәҙер ҙә шул һүҙемдә ҡалам.

Һаҙый. Ысынлап та, һеҙ ул йыйылышта нәмәләр һөйләштегеҙ һуң?

Моталлап. Колхозға инмәҫкә, колхозға яҡшы ерҙәрҙе бирмәҫкә, нисек кенә булмаһын, колхоз милкен туҙҙырырға, *(ҡаранып)* ә кәрәк булғанда, алдан һикереп йөрөгәндәрҙең аяғын ҡыҫҡартырға, тинеләр.

Һаҙый. Быға һин дә риза булдыңмы?

Моталлап. Ахырын алла үҙе хәйерле итһен. Колхозға инмәҫ өсөн, мин дә риза булдым.

Һаҙый *(үҙ-үҙенә)*. Быныһы шәп... *(Моталлапҡа.)* Шулай, Моталлап бабай. Һеҙ күргән, күпте ишеткән кеше. Донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған кеше. Һеҙҙең һүҙҙәр бөтәһе лә дөрөҫкә киләләр улар. Атайым әйтә, Моталлап ҡорҙаш менән бик татыу, бергә-бергә ғүмер иттек, һәйбәт, күпте күргән, тәжрибәле кеше, ти. Инде, ти, ҡәберебеҙ йәнәшә булһын инде, ти.

Моталлап. Булғандыр, донъя булғас, төрлөһө булғандыр. Бергә наборға барҙыҡ, приемға бергә индек, күрәһең, тәҡдирҙә шулай яҙғандыр. Мин һалдатҡа эләгеп 4 йыл йөрөп ҡайттым, ә атайың эләкмәне. Таҙа булһа ла, алманылар. Мин ҡайтыуға инде, атайың башҡа сығып, үҙенең дәүләте лә бик ҡалынайғайны.

Һаҙый *(әллә нәмә иҫенә төшкән кеүек төрлө яҡҡа ҡарай)*. Моталлап бабай, быға тиклем дә йәшереп, боронғо ғәҙәтте һаҡлап килдем. Бына хәҙер оят булһа ла әйтергә тура килә инде...

Моталлап. Нәмә оялып торорға, егет булып буйға үҫкәнһең инде, әйт.

Һаҙый *(оялған булып)*. Беҙ Алма менән күптән танышып йөрөй инек тә, бына хәҙер эштәр сыуалып китте...

Моталлап. Һуң?

Һаҙый. Алманы Әхтәм ҡоторткан. Колхозға алам. Колхоз бисәһе итәм, ти.

Пауза.

Мин тик Алманы ғына йәлләйем. Һәйбәт ҡыҙ, исмаһам, колхоз бисәһе булмаһа ла тағы бер хәл ине. *(Тауышын үҙгәртеп.)* Унда бит бөтә нәмә общий, шулай булғас, бисәләр ҙә общий буласаҡ.

Моталлап. Туҡта әле, туҡта, һин ысынды һөйләйһеңме, әллә...

Һаҙый *(бүлдереп)*. Бына кәрәк булһа, атайым менән йәштәш оло кешене алдап тороргә мин тиле түгел дә баһа.

Моталлап *(борсолоп)*. Кем әйтте!

Һаҙый. Үҙем күрҙем, бая ғына ошонда Әхтәм менән ултыралар ине, малайҙар килеп инеү менән, бөтәһенән дә ҡосаҡлатып, *(ҡаранып)* хатта үптереп сыҡты. «Был колхоз бисәһе буласаҡ», ти, үҙе көлә.

Моталлап *(асыуланып)*. Ах, сусҡа, әт, собака. Шул ячейка Әхтәм — Харис малайы шулай ҡыланамы?

Һаҙый. Ул үҙе генә булһа, тағы бер хәл ине. Улар бит общий.

Моталлап *(ҡаты асыуланып)*. Булмаҫ, булмаҫ, минең ҡыҙым колхоздыҡы булмаҫ, Харис малайына, колхоз көтөүенә үҫтергән ҡыҙым юҡ.

Һаҙый. Моталлап бабай, артыҡ ҡыҫҡырынма. Аҡрыныраҡ.

Моталлап *(баҫыҡыраҡ, ләкин асыулы тауыш менән)*. Шул, шул Харис үҙе ҡоторталыр, үсен алмаҡсы булалыр. Йәш саҡта Харис менән беҙҙең арала Әхтәм менән һеҙҙең аралағы кеүек хәлдәр булғайны. Эт, сусҡа, сусҡа. Онотмай, яуыз.

Һаҙый *(тыныслandырырға тырышып)*. Ярай, хәҙергә ҡыҙма әле. Насип булһа, туйлап та ҡуйырбыҙ. Атайым әйтә: «Туй тигән булып, бер-ике эре малды күршегә, Моталлап ҡарттарға, бирергә кәрәк булыр», — ти. Ике һыйырҙы әллә ҡасан уҡ билдәләп тә ҡуйҙы.

Моталлап. Колхозға бирер ҡыҙым юҡ. Харис Әхтәме өсөн үҫтергән ҡыҙым юҡ. Үлһәм дә, уға бирәсәгем булмаҫ. Ҡара, шайтанды, атаһының үсен алмаҡсы булалыр...

Һаҙый. Агроном килгән, колхозды нығытырға маташа, ти. Инмәй ҡалыусыларҙы индерәләр, ти.

Моталлап. Харис Әхтәме әртиленә, колхоздарына инәһем юҡ. *(Ҡыҙып.)* Башым бөтһә-бөтөр, колхозға

ҡыҙымды бирмәм, әгәр һүҙем еренә етмәһә, бына, бүркемде алып башыма кейәһе булмам, антым шул булыр. *(Бүркен ергә ора, тыны ҡыҫыла, хәлһеҙләнә.)*

Һаҙый. Бында бер генә юл. *(Ҡаранып.)* Мин һиңә өсөнсө көн әйткән һүҙемде тағы ла ҡабатлайым. Әхтәмде алып ташларға кәрәк. Юҡһа, һин ни тиклем ант итһәң дә, Алманы харап итерҙәр.

Моталлап *(хәлһеҙ рәүештә)*. Алмамды, минең бешеп еткән Алмамды харап итерҙәр... Булмаҫ, бирмәм. Үҙем һау саҡта Алмама ҡул һүҙҙырмам. Лутчы үҙем... *(Хәлһеҙләнә.)*

Һаҙый. Бабай, хәлһеҙләндең буғай, мә әле. *(Кеҫәһенән бер шкалик араҡы сығарып йоттора.)*

Моталлап. Һин йәш егет. Әйт, был бәләнән нисек ҡотолорға?

Һаҙый. Әҙме әйттем инде, Әхтәмде алып ташларға. Ә унан һуң мал алышыу, туй...

Моталлап. Алып ташларға. Мин был һүҙҙе күп уйланым, ә хәҙер. *(Хәлһеҙләнә.)* Әйе, әйе...

Һаҙый *(тирә-яғына ҡарап)*. Мин хәҙер киләм. Һин ошонда тороп тор. Мин хәҙер. *(Сығып китә.)*

Моталлап. Бына, иркә ҡыҙ туйҙа кикерә ти. Аҫраным, үҫтерҙем, кейендерҙем, буйға етте. Колхоз бисәһе булырға, общий үптереп, общий бисә булырға! Юҡ-юҡ, атайың барында колхозда булмаҫһың, колхоз бисәһе лә булмаҫһың... Етмәһә, тағы кемгә күҙе төшкән... Әхтәмгә, Харис улына... Булмаҫ, Харис малайы минең кейәүем булмаҫ.

Һаҙый *(инеп тирә-яғына ҡарана)*. Моталлап бабай, вәғәҙә — иман, ант — йәнде ҡорбан итеүҙе һорай. Бына һиңә тәүге кейәү бүләге. Ә ҡалғаны һуңынан. *(Ең эсенән сығарып, арба кендеге бирә.)* Шуның менән Әхтәмдең *(башын күрһәтә)*... Һаҡ бул. Ул хәҙер бынан бер үҙе уҙырға тейеш. Һаҡлап тор ҙа артынан...

Моталлап *(кендекте ала, үҙе ҡалтырана)*. Антым ошо ерҙә булһын, антымдан кире ҡайтһам — иманым зәгиф булһын. Колхоз өсөн үҫтергән ҡыҙым юҡ. Харискә киленгә үҫтергән балам юҡ.

Һаҙый. Хуш, мин киттем. Һаҡ ҡылан! *(Сығып китә.)*

Моталлап *(яңғыҙ ҡалып, кендек тоҡҡан килеш)*. Я алла, ниндәй ҡыйын, ниндәй ҡурҡыныс эш... Ошоноң менән, ошо кендек менән кеше ҡултер... Туҡта, нисек булды әле был... *(Ерҙә ятҡан бүркен алып.)* Ант иттем, алла исеме менән ант иттем, я хоҙа, үҙең ярлы-

ҡа... Нисек, нисек инде *(пауза, ҡалтырана)*... Юҡ! Харис малайына, колхозға бирер ҡыҙым юҡ!

Шул ваҡыт алыҫта, йыр, гармун тауыштары ишетелә, Моталлап тирәктәр араһына боҫа.

Й ы р: Ҡапҡан һалдым ҡаҡ боҙға, ҡама менән ҡондоҙға.
Ҡул һуҙмағыҙ һеҙ ҡыҙҙарға, улар хәҙер колхозда.

Бер аҫҫан шаулашып сәхнәнән уҙалар.

К ә р и м ә. Һыҙырһың шул, һыҙырһың, кружокта үҙен берәү ҙә саҡырманы бит.

И ш т у ғ а н. Саҡырманыҡ, тиң.

К ә р и м ә. Эйе шул, саҡырманыҡ. Уның кеүек бай малайҙарына ҡарағы ла килмәй әле.

Б е р ә ү. Ә көмөш тәңкә йыйырға барһаң.

К ә р и м ә. Алырһың уларҙан көмөш. Көмөш түгел, көлөн дә бирмәйҙәр улар.

И ш т у ғ а н. Бирмәһә, бирмәһендәр, көлөн күккә осорғас, бөтәһе лә ҡалыр әле.

Гармунын уйнай, тағы йыр башлана, сығып китәләр.

Й ы р:

Алмағастың алмаһын йыйып бөтөр, ҡалмаһын,
Фытыр, гөшөрҙәр булмағас, биҙгәк алды муллаһын.

М о т а л л а п аҡрын ғына сығып, уларҙың артынан ҡарап ҡала. Икенсе яҡтан йәштәрҙән арттараҡ ҡалған А л м а йүгереп барғанда, Моталлапты күреп, бер яҡ ситкә, тирәк төбөнә, йәшеренеп тороп ҡала. Моталлап уны күрмәй.

М о т а л л а п *(тешен ҡыҫып)*. Их, һеҙҙе. Сусҡалар, дуңғыҙҙар, эттәр! Ҡыҙҙарҙы колхоз итеп тә ҡуйғандар.

Пауза.

Булмаҫ, Әхтәмгә генә көсөм етер. *(Ҡалтырана.)*

Тышҡы яҡта һөйләшкән тауыш килә. М о т а л л а п тағы йәшеренә. Б и к с ә н т ә й, М о р а ҙ ы м, Ә х т ә м ҡыҙыу рәүештә һөйләшеп инәләр.

Б и к с ә н т ә й. Минеңсә, бөгөндән үк Тирмән тауы яғына ҡыуырға кәрәк. Мешать итеп ултырмаһындар.

Ә х т ә м. Юҡ, улай ашығырға ярамай.

Б и к с ә н т ә й. Ә мин әйтәм ашығырға, ҡыуырға, колхозға инмәгәндәрҙең бөтәһен дә ҡыуырға кәрәк тим. Беҙгә мешать итмәһендәр тим, как же әйтмәҫкә...

Әхтәм. Колхоз төҙөлгән, таралырға тейеш түгел. Ә кемдәрҙе ҡайҙа күсереү-күсермәү тураһында, тағы ла әйтәм, бында юл уңайында ғына һөйләшеп булдырып булмаҫ, тейешле урында тейешле кешеләр тураһында һөйләшербеҙ.

Биксәнтәй. Теләһәгеҙ ни тиегеҙ, мин колхозды таратмау өсөн бөтәһенән элек уны байыҡтырырға, колхозға инмәүселәрҙең ерен алып, ерҙе күбәйтергә, малын күбәйтергә кәрәк, тим. Даже һыйырҙарҙы ла дәйәмләштерергә кәрәк, как же, шуның өсөн колхоз ул.

Мораҙым. Ә кешеләрҙе арттырыу.

Биксәнтәй. Ана ячейка *(Әхтәмде күрһәтә)* комсомолка ҡыҙҙарын да колхозға ылыҡтырып бөтөрмәгән. Ә мин булһам, әллә ҡасан бына *(беләген һуҙып, көрәп килтергән кеүек)* бөтәһен дә колхоз итер инем... Как же, шулай итмәгәс, булмай ул.

Әхтәм. Мораҙым ағай, дөрөҫ әйтәһең, иң элек кешеләрен күбәйтергә кәрәк. Ләкин былай ғына түгел, һайлап алырға кәрәк. Ҡыҙҙар — комсомолкалар ҡасмаҫ улар. Улар инде бөтәһе лә беҙ колхоз ҡыҙы тип торалар. Тик аталары ғына әлегә яйға килеп бөтмәйҙәр.

Мораҙым. Зарар юҡ. Буржуй түгелдәр бит улар...

Биксәнтәй. Контрҙар, вот что!

Әхтәм. Йәгеҙ, тиҙерәк барайыҡ та, эште бөтөргәс, йоҡлайһы, иртә тороп, трактор аксия списогын төҙәтәһе, уны төшкә өлгөртәһе бар бит.

Биксәнтәй. Йәшһең бит. Бына ағайыңдар окоптарҙа аҙналар буйы йоҡламай торғайнылар, шулай булһа ла — түҙҙек, как же, шуның өсөн колхоз ул, түҙергә кәрәк.

Сығып китәләр. Моталлап Әхтәмдәр киткән яҡҡа ҡарай, Алма Моталлапты күҙәтә.

Моталлап. Киттеләр. Ярай бәхетең, малай, бер үҙең булманың. Тағы ла бер аҙ ризығың барҙыр, күрәһең. Ләкин күпкә булмаҫ, осорһың!

Пауза.

«Колхозға инмәгәндәрҙең ерен алып, ауылдан ҡыуырға кәрәк», — ти. Бына һүҙ. Ҡарап ҡарарбыҙ. Аҡтыҡ аяғың артыҡтыр. Мәңге-мәңге йәшәгән ауылдан ҡыуылырға мин катржан түгел. Справниктар заманында каторгаға ебәрә алмағанды — Моталлапты инде ебәрә алмаҫһығыҙ.

Пауза.

Көтәм, хоҙа юлында йөрөйөм. Алмам өсөн көтәм. Кайтмай булмаҫ. Алла исеме менән эйткән антым ошо ерҙә еренә еткерелергә тейеш. *(Кендекте артына тотоп, Алма торған тирәккә табанырағ китә.)*

Алма һиҙҙермәҫтән Моталлап ҡулындағы кендекте тартып ала. Моталлап кем икәнен абайламаҫтан, йәһәт кенә әйләнеп, Алманың үңәсенән һыға башлай.

Әйҙә, көс һынашайыҡ, кем еңер.

Алма тыбырсына, Моталлаптың ҡолағына йәбешә, ҡысҡырырға итә. Ләкин булдыра алмай. Ахырҙа бөтөнләй хәлһеҙләнә. Моталлап уны ебәреп, ҡарап тора. Тағы һуға.

Я хоҙай, үҙең ҡоткар. *(Кендекте алып, сығып китә.)*

А л м а *(оҙаҡ ятҡас, ҡулын кҙғата, башын ҡалҡытып маташа, тамаҡ төбө менән генә ҡысҡыра).* Коткарығыҙ-ҙ-ҙ, ҡоткарығыҙ. *(Бөтөнләй хәлһеҙләнеп башын ергә һала.)*

Аҡрын ғына шаршау төшә

ИКЕНСЕ ШАРШАУ

Колхоз төҙөлгәс, тәүге йылдар.
Тимерлек алды. Ватыҡ тәгәрмәс, һабан, тырма кеүек ауыл хужалығы ҡорамалдары, балта, сүкеш кеүек нәмәләр яталар. Артҡы планда бер эскәмйә ултыра. Һул яҡта тимерлек ишеге. Шаршау асылғанда, сәхнәлә бер кеше лә юҡ. Бер аҙҙан Э х т ә м менән И ш т у ғ а н һөйләшеп килеп инәләр. Әхтәмдең дә, Иштуғандың да ҡулында китап бар. Иштуған өҫтөнә комбинезон, ә фуражкаһына ҡуйып күҙлек кейгән. Ҡулында тракторға тағылма ҡорамалдар беркетелә торған бер тимер.

И ш т у ғ а н. Шулай, малай, бер өйрәнгәс, бер нәмә лә түгел. Гармун уйнаған кеүек.

Э х т ә м. Һин бигерәк тағы. Гармун кеүек тиҙ өйрәнеп булһа ине, бөтәһе лә тракторист булырҙар, курсҡа барып йөрөмәҫтәр, мунсаға инерҙәр ҙә ҡараңғыла өйрәнерҙәр ине.

Ултыралар.

И ш т у ғ а н. Улай булғас, нисек тип әйтәйем һуң, но минең өсөн хәҙер тракторҙы йөрөтөү гармун уйнау кеүек кенә.

Пауза.

Ах, уның тауышы... Моторы һәйбәт эшләһә, геүләп кенә тора ул. Хәҙер бит төн бик матур. Иртәнсәк тағы ла йәм-

лерәк була. Таң атып килгәндә, сменаға бараһың. Ә трактор, трактор гөрләмәй, һайрай ғына. Бына шул саҡта, уның тауышына ҡушылып, йырлай-йырлай яланға ашығаһың. Күңелле, малай. Валлаһи, күңелле, ҡыҙҙар яныңа барған кеүек, дәртләнеп бараһың.

Әхтәм. Ә шулай ҙа ҡыйын саҡтары булгандыр?

Иштуған. Булмаған ҡайҙа. Беҙҙе бер оҙон Петров тигән механик өйрәтте. Әй уҫал ине. Былай атлап килә лә *(тороп атлап күрһәтә)*: «Был нәмә? Ниңә кәрәк ул? Ул нәмәнән эшләнгән? Фәлән-төгән», — тип аптыратып бөтөрә торғайны. Бер ваҡыт, малай, йөрәтә башланыҡ бит. Мин ултырып, бер яҡҡа гөрләтеп сығып киттем. Әй барам, малай, әй барам. Өсөнсө скоростҡа һалып алғанмын да, әй барам... Ҡараһам — бер телеграф баганаһына етеп барам. Йәһәт кенә туҡтарға булдым... Онотҡанмын бит, малай. Әле ул педалгә, әле был педалгә баҫам. Скорость тотҡаһын да борғолап, әле алға, әле уңға, әле һулға ятҡырып ҡарайым... Юҡ бит, әй. Шунан теге механик үҙе йүгереп килде лә «шып» туҡтатты ла ҡуйҙы. «Плохо, плохо, если так будешь, трактористом не будешь», — ти. «Как не будешь, мин әйтәм. Учитьсе будем», — тим.

Әхтәм. Ә хәҙер үҙең кешене өйрәтә алаһыңмы һуң?

Иштуған. Алам, бына китабы бар. Унда бөтәһе лә асыҡ әйтелгән. *(Китапты асып, һүрәттәрен күрһәтә.)* Бына быныһы шәмдәре, быныһы карбюраторы, бына быныһы скорость тотҡаһы. Бына быныһы моторы. Иң важныйы шуныһы инде уның. Шул йөрәтә бит.

Әхтәм. Мин дә уҡырға китергә йөрөйөм әле.

Иштуған. Ҡайҙа?

Әхтәм. Колхоз мәктәбенә. Ике йылға китәм.

Иштуған. Ну, ике йыл булғас, трактор ғына түгел, автомобилде лә өйрәтерҙәр әле.

Әхтәм. Эйе, өйрәтерҙәр *(ҡулындағы китабын күрһәтеп)*. Бына был китапты шуға күрә йөрөтәм дә. Аҙмаҙ булһа ла, ваҡыт тура килгәндә, уҡыштырғылайым.

Иштуған. Ул да тракторҙы өйрәтәме ни?

Әхтәм. Юҡ, был тракторҙарҙы өйрәтмәй. Политграмота был.

Иштуған. Улай икән. *(Пауза. Ситкәрәк ҡарап.)* Ә, ана Биксәнтәй ағай ҙа килә. Бына хәҙер генә бешереп алырбыҙ.

Биксәнтәй килеп инә.

(Уға ҡаршы барып.) Биксәнтәй ағай, тиҙ генә ошоно эшләп ебәрәйек әле.

Биксәнтәй. Ҡустым, мин бит ундай тракторҙарҙы төҙәтә алмайым. Йә боҙоп ҡуйырмын. Ана, һин уны Кузьмаға алып бар. Ул, исмаһам, самауыр, сепарат төҙәтеп маташа.

Иштуған. Юҡ, Биксәнтәй ағай, ул трактор часы түгел. Һабанды тракторға беркетә торған бер простой ғына тимер. Булмаһа, үҙем дә маташтырырмын. Тик ҡоралыңды ғына бир.

Биксәнтәй. Улай булһа ярай ҙа, боҙоп ҡуйып, бәләгә ҡалмайым, тим.

Пауза.

Хәйер, пушка кеүектер әле. Пушканың да эсен аҡтарып, частарын айырғылап ташлай ҙа тағы йыйып ҡуя торғайныҡ... Шулай ҙа бер ваҡыт, ездовой булып йөрөгән саҡта, замокты йыйнай алмай аптыраганым бар. Ә аҙаҡ, номерга күсерелгәс, мылтыҡтан да еңел булып китте. Әйҙә, хәҙер ҡыҙҙырып ташларбыҙ.

Иштуған менән икеһе тимерлеккә инеп китәләр. Әхтәм, китабын алып, эскәмйәгә ултырып, уҡып маташа.

Әхтәм *(уҡый)*. Крәҫтиәндәр колхозға ҡапыл ғына килеп инмәнеләр. Улар яңы юлдың, колхоз юлының, иҫке юлдан яҡшыраҡ булыуына бөтәһе лә берҙәй төшөнмәнеләр. Уйландылар, сайҡалдылар. Ә беҙгә ят булған элементтар быны ныҡ файҙаландылар. *(Китаптан башын алып.)* Әйе, шулай булды шул, крәҫтиәндәрҙең бер өлөшө колхозға инмәй сайҡалды. Ә шулай ҙа, аңлағас, инделәр... Әйе, колхоз төҙөнөк. Ләкин ауыр булды. *(Китабын ябып ҡуя. Күҙҙәрен алыҫҡа, бер нөктәгә терәп уйға ҡала. Бер аҙҙан аҡрын ғына һыҙғыра башлай.)*

Шул арала Кәримә килеп инә лә бер аҙ тыңлап тора. Әхтәм уны күрмәй.

Кәримә. Моңаяһың, Әхтәм, ә?

Әхтәм *(уға ҡапыл боролоп)*. Һин ҡасан индең?

Кәримә. Күптән үк инде. *(Ҡаршыһына бара.)* Һине ҡарап торҙом.

Әхтәм. Ҡарап тормайҙар уны...

Кәримә. Ниңә, ярамаймы ни?

Пауза.

(Әхтәм янына ултырып.) Һин Алманы һаман онотмайһың, ахыры.

Әхтәм. Шулай шул... онота алмайым уны.

Пауза.

Ҡара әле, Кәримә, башҡалар тураһында һөйләшәйек... Әллә нисек, Алма исеме сыҡһа, йөрәк ярһып, күңел бөҙолоп китә, эс бошамы шунда, әллә нисек ҡыйын була.

Пауза.

Бик булмаһа, яландағы эштәр, ураҡ урыу тураһында һөйләшәйек.

Кәримә *(әллә ни әйтергә була ла тукталып ҡала)*. Ҡырҙа ни, эшләйҙәр... Бөгөн 5—6 бисә эшкә сыҡмағандар. Ә ҡалғандары донъя аҡтарып эшләйҙәр. Әле төшкө ашҡа ғына туҡтағанбыҙ...

Шул арала тимерлектән Иштуған менән Биксәнтәй килеп сығалар. Кәримә тороп ситкә китә.

Биксәнтәй. Була ул, ҡустым, була. Пушканың да 200-ләп часы бар. Тракторҙың да шунан әллә ни артмайҙыр. Уның бөтәһен дә белеп бөтмәһәң дә ярай бит. Беҙҙең ездовойҙар пушканың шул лафетын, щитаһын, дулаһын ғына яҡшы белә торғайнылар. Ә шулай ҙа үҙҙәре: «Артиллерисбыҙ», — тип йөрөй торғайнылар.

Әхтәм. Биксәнтәй ағай, әллә тракторға өйрәнмәксе булаһыңмы?

Биксәнтәй. Как же... Колхозын төҙөгәс, колхоздың машинаһын да белергә кәрәк. Хәҙер бит инде колхозды төҙөйөм тип йөрөйһө юҡ. Үҙең әйтмешләй, нығытырға ғына кәрәк. Тракторҙар ҙа йыл һайын күбәйәләр. Тракторист та кәрәк булыр, как же, унһыҙ булмай ул.

Иштуған. Булды. Биксәнтәй ағай, үҙеңде тракторист итеп контрактовать ит. Ә мин буксирға алырмын. Ярай, хуш.

Биксәнтәй. Хуш.

Иштуған сығып китә.

Әхтәм. Биксәнтәй ағай, мин теге валиктарҙы юл ыңғай алып сығайым тип килгәйнем.

Биксәнтәй. Һуң, һинең валиктарың әле артыҡ бит.

Әхтәм. Булһын, артыҡ булһын, ер яңы, аттар көр, һынып-нитеп китеүе бар бит.

Биксәнтәй. Һыныһа ла бөтмәҫ, артығын ғына 20 пар эшләнек бит.

Әхтәм. Нәмә уға һатыулашып торорға, ҡыйын эшме ни ул. Әҙер булмаһа, әйҙә, үҙем дә ярҙам итермен.

Биксәнтәй. Һинән ҡотолоп булмаҫ, әйҙә, күңелең булһын, ал! Үҙең әйтмешләй, минең дә запас бар, эшләп ҡуйғанмын.

Көлөшөп тимерлеккә инәләр. Кәримә яңғыҙ уйланып ҡала.

Кәримә. Алма... ти... Онотмай. Ике йыл бит инде... *(Уйлана.)* Йома көн, кис ине. Икәүләп көндөҙ һыуға барҙыҡ. Һыу индек тә, киске уйынға сығырға булдыҡ... Кис булды. Йыйналдыҡ, уйнаныҡ. Гармун менән һыу буйына барҙыҡ та кире ҡайттыҡ. Эйе... Кире ҡайттыҡ... Кире ҡайтҡан ваҡытта ул бар ҙа кеүек, юҡ та кеүек. *(Пауза.)* Белмәйем... Ә икенсе көндө инде Алмаһыҙ ҡалдыҡ... *(Пауза.)* Эйе, хәҙер ул юҡ инде. Ә Әхтәм уны һаман да онотмай. *(Пауза. Йырлай.)*

Һауаларҙа осҡан, әй, тургайҙың
Ҡуныр ере бөҙрә тал микән.
Һайрар тургай кеүек айырылыштыҡ,
Күрешер көндәр алда бармы икән?

Биксәнтәй аҡрын ғына сығып, тыңлап тора.
Әхтәм инә, валиктар күтәргән.

Кәримә. Һин ҡайҙа бараһың?

Әхтәм. Олстау аҫтына, пар еренә барам.

Кәримә. Беҙ ҙә шунда. Суҡтал янындабыҙ. Улай булғас, бергә киттек.

Әхтәм. Мин бит ат менеп барам.

Кәримә *(күңелһеҙләнгәндәй)*. Шулаймы ни?

Әхтәм. Йә, рәхмәт, Биксәнтәй ағай. Хуш. *(Кәримәгә ҡарап.)* Әйҙә, теләһәң, арба ла егербеҙ.

Кәримә. Шаяртмайһыңмы? Әйҙә, киттек.

Сығып китәләр.
Биксәнтәй башын һелкеп көлөп ҡала. Бер аҙҙан тимерлеккә инеп китә.
Ә икенсе яҡтан ҡулына йүгән, һуҡа тимере тотоп, Моталлап килеп инә. Тирә-яғына ҡарана. Аҡрын ғына тимерлектең ишегенә башын ҡуйып тыңлай һәм, бер аҙ торғас, ҡысҡыра.

Моталлап. Биксәнтәй, Биксәнтәй ҡустым!

Биксәнтәй *(сығып)*. Аһа, беҙгә ҡунаҡ килгән икән. Нихәл, ни эш бөтөрөп йөрөш?

Моталлап. Әллә ни эш юҡ юғын да, тик бына тыңлаһағыҙ, бер йомош менән килгәйнем.

Биксәнтәй. Әйтеп ҡара, хәлдән килһә, ҡарарбыҙ.

Моталлап. Бына, Шәңгәрәй менән һабандаш булып арыш сәсергә, ер һөрөргә, инек тә, һабаныбыҙҙың төрәне тупаҡ икән. Мөмкин булһа, *(төрәнде күрһәтеп)* шуны йоҡартып бирер инең.

Биксәнтәй *(төрәнде ҡарап)*. Моталлап ағай, быны йоҡартып тормайым. Бына колхоздың артыҡ тимер һабаны бар, рәхим ит, теләгәнсә эшлә, һуңынан, эшең бөткәс, кире ҡайтарып ҡуйырһың.

Моталлап *(аптырап)*. Нисек инде ул?

Биксәнтәй. Шулай, һеҙгә, яңғыҙаҡтарға, ярҙам булыр. Атыңды егеп кил дә алып кит. Бик һәйбәт, килешә торған һабан ул.

Моталлап *(шатланып)*. Рәхмәт, бик рәхмәт. *(Кеҫәһенән бер нисә тырма теше сығарып.)* Ярлыға яҡты йөҙ күрһәтһәң, ямаулыҡ һорай тигәндәй, Биксәнтәй ҡустым, ошоларҙы ла ослап бирә алмаҫһыңмы?

Биксәнтәй. Нисәү кәрәк?

Моталлап. Күп кәрәк тә бит, шуларҙы ғына булһа ла ослаһаң етер.

Биксәнтәй *(тимерлектән тырма тештәре сығарып)*. Мә, бөтәһе 12 теш, бер тырмалыҡ.

Моталлап. Ҡуй, Биксәнтәй ҡустым, быға минең хәлем дә етмәҫ...

Биксәнтәй. Кәрәкмәй, бер тинең дә кәрәкмәй. Беҙ бай, как же, шуның өсөн колхоз ул.

Моталлап. Нисек инде ул — кәрәкмәй.

Биксәнтәй. Шулай, кәрәк түгел. Беҙ бындай ярҙамды яңғыҙаҡтарға хәҙергә күрһәтергә тейешбеҙ.

Моталлап *(шатланып)*. Биксәнтәй ҡустым, ниндәй рәхмәттәр әйтергә лә белмәйем. Әллә шаяртаһың, әллә...

Биксәнтәй. Һине шаяртырға, һине алдарға мин кулак түгел, мин колхозсы, как же, колхозсы-тимерсе мин!

Пауза.

Бына беҙҙең тимерлекте, колхоз тимерлеген, ҡара әле.

Тимерлектең ишегенән ҡарайҙар.

Моталлап. Бик һәйбәт икән. Ҙур, яҡты. Әллә ниндәй машиналарығыҙ ҙа бар икән...

Биксәнтәй. Как же, бар шул, шуның өсөн колхоз бит ул. Тракторҙарҙы ла эшләйбеҙ бит...

Моталлап. Тракторҙарҙы эшләйбеҙ, тиһеңме?

Биксәнтәй. Как же, эшләмәй. Әле генә Иштуған менән бер тракторҙы эшләп ебәрҙек әле.

Моталлап. Ул малай ҙа шулай оҫтарып киттеме ни?

Пауза.

Йәштәр шул, йәштәр. Улар зирәк булалар. Бер күргәнде «һә» тигәнсе әлеп алалар.

Ултыралар.

Биксәнтәй. Ҡарт булһаҡ та, беҙ ҙә бирешмәйбеҙ әле. Колхозын төҙөгәс, уныһына ғына бирешеп торор булмаҫ.

Моталлап. Әйе, һеҙ колхоз төҙөп ебәрҙегеҙ инде. Ахыры ни булыр?

Биксәнтәй. Ахыры ла колхоз булыр. Улай һөйләү кулак һүҙе генә ул.

Моталлап. Ни эшләп кулак һүҙе булһын, мин һөйләйем бит, үҙемдеке.

Биксәнтәй. Үҙең һөйләһәң дә, кулак һүҙе шул. Улар әйтәләр, һеҙ ҡабатлайһығыҙ.

Моталлап. Биксәнтәй ҡустым, бер һүҙ әйтер хәл юҡ, ҡыҙаһың да китәһең.

Пауза.

Әйт әле, быйыл да игендәрегеҙҙе уҙған йылғы кеүек бүлеп алаһығыҙмы? Әллә ҡаҙна аламы?

Биксәнтәй. Как же, бүлеп тә алабыҙ, тейешлеһен государствоға ла бирәбеҙ.

Моталлап. Һыйырҙарҙы ҡалай итәһегеҙ? Колхозниктарҙың һыйырҙарын фермаға алаһығыҙмы? Әллә...

Биксәнтәй *(ҡаты ғына итеп)*. Юҡ, алмайбыҙ.

Моталлап. Ә һуң үҙең, алабыҙ, ферма төҙөйбөҙ, тигәйнең бит.

Биксәнтәй *(көлөп)*. Әйтелгән дә бөткән. Дүрт аяҡлы ат та һөрөнә бит.

Пауза.
Моталлап нимәлер уйланған кеүек тора.

Моталлап. Улай икән...

Биксәнтәй. Как же, шуның өсөн колхоз ул. *(Тәмәке төрә башлай.)*

Моталлап. Әле беҙҙең ауылда колхозға инмәүселәр нисәүләп бар?

Биксәнтәй. Моталлап ағай, һин әллә нәмәләр һорай башланың. Кәрәк булһа, сыҡ та һана. Уларҙы

һанап торорга минең вакыт юк. Беҙ колхозник, ә кол хозда эш күп...

Моталлап. Улай булһа, бөттө. Әйткәндәреңә лә рәхмәт.

Пауза.

Колхоз төҙөгән саҡта ла, улар һеҙгә бик күп туҡылғайны, тиһәңсе.

Биксәнтәй. Эйе, Моталлап ағай, күп һөйләнек, күп эшләнек, тик бына һеҙҙе генә төшөндөрөп булманы. Исмаһам, Алмаң да юк. Ул булһа, бәлки, быға тиклем колхозда ла булыр инең. Ә хәҙер, уттай эш сағында, яңғыҙың ситтә йөрөйһөң.

Моталлап *(ауыр һулап)*. Әй, Биксәнтәй ҡустым, ул Алманы иҫкә төшөрмәһәңсе... Янған йөрәкте яндыраһың шул. *(Илай башлай.)* Ярай, һабанды килеп алырмын. *(Күҙен һөртә-һөртә сығып китә.)*

Биксәнтәй. Хуш, ингеләп йөрө. *(Һыҙғырына, шунда ятҡан һабандарҙың төҙөктәрен ҡарай.)*

Шул ваҡыт Сергей менән Мораҙым килеп инәләр.

Мораҙым *(Сергейға)*. Бына, иптәш агроном, һин тракторҙы тиҙ булмаҫ тип әйтә торғайның. Күрҙеңме хәҙер?

Сергей. Да, ошибка миндә. Сөнки беҙ уҡығанда, ул тракторҙарҙың Америкала сыға башлауы ғына яҙыла ине. Бына әлегеләй генә хәтеремдә: бер газетала «Американың бер фермере бик ҡиммәт хаҡҡа Фордтан бер трактор алған икән. Ул тракторға бик күп кәрәсин, бензин кәрәк булған. Трактор йөрөтөүсеһен дә шул заводтың үҙенән ҙур жалование менән алған икән. Трактор һөрөр өсөн ҙур ер кәрәк булғанға күрә, фермер үҙ ерендәге бөтә ағастарҙы ҡырҡтырған икән», — тигән хәбәр баҫылып сыҡты. Һәм күп тә үтмәне, шул турала бер профессор лекция ла һөйләне.

Биксәнтәй. Иптәш агроном, ул замандың профессорҙарына ышанһаң, башһыҙ ҡалыуың бар. Бына беҙҙе аяҡһыҙ ҡалдырҙылар бит.

Сергей. Как то есть?

Биксәнтәй. Как же. Ул лекция тигән нәмәләрен германды, австрҙы бер һелтәү менән еңәбеҙ тип, беҙгә лә һөйләй торғайнылар. Бына еңделәр. *(Аяғын күрһәтә.)* Ярай әле минең, ағас булһа ла, аяҡ бар. Ә күптәрҙең ул да юҡ. Хатта баштары ла юғалды бит.

Мораҙым. Иптәш агроном, уныһы шулай булһын. Бына урожай йыйыуҙы нисек еңербеҙ икән. Кешеләр аҙыраҡ бит. Етмәһә, бөгөн 5—6 бисә эшкә лә сыҡмаған.

Сергей. Һин председатель, эште ойоштороу яғын үҙең ҡара инде. Мин бит агроном. Урожай яҡшы булһа, миңә шул етә.

Биксәнтәй. Как же, *(ҡыҙып)* һин бит совет агрономы, совет аҡсаһын алаһың. Өйрәт беҙгә, юл күрһәт.

Сергей. Һауала азот та бар, кислород та бар. Ә улар икеһе ике нәмә. Шуның һымаҡ беҙҙең эшебеҙ ҙә ике төрлө.

Мораҙым. Әй шул азоттарың менән башты ҡатырҙың инде. Һинең азот-мазотыңда минең ни эшем бар. Бына һин шуны әйт: Колхозсоюз беҙгә уғыс машина бирәме, юҡмы? Әгәр бирмәһә — иген сереп ҡаласаҡ.

Сергей. Машиналарҙы Колхозсоюз бирмәй, ә Сельхозснаб бирә. Значит, был эшкә лә ҡыҫыла алмайым.

Биксәнтәй. Баш әйләндергес.

Сергей. Просто, ғәфү итегеҙ, мин бит уларҙы эшләргә теләмәгәндән түгел, улар береһе лә минең профессиям түгел, шулай булғас, минең улар артынан йөрөргә ваҡытым етмәй. Улар минең функцияға ла инмәйҙәр.

Биксәнтәй. Как же, хәҙер функция-мункциялап тораһы юҡ. Трактор төҙәтеү минең функцияға инмәй ҙә, ә мин тракторҙы төҙәтәм бит.

Сергей *(ҡыҙыҡһынып)*. Тракторҙы төҙәтәм, тиһеңме?

Биксәнтәй. Как же.

Сергей. Молодец, молодец. Ҡайҙан өйрәнеп өлгөрҙөң?.. Бик ҡыйынмы?

Пауза.

Ҡара әле, тағы ла төҙәтергә тура килһә, миңә хәбәр ит әле, аҙыраҡ өйрәнеп булмаҫмы.

Мораҙым. Мәсьәлә асыҡ, Сергей иптәш: «Минең ҡулдан бер эш тә килмәй, беҙ уҡығандар хәҙер бик түбән булып ҡалды», — тиһәң, иң яҡшыһы шул булыр ине.

Сергей. Да, брат, дөрөҫөн әйткәндә, шулай шул. Элекке земство заманы түгел хәҙер. Что элек, управлениенан сыҡмай инек. Бер помещикка бара ла, күбәләк, ҡорт тотоуҙан, сәскә йыйнауҙан уҙмай инек. Ә хәҙер улай түгел шул. Минераль ашламаларҙы ла, кешеләрҙе лә, тракторҙы ла белергә, улар менән эш итә алырға кәрәк.

Мораҙым. Улай ҙа үҙең сер бирмәүҙе яратаһың, ә? Әллә ниндәй водород-мадороттарға тотоноп китәһең.

Биксәнтәй. Агроном иптәш, әгәр ҙә мәгәр тракторҙы төҙәтергә тура килһә, хәбәр итермен. Тик, ҡара уны, водород-мадороттарың менән башты ҡатырмаҫ булһаң, подвода һорамаҫ булһаң һәм өйрәткән өсөн буш итмәҫ булһаң ғына кил. Ә мин, һин килгәнсе, Иштуғандан энәһенән ебенә тиклем белеп ҡуйырмын.

Сергей. Әһә, әле үҙең дә шул минең кеүек кенә икән.

Биксәнтәй. Ҡурҡма, һине өйрәтерлек кенә белермен.

Мораҙым. Ярай, өйрәнерһегеҙ. Әйҙә, Сергей иптәш, оҙатам да, унан яланға китәһе бар.

Сергей. Пожалуйста. *(Биксәнтәйгә ҡарап.)* Пока хуш.

Биксәнтәй. Хуш.

Ҡул биреп күрешәләр. Сығырға боролғанда ҡулына ҡамыт, ыңғырсаҡ, дилбегә тотҡан хәлдә, Моталлап килеп инә.

Моталлап. Әссәләмәғәләйкүм.

Мораҙым. Һаубыҙ. *(Сергей баш һелкә.)*

Моталлап. Ахыры, һеҙҙең юлды бүлдерҙем.

Мораҙым. Шулайыраҡ. Йомошоң кемдә?

Моталлап. Йомош, ҡустыларым, һеҙҙә.

Мораҙым. Һөйлә, тыңлап ҡарайыҡ.

Моталлап *(ҡамыттарын ергә ҡуйып, кеҫәһен аҡтарып, ҡағыҙ сығарып, Мораҙымға һуҙа).* Бына, бөтәһе лә шунда яҙылған. Колхозға инергә килдем. Ана, атым. *(Артҡы яҡты күрһәтә.)* Бына ҡамыттарым. *(Ҡамыттарҙы алғараҡ илтеп куя. Мораҙым хатты уҡый башлай.)* Инде, зинһар, бер яңғыҙымды ситкә ташламағыҙ. Алһағыҙ ҙа, алмаһағыҙ ҙа, бөгөндән, ана, атым... Ҡарт булһам да, көсөм бар, хәҙер үк ураҡҡа китәм.

Мораҙым. Улай икән.

Моталлап. Шулай, ҡустым Мораҙым, тормош атабабаларҙан бирле үҙгеҙгә мәғлүм. Бер һыйыр ҙа аттан уҙған юҡ. Һыңар өй, ситән аҙбар менән көн иттек...

Пауза.

Быға тиклем инмәгәнемә лә үкендем.

Пауза.

Инде, зинһар, мәхрүм итмәгеҙ. Унан башҡа ла мәхрүм булған, йөрәгем яраланған кеше. *(Илай башлай.)*

Мораҙым *(тыныслandырырға тырышып).* Ҡуй, ҡуй, Мөталлап ағай, илап ҡына кире ҡайтмай бит ул. Ҡуй-ҡуй...

Биксәнтәй. Мөталлап ағай, илама. Илаған булып маташыу — кулактар эше.

Сергей. Юҡ, Биксәнтәй иптәш, ошондай баланҙан яҙып ҡал әле, һин дә иларһың.

Мөталлап *(илауынан туҡтап).* Әй Биксәнтәй ҡустым, тораһың да шул кулактар тип бәйләнәһең. Аңламаным бит, белмәнем. Колхоздың былай икәнен белһәм, башта уҡ ингән булыр инем. Дөрөҫ, мин кулактар һүҙе менән колхозға инмәй йөрөнөм.

Мораҙым. Ә хәҙер?

Мөталлап. Ана шунда бөтәһе лә яҙылған... Хәҙер инде улар менән бер йотом һыу ҙа йотасағым, бер һыныҡ икмәк тә ҡабасағым юҡ.

Мораҙым. Ярай, ғаризаңды йыйылыш менән ҡарарбыҙ. Кис яланда дөйөм йыйылыш була, ҡалмай барырһың.

Мөталлап. Бер түгел, биш йыйылышҡа барырға ҡушһағыҙ ҙа ризамын, тик мәхрүм итмәгеҙ.

Шул арала Хат йөрөтөүсе килеп инә.

Хат йөрөтөүсе. Мә, Мораҙым ағай. *(Мораҙымға хат бирә.)*

Мораҙым *(хатты алып).* Бына, бына бик шәп булды әле. *(Малайға ҡарап.)* Һин бына ошо агроном ағайыңды үҙең менән алып китерһең.

Малай. Ярай. *(Китә.)*

Сергей. Значит, мин ошо малай менән китәм инде.

Биксәнтәй. Ул үҙ эшен һинән яҡшыраҡ белә.

Шул арала Мораҙым хатты алып уҡый һәм төҫөндә ҡапыл ғәжәпләнеү, аптырау күренә.

Мораҙым *(аптырап).* Туҡта-туҡта. *(Ашығып ҡабаттан уҡый.)* Эйе, эйе шулай. *(Ҡапыл ҡаты итеп хат йөрөтөүсегә ҡысҡыра.)* Эй, кире борол, бында кил.

Сергей. Ни бар?

Биксәнтәй. Нәмә, эллә...

Хат йөрөтөүсе килеп инә.

Малай. Нәмә?

Мораҙым *(ашығып).* Бар тиҙ, тиҙ килтер.

Малай. Нәмәне?

Мораҙым. Атаң башын, Әхтәмде килтер, тим.

Хат йөрөтөүсе сығып китә, башҡалар аптырап Мораҙымға ҡарайҙар.

Биксәнтәй. Нәмә бар?

Сергей. Что һин бик тревожный?

Мораҙым. Бына хәҙер белерһегеҙ, Әхтәм килһен.

Моталлап *(ҡыйынһынып)*. Мораҙым ҡустым, мин китһәм дә ярайҙыр.

Мораҙым. Бар кит, шулай ҙа әллә ҡайҙа булма, кәрәк булырһың.

Моталлап. Ҡамыттар ҡалһынмы?

Мораҙым. Ҡалһын, кәрәк булһа — аҙаҡ килеп алырһың.

Шул ваҡыт Әхтәм, Кәримә килеп инәләр. Моталлап сығып китә.

(Тыныслanғандай, Әхтәмгә ҡарап.) Әхтәм, Алманы ярата инеңме?

Әхтәм. Шуның өсөн саҡырҙыңмы?

Мораҙым. Эйе. Ләкин дөрөҫ һөйлә. Уйнап һорашмайым.

Әхтәм. Эйе, ярата инем.

Мораҙым. Ул һине?

Кәримә. Ул да уны ярата ине. Ул миңә төндәр буйы, көндәр буйы һөйләп йөрөй торғайны.

Пауза.

Уның һөйләгәндәрен яҙһаң, ҡалын бер китап булыр ине.

Мораҙым. Кәримә, һин ҡыҫылма әле. Әхтәм үҙе белә бит.

Әхтәм. Кәримә дөрөҫ әйтә. Беҙ уның менән тиҙ үк бергә булырға ла тейеш инек.

Пауза.

Мораҙым ағай, нәмә бар? Әйт, йөрәгем түҙмәй, ни булған?

Кәримә. Бахырҡайым, Алманың исемкәйҙәрен ниндәй генә телдәр һөйләмәй икән. Бергә үҫтек, бергә йәшәнек, бергә йөрөнөк. Бөтә, бөтә серҙәребеҙҙе һөйләшә инек...

Мораҙым. Әхтәм, йә, йәшермәй генә әйт. Эштәр нисек булды?

Шул ваҡыт Моталлап килеп, йәшеренеп тыңлай.

Әхтәм. Яҙ көнө ине. Беҙҙең туралағы аръяҡта үҫкән муйылдар ап-аҡ булып сәскә атҡайнылар. Бер ваҡыт кис беҙ, егеттәр, ҡыҙҙар, бергәләшеп, ана шул муйылдар янына сыҡтыҡ... Уйнаныҡ, бейештек, йырлаштыҡ... Уйын таралды. Беҙ ҙә йылғаға тиклем улар менән барҙыҡ та унан һуң ҡалдыҡ. Айҙың иң матур булып төшкән, сәскәнең иң күп еренә, һандуғастарҙың иң матур һайраған еренә барып ултырҙыҡ... Әйе, оҙаҡ ултырҙыҡ. Беҙ ҡайтҡанда, таң атҡан, тартайҙар алыҫта һуҙып-һуҙып ҡысҡыралар ине.

Тәүге танышыуыбыҙ ошонда булды. Ә һуңғы күрешеү — иң һуңғы төнөндә булды. Уныһында гармун килеп еткәнгә тиклем ана теге тирәктәр янында кистән үк булды. Һәм беҙ тиҙ үк бергә булырға вәғәҙә бирештек.

Сергей. Йәш саҡта була инде ул.

Биксәнтәй. Мораҙым, йә әйт инде. Йәштәрҙе талыҡтырма.

Мораҙым. Бында ят кеше юҡ. Бына ул, тыңлағыҙ. *(Хатты уҡый.)* «Таң» колхозы председателенә. Һеҙгә шуны белдерәм. Моталлап ҡыҙы Алманың башына ячейка секретары Әхтәм етте. Ул уны алам тип мыҫҡыл итте. Алма шуға ғәрләнеп һыуға ташланды. Мин уны үҙ күҙем менән күреп торҙом. Ләкин әйтергә ҡурҡтым. Бына әле лә ҡурҡам. Шуға күрә исемемде яҙмайым».

Әхтәм. Ялған! Комсомол билеты менән ант итеп әйтәм. Ялған! Алма! Уны мыҫҡыл итергә нисек батырсылыҡ итергә. Юҡ-юҡ, ялған! Мораҙым ағай, мин был эште буш ҡалдырмайым. Бир, бир, хатты. Хәҙер үк районға китәм.

Мораҙым. Йөрөүегеҙ хаҡ, һуңғы кистәрҙә бергә булыуығыҙ хаҡ.

Әхтәм. Хаҡтары хаҡ, ә бына был хат нахаҡ. Бир хатты, бир. Синфи дошман ҡулы был. Бир, ГПУ-ға китәм.

Мораҙым. Әхтәм ҡустым, былай ғына хатты бирә алмайым һәм тикшермәй ҙә ҡала алмайым.

Кәримә. Мораҙым ағай, башымды киҫергә бирәм, улар ғәйепһеҙ. Алма минән бер генә, бер генә һүҙҙе лә йәшермәй ине. Мин *(Әхтәмгә күрһәтеп)* быларҙың араһында нәмә барын Әхтәмдең үҙенән дә күберәк беләм. Был ғәйбәт...

Биксәнтәй. Һин ҡыҫылмаһаң да ярай.

Әхтәм. Бир хатты, бир!

Мораҙым. Хатты бирмәйем. Хәҙер бер ҡайҙа ла китмәйһең. Районға хәбәр итеп, эште тикшерербеҙ...

Биксәнтәй. Как же, ҙур эш бит.

Сергей. Да, серьёзный.

Әхтәм. Һеҙ миңә ышанмайһығыҙ, улай булғас, мин һеҙгә лә... ышанмайым; һеҙ ҙә...

Мораҙым. Нисек беҙгә ышанмайһың?

Әхтәм. Эйе, һеҙ ҙә... *(Һүҙен бүлдерә.)*

Биксәнтәй. Әһә-ә-ә, шулаймы ни, молокосос, әле шулай беҙҙе дошман күрәһеңме? *(Ҡулын күтәреп һуғырға килә.)*

Әхтәм артҡа сигенә, шул арала Моталлап килеп сығып, Биксәнтәйҙең беләгенән тота.

Моталлап. Юҡ, юҡ! Әхтәм ғәйепһеҙ! Минең ҡыҙым тураһында Әхтәм һыуҙан да саф.

Пауза.

Уға теймәгеҙ. *(Тауышы йомшара.)* Теймәгеҙ. Әхтәм саф. Ғәйеп, ғәйеп. *(Хәлһеҙләнә, сүгәләп илай.)* Ғәйептең төбө... Һаҙыйҙа!..

Бөтәһе бергә. Һаҙыйҙа?..

Моталлап. Эйе, ҙур баш Һаҙыйҙа!..

Шаршау

ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Ваҡиға бер ҡала янындағы ауыл хужалығы техникумы торлағының ҡыҙҙар тора торған бүлмәһендә бара. Уртала өҫтәл. Өс карауат һәм тумбочкалар, һәр карауат тапҡырында портреттар, фотокарточкалар йәбештерелгән. Был бүлмәлә Алма, Зифа, Маруся тораҙар. Шаршау асылғанда, Алма менән Маруся дәрес әҙерләйҙәр. Зифа төҙәтенеп кейенә. Алма — Бикә исемендә йөрөй.

Маруся *(китабынан башын алып кирелә)*. Бөгөн әллә ни эшләп баш эшләмәй. Был биологиялары ҡасан бөтөр инде.

Алма. Бына техникумды тамамлағас та, Маруся-ҡайым, биология ла, химия ла, математика ла булмаҫ. Эшләй башларбыҙ, яландарҙа, болондарҙа булырбыҙ. Сәскәләр, япраҡтар күп булырҙар. Ә бына шул саҡта инде бөгөнгө хәлдәр төш кеүек кенә булып ҡалырҙар. Йәп-йәшел болонда, мең төрлө сәскәләр араһында йөрөрбөҙ. Уларҙы кластарға, семьяларға бүлербеҙ. *(Ҡулы менән эшләп күрһәтеп.)* Быныһы бобовый, быныһы ивовый, быныһы злаковый...

Маруся. Бикә, һин бигерәк тә ҡыҙыҡ кеше инде. Бер нәмә булһа, элеп алаһың да, осона-осона алдағы

менән шатландыраһың. *(Ҡосаҡлап.)* Яратам, Бикә, үҙеңде, валлаһи, яратам. Һинең менән йәшәүе рәхәт. Һин шат, һин көләс.

А л м а. Эйе, мин шат.

Пауза.

Әгәр мин шулай шат булмаһам, үҙемде үҙем шатландырмаһам, Маруся дуҫым, ул ни була инде.

М а р у с я *(Зифаға)*. Гулятмы?

Зифа өндәшмәй, карауатына боролоп, көҙгөгә ҡарап, төҙәтенә.

Гулятмы, тим?

З и ф а. Эйе, булһа!..

М а р у с я. Беҙгә тыныс ҡала икән, беҙҙең дә егеттәр киләсәк тимәксе инем.

З и ф а. Шулай булғас, миндә ни эшең бар?

А л м а. Эшебеҙ юҡ. Берәйһе һорап-нитеп килһә, ҡайҙа икәненде белеп ҡалырға кәрәк бит.

З и ф а. Уныһы икс.

М а р у с я. Игрек түгелме ни?

З и ф а. Булһа.

М а р у с я. Улай икән. Ул икстарың нәмәгә тиңдер инде.

З и ф а. Уныһы билдәһеҙ. *(Боролоп ҡарап.)* Һеҙ ике билдәһеҙ һанды табыуҙы уҡығанһығыҙ бит.

А л м а *(бер нәмә иҫенә төшөп)*. Ә-ә-ә, Зифа, бөгөн репетиция буласаҡ бит. Һин оҙаҡламаҫҡа тырыш. Бер кешене көтөп тороу бик ҡыйын бит ул.

З и ф а *(кейенеп бөтөп)*. Булһа булыр. Йырламаһам да, бейемәһәм дә выпуск булғас, сығарырҙар әле. Ҡабаттан алып ҡалмаҫтар.

М а р у с я. Уныһы, үҙең әйтмешләй, икс. Зачетың минуслы булһа, һиҙмәй ҙә ҡалырһың.

З и ф а *(иркәләп)*. Әй ҡыҙҙар, йәшлек бит, барғы килә. Күргә килә. *(Ялыныраҡ килеп.)* Бына, әллә нисек инде, күргә килеп тик тора. Әллә нәмәләр һөйләшке килә... Ә барып күренеү менән бөтәһе лә юғала. Онотаһың. Ә йөрәк һаман да йыш-йыш тибә. Бара торғас үҙең дә һиҙмәй ҡалаһың, уның күҙенә туп-тура ҡарайһың да, өҫтәүенә, ул да һиңә ҡарап ҡуйһа, әллә ни эшләп оялып ҡуяһың.

М а р у с я. Ә ул нисек һуң, ул да шулай туп-тура ҡараймы?

З и ф а. Егет кеше бит, ул һынатмай. Ситтән-ситтән генә әләктереп һөйләшеп ҡуя ла — унан һүҙен уҡыуфәләнгә бороп ебәрә...

М а р у с я. Кайҙағы егет ул?

З и ф а. Калала уҡый.

М а р у с я.
А л м а. } Калала?

З и ф а. Эйе, ҡалала, комвузда уҡый.

М а р у с я. Улай, етмәгән ерең юҡ үҙеңдең. Ҡала егеттәренә ҡармаҡ һалып өлгөргән... Күптән танышмы?

З и ф а. Юҡ, күптән түгел әле. Ана бер көн ҡалаға барҙым бит, шул саҡта ғына осраштым.

М а р у с я. Кем һуң ул?

З и ф а. Бер егет инде шунда.

М а р у с я. Абау, беҙҙән йәшереп маташҡан була.

З и ф а. Ә үҙегеҙ, үҙегеҙ ҙә йәшереп йөрөйһөгөҙ бит.

М а р у с я. Абау, харап икән...

Пауза.

Әллә урамға сығып ҡысҡырырҙар тип ҡотоң остомо?

З и ф а *(яҡын килеп)*. Һөйләмәҫһегеҙме?

М а р у с я, А л м а *(икеһе бергә)*. Юҡ, юҡ...

З и ф а *(һөйләргә башлап)*. Ул былай булды: Шәмсиә менән комвузға вечерға барҙыҡ. Шунан уның танышының бүлмәһенә индек, унда бер генә егет ултыра. Иҫәнләштек тә ултыра бирәбеҙ. Теге егет тә ситтәрәк ултыра бирә. Шәмсиә минең бөйөргә төртә. «Ничево ғына бит»,— ти. Һәм, ысынлап та, ничево ғына күренә. Тик һүҙгә генә ҡушылмай ултырған була. Шәмсиә хәйләкәр бит ул. Тегеңә ҡарап: «Кәләшеңә хат яҙаһыңмы әллә, ниңә һөйләшмәйһең», — ти. Ә теге шаян егет булып сыҡты. Аҙ ғына боролдо ла: «Егеттәрегеҙ күреп ҡалһа, үҙегеҙгә ҡыйын булыр, тип һеҙҙе йәлләйем», — тип ҡырт киҫте. Шулай байтаҡ ултырғас ҡына, һөйләшә башланыҡ. Унан оҙаҡ та тормай вечер башланды. Унда барҙыҡ, бергә йөрөнөк. Ә аҙаҡтан дүртәүләп вокзалға төштөк, улар беҙҙе оҙатып ҡуйҙылар. Беҙ рабочий поезд менән ҡайтып киттек.

М а р у с я. Шул ғынамы?

З и ф а. Тағы нәмә?

М а р у с я. Кем икәнен, матурмы икәнен әйтмәнең бит.

З и ф а. Нисек тип әйтәйем, ничево ғына инде. Беҙҙең кластағы Фәзиҙеке кеүек сәсе ҡап-ҡара, маңлайы өҫтөндә генә урайы бар, төҫө лә ҡарараҡ. Ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, уртасараҡ буйлы. Фырт ҡына кейенгән егет шунда. Беҙҙең курстағы Зарифтыҡы кеүек, ҡолаҡ артында ғына яра урыны ла бар. Бала саҡта ат типкәндән ҡалған, ти.

А л м а *(ҡапыл ғына).* Кайһы ҡолағы артында?

З и ф а. Уңындамы, һулындамы шунда, оноттом.

А л м а. Сәсе ҡаты тиһеңме әле?

З и ф а. Ул тиклем белмәйем, һыйпап ҡараманым.

А л м а. Ә исеме кем?

З и ф а. Ай-яй, һин тағы бигерәк... уныһы һеҙҙең өсөн икс инде ул.

А л м а *(яҡын барып).* Дуҫкайым, әйт инде.

З и ф а. Әйтмәйем дә, көтмәгеҙ ҙә.

Пауза.

(Күкрәгенән сығарып.) Бына бер карточкаһына айыу майы һөрттөм.

Маруся, Алма карточканы алып ҡарамаҡсы булып һуҙылалар.

Юҡ, ҡыҙҙар, һорамағыҙ, бирмәйем! *(Ситкә китә.)*

А л м а. Зифа, күрһәт инде.

З и ф а. Юҡ, булмай *(йыраҡтан ғына күрһәтеп, үҙе арты менән ишеккә бара).* Бына, бына, күрегеҙ, күрегеҙ. *(Сығып китә.)*

А л м а *(киҫкен тауыш менән).* Зифа, күрһәт! Кем ул? *(Артынан сығып, бер аҙҙан әйләнеп инә).* Кире...

М а р у с я. Бикә, әллә танышмы?

А л м а. Юҡ та...

Пауза.

Әле генә, бына бөгөнгө кеүек хәтеремдә. Ул да килде, мин дә, өҫ-баш ауылса ғына ине. Дәресенән башта бик аҡһап барҙы. Аҙаҡтан арыу уҡ булды. Ҡыуып етте... Ә хәҙер, донъяһын онотоп, егеттәр артынан саба... Һөйә лә, һөйөлә лә белә...

М а р у с я. Әй Бикә дуҫкай, бөтә кеше лә һинең кеүек баҫалҡы булһа ла, килешеп бөтмәҫ ине. *(Китабын асып уҡырға тотона.)*

А л м а. Маруся, һинең һуң шулай йөрөгәнең бармы?

М а р у с я *(көлөп).* Бына кәрәк булһа, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ.

А л м а. Юҡ, ысынлап та?

М а р у с я. Юҡ, Бикә, ул тиклеме секрет инде уның.

Пауза.

Ә үҙеңдең?

А л м а. Бар.

М а р у с я. Бар! Бына, бына асыҡмағанға әсе икмәк, һөйләйһеңме? Әгәр һин һөйләһәң, мин дә һөйләп бирәм. Валлаһи, һөйләйем, бер ҙә икс, игректарға урын ҡалдырмай, грамматик яҡтан да бөтә правилалары менән дөрөҫ итеп һөйләп бирәм.

А л м а. Юҡ, Маруся, өс йыл тороп һөйләмәгәнде, хәҙер генә һөйләп бөтөрә алмам. Берәй көн иркенләп һөйләрмен. Выпускынан һуң.

М а р у с я. Була ул, мин көтәм. Ә үҙем тураһында теләһәң хәҙер үк.

А л м а. Юҡ, һинең дә ҡалһын. Репетицияға тиклем дәрестәрҙе әҙерләп ҡуяйыҡ та, иртәгә ял көндө иркенләп ял итербеҙ.

М а р у с я. Була ул.

Дәрес әҙерләргә тотоналар. Бер аҙҙан тыштан ишек ҡаҡҡан тауыш ишетелә.

А л м а *(риза булмай ғына)*. Кем ул?

К а р а ғ о л о в *(тыштан)*. Мин.

М а р у с я. Кем һуң һин?

К а р а ғ о л о в. Ҡараҕолов.

А л м а. Ниңә Аҡҡолов түгел?

К а р а ғ о л о в. Но, Аҡҡолов.

М а р у с я. Юҡ. Индермәйбеҙ. Беҙҙең Аҡҡоловтар юҡ.

К а р а ғ о л о в. Йә, шаярмағыҙ әле, асығыҙ.

М а р у с я. Исемең кем?

К а р а ғ о л о в. Бына кәрәк булһа, һеҙ паспорт пункты түгел дә баһа.

А л м а. Юҡ, әйт, унан һуң инерһең.

К а р а ғ о л о в. Иркәбай.

М а р у с я *(Алма менән бергә көлөп)*. Ниңә Иркәярлы түгел. Беҙ бай иркәләрҙе яратмайбыҙ.

К а р а ғ о л о в *(ишекте ҡаты ҡағып)*. Әй, әгәр асмаһағыҙ — ватам, валлаһи, ватып инәм. *(Ҡаты ҡаға.)*

М а р у с я. Ошонда ғына телефон бар бит, милицияға хәбәр ит, мине ҡыҙҙар индермәйҙәр, тиң.

Көләләр.

К а р а ғ о л о в. Йә, шаярмағыҙ инде. *(Ялына.)* Репетицияға әҙерләнәм. Үҙегеҙҙең выпуск та баһа.

Маруся, ишектең элгесен ысҡындырып, тоткаһынан тотоп тора. Ҡараҕолов тағы ла ҡағырға тотона.

Ватам, валлаһи, ватам.

Ҡыҙҙар ҡапыл ебәрәләр, Ҡараҕолов артҡа йығылып китә, ҡыҙҙар шарҡылдап көләләр.

Маруся. Һайт, ҡолап китмә.

Алма *(мыҫҡыл итеп)*. Ҡоламай, коридорҙы үлсәй.

Көләләр.

Ҡараҕолов. Ярай, ҡыҙҙар. Бының үсен һеҙҙән ошо биш көндә үк алырмын.

Алма. Һай... Һинең эш былай үҙе бишәр көнләп кенә икән.

Маруся. Аҙналап булмағас шәп инде.

Ҡараҕолов *(ултырып)*. Ярай, ҡыҙҙар. Ҡыҙҙар булыуығыҙ өсөн генә бер юлға ҡалдырып торайым. Әгәр малайҙар булһағыҙ, валлаһи, тип әйтәм, бына *(йоҙроғон күрһәтә)*. Берҙе һелтәр инем.

Маруся. Абау, бик ҡурҡыныс икән... Һин шулай уҫал да булаһыңмы ни?

Ҡараҕолов. Йә, ярар. Уҫаллыҡ өсөн 3 йыл уҡырға кәрәкмәй уға. Әйҙә, тиҙерәк шул репетицияһын яһап ташлайыҡ та, мин бөгөн киноға барам.

Маруся. Беҙҙе лә алып бар.

Ҡараҕолов. Пожалуйста, аҡса һеҙҙән, билет алыу минән.

Пауза.

Йә, нәмә ҡаттығыҙ? Репетиция ҡасан була?

Алма. Бына йыйылһындар ҙа, булыр.

Маруся. Әллә ошонда буламы?

Алма. Уныһын кәңәш итербеҙ.

Маруся. Әйҙә, һин — егеттәрҙе, мин — ҡыҙҙарҙы.

Ҡараҕолов. Юҡ, мин — ҡыҙҙарҙы, һин — егеттәрҙе.

Маруся. Ҡара, баяғы йығылыуыңдан ауыртҡаныңды белмәгәнһеңдер.

Сығып китәләр.

Алма *(яңғыҙ ҡалып, аҡрын ғына карауаты эргәһенә барып һүрәттәр ҡарарға тотона)*. Исмаһам, бер генә карточкаһы ла юҡ. Ә кешеләрҙең альбомдары тулы... Хәҙер инде мине бер кем дә белмәй. Юғалтҡандарҙыр, биш йыл аҙ ғүмер түгел бит. *(Пауза. Тәҙрәнән тышҡа ҡарай.)* Бына, 15 көн уҡыу ҡалды. Унан һуң техникум

бөтөрөп, ауылдарға, киң яландарға, гөрләп торған колхоз кырҙарына таралабыҙ... 5 йыл ғүмер күп түгел. Ә бер кем менән дә бәйләнмәй йөрөгән ғүмерҙең 15 көнө лә ауыр. *(Бер карточканы алып карап.)* Бына, тәүге курста сакта төшкән карточка. Кәүҙә йыуан, биттәр турһайып торалар. Ә аяк-кулдар... Таҙа булғанмын шул. *(Көҙгөгә карай.)* Әле лә таҙа. Тик йыйнаклана төшкәнмен. *(Маһайып шатланып.)* Эйе, уға байтак вакыт уҙған. Яңынан 15 көндән һуң апағыҙ агроном булып сыға. Кызык бит, әй, бер ауылдың һыңар өйлө, бер һыйырлы крәҫтиән кыҙы — иптәш агроном. *(Көҙгөгә карай.)* Шулай, иптәш агроном. *(Маһайып куя.)*

Шул арала көлөшә-көлөшә Карағолов менән Маруся килеп инәләр.

Карағолов. Кыҙҙар әҙер.

Маруся. Ә егеттәр килә лә башланылар инде.

Алма. Тимәк, эш беҙҙә генә калды.

Карағолов *(шаярып)*. Эйе, һеҙҙә генә калды, Бикә иптәш. Рәхим итеп, репетицияға барығыҙ әле.

Алма. Юхаланма...

Карағолов. Улай булһа, мандолинаны биреген ҙә, мин китәм.

Маруся. Тукта, Карағолов иптәш, бер генә көй уйнап ебәр әле.

Карағолов. Һуңламаһаң.

Маруся. Юк, һуңламайбыҙ, уйна инде бер генә.

Алма. Уйна инде, мә. *(Мандолинаны Карағоловка бирә.)*

Карағолов. Бая үҙегеҙ ялындырғайныгыҙ ялындырыуын да, ярай инде, бер йырлап та ебәрһәгеҙ — уйнайым. Әйҙә, яуызлык — һеҙҙән, якшылык минән булһын.

Алма. Ғәфү ит, Карағолов, беҙ һиңә яуызлык уйлағаныбыҙ ҙа юк.

Карағолов. Әле генә, ана, ишек төбөндә...

Маруся. Йә, иҫтәлек булыр... уйна...

Карағолов. Шәп иҫтәлек... *(Көлә. Мандолинала бер матур көй уйнай башлай. Бер аҙҙан кыҙҙар йыр менән кушылалар... Мандолина туктағас.)*

Маруся *(Карағоловка килеп)*. Отлично, абыныҫ, һөрөнөп, коридор буйлап колап тиккә генә йөрөмәгәнһең икән. *(Кул бирә.)*

Карағолов *(Марусяның кулын алып)*. Әһә, электеңме? *(Кулын каты итеп кыса.)*

Маруся. Уй, уй, етер. Кысма, Карағолов, уф, ебәр.

Караголов. Бына баяғы ҡараҡул шул инде ул. Ағайым, тиң.

Маруся. Уй-уй, ағайым, бәғерем, йәнем, ебәр, уф... *(Үрһәләнә.)*

Караголов. Икенсе улай ҡыланмам, тиң.

Маруся. Бөттө, бөттө, ғүмеремдә улай ҡыланмам.

Алма *(килеп йәбешеп)*. Караголов, етер инде.

Караголов *(уның да ҡулын әләктереп алып)*. Әһә, булды. Авансым ҡалдырғансы, икәүегеҙҙең дә бергә булды. Йә, үпкәләшерһегеҙ.

Ҡыҙҙар икеһе бик ҡаты ҡысҡыралар. Караголов ебәрә.

Минең теге планым сриентировочный ғына ине, ә бына бынығы — политически үтәлде.

Ҡыҙҙар, ҡулдарын ыуғылап, Караголовты һуҡҡылай, төрткәләйҙәр.

Ну, етте, ҡыҙҙар, киттек, репетицияға һуңлайбыҙ. *(Сығып китә.)*

Маруся. Бармаҡты өҙә яҙҙы.

Алма. Тотонмайҙар уны.

Ҡулдарын ыуалар.
Пауза.

Уф, арытты... Уҡырға ла бар әле. *(Китабын алып ҡарай.)*

Маруся. Минең дә шулай.

Алма. Ишекте әл.

Маруся барып ишекте әләә. Уҡырға тотоналар.
Бер аҙҙан ишекте ҡағалар.

Зифа *(тышҡан)*. Ҡыҙҙар, мәмкинме?

Маруся. Мәмкин. *(Ишекте аса.)*

Тышҡан Зифа менән Әхтәм килеп инәләр. Әхтәм күрешмәй генә иҫәнләшә.

Әхтәм. Һаумыһығыҙ!

Маруся. Яҡшы, рәхим итегеҙ, ултырығыҙ. *(Ултырғыс бирә.)*

Әхтәм. Ярар, рәхмәт. *(Ултыра.)*

Алма, аптырап ҡалып, карауаты яғына барып, Әхтәмгә арты менән баҫа.

Өсәү генә тораһығыҙ икән. *(Бүлмәне ҡарап.)* Бүлмәгеҙ матур.

Зифа. Әллә һин шаяртып әйтә тип беләһеңме? Өсәүбеҙ шул.

Маруся. Беҙ түбәнге курста саҡта ла күмәкләп торманыҡ. Йә өсәү, уҙа барһа, дүртәүләшеп кенә торҙоҡ.

Әхтәм. Дүртәүләшеп, тиң. Һәйбәт була ул.

Зифа. Эйе, һәйбәт шул. Һеҙҙең кеүек һирәҙ, тугыҙ кеше тормайбыҙ.

Маруся. Ә һеҙ ҡайҙан һуң?

Әхтәм. Комвуздан.

Маруся. Улай икән. Нисәнсе курстаһығыҙ?

Әхтәм. Һуңғы, уҡырға яңынан бер ай ваҡыт ҡалған.

Зифа. Ҡыҙҙар, баяғы һөйләгән кеше шул инде. Мин уларға барырға сығһам, улар беҙгә килгәндәр.

Әхтәм. Беҙ һеҙҙә бөгөн выпуск тип ишеткән инек тә, юҡ икән.

Маруся. Беҙҙең выпуск киләһе ялда була шул.

Пауза.

Ярай, прогулка булыр. Беҙҙең тормошто ла күреп китерһегеҙ.

Әхтәм. Килгән юҡ ине, техникумығыҙ бик шәп урында икән.

Зифа. Шәп ерҙә шул...

Маруся *(ситтә торған Алмаға ҡарап)*. Бикә, сыҡмайбыҙмы?

Алма *(боролмай ғына)*. Юҡ, һуң булған инде.

Маруся *(уның янына барып ниҙер һөйләшәләр)*. Улай булғас, валериан капляһы килтерәйем.

Алма. Кәрәкмәй.

Зифа. Бына, беҙҙең иптәштәрҙе лә белдең инде.

Әхтәм. Белдең тиһәң дә бит, береһе менән дә таныштырманың әле.

Зифа. Ғәфү итегеҙ. *(Ҡыҙҙарҙы күрһәтеп.)* Бына бының — Маруся, ә тегенеһе — Бикә.

Әхтәм. Улай икән. Маруся, Бикә, Зифа өсәү тораһығыҙ икән.

Зифа *(ниҙер ҡарап)*. Ҡыҙҙар, беҙҙең графинда һыу ҙа юҡ икән дә баһа.

Маруся. Бөгөн һин дежурный, шуға күрәлер.

Зифа. Ҡыҙҙар, онотҡанмын бит, *(Әхтәмгә ҡарап)* һин ошонда тороп тор, мин һыу ғына алып...

Алма. Һаумыһығыҙ!

Һаҙый *(Әхтәмгә барып).* Муллағәлиев.

Әхтәм *(ҡулын биреп).* Улай икән, ауылдаш.

Һаҙый һиҫкәнеп китә.
Әхтәм менән бер-береһенә ҡарашып, ҡулдарын бирешмәй, оҙаҡ торалар.

Һаҙый. Эйе, шулай. Һин дә бында икәнһең дә баһа.

Алма. Беҙ бында. Ә һин ни эшләп бында?

Һаҙый. Бәрәкәт, мин дә совет гражданины ла, уҡыйым. *(Сер бирмәҫкә маташа.)*

Маруся. Бына, Бикә 3 йыл буйы берәүҙе лә күрмәй торҙо ла, хәҙер бер ҡаҡытта ике ауылдаш килеп сыҡты.

Һаҙый *(китергә ашығып).* Мин, ахыры, яңылыш индем. Был бүлмәлә элек Ивановтар тормайҙар инеме?

Маруся. Эйе, беҙ бында бер ай самаһы ғына. Ә Ивановтар хәҙер 13-сө бүлмәлә торалар. Улар кәрәк инеме ни?

Әхтәм менән Алма ҡолаҡтан ғына нимәлер һөйләшәләр.

Һаҙый. Эйе, уларға тип килгәйнем.

Маруся. Ничево, бына ауылдаштарыңды оҫраттың...

Һаҙый. Эйе.

Әхтәм. Ҡайҙа йөрөш?

Һаҙый. Уҡыйым, туған. Лесотехнический институтҡа индем.

Әхтәм. Улаймы ни?

Алма. Атайыңдан хәбәр алаһыңмы?

Һаҙый *(һүҙгәла башлап).* Юҡ! Уларҙан мин бит күптән айырылған... Ярай, хушығыҙ хәҙергә. Минең Ивановтарға инеп сығаһым бар.

Әхтәм. Ҡабаланма. *(Алдына уҡ сығып баҫа.)*

Һаҙый. Бына нисек һин. Личный эште шулай итмәксе булаһыңмы?

Әхтәм. Ялған. Һин комсомол ойошмаһын, колхозды таратырға маташҡанда, ниндәй личный эш булһын.

Алма. Их, һин — йылан!

Һаҙый. Тик тор. Әйҙә Әхтәмеңә ҡал. Ә мин тапҡан инде...

Маруся. Бынығы нәмә тағы, бер нәмә аңламайым.

Алма. Баяғы һөйләгән Һаҙый шул инде.

Маруся. Ә... Беҙҙең бүлмәлә ят синыф?

Алма. Эйе.

Әхтәм. Телефоныгыҙ бармы?

Маруся *(ишекте асып, коридорҙа торған телефон трубкаһын алып күрһәтеп).* Бына ғына.

Әхтәм ишеккә бара башлағас, һаҙый салбар кеҫәһенән тиҙ генә наган сығара башлай. Шул арала Алма артынан килеп ҡосаҡлап тота.

Алма. Әхтәм!

Әхтәм боролоп килеп, көрмәкләшеп изәндә аунайҙар.

Маруся. Караул!

Алма. Маруся, кәрәкмәй, ҡыҫҡырма.

Бер аҙҙан һуң Алма менән Маруся наганды һаҙый ҡулынан алалар. Көрмәкләшеү бөтә.

Әхтәм *(аяҡ үрә ныҡ баҫып, наганды тотоп).* Но, ҡуҙғалма! *(Үҙе наганды тотоп, телефонға бара.)* Центральный, центральный, центральныймы был?.. Миңә ГПУ-ҙы бир... Зарипов иптәшме? Беҙ теге ҡасып йөрөүсе кулак малайы бандит Муллагәлиев һаҙыйҙы тоттоҡ... Ярар, ярар.

Шаршау

ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Колхоздың яңы уставы ҡабул ителгәс, тәүге йылдар. Колхоз лабораторияһы өйөнөң алды. Өй алды ябыулы. Стеналарына төрлө иген усмалары, бер ҡағыҙға төрлө күбәләктәр йәбештерелеп ҡаҙаҡланған һәм төрлө емеш ҡыуаҡтары, тамырҙары менән алынып, шунда уҡ ҡаҙалған. Шаршау асылғанда, Моталлап ҡарт бәләкәй генә өҫтәл өҫтөндә бәләкәй генә үлсәү менән орлоктар үлсәп маташа.

Моталлап *(үҙ алдына һөйләнә).* Ҡара пар — ҡара пар була шул ул. Оттормай, емдәре эре, төҫтәре ҡыҙарыбыраҡ тора. *(Һалмаҡлап ҡарап.)* Борсаҡ кеүек. *(Тағы һалмаҡлап.)* Ҡурғаш кеүек.

Сергей *(килеп инә, ҡулында китап).* Но, колхозный агроном, һаумы?

Моталлап. Һау, земский агроном.

Сергей *(ҡулын һелтәп).* Ҡуй әле, шул әллә ҡасанғыны.

Моталлап. Ярай, ярай, үпкәләмә. Дөрөҫө шул булғас.

Пауза.

Ҡасан килдең... МТС-та нәмәләр бар?

Сергей. МТС-та әллә ни яңылыҡтар юҡ.

Моталлап тағы үлсәй башлай.
Сергей, бер яҡҡараҡ барып, китабын уҡырға тотона. Бер аҙ тынлыҡ

Моталлап. Нимә һин, беҙҙең уҡытыусы Әсмә кеүек, китап күтәреп йөрөйһөң?

Сергей *(Моталлапҡа яҡын килеп, ағымлы рәүештә).* Беләһеңме, замандаш, үҙең әйтмешләй, мин земство агрономы бит. Ә хәҙер донъя бөтөнләй үҙгәрҙе. Беҙ уҡыған заманда бойҙай, һоло, тары, арыш культуралары ғына бар, уларҙың да сорттары ҡыҙыл башаҡ менән ҡылсыҡлы бойҙайҙан уҙмай ине. Но, машиналарҙан: жнейка, самосброска, косилка, молотилка бар ине. Ә хәҙер... Хәҙер бөтөнләй башҡа. Трактор, комбайн, ҡатмарлы молотилкалар, автомашиналар, лютесценс цезиум, кубанка бойҙайҙары, безенчуктары, яҙғы бойҙай, көҙгө бойҙай, силос, яровизация, рәтле сәсеү, мульчирование, ҡар тотоу, һаҡлау полосаһы, минераль ашламалар, тағы ла әллә нәмәләр... уның өҫтөнә организация труда, производственный план, хужалыҡ планы... Бына быларҙың бөтәһен дә белергә кәрәк. Белмәнеңме, һин агроном түгел, һин тормоштан артта ҡалған. Ағымдағы политиканы ла белергә кәрәк. Белмәнеңме — һин һуҡыр агроном...

Моталлап. Уныһы шулай.

Сергей. Шулай булғас, уҡырға кәрәк. Бына был китап ауыл хужалығын механизациялауҙы өйрәтә, Шуны уҡып йөрөйөм. Ауыл хужалығы институтында заочно уҡыйым бит.

Моталлап. Улай икән.

Пауза.

Заочный курс тигәнең нәмә һуң ул? Агроном буламы?

Сергей. Заочный тигән һүҙ, башҡортса әйткәндә — ситтән тороп уҡыу, уҡыу йортона бармай уҡыу тигән һүҙ.

Моталлап. Һәйбәт икән. Үҙең ҡарсығың менән өйҙә ятаһың, үҙең уҡып ятаһың, ә? Йәшерәк саҡтар уҙҙы шул инде. Йәшерәк булһаҡ, әллә дәртләнеп тә ҡуйырға булыр икән. *(Үҙе туҡтауһыҙ үлсәй, яҙып ҡуя.)* Ярай әле, Советҡа рәхмәт, уҙған ҡыш үгеҙ көүек алып барып уҡытҡандар ине. Бына быйыл латинса грамотам бар.

Шул ваҡыт «Тыуған ил тураһында йыр», гармун тауышы ишетелә.

Сергей. Бөгөн һеҙҙә нәмә? Көпә-көндөҙ гармун уйнап йөрөйҙәр.

Моталлап. Бәй, әле һин үҙең шуға килмәнеңме ни?

Сергей. Нәмәгә?

Моталлап. Бөгөн емеш баҡсаһы эшләйбеҙ, емеш ағастары ултыртабыҙ бит.

Сергей. Ә улай булғас һеҙгә йәш агрономка киләсәк инде. Шуғалыр.

Ҡулдарына көрәктәр тотҡан колхозсылар, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар килеп инәләр. Иштуғандың ҡулында — гармун.

Иштуған. Һаумыһығыҙ, агрономдар!

Сергей. Һаубыҙ, иптәш капитан!

Моталлап. Үҙең нисек, йәш комбайнер?

Иштуған. Шәп!

Кәримә. Анау Моталлап бабайҙы әйтәм. Үҙе Алмам кеүек күргән берҙән-бер ҡыҙым тигән була, үҙе Иштуғандан ғына һаулыҡ һораша.

Моталлап. Ә һуң үҙең, һаулыҡ һорауыңды кәзә ашағанмы әллә?

Бөләһе лә ҡысҡырып көләләр.

Иштуған *(Кәримәнең иренен бармағы менән шапылдатып).* Үпкә ашағың килгән.

Башҡалар көләләр.

Кәримә. Ҡыҫылма...

Моталлап. Һай-һай, быларҙың күңел көр.

Иштуған. Көр булыр шул. Комбайн, трактор гөрләй, гармун һайрай.

Сергей. Әй, капитан, әле һин комбайның менән нисә гектар урҙың?

Кәримә. Бына һиңә, диңгеҙ күрмәйенсә — капитан. *(Көлә.)*

Сергей. Туҡта әле, туҡта. *(Алыҫты күрһәтеп.)* Анау күренеп торған яландарҙа арыш, бойҙай, һоло игендәре тулҡынланалар инеме?

Кәримә. Эйе, тулҡынланалар ине.

Сергей. Диңгеҙгә оҡшаған инеме?

Тауыштар. Оҡшаған ине.

Сергей. Иштуған комбайны менән уртаһынан йөрөй инеме? Һәм ул карапҡа оҡшағайнымы?

Биксәнтәй. Как же, бик оҡшағайны. Беҙ ул карап тигәндәрҙе һуғышта бик күп күрҙек инде. *(Кәйеф-*

ләнеп һөйләргә тотона.) Бына яр башына килеп ҡарап торһаң... Диңгеҙ киң. Осо-ҡырыйы күренмәй, әллә ҡайҙан әллә ҡайҙа йәйелеп ята, алыҫтан ҡараған бөҙрәләнеп, талғын ғына тулҡын күсә, ул алыҫҡа китеп юғала... Ә пароход, бына, нисек кенә тип әйтәйем, ана шул бөҙрә тулҡындарҙа сайҡала-сайҡала алға һаман бара бирә. Ана, арыш тулҡындары ла ҡайһы саҡта шуға оҡшап ҡуялар. Ә комбайн карапҡа оҡшап ҡуя. Шуға күрә мин комбайн карапҡа оҡшаған тим.

Пауза.

Как же, тап үҙе, бик оҡшаған...

Сергей. Раз так, значит капитан... *(Иштуғанға ҡарап.)* Күпме урҙың әле, капитан?

Иштуған. Көнбағыш менән бергә 800 гектар.

Моталлап. Абауу...

Сергей. Күрҙеңме, замандаш! Бына хәҙерге техника.

Кәримә. Агроном иптәш, техника, механикаңды ҡуйып тор әле, әйҙә, урын күрһәт тә, юҡһа бушҡа көрәк күтәреп тороу ҡыҙыҡ түгел.

Сергей. Ғәфү итегеҙ, мин был эш менән килмәнем. Уға йәш агроном киләсәк.

Шул арала Мораҙым килеп инә.

Мораҙым *(ашығып инә)*. Күпер яғынан машина килә, шулар агрономдар булырға тейеш.

Шул ваҡыт алыҫтан автомашинаның килгәнө һәм бер аҙҙан ҡысҡыртҡан тауышы ишетелә. Барып, тауыш килгән яҡҡа ҡарайҙар.

Мораҙым. Шулар.

Моталлап, Сергейҙан башҡалар килеүселәрҙе ҡаршы алырға шаулап сығып китәләр.

Моталлап. Йәштәр бәхетле үҫәләр. Борон нәсәлниктәр килерҙәр ине. Дерелдәп торор инек. Ҡайҙа ул былай, шаулашып ҡунаҡ көткәндәй итеп ҡаршы алыу.

Сергей. Да, уның начальниктары ла шул, үҙ кешеләрең. Масса өсөн, ил өсөн, Совет өсөн эшләүселәр бит.

Шул ваҡыт Мораҙым, Әхтәм, Биксәнтәй килеп инәләр.

Әхтәм. Һаумы, Моталлап бабай, һау ғынамы?

Моталлап. Шөкөр, үҙең һау ғынамы, ҙур булып, ғалим булып ҡайттыңмы?

Күрешәләр.

Әхтәм. Сергей иптәш, һеҙ ҙә бында икән, бик шәп булды әле.

Сергей. Ниңә, әллә берәй случай бармы?

Әхтәм. Әллә ни юк. Шулай ҙа аҙаҡ бер нәмә әйтермен әле. *(Моталлапҡа боролоп.)* Йә, бабай, хәлдәреңнисек?

Моталлап. Таҙа ғына әле. Үҙең ни хәлдә һуң, килен алғанһың тиҙәр ине, ул таҙамы һуң?

Әхтәм. Әлегә таҙа ғына. Ана шунда, халыҡтар араһында ул.

Моталлап. Шулаймы ни? *(Алыҫҡа ҡарай.)* Бәхетле, тәүфиҡлы ғүмер бирһен!

Мораҙым. Әхтәм иптәш, тиҙләтәйек инде.

Әхтәм. Ә, хәҙер, Мораҙым ағай, ерегеҙҙең актын, картаһын бир әле.

Мораҙым лабораториянан карта сығарып бирә. Әләләр.

Һеҙ белəһегеҙ, ер колхозға түләүһеҙ мәңге файҙаланырға бирелгән. Шулай булғас, уны яҡшы файҙаланырға, туҡтауһыҙ тәрбиәләп торорға кәрәк. Бына ауыл *(бары ла картаға яҡын килеп ҡарайҙар),* бына оло юл китә. Бынығы Олотау, был яҡта Тәрәнкүл буйы... *(Актты ҡарап.)* Бына ошо урын баҡсалыҡ өсөн иң яҡшыһы булыр. Һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?

Моталлап. Алмағас бит ул ҡайҙа ла үҫә, йырғанаҡтар, юл буйҙары, һөрөргә яйһыҙ булған ерҙәргә ултыртырға кәрәк булмаҫмы? Борон шулай ти торғайнылар.

Әхтәм. Юҡ, агрономдар улай ҡушмай. Ул 50—60 йыл йәшәй, уны йыл һайын күсереп йөрөтөп булмай. Шулай булғас, уға насар ер билдәләү ярамай. Ул саҡта файҙаһы аҙ була.

Моталлап. Һүҙем бөттө, ҡарттар шул, әле төшөнөп бөтөп булмай.

Бер малай йүгереп инә.

Малай. Моталлап бабай, һөйөнсө...

Шул саҡ Әхтәм, малайға күҙ ҡыҫып, әйтмәҫкә ҡуша.

Моталлап. Нәмә?

Малай *(аптырап).* Ә, ни, *(Әхтәм үҙен ҡулы менән күрһәтә)* ни, үҙе лә бында икән, Әхтәм ағай ҡайтҡан, тимәксе инем.

Моталлап. Беләм, беләм, бар эшеңә йүгер.

Малай сығып китә.

Әхтәм. Мораҙым ағай, бар әйт, шул картала күрһәтелгән ерҙе эшләй торһондар. Мин хәҙер барам.

Мораҙым. Булды, әйҙәгеҙ, иптәштәр, киттек.

Мораҙым, Биксәнтәй, Сергей сығып китәләр.

Моталлап. Йәштәр үҫәләр, шатланалар. *(Пауза, тәрән һулай.)* Шул алма тигәндәре үҙәгемде өҙә инде.

Пауза.

Килен ҡайҙағы, ҡаланыҡымы?

Әхтәм. Юҡ, ошондағы, ауылдыҡы.

Моталлап. Яҡшы, бик яҡшы. Татыу, тигеҙ ғүмер итегеҙ... Ваҡытығыҙ булһа — ҡунаҡҡа барып сығығыҙ.

Әхтәм. Була ул, бабай, һеҙгә тигәндә була.

Моталлап. Насип булмағандыр инде, балам. *(Башын түбән эйеп уфтана.)*

Шул ваҡыт бөтөнләй ҡаласа кейенгән Алма Моталлаптың артына килеп баҫа.

Әхтәм *(Алмаға)*. Моталлап бабай ҡунаҡҡа саҡыра, барабыҙмы?

Алма. Әллә, ни эшләрбеҙ һуң?

Моталлап *(күтәрелеп ҡарамай ғына)*. Әйҙәгеҙ, ваҡытығыҙ булһа барайыҡ. *(Тора башлай. Алмаға күҙе төшә.)* Һин, һин! *(Пауза, аптырай.)*

Алма. Ни булды?

Моталлап. Юҡ, бер ни булманы... *(Пауза.)* Туҡта, туҡта. *(Алмаға тура ҡарай.)* Һин кем һуң? *(Пауза.)* Юҡ, юҡ... Мин һаташам буғай... *(Артҡа сигенә.)* Кит, кит. *(Аптырай, үҙ-үҙен ҡапшап ҡарай.)* Һин кем һуң?

Әхтәм. Бабай, һиңә ни булды?

Моталлап. Башым әйләнә, күҙҙәрем алмашындылар...

Алма. Ниңә? Әллә...

Моталлап *(аптыраулы, йәмһеҙ тауыш менән)*. Алмам!

Алма. Атайым!

Барып ҡосаҡлашалар. Шул ваҡыт башҡалар инәләр.

Моталлап. Ҡыҙым, Алмам, инде мин йәшәйем, һеҙҙең менән яңы тормошта оҙаҡ йәшәгем килә. Ҡыҙым. *(Ҡосаҡлай.)*

Кәримә *(яҡын барып)*. Әй дуҫҡайым! Һине һағынғанды, һине йәлләгәнде, һинең өсөн илағанды үҙемдән башҡа бер кем дә үлсәй алмаҫ. Уны бер кем дә белмәҫ.

Пауза.

Дуҫҡайым, Алмаҡайым. Тағы ла бергәбеҙ.

Мораҙым. Бөгөн туй, иптәштәр!

Моталлап *(алғараҡ сығып)*. Эйе. Ҙур туй, ғүмеремдә уйламаған иң ҙур бәхет. *(Пауза.)* Хәҙер мин һеҙҙең менән. *(Пауза, Алмаға ҡарап.)* Алмам, ҡыҙым, күҙ нурым, минең һеҙҙең менән йәшәгем, һеҙҙең менән бергә шатланып йәшәгем килә. Ғәфү ит, ҡылған боҙоҡлоҡтарымды ғәфү ит. *(Пауза.)* Мин алйот, мин оятһыҙ, йыртҡыс... Алйот, ошо ҡулдарым менән... *(Ҡалтырана.)* Ошо ҡулдарым менән быуып ташланым бит... *(Хәлһеҙләнә.)*

Башҡалар аптырап ҡалалар.

Тауыштар. Үҙе быуып ташлаған.

Алма. Эйе, атайым үҙе, үҙ ҡулдары менән быуып ташланы.

Биксәнтәй *(ситкәрәк барып)*. Үҙе быуып ташланы...

Алма. Эйе, ул үҙе быуып ташланы. Ләкин мин ғәфү итәм. Ул үҙе ғәйепһеҙ. Уны һаҙый ҡулы эшләтте. *(Моталлапҡа.)* Атай, һин борсолма, мин һине элеккенән дә яҡын күрәм. Һине аңһыҙлыҡта, иҫке тормоштоң ҡара пәрҙәһе аҫтында ҡалғаның өсөн һәр ваҡыт ҡыҙғандым... Ә хәҙер... хәҙер инде һин ҡара пәрҙәләрҙе йыртҡанһың, һин беҙҙең менән, беҙҙең шат замандың кешеләре менән бергәһең.

Моталлап. Балам, Алмам, рәхмәт, мин хәҙер тормошҡа ҡайтанан тыуҙым.

Сергей. Эйе, замандаш, беҙ ҡарт көндәребеҙҙе ҡайтанан ҡорабыҙ.

Әхтәм *(капыл нәмәлер иҫенә төшөрөп)*. Сергей иптәш, онота яҙғанмын, хәҙер үк ҡайт. Бына путевка. *(Ҡағыҙ сығарып бирә.)* Мәскәүгә, 6 айлыҡ ауыл хужалығы курсына китәһең. Тиҙ ҡайт, ҡарсығың белә, һине әҙерләнеп көтөп тора. Ә кискә — поезға төш.

Сергей *(аптырау хәлендә)*. Нисек?.. Мин — уҡырға?... Мәскәүгә?

Әхтәм. Эйе, ҡабаттан әҙерләнеү курсына. Бар кит, ана, машина.

Сергей *(шатланып)*. Ҡабаттан әҙерләнеү... Ҡарт булһаҡ та, уҡырға! Хушығыҙ, хуш, замандаш. Мин ҡабаттан йәшәргә китәм.

Бөтәһе лә. Хуш.

Бөтәһе лә оҙатып ҡалалар.

Моталлап. Иштуған улым, уйна, минең шатлығымды уйна, минең балаларымдың туйҙарын ҡотла! Туй бөгөн, туй!

Тауыштар. Туй!

Гармун бейеү көйөн уйнай, дәртле бейеүҙәр башлана. Моталлап, Әхтәм менән Алманы ҡосаҡлап, уртала ҡала.

Шаршау

ЙӨКМӘТКЕЬЕ

Миҙхәт Ғәйнулин, Илдус Бүләков. Башҡорт драматургияһының үҫеш баҫҡыстары 6

Мәжит Ғафури
Ҡара йөҙҙәр 27

Дауыт Юлтый
Ҡарағол 79

Мирхәйҙәр Фәйзи
Ғәлиәбаныу 144

Хәбибулла Ибраһимов
Башмағым 202

Афзал Таһиров
Үрнәк 253

Сәғит Мифтахов
Зимагорҙар 300

Баязит Бикбай
Ҡаһым түрә 370

Рәшит Нигмәти
Урман шаулай 424

Ҡадир Даян
Таңсулпан 464

Низам Ҡәрипов
Алма 557

АНТОЛОГИЯ
БАШКИРСКОЙ
ДРАМАТУРГИИ

Книга первая

(на башкирском языке)

Редакторы
Х. Т. Бикколов

Художество редакторы
А. А. Астраханцев

Рәссамы
А. А. Астраханцев

Техник редакторы
Г. Ә. Дауытова

Корректоры
Ә. Н. Әсәҙуллина

ИБ № 2829

Наборға бирелде 22. 12. 83.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 29. 05. 84. П02323
Ҡағыҙ форматы 84×108 1/32.
Мәктәп гарнитураһы.
Ҡалҡыу ысул менән баҫылды.
Тип. ҡағыҙы № 1.
Шартлы баҫма таб. 31,92.
Шартлы буяу отт. 32,34.
Учет.-изд. таб. 29,47.
Тиражы 10 000 экз.
Заказ № 339.
Хаҡы 2 һум 60 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте.
Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство.
Уфа-25, ул. Советская, 18.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия
һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса
дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты
Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

Авторҙар коллективы

Б 29 Башҡорт драматургияһы антологияһы. Беренсе китап. Төҙөүсеһе Миҙхәт Ғәйнуллин. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984.—608 бит.

Башҡорт драматургияһы антологияһы ике китаптан тора. Беренсе китапҡа башҡорт драматургияһына нигеҙ һалыусыларҙан һәм уның артабан үҫтереүселәрҙән ун авторҙың әҫәрҙәре тупланды.

Антология Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһында раҫланды.

Б $\frac{4702110000-309}{M121(03)-84}$ 78—84

84 Баш

БАШҠОРТОСТАН
КИТАП НӘШРИӘТЕНДӘ
1984 йылда
БАҘЫЛЫП СЫҒА

Авторҙар коллективы. Башҡорт драматургияһы антологияһы. Икенсе китап. Төҙөүсеһе Илдус Бүләков. Профессор Миҙхәт Ғәйнуллин редакцияһында.

Китапҡа драматургтарҙан М. Кәрим, Н. Нәжми, Ә. Мирзаһитов, И. Абдуллин, Н. Асанбаев, Ғ. Әхмәтшин, М. Хәйҙәров, Ә. Атнабаев, Р. Сафин, Ф. Богданов, А. Абдуллиндарҙың әҫәрҙәре тупланды.